И. М. ГВОЗДИКОВА

Салауат Юлаев

ДОКУМЕНТАЛЬ СЫҒАНАҠТАРҘЫ ӨЙРӘНЕҮ



СССР ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫНЫҢ
БАШҠОРТОСТАН ФИЛИАЛЫ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

СССР ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫНЫҢ
АРХЕОГРАФИЯ КОМИССИЯҺЫ
КӨНЬЯҠ УРАЛ БҮЛЕКСӘҺЕ

И. М. ГВОЗДИКОВА

Салауат Юлаев

ДОКУМЕНТАЛЬ СЫҒАНАКТАРҘЫ ӨЙРӘНЕҮ

БАШҠОРТОСТАН
КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1984

63.3(2Р-6Б)
Г31

Яуаплы редакторы Р. Ғ. КУЗЕЕВ
Ғилми редакторы Р. В. ОВЧИННИКОВ

Гвоздикова И. М.

Г31 Салауат Юлаев. Документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеү.— Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. — Һүрәттәре менән 240 бит.

Китап 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле етәкселәренән береһе Салауат Юлаевтың тикшереү эше буйынса документтарҙы сығанаҡтарға нигеҙләнеп өйрәнеүгә арнала. Автор тикшереү, суд, хөкөм ҡарарын ғәмәлгә ашырыу барышында барлыҡҡа килгән сығанаҡтарҙың нисек килеп сығыуын һәм йөкмәткеһен өйрәнә. Ҡарала торған документтарҙағы мәғлүмәттәрҙе архив һәм баҫылып сыҡҡан башҡа төрлө күп документтарҙағы мәғлүмәттәр менән тәнҡит күҙлегенән сағыштырыу нигеҙендә Салауат Юлаев биографияһының реаль факттары, баш күтәреүселәр хәрәкәтендә уның роле тәү тапҡыр билдәләнде һәм асыҡланды.

Г $\frac{0501000000-153}{М 121(03)-84}$ 214—84 63.3(2Р-6Б)

Башҡортсаға тәржемә.
©Башҡортостан китап нәшриәте, 1984.

ИНЕШ

1773—1775 йылдарҙа Е. И. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы һуңғы феодализм дәүерендә халыҡ массаларының крепостнойлыҡҡа ҡаршы бик ҙур сығышы була. Башҡортостан баш күтәреүселәр хәрәкәтенең төп үҙәктәренең береһенә әйләнә. Пугачевтың өндәмәләре 1773 йылдың көҙөндә Ырымбур губернаһы Өфө һәм Исет провинцияларының хеҙмәтсән халҡын восстаниеға күтәрә. Пугачевтың Төп ғәскәре һәм уның иң яҡын көрәштәштәренең отрядтары һуғыш хәрәкәттәрен ошонда алып бара.

Россиялағы ошо һуңғы крәҫтиәндәр һуғышында рус крәҫтиәндәренең һәм башҡорт, татар, сыуаш, ғөмүмән илдең көньяҡ-көнсығышындағы рус булмаған башҡа халыҡтарҙың ярлы ҡатламдарының социаль иҙеүгә һәм милли тигеҙһеҙлеккә ҡаршы берлектәге көрәшендә тыуған боевой дуҫлығы айырыуса асыҡ сағыла. Восстаниела ҡатнашыусыларҙың һаны, сығыштарҙың көсө буйынса башҡорттар рус булмаған халыҡтар араһында беренсе урында торҙо. Башҡортостанда баш күтәреүселәр хәрәкәте халыҡ көрәшенең күренекле етәксеһен һәм ойоштороусыһын, башҡорт халҡының талантлы улы Салауат Юлаевты бирҙе.

Пугачев хәрәкәте историографияһында йөҙҙәрсә тикшеренеү һәм баҫылып сыҡҡан эштәр иҫәпләнә. Уларҙың күбеһе Пугачевтың һәм уның көрәштәштәренең тормош юлына һәм боевой эшмәкәрлегенә арналған. Шулай ҙа Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең фәнни биографияларын яҙыу совет тарих фәненең төп бурыстарының береһе булып ҡала [1]. Күренекле шәхестәрҙең биографиялары, бик ҙур тарихи ваҡиғаларҙы монографик тикшеренеүҙәр кеүек үк, дәүерҙең асылын тулы һәм сағыу күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта, академик Н. М. Дружинин билдәләүенсә, теләһә ниндәй тарихи хеҙмәттә «ижтимағи күренештәрҙе айырым тере шәхестәрҙе тарихи процестың законлы барышынан ситтә ҡалдырырлыҡ ялҡытҡыс һәм төҫһеҙ итеп тасуирлауҙан ҡотолоу бик мөһим. Тарихты үҙ заманының бурыстарына ярашлы рәүештә фекерләүсе һәм тойоусы тере кешеләр барлыҡҡа килтерә»[2]. Шәхес тураһында марксистик-ленинсы концепция шуға нигеҙләнә: шәхестең формалашыуында ижтимағи шарттар, ул хәрәкәт иткән мөхит төп роль уйнай. Шул уҡ ваҡытта марксизм-ленинизм шәхестең актив ижади ынтылышына ҙур әһәмиәт бирә. Тарихи эшмәкәрҙәргә ҡарата В. И. Ленин биргән тарихилыҡ

[1] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева. ЛДУ нәшриәте, 1966, 2-се том, 22-се бит.

[2] *Дружинин Н. М.* Государственные крестьяне и реформа П. Д. Киселева. М.; Л., 1946, 1-се том, 6-сы бит.

принцибы бөтәбеҙгә лә мәғлүм. «Тарихи эшмәкәрҙәрҙең тарихи хеҙмәттәре хаҡында уларҙың хәҙерге заман талаптары менән сағыштырғанда *нимә бирмәүҙәренә* ҡарап түгел, ә үҙҙәренә тиклемгеләргә ҡарағанда ниндәй яңы *нәмә биреүҙәренә* ҡарап хөкөм йөрөтөлә»[1].

Крәҫтиәндәр һуғышы тарихын һәм баш күтәргән халыҡтың күренекле етәкселәренең эшмәкәрлеген өйрәнеү өсөн, совет тарихсыларының ҙур сығанаҡтар базаһы бар. Ләкин документаль сығанаҡтарҙың күпселеге хөкүмәт лагеры учреждениеларында төҙөлгән, шуға күрә лә дөрөҫ информациялар менән бер рәттән уларҙа восстаниеға тенденциоз баһа бирелә, баш күтәреүселәргә ҡарата дошманлыҡ мөнәсәбәте күренә, улар «ҡара халыҡ бунтын» мөмкин тиклем тиҙерәк баҫырға ынтылыусы крепостниктарҙың ҡараштарын һәм фекерҙәрен сағылдыра. Тарихи факттар тураһында дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе асыуҙа айырым документтарҙы һәм уларҙың комплекстарын махсус сығанаҡтарҙы өйрәнеү буйынса тикшеренеүҙәр ҙур әһәмиәт ала, сөнки «сығанаҡтарҙы өйрәнеү — тарихи факттарҙы табыу теорияһы һәм методикаһы, ә тарих тарихи факттарҙың мәғәнәһен уларҙың үҙ-ара бәйләнештәрендә һәм үҙ-ара шартлылығында аңлау теорияһы һәм методикаһы итеп ҡаралыуы мөмкин»[2]. Ләкин, үкенескә ҡаршы, Крәҫтиәндәр һуғышының историографияһының сығанаҡтарҙы өйрәнеү йәһәтенән тикшеренеүҙәргә ярлы булыуын билдәләргә тура килә. Бары тик Р. В. Овчинниковтың күптән түгел баҫылып сыҡҡан «Е. И. Пугачевтың Манифестары һәм указдары (сығанаҡтарҙы өйрәнеү буйынса тикшеренеүҙәр)» тигән монографияһын (М., 1980) һәм бер нисә мәҡәләне [3] күрһәтергә һәм документтар йыйынтыҡтарына бирелгән баш һүҙҙәрҙә сығанаҡтарҙы өйрәнеүгә ҡағылышлы айырым экскурстарҙы ғына билдәләргә мөмкин.

Фәндең 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тарихының сығанаҡтарҙы өйрәнеү проблемаларын эшләү талаптары ошо китапты яҙыу идеяһын алға ҡуйҙы. Китап Пугачев хәрәкәте ваҡиғаларында Салауат Юлаевтың эшмәкәрлеген һәм шулай уҡ уның биографияһында хәрәкәткә тиклемге һәм унан һуңғы факттарҙы яҡтыртыусы документаль сығанаҡтарҙы өйрәнеүгә арнала.

Салауат Юлаев тураһында байтаҡ хеҙмәттәр яҙылһа ла, улар бөтәһе лә сикләнгән һандағы сығанаҡтарға нигеҙләнә һәм йыш ҡына уларҙа файҙаланылған документтарҙан алынған мәғлүмәттәргә фәнни-объектив баһа бирелмәй. Был хеҙмәт — Салауат Юлаевтың эшмәкәрлеге тураһында документтарҙың төп комплексын сығанаҡтарға нигеҙләнеп өйрәнеүҙә совет историографияһында беренсе аҙым булып тора.

---

[1] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 2-се том, 178-се бит.

[2] *Каштанов С. М., Курносов А. А.* Некоторые вопросы теории источниковедения. — Исторический архив, 1962, № 4, 176-сы бит.

[3] *Гольденберг Л. А., Овчинников Р. В.* Горнозаводские карты и планы 70-х годов как источник по истории Крестьянской войны под руководством Е. И. Пугачева. — «Проблемы источниковедения» китабында. М., 1959, 8-се том; *Рысляев Л. Д.* Восстановление содержания саратовского указа Пугачева и датировка двух его указов к донским казакам. — Учен. зап. Псковского гос. пед. ин-та, 1964, 23-сө сығарылыш; Проблемы историографии и источниковедения Крестьянской войны 1773—1775 гг. (тезисы докладов на научной конференции). Ҡазан, 1974; *Литвак Б. Г.* Об изучении документов предводителей крестьянских восстаний. — «Ежегодник по аграрной истории Восточной Европы» китабында. Вильнюс, 1974; *Прокофьева Л. С.* К вопросу о достоверности следственных показаний по делу Крестьянской войны в России в 1773—1775 гг. — «Сельское хозяйство и крестьянство Нечерноземного Центра РСФСР» китабында. Смоленск, 1976.

Китапта Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү һәм суд материалдарын тәнҡит күҙлегенән ҡарауға үҙәк урын бирелә. Салауат Юлаевтың тикшереү эшен өйрәнгәндә өҫтәмә һәм төҙәтмә индереүсе сығанаҡтар сифатында файҙаланылған документаль сығанаҡтарҙың башҡа төркөмдәре лә (Салауат Юлаевтың үҙе яҙған һәм баш күтәреүселәрҙең етәкселәре менән учреждениеларының уға исемләнгән документтары, Пугачев хәрәкәте етәкселәренең һәм ябай ҡатнашыусыларҙың тикшереүҙә һөйләгәндәре яҙылған протоколдар, хөкүмәт лагеры властарының һәм учреждениеларының бер-береһенә яҙған ҡағыҙҙары, замандаштарының мемуар яҙмалары һ. б.) өйрәнеү объекты булып торҙо.

Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм суд документтарын, башҡа документтарҙы тәнҡит күҙлегенән анализлау был документтарҙың ҡайҙан алыныуын һәм йөкмәткеһен асыуҙы, уларҙағы информацияны дөрөҫ баһалауҙы маҡсат итеп ҡуйҙы. Сығанаҡтарҙы өйрәнеү йәһәтенән был документтар элек өйрәнелмәне, шулай ҙа уларҙағы мәғлүмәттәр Крәҫтиәндәр һуғышына һәм Салауат Юлаевтың тормош юлына арналған хеҙмәттәрҙә күп тапҡыр, йыш ҡына тейешле тәнҡит күҙлегенән баһаланмайынса, файҙаланылды. Документтарҙың йөкмәткеһенә, практикала әле лә осраҡанса, тәнҡит күҙлегенән ҡарамау, «потребителдәрсә» мөнәсәбәт буталсыҡтарҙың, восстаниеның ҡайһы бер мөһим ваҡиғаларын һәм суд-тикшереү процесын өҫтән генә, айырым осраҡтарҙа хата яҡтыртыуҙың сәбәбе булды.

Документтарҙың нисек барлыҡҡа килеүен һәм йөкмәткеһен анализлағанда, төп иғтибар түбәндәге бурыстарҙы хәл итеүгә бирелде: 1) Пугачев хәрәкәте тарихын һәм Салауат Юлаев биографияһын яҡтыртыу өсөн сығанаҡ булып хеҙмәт итерҙәй дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе асыҡлау; 2) тарихи сығанаҡтарҙың башҡа төрҙәре һәм төркөмдәре араһында Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм суд материалдарының урынын һәм әһәмиәтен билдәләү; 3) Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм суд процесының баш күтәреүселәрҙе язалау сараларының береһе икәнен асыу; 4) Салауат өҫтөнән тикшереү эшен анализлауҙың конкрет миҫалдарында Екатерина II хөкүмәте учреждениелары документтарын сығанаҡтарҙы өйрәнеүгә таянып тәнҡитләүҙең төп методтарын күрһәтеү.

Китаптың авторы, үҙенең тикшеренеүҙәрен сығанаҡтарҙы күҙәтеү һәм баһалау менән генә сикләнмәй, ә сығанаҡтарҙы өйрәнеү бурыстарын аңлауға бөгөнгө көн талаптарынан сығып, өйрәнеү һөҙөмтәләрен тарихи һығымталар яһау өсөн, Крәҫтиәндәр һуғышы тарихын һәм Салауат биографияһын яҡтыртыу өсөн файҙаланырға тырышты. Шунан сығып, документтарҙағы информация Урал һәм Урал буйы территорияһында (бигерәк тә Салауат Юлаев отряды хәрәкәт иткән райондарҙа) баш күтәреүселәр көрәшенең барышын, восстание ваҡытында барлыҡҡа килгән һәм стихиялы хәрәкәткә айырым ойошҡанлыҡ элементтарын индергән ҙур көрәш усаҡтарының эшмәкәрлеген, күп милләтле баш күтәреүселәргә хәрби етәкселек итеүселәрҙең эшмәкәрлеген күрһәтеү өсөн, шулай уҡ Крәҫтиәндәр һуғышының башҡа проблемаларын өйрәнеү өсөн ылыҡтырылды. Йәнә Салауат Юлаев эшен тикшереүҙе, уға хөкөм сығарыу һәм хөкөм ҡарарын срена еткереүҙе ентеклерәк күҙ алдына килтереү ҙә мөһим ине.

Тикшеренеү өсөн алынған документтарҙың әһәмиәтен баһалау өсөн документтарҙың ҡайҙан барлыҡҡа килеүен һәм уларҙағы информацияның дөрөҫлөгөн билдәләү буйынса эшләргә кәрәк булды. Сығанаҡтарҙы өйрәнеү проблематикаһында бик мөһим мәсьәлә — документтарҙа бирелгән тарихи факттарҙың ни тиклем дөрөҫ һәм тулы булыуы, уларҙағы мәғлүмәттәрҙең тарихи ысынбарлыҡ-

ҡа ярашлылығы тураһындағы мәсьәлә — был мәғлүмәттәрҙе башҡа төрлө сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәргә сағыштырып ҡарау юлы менән хәл ителде.

Ҡ. Маркс, Ф. Энгельс һәм В. И. Ленин хеҙмәттәре, тарихтың хәрәкәт иттереүсе көсө булараҡ марксистик-ленинсы синфи көрәш теорияһы һәм феодализм дәүерендә крәҫтиән хәрәкәттәренең бик мөһим һыҙаттары һәм әһәмиәте тураһында марксизмдың принципиаль положениелары тикшеренеүҙәрҙең методологик нигеҙе булып хеҙмәт итте. Фәнни коммунизмға нигеҙ һалыусыларҙың хеҙмәттәре араһында Ф. Энгельстың «Германияла крәҫтиәндәр һуғышы» тигән хеҙмәте айырым урын алып тора. Феодаль Европала синфи көрәште характерлап, ул «феодализмға революцион оппозиция бөтә урта быуат буйынса бара», «ирекле крәҫтиәндәрҙең үҙҙәрен һаман ныҡыраҡ иҙә барған феодаль хакимлыҡҡа ҡаршы көрәше крепостной һәм бойондороҡло крәҫтиәндәрҙең феодаль иҙеүҙе тулыһынса бөтөрөү өсөн көрәше менән ҡушыла[1], тип яҙҙы. Ҡ. Маркс менән Ф. Энгельс үҙҙәренең «Немец идеологияһы» тигән хеҙмәттәрендә крәҫтиән хәрәкәттәренә шундай баһа бирҙе: «Урта быуаттарҙағы бөтә ҙур восстаниелар ауылдан башланды, ләкин улар, тарҡаулығы һәм крәҫтиәндәрҙең шуға бәйле рәүештә үтә артталығы арҡаһында, бөтөнләй һөҙөмтәһеҙ булып ҡалды»[2].

Россияла XIX быуаттағы һәм XX быуат баштарындағы крәҫтиәндәр хәрәкәтен күҙәтеп, В. И. Ленин, феодализм дәүерендәге халыҡ хәрәкәттәрен анализлауҙа ла ҡулланылырлыҡ күп кенә положениелар әйтте. Феодализм ваҡытындағы крәҫтиәндәр һуғышы, «иҙелгән синыфтың иҙеүсе синыфҡа, крепостной крәҫтиәндәрҙең помещиктарға ҡаршы»[3] граждандар һуғышының бер төрө булып тора, тип яҙҙы В. И. Ленин. Феодализмға ҡаршы был сығыштар барышында социаль антагонизм, крәҫтиәндәрҙең үҙен иҙеүселәргә ҡарата дошманлығы айырыуса киҫкен күренде, улар иҙеүселәргә «тауҙай нәфрәт, асыу һәм сая тәүәккәллек»[4] менән ябырылды.

В. И. Ленин крәҫтиәндәрҙең синфи көрәшенең стихиялы характерын, уның «политик артталығын һәм томаналығын», бер ҡатлы монархизмын[5] айырып күрһәтте. Рус крәҫтиәндәренең батшаға инаныу иллюзияһын Ф. Энгельс та билдәләгәйне[6]. Ләкин, крәҫтиәндәрҙең идея яғынан өлгөрөп етмәүҙәре тураһында әйтеп, Ленин шул уҡ ваҡытта былай тип билдәләне: крәҫтиән хәрәкәттәренә хас булған «стихия элементы» асылда аңлылыҡтың *башланғыс формаһы* булып торҙо. Ә примитив болалар инде аңлылыҡтың бер ни тиклем уяныуын кәүҙәләндерҙе...»[7].

Ҡ. Маркс, Ф. Энгельс һәм В. И. Ленин хеҙмәттәрендә феодализмды ҡолатыуҙа крәҫтиәндәрҙең синфи көрәшенең әһәмиәте ныҡлап күрһәтелә. Россияла крәҫтиәндәр хәрәкәтенә тарихи баһа биреп, В. И. Ленин «крәҫтиәндәрҙә революцион элементтарҙың»[8] булыуы тураһында яҙҙы, шул уҡ ваҡытта иң эре крәҫтиән сығыштары ла ысын революцион көрәш булманы, тип билдәләне. Сөнки һуңғы феодализм осоронда һәм реформа алдынан крәҫтиәндәрҙең пролетариат йөҙөндә

---

[1] *Маркс К., Энгельс Ф.* Әҫәрҙәр, 2-се баҫма, 7-се том, 361, 364-се биттәр.
[2] *Маркс К., Энгельс Ф.* Әҫәрҙәр, 2-се баҫма, 3-сө том, 52-се бит.
[3] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 26-сы том, 311-се бит.
[4] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 17-се том, 211-се бит.
[5] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 4-се том, 228—229-сы биттәр; 5-се том, 80-се бит; 17-се том, 211, 212 һ. б. биттәр.
[6] *Маркс К., Энгельс Ф.* Әҫәрҙәр, 2-се баҫма, 18-се том, 547-се бит.
[7] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 6-сы том, 29—30-сы биттәр.
[8] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 4-се том, 228—229-сы биттәр.

азатлыҡ хәрәкәтенә ойошоу һәм идея яғынан стәкселек итә алырҙай союздашы булманы [1].

Был тикшеренеүҙәрҙә сығанаҡтарҙы өйрәнеү проблемаларын ҡуйыуҙа һәм хәл итеүҙә В. И. Лениндың «Яңы ҙур алыш», «Каторга ҡағиҙәләре һәм каторга хөкөмө» [2] тигән хеҙмәттәренең бик мөһим методологик әһәмиәте бар. Уларҙа Россияла суд эштәренең асылы, был сығанаҡтарҙан хатта «полиция ялғаныныҡ төтөнө буйынса ла халыҡ асыуының уты тураһында» [3] мәғлүмәт алып булған документаль сығанаҡтарҙы файҙаланыу мөмкинлеге күрһәтелгән.

Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү һәм суд барышында барлыҡҡа килгән документтарҙы сығанаҡтарҙы өйрәнеү күҙлегенән ҡарағанда XVII быуатта крәҫтиән һәм ҡала восстаниеларында, стрелецтарҙың сығыштарында, 1705—1706 йылдарҙағы Әстрхан восстаниеһында, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусыларҙың эштәрен өйрәнеүсе тарихсылар файҙаланған документтарҙы анализлауҙың традицион методтары, шулай уҡ Россиялағы революцион хәрәкәттә ҡатнашыусылар (декабристар, народниктар, социал-демократтар) өҫтөнән суд процестары материалдарына фәнни тәнҡиттең айырым методтары файҙаланылды [4].

Сығанаҡтарҙы марксистик-ленинсы күҙлектән сығып өйрәнеүҙә төп положениеларҙың береһе айырым индивидтарҙың ижад һөҙөмтәһе булған сығанаҡты тарихи күренеш итеп, билдәле бер ижтимағи мөнәсәбәттәр продукты итеп ҡарай. Был китаптың авторы документтарҙы сығанаҡтарҙы өйрәнеү буйынса анализлау методикаһын тап бына шул положениеға нигеҙләнеп төҙөй ҙә. «Документ ваҡыттың һәм урындың билдәле шарттарында, синфи һәм политик көрәш шарттарында тыуҙырыла, ул тап бына ошо шарттарҙың рухын сағылдыра, синфи йүнәлгәнлек һәм политик маҡсатҡа ынтылыш менән һуғарылған» [5]. Сығанаҡтың барлыҡ-

---

[1] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 7-се том, 194-се бит.

[2] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 5-се том, 14—19, 289—294-се биттәр.

[3] Шунда уҡ, 5-се том, 16-сы бит.

[4] Мәҫәлән, ҡарағыҙ: *Чистякова Е. В.* Состав следственных дел о городских восстаниях на юге России в середине XVII века. — «Археографический ежегодник за 1958 год» китабында. М., 1960; *Буганов В. И.* Следствие о Московском восстании 1662 г. — Исторические записки. М., 1959, 65-се том; *Шул уҡ автор.* Сыскные дела о Московском восстании 1662 г. — Проблемы источниковедения. М., 1963, 11-се том; *Шул уҡ автор.* Московские восстания конца XVII в. М., 1969; *Степанов И. В.* Крестьянская война в России в 1670—1671 гг. Восстание Степана Разина. Л., 1966, 1-се том; *Богословский М. М.* Петр I. Материалы для биографии, 3-сө том, Стрелецкий розыск... М., 1946; *Голикова Н. Б.* Политические процессы при Петре I. МДУ нәшриәте, 1957; *Овчинников Р. В.* Следствие и суд над Е. И. Пугачевым (предисловие к документальной публикации). — Вопросы истории, 1966, № 3, 5, 7, 9; *Прокофьева Л. С.* Об одном следственном показании по делу Пугачева. — «Исследования по отечественному источниковедению» китабында. М.; Л., 1964. *Бабкин Д. С.* Процесс А. Н. Радищева. М., Л., 1952; *Нечкина М. В.* Следственное дело о А. С. Грибоедове. М.; Л., 1945; *Миронова* И. А. Судебно-следственные материалы первой половины XIX в. как исторический источник. М., 1965; *Троицкий Н. А.* Царские суды против революционной России. Политические процессы 1871—1880 гг. Саратов дәүләт ун-ты нәшриәте, 1976; *Медведь Н. Т.* Материалы политических судебных процессов в дореволюционной России как исторический источник по истории КПСС. М., 1973 һ. б.

[5] *Черепнин Л. В.* Русские феодальные архивы XIV—XV веков. М.; Л., 1948; 1-се киҫәк, 5-се бит.

ҡа килеү үҙенсәлектәрен, уларҙың синфи асылын иҫәпкә алыу — сығанаҡтарға анализ яһау методтарын эшләгәндә тикшеренеүсегә төп талап бына шунан килә.

Халыҡ юлбашсыһы, башҡорт халҡының милли геройы талантлы шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың шәхесе һәм эшмәкәрлеге быуат ярым буйына тиерлек тарихсыларҙың һәм әҙәбиәтселәрҙең иғтибарын үҙенә тартты. Салауат Юлаевтың исемен фәнни әҙәбиәткә Пугачев хәрәкәтенең беренсе историографы А. С. Пушкин индерә. 1834 йылда Петербургта уның «Пугачев тарихы» тигән китабы донъя күрә. Ул саҡта Николай I-нең талабы буйынса китаптың исеме «Пугачев болаһы тарихы» тип үҙгәртелә. Китаптың күп кенә биттәре Салауат Юлаев ҡатнашҡан ваҡиғаларҙы тасуирлауға арналған. Уның боевой эшмәкәрлеген А. С. Пушкин Башҡортостанда халыҡ хәрәкәтенең ҡоласы менән бәйләй. Салауаттың һуғышсан эштәре тураһында һөйләгәндә ул рус һәм Уралдағы рус булмаған халыҡтарҙың берлектәге көрәшенең теләктәшлек характерын көслөрәк итеп күрһәткән ваҡиғаларҙы һайлап ала [1].

А. С. Пушкин, китап өҫтөндә эшләгән сағында батша властарынан ныҡышмалы һорауына ҡарамаҫтан, тикшереү темаһы буйынса архивта һаҡланған документтарҙың бөтә комплексы менән танышыу өсөн, уларҙың рөхсәтен ала алмай. Сенаттың Йәшерен экспедицияһының, йәшерен комиссияларҙың айырыуса мөһим дәүләт эштәре булып иҫәпләнгән материалдары уға бирелмәй [2]. Шуға күрә Пугачевтың һәм уның көрәштәштәренең суд тикшереүе барышында һөйләгәндәре А. С. Пушкин китабында файҙаланылмай.

Әгәр ҙә тикшеренеүселәр Салауат Юлаевтың суд эше буйынса Россия империяһының дәүләт архивында йәшерен һаҡланған документтарҙы XIX быуаттың 80-се йылдарына тиклем файҙалана алмаһалар, Өфө губерна архивында булған ошо уҡ документтарҙың күсермәләре һәм Өфөләге материалдары менән урындағы тарихсылар һәм крайҙы өйрәнеүселәр XIX быуаттың 40-сы йылдарына саҡлы уҡ таныш була. «Оренбургские губернские ведомости» газетаһының 1847 йылдың 25 ғинуарындағы 4-се һанында: «Салауат Юлаев — Шайтан-Көҙәй волосы башҡорто» исемле мәҡәлә баҫылып сыға. Был мәҡәләнең исемһеҙ авторы Салауат өҫтөнән суд-тикшереү процесы документтарын тәүләп өйрәнгән һәм баҫтырып сығарған. Пугачев восстаниеһына ҡарата авторҙың позицияһында властарҙың һәм дворяндарҙың баш күтәргән халыҡҡа, уның етәкселәренә һағайып ҡарауы сағылған. Салауат һәм ғәйепләүсе шаһиттар һөйләгән факттарҙы күрһәтеп, исемһеҙ автор «Пугачевтың ихлас эйәрсененең» боевой эштәрен «яуызлыҡ» тип билдәләй һәм үҙҙәренең батыр улы Салауат Юлаевты данлаған башҡорттарҙы уның исемен «иҫкә алырға ла оят» тип ߏнοторға өндәй.

Салауат Юлаев тураһында яңы хеҙмәттәр XIX быуаттың 70—80-се йылдарында ғына барлыҡҡа килә. Россияла буржуаз реформалар осоро Пугачев восстаниеһының тарихына ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙың үҫеүе менән билдәләнә. Был йылдарҙа восстание тарихына арналған күп мәҡәләләр, документаль публикациялар, бер нисә монография, әҙәби әҫәрҙәр донъя күрә [3]. 70-се йылдарҙа Өфө

---

[1] *Пушкин А. С.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 17 томда. М.; Л., 1938, 9-сы том, 1-се киҫәк, 55, 58, 59-сы биттәр.

[2] *Овчинников Р. В.* Пушкин в работе над архивными документами («История Пугачева»). Л., 1969, 31-се бит.

[3] Ошо әҙәбиәткә күҙәтеүҙе ҡарағыҙ: *Мавродин В. В.* Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева. ЛДУ нәшриәте, 1961, 1-се том, 85—114-се биттәр.

губерна идараһы архивында һаҡланған Пугачев документтары өҫтөндә крайҙы өйрәнеүсе тарихсылар: Мәскәү университеты эргәһендәге Тәбиғәт белемс, антропология һәм этнография һөйөүселәр йәмғиәте ағзаһы Ф. Д. Нефедов, Рус география йәмғиәте ағзаһы, Өфө губерна статистика комитеты чиновнигы Р. Г. Игнатьев, әҙәбиәтсе һәм крайҙы өйрәнеүсе М. В. Лоссиевский эшләй. Улар тыуҙырған хеҙмәттәрҙе Салауат Юлаев тормошо тураһында революцияға тиклемге историографияла иң яҡшы эштәр иҫәбенә индерергә мөмкин. «Пугачев болаһы алдынан башҡорттар араһындағы хәрәкәт. Салауат — башҡорт батыры»[1] тигән очеркта Ф. Д. Нефедов, «башҡорт геройының шәхесен» тыуҙырырға, Салауат Пугачевтың күренекле көрәштәштәренең береһе булып әүерелгән шарттарҙы күрһәтергә ынтыла. Очеркты яҙыу өсөн Нефедов Салауаттың һәм уның атаһы Юлай Аҙналиндың суд тикшереүе ваҡытындағы күрһәтеүҙәрен, шулай уҡ Башҡортостанда үҙе йыйған легендаларҙы һәм йырҙарҙы файҙалана. М. В. Лоссиевский Салауаттың боевой эштәре тураһында һәм властарҙың уны язалауы тураһында мәғлүмәттәр алып, суд-тикшереү материалдарын тағы ла киңерәк файҙалана[2]. Р. Г. Игнатьевтың «Башҡорт Салауат Юлаев. Пугачев бригадиры, йырсы һәм импровизатор»[3] тигән һоҡланғыс хеҙмәтендә беҙ «башҡорт шағирының һәм көрәшсенең ҡыҙыу эшмәкәрлеге» хаҡында тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ һәм ентеклерәк мәғлүмәттәр табабыҙ. Тарихи-әҙәби тикшеренеүҙәрҙең өсөһө лә Салауатҡа ихтирам менән һуғарылған. Лоссиевский Салауатты «халыҡ батыры, бригадир һәм самозванец Пугачевтың йән һөйәре»[4] тип ҡылыҡһырлай. Игнатьев Салауаттың яҙмышы халыҡ восстаниеһы менән тығыҙ бәйләнгән булыуын күрһәтә һәм Салауаттың эшмәкәрлегенә юғары баһа бирә: «Күренекле тарихи роль уны халыҡ сафтарынан алға сығарҙы, батыр, йырсы-импровизатор итеп хәтерҙә ҡалдырҙы, йырҙар геройы итте»[5]. Шуның менән бергә был хеҙмәттәрҙә, революцияға тиклемге бөтә историографиялағы кеүек үк, восстаниела ҡатнашыусыларҙы «боласылар, фетнәселәр», «юлбаҫар подвигтар», «ҡырағайҙар», «фанатиктар» тип атаған осраҡтар бар.

Салауат өҫтөнән суд-тикшереү процесының Өфөләге материалдары 1897 йылда Саратов губерна архивы комиссияһы ағзаһы П. Л. Юдиндың иғтибарын йәләп итә һәм был материалдарҙа ул «Салаваткаға суд һәм яза» тигән мәҡәлә яҙа. Восстаниела Салауаттың ролен билдәләп, ул Салауат «пугачевщина ваҡытында башҡорт восстаниеһының берҙән-бер тип әйтерлек етәксеһе була, самозванецтың иң яҡын ярҙамсыһы һәм төрлө-төрлө шайкалар йыйнаусы уның беренсе вербовщигы сифатында хеҙмәт итә»[6] тип яҙа. Шул уҡ ваҡытта был хеҙмәт асыҡтан-асыҡ шовинизм, баш күтәреүселәргә ҡарата нәфрәт менән һуғарылған.

---

[1] Русское богатство, 1880, октябрь.

[2] *Лоссиевский М. В.* Пугачевский бригадир Салават и Фариза. «Волжское-Камское слово» газетаһы. Ҡазан, 1882, № 221.

[3] Хеҙмәт, авторы вафат булғандан һуң 8 йыл үткәс, «Известия общества археологии, истории и этнографии при имп. Казанском университете» китабында баҫылған. Ҡазан, 1894, 11-се том, 2-се сығарылыш, 147—166-сы биттәр; 3-сө сығарылыш, 227—240-сы биттәр; 6-сы сығарылыш, 528—534-се биттәр.

[4] *Лоссиевский М. В.* Пугачевский бригадир Салават и Фариза.

[5] *Игнатьев Р.* Башкир Салават Юлаев... — «Известия общества археологии, истории и этнографии при имп. Казанском университете», 11-се том, 2-се сығарылыш, 161-се бит.

[6] *Юдин П. Л.* Суд и казнь Салаватки (к истории Пугачевского бунта). — Исторический вестник, 73-сө том, 1898, 579-сы бит.

Таныҡлы дворян тарихсыһы Н. Ф. Дубровиндың 1884 йылда Петербургта сыҡҡан «Пугачев һәм уның ярандары» тигән өс томлы монографияһында Салауат Юлаевтың һуғышсан эштәренең төп ваҡиғалары — Красноуфимскиҙы алыу, Көнгөрҙө ҡамау, подполковниктар А. В. Папав һәм И. И. Михельсон менән һуғыштарлек тиклем киң яҡтыртыла [1]. Дубровин Пугачевтың һәм уның ярандарының тикшереү эштәре менән файҙаланырға рөхсәт алған беренсе тарихсы була. Хеҙмәттә Дәүләт архивының VI разрядынан 427-се һанлы эш иҫкә алына, унда Сенаттың Йәшерен экспедицияһының Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү материалдары тупланған. Салауатты тикшереү эше документтарынан ул тик Салауатҡа бирелгән яза тураһындағы мәғлүмәттәрҙе генә ала [2].

Әйтеп кителгән хеҙмәттәр сығанаҡ сифатында төрлө тарихи-белешмә эштәрҙә файҙаланылған [3].

Шулай итеп, Салауат Юлаев тураһында резолюцияға тиклем бер нисә фәнни-популяр һәм белешмә мәҡәлә баҫылып сыға, улар араһында халыҡ юлбашсыһы биографияһының тәүге биттәрен тыуҙырған ҡыҙыҡлы хеҙмәттәр ҙә бар. Был мәҡәләләрҙә йәнле һәм сағыу итеп бирелгән архив документтары беренсе булып баҫып сығарыла башланы. Ләкин Салауат Юлаев өҫтөнән суд һәм тикшереү документтары комплекслы өйрәнелмәне. Архивтарҙа табылған тикшереү эше документтарынан дворян һәм буржуаз тарих фәне вәкилдәре һәм крайҙы өйрәнеүселәр үҙҙәренең ижтимағи-политик ҡараштарына һәм тикшереү маҡсаттарына ярашлы рәүештә, тик айырым факттарҙы ғына ала. Өҫтәүенә улар, нигеҙҙә, файҙаланыла торған материалдарға тейешле тарихи тәнҡит күҙлегенән ҡарамай яҙылған фәҡәт тасуири хеҙмәттәр генә ине.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң крәҫтиәндәрҙең феодалдарға ҡаршы сығыштарын өйрәнеү совет тарих фәненең мөһим проблемаларынан береһе булып әүерелде. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы тарихына ундарса монографик тикшеренеүҙәр, мәҡәләләр, документтар йыйынтыҡтары арналды. Улар араһында Салауат Юлаевтың тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында бер нисә хеҙмәт бар: А. П. Николаенко, П. Ф. Ищериков, В. М. Панеях мәҡәләләре, СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалының тарих, тел һәм әҙәбиәт институты әҙерләгән «Салауат Юлаев. Тыуыуына 200 йыл тулыуға ҡарата» [4] тигән коллектив хеҙмәт. Авторҙар Салауат Юлаевты Крәҫ-

---

[1] *Дубровин Н.* Пугачев и его сообщники. СПб., 1884, 2-се том, 202, 203, 214, 328, 331, 334-се биттәр; 3-сө том, 18—20, 39—41, 316—317-се биттәр.

[2] Шунда уҡ, 3-сө том, 318-се бит.

[3] *Алекторов А.* История Оренбургской губернии, 2-се баҫма. Ырымбур, 1883. *Горбунов К.* Эпизод из пугачевщины. — Исторический вестник. 1892, 50-се том. Р.—в. В. Салават. «Энциклопедический словарь» китабында. Ф. А. Брокгауз һәм И. А. Ефрон баҫмаһы. СПб., 1900, 28а-се том, 109-сы бит; Россия. Полное географическое описание нашего отечества. СПб., 1914, 5-се том, Урал и Приуралье, 141, 419, 475—477, 490-сы биттәр.

[4] *Николаенко А.* Вождь башкирского народа, пугачевский бригадир Салават Юлаев. — Исторический журнал, 1940, № 11, 77—88-се биттәр; *Ищериков П. Ф.* Салават Юлаев — вождь башкирского народа и сподвижник Пугачева. — Преподавание истории в школе, *1951,* № 1, 47—60-сы биттәр; Салават Юлаев. К 200-летию со дня рождения. Өфө, 1952; *Панеях В. М.* Князя Арсланов и Салават Юлаев. — *Лимонов Ю. А., Мавродин В. В., Панеях В. М.* «Пугачев и пугачевцы» китабында. Л., 1974, 167—186-сы биттәр.

тиәндәр һуғышының иң күренекле етәкселәре иҫәбенә, «үҙҙәренең политик андарының тарихи шарттар арҡаһында сикләнгән булыуына ҡарамаҫтан, крәҫтиән хәрәкәттәренә уғата хас сепаратизмды һәм тарҡаулыҡты еңеп сығырға ынтылыусылар» иҫәбенә кертәләр; «улар шул заманда халыҡтың иң яҡшы вәкилдәре булды, улар махсус өйрәнеүгә лайыҡлы»[1]. Салауат Юлаевтың һуғышсан юлын аяҡҡа баҫтырғанда тикшеренеүселәр файҙаланған бик мөһим сығанаҡтарҙың, информацияларҙың береһе уның суд-тикшереү эше булды.

Тарихсылар Салауат өҫтөнән суд-тикшереү процесы документтарын Пугачев восстаниеһы тарихы буйынса ҡайһы бер дөйөмләштереүсе хеҙмәттәрҙә лә килтерә[2]. Уларҙы «1773—1775 йылдарҙа Россияла Крәҫтиәндәр һуғышы» тигән коллектив монографияла Башҡортостанда баш күтәреүселәр хәрәкәте тураһындағы бүлектәр авторы Ленинград тарихсыһы В. М. Панеях етерлек тиклем киң файҙалана. В. М. Панеях, восстаниеның башланғыс этабын яҙғанда, күренекле пугачевсыларҙың: Салауат Юлаевтың, Юлай Аҙналиндың, Ҡаҫҡын Һамаровтың, Бәхтиәр Ҡанҡаевтың баш күтәреүселәр хәрәкәтендәге эшмәкәрлектәрен характерлағанда уларҙағы мәғлүмәттәргә һылтана. Восстаниеның икенсе этабында көньяҡ Урал заводтарына ҡарата Е. И. Пугачевтың тактикаһы үҙгәреүе тураһындағы мәсьәләне ҡарағанда, автор Юлай Аҙналиндың һәм Салауаттың тикшереү ваҡытында һөйләгәндәрен килтерә. В. М. Панеях Салауат эше буйынса тикшереүҙәр барышы тураһында ентекләп яҙа, Салауат, тикшереү аҫтында хоҡуҡһыҙ кеше булараҡ, рухын төшөрмәй һәм көрәшсен ныҡлы дауам итә[3] тип айырып күрһәтә. Юғарыла иҫкә алынған А. П. Николаенко, П. Ф. Ищериков хеҙмәттәрен һәм «Салауат Юлаев. Тыуыуына 200 йыл тулыуға ҡарата» тигән брошюраны ул ғәҙел тәнҡитләй, уларҙа, атап әйткәндә, йәнәһе, тикшереү ваҡытында Салауаттың туғандары һәм элекке көрәштәштәре менән актив рәүештә хат яҙышып тороуы, уларҙан, йәнәһе, уның материаль ярҙам алыуы һ. б. тураһында сығанаҡтар менән нығытылмаған раҫлауҙар һәм ҡараштар бар[4]. Салауаттың яҙалау командаһы ҡулына эләккән бер генә хаты билдәле, әммә был берҙән-бер сығанаҡ Салауат иректә ҡалған дуҫтары менән регуляр рәүештә бәйләнеш тотҡан икән тигән тезисты яҡларға мөмкинлек бирмәй.

Салауат Юлаев эше буйынса тикшереүгә бәйләнгән ваҡиғалар һәм тарихи

---

[1] *Лимонов Ю. А., Мавродин В. В., Панеях В. М.* Пугачев и пугачевцы, 8-се бит.

[2] Очерки истории СССР. Период феодализма. Россия во второй половине XVIII в. М., 1956, 236, 660-сы биттәр. «1773—1775 йылдарҙа Крәҫтиәндәр һуғышы» бүлеген А. И. Андрущенко һәм С. Л. Марголин яҙған; Очерки по истории Башкирской АССР. Өфө, 1956, 1-се том, 1-се киҫәк, 226—252-се биттәр. Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларына арналған параграфты А. П. Николаенко яҙған; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева. ЛДУ нәшриәте, 1966, 2-се том; 1970, 3-сө том; *Андрущенко А. И.* Крестьянская война 1773—1775 гг. на Яике, в Приуралье, на Урале и в Сибири. М., 1969, 128-се бит, 307—309-сы биттәр.

[3] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Востание Пугачева, 2-се том, 150, 154, 207, 209, 216, 219-сы биттәр; 3-сө том, 50, 51, 54, 60, 65—67, 69, 276—280, 282, 284—286, 454-се биттәр.

[4] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 286-сы бит.

сюжеттар күп тапҡырҙар ҡарала һәм ғилми-популяр хеҙмәттәрҙә һәм ғилми-белешмә баҫмаларҙа билдәле дәрәжәлә яҡтыртыла[1].

Совет тарих әҙәбиәтендә бөгөнгө көнгә Башҡортостан территорияһында 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына һәм Салауат Юлаевтың баш күтәреү эшмәкәрлегенә бағышланған шаҡтай күп хеҙмәттәр бар. Феодаль-крепостной Россияла синфи көрәш мәсьәләләрен илдә тотош алғанда уҡышлы эшләү һәм эшмәкәрлектәрендә халыҡтарҙың феодалдарға ҡаршы сығыштарының характерлы һыҙаттары сағылған Крәҫтиән һуғыштары етәкселәренең яҙмыштары менән тикшеренеүселәрҙең тәрәнерәк ҡыҙыҡһыныуҙары быға сәбәп. Салауат Юлаевтың тикшереү эшенән айырым документтар ғөмүмән Пугачев восстаниеһы проблемаһын йәки Салауат Юлаевҡа махсус арналған проблеманы өйрәнеүселәрҙең күп хеҙмәттәрендә файҙаланыла. Ләкин был документтарҙы тарихи анализлау уларҙан ҡайһы бер факттарҙы һәм мәғлүмәттәрҙе алыу, теманың теге йәки был аспекттарын иллюстрациялау өсөн файҙаланыу менән генә сикләнгән. Тикшеренеүселәр суд-тикшереү документтарының барлыҡҡа килеү шарттарын һәм синфи асылын һәр ваҡытта ла иғтибарға алмай. Тикшеренеүселәрҙең сығанаҡтар менән эшләүҙә дөйөм стешһеҙлеге шунан тора: улар, архив сығанаҡтарын тулыһынса өйрәнеп бөтмәй, һорау алыу материалдарында һөйләгәндәрҙе башҡа төрлө документтарҙағы материалдар менән сағыштырып ҡарамайынса, тикшереү эшенең фәҡәт айырым документтары мәғлүмәттәренә нигеҙләнеп кенә һығымта яһай. Был етешһеҙлек аҫылда Салауат Юлаев тураһында юғарыла күрһәтелгән бөтә хеҙмәттәргә лә теге йәки был дәрәжәлә хас. Ләкин тикшереү материалдарынан уларҙың бөтәһенә бергә ентекле анализ яһағандан, тарихи сығанаҡтарҙың ҡайҙан алыныуын, идея йүнәлешен, уларҙағы факттарҙың тулылығын, дөрөҫлөгөн һәм аныҡлығын асыҡлағандан һуң ғына һығымта яһарға мөмкин, сөнки тик дөрөҫ факттар ғына тарихи тикшеренеүҙәрҙең нигеҙе булып хеҙмәт итә ала.

Салауат Юлаевтың хәҙерге ваҡытҡа билдәле булған 82 документтан торған тикшереү эше бөгөнгә тиклем тулыһынса баҫып сығарылмаған әле. «Уфимские губернские ведомости» газетаһында 1904 йылдың 4 июлендә «Юлай һәм уның улы Салауат — Пугачевтың ярандары. Тарихи белешмә» тигән баш аҫтында тикшереү эшенең биш документынан, шул иҫәптән Салауат менән Юлай Аҙналиндың Өфөлә 1775 йылдың 5 майындағы күрһәтеүҙәре протоколдарынан һәм ғәйепләүсе шаһит Ҡолой Балтачев күрһәтеүҙәренән ҙур өҙөктәр баҫып сығарыла. Был өҙөктәрҙең исемһеҙ төҙөүсеһе материалдарга үҙенең аңлатмаларын да бирә.

Тикшереү эшенең бик мөһим документтарының береһе — Салауат Юлаевтың

---

[1] *Типеев Ш.* Очерки по истории Башкирии. Өфө, 1930, 57—64-се биттәр; *Муратов Х. И.* Крестьянская война 1773—1775 гг. в России. М., 1954, 50—55, 58, 70, 76—78, 82—87, 147-се биттәр; *Шул уҡ автор.* Крестьянская война под предводительством Е. И. Пугачева. М., 1970, 52, 54, 71, 114-се һ. б. биттәр; *Шул уҡ автор.* Емельян Иванович Пугачев. Ростов дәүләт университеты нәшриәте, 1979, 71—75, 79, 102—106-сы һ. б. биттәр; Наш Салават. Өфө, 1973; *Мавродин В. В.* Под знаменем Крестьянской войны. М., 1974, 91, 137-се биттәр; История Уфы. Өфө, 1976, 61-се бит; *Фирсов Н.* Пугачев и пугачевщина. «Энциклопедический словарь Русского библиографического института Гранат» китабында, 7-се баҫма. М., 1929, 34-се том, 60—61-се биттәр; Салават Юлаев. — БСЭ, 3-сө баҫма, М., 1975, 22-се том, 508-се бит; Юлай Аҙналин. — БСЭ, 3-сө баҫма. М., 1978, 30-сы том, 399-сы бит; *Усманов А. Н.* Салават Юлаев. — СИЭ. М., 1969, 12-се том, 482-се бит.

Мәскәүҙә 1775 йылдың 25 февралендә һорау алғанда биргән күрһәтеүҙәре теркәлгән протокол — «Пугачевщина»[1] тигән документтар йыйынтығының 3-сө томында тәүге тапҡыр баҫыла. Бер нисә йылдан һуң был документ юғары уҡыу йорттары өсөн уҡыу ҡулланмаһы сифатында сығарылған башҡа документтар йыйынтығы[2] составына инә. Эш документтарының төп төркөмө, «Башҡортостан территорияһында 1773—1775 йылдарҙа Крәҫтиәндәр һуғышы» тигән йыйынтыҡ донъя күргәс, 1975 йылда баҫып сығарыла. Суд-тикшереү процесының 26 документы йыйынтыҡҡа ҡушымта итеп бирелә, башҡа күп кенә документтар аңлатмалар биреү өсөн файҙаланыла[3].

Китаптың авторы, юғарыла әйтелгән публикацияларҙан тыш, документтар йыйынтыҡтарындағы, журнал һәм газеталарҙа баҫылған башҡа сығанаҡтарҙы файҙаланды. Академик Я. К. Грот генералдар В. А. Кар, А. И. Бибиков һәм П. И. Паниндың Пугачев хәрәкәтендә башҡорттарҙың ҡатнашлығы тураһындағы донесениеларын эсенә алған документтарҙың ҙур-ҙур подборкаларын баҫып сығара[4]. Был документтарҙы баш күтәреүселәргә ҡаршы язалау операцияларын һәм Екатерина II администрацияһының суд-тикшереү эшмәкәрлеген яҡтыртҡан Екатерина II-нең А. И. Бибиковҡа хаттарын[5], әбей батшаның генералдар П. И. Панин, П. С. Потемкин, Мәскәү генерал-губернаторы М. Н. Волконский менән яҙышыу ҡағыҙҙарын[6] баҫып сығарыу тулыландыра.

Совет власы йылдарында Крәҫтиәндәр һуғышы тарихы буйынса баҫылып сыҡҡан сығанаҡтарҙың һаны һиҙелерлек күбәйҙе. Бында беренсе сиратта «Пугачевщина», «1773—1775 йылдарҙа Россияла Крәҫтиәндәр һуғышы. Дәүләт тарих музейы йыйынтығынан документтар», «Е. И. Пугачев ставкаһы, баш күтәреүселәр властары һәм учреждениелары документтары»[7] йыйынтыҡтарын, шулай уҡ Башҡортостан территорияһында Пугачев восстаниеһы тураһындағы юғарыла иҫкә алынған йыйынтыҡты әйтеп үтергә кәрәк.

---

[1] Пугачевщина. М.; Л., 1929, 2-се том. Из следственных материалов и официальной переписки, 276—279-сы биттәр.

[2] Восстание Емельяна Пугачева. Төҙөүсеһе М. Мартынов. Л., 1935, 179—182-се биттәр.

[3] Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии (артабан: Крестьянская война... тип кенә биреләсәк). Төҙөүселәре: Р. В. Овчинников (группа етәксеһе), И. М. Гвоздикова, А. П. Николаенко. Яуаплы редакторҙары: Р. Г. Кузеев, Р. В. Овчинников. Өфө, 1975, 264—265, 274, 299—338, 417—429-сы биттәр.

[4] Материалы для истории Пугачевского бунта. *Грот Я. К.* «Труды» тигән китапта. СПб., 1901, 4-се том, 481—518, 535—546, 549—560, 566—644-се биттәр.

[5] Императрица Екатерина II-нең Пугачев болаһы ваҡытында А. И. Бибиковҡа хаттары. — Рус архивы. 1866, № 3, 390, 397-се биттәр.

[6] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте. — Рус тарих йәмғиәте (артабан: РИО) йыйынтығы. СПб., 1871, 6-сы том. Императрица Екатерина II-нең Дәүләт архивында һаҡланған ҡағыҙҙары. — Шунда уҡ, СПб., 1874, 13-сө том; Екатерина II и пугачевщина. — Русская старина, 1875, 13-сө том.

[7] Пугачевщина. М.; Л., 1926, 1-се том. Из архива Пугачева (манифесты, указы и переписка), 2-се том, 1929. Из следственных материалов и официальной переписки, 3-сө том, 1931. Из архива Пугачева. Томдарҙы төҙөүсе С. А. Голубцов. М. Н. Покровскийҙың дөйөм редакцияһында. Крестьянская война 1773—1775 гг. в России: Дәүләт тарих музейы йыйынтығынан документтар. М., 1973. Төҙөүселәре: С. С. Дрейзен, Е. И. Индова, М. Д. Курмачева, Р. В. Овчинников, Е. И. Самгина. Яуаплы редактор Е. И. Индова; Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений (артабан: документы ставки Е. И. Пугачева...). М., 1975. Төҙөүселәре: А. И. Аксенов, Р. В. Овчинников, М. Ф. Прохоров. Редколлегия: Р. В. Овчинников (яуаплы редактор), М. И. Автократова, В. И. Буганов, Б. Г. Литвак, А. Н. Сахаров.

Был баҫмаларҙа Пугачевтың именной (үҙе ҡул ҡуйған) указдары һәм манифестары, уның Хәрби коллегияға күрһәтмәләре, баш күтәреүселәр хәрәкәте етәкселәренең: И. Н. Зарубин-Чиканың, Ҡинйә Арыҫлановтың, Салауат Юлаевтың, И. Н. Белобородовтың һәм башҡаларҙың бойороҡтары һәм донесениелары, хөкүмәттең, хәрби һәм граждандлыҡ властарының һәм учреждениеларының восстание барышын, язалау командаларының халыҡ хәрәкәте менән көрәшен яҡтыртҡан рәсми яҙышыу ҡағыҙҙары, Пугачевтың күренекле көрәштәштәренең һәм ябай баш күтәреүселәрҙең тикшереү ваҡытында һөйләгәндәре теркәлгән протоколдар донъя күрә. Башҡортостанда Пугачев восстаниеһының төп ваҡиғалары Пугачевтан һәм уның атаманы А. Т. Соколов-Хлопушанан[1] һорау алғанда төҙөлгән айырым баҫылып сыҡҡан протоколдарҙа сағылдырыла. Тикшеренеүҙә восстание замандаштарының мемуарҙары ла иғтибарға алынды[2].

Баҫылып сыҡҡан сығанаҡтарҙан шулай уҡ XVIII быуатта халыҡ хәрәкәттәрендә ҡатнашыусыларға суд-тикшереү үткәргәндә һәм хөкөм ҡарарҙары сығарғанда ҡулланма булып хеҙмәт иткән һәм «Россия империяһы закондарының тулы йыйынтығы» составына ингән норматив материалдар (манифестар һәм указдар) файҙаланылды[3].

Архивтарҙың, китапханаларҙың, музейҙарҙың һәм башҡа һаҡлағыстарҙың ҡулдан яҙылған йыйынтыҡтарынан алынған баҫылып сыҡмаған документтар монография сығанаҡтарының бик мөһим төркөмөн тәшкил итте. Боронғо акттар Үҙәк Дәүләт Архивында (ЦГАДА) документтар 6-сы һанлы фондта (Дәүләт архивының VI разряды) — «Дәүләт енәйәттәре буйынса уголовный эштәр» һәм 7-се һанлы фондта (Дәүләт архивының VII разряды) — «Преображенский приказ, Йәшерен канцелярия һәм Йәшерен экспедиция» — табылды, уларҙа баш күтәреүселәр властарының документтары, Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусыларҙы тикшереү эштәренең төп өлөшө[4] һәм шулай уҡ баш күтәреүселәр хәрәкәтенә ҡаршы көрәште ойоштороу буйынса граждандлыҡ һәм хәрби властарҙың яҙышыу ҡағыҙҙары, хөкүмәт яғында тороп һуғышҡан башҡорт, мишәр, татар старшиналарын, йөҙ башлыҡтарын, сауҙагәрҙәрен миҙалдар һәм башҡа бүләк-

---

[1] Пугачев атаманы А. Хлопушанан һорау алыу. — Ҡыҙыл архив, 1935, № 1 (68); Е. Пугачевтан 1774—1775 йылдарҙа Мәскәүҙә һорау алыу. — Ҡыҙыл архив, 1935, № 2—3 (69—70); Е. И. Пугачев өҫтөнән тикшереү һәм суд. Төҙөүсеһе: Р. В. Овчинников. — Вопросы истории. 1966, № 3—5, 7, 9.

[2] Осада Оренбурга (Летопись Рычкова). — *Пушкин А. С.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 17 томда. М.; Л., 1938, 9-сы том, 1-се китап, 206—355-се биттәр; Прибавление о разбойнике и самозванце Пугачеве из дневных записок 1773 года, города Оренбурга Благовещенской церкви, что на Гостином дворе, священника Ивана Осипова. — Шунда уҡ, 1940, 2-се китап, 511—578-се биттәр; Генерал Ф. Ю. Фреймандың Ригала сыҡҡан «Neue Nordische Miscellaneen» журналында немец телендә 1794 йылда баҫылып сыҡҡан яҙмалары (s. 355—410); А. Ф. Бюшингтың «Magazin für die neue Historie und Geographie» йыллыҡ журналында 1784 йылда баҫылып сыҡҡан исемһеҙ яҙмалар. Halle, 1784, № 18, s. 5—50.

[3] Полное собрание законов Российской империи I (артабан: ПСЗ I). СПб., 1830, 1-се том, № 1; 5-се том, № 3006; 6-сы том, № 3480, 3534, 3890; 7-се том, № 4317, 4344; 8-се том, № 5333; 13-сө том, № 10101; 14-се том, № 10233; 10234, 10306, 10316; 16-сы том, № 10541, 11648, 11992, 12137, 12173; 17-се том, № 12578, 12709; 18-се том, № 12824; 12894, 13156, 13216; 13382; 19-сы том, № 14091, 14092, 14230; 20-се том, № 14233, 14275, 14294.

[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 416 (ч. 1), 419, 427, 428, 439, 440, 467 (ч. 1—13), 506, 507 (ч. 1—6), 508 (ч. 1—3), 510 һ. б.; ф. 7, д. 2043.

тәр менән наградлау тураһында материалдар бар[1]. Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорптың канцелярияһы фондынан эштәр ҡаралды, уларҙа Ырымбур губернаһы территорияһында Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғалары сағылған[2]. Тикшереү темаһына ҡағылған бер нисә документ Берг-коллегия[3] эштәрендә, хөкүмәттең язалау көстәре баш командующийы генерал П. И. Паниндың[4] хәрби-поход канцелярияһы, Ырымбур һәм Ҡазан йәшерен комиссиялары эштәрендә табылды[5].

СССР Үҙәк дәүләт хәрби-тарих архивында (ЦГВИА) 20-се һанлы фондтан — Хәрби коллегияның Йәшерен экспедицияһы, Хәрби-фәнни архив (ВУА) фондынан, 41-се һанлы фондтан — Хәрби коллегия президенты Н. И. Салтыковтың ҡағыҙҙары һәм 13-сө фондтан — Хәрби коллегияның Казактар экспедицияһы Көньяҡ Уралда баш күтәреүселәр хәрәкәтенең йәйелдерелеүе тураһында, Пугачев ғәскәрҙәренә һәм уның атамандары: И. Н. Белобородов, Салауат Юлаев, Бәхтиәр Ҡанҡаев, Ҡәнзәфәр Усаев һәм башҡаларҙың отрядтарына ҡаршы һуғыш операциялары барышы тураһында хөкүмәт ғәскәрҙәре командующийҙарының, губернаторҙарҙың һәм айырым хәрби частар командирҙарының донесениелары алынды»[6].

Казак ғәскәрҙәре шефы Г. А. Потемкин (52-се фонд) канцелярияһы, Хәрби коллегияның генерал-аудитор экспедицияһы (8-се фонд) материалдарында, «Офицерҙарҙың хеҙмәт исемлеге» фонды-коллекцияһында (490-сы фонд) баш күтәреүселәргә ҡаршы язалау операциялары үткәргән офицерҙар тураһында мәғлүмәттәр табылды[7].

Сенаттың генерал-прокуроры канцелярияһының Ленинградта СССР Үҙәк дәүләт тарих архивында (ЦГИА) һаҡланған документтары араһында Ырымбур губернаторының донесениелары, Пермь һәм Исет провинциялары прокурорҙарының был районадрҙа баш күтәреүселәрҙең хәрәкәте тураһындағы рапорттары табылды[8].

Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорптың 1773—1780 йылдарҙағы билдәләмәләре Ырымбур губерна канцелярияһының Ырымбур өлкәһе Дәүләт архивында һаҡланған документаль материалдары составына инә. Уларҙа Пугачев восстаниеһында ҡатнашыусыларға губернаторҙың хөкөм ҡарарҙары сығарыуы тураһында һәм баш күтәреүселәргә ҡаршы язалау экспедицияларында ҡатнашҡан өсөн башҡорт старшиналарын наградлауы тураһында мәғлүмәттәр бар[9]. Бында өс меңле башҡорт командаһын 1772 йылда Польшаға ебәреү тураһында һөйләүсе эш һаҡлана[10].

Өфөлә Башҡорт АССР-ы Үҙәк дәүләт архивында (ЦГА БАССР) губернаторҙың Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналинды тән язаһына тарттырыу тура-

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 490 (ч. 1—2), 516 (ч. 1—3), 592, 593, 627 (ч. 1—12) һ. б.
[2] Шунда уҡ, ф. 1100, д. 1—13.
[3] Шунда уҡ, ф. 271, д. 1339а, 1339б.
[4] Шунда уҡ, ф. 1274, д. 179, 191, 194—202.
[5] Шунда уҡ, ф. 349, д. 7183, 7215, 7238 һ. б.
[6] ЦГВИА, ф. 20, д. 1040, 1050, 1053, 1230—1240; ф. ВУА, д. 143, 153; ф. 41, оп. 1/149, д. 284; ф. 13, 1/107, св. 148.
[7] Шунда уҡ, ф. 52, оп. 194, д. 101; ф. 490, оп. 3, д. 150, 158; ф. 8, оп. 4/93, д. 1536.
[8] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2.
[9] ГАОО, ф. 3, д. 129—194.
[10] Шунда уҡ, д. 124.

һындағы ҡарарын еренә еткереү менән бәйле булған айырым документтар [1], 1767 йылғы Уложенный комиссияның Ырымбур губернаһынан булған депутаттарының — Пугачев восстаниеһында актив ҡатнашыусыларҙың яҙмышы тураһында һәм башҡа материалдар бар [2]. Крәҫтиәндәр һуғышы тураһында документтарҙы һаҡлау тарихы архивтың үҙенең фондындағы материалдарҙа сағылған [3]. Өфөлә ҡала тарихы буйынса ҡала башлығы Д. С. Волков тарафынан 1870—1880 йылдарҙа йыйылған документтар (күсермәләр һәм өҙөктәр) коллекцияһы һаҡлана. Уларҙың бер өлөшөндә Крәҫтиәндәр һуғышы тураһында мәғлүмәттәр бар [4].

Башҡортостан халыҡтарының Пугачев восстаниеһында актив ҡатнашыуы тураһында һөйләүсе бер нисә документ СССР Фәндәр Академияһы Тарих институтының Ленинград бүлеге (ЛОИИ) архивында [5] һәм шулай уҡ М. Е. Салтыков-Щедрин исемендәге РСФСР дәүләт халыҡ китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлектәрендә (ГПБ ОР) [6] һәм В. И. Ленин исемендәге СССР Дәүләт китапханаһында (ГБЛ ОР) [7] бар.

Был китаптың структураһы тикшеренеү бурыстарынан һәм сығанаҡтарҙың төп төркөмөнә генә хас булған үҙенсәлектәрҙән сығып билдәләнде.

Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм суд материалдары ике төркөм ваҡиғаны сағылдыра. Бөтәһенән элек, улар тикшереү картинаһын һәм судта ҡарау барышын яҡтырта, һорау алыуҙарҙа, суд ултырыштарында һәм суд ҡарарҙарын башҡарыуҙа ҡатнашҡан учреждениеларҙың һәм кешеләрҙең эшмәкәрлеген ҡылыҡһырлай. Салауат Юлаев эшенең документтары буйынса тергеҙелгән был ваҡиғалар монографияның беренсе главаһында яҙылды. Крәҫтиәндәр һуғышы тарихын өйрәнеү һәм Салауат Юлаевтың баш күтәреүселәр хәрәкәтенең оло ваҡиғаларындағы (Ырымбур эргәһендә, Красноуфимск — Көңгөр районында, Башҡортостанда, Пугачевтың Төп ғәскәренең Ҡазанға походында һәм 1774 йылдың һуңғы көҙөндәге ваҡиғаларға тиклемге башҡа яуҙарҙа) ролен асыҡлау өсөн тикшереү материалдарының әһәмиәте бик мөһим. Был мәсьәләләр тикшеренеүҙәрҙең өсөнсө главаһында ҡарала. Әйтелгән главаларҙың икеһендә сығанаҡтарҙы өйрәнеү буйынса күҙәтеүҙәр һәм баһалауҙар шаҡтай урын алып тора. Ләкин был мәсьәләләргә китаптың икенсе главаһы махсус рәүештә арналған, унда Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм суд материалдарының ҡайҙан алыныуы, уларҙы тулыландырыусы һәм төҙәтеүсе документтар, шулай уҡ сығанаҡтарҙың ике төркөмөн дә анализлау проблемалары ҡарала. Бер үк ваҡытта Салауат Юлаевтың тикшереү барышында һөйләгәндәренең ысынлығын, уның биографияһының реаль факттарына һәм Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларына ярашлылығын билдәләүҙә конкрет сығанаҡты өйрәнеү методикаһын эшләүгә төп иғтибар бирелде.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 2 (Ырымбур генерал-губернаторы), оп. 1, д. 7.

[2] Шунда уҡ, ф. 384 (Өфө наместниклыҡ идараһы), оп. 1, д. 1, 2, 13.

[3] Шунда уҡ, ф. 564, оп. 1, д. 21, 25.

[4] СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының фәнни архивы, ф. 3, оп. 12, д. 106—117.

[5] ЛОИИ архивы, ф. 51 (А. И. Дмитриев-Мамонов), оп. 1, д. 33; ф. 113 (Рус тарих йәмғиәте), д. 58, 59; к. 186 («Русская старина» журналының документтары һәм ҡулъяҙмалары коллекцияһы), д. 77.

[6] ГПБ ОР, ф. 73 (В. А. Бильбасов һәм А. А. Краевский), оп. 1, д. 209—212; F. IV, д. 668 (Г. Р. Державин ҡағыҙҙары).

[7] ГБЛ ОР, ф. 222 (Паниндар), д. 7.

Һүҙемде йомғаҡлап, монография ҡульяҙмаларын тикшереүҙә ҡатнашҡан һәм үҙҙәренең кәңәштәре һәм тәнҡит иҫкәрмәләре менән авторға ярҙам иткән бөтә иптәштәргә һәм коллегаларға рәхмәт белдереүҙе үҙемдең бурысым тип һанайым. Шулай уҡ китап өсөн материалдар йыйыуҙа авторға булышлыҡ күрһәткән дәүләт архивтары һәм китапханалары сотрудниктарына рәхмәт белдерәм.

САЛАУАТ ЮЛАЕВ ЭШЕ БУЙЫНСА ТИКШЕРЕҮ

§ 1. ПУГАЧЕВ ВОССТАНИЕҺЫ МЕНӘН КӨРӘШТӘ ЕКАТЕРИНА II ХӨКҮМӘТЕНЕҢ СУД-ТИКШЕРЕҮ ОРГАНДАРЫ

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тарихының документаль сығанаҡтары составында баш күтәреүселәр хәрәкәтенең әсиргә алынған етәкселәре һәм ябай ҡатнашыусылары өҫтөнән тикшереү һәм суд материалдары күренекле урын алып тора. Әйтелгән сығанаҡтар төркөмөндә тикшеренеүҙәр ваҡытында һөйләгәндәрҙең протоколдары күберәк ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Формаль яҡтан был документтар үҙҙәренең сығышы буйынса хөкүмәт лагерына, Екатерина II администрацияһының язалау учреждениелары эшенә ҡайтып ҡалһалар ҙа, үҙҙәренең эстәлеге менән восстание ваҡиғаларын унда ҡатнашыусылар позицияһынан яҡтырталар. Ләкин шуны билдәләргә кәрәк, был документтарҙа булған дөрөҫ информация суд тикшереүселәре тарафынан аңлы рәүештә тенденциозлыҡ япмаһына йәшерелә. Бынан тыш, тағы ла шуны иҫәпкә алырға кәрәк, тәүтикшереү протоколдары тикшереүсе менән ғәйепләнеүсе араһында барған психологик көрәш шарттарында төҙөлгән. Уларҙың тәүгеһе яфалауҙарға һәм ғазаплауға барып еткән ҡурҡытыу сараларын ҡулланып, һорау алыныусының ғәйебен тәрәнәйтеүсе (йыш ҡына хәҡиҡәткә хилафлыҡ ҡылып) яуап алыуға ирешергә ынтыла. Ә һуңғыһы, үҙенең наҙанлығына һәм тәжрибәһеҙлегенә, баш күтәреүселәр хәрәкәтендә үҙен көсләп ҡатнаштырыуҙарына һылтанып, восстаниела үҙ ролен кәметергә тырыша, хатта Пугачевты һәм уның ярандарын ғәйепләп һөйләүҙән дә тартынмай. Былар бөтәһе лә дөрөҫ күрһәтеүҙәр менән бер рәттән һорау алыу протоколдарында һәм суд ҡарарҙарында теркәлә[1]. Тарихи тикшеренеүҙәрҙә ошоға оҡшаш материалдарҙы файҙаланғанға тиклем, был мәғлүмәттәрҙе уларға параллель булған башҡа сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр менән сағыштырып ҡарап, уларҙың дөрөҫлөгөн билдәләү буйынса тикшеренеү эше башҡарылырға тейеш.

---

[1] Крестьянская война..., 13-сө бит; *Прокофьева Л. С.* К вопросу о достоверности следственных показаний по делу Крестьянской войны в России в 1773—1775 гг. — «Сельское хозяйство и крестьянство Нечерноземного Центра РСФСР» китабында. Смоленск, 1976, 37—46-сы биттәр.

Суд-тикшереү эше документтарындағы күрһәтеүҙәрҙең дөрөҫлөк дәрәжәһен билдәләгәндә, уларҙың килеп сығыу спецификаһын, был документтарҙы эшләгән һәм төҙөгән царизм учреждениеларының феодаль ҡоролошто һаҡлау политикаһын иҫәпкә алырға кәрәк. Самодержавие Россияһының дәүләт ҡоролошон һәм уның аппаратының иҙелгән халыҡтың ҡаршылығын һындырыуға йүнәлдерелгән эске политикаһын характерлап, В. И. Ленин былай тип яҙҙы: «Самодержавие (абсолютизм, сикләнмәгән монархия) идара итеүҙең шундай бер формаһы: юғары власть тотошлайы менән һәм бүленмәҫ рәүештә (сикләнмәгән рәүештә) батша ҡулында. Батша закондар сығара, чиновниктарҙы тәғәйенләй, *халыҡты закон сығарыуҙа һәм идара өҫтөнән контроллек итеүҙә бер нисек тә ҡатнаштырмаһа ла,* халыҡ аҡсаһын йыя һәм тотона. Шуға күрә самодержавие — чиновниктарҙың һәм полицияның башбаштаҡлыҡ власы һәм халыҡтың хоҡуҡһыҙлығы ул»[1]. Был билдәләү «Екатерина быуатын», XVIII быуаттың икенсе яртыһында Россияның самодержавие дәүләтен, тулыһынса характерлай. Екатерина II-нең бөтә эске һәм тышҡы политикаһы уның бөтә 34 йыл буйы батшалыҡ итеү осоронда самодержавие-помещиктар ҡоролошон нығытыуға, феодаль милекте һәм крепостной правоны һаҡлауға йүнәлдерелгәйне. Феодаль-крепостниктар синыфынан көс-ҡеүәт алып һәм ныҡ үҫкән бюрократик аппарат менән армияға таянып, царизм хеҙмәтсән халыҡтың феодализмға ҡаршы теләһә нindәй сығыштарын, шулай уҡ илдең феодализм нигеҙҙәрен тәнҡит иткән алдынғы йәмғәтселегенең сығыштарын аяуһыҙ баҫтыра. Суд-тикшереү органдары самодержавиеның һаҡлау һәм язалау политикаһының тәьҫирле ҡоралы була.

Россияла XVIII быуаттың икенсе яртыһында Сенат юғары административ-суд учреждениеһы була. Ул суд һәм надзорҙың берҙәм органын тәшкил итә һәм бөтә эре политик процестар буйынса хөкөм ҡарарҙары сығара; бынан һуң уның вердикттары әбей батшаға раҫларға бирелә; ҡылғанды енәйәт тип иғлан итеү-итмәү һәм уның өсөн тейешле яза билдәләү хоҡуғы бары тик һәм фәҡәт самодержавие властарына ғына бирелә[2].

Сенат ҡарамағында, уның беренсе департаменты ҡарамағында, дәүләт енәйәттәре тип аталған эштәрҙе ҡарау өсөн, 1762 йылда төҙөлгән Йәшерен экспедиция эшләй. Ғәмәлдә Йәшерен экспедиция бөтә дәүләт аппараты өҫтөнән ҡуйылған, уның эшмәкәрлеген йүнәлтеүсе һәм контроллек итеүсе әбей батшаға туранан-тура буйһонған үҙ аллы үҙәк учреждение була. Даими надзорҙы ғәмәлгә ашырыу ил идаралығының бөтә бик мөһим эштәрен хәл итеүсе

---

[1] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 4-се том, 251—252-се биттәр.
[2] *Грибовский В. М.* Высший суд и надзор в России в первую половину царствования имп. Екатерины Второй. СПб., 1901, 174—331-се биттәр; *Шворина Т. И.* Уголовное законодательство Екатерины II. Бөтә Союз юридик фәндәр институтының ғилми яҙмалары. М., 1940, 1-се сығарылыш, 219-сы бит.

Сенаттың генерал-прокурорына тапшырыла [1]. Политик эҙәрләүҙәрҙең һәм яҙалауҙарҙың төп органы булған Сенаттың Йәшерен экспедицияһы һарай заговорҙары, самозванецлыҡ, батшалыҡ итеүсенең үҙе тураһында «әҙәпһеҙ» һүҙҙәр, дәүләт закондарын ғәйепләү һәм башҡа шуға оҡшаш енәйәттәр менән бәйле булған иң эре процестарҙы алып бара. Хакимлыҡ итеүсе синыфтарҙың мәнфәғәттәрен һиҙгер һаҡлап, ул ҡоролошҡа һәм власҡа ҡаршы булғандарҙы аяуһыҙ яҙалай; крепостнойлыҡҡа ҡаршы көрәшеүселәрҙе, уны фаш итеүселәрҙе — Е. И. Пугачевты һәм уның көрәштәштәрен, ә һуңыраҡ күренекле революционер һәм яҙыусы А. Н. Радищевты, мәшһүр мәғрифәтселәр Н. И. Новиковты һәм Ф. В. Кречетовты яуапҡа тарттыра һәм уларға хөкөм ҡарарҙары сығара [2].

Урындарҙа, үҙәктәге кеүек үк, суд власы администрация власы менән берләштерелгән була. 1764 йылғы «Губернаторҙарға ҡулланма» нигеҙендә губернаторҙар туранан-тура Сенатҡа һәм императрицаға буйһондорола. Губернатор «Әбей батшаның үҙенең» ышаныслы кешеһе, бөтә губернаның хужаһы һәм башлығы тип иғлан ителә [3]. Уға административ, полиция, финанс, суд функциялары бирелә; губерна территорияһында урынлашҡан ғәскәри частарҙың командующийы була. «Әҙәплелек һәм тәртип» һаҡлап, губернаторҙар крәҫтиәндәр восстаниеларын баҫтырыу һәм ҡасҡын крепостнойҙарҙы тотоу өсөн ғәскәр ебәрәләр, тикшереү эштәренең барышын күҙәтәләр, сикләнмәгән рәүештә бөтә эштәр буйынса хөкөм ҡарарҙары сығаралар, бында улар губерна канцелярияларына таянып эш итәләр [4].

Провинцияларҙа һәм өйәҙҙәрҙә воеводалар [5] һәм улар идара иткән провинция һәм воевода канцелярияларына идара итеү һәм суд өлкәһендә киң хоҡуҡтар менән файҙалана.

1716 йылғы Хәрби устав нормаларына ярашлы рәүештә үткәрелгән тикшереү процесы эштәрҙе судта ҡарауҙың төп формаһы булып тора [6]. Процесс ике стадияға бүленә: алдан тикшереү һәм судта ҡарау. Ләкин тикшереү ҙә һәм суд та бер үк органда — Сенатта һәм уның Йәшерен экспедицияһында, губернатор һәм губерна канцелярияһы ҡулында, воеводалар һәм провинция йәки воевода канцелярияларына ҡарамағында туплана. Закондар, ҡағыҙә бу-

---

[1] *Ерошкин Н. П.* Очерки истории государственных учреждений дореволюционной России. М., 1960, 132, 139-сы биттәр; *Троицкий С. М.* Русский абсолютизм и дворянство XVIII в. Формирование бюрократии. М., 1974, 32—33-сө биттәр.

[2] *Голикова Н. Б.* Органы политического сыска и их развитие в XVII—XVIII вв. — «Абсолютизм в России» китабында. М., 1964, 271—274-се биттәр.

[3] ПСЗ I, 16-сы том, № 12137, 716—720-се биттәр.

[4] *Блинов И.* Губернаторы. СПб., 1905, 57—59, 69, 102—115-се биттәр.

[5] ПСЗ I, 8-се том, № 5333, 94—112-се биттәр; *Андреевский И.* О наместниках, воеводах и губернаторах. СПб., 1864, 53—106-сы биттәр.

[6] Шунда уҡ, 5-се том, № 3006, 382—411-се биттәр.

лараҡ, тикшереү һәм суд функцияларын бергә ҡушып алып барыуға юл ҡуя [1].

Эштәрҙе тикшереү һәм уны алып барыу тәртибе анык регламентланмай. Феодаль-крепостной хоҡуҡ тәртибе органдары үҙҙәренең эшмәкәрлегендә Алексей Михайловичтың (1649 йыл) Собор уложениеһына, Петр I-нең Хәрби һәм Диңгеҙ уставтарына, Екатерина II указдарына һәм Тәүратҡа нигеҙләнеп эш итә. Закондарҙағы һәм указдарҙағы күп һанлы ҡапма-ҡаршылыҡтарға осрап, суд органдары аҙым һайын ғәмәлдәге закондарҙың һәм «алла закондарының» айырым положениеларын берләштерә, был иһә властарҙың башбаштаҡлығын һәм тәртипһеҙлекте көсәйткән генә. Суд тышҡы яҡтан ҡарағанда ғына ғәҙеллек һәм объективлыҡ һаҡлаған. Крепостной ҡоролошҡа һәм тәртиптәргә ҡаршы халыҡ сығыштары закон тарафынан бик ауыр уголовный енәйәт итеп ҡаралған. Восстаниеларҙа ҡатнашыусыларға ҡарата Хәрби һәм Диңгеҙ уставтарының ҡаты хәрби уголовный параграфтары ҡулланыла. Ә Хәрби устав буйынса, мәҫәлән, үлем язаһы 122 осраҡта ҡулланыла [2]. Елизавета Петровна үлем язаһын формаль рәүештә «политик язалау» (хөкөм ителгәнде, үлем ҡарары иғлан ителгәс, сыбыртҡы менән һуҡтырыу, ә унан ары каторга эштәренә һөрөү) менән алмаштырһа ла [3], батшаның суд органдары «дәүләт переворотары һәм анархия» осраҡтарында үлем язаһы ҡулланыуҙы кәрәкле таба. Шул уҡ ваҡытта Екатерина II батшалыҡ иткән осорҙа ла Петр I заманындағы һәм Петрға тиклемге тикшереү процессында урта быуат атрибуттары — «үтә ихлас» һорау алыуҙар һәм юғары камиллыҡҡа еткерелгән ғазаплауҙар көсөндә ҡалдырыла [4].

Россия халҡының яртыһы тиерлек [5] — крепостной крәҫтиәндәр — дәүләт уголовный-процессуаль хоҡуҡ юрисдикцияһына инмәй. Уларҙы помещик хөкөм итә, закон уға крәҫтиәндәр өҫтөнән бик ҙур власть бирә. Крәҫтиәндең һәм уның ғаиләһенең кешелек дәрәжәһе лә, хеҙмәт милке лә, хатта ғүмере лә дәүләт закондарының яҡлауынан ситтә ҡала. Помещиктарҙың крәҫтиәндәрҙе Себергә, каторга эштәренә һөрөргә, диуаналар йортона ябырға, сираттан тыш һалдатлыҡҡа бирергә, тән язаһына тарттырырға хоҡуғы була. 1767 йылда Екатерина II «крепостнойлыҡтың бөтә йәшәү тарихында иң крепостной указ» сығара, унда әгәр крәҫтиән помещик өҫтөнән ялыу менән йөрөһә, бик ауыр дәүләт енәйәте тип иғлан ите-

---

[1] *Юшков С. В.* История государства и права СССР. М., 1961, 1-се киҫәк, 370—377-се биттәр; *Витт В.* Екатерина II, как криминалистка. СПб., 1909, 108—111-се биттәр.

[2] *Юшков С. В.* Күрһәтелгән әҫәр. 360—361-се биттәр.

[3] ПСЗ I, 13-сө том, № 10101, 838—839-сы биттәр.

[4] *Витт В.* Күрһәтелгән әҫәр, 102—103-сө биттәр.

[5] III ревизиянан IV ревизияға тиклем (1762—1782 йылдар) хосуси милек биләгән крепостной крәҫтиәндәрҙең дөйөм һаны 4401,5 меңдән 5105 мең йәнгә үҫә, ә бөтә халыҡҡа ҡарата уларҙың процент яғынан нисбәте 52,17 проценттан 48,77 процентҡа тиклем кәмей. *Кабузан В. М.* Изменения в размещении населения России в XVIII — первой половине XIX в. М., 1971, 12-се бит.

лә. Указ помещиктың крәҫтиән өҫтөнән власын законлаштырыуҙы еренә еткерә [1].

Феодаль-крепостной дәүләттең яҙалау власының сикһеҙ ҡеүәте Россиялағы һуңғы 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы йылдарында бигерәк тә асыҡ күренә. Восстаниеның киң ҡолас менән йәйелеүенән ҡурҡҡан батша хөкүмәте баш күтәреүселәргә ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып бара, восстание хәрәкәтен баҫтырыуға бөтә көс һәм средстволарын ташлай, бының өсөн регуляр ғәскәрҙәрҙе лә, дворяндарҙан һәм сауҙагәрҙәрҙән, шулай уҡ губерна һәм провинция властары тарафынан төҙөлгән яҙалау отрядтарын, суд, төрмә, сиркәүҙе һәм башҡа сараларҙы файҙалана.

Сенаттың Йәшерен экспедицияһы крепостной тәртиптәрҙе ҡайнар яҡлаусы булып сығыш яһай. Уның начальнигы обер-секретарь С. И. Шешковский 1774 йылда тикшереү эштәрен ҡарау һәм хөкөм ҡарары сығарыу тураһында императрицаға үҙе доклад яһап торорға хоҡуҡ ала [2]. Баш күтәреүселәрҙән йөҙҙәрсә әсир экспедиция казематтары аша үтә. Сенат архивында һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса 1774—1775 йылдарҙа Йәшерен экспедицияның хөкөм ҡарары менән 6 кеше яҙалап үлтерелгән, 687 ғәйепләнеүсе сыбыртҡы, шпицрутен, ҡамсылар, таяҡтар менән һуҡтырылған, ә унан ары уларҙың ҡайһы берҙәре каторгаға ебәрелгән, йәшәгән урындарынан һөрөлгән, һалдатлыҡҡа бирелгән. 605 кеше, азатлыҡ алғанға тиклем, «үтә ихлас» һорау алыуға дусар ителгән. Ведомоста Йәшерен экспедиция аша үткән бөтәһе 832 кеше күрһәтелә (шул иҫәптән 34 башҡорт, уларҙың өсөһө һалдатлыҡҡа бирелә, береһе каторгаға һөрөлә) [3].

Ҡилтерелгән һандар, тәбиғи, экспедиция эшмәкәрлеген тулыһынса сағылдырмай. Пугачевсыларҙың бер өлөшө, мәҫәлән, Салауат Юлаев, Юлай Аҙналин, Һеләүһен Ҡинзин һәм башҡалар, яңынан тикшереү өсөн губерна канцелярияларына ебәрелә. Был Йәшерен экспедициялағы бығаулы тотҡондарҙың дөйөм ведомосында сағылмай. Ведомостағы һан мәғлүмәттәренең тулы булмауын, мәҫәлән, баш күтәреүселәр есаулы башҡорт Үмәр Йосоповтың яҙмышы күрһәтеп тора. Йәшерен экспедицияның хөкөм ҡарары буйынса ул ҡаты яҙаға тарттырыла [4]. Шуға ҡарамаҫтан, иҫкә алынған дөйөм документта, йәнәһе, бер генә башҡорт та тән яҙаһына тарттырылманы, тип билдәләнгән. Бәлки, күрһәтелгән мәғлүмәттәр эштең торошон тик 1775 йыл башына ғына сағылдыралыр, сөнки һуңыраҡ Екатерина II-нең 1775 йылдың 17 мартындағы манифесы нигеҙендә Крәҫтиәндәр һуғышы буйынса бөтә эштәр «мәңгегә онотолорға һәм иҫкә алынмаҫҡа»[5], ә тикшереү туҡтатылырға

---

[1] История СССР с древнейших времен до конца XVIII в. М., 1975, 393-сө бит.

[2] *Ерошкин Н. П.* Күрһәтелгән әҫәр, 139-сы бит.

[3] Пугачевщина, 3-сө том, 468-се бит.

[4] *Джинчирадзе В. З.* Из истории Тайной экспедиции при Сенате (1762—1801 гг.). — Уч. зап. Новгородского гос. пед. ин-та. Историко-филологический факультет. Новгород, 1957, 2-се том, 2-се сығарылыш, 93-сө бит.

[5] ПСЗ I, 20-се том, № 14275, 85-се бит.

тейеш була. Лəкин ғəмəлдə үҙəктə лə, урындарҙа ла пугачевсыларҙан һорау алыу һəм язалауҙар йыл аҙағына тиклем дауам итə. Тик 1775 йылдың мартынан алып июленə тиклем генə лə Йəшерен экспедиция Ҡазан һəм Ырымбурҙың бөтөрөлгəн йəшерен комиссияларынан, Себер губернаторы Д. И. Чичериндан, Пермь провинция канцелярияһынан, Тобол һəм Əстрхан епархияларынан һəм башҡа төбəктəрҙəн үҙенең ҡарамағына килгəн тағы ла 685 эште ҡарай[1].

Восстание менəн солғап алынған Ырымбур, Ҡазан, Себер, Əстрхан, Нижегород һəм Воронеж губерналарының губерна, провинция һəм воевода канцеляриялары ла əсиргə алынған пугачевсылар өҫтөнəн суд һəм язалау эштəрен башҡара. Лəкин Сенат документтары араһында ғəйеплəнеүселəрҙең, урындарҙағы учреждениелар тарафынан хөкөм ителеүселəрҙең һаны тураһында йыйылма мəғлүмəттəр һаҡланмаған.

Юғарыла əйтелгəн тикшереү һəм суд органдары менəн бер рəттəн Крəҫтиəндəр һуғышы осоронда Ҡазанда, Ырымбурҙа һəм Яйыҡ ҡаласығында əбей батшаның указдары буйынса махсус төҙөлгəн йəшерен тикшереү комиссиялары эшлəй. Йəшерен комиссиялар төҙөү восстаниены тиҙерəк баҫтырыу, шулай уҡ уның килеп сығыу тарихын асыҡлау өсөн самодержавие тарафынан күрелгəн ғəҙəттəн тыш саралар̦ҙың береһе була.

«Тотолған яуыздар өҫтөнəн эште ҡарау һəм тикшереү өсөн», Екатерина II-нең 1773 йыл 29 ноябрҙəге рескриптына ярашлы рəүештə язалау ғəскəрҙəре баш командующийы генерал-аншеф А. И. Бибиков тарафынан (һəм уның етəкселегендə) Ҡазан йəшерен комиссияһы төҙөлə. Бибиков үлгəндəн һуң, əбей батшаның 1774 йыл 26 апрелдəге указы менəн комиссия Ҡазан губернаторы Я. Л. Брантҡа буйһондорола, ə 1774 йылдың июленəн Екатерина II-нең доверенный эмиссары П. С. Потемкин[2] Ҡазан һəм Ырымбур комиссияларының башлығы була.

Ырымбурҙа һəм уға яҡын урындарҙа əсиргə алынған баш күтəреүселəрҙең тупланыуы сəбəпле, хөкүмəт уларҙы восстание менəн солғап алынған өйəҙҙəр аша Ҡазанға оҙатыуҙан ҡурҡа, шуға күрə Екатерина II-нең 1774 йылдың 26 апрелдəге указы менəн Ырымбур йəшерен комиссияһы төҙөлə, уға тəүҙə Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорп, ə унан ары генерал П. С. Потемкин етəкселек итə. 1774 йылдың сентябрь башында ул Ҡазан комиссияһына ҡушыла[3]. 1774 йылдың августа—сентябрендə Яйыҡ йəшерен комиссияһы ла П. С. Потемкин ҡарамағында була.

---

[1] *Джинчирадзе В. З.* Күрһəтелгəн əҫəр, 91—92-се биттəр.

[2] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 20; Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 472, 549-сы биттəр; Бумаги императрицы Екатерины II, хранившиеся в Государственном архиве. — Сборник РИО, 1874, 13-сө том, 402-се бит; Екатерина II и Пугачевщина. — Русская старина, 1875, 13-сө том, 115—116-сы биттəр.

[3] Екатерина II-нең 1774 йылдың 26 апрелендə Рейнсдорпҡа һəм Ф. Ф. Щербатовҡа хаты. — ГАОО, ф. 3, д. 138, л. 60—61; Екатерина II и Пугачевщина, 116-сы бит; ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 6, л. 480.

1774 йылдың октябрь башында Семберҙә язалау ғәскәрҙәре командующийы генерал-аншеф П. И. Панин һәм генерал П. С. Потемкин составында тикшереү комиссияһы эшләй, комиссия ултырыштарында Яйыҡ ҡаласығынан килтерелгән Пугачевтан һорау алына. Мәскәүҙәге айырым комиссияны ла әйтеп китергә кәрәк, ул әбей батша тарафынан Е. И. Пугачевтың һәм уның иң яҡын көрәштәштәренең эштәрен тикшереү өсөн төҙөлә. Ҡомиссия составына Мәскәү генерал-губернаторы М. Н. Волконский, Йәшерен экспедицияның обер-секретары С. И. Шешковский һәм йәшерен комиссияларҙың начальнигы П. С. Потемкин инә, был комиссия Мәскәүҙә 1774 йылдың сентябренән декабренә тиклем эш алып бара [1]. Ошо уҡ йылдың август аҙағында Ҡара Яр эргәһендә 25 августағы һуғышта Пугачев ғәскәрҙәре еңелгән саҡта әсиргә алынған 6000-гә тиклем пугачевсы һаҡ аҫтында Царицынға килтерелә. Улар өҫтөнән тикшереү П. И. Панин күрһәтмәһе буйынса үткәрелә, уға Царицын коменданты полковник И. Е. Цыплетов етәкселек итә [2].

Баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәшеү өсөн ғәскәр һәм язалау учреждениеларының тотош системаһын күтәреп, самодержавие халыҡ восстаниеһын тиҙерәк тар-мар итеү тураһында ғына уйлай. Екатеринаны һәм уның хөкүмәтен Крәҫтиәндәр һуғышының социаль-экономик сәбәптәре лә, халыҡ талаптары ла ҡыҙыҡһындырмай. Суд-тикшереү органдары ла шунан сығып эш итә. 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусылар өҫтөнән тикшереү башлыса Е. И. Пугачевтың самозванец булып китеү шарттарын асыҡлауға йүнәлдерелә. Әбей батшаны һәм уның яҡын кешеләрен үҙен батша Петр III тип атаған дон казагы Емельян Пугачевтың кем тарафынан ҡуйылыуы: сиркәү раскольниктары — иҫке дини община әһелдәре тарафынанмы әллә оппозициялағы дворяндар йәки сит ил державалары тарафынанмы икәнлеге ҡыҙыҡһындыра. Тикшереүсе органдар алдына восстаниеның тап бына шул «инициаторҙарын» белеү бурысы ҡуйыла. Әбей батша «ошо яуыздың эшен асыҡлауҙы һәм, киләсәктә халыҡтың тыныслығын һәм именлекте тәьмин итеү өсөн, бөтә был мутлыҡтарҙың ҡайҙан сығыуын, кем тарафынан эшләнеүен һәм уйланылыуын әнәһенән ебенә тиклем белеүҙе [3] талап итә.

Екатерина асылда тикшереү учреждениеларының бөтә эшенә етәкселек итә һәм уларҙы ныҡлы контролдә тота. А. И. Бибиков әбей батшаға үҙенең донесениеларына системалы рәүештә «Йәшерен экспедиция буйынса пакеттар» өҫтәп ебәрә [4]. Ырымбур губер-

---

[1] Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 3, 124—138-се биттәр; № 4, 111—126-сы биттәр; № 5, 105—121-се биттәр; № 7, 92—109-сы биттәр; № 9, 137—149-сы биттәр.

[2] Пугачевщина, 2-се том, 204—215, 400-сө биттәр; 3-сө том, 312—313-сө биттәр.

[3] Письма государыни императрицы Екатерины II к князю М. Н. Волконскому. — «Осмнадцатый век» китабында. 1869, 1-се китап, 148-се бит.

[4] Императрица Екатерина II-нең Пугачев болаһы ваҡытында А. И. Бибиковҡа хаттары. — Русский архив, 1866, № 3, 390, 397-се биттәр.

наторы И. А. Рейнсдорп та һорау алыу экстракттарын әбей батшаға «еткерергә ашыға»[1]. П. С. Потемкинға инструкцияһында Екатерина II, «...үҙегеҙҙең бөтә донесениеларығыҙҙы һеҙ тура беҙгә ебәрә алаһығыҙ»[2], тип әмер бирә. Ә язалау ғәскәрҙәре баш командующийы генерал-аншеф П. И. Паниндың Ҡазан йәшерен комиссияһын уға тапшырыу тураһындағы һорауын «Минең ҡул аҫтында булғаны өсөн башҡаларға юҡ»[3] тип ҡәтғи кире ҡаға. Әбей батша үҙенә ебәрелгән тикшереү эштәре экстракттарын иғтибар менән ҡарай[4], Йәшерен экспедиция начальнигының докладтарын тыңлай, йәшерен комиссияларға инструкциялар һәм ҡулланмалар ебәрә, уларҙың билдәләмәләрен һәм хөкөм ҡарарҙарын раҫлай[5]. 1774 йылдың көҙөндә Екатеринаның төп иғтибары Е. И. Пугачевтың тикшереү процесына туплана. Ул 1774 йылдың 27 сентябрендә Волконскийға яҙған хатында процесс тураһында уға хәбәр итеп тороуҙы талап итә: «...һеҙгә ҡайһы саҡта кәрәкле кәңәштәремде бирә алыр өсөн»[6] тип яҙа ул. Тикшереүҙә рәсми рәүештә ҡатнашмаһа ла, асылда Екатерина процессты төп алып барыусы була, Мәскәүгә көн һайын үҙенең инструкцияларын ебәрә һәм тикшереү комиссияһы начальнигының донесениеларын алып тора[7]. Екатерина Йәшерен экспедицияға Ырымбурҙан һәм Ҡазандан ебәрелгән тикшереү һөҙөмтәләре экстракттарын эленәнәле ҡарап тороуҙы йөкләтеп, Йәшерен комиссияларҙың өҫтөнән үҙенең контролен уның аша ғәмәлгә ашыра[8].

Императрицаның күрһәтмәһе буйынса, тикшереү органдары «иң беренселәр»ҙең йәғни «беҙ уларҙан шундай яуызлыҡтың сәбәптәрен эҙләргә тейеш булған»[9] Е. И. Пугачевтың күренекле көрәштәштәренең эштәрен айырыуса ентекле алып бара. Уларҙан бер нисә тапҡыр, йыш ҡына күҙләштереүҙәр яһап һәм шаһиттарҙы ылыҡтырып, һорау алалар. Ләкин, Екатерина II-нең талаптарына ҡарамаҫтан, сығыштарҙың Е. И. Пугачев артында торған инициаторҙарын табыу, восстание юлбашсыһын самозванецлыҡ авантюраһына этәргән сәбәптәрҙе асыу буйынса тикшереү комиссияларының тырышлыҡтары көтөлгән һөҙөмтәләрҙе бирмәй. Хәрәкәттең етәксеһе үҙе лә, баш күтәреүселәрҙең Хәрби коллегияһы ағзалары М. Г. Шигаев, И. А. Творогов, И. Я. Почиталин, М. Д. Горшков һәм Пугачевтың башҡа иң яҡын көрәштәштәре лә ҡәтғи рәүештә

---

[1] Подлинные бумаги о бунте Пугачева. — «Чтения в обществе истории и древностей российских (ЧОИДР)» китабында. 1860, 2-се китап, 68-се бит.

[2] *Дубровин Н.* Пугачев и его сообщники, 3-сө том, СПб., 1884, 51-се бит.

[3] Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 524-се бит.

[4] *Пионтковский С.* Архив Тайной экспедиции о крестьянских настроениях 1774 г. — Историк-марксист, 1937, 7-се китап, 94-се бит.

[5] Екатерина II и Пугачевщина, 121—122-се биттәр.

[6] Письма государыни императрицы Екатерины II к князю М. Н. Волконскому, 148-се бит.

[7] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 415-се бит.

[8] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 1, л. 310—316; ч. 2, л. 71—78.

[9] Подлинные бумаги о бунте Пугачева, 67-се бит.

восстаниеның килеп сығыуына һәм барышына оппозициялағы дворяндарҙың да, сит ил кешеләренең дә бер ниндәй ҙә йоғонтоһо булмауын белдерә. Һорау алыу һөҙөмтәләрен дөйөмләштереп, Ырымбур йәшерен комиссияһы 1774 йылдың 21 майындағы докладында Екатеринаға былай тип хәбәр итә: «Пугачев ситтән, бигерәк тә сит илдән, етәкселек һәм булышлыҡ алмаған шикелле, ләкин уның яуызлыҡ эштәрендә уға, беренсенән, Яйыҡ казактары, ә икенсенән, был төбәк халҡының наҙанлығы, бер ҡатлылығы һәм яуыздың, уйлап сығарып, айырылып сығыу, ирәүән тормош, льготалар һәм һәр төрлө файҙалар менән ҡыҙыҡһындырыуҙарына уларҙың тиҙ ышаныусанлығы булышлыҡ итә» [1]. Чиновниктар восстаниеның социаль-экономик тамырҙарын асыҡлауҙан алыҫ булһа ла, улар халыҡ хәрәкәтенең шул тиклем йылдам һәм киң таралыуын тыуҙырған Пугачев агитацияһының ни өсөн уңышҡа өлгәшеү сәбәптәрен арыу уҡ дөрөҫ күрһәтә, уның көс сығанаҡтарын билдәләүгә яҡын тора. Шулай ҙа тикшереүселәр халыҡ восстаниеһын йәшәп килгән ҡоролоштоң ҡаҡшамаҫ нигеҙҙәренә законһыҙ һөжүм яһау итеп квалификациялай. Екатерина II-не дәүләттең эсендә лә, тышта ла уның тәхетенә ҡул һуҙыусы дошмандарҙың юҡлығына ышандырып, суд-тикшереү аппараты чиновниктары халыҡ сығышын «ҡара халыҡтың» мәғәнәһеҙ болаһы тип кенә күрһәтә.

Йәшерен комиссиялар үҙҙәренең икенсе бурыстарын шаҡтай уңышлыраҡ башҡара, баш күтәреүселәрҙән йөҙҙәрсә әсирҙәрҙең эштәрен бик ҡыҫҡа сроктарҙа тикшереп, уларҙы язаларға өлгөрә. Ырымбур һәм Ҡазан комиссиялары 11 606 баш күтәреүсенән [2] һорау ала, уларҙың төп массаһын Татищев крепосы, Һаҡмар ҡаласығы, Ҡазан эргәһендәге, Солеников ватагаһы янындағы һәм башҡа урындарҙағы һуғыштарҙа әсиргә алынған крәҫтиәндәр һәм казактар тәшкил итә. Комиссиялар эштәрҙе XVIII быуатта батша суды тарихында бығаса күрелмәгән тиҙлектә ҡарай һәм хөкөм ҡарарҙары сығара. Комиссиялар ҡайһы бер көндәрҙә 300-гә тиклем кешенән һорау ала. 1774 йылдың ғинуарында уҡ инде А. И. Бибиков Екатерина II-гә: «Йәшерен комиссия көнөн-төнөн тип әйтерлек эшләп, килтерелгәндәрҙән һорау алып өлгөрә алмай, сөнки уларҙың һаны торған һайын күбәйә», тип белдерә һәм комиссияға писарҙарҙың яңы төркөмөн ебәреүҙе һорай, сөнки «етешергә мөмкинлек юҡ һәм офицерҙар үҙҙәре лә Зряхов менән көнөн-төнөн яҙалар...»[3], тип хәбәр итә. Восстаниеның күренекле башлыҡтарына төп иғтибар биреп, йәшерен комиссиялар ябай баш күтәреүселәрҙең эштәрен хәл иткәндә ашыға, уларҙы ҡыҫҡа ғына һорау алғандан һуң (ә ҡайһы саҡта төркөмләп һорау алғандан һуң), тән язаһына тарттыра, ант иттерә, ә артабан «билеттар» биреп, элек йәшәгән урындарына ҡайтарып ебәрә. Шулай итеп, язалау учреж-

---

[1] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 390—391-се биттәр.
[2] Пугачевщина, 3-сө том, 466—467-се биттәр.
[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 272.

дениелары восстание етәкселәре һәм уның актив ҡатнашыусылары менән ябай баш күтәреүселәр массаһы араһында айырма яһарға маташа.

Тикшереү үткәреү методтарында ниндәй ҙә булһа бер төрлөлөк күҙәтелмәй. Комиссия ағзалары үҙҙәре менән эшләгән һәм, Екатеринаның үҙенең һүҙҙәре менән әйткәндә, «минең күҙ алдымда күп йылдар буйы шундай эштәргә нык ҡына күнеккән»[1] чиновниктың, Йәшерен экспедиция секретары И. З. Зряховтың тәжрибәһен файҙалана. Губернаторҙар, һорау алыу үткәргәндә, ҡулға алынғандарға, «һәр енәйәтте градустар буйынса 7 категорияға бүлеп, шуға ярашлы рәүештә язалау сараһы билдәләргә тәҡдим иткән [2] Йәшерен экспедицияның рекомендацияларын [3] ҡулланып эш итә. Шуны иҫәпкә алып, комиссиялар баш күтәреүселәрҙең ҡулға төшөрөлгән документтары, шул иҫәптән төрки теленән тәржемә ителгән документтар, нигеҙендә тултырыла торған журналдар — «яуыздарҙың начальниктары» «реэстрын» һәм «алфабетын» булдырҙы [4].

1774 йылдың июленән алып йәшерен комиссияларға етәкселек иткән П. С. Потемкин был учреждениеларҙың эшен улар «енәйәтсе үҙе әйтергә теләгән тиклемен генә» яҙғандары өсөн тәнҡитләй. Ул «тикшереүҙә булған эштәрҙе, уларҙың бәйләнешен һәм булған ниәттәрен» белеүҙе талап итә һәм бер нисә пункттан торған үҙенең һорау алыу формаһын тәҡдим итә. Атап әйткәндә, дүрт һорау яуап алыныусының восстаниела ҡатнашыу-ҡатнашмауына ҡағыла, өсөһө Пугачевтың Ҡазан төрмәһенән «кемдең булышлығында» ҡасыуын асыҡлау өсөн билдәләнә, баш күтәреүселәрҙең хат алышыуҙарына һәм бәйләнештәренә, халыҡ хәрәкәте етәксеһенең пландарына һәм маҡсаттарына ҡағыла: «ҡайҙа йүнәлтергә ынтылған ул, ни өсөн һәм нимәгә өмөт иткән» [5].

Бөтә мәғлүмәттәр өгөтләү, ҡурҡытыу, баҫым яһау, ә йыш ҡына ғазаплау юлы менән табыла. «Ихлас» һорау алыу, тән язаһына дусар итеү тикшереүҙә ғәҙәти хәлгә әйләнә, был әбей батша тарафынан да, хакимлыҡ итеүсе Сенат тарафынан да хуплана. Үтә ҡанһыҙлығы менән танылған Шешковский Пугачевтан һорау алғанда, Пугачев былай тигән: «әйттем бит инде уға, бағана менән баҫып язалағыҙ тип», хатта билдәләнгән ҡотолғоһоҙ үлемде лә ул көн һайын ғазаплап һорау алыуҙарҙан өҫтөн күргән [6]. 1774 йылдың

---

[1] Екатерина II и Пугачевщина, 124-се бит.

[2] И. А. Рейнсдорптың 1774 йылдың 30 майында И. Л. Брантҡа хаты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 5—6.

[3] Сенаттың Йәшерен экспедицияһының Ҡазан һәм Ырымбур йәшерен комиссияларының ҡарарҙарына 1774 йылдың 18 июлендәге «Иҫкәрмәләре». — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 74—76.

[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 12, л. 397—398; М. Е. Салтыков-Щедрин исемендәге дәүләт халыҡ китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлеге (ГПБ ОР), Ғ. IV, д. 668, л. 7—33.

[5] П. С. Потемкиндың Ҡазан йәшерен комиссияһына 1774 йылдың 24 июлендәге инструкцияһы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 89.

[6] *Дубровин Н.* Күрһәтелгән әҫәр, 3-сө том, 357-се бит.

5 декабрендә ул, Пугачев, тикшереүселәргә «үҙен лайыҡлы һанаған теләһә ниндәй иң ҡот осҡос ғазаплауҙарҙа ла башҡа бер ниҙә әйтә алмайым»[1] тип белдергән. Ҡазан йәшерен комиссияһында И. Н. Зарубин-Чика тик «ғазаплауҙар аҫтында ун ике тапҡыр өгөтләгәндән һәм фашлаусы дәлилдәр килтерелгәндән һуң ғына»[2] ғәйебен таный. Яуап алыу методтары тураһында яҡшы белгән Екатерина Е. И. Пугачевтың көрәштәштәре И. Я. Почиталинды, И. Н. Зарубинды һәм башҡаларҙы Мәскәүгә килтереүҙе талап иткән хатында: «Әгәр әле тере... булһалар»[3], — тигән иҫкәрмә яһай.

Суд органы хоҡуҡтарынан һәм полномочиеларынан бер ниндәй сикләүҙәрһеҙ файҙаланып, тикшереү учреждениелары пугачевсыларға хөкөмдө үҙҙәре сығара, үҙҙәре үк уны ғәмәлгә ашыра. Йәшәп килгән практиканан ситкә сығыуҙың берҙән-бер осрағы билдәле: 1774 йылдың декабрендә Екатерина II Пугачевтың һәм уның ҡырҡ көрәштәшенең эше буйынса суд процесы билдәләргә бойороҡ бирә[4]. Ләкин ғәмәлдә иһә уның суд тигән исеме генә була, уға ниндәйҙәр законлылыҡ төҫө лә бирелә. Был инсценировканың төп маҡсаты императрицаның Көнбайыш Европа алдында тышҡы яҡтан булһа ла әҙәп һаҡларға теләүендә, «мәғрифәтле абсолютизм» илендә «ғәҙел» суд хоҡуҡтары һәм хоҡуҡ тәртиптәре картинаһын демонстрациялауҙа тора. Е. И. Пугачевҡа үлем язаһы алдан уҡ билдәләнә. 1775 йылдың 10 ғинуарында Мәскәүҙә Болотный майҙанында халыҡ восстаниеһы юлбашсыһы һәм уның дүрт иптәше — А. П. Перфильев, М. Г. Шигаев, Т. И. Падуров, В. И. Торнов язалап үлтерелә. Үлем язаһына хөкөм ителгән И. Н. Зарубин Өфөгә ебәрелә, бында 1775 йылдың 24 ғинуарында провинция канцелярияһы уны дүрткә ботарлап үлтереү тураһындағы хөкөм ҡарарын еренә еткерә.

Ә быға тиклем бер йыл элек Ҡазан йәшерен комиссияһы үҙенең эшләй башлауын татар кешеһе һалдат Әбдрәшит Бикеевты һәм рус крәҫтиәне Матвей Назаровты[5] язалап үлтереү менән билдәләй. Дөйөм алғанда уның хөкөмө буйынса 38 кеше язалап үлтерелә[6]. Ырымбур йәшерен комиссияһының ҡарарҙары буйынса Яйыҡ ҡаласығында баш күтәргән казактарҙың атаманы Н. А. Каргин, Ырымбурҙа — Пугачев полковниктары А. Т. Соколов-Хлопуша, И. Волков, атаман М. П. Толкачев аҫып үлтерелә. Бынан тыш, үлем язаһын сыбыртҡы менән дә ихлас алмаштыралар: язаланыу-

---

[1] Пугачевщина, 2-се том, 229-сы бит.

[2] Шунда уҡ, 128-се бит.

[3] Екатерина II и Пугачевщина, 124-се бит.

[4] ПСЗ I, 19-сы том, № 14230, 1064—1067-се биттәр; Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 627—630-сы биттәр; Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 3, 128—130-сы биттәр; № 9, 137—149-сы биттәр; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 408—432-се биттәр.

[5] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 1, л. 30, 146—149; *Алишев С. Х.* Татары Среднего Поволжья в Пугачевском восстании. Ҡазан, 1973, 109-сы бит.

[6] Пугачевщина, 3-сө том, 466-сы бит.

сылар күпселек осраҡтарҙа сыбыртҡы менән һуҡтырыуға сыҙай алмай. Ырымбур һәм Ҡазан комиссиялары сыбыртҡы менән язалауға 153 кешене хөкөм итә [1]. Әсиргә алынған баш күтәреүселәрҙең байтағы комиссияларҙың ҡарарҙары сыҡҡансы уҡ тығынлыҡтан, ауырыуҙарҙан һәм ғазаплауҙарҙан төрмәләрҙә үлә. Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашҡан рус һәм рус булмаған крәҫтиәндәрҙе, ҡамсы һәм сыбыртҡы менән язалауҙан тыш, хөкөм ителгәндәр «үҙҙәренең ҡиәфәттәре менән уҡ ҡурҡытып торорлоҡ» итеп, ағзаларын ғәриплəндереүҙе лә ҡулланалар: ҡолаҡтарын ҡырҡалар, танауҙарын өҙөп алалар. Мәҫәлән, Ҡазандың йәшерен комиссияһының 1774 йылдың 18 ноябрендәге хөкөм ҡарары буйынса Себер юлы Яңы Конпин ауылынан башҡорт Әлстдин Биктуғановты, Уса юлы Юбанай ауылы башҡорто Мәһәҙи Мәҙиәровты, Уса юлының Аҡтуған ауылынан мари Кенәз Туҡмурзинды һәм Тертәк ауылынан мари Иштүбай Ишбулатовты ҡамсы һәм сыбыртҡы менән һуҡтырғандан һуң, ҡолаҡтарын ҡырҡалар; уларҙы йәшәгән урындарына һаҡсылар оҙатып бара, һаҡсыларға ғазапланыусыларҙы юл буйынса халыҡҡа күрһәтеп барырға әмер бирелә [2].

Әгәр ҙә Йәшерен экспедиция һәм йәшерен комиссиялар тикшергәндә һәм суд эштәрендә әле ниндәйҙер дәрәжәлә ҡағиҙәләрҙе күҙәтергә тырышһалар, ә үҙәк язалау учреждениеларынан, нигеҙҙә, бойондороҡһоҙ эш иткән губернаторҙар, воеводалар, ғәскәри часть командирҙары һәм помещиктар судтары баш күтәреүселәрҙе үҙҙәре нисек теләһә шулай язалайҙар, ә халыҡ массаларының восстаниела ҡатнашыу сәбәптәрен асыҡлау хаҡында саҡ ҡына ла уйламайҙар. Үҙҙәренең тикшереү һөҙөмтәләрен улар хатта йәшерен комиссияларҙың начальниктарына ла хәбәр итмәйҙәр. 1774 йылдың 10 ноябрендә П. С. Потемкин асыу менән әбей батшаға былай тип яҙа: «Билдәле йәки шикле колодник ҡулға эләккән бөтә ерҙә лә, суд урындарына тиклем быны эшләү тейешле булмаһа ла, һорау алырға тотонорға баҙнат итеп кенә ҡалмайҙар, бәлки шундай тырышлыҡ менән һорау алалар, ҡайһы саҡта иң мөһим мәғлүмәттәр енәйәтселәр менән бергә һәләк була, ә ғәйепһеҙҙәр ирекһеҙҙән шундай эштәрҙе үҙ өҫтәренә өйә, был ғәйепте улар бер ҡасан да эшләмәгән, һәм йыш ҡына айыҡ аҡыл менән шарттар бер-береһенә тура килмәй»[3].

Йәшерен комиссияларҙы бөтөргәндән һуң, баш күтәреүселәргә язаны тик губернаторҙар, воеводалар һәм хәрби чиндар ғына билдәләгән. 1774 йылдың сентябрь аҙағында Ырымбур губернаторы Рейнсдорп, башҡорттарҙы буйһондороу өсөн, Башҡортостан аша Силәбегә коллежский советник И. Л. Тимашевтың язалау отрядын ебәрә һәм, «яуызлыҡ эшләгәндә тотолғандар булһа, уларҙы язалау өсөн бында миңә оҙатырға»[4], тип бойороҡ бирә. Өфөнөң провинция канцелярияһы ҡаланан блокада алынғандан һуң уҡ, 1774 йыл-

---

[1] Пугачевщина, 3-сө том, 466—467-се биттәр.
[2] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 47.
[3] Шунда уҡ, ч. 6, л. 470; Пугачевщина, 3-сө том, 326—327-се биттәр.
[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 250.

дың 25 мартында, Чесноковка[1] эргәһендәге һуғыштарҙа ҡулға төшкән әсирҙәрҙән һорау ала башлай. Уның рөхсәте менән Өфөлә, «башҡаларҙы ҡурҡытыу һәм бүтәндәр ҙә шундай яуызлыҡтар эшләргә батырсылыҡ итмәһен өсөн», Чесноковка эргәһендә 1774 йылдың 27 июнендә полковник А. Я. Якубовичтың яҙалау отрядына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашҡан башҡорттар Әбдрәшит Абдрахманов (Нуғай юлының Ҡесе Табын волосы), Юламан Юлҡуатов (шул уҡ юлдың Өршәк-Меңле волосы), Асҡар Ҡунаҡбаев (шул уҡ юлдың Кәлсер Табын волосы), шул уҡ юлдың яһаҡлы татарҙары Юзәй Биктимеров (Ҡарамалы ауылынан), Әлмөхәммәт Өсәинов (Балыҡлығүл ауылынан), Нуғай юлының Ләкәиде ауылынан мишәр Солтаҡай Әптикәев[2] аҫып үлтерелә. Элекке «тоғро» старшина Солтанморат Янышев командаһында булған мишәрҙәр восстаниела ҡатнашҡандары өсөн 25-әр тапҡыр сыбыртҡы менән һуҡтырыла[3]. Шуны ла әйтергә кәрәк, подполковник И. И. Михельсон частарында башҡорт-мишәр отряды менән командалыҡ иткән старшинаның үҙен батша хөкүмәте башынан ғына һыйпай. Ниндәй милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, урындағы байҙарҙың мәнфәғәттәрен властар асыҡтан-асыҡ яҡлай; баш күтәреүселәрҙе ҡаты яҙалап, улар, яҙалау ғәскәрҙәрендә булған старшиналарҙы һәм йөҙ башлыҡтарын төрлө чиндар, исемле ҡоралдар, буҫтау һәм аҡса менән йомарт бүләкләй[4].

Хөкүмәт ғәскәрҙәренә командующий итеп «фетнәне баҫтырырға императрица ғали йәнәптәре тарафынан вәкил итеп ебәрелгән» генерал-аншеф П. И. Панинды билдәләгәндән һуң (1774 йылдың 29 июле), Ырымбур, Ҡазан, Нижегород һәм башҡа ҡайһы бер губерналарға быға тиклем күрелмәгән репрессия тулҡыны ябырыла[5].

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 60. Йөҙ йылдан һуң яҙылған риүәйәттәр буйынса, баш күтәреүселәр өсөн Өфөлә «йәшерен төрмә» эшләгән: был Ағиҙел йылғаһы өҫтөндә һалынған бер өй була, өйгә ингән һәр кем мәкегә сумған. *Игнатьев Р.* Осада г. Уфы (эпизод из истории Пугачевского бунта). «Памятная книжка Уфимской губернии» китабында. Өфө, 1873, 2-се киҫәк, 119-сы бит.

[2] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 2 июлендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 9, л. 376—377.

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 60.

[4] ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 94, 96, 97, 102, 105, 110, 115—117, 134—136. (Сенаттың Ишмөхәммәт Сөләймәновҡа һәм Бәхтиәр Янышевҡа 1776 йылдың 1 декабрендәге указдары; уларға уҡ Рейнсдорптың 1775 йылдың 5 февралендәге һәм 1776 йылдың 8 мартындағы указдары; Мөҡсин Әбдесәләмовтың һәм башҡа мишәр старшиналарының 1791 йылдың августында — сентябрендә Екатерина II исеменә яҙған үтенес ҡағыҙҙары); ГАОО, ф. 3, д. 141, л. 186, 190, 191; д. 145, л. 10; д. 148, л. 21, 27, 28, 39, 49, 57, 65, 92, 93, 98; д. 155, л. 5, 21, 29, 33, 48, 57, 59, 67, 68, 70, 71, 91, 95 һ. б. (башҡорт һәм мишәр старшиналарының һәм йөҙ башлыҡтарының 1774—1776 йылдарҙағы үтенес ҡағыҙҙары буйынса И. А. Рейнсдорптың указдары); ЦГАДА, ф. 6, д. 516, ч. 3, л. 156 (Сенаттың миҙалдар һәм чиндар менән наградланған старшиналар тураһында белешмәһе — 1776 й.); Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 554-се бит; Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте. — Сборник РИО, 1871, 6-сы том, 183—184-се биттәр.

[5] *Анучин Д.* Граф Панин, усмиритель Пугачевщины.— Русский вестник, 1869, 81-се том, 385-се бит.

Диктатор хоҡуҡтары алған П. И. Панин, «дүрт губернала тоҡанған сыуалыштарҙы һәм хыянатсылыҡты юҡ итеү генә түгел, бәлки халыҡты законлы язалау өсөн уны тотоп бөтөрөү» буйынса халыҡҡа ҡаршы тоталь һуғыш башлай [1]. Йәшерен комиссияларҙың йәшәүе менән иҫәпләшмәйенсә, Панин күренекле баш күтәреүселәрҙән үҙе һорау ала йәки уны губернаторҙарға тапшыра. Был П. С. Потемкиндың ризаһыҙлығын тыуҙыра, һәм ул әбей батшаға бер нисә тапҡыр ялыу менән мөрәжәғәт итә. Екатерина улар араһындағы ыҙғышҡа тығылмауҙы яҡшыраҡ күрә: икеһе лә бер үк эште үтәй, икеһе лә бында өлгөлө тыныслыҡ күрһәтә. Ҡара Яр эргәһендә әсиргә алынған пугачевсылар өҫтөнән тәүтикшереү алып барған Царицын коменданты И. Е. Цыплетевҡа Панин шундай күрһәтмә бирә: «Һәр төрлө ҡурҡытыуҙар менән ошо әсирҙәрҙе бер-береһен фашларға мәжбүр итегеҙ: 1) самозванецтың килеп сыҡҡанынан алып уның менән бергә булғандарҙың бөтәһен дә; 2) уға иң яҡын тороусыларҙы; 3) ябай кешеләрҙе генә түгел, ә начальник чиндары һәм вазифалары булғандарҙы; 4) улар араһында ғали йәнәптәре хеҙмәтендә хәрби хеҙмәткәрҙәрҙән һәм чиновниктарҙан һатлыҡ йәндәр кемдәр; 5) дворяндарҙан кемдәр; 6) бай кешеләрҙең йорттарынан ҡасҡан кемдәр; 7) ниһайәт, игенселәрҙән кемдәр...» Унан ары — «үҙенең званиеһы буйынса йәки үҙенең яуызлыҡтарында яуыздың үҙенә яҡын булғандарҙың бөтәһен дә» — язалап үлтерергә; ябай ҡатнашыусыларҙы (төрмәләрҙә уларҙың дөйөм һаны 6000-гә тиклем еткән) «ҡамсы менән ҡаты туҡмарға», ә хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙҙарҙың «бер ҡолағын бер нисә тапҡыр телгеләргә, ...үҙенең тейешле тәүбәгә ҡайтыуын тәре һәм евангелие үбеп раҫлатырға»; помещик йорттарынан ҡасҡан хеҙмәтсе кешеләрҙе, тән язаһы биргәндән һуң, «рекрут иҫәбенә каторга эшенә ебәрергә» [2]. Генерал-аншефтың хәрби-поход канцелярияһы эштәрендә һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса, уның тарафынан 8329 баш күтәреүсе үлтерелә һәм тән язаһына тарттырыла [3]. Ләкин хөкөм ҡарарҙарының бөтә ҡатылығына ҡарамаҫтан, суд-тикшереү процестары П. И. Паниндың берҙән-бер һәм хатта төп язалау сараһы булмай. Генерал халыҡты хәрби-ялан суды артикулы буйынса язалауҙы өҫтөн күрә. Паниндың приказы буйынса «...асыуланып бола күтәрергә һәм тейешле тоғро бойондороҡлоҡтан сығырға батырсылыҡ иткән» бөтә ҡалаларҙа, крепостарҙа һәм ауылдарҙа дар ағастары һәм ҡуласаға бәйләп язалау өсөн ҡоролмалар ҡуйыла [4]. Паниндың был бойороғон Рейнсдорп 1774 йылдың 16 октябрендә ала [5], ә ноябрҙә—декабрҙә дар ағастары, ҡуласаға бәйләп язалау өсөн снарядтар, глаголдар [6] тип

---

[1] Күрһәтелгән әҫәр, 147-се бит.

[2] *Дубровин Н.* Күрһәтелгән әҫәр, 3-сө том, 294—295-се биттәр.

[3] *Овчинников Р. В.* Источники изучения социального состава повстанческих отрядов Е. И. Пугачева. «Народы в Крестьянской войне 1773—1755 гг.» Өфө, 1977, 123-сө бит.

[4] *Анучин Д.* Күрһәтелгән әҫәр, 401—402-се биттәр.

[5] ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 90—91.

[6] Пугачевщина, 3-сө том, 359—364-се биттәр.

аталған нәмәләр ҡуйылған 150-нән ашыу ауыл һәм ҡала исемлеге Ырымбурға Өфө провинция канцелярияһынан, Бөгөлмә земство контораһынан, Ставрополь канцелярияһынан килтерелеп еткерелә лә инде. 1774 йылдың көҙөндә Ырымбур губернаһын солғап алған хәрби частар командирҙарына «башлап ебәреүселәрҙе» тоторға һәм шунда уҡ дүрткә ботарлап язаларға әмер бирелә, ә уларҙы йәшереп тотҡандар араһынан язалап үлтереү өсөн йәрәбә буйынса кешеләр һайлап алырға ҡушыла.

1775 йылдың 25 ғинуарында Панин Екатеринаға былай тип хәбәр итә: «Боласы шайкаларҙың бөтә төп етәкселәре, береһен дә ҡалдырмай, Рәсәйҙекеләрҙең дә, шулай уҡ башҡорттарҙың да ҙур өлөшө һәм самозванец үҙе лә, монархтың ғәҙел хөкөмөнә тере килеш килтерелде, ә артабан уларҙан ҡалғандары йә язалап үлтерелде, йә үҙҙәренең яуызлыҡ ҡылған урындарында ғәҙел хөкөм ителеп хәрби ҡылыстан һәләк булды»[1].

Бына шундай репрессиялар менән властар дворян-помещик дәүләте мәнфәғәттәрен яҡлай. «Монархтың ғәҙел хөкөмө» крепостнойлыҡҡа һәм милли иҙеүгә ҡаршы, помещиктарҙың, завод хужаларының һәм батша администрацияһының башбаштаҡлыҡтарына ҡаршы көрәшкә күтәрелгән халыҡты ҡанға батырып язалауға әүерелде.

§ 2. САЛАУАТ ЮЛАЕВТЫ ҠУЛҒА АЛЫУ ҺӘМ УНЫҢ ТОТҠОНДА БУЛЫУЫНЫҢ ТӘҮГЕ АҘНАЛАРЫ

Волганың түбәнге ағымында, Ҡара яр эргәһендә, баш күтәреүселәрҙең төп ғәскәренең еңелеүе һәм Е. И. Пугачевтың ҡулға алыныуы язалау ғәскәрҙәре командованиеһына төп иғтибарҙы Башҡортостанда Пугачев бригадиры Салауат Юлаев етәкселегендәге восстаниены баҫтырыуға тупларға мөмкинлек бирә. 1774 йылдың көҙөндә Өфө провинцияһында регуляр йәйәүле һәм атлы полктар, шулай уҡ полковник Н. Н. Ҡожин һәм подполковник С. Л. Наумов командалығындағы казак отрядтары (генерал-майор П. Д. Мансуров бригадаһынан), генерал-майор Ф. Ю. Фрейман бригадаһы хәрәкәт итә; ә Исет провинцияһында генерал-майор А. Д. Скалон һәм С. Ҡ. Станиславский командалығындағы ғәскәрҙәр (генерал-поручик И. А. Деколонг корпусынан) хәрәкәт итә[2].

Башҡортостанда баш күтәреүселәр хәрәкәтен баҫтырыуҙа генерал Фрейман айырыуса активлыҡ күрһәтә. Уның ставкаһы 1774 йылдың сентябренән 1775 йылдың аҙағына тиклем Өфөлә була. Бынан 1774 йылдың сентябрендә подполковник И. Ҡ. Рылеев-

---

[1] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 199-сы бит.

[2] *Дмитриев-Мамонов А. И.* Пугачевский бунт в Зауралье и Сибири. СПб., 1907, 162—164-се биттәр; Крестьянская война..., 219, 230, 240-сы биттәр.

тың[1] язалау командаһы ебәреләһәм ул Салауат Юлаевтың отрядтарын еңә[2], ләкин уларҙы бөтөнләй тар-мар итә алмай. Ике айҙан һуң, шул уҡ йылдың ноябрендә, Өфөнән көнсығыш Башҡортостанға, Быҙаулыҡ, Татищев крепосы һәм Һаҡмар ҡаласығы[3] эргәһендә Пугачев отрядтары менән һуғыштарҙа үҙен күрһәтергә өлгөргән хәрби начальник подполковник Н. Я. Аршеневский етәкселегендә 23-сө еңел ялан командаһы ебәреләә. Аршеневскийға «Салауат етәкселегендә элек бола күтәргән туғыҙ волостың»[4] баш күтәреүселәренең сығыштарын баҫтырырға әмер бирелә.

Шул уҡ ваҡытта язалау отрядтарының ҡайһы бер командирҙары һәм хөкүмәт чиновниктары Салауаттың көрәште дауам итеүҙән үҙ ирке менән баш тартыуына өмөтләнеүҙән туҡтамай. Губернатор Рейнсдорп тарафынан Башҡортостанға ебәрелгән язалау отряды командиры, коллежский советник, 33 башҡорт һәм яһаҡ түләүсе старшинаға, 12 старшина ярҙамсыһына һәм араларында Пугачев генералы һәм 6 полковник булған 29 йөҙ башлығына властарға ант итеү һәм буйһоноу фактын раҫлаусы билеттар һәм документтар биреүе менән ғорурланған И. Л. Тимашев 1774 йылдың 22 ноябрендә лә әле Салауаттың үҙ ғәйебен танып килеүен көтә[5]. Ә йәшерен комиссияларҙың начальнигы П. С. Потемкин 21 ноябрҙә П. И. Панинға, йәнәһе, «иң баш боласы, Салауат, Тимашев эфәндегә бирелергә киткән, унан Ҡазанға оҙатыласаҡ»[6], тип хәбәр итә. Ысынбарлыҡта иһә улай булмай. Салауат бирелергә йыйынмай ҙа. Шул төбәктәге старшиналарҙан Салауатты яҡшы белгән, ләкин восстаниенан ситләшкән һәм, халыҡ мәнфәғәттәренә хыянат итеп, властар алдында үҙҙәренең ғәйептәрен йолоп ҡалырға ниәтләнгән кешеләр быны алдан күрә[7].

Әй йылғаһына, алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда Салауат Юлаев отряды хәрәкәт иткән урынға, юл тотҡан Аршеневский отрядына мишәр старшинаһы Мөксин Әбдесәләмовтың атлы командаһы ҡу-

---

[1] Рылеев И. К. (1737 йылда тыуған), сығышы — дворян. 50 йән крепостной хужаһы, 1756—1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ һуғышта булған, 1774 йылда Пугачев хәрәкәтен баҫтырыуҙа ҡатнашҡан; 1772 йылдан премьер-майор; 1774 йылдың 17 мартынан подполковник (1774 йылдың формуляр исемлеге. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 191, л. 412).

[2] Крестьянская война..., 231—233, 236—237, 244-се биттәр.

[3] Аршеневский Н. Я. (1745 йылда тыуған), Смоленск дворяндарынан, 150 крепостнойы була, 1768—1774 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышында ҡатнаша, 1771 йылдан подполковник (1774 йылдың формуляр исемлеге. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 202, л. 368—369).

[4] Крестьянская война..., 320—321-се биттәр.

[5] Тимашевтың 1774 йылдың 22 ноябрендә генерал Скалонға үҙҙәренең ғәйептәрен танып килеүселәрҙең исемлеге («регистры») теркәлгән рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 188—192. Тимашев пугачевсы генерал Юламан Ҡушаевҡа һәм полковниктар Байым Кедрәевҡа, Ҡасҡын Һамаровҡа, Морат Сураҡовҡа, Муйнаҡ Сөләймәновҡа, Төрөкмән Йәнсәйетовҡа, Юлай Аҙналинға билеттар бирә.

[6] В. И. Ленин исемендәге дәүләт китапханаһы, ҡулъяҙмалар бүлеге (ГБЛ ОР), ф. 222, д. 7, л. 287.

[7] П. М. Голицындың 1774 йылдың 23 ноябрендә П. И. Панинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 380.

2 Заказ 581

шыла. Ул Пугачев восстаниеһының иң башынан уҡ ошондағы старшиналарҙың үҙ байлығын һәм хеҙмәтсән башҡорттар, мишәрҙәр һәм татарҙар өҫтөнән власын яҡлап сығыш яһаған өҫкө ҡатламы вәкилдәренән берсһе була. Бынан егерме йыл элек Мөҡсин язалау ғәскәрҙәре составында 1755 йылғы башҡорттар восстаниеһында ҡатнашыусыларҙы эҙәрләй һәм старшина Сөләймән Дибаев менән баш күтәреүселәрҙең етәксеһе Батыршаны[1] тотоп, Петербургка алып килә. 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында Мөҡсин хөкүмәт ғәскәрҙәренең язалау операцияларында актив ҡатнаша, Башҡортостанда, Кама буйында, Волга буйында баш күтәреүселәр отрядтарын айырыуса тырышып эҙәрләй. Полковник Михельсон деташаменты составында ул Ҡазанға тиклем барып етә, унан Башҡортостан буйлап йөрөп, баш күтәргән халыҡты нинә «енәйәт ҡылғанына тәүбә итергә» өндәргә, тип П. С. Потемкиндан задание алып ҡайта. Ул башҡорт старшинаһы Шәрип Кейеков менән бергәләп өс ай буйы янауҙар һәм ҡурҡытыуҙар юлы менән «болала яуызға әйләнгән кешеләрҙе», гәйептәрен таныһ, язалау ғәскәрҙәренең командирҙарына баш һалып килергә мәжбүр итә. Үҙенең «уңыштары» тураһында ул Потемкинға хәбәр итеп тора[2]. Урындағы халыҡ менән даими аралашҡан Мөҡсингә баш күтәреүселәрҙең отрядтарын һәм уларҙың етәксеһе — Салауат Юлаевты аңдып алыу ауыр булмай. Шуға күрә, Салауат отряды Елдәк крепосынан алыҫ түгел подполковник Рылеев командаһына ҡаршы 18 һәм 22 сентябрҙәрҙәге һуғыштарҙа шаҡтай юғалтыуҙар кисереп сигенгән Эҫем һәм Әй йылғалары араһындағы урындар тураһында хәбәрҙе Фрейманға тап бына уның еткереүе мөмкин. Был Мөҡсин Әбдесәләмовтың ике айҙан артығыраҡ ваҡыттан һуң үҙенең командаһы менән язалау ғәскәрҙәренә ҡушылырға ҡарар итеүе менән дә раҫлана. Язалаусыларға ҡуштанланып йөрөгәне өсөн, уның йортон һәм мөлкәтен[3] талап үс алған баш күтәреүселәргә нәфрәте ташҡан Мөҡсин, Аршеневский командаһы составына ҡушылып ҡына ҡалмаған, уны Салауат Юлаевтың һуңғы отряды торған урынға алып та барған булһа кәрәк.

Шәрип ауылында урынлашып алған Аршеневский 24 ноябрҙә поручик В. Лесковский командаһын Салауатты эҙләргә ебәрә, команданың башында Мөҡсин Әбдесәләмовтың атлы отряды бара.

Ул көндәрҙәге ваҡиғаларҙы һөйләүҙән ситләшеп, язалау командаһына етәкселек иткән В. Лесковскийҙың шәхесенә туҡталайыҡ. Уның хәрби хеҙмәте[4] тураһында күптән түгел табылған мәғлүмәттәр буйынса шуны асыҡлап булды: оҙаҡ ваҡыттар буйы

---

[1] Батыршаны тотоу һәм уны Петербургка килтереү тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *В. Н. Витевский.* И. И. Неплюев и Оренбургский край в прежнем его составе до 1758 г. Ҡазан, 1897, 3-сө том, 879—880, 886—887 890-сы биттәр.

[2] Крестьянская война..., 152, 156, 163, 209, 258, 288, 397, 401-се биттәр.

[3] Мөҡсин Әбдесәләмовтың 1774 йылдың 5 сентябрендә Екатерина II исеменә үтенес ҡағыҙы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 263—266.

[4] 23-сө еңел ялан командаһы офицерҙарының 1775 йылдың 1 гинуарына исемлеге. — ЦГВИА, ф. 490, оп. 3, д. 158, л. 485 об. — 486.

поручик чинынан өҫкә күтәрелә алмаған 43 йәшлек офицер Лесковский, поляк конфедераттары менән күптән түгелге һуғыштарҙа үҙе көҫәгән данға ирешә алмағас, Пугачев восстаниеһын баҫтырыуҙа үҙен күрһәтергә маташа. Мәҫәлән, генерал П. Д. Мансуров 1774 йылдың 14 февралендә ғәскәрҙәрҙең баш командующийы А. И. Бибиковҡа Бышаулыҡ крепосына атака яһағанда поручиктың айырыуса тырышлыҡ күрһәтеүе тураһында яҙа. Ҡрепоста ултырып алған баш күтәреүселәр һөжүм итеүсе колоннаға «пушкаларҙан ҡаты ут» асҡас, фронтты өҙөргә ебәрелгән Лесковский отряды хөкүмәт ғәскәрҙәренең һөжүмен тәьмин итә һәм улар крепосҡа баҫып инә. 17 февралдә Мансуров Лесковский тураһында тағы ла Бибиковтың иҫенә төшөрә[1], уны хатта Бышаулыҡ эргәһендә яраланды тип тә ҡарай. Ләкин поручик аяҡҡа баҫып, бер айҙан ашыуыраҡ ваҡыттан һуң Татищев крепосы эргәһендә баш күтәреүселәргә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашһа ла, баш командующийҙың наградалары уға эләкмәй. 1774 йылдың көҙөндә Лесковскийға үҙенең тырышлығын күрһәтергә тағы ла бер мөмкинлек тыуа. 25 ноябрҙә язалаусылар отряды Миндеш (Мигдишкино) тигән бер төпкөл ауылға яҡын урманда Салауатты һәм уның дүрт иптәшен ҡыуып етеп тота. Был саҡта баш күтәреүселәрҙе эҙәрләүҙә туплаған шаҡтай ҙур тәжрибә (Мөҡсин өсөн ул 1755 йылдан алып иҫәпләнә) ярап ҡала һәм язалау ғәскәрҙәре командирҙары тарафынан инде эштә һыналған һәм баш күтәреүселәрҙе алдау һәм унан ары ҡапыл ҡамап тотоу маҡсаты менән властарға тоғро башҡорт-мишәр командаларын баш күтәреүселәргә аҫтыртын ебәреү тактикаһы[2] ҡулланыла. Салауат һәм уның иптәштәре, баш күтәреүселәрҙең ниндәйҙер отряды уға ҡушылырға килгән икән тип алданып ҡына, Мөҡсин командаһын үҙҙәренә яҡын ебәргәндер, тип уйларға кәрәк. (Пугачев хәрәкәте тарихынан шул билдәле: башҡорттарҙың бик аҙы ғына, уларҙың да әле ҡаты яраланғандары ғына, язалаусылар ҡулына эләгә, сөнки башҡорттар әсирлеккә төшөүгә ҡарағанда үлемде өҫтөнөрәк күрә. «Ҡулгә ҡасҡан ошо яуыздарҙан мин саҡ-саҡ ике кешене генә тере килеш тота алдым, был ҡырағайҙарҙың һәр ҡайһыһы бирелгәндән үлгәнең артығыраҡ, тип ҡысҡыра», — ти асыуы ҡабарған И. И. Михельсон[3]). Күп йылдар үткәс, 1791 йылда, ә унан ары 1793 йылда, офицер чинына үҙенең хоҡуҡтарын нигеҙләп, Мөҡсин Әбдесәләмов Екатерина II-гә биргән үтенес ҡағыҙында: «Мин ул «яһил»дың уң ҡулы — Салауат Юлаевты тотоп властарға бирҙем», — тип яҙа, ә уның ҡустыһы йөҙ башлығы Ямғур шулай уҡ ҡәтғи итеп: «Яуыз-

---

[1] ЦГВИА, ф. 20, д. 1235, л. 587, 615.

[2] Михельсондың 1774 йылдың 13 майында генерал Щербатовҡа рапорты. — «Крестьянская война...» китабында. 144-се бит.

[3] Михельсондың 1774 йылдың 22 майында генерал Щербатовҡа рапорты. — «Крестьянская война...» китабында, 154-се бит.

дың енәйәттәше башҡорт Салаватка Юлаевты тотҡанда мин дә бар инем — уны мин тоттом», — тип белдерә [1].

Мөксин менән Ямғур Әбдесәләмовтар, Салауатты тотоп, үҙенең командаһы менән килеп өлгөргән поручик Лесковскийға тапшыра, поручик был турала шунда уҡ үҙенең командирына хәбәр итә. Хәбәргә Аршеневский шул тиклем шатлана, ул, әсирҙе үҙенә алып килгәнде лә көтмәйенсә, бер нисә сәғәттән һуң отряды менән был хәл булған урынға барып та етә һәм Ҡалмыҡ ауылында урынлаша. Ошонда Салауат өҫтөнән суд-тикшереү процесын асҡан һәм дөйөм алғанда 339 көн дауам иткән беренсе һорау алына.

Салауат Юлаевтан тәүге һорау алыу протоколы һаҡланмаған. Салауаттың һорау алғанда нимә һөйләгәнен беҙ ул саҡта Салауат һәм Юлай Аҙналин өҫтөнән тикшереү алып барған Өфө провинция канцелярияһының махсус һорауына Аршеневскийҙың 1775 йылдың 6 майында генерал Фрейманға рапортында килтерелгән бик ҡыҫҡа өҙөктәр буйынса ғына хөкөм йөрөтә алабыҙ [2]. Салауаттың һорау алғанда һөйләгәндәрен яҙғанда, Аршеневский рапортының ҡыҫҡалығы, беҙҙең ҡарашҡа, шуның менән аңлатыла: беренсенән, Фрейманға рапорт ебәргәндә, Аршеневский, Салауатты ҡулға төшөрөп, унан һорау алғандан һуң, шунда уҡ Өфөгә ебәрелгән протоколдың уларҙа барлығын белгән (май рапортында был хаҡта туранан-тура күрһәтелә), ә икенсенән, үткән ярты йыл ваҡытта Салауаттың һорау алғанда һөйләгәндәренең ҡайһы бер деталдәре подполковниктың хәтеренән юйылмаған әле. Шуға күрә Салауат кем тарафынан һәм ҡасан тотола тигән тура һорауға, Аршеневский Салауаттың һорау алғанда һөйләгәндәренең төп йөкмәткеһен төшөрөп ҡалдырып, әсирҙең бирелергә йыйынмауы, эҙәрлеүҙәрҙән ҡаҙаҡ далаларында йәшеренергә ҡарар итеүе тураһында белдереүенә иғтибарҙы туплаған [3]. Унан ары Аршеневский Салауат менән уның атаһын «кешелекһеҙлектә», «ҡанһыҙлыҡта» ғәйепләй, йәнәһе, Салауаттың әсирлеккә алыныуын башҡорт халҡы хуплап ҡаршы алды, тип әшәке яла яғыуҙарҙан да тартынмай. Аршеневскийҙың ошо тәүге һорау алыуы тураһында Салауат һуңыраҡ Мәскәүҙә, Сенаттың Йәшерен экспедицияһында, хәтеренә төшөрә, ул саҡта мине таяҡ менән туҡманылар, тип тә өҫтәй [4]. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Салауаттан Ҡалмыҡ ауылында һорау алыу тураһында башҡа мәғлүмәттәр һаҡланмаған. Аршеневскийҙың артабанғы рапорттарында Салауатты башҡорт старшинаһы [5] тип атауына ҡарап (ысынында

---

[1] ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 101, 102, 110; ф. 13, оп. 1/107, св. 148, л. 297—298. Салауат Юлаевты ҡулға алыу тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *Гвоздикова И. М.* Новые документы об аресте Салавата Юлаева. — История СССР, 1978, № 5, 141—146-сы биттәр; *Шул уҡ автор.* Салауатты кемдәр тотторған. — Ағиҙел, 1978, № 8, 120—124-се биттәр.

[2] Крестьянская война..., 320—321-се биттәр.

[3] Шунда уҡ.

[4] Шунда уҡ, 302-се бит.

[5] Аршеневскийҙың 1774 йылдың 5 декабрендә П. С. Потемкинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 50. Аршеневскийҙың 1774 йылдың 30 ноябрендә Скалонға рапорты. — Шунда уҡ, д. 627, ч. 12, л. 274.

иһә Салауаттың ундай званиеһы булмай) фекер йөрөткәндә, ул ентекле тикшереү үткәрмәгән, сөнки тикшереүҙең башы һорау алыныусының биографик мәғлүмәттәрен аныҡ билдәләүҙән торорға тейеш ине.

1774 йылдың 25 ноябрендә Салауаттан һорау алыу протоколы Аршеневскийҙың рапорты менән бергә Өфөгә генерал Фрейманға ебәрелә. Икенсе көндө Фрейман Салауатты әсиргә алыу тураһында генералдар А. В. Суворов менән А. Д. Скалонға хәбәр итә [1]. Был турала хәбәр 2 декабрҙә баш командующий П. И. Панинға барып етә. Ул «баҫтырылған боланың төп етәкселәренән» әсиргә алынған иң һуңғыһын нисек язаларға күрһәтмәләр һорап, кисекмәҫтән әбей батшаға мөрәжәғәт итә. Панин, «башҡорт халҡының иң баш етәкселәре» Салауат менән уның атаһы Юлай Аҙналин өҫтөнән тикшереү барышында уларҙың ни дәрәжәлә ғәйепле булыуҙарын билдәләп кенә ҡалмай, бәлки башҡорттарҙың восстаниела ҡатнашыу сәбәптәрен, уларҙың Пугачев һәм баш күтәргән ҡаҙаҡтар менән бәйләнешен асырға кәрәклеге тураһында ла үҙ фекерҙәрен әйтә. Салауат менән Юлай, Панин фекере буйынса, «халыҡты киләсәк ваҡыттарҙа ҡурҡыуҙа тотоу өсөн, башҡорт халҡының йөрәгендә язаланырға» тейеш. Ул Салауатты ҡулға алғанда батырлыҡ күрһәткән поручик Лесковскийға капитан званиеһы биреүен белдерә [2]. Үҙенең реляцияһына генерал-аншеф Салауатты ҡулға алыу һәм Юлайҙы тотоу шарттары ентекләп яҙылған донесениеһын теркәй [3].

Салауаттың исеме Екатерина II-гә 1774 йылдың февралендә, язалау ғәскәрҙәре командующийы генерал-аншеф А. И. Бибиковтың [4] донесениеһы менән бергә Пугачев атаманы И. С. Кузнецовтың, полковник Салауат Юлаевтың һәм уларҙың көрәштәштәренең ҡалаларҙы баш күтәреүселәр отрядтарына үҙ иректәре менән тапшырыу тураһында 1774 йылдың 20 ғинуарында Көңгөр властарына һәм халҡына мөрәжәғәтенең төп нөсхәһе тапшырылғас, билдәле була [5]. Был документ аҙ һанлы башҡа документтар иҫәбендә әбей батшаның 11 ғинуарҙағы именной (үҙе ҡул ҡуйған) указы һәм Хәрби коллегияның 1774 йылдың 4 ғинуарҙағы указы (Пугачевтың һәм уның көрәштәштәренең ҡулға эләккән документтарын юҡ итеү тураһында) ғәмәле аҫтына тик шуның өсөн генә эләкмәй, сөнки Бибиков был документта «сая тәүәккәллектең» сағылышын күрә һәм уның менән әбей батшаны таныштырмаҡсы була. Һуңыраҡ Екатерина II хөкүмәт ғәскәрҙәренең башҡа командующийҙарының һәм йәшерен комиссиялар начальнигы П. С. Потемкиндың донесениеларынан Салауаттың һуғыштағы

---

[1] А. В. Суворовтың 1774 йылдың 1 декабрендә П. И. Панинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 490, ч. 2, л. 226.

[2] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 195-се бит.

[3] Крестьянская война..., 412-се бит.

[4] Донесение Бибикова Екатерине II от 29 января 1774 г. — Материалы для истории Пугачевского бунта. *Грот Я. К.* «Труды» китабында. 4-се том, 508-се бит.

[5] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 249—250-се биттәр.

уңыштарын һәм хәрби начальниктарҙың уның тураһында «Пугачевтың танылған яраны», «башҡорт халҡы араһында хәҙер төп ҡотортоусы» тигән фекерҙә тороуҙарын белә[1]. Екатерина Паниндың реляцияһын (1774 йылдың 5 декабрендә) Мәскәүҙә Пугачев һәм уның көрәштәштәре өҫтөнән тикшереү, ә унан ары суд буйынса күрһәтмәләр биреү менән мәшғүл булған көндәрҙә ала. 1775 йылдың 27 ғинуарында ғына әбей батша Панинға Салауат менән уның атаһын Мәскәүгә, Сенаттың Йәшерен экспедицияһына оҙатыу тураһында бойороҡ бирә[2].

Салауат Юлаевты ҡулға алыу тураһында донесение килеү менән үк, Панин 1774 йылдың 6 декабрендә Аршеневскийға шундай әмер бирә: «Яуыз Салаватканы, уның менән бергә ҡулға алынған есаулды, писарҙы һәм ике башҡортто... айырыуса беренсеһен, ҡулдарын, аяҡтарын бығаулап, ҡарауыл аҫтында һис кисекмәҫтән Ҡазанға, ундағы губернатор әфәндегә оҙатырға[3]. Шул уҡ көндө Тимашевҡа, Силәбелә уның ҡарамағында һаҡ аҫтында булған Юлай Аҙналинды ла «тимер бығауҙарға бығаулап ҡарауыл аҫтында» Ҡазанға оҙатыуҙы талап итеп, ордер ебәрелә. Панин, Салауат менән Юлайға ҡулаҡта һәм бығау кейҙерергә һәм стенаға шаҡарып сынйырлап ҡуйырға әмер бирелеүен һәм, «улар хаҡында йә император ғали йәнәптәре йәки мин үҙем хәл иткәнгә тиклем», уларҙы һаҡлауҙы үҙең күҙәт, тип Ҡазан губернаторын иҫкәртеүҙе кәрәкле таба[4].

16 декабрҙә Аршеневский Салауат Юлаевты һәм уның менән бергә тотолған Раҡай Ғәлиевте, Себер юлы Тырнаҡлы волосы Ҡарапсаул ауылы башҡортон, баш күтәреүселәр отряды есаулын, уның ҡустыһы, Салауат отряды писары Әбдрәшит Ғәлиевте, Себер юлы Ҡара Табын волосы Йәғәфәр ауылы башҡорто Юртым Аҙыловты һәм Себер юлы Әйле волосы Ҡадир ауылы башҡорто Зәйнәш (Әниәш) Сөләймәновты[5] Ҡазанға оҙата. Шуны ла әйтергә кәрәк, уларҙы оҙата барырға Владимир йәйәүле полкы поручигы Х. Щиц отрядына ҡушыла, уның составына Мөксин Әбдесәләмов командаһының йөҙ башлығы Ямғур Әбдесәләмов етәкселегендәге бер өлөшө лә инә[6].

1775 йылдың февраль башында Салауат Ҡазан губернаторы П. С. Мещерскийға килтерелә, ә 5 февралдә ул Ҡазан йәшерен комиссияһына эләгә, бында элекке көнөн генә Юлай Аҙналин да килтерелгән була. Баш күтәреүселәрҙе эҙәрләүҙәрҙең һәм яҙалау-

---

[1] Донесение Щербатова от 20 мая 1774 г.; донесение П. С. Потемкина от 17 августа 1774 г.; реляция П. И. Панина от 5 декабря 1774 г. «Крестьянская война...» китабында, 150, 225, 265-се биттәр.

[2] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 200-сө бит.

[3] ЦГАДА, ф. 1274, д. 200, л. 345 и об.

[4] Шунда уҡ.

[5] А. В. Суворовтың 1774 йылдың 29 декабрендә П. И. Панинға рапорты.— ЦГАДА, ф. 1274, д. 128, л. 23.— Ҡазан йәшерен комиссияһы колодниктарының Именной исемлеге.— Шунда уҡ, ф. 6, д. 507, ч. 3. л. 121.

[6] Поручик Х. Щицтың 1775 йылдың 31 ғинуарында Ямғур Әбдесәләмовҡа биргән аттестаты.— ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 113.

ҙарҙың ошо учреждениеһы төрмәһендә ата һәм ул, туғанлыҡ һәм рухи яҡынлыҡ, уртаҡ ынтылыштар һәм халыҡ көрәше эшенә би релгәнлек ептәре менән бәйләнгән ике кеше, осраша. Өс ай элек һуғыш ҡырҙарында айырылышҡан һәм бына хәҙер тимергә бығауланған, һорау алыуҙарҙан, арестант этаптарынан һәм төрмә ғазаптарынан йонсоған ике тотҡон бер-береһенә ҡарай. Уларҙың яҙмышы бөтөнләйгә батша чиновниктары ҡулына күсә. П. С. Потемкин, Салауат өҫтөнән тикшереү эшен уға тапшырырҙар, тип өмөтләнә. 1774 йылдың 20 ноябрендә ул Салауат Юлаевты, Ҡинйә Арыҫлановты, Юлай Аҙналинды, Бәхтиәр Ҡанҡаевты һәм «башҡа мөһим енәйәтселәрҙе»[1] Ҡазан йәшерен комиссияһына мотлаҡ килтереү тураһында Ырымбур губернаторы Рейнсдорпты иҫкәртеп ҡуя. Әбей батшаның талабы буйынса Мәскәүгә Пугачев өҫтөнән тикшереүҙә ҡатнашлыҡ итергә киткәндә, Потемкин, Ҡазан йәшерен комиссияһына, уның иҫәбе буйынса, үҙҙәренең ғәйептәрен танып, тиҙҙән властарға бирелергә тейеш булған «иң төп боласыларҙы» һәм беренсе сиратта Салауат Юлаевты, Мәскәүгә оҙатырға бойороҡ бирә; «улар тураһында бынан императрица ғали йәнәптәренә хәбәр итеп тороуҙы бәхет тип иҫәпләйәсәкмен»[2] ти. Йәшерен комиссияның Ҡазанда ҡалған ағзалары, Салауат эше буйынса шаһиттар булып ирекле рәүештә килгән йәки яҙалау отрядтары командирҙары тарафынан ебәрелгән башҡорт старшиналарын 1774 йылдың декабрендә бында ҡалдырып, Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү эшенә әҙерләнәләр[3]. Йәшерен комиссия, баш күтәреүселәрҙән һорау алғанда, Салауаттың һуғышсан эшмәкәрлеге тураһында байтаҡ мәғлүмәт туплап өлгөрә, ә баш күтәреүселәрҙең ҡулға төшкән документтары нигеҙендә комиссияла төҙөлгән күренекле пугачевсылар алфавитында шулай яҙылған: «Юлаев Салауат, яуыздар полковнигы һәм Көңгөр ҡалаһына енәйәтле өндәмәгә ҡул ҡуйған баш старшина»[4].

Екатерина II-нең 1775 йылдың 27 ғинуарындағы бойороғон Панин алғанға тиклем, Салауат Юлаевтың эше шул хәлдә була. Әбей батшаның рескриптын алғас, Панин Ҡазан губернаторына Салауат менән уның атаһын Мәскәүгә Йәшерен комиссияға оҙатырға тәҡдим итә, һаҡсылар командирына «ошо мөһим колодниктарҙы ҡасыуҙан һәм һәр төрлө зарарланыуҙан һаҡлау өсөн»[5] бик ныҡ күҙәтергә бойороҡ бирә. 12 февралдә курьер П. С. Мещерскийға баш командующийҙың бойороғон килтерә, ә икенсе көндө Салауат атаһы менән 8 почта атында, 2-се гренадер полкы поручигы

---

[1] ЦГАДА, ф. 1100, д. 13, л. 199.
[2] Крестьянская война..., 264-се бит.
[3] Ҡазан йәшерен комиссияһының 1775 йылдың 13 ғинуарында П. С. Потемкинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3. л. 67, 84.
[4] ГПБ ОР, F. IV, д. 668, л. 32.
[5] Крестьянская война..., 274-се бит.

М. Титовтың[1] бер унтер-офицерҙан һәм 8 гренадерҙан[2] торған командаһы һағы аҫтында оҙатыла.

Салауат Юлаевтың ике ай ярым буйы дауам иткән төрмә ғазаптарының башланғыс этабы шуның менән тамамлана, ошо ваҡыт эсендә ул подполковник Аршеневскийҙың поход канцелярияһында һорау алыуға дусар ителә. Аршеневский командаһында Шәрип ауылында, унан ары Ҡазан губернаторы Мещерскийҙа һәм Ҡазан йәшерен комиссияһында һаҡ аҫтында тотола. Үкенескә ҡаршы, Салауаттың әсирлектә булыуының тәүге айҙарын яҡтыртыусы документтарҙың беҙгә тулы составында килеп етмәүен билдәләп үтергә тура килә. Беренсе һорау алыу протоколы[3], Аршеневский менән уның командиры генерал Фреймандың яҙышҡан ҡағыҙҙарының шаҡтай өлөшө, шулай уҡ ошо хәрби начальниктарҙың поход канцелярияларындағы 1774 йылдың ноябренән 1775 йылдың ғинуары араһындағы башҡа документтары юғалған. Салауат Юлаев тормошоноң ошо осорон өйрәнеү өсөн генерал-аншеф Паниндың поход канцелярияһының һаҡланып ҡалған материалдары, уның Екатерина II менән яҙышҡан ҡағыҙҙары, Аршеневскийҙың генералдар Фрейман, Скалон һәм Потемкинға рапорттары һәм ҡайһы бер башҡа документтар хеҙмәт итә ала. Шулай ҙа беҙгә мәғлүм булған сығанаҡтар Салауатты әсиргә алыу шарттары һәм, Аршеневскийҙа тәүге һорау алғанда, уның һөйләгәндәренең йөкмәткеһе менән бәйле булған һорауҙарға яуап тураһында тик фараз итергә генә мөмкинлек бирә. Төрмәләге беренсе аҙналарында Салауаттан Өфөлә генерал Фрейман һәм Ҡазанда губернатор Мещерский (телдән, протокол төҙөмәйенсә) һорау алғандыр ҙа, бәлки, әммә был турала һаҡланып ҡалған сығанаҡтарҙа бер ниндәй ҙә мәғлүмәттәр табылманы.

§ 3. СЕНАТТЫҢ ЙӘШЕРЕН ЭКСПЕДИЦИЯҺЫНЫҢ МӘСКӘҮ БҮЛЕКСӘҺЕНДӘ САЛАУАТ ЮЛАЕВ ЭШЕ БУЙЫНСА ТИКШЕРЕҮ

1775 йылдың 19 февралендә Сенаттың генерал-прокуроры А. А. Вяземский Ҡазан губернаторына Салауат Юлаев менән уның атаһы Мәскәүгә килтерелде, тип хәбәр итә[4]. Ә етенсе көндә,

---

[1] Титов М. (1728 йылда тыуған), сығышы ваҡ дворяндарҙан, 8 крепостнойы була, 1756—1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ һуғышта һәм 1768—1774 йылдарҙағы рус-төрөк һуғыштарында ҡатнаша, 1772 йылдан поручик, 1774 йылдың ғинуарынан Пугачев отрядтарына ҡаршы язалау операцияларында ҡатнаша (1774 йылдың формуляр исемлеге. — ЦГВИА, ф. 490, оп. 3/214, д. 150, л. 500).

[2] Крестьянская война.., 299-сы бит. Салауат Юлаевты һәм уның атаһын Ҡазан йәшерен комиссияһынан ҡабул итеп алыу тураһында Титовтың 1775 йылдың 13 февралендәге распискаһы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 102.

[3] Был документ тураһында белдереү Ҡазан йәшерен комиссияһының 1775 йылдың 13 февралендә П. С. Потемкинға биргән рапортында бар, унда Салауат һәм Юлай Аҙналиндың «присылкаларын һәм допростарын» комиссия Мәскәүгә үҙенең начальнигына ебәреүе тураһында хәбәр ителә.— ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 95.

[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 2.

25 февралдә, Сенаттың Йәшерен экспедицияһы Салауаттан һорау алыуға тотона. Тикшереүҙе Сенаттың генерал-прокуроры Вяземский, Йәшерен экспедицияның Мәскәү бүлексәһе башлығы генерал-губернатор М. Н. Волконский һәм экспедицияның обер-секретары С. И. Шешковский алып бара.

Шуны ла иҫкә төшөрөп үтәйек, бынан ике ай элек Е. И. Пугачевҡа һәм уның көрәштәштәренә яза биреүселәр ҙә шул уҡ кешеләр була. Екатерина II-нең һәм уның Мәскәүҙәге эмиссарының күрһәтмәләрен һүҙһеҙ үтәүсе Волконский тикшереү комиссияһының председателе һәм судьяларҙың береһе ролендә сығыш яһай; Шешковский Пугачевтан һәм тикшереү аҫтында булғандарҙың башҡаларынан үҙе һорау ала; әбей батша тарафынан Мәскәүгә махсус рәүештә ебәрелгән Вяземский восстание етәкселәре өҫтөнән суд-тикшереү процесына дөйөм етәкселекте ғәмәлгә ашыра. Өсөһө лә әбей батшаға ҡолдарса бирелгән кеше була һәм уның айырым ышанысы менән файҙалана. Шуны әйтеү ҙә етә, батша хөкүмәтенең үҙ посында 28 йыл буйы ҡалып килгән беренсе һәм берҙән-бер министры Вяземскийҙы Екатерина II үҙенең шәкерте тип атай, ә Волконский менән, иң ышаныслы кешеһе күреп, күп йылдар буйы яҙыша, тырышып эшләгәне өсөн уны йыш ҡына маҡтауға күмә [1].

Шешковский шәхесенә айырыуса туҡталып үтергә кәрәк. Ул хеҙмәтен ябай «асессор» чинында башлай; Пугачев менән уның ярандарынан һорау алғанда үҙен күрһәткәне өсөн, ул статский советник итеп үрләтелә, ә 90-сы йылдарҙа, карьераһы аҙағында, уны йәшерен совстник чины менән наградлайҙар. Ул — А. Н. Радищев, Н. И. Новиков, Ф. В. Кречетов һәм башҡа прогрессив эшмәкәрҙәрҙе тикшергән кеше — Шешковский ҡырҡ йылдан ашыу эҙәрләү һәм тикшереү, ҡулға алынғандарҙан һорау алыу һәм уларҙы ғазаплау буйынса һәләтлеген камиллаштыра, бының өсөн уның «дәүләт инквизиторы һәм привилегиялы сыбыртҡы менән һуҡтырыусы» тигән яманаты алыҫҡа тарала [2]. Императрица Шешковскийҙың «һәләтлектәрен» юғары баһалай. 1774 йылдың 27 сентябрендә П. С. Потемкинға яҙған хатында ул: Шешковскийҙың «ябай кешеләр менән мөнәсәбәттә үҙенсәлекле һәләтлеге бар, бик ҡыйын эштәрҙе лә һәр ваҡыт бик уңышлы ҡарай һәм аҙағына тиклем еткерә»[3], — тип билдәләй. Салауат Юлаев та бына ошо тырыш һәм йәшерен эштәр өсөн ышанысլы, «серҙе ала белгән» кеше ҡулына эләгә.

Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Пугачев восстаниеһында ҡатнашыуы тураһындағы эште ҡарау һорау алыуҙарҙан

---

[1] Собственноручные письма Екатерины II. — Москвитянин, 1845, № 9, 35, 43, 48-се биттәр; письма государыни императрицы Екатерины II к князю М. Н. Волконскому, 79—184-се биттәр. *Ерошкин Н. П.* Күрһәтелгән әҫәр, 132-се бит.

[2] *Корсаков А. Н.* С. И. Шешковский (1727—1794). Биографический очерк. Исторический вестник, 1885, декабрь, 681-се бит; Записки А. М. Тургенева. — Русская старина, 1886, 52-се том, октябрь; 57—58-се биттәр; *Гольцев В. А.* Законодательство и нравы в России XVIII в. СПб., 1896, 139-сы бит.

[3] Екатерина II и Пугачевщина, 124-се бит.

башлана. Тәржемәсе сифатында суҡындырылған башҡорттарҙан Урал (элекке Яйыҡ) казактары есаулы Иван Гульчихин ылыҡтырыла, ул, күрәһең, Мәскәүгә Яйыҡ ҡалаһынан һәм Ҡазандан әсиргә төшкән пугачевсыларҙы оҙатып барған һаҡсылар командаһы составында килә [1]. Тикшереү аҫтындағыларҙың күрһәтеүҙәре Гульчихин һүҙҙәренән протоколға рус телендә яҙыла.

Салауат менән Юлайҙан бер көндө, 1775 йылдың 25 февралендә, һорау алалар.

Салауат күп һүҙле булмай. Ул 1773 йылдың ноябрендә баш күтәреүселәргә нисек ҡушылыуы тураһында һөйләй, унан ары Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе һәм икенсе осоронда (1773 йылдың ноябре — 1774 йылдың июне) үҙе ҡатнашҡан күп кенә яуҙарҙы әйтә, һәм «үҙ ихтыярым менән һәм үҙемдән-үҙем бер кемде лә үлтермәнем» [2] тип өҫтәй. Ул, баш күтәреүселәрҙең күпселеге кеүек үк, Пугачевтың батша нәҫеленән сыҡҡанлығына ышаныуын, уны «Российяның ысын батшаһы» итеп ҡабул итеүен, «ундағы бөтә башҡорт ауылдарының уға бирелгән» булыуын әйтеп, үҙенең күрһәтеүҙәре аҙағында ҡылған эше өсөн үкенеүен белдерә һәм, ғәйебен танып, императрицанан үҙен «әсәләрсә ярлыҡауын» һорай.

Ләкин Йәшерен экспедиция Салауаттың «таныҡандары ысынбарлыҡта бөтәһе лә шулай булыуына», күрһәтеүҙәренең дөрөҫлөгөнә шикләнә, һәм документтарҙағы фашлаусы дәлилдәргә һәм шаһиттарҙың күрһәтеүҙәренә мөрәжәғәт итергә була. Бында инде П. С. Потемкин шаҡтай хеҙмәт күрһәтә. Уның талап итеүе буйынса, Ҡазан йәшерен комиссияһының тикшереү эштәренән Салауат Юлаевтың восстаниела ҡатнашыуының характеры тураһында мәғлүмәттәрҙән торған күсермәләр эшләнә. Был ваҡытҡа инде бөтөрөлгән комиссияның материалдарына мөрәжәғәт итеп, уның элекке хеҙмәткәрҙәре ун баш күтәреүсенән һорау алыу протоколдарында Салауат тураһында әйтелгәндәрҙе таба һәм «Йәшерен комиссиялағы түбәндә яҙылған кешеләрҙән һорау алыу ваҡытында күсереп алынған һәм Салауат Юлаевҡа ҡағылған күрһәтеүҙәр» тигән исем аҫтында йыйылма документ әҙерләй [3].

Был документҡа ниндәйерәк мәғлүмәттәр ингән һуң? Пугачевтың атаманы И. Н. Белобородовтың күрһәтеүҙәренән Салауаттың ике меңле отряды менән Башҡортостанда һәм Уса эргәһендә бергәләп хәрәкәт итеүе тураһында мәғлүмәттәр алына. Ҡазак ғәскәре

---

[1] И. Гульчихин үҙенең властарға тоғрологон күп тапҡыр иҫбат итә. Мәҫәлән, 1772 йылда Яйыҡ казактары восстаниеһы ваҡытында ул урталыҡта торған төркөм яғында була. Ҡазактар июнь башында генерал Фрейман ғәскәрҙәренә ҡаршы сыҡҡас, Гульчихин ғәскәр араһында баш күтәреүселәрҙе «монарх власына ҡаршы бармаҫҡа өгөтләй башлай; ләкин бында уны тыңламайҙар һәм шунда уҡ, халыҡ язаһы итеп, атаман Ульянов әмере буйынса, уны ҡамсы менән һуҡтыралар һәм тәгәрмәскә бәйләйҙәр». (Баш күтәреүселәр полковнигы И. А. Пономарев менән казак П. И. Бугаевтың 1772 йылдың июлендә Ырымбурҙа тикшереү комиссияһындағы күрһәтеүҙәре протоколдарынан. — ЦГВИА, ф. 8, оп. 4/93, д. 1536, л. 172, 199).

[2] Крестьянская война..., 302-се бит.

[3] Шунда уҡ, 305-се бит.

писары, баш күтәреүсе казактар атаманы М. Е. Мальцевтан һорау алыу протоколында тикшереүселәрҙең иғтибарын Салауаттың Красноуфимскиға килеүе, унан пушкалар һәм дары алыуы, отрядты Красноуфимск казактары менән тулыландырыуы һәм Көңгөргә һөжүм итеүе тураһындағы мәғлүмәттәр йәлеп итә. Өфө өйәҙе Бурғаш ауылынан мари Изибай Аҡбаевтың (Янбаевтың) күрһәтеүҙәренән бригадир Салауат Юлаевтың уға нисек полковник чины биреүе тураһында мәғлүмәттәр яҙып алына. Өфө өйәҙе Ҡыҙылъяр ауылы башҡорто Шәрип Сарҡаев үҙенең күрһәтеүҙәрендә Бөрөнө ҡамаған отрядҡа Салауаттың ярҙам ебәреүе тураһында әйтә. Башҡа пугачевсылар, Өфө өйәҙе Балтач ауылынан удмурт Москов Якимов, Өфө өйәҙе Үҙәк ауылынан мари Бохармәт Болхаиров, Өфө өйәҙе Елпачиха ауылынан башҡорт муллаһы Һөҙһөт Темәсев, Өфө өйәҙе Иҫке Төртөк ауылынан мари Иштүбай Ишбулатов, Көңгөр өйәҙе Озерки ауылынан крәҫтиән Мамлыгин һәм Ҡазан өйәҙе Алведино ауылынан крәҫтиән И. Васильев һорау алғанда Салауаттың баш күтәреүселәргә ҡушылырға өндәүе тураһында, уның отрядтарына крәҫтиәндәрҙе йыйыу тураһында һөйләйҙәр [1].

Был күрһәтеүҙәр бөтәһе бергә Салауат Юлаевтың Башҡортостанда һәм Кама буйында баш күтәреүселәр хәрәкәтен йәйелдереүҙә күренекле роль уйнауына, шулай уҡ был районларҙа 1774 йылдың ғинуарында—июнендә һуғыш операцияларында уның бик актив ҡатнашыуына дәлил булып тора [2].

Тикшереүгә баш күтәргән ун кешенең «Салауат Юлаев өҫтөнән күрһәтеүҙәрен» тапшырыу менән бер үк ваҡытта генерал Потемкин тарафынан ғәйепләүҙең ышаныслы шаһиты ла ебәрелә. 1775 йылдың 4 мартында Волконскийға яҙған хатында Потемкин былай тип хәбәр итә: «Шуның менән бергә уның [Салауаттың] мутлыҡ эштәрен яҡшыраҡ иҫбат итеү өсөн, ғәйепләү дәлиленә өҫтәргә башҡорт ғәскәрҙәренең Ҡолой исемле тоғро старшинаһын ебәрәм» [3]. Был Себер юлы Ҡара Табын волосы старшинаһы Ҡолой Балтачев була.

Властарҙың ышанысын ул нимә менән ҡаҙана һуң? Билдәле булыуынса, шаһиттың социаль хәлен феодаль суд нығ иҫәпкә алған. 1716 йылғы Хәрби уставта былай тип әйтелә: «Был һүҙҙәр иң һәйбәт дәлил: ир затынан булған шаһит, әлбиттә, ҡатындарҙан

---

[1] Крестьянская война..., 305—307-се биттәр. Шулай уҡ күрһәтелгән баш күтәреүселәрҙең дүртеһенән һорау алыу протоколдарының тулы тексын ҡарағыҙ: И. Н. Белобородовтың 1774 йылдың 30 июлендәге күрһәтеүҙәре. «Пугачевщина» китабында, 2-се том, 325—335-се биттәр. Москов Якимовтың, Шәрип Шарҡаевтың, Изибай Аҡбаевтың 1774 йылдың октябрендәге күрһәтеүҙәре. «Крестьянская война...» китабында, 249—254-се биттәр.

[2] Тикшереүселәр Салауат Юлаевтың 1773 йылдың ноябрендә — декабрендә Ырымбур эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнашыуын яҡтыртыусы документтарҙы таба алмай.

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 3.

яҡшыраҡ, бай — фәҡирҙән, уҡымышлы — наҙандан, дин әһеле — донъяуи заттан өҫтөнөрәк була»[1].

Ошо закон положениеларына таянып эш иткән тикшереүселәрҙең позицияһынан ҡарағанда, Салауат Юлаев эше буйынса ғәйепләү шаһитын һайлап алыу нигеҙле генә түгел, бик уңышлы ла була. Ҡолой Балтачев бындағы старшиналарҙың юғары ҡатламының иң йоғонтоло вәкилдәренең береһе була[2]. Крәҫтиәндәр һуғышы йылдарында ул, хөкүмәткә тоғро ҡалып, Өфөнө баш күтәреүселәрҙән һаҡлай, Бөрө, Елдәк крепосы, Әңгәсәк заводы эргәһендә, Борай ауылы янында уларға ҡаршы һуғыша, пугачевсыларга ҡаршы репрессияларҙа ҡатнаша[3]. Ҡолойҙоң язалау эшмәкәрлеге халыҡтың хаҡлы нәфрәтен тыуҙыра: уның мөлкәтен тартып алалар, йортон яндыралар, ғаилә ағзаларын үлтерәләр. Хәрби тәжрибәһе, хатта ул һуғыштарҙа алты тапҡыр ауыр яраланған булһа ла, ә «Пугачев, әгәр ҙә кем уны, Ҡолойҙо, тотоп уға килтерә икән, 500 һум бирергә вәғәҙә итһә лә»[4], Ҡолойҙоң үҙен һәләк булыуҙан ҡотҡарып ҡала. Ҡолой Балтачевтың элекке һәм яңы «хеҙмәттәрен» иғтибарға алып, Өфө воеводаһы А. Н. Борисов, «юғарғы команданың ҡарауы буйынса, император гали йәнәптәренең юғары мәрхәмәте билдәләре менән»[5] наградлау өсөн, уны Ҡазанға, Потемкинға ебәрергә мөмкин, тип таба. Ҡолойҙоң «бик тырышып һәм ихлас» хеҙмәт итеүе тураһында Өфө провинция канцелярияһының ентекле донесениеһы менән танышҡас, Пугачев эше буйынса тикшереүҙә ҡатнашыу өсөн ашығыс рәүештә Мәскәүгә саҡырылған Потемкин Ҡолойҙо үҙе менән алып барырға ҡарар итә. Тикшереү

---

[1] ПСЗ I, 5-се том, № 3006, 399-сы бит.

[2] 1761 йылдан 1773 йылға тиклем Ҡолой Балтачев күп тапҡырҙар хәрби походтарҙа була, крепостарҙың Себер һәм Ырымбур линияларында хеҙмәт итә. 1771—1773 йылдарҙа Польшаға ебәрелгән өс меңлек башҡорт командаһына етәкселек итә, Польша конфедераттарына ҡаршы һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнаша. Польшала Ҡолой ғәскәрҙәр командующийы генерал-аншеф А. И. Бибиков тарафынан көмөш тирәсле ҡылыс менән бүләкләнә. Башҡортостанға ҡайтыу менән, уны бик оҙаҡ «баш начальник» тип йөрөтәләр. Ҡолой иң бай башҡорттарҙың береһе була, был 1780 йылда төҙөлгән «Старшина Ҡолой Балтачев имениеһының өйөнән таланған әйберҙәрҙең теҙмәһе», шулай уҡ уның ростовщиклыҡ операциялары документтары менән раҫлана. — ЦГВИА, ф. 20, д. 954, л. 21—25; ГАОО, ф. 3, д. 124, д. 141, л. 145—148; ЦГА БАССР, ф. 386, оп. 1, д. 1, л. 296. Материалы по истории Башкирской АССР. М., 1960, 5-се том, 552—554-се биттәр.

[3] Был Өфө коменданты полковник С. С. Мясоедов, подполковниктар Михельсон һәм Рылеев, поручик Яворский аттестацияларында күрһәтелә; Ҡолойҙоң язалау эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәр шулай уҡ губерна һәм провинция властарының яҙышыу ҡағыҙҙарында, баш күтәреүселәрҙең ике документында — баш күтәреүселәр отрядтары командирҙарының Е. И. Пугачевтың Хәрби коллегияһына 1774 йылдың 2 июлендә биргән рапортында һәм баш күтәреүселәрҙең Ҡолойға һәм башҡа тоғро старшиналарға язалау операцияларын туҡтатыуҙы талап иткән мөрәжәғәттә (1774 йыл, 31 август) бар. — ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 54, 57; д. 593, л. 102; ГАОО, ф. 3, д. 141, л. 145—148; Крестьянская война..., 39, 47, 157, 200, 228—229, 233-сө биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 124—125-се биттәр.

[4] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 16 октябрендә Ырымбур губернаторы Рейнсдорпҡа рапорты. — ГАОО, ф. 3, д. 141, л. 146.

[5] Шунда уҡ, л. 148 об.

комиссияһына ул саҡта старшинаның хеҙмәте кәрәк булмай, ләкин өс айҙан һуң, 1775 йылдың мартында, Сенаттың Йәшерен экспедицияһында уның күрһәтеүҙәре Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү процесы барышына шаҡтай ҙур йоғонто яһай.

Ҡолой Балтачев 1775 йылдың 4 мартында Салауат һәм Юлай менән күҙләштергәндә шаһит булып һөйләй. Ғәйепләнеүселәр уға яҡшы таныш була. Юлайҙы ул Башҡортостанда ихтирамлы старшина һәм 1771—1773 йылдарҙағы Польша походында ҡатнашыусы кеше тип белә, ә Салауат менән Ҡолойға 1774 йылдың көҙөндә Бөрө һәм Танып йылғалары араһындағы һуғыштарҙа осрашырға тура килә. Бында 1774 йылдың июнендә Ҡолой, Михельсон заданиеһы буйынса, баш күтәреүселәрҙе баҫтыра[1]. Сентябрь урталарында Ҡолой командаһы Салауатҡа ҡаршы ебәрелгән подполковник И. Қ. Рылеевтың язалау ғәскәренә ҡушыла. 22 сентябрҙә Ҡара Танып волосының Нөркә (Нуркино) ауылы янында Салауат Юлаев отрядына ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Был һуғышта Рылеев «Ҡолойҙо батырлығы менән үҙен айырата күрһәтте»[2], тип баһалай. Ләкин Рылеев командаһы баш күтәреүселәр артынан ҡыуып, Елдәк крепосына китеү менән, Ҡолойҙың батырлығы юҡҡа сыға: 26 сентябрҙә ул, башҡа старшиналар менән бергә «мөлкәтле» кешеләр исеменән сығыш яһап, Өфө властарынан үҙҙәренең өйҙәренә яҡын ерҙә «тирә-йүндәге башҡорттарҙы — яман уйлыларын яҡшы тәртипкә килтереү өсөн» ғәскәр ҡалдырыуҙы «илап, ялбарып һорай»[3]. Быға тиклем старшиналар Нөркә ауылы эргәһендә һуғышта ҡатнашҡан була һәм Салауат отрядының ниндәй ҙур юғалтыуҙарға осрауын күрә, шулай ҙа улар Башҡортостандың әле буйһонмаған төньяҡ-көнбайыш районына Салауат Юлаевтың кире әйләнеп ҡайтыуы мөмкин, тип ҡурҡа. Салауатты әсиргә алыу тураһында хәбәр килгәс кенә, йәндәре тыныслана уларҙың. Бына хәҙер Ҡолой Мәскәүҙә, Йәшерен экспедицияла, баш күтәреүселәр етәксеһе менән иҫәпте өҙөү, килтерелгән ҡурҡыныстар һәм бөлгөнлөк өсөн үс ҡайтарыу мөмкинлеген ала. Шундай шаһитты, өҫтәүенә рус телен яҡшы белгән шаһитты, ебәреп, Потемкин Йәшерен экспедицияға ҙур хеҙмәт күрһәтә»[4].

Салауат ҡылған бөтә яуызлыҡтарына ла үкенәме һәм үҙенең ниндәй ҙә булһа яман эшен йәшереп ҡалдырмағанмы икәнлеген белһен өсөн, 25 февралдә һорау алғанда, Салауаттың күрһәтеүҙәренең протоколы күҙләштереү ваҡытында Ҡолой Балтачев өсөн махсус уҡыла. Унан ары Ҡолой «өҫтәмә лә индерә», ғәйепләнеүсе-

---

[1] Крестьянская война..., 200—201, 228—229-сы биттәр.

[2] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 16 октябрендә губернатор Рейнсдорпҡа рапорты. — ГАОО, ф. 3, д. 141, л. 148.

[3] Крестьянская война..., 233-сө бит.

[4] Ҡолой Балтачевтың процеста ҡатнашыуы, властар алдында уның башҡа «хеҙмәттәре» иҫәбендә, генерал-аншеф Паниндың уға 1775 йылдың 7 июлендә маҡтау ҡағыҙы биреүе өсөн нигеҙ була. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 200, л. 617—618. Баш күтәреүселәр тарафынан уға килтерелгән зыянды ҡаплау өсөн, ошо уҡ йылда Сенат ҡарары буйынса уға 2000 һум аҡса бирелә. — Шунда уҡ, ф. 6, д. 516, ч. 3, л. 202 об. (Башҡорт һәм мишәр старшиналарының Сенатҡа үтенес ҡағыҙҙары исемлеге.)

не күп факттарҙы йәшереүҙә фашлай. Уның ғәйепләүҙәре ваҡиғаларҙы тикшереүҙең хронологик тәртибендә өс пункт менән бирелә. Ҡолой, күрәһең, үҙенә билдәле факттарҙы ла, шулай уҡ үҙ күҙе менән күргән кешеләрҙең һөйләгәндәрен һәм халыҡ араһындағы имеш-мимештәрҙе лә хәтеренә төшөрөргә маташҡан.

Ҡолой, иң элек, Пугачев тарафынан Салауатҡа полковник чины бирелеүе фактын һәм уның ғәскәрҙәренең иң ҙур еңеүҙәренең береһен — Уса крепосын алыуын айырып күрһәтә[1]. Унан ары Ҡолой Балтачев, Салауат отряды ауылдарҙы, шул иҫәптән Ҡолой йортон да, таланы, тип белдерә. Үҙенең күрһәтеүҙәренең һуңғы пунктында ул, Пугачевтың Төп ғәскәре Башҡортостан территорияһынан киткәс, Салауаттың ниҙәр ҡылғанын характерлай. Бер нисә һүҙ менән генә Ҡолой Салауаттың иҫтә ҡалырлыҡ портретын бирә, һәм уның «фаш итеүҙәре» арҡаһында Крәҫтиәндәр һуғышы етәксеһенең тоғро һәм әҙмә-әҙлекле көрәштәше Салауаттың һыны ап-асыҡ булып күҙ алдына баҫа: «Пугачев тотолғайны һәм һаҡ аҫтында ине инде, ә һуңыраҡ бындағы бөтә ауылдар тейешлесә буйһондоролғайны, шул саҡта ла Салауат яуызлыҡ эшләүен туҡтатманы, үҙе һымаҡ эшлекһеҙҙәрҙе йыйып алып, тирә-яҡты шундай бөлгөнлөккә төшөрҙө, уның, Салауаттың, исеме был ерҙәрҙә алыҫтарға таралды»[2].

Тикшереүселәр Салауаттан ун пугачевсының «Салауат Юлаев өҫтөнән күрһәтеүҙәре»ндә булған мәғлүмәттәрҙең, шулай уҡ Ҡолой Балтачев үҙенең күрһәтеүҙәрендә килтергән факттарҙың дөрөҫлөгөн таныуҙы талап итә. Салауат өгөтләүҙәрҙән һуң Ҡолой әйткән факттарҙы танырға мәжбүр була һәм хатта быны үҙ ҡултамғаһы менән нығыта[3]. Ләкин таныу бик формаль характерҙа була, был тикшереүҙең бынан һуңғы документтарынан һәм процестың үҙенең барышынан күренә. Мәҫәлән, Йәшерен экспедицияның 1775 йылдың 16 мартындағы билдәләмәһендә былай тиелә: Салауат 25 февралдә һорау алғанда һөйләгәндәрендә ныҡ тора. Ә инде «ун пугачевсының уның өҫтөнән күрһәтеүҙәренә» һәм Ҡолойҙоң ғәйепләүҙәренә килгәндә, асылда, үҙ ғәйептәренән тик һүҙ уның, Салауаттың, баш күтәреүселәр отрядтарына етәкселек итеүе,

---

[1] Билдәле булыуынса, Уса крепосы баш күтәреүселәр ҡулында ике тапҡыр була: 1773 йылдың декабрендә ул Уса юлы Гәйнә волосы башҡорттары Батырҡай Иткинин менән Әбди Абдуллов етәкселек иткән отрядтар тарафынан алына; ә 1774 йылдың 18—21 июндәрендә алғы сафында Салауат отряды ла булған Е. И. Пугачевтың Төп ғәскәре тарафынан алына. Ҡолойҙоң был ваҡиғаларҙың ҡайһыһы тураһында һөйләгәнен асыҡ ҡына әйтеүе ҡыйын. Һүҙ крепосты беренсе тапҡыр алыу тураһында барыуы мөмкин, сөнки 1774 йылдың ғинуарынан Салауаттың отрядтары Башҡортостандың төньяғында, Усанан алыҫ түгел Красноуфимск — Көңгөр районында, хәрәкәт итә; ул саҡта Салауат отрядтарына яңы көстәр өҫтәлә, шуға күрә ул ваҡытта Салауат үҙе булмаған урындарҙағы хәрби уңыштарҙы ла уның исеме менән бәйләйҙәр. Әгәр ҙә инде Ҡолой Усаның Пугачев ғәскәре тарафынан алыныуын күҙ алдында тотһа, был осраҡта инде ул, баш күтәреүселәрҙең еңеүен Салауаттың бер үҙенә генә ҡалдырып, уның ролен аңлы рәүештә арттыра.

[2] Крестьянская война..., 307-се бит.

[3] Шунда уҡ, 308-се бит.

һуғыштарҙа ҡатнашыуы, крепостарҙы алыуы тураһында барған өлөшөн генә таный, әммә ниндәй ҙә булһа «үлтереүҙәрҙә һәм яуызлыҡтар эшләүҙә» үҙ ғәйебен кеҙеләнеп кире ҡаға, тикшереүселәрҙең күрһәтеүе буйынса, уларҙы «танымай»[1]. Ғәйепләүҙең ошо өлөшө буйынса Салауаттың ныҡлы позицияһы Йәшерен экспедицияны эште артабан тикшереү өсөн Мәскәүҙән Ырымбур өлкәһенә күсерергә мәжбүр итә[2].

Ҡолой, Юлай Аҙналинды, күрәһең, элекке дуҫлыҡ тойголарынан сығып, мөлкәтле, баҫымсаҡ старшина итеп ҡылыҡһырлай, уның «яуызлығын күрмәнем» ти. Юлай үҙе баш күтәреүселәрҙе яҡлауын, ә унан ары восстаниела актив ҡатнашыуын йәшерергә маташа, Пугачевта ирекһеҙҙән, «үлемдән ҡурҡып һәм ул яһилдың көсө 15 меңдән ашыу икәнен ишетеп һәм ни бары алты көн»[3] булдым, тип белдерә. Ул Йәшерен экспедицияға улының халыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыуы тураһында ла бер ни ҙә әйтмәй. Юлай, уны команда менән «Ырымбурға тоғро ғәскәрҙәргә ярҙамға ебәрҙем, ә тиҙҙән юлда Салауаттың «яуыздар өйөрөнә эләккәнен» ишеттем, тип иҫкә ала[4].

Ғәйепләрлек дәлилдәрҙе ҡарап бөтөү менән, Йәшерен экспедиция хөкөм ҡарары әҙерләүгә керешә. Ғәмәлдәге суд закондарына ярашлы рәүештә процестың тикшереү өлөшө суд өлөшөнән айырылмағанлыҡтан, хөкөмдө лә шул уҡ чиновниктар сығара. 1716 йылғы Хәрби уставтың «Процестарҙы һәм суд дәғүәләрен ҡыҫҡаса һүрәтләү»ендә ҡаралған «енәйәттәрҙең иҫбатланыуы» күренеп тора. Был енәйәттәр Ҡазан йәшерен комиссияһы документтарынан алынған материалдарҙа (Салауат Юлаев өҫтөнән күрһәтеүҙәр), Ҡолой Балтачевтың Салауат формаль таныРға мәжбүр булған ғәйепләүҙәрендә, уның «үҙ ирке менән ғәйебен таныуында» була. Һаҡланып ҡалған сығанаҡтарҙың торошо буйынса, Салауаттан һорау алыусылар ниндәй юл менән «хәҡиҡәтте эҙләүҙәре», Салауаттың ғәйептәрен «үҙе» таныуына өлгәшеү өсөн, уны нисек яфалауҙары һәм психологик баҫым яһауҙары билдәһеҙ. Йәшерен экспедиция документтарында был турала бер ни ҙә әйтелмәй»[5]. Ләкин Йәшерен экспедицияның халыҡ араһында таралған дәһшәтле яманатына ла, тикшереү алып барылған шарттарға ла иғтибар итмәй булмай. Тимер бығауҙарға бығаулап, ҡот осҡос төрмә камераларында тотоу менән бергә, ғәйепләнеүселәрҙе ғәҙәттә янау һәм ҡурҡытыуҙар, рухына баҫым яһау менән ҡылмаған

---

[1] Крестьянская война..., 309-сы бит.
[2] Шунда уҡ, 309—310-сы биттәр.
[3] Шунда уҡ, 302—305-се биттәр.
[4] Шунда уҡ, 303-сө бит.
[5] Пугачевсыларҙың эштәре буйынса суд-тикшереү материалдарының күпселегендә һорау алғанда ғазаплауҙар тураһында әйтелмәй. Мәҫәлән, А. И. Бибиков, 1774 йылдың мартында Екатерина II-нең, һорау алғанда, уны саманан тыш ҡанһыҙлыҡта ике йөҙлө рәүештә шелтәләп яҙған хатын алғас, Ҡазан йәшерен комиссияһы чиновниктарына «үтә ихлас» һорау алыуҙар үткәреү тураһында күрһәтеүҙәрҙе протоколдар экстракттарында яҙмаҫҡа бойороҡ бирә. — Бумаги императрицы Екатерины II, 396-сы бит.

енәйәттәрен танырға һәм үкенергә мәжбүр итәләр. Хөкөм ҡарары сығарылғандан һуң, Шешковский, хөкөм ителеүселәрҙән, уларҙы ҡабаттан язалау менән ҡурҡытып, экспедициялағы һорау алыу тураһында бер ҡасан да һәм бер кемгә лә һөйләмәйәсәктәренә ҡултамғаларын ала [1].

Салауатҡа ниндәй яза биреү тәңгәлендә судьялар ҡыйынлыҡ кисермәҫкә тейеш ине. Ләкин тикшереү тамамланғандан һуң тик ун икенсе көндә генә тәүге хөкөм ҡарары сығарыла. Йәшерен экспедиция 1775 йылдың 16 мартында Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналин эше буйынса Ырымбур губернаһында өҫтәмә тикшереү үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итә.

Вяземскийҙы, Волконскийҙы һәм әбей батшаның үҙен судтың ахырғы ҡарар сығарыуынан баш тартырға нимә мәжбүр иткән һуң? Улар Салауаттың ихлас күңелдән үкенеүенә һәм күрһәтеүҙәренең тулылығына ышанмай. Хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа үҙенең ҡатнашыуын таныуы ғына ла уны үлем язаһына хөкөм итеү өсөн етерлек нигеҙ булыуын билдәләп, шулай уҡ Ҡолой Балтачевтың күрһәтеүҙәренән һәм Ҡазанда һорау алынған ун баш күтәреүсенең күрһәтеүҙәренән күп кенә факттарҙы асыҡлап, судьялар: «Салауат бында, юғарыла әйтелгәндән башҡа, бер ниндәй үлтереүҙәрҙе һәм яуызлыҡ эшләүҙәрҙе танымай, тип яҙа [2]. Шешковскийҙың «айырыуса һәләте лә» бында ярҙам итмәй. Ә тикшереү материалдары Салауаттың ни тиклем күп нәмәне йәшереп ҡалдырыуы хаҡында уйларға урын ҡалдыра. Шуға күрә судьялар, әйтергә кәрәк, уның тураһында бында һөйләнелеүенсә, «ул ҡылған иң кешелекһеҙ яуызлыҡтарҙы» үҙҙәре күреп шаһит булған кешеләр аша уның иң яуыз эштәрен урында тикшерергә һәм шуның менән фашларға» һәм «был турала уның үҙенең таныуына өлгәшеүҙе» Ырымбур губернаторына тапшырырға ҡарар итәләр. Салауаттың «яуызды ҡулға алғандан һуң тотолоуын, ә ул барыбер үҙенең әшәке йөрәгендә ҡылған енәйәттәре тураһында үкенергә уйламауын «бик ышаныслы итеп» билдәләргә кәрәклегенә айырып күрһәтелә»[3].

Формаль рәүештә Йәшерен экспедиция тикшереүҙең дауам итеүе тураһында белдерһә лә, асылда иһә ғәйепләнеүсегә бирелгән язаны күрһәтеп, губернаторға ахырғы хөкөм ҡарары инде тәҡдим ителгән була. Салауат Юлаевты «яуызға лайыҡ күреп» язаларға, йәғни «ул иң яман вәхшилек ҡылған һәм үлтергән бөтә башҡорт ауылдарында сыбыртҡы менән һуҡтырырға, танауын ҡырҡырға һәм хурлыҡ тамғаһы баҫырға, ә һуңынан Балтик портына (Рогервикка) ғүмерлек каторға эштәренә һөрөргә бойороҡ бирелә.

Сенаттың Йәшерен экспедицияһы шул уҡ бойороғонда губернаторға Юлай Аҙналиндың ғәйеплелек дәрәжәһен билдәләргә һәм «уның енәйәттәренә һәм ундағы хәҙерге шарттарға ҡарап» язаларға тип күрһәтә.

---

[1] Записки А. М. Тургенева, 57—58-се биттәр.

[2] Крестьянская война..., 309-сы бит.

[3] Шунда уҡ, 310-сы бит.

Мәскәү судьялары «яуызлыҡ эшләгән башҡа кешеләрҙе ҡурҡытыу өсөн» Салауатты башҡорт ерендә язалауҙы талап итә. Бында, пугачевсылар өҫтөнән башҡа бөтә процестарҙағы кеүек үк, тикшереүҙең төп маҡсаты язалауҙан һәм ҡурҡытыуҙан торғанын күрәбеҙ. 1774 йылдың 5 сентябрендә Мәскәүҙә Пугачев атаманы И. Н. Белобородовты язалау тураһында императрицаға докладында Волконский, язалап үлтереү һәм тән язаһы биреү өсөн ул һәр ваҡыт ҡалаға халыҡ күп йыйылған сауҙа көндәрен һайлап ала, сөнки «ҡурҡытыу ҡара халыҡҡа яҡшы эффект яһай»[1], тип юҡҡа ғына яҙмай һәм был осраҡта ла Башҡортостандың баш күтәреүселәре юлбашсыһын тыуған илендә халыҡ алдында язалау, судьяларҙың уйы буйынса, крепостной тәртиптәргә һәм милли иҙеүгә ҡаршы күп тапҡырҙар көрәшкә күтәрелгән башҡорт халҡын ҡурҡытыу һәм буйһондороу маҡсатын күҙҙә тоторға тейеш була. Ләкин иң мөһиме — был йәшәп килгән ҡоролошҡа ҡаршы теләһә ниндәй сығыш та, еңәйәт иҫәпләнеп, ҡотолғоһоҙ рәүештә язаһын алырға тейешлеген күрһәтеүгә иҫәп тотолған политик акция була. Салауаттың эшен урындағы властарға биргәндә, Йәшерен экспедиция унда бойороҡто үтәйәсәктәренә һәм Салауаттың хәрәкәттәре тураһында өҫтәмә мәғлүмәттәр табып ҡына ҡалмаясаҡтарына, бәлки уны ғазаплы тән язаһына тарттырыу йолаһын еренә еткереп, бөтә халыҡ алдында язаларға тырышасаҡтарына ышана ине. Язалау акцияларын губернаторға тапшырып, Екатеринаның иң эре сановниктары Вяземский менән Волконский, язалау ил үҙәгенән алыҫта ғәмәлгә ашырыласағын, восстаниела ҡатнашыусыларҙан Е. И. Пугачевты язалап үлтергәндән һуң да дауам иткән үс ҡайтарыу һәм халыҡ хәрәкәтен баҫтырыу тураһындағы хәбәрҙәр Европаға, Екатерина II уның йәмәғәтселегенең фекерен өҫтөн күргән Европаға, барып ишетелмәйәсәген дә күҙҙә тота.

Бында Сенат Йәшерен экспедицияһының бойороғона ҡул ҡуйыу датаһына — 1775 йылдың 16 мартына ла иғтибар итергә кәрәк. Икенсе көндө Екатерина II-нең «1773 һәм 1774 йылдарҙа эсҡе болала, фетнәлә, сыуалышта һәм тәртипһеҙлектә ҡатнашыусыларҙың бөтәһен дә» ярлыҡау тураһында, улар өҫтөнән тикшереү алып барыуҙы туҡтатыу, һәр төрлө шелтә һәм язалауҙарҙы бөтөрөү тураһында манифесы сыға: «юғарыла иҫкә алынған эштәрҙе мәңгелеккә онотторға һәм өн дә сығармаҫҡа» тәҡдим ителә. Элек үлем язаһына хөкөм ителгәндәр каторга эштәренә һөрөлә, ауыр тән язаһына хөкөм ителгәндәр ғазаплауҙарҙан ҡотҡарылып, һөргөнгә ебәрелә[2]. Сенаттың генерал-прокуроры манифест әҙерләнеүен, әлбиттә, белмәй булмағандыр, шулай ҙа ул манифест сығыр көндөң алдынан үлем язаһы талап итергә ҡыйыулыҡ итмәһә лә, Салауатҡа рәхимһеҙ хөкөм ҡарарына ҡул ҡуя. Ул, урындағы властар 17 март манифесының положениеларын ғәмәлгә ашырырға тотонғансы әле, Салауаттың яҙмышы Йәшерен экспедицияның ҡарары-

---

[1] Письма государыни императрицы Екатерины II к князю М. Н. Волконскому, 149-сы бит.

[2] ПСЗ I, 20-се том, № 14275, 85—86-сы биттәр.

на ярашлы рәүештә хәл ителәсәгенә иҫәп тота. Улай ғына ла түгел, Сенаттың Йәшерен экспедицияһының Салауат эше буйынса хөкөм ҡарары — Екатерина II-нең ни тиклем икс йөҙлө булыуын күрһәтә: ул бер үк ваҡытта «бөтә халыҡҡа иғлан итеп», «Төрлө ҡатламдарға юғарынан мәрхәмәттәр бүләк итеүе тураһында» манифесҡа ҡул ҡуя һәм хөкөм ителгәндәрҙе, алдан уҡ ошо мәрхәмәттәрҙән мәхрүм итеп, ғүмерлек каторгаға ебәрергә йәшерен документты раҫлай. Сенаттың Йәшерен экспедицияһының хөкөмөнә әбей батша үҙ ҡулы менән: «Шулай булһын», — тип яҙып ҡуя [1].

Екатерина II-нең ризалығы һәм хуплауы менән Сенаттың Йәшерен экспедицияһы, Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереүҙе тамамлап ҡуйыр өсөн, ғәйәт ҙур край территорияһында сикһеҙ хоҡуҡтарға эйә булған Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорпты ылыҡтыра. 17 мартта Вяземский Нарва йәйәүле полкының прапорщигы П. Лавровҡа Рейнсдорп өсөн пакет тапшыра. Пакетҡа генерал-прокурорҙың бойороғо һалынған була. Текст Йәшерен экспедицияның билдәләмәһен һүҙмә-һүҙ тип әйтерлек ҡабатлай.

Документтың аҙағында Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Мәскәүҙән һаҡ аҫтында оҙатылыуы тураһында белдерелә. Вяземский Ырымбурға шулай уҡ Мәскәүҙәге тикшереү эшенең бөтә документтарының күсермәләрен ебәрә. Прапорщик Лавровҡа Салауатты, Юлайҙы һәм уларға ҡушылған Һеләүһен Ҡинзинды һаҡ аҫтында алып барыу тәртибе тураһында инструкция бирелә [2]. Инструкция һигеҙ пункттан тора, унда арестанттар өҫтөнән бик ҡаты күҙәтеү булдырыу ҡағиҙәләре ентекләп яҙыла. Булып үткән восстание тураһында һөйләшеү тыйыла, уларҙың хат яҙмауҙарын, иң мөһиме «ҡасыу йәки үҙҙәренә ҡул һалыу өсөн ниндәй ҙә булһа мөмкинлектәрҙе файҙалана алмауҙарын күҙәтергә тәҡдим ителә; «бер ерҙә лә, тоҡтомалға аҙ ғына ваҡытҡа ла туҡталмай, тиҙ туп-тура Ырымбурға барырға» әмер бирелә [3].

---

[1] ЦГАДА, ф. 7, д. 2043, ч. 14, л. 156; Крестьянская война..., 310-сы бит.

[2] Һеләүһен Ҡинзин. Нуғай юлы баш күтәреүселәренең етәксеһе. Е. И. Пугачевтың иң яҡын көрәштәштәренең береһе, Нуғай юлы Бошмаҫ Ҡыпсаҡ волосынан башҡорт старшинаһы Кинйә Арыҫлановтың улы (уның эшмәкәрлеге тураһында ҡарағыҙ: «Крестьянская война...» китабында, 39, 214, 222, 401, 412, 419—421-се биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 117-се бит). Властар Һеләүһендең Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр йыя алмай. Йәшерен экспедиция Һеләүһенде (ул бында «яҙма рәүештә бер ниндәй күрһәтмәһеҙ» Потемкин тарафынан ебәрелә) Ырымбур губернаторына кире оҙата (Вяземскийҙың 1775 йылдың 17 мартында Рейнсдорпҡа яҙған хаты. — ГАОО, ф. 3, д. 145, л. 44—45). Рейнсдорп тикшереүгә тотона, ләкин Һеләүһенде фашлаусы документтар таба алмай һәм башҡорт старшиналары Ямаһары Яппаров, Биктимер Мотаев һәм башҡаларҙың Һеләүһен «яуыздар төркөмөндә тик икс йәки өс көн генә булды, ә күберәген һәм һәр ваҡыт тиерлек үҙенең өйөндә булды» тип һөйләүҙәренә ышанып, тикшереүҙе туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул итә һәм Һеләүһенде һаҡ аҫтынан сығара. (Рейнсдорптың 1775 йылдың 23 апрелендәге бойороғо. — Шунда уҡ, д. 148, л. 41—42).

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 47, 48.

Ям канцелярияһында һигеҙ почта ылауына рөхсәт алып, Лавров шул уҡ көндө, 17 мартта, тотҡондарҙы ҡабул итеп алып, Мәскәүҙән сығып китә. Салауат менән Юлайҙың ҡул-аяҡтары бығаулы, һеләүһендең «тик аяҡтары ғына тимер бығауҙа» була. Яҙғы юл өҙөклөгө шәп барырға мөмкинлек бирмәй. 24-се көн тигәндә генә, 9 апрелдә, улар Ырымбурға барып етә һәм һаҡсылар командаһы командиры Ырымбур губерна канцелярияһы секретары П. Чучаловтан арестанттарҙы ҡабул итеп алыу тураһында яҙыу ала [1].

§ 4. ӨФӨЛӘ САЛАУАТ ЮЛАЕВ ЭШЕ БУЙЫНСА ТИКШЕРЕҮ. ХӨКӨМ ҠАРАРЫ СЫҒАРЫУ

1775 йылдың 10 апрелендә Салауат Юлаев эше буйынса тикшереүҙең өсөнсө, аҙаҡҡы, этабы башлана.

Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорп генерал-прокурор Вяземскийҙың «император ғали йәнәптәре» исеменән уға тапшырылған йәшерен поручениеһын ала. 16 апрелдә, ғәйепләнеүселәрҙе Ырымбурға килтергәндән һуң бер аҙна үткәс, Рейнсдорп Вяземскийға уның тарафынан башланған тикшереү һиҙелерлек уңыштар килтерҙе, тип хәбәр итә: уның заданиеһы буйынса губерна канцелярияһының 1773—1775 йылдарҙағы эштәре ҡарап сығыла, һәм хәҙер ул восстаниела Салауаттың 1774 йылдың көҙөнә тиклем ҡатнашыуы тураһында «бында булған эштәр буйынса етерлек билдәле» булыуын белдерә ала. Губернатор генерал-прокурорҙы әбей батшаның әмеренә ярашлы рәүештә ул Салауаттың һәм уның атаһының яуыз эштәрен «еренә еткереп тикшерергә» ынтыласағына һәм уларҙы язалау тураһындағы бойороҡто үтәйәсәгенә ышандыра [2].

Ошо белдереүҙән сығып, губернатор тикшереү аҫтындағыларҙың Пугачев восстаниеһы көндәрендәге хәрәкәттәре тураһында һөйләүсе документтарҙан өҙөмтәләр һәм экстракттар әҙерләү хаҡында бойороҡ бирергә тейеш ине, тип уйларға мөмкин. Ләкин быға оҡшаш приказдар тураһында архив эштәрендә бер ниндәй ҙә эҙ юҡ. Юлай Аҙналиндың восстаниела ҡатнашыуы тураһында коллежский советник Тимашев рапорттары буйынса губерна канцелярияһының был көндәрҙә яҙылған белешмәһе генә һаҡланған [3]. Губерна канцелярияһының башҡа документтарҙы әҙерләмәүе лә ихтимал. Сәбәбен шуның менән аңлатырға мөмкин: Салауат тураһындағы мәғлүмәттәр Ырымбурға Өфө провинция канцелярияһынан килгән документтарҙа табыла. Шуға күрә губернатор Ырымбурҙа фашлау дәлилдәре йыймаҫҡа, ә Салауат менән Юлайҙы, уларҙың эшмәкәрлеген яҡтыртыусы документтар тулыраҡ күләмдә һаҡланған, башҡорт волостарынан шаһиттарҙы еңелерәк та-

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 46.
[2] Крестьянская война..., 313—314-се биттәр.
[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 318.

быръа мөмкин булъан Өфө провинция канцелярияһына оҙатырға ҡарар итә лә.

Шул ваҡытта Рейнсдорп исеменә Ҡазандан Вяземский заданиеһы[1] буйынса Ҡазан йәшерен комиссияһында баш күтәреүселәрҙең һорау алғандағы күрһәтеүҙәре теркәлгән тулыҡ протоколдан күсермәләр ебәрелә. Һигеҙ протоколда Салауаттың восстаниела ҡатнашыуы, берәһендә Һеләүһендең атаһы Ҡинйә Арыҫланов тураһында һүҙ бара[2].

Хәҙер Ырымбур губернаторында Мәскәүҙәге суд-тикшереү материалдары (Салауат Юлаевтың, Юлай Аҙналиндың, Ҡолой Балтачевтың күрһәтеүҙәре яҙылған протоколдар), Ҡазан йәшерен комиссияһында баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре яҙылған протоколдарҙан күсермә, Йәшерен экспедицияның Рейнсдорпҡа Вяземский яҙған хатҡа тулыһынса ингән билдәләмәһе тексы)[3], Ҡазан һәм Ырымбур губерна канцелярияһы эштәрендә өҫтәмә рәүештә табылған документтар йыйылған булып сыға. Салауат эшен тикшереүҙе Өфө провинция канцелярияһына бирергә ҡарар иткәс, Рейнсдорп, Мәскәүҙән һәм Ҡазандан алынған тулыҡ документтың күсермәләрен, Ырымбур губерна канцелярияһының Юлай тураһындағы белешмә күсермәһен әҙерләргә бойороҡ бирә һәм уларҙы 1775 йылдың 23 апрелендә Өфөгә ебәрә[4]. Үҙенең ниңә шулай ҡарар иткәнен аңлатып, губернатор ордерҙа былай тип яҙа: «Был тикшереүҙе Өфөлә үткәреүҙе мин яраҡлыраҡ тип табам, беренсенән, уларҙың, Салауат менән Юлайҙың, йәшәгән ерҙәренә яҡын, ә икенсенән, уларҙың яуызлыҡ эштәре шунда булған, һәм бирелгән бойороҡто унда тиҙерәк үтәргә мөмкин». Ул «тикшереүҙе ҡушылған тәртиптә еренә еткереп башҡарыуҙы һәм, фаш иткәндә, уларҙың үҙҙәренең таныуына өлгәшеүҙе», яуап алыуҙың һөҙөмтәләрен дөйөмләштереүҙе һәм бөтә эште тамам ҡарау өсөн уға ебәреүҙе талап итә[5].

24 апрелдә Салауат менән Юлай Ырымбурҙың штаттағы рота подпоручигы Ф. Пушкарев һәм 4 һалдаттан торған команда һағы аҫтында Өфөгә ебәрелә. Салауаттың, элеккесә, аяҡ-ҡулдары быгауланған була; Юлайҙың ҡулдарынан быгауҙарҙы алалар, тик

---

[1] Вяземскийҙың 1775 йылдың 17 мартында Ҡазан губернаторы П. С. Мещерскийға хаты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 43.

[2] Мещерскийҙың 1775 йылдың 6 апрелендә Рейнсдорпҡа хаты. — Шунда уҡ, д. 593, л. 314; Крестьянская война..., 310—313-сө биттәр. Ҡазан йәшерен комиссияһының архивы Мәскәүгә ебәрелгән була инде, ә Мещерскийға яҙмыштары был ваҡытта әле хәл ителмәгән баш күтәреүселәрҙән һорау алыу протоколдары ҡалдырыла.

[3] Вяземскийҙың 1775 йылдың 17 мартында яҙған хатының төп нөсхәһе һәм тикшереү документтары (күсермәләрҙә) Сенаттың һәм Хәрби коллегияның 1775 йылда Рейнсдорпҡа ебәргән указлары араһында бар. Улар Ырымбур губерна канцелярияһы фонды составында һаҡланған. — ГАОО, ф. 3, д. 145, л. 46—67.

[4] Әле һаналып киткән бөтә документтар «Өфө провинция канцелярияһының Пугачев бунты тураһында 3-сө һанлы эшендә» һаҡланған. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 308—318.

[5] Шунда уҡ, л. 304.

аяҡтарында ғына ҡалдыралар. 1 майҙа подпоручик провинция властарына «ҙур ғәйепле колодниктарҙы урынға тиклем оҙатыуы»[1]. тураһында рапорт тапшыра. Ошо көндән Салауат менән уның атаһы өҫтөнән тикшереүҙең Өфө осоро башлана.

«Ҡараҡтарҙы һәм юлбаҫарҙарҙы»[2] килтерелгән көндө тикшерә башлауҙы талап иткән закондарҙы тырышлыҡ менән үтәп, Өфө провинция канцелярияһы шул сәғәттә үк эшкә тотона. 1 майҙа «присутствие»ның ултырышы була, уның ағзалары: воевода, коллежский советник А. Н. Борисов[3] һәм воеводаның ярҙамсыһы секунд-майор С. И. Аничков[4]; бында, ғәҙәттәгесә, бөтә документтарҙы уҡыусы канцелярия секретары И. Черкашенинов[5] та була. Губернаторҙың тикшереүҙе үткәреү тураһындағы тәҡдиме ҡарала, эш буйынса алынған документтар уҡыла. Алынған хәбәрҙәргә «присутствие» ағзалары бындағы провинциялағы төрлө ҡатлам халҡынан иҫкә алынған башҡорттар, Юлай һәм уның улы Салауат, тураһында байтаҡ мәғлүмәттәр бар, тип өҫтәй ала һәм улар ҡылған яуызлыҡтар һәм үлемесле һәләкәттәр тураһындағы йәшерен, Пугачевҡа яуыздарса булышлыҡ итеү хәлдәренә ҡағылышлы, бөтә эштәр буйынса Өфө провинция канцелярияһында ентекле төҙәтмә индерелһен һәм тикшерелһен тигән билдәләмә сығара[6]. Провинция канцелярияһы Салауат Юлаевтан һорау алыр алдынан документтар — фашлаусы дәлилдәр йыйып ҡына ҡалмай, бәлки күрһәтеүҙәрҙә һүҙ беректереүҙәр мөмкинлегенән ҡурҡып, тотҡондарҙы «бик ҡаты ҡарауыл аҫтында бер-береһенән айырым» тотоу кәрәклеген дә күҙ уңында тота. Һаҡларға прапорщик Колокольцев командалыҡ иткән ротаға ҡушыла. Тотҡондарҙы

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 319.

[2] Ҡараҡлыҡ, юлбаҫарлыҡ һәм һәр төрлө боҙоҡлоҡ оялары тотоу буйынса енәйәт эштәрен ҡарау тәртибе тураһында Екатерина II-нең 1763 йылдың 10 февралендә үҙе ҡул ҡуйған Указы. — ПСЗ I, 16-сы том, № 11750, 155-се бит һәм енәйәт эштәрен хәл итеүҙе тиҙләтеү тураһында күп кенә (батшаның үҙенең һәм Сенаттың) указдары, 16-сы том, № 11992, 468—469-сы биттәр; № 12173, 785, 786-сы биттәр; 17-се том, № 12578, 588-се бит; № 12709, 870, 871-се биттәр; 18-се том, № 12894, 127—129-сы биттәр; № 13156, 711, 712-се биттәр; № 13216, 785, 876-сы биттәр; 19-сы том, № 14092, 886, 887-се биттәр.

[3] Борисов А. Н. — 1772—1776 йылдарҙа Өфө воеводаһы. — *Новиков В. А.* Сборник материалов для истории уфимского дворянства. Өфө, 1879, 20-се бит.

[4] Аничков С. И. — Өфө дворяндарынан, 1767 йылғы Уложенный комиссияның депутаты, 1773 йылдың 13 декабрендә Сенат тарафынан Өфө провинцияһында воеводаның ярҙамсыһы итеп билдәләнә; Пугачев восстаниеһы ваҡытында Өфө дворяндарына килтерелгән зыянды ҡаплауға булышлыҡ итеүҙе һорап, Өфө өйәҙе дворяндарының 1775 йылдың 15 мартында генерал-аншеф П. И. Панинға яҙған үтенес ҡағыҙы авторҙарының береһе. (Дворян Аничковтар нәҫеле тураһында хәбәрҙәр. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы ғилми архивы, ф. 3, оп. 12, д. 116, л. 149 об. Памятная книжка Уфимской губернии. Өфө, 1873, ч. 2, л. 99—100).

[5] Черкашенинов И., 42 йәш, сығышы дворяндарҙан, коллежский регистратор, ир затынан 5 йән крепостной хужаһы, улар юғалған иҫәпләнә (баш күтәреүселәр тарафынан урланған мөлкәт тураһында 1775 йылда губернаторға бирелгән үтенестәр ҡағыҙҙары реестрынан. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 12, л. 31).

[6] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 320—321.

ҡарауға средстволар — «ашатыу аҡсалары» һәр ҡайһыһына көнөнә 5 тиндән 4 тингә кәметелә [1].

Өфө воеводаһы тапшырылған эш менән шул тиклем мауығып китә, Салауат менән Юлайҙың Өфөгә килтерелеүе һәм губернаторҙан документтар алыуы тураһында губернаторға яҙған рапортҡа тик өсөнсө көндә генә ҡул ҡуя [2]. 5 майҙа «присутствие»ның икенсе ултырышы була. Черкашенинов канцелярияның йәшерен эштәренән — баш күтәреүселәрҙән һорау алғандағы II протоколы, завод контораларының, подполковник Рылеевтың һәм Себер юлы ахуны Сөләймән Юхшичериндың [3] 7 белдереүе күсермәләренән төҙөлгән документты уҡый; унда, воеводаның әҙерләнгән экстракты баһалауынса, «күрһәтелгән күп яуызлыҡтарҙа һәм ғазаплап үлтереүҙәрҙә уларҙың [Салауат менән Юлайҙың] ҡыҫылышы бар [4] тиелгән. Был көндө ҡабул ителгән билдәләмә бик ентекле һәм асылда тикшереүҙәрҙең киң эшләнгән планы була. Тикшереү аҫтындағы кешеләрҙең һәр ҡайһынан айырым-айырым, өгөтләү өсөн мулланы ла саҡырып, һорау алырға ҡарар ителә. Алдан уҡ әйтеп ҡуйыла, әгәр ҙә Салауат менән Юлай үҙҙәренең бөтә «енәйәттәрен» яңынан танымаһалар, «уларҙың яуыз эштәре» шаһиттар ярҙамында иҫбат ителәсәк, тиелә. Тикшереүселәр, Мәскәүҙә һорау алғанда, Салауат менән Юлай халыҡ хәрәкәте осорондағы үҙҙәренең эшмәкәрлектәре тураһында бөтәһен дә әйтеп бөтөрмәгәндер, тип ышана ине. Билдәләмәнең тикшереү аҫтындағы кешеләрҙең боевой хәрәкәттәре урындарынан уларҙы «фашлаусыларҙы» Өфөгә килтереү өсөн офицер ебәреүҙе күҙҙә тотҡан пункты шундай һығымта яһарға нигеҙ бирә. Һуңғыларынан «һорауҙы ентекләп» алырға, ә унан һуң, Салауат менән Юлайҙы ныҡлап фашлау һәм уларҙың үҙҙәренең ғәйептәрен таныуға өлгәшеү өсөн, фашлаусыларҙы «Салауат һәм Юлай менән күҙләштерергә» иҫәп тотола [5]. Өфөләге тикшереүҙә, бынан элек Мәскәүҙәге кеүек, документтарҙа Салауатты ҡулға алыу тураһында аныҡ мәғлүмәттәр булмай, шуға күрә канцелярия Салауаттың кем тарафынан, ҡасан ҡулға алыныуын һәм яуыз Пугачевты тотҡандан һуңмы әллә элекме ҡулға алыныуын асыҡлауҙы һорап, Фрейманға мөрәжәғәт итергә ҡарар сығара [6]. Шул уҡ көндө, 5 майҙа, чиновниктар билдәләнгән программаны тормошҡа ашырырға тотона. Фрейманға воевода Борисов тарафынан ҡул ҡуйылған рапорт тапшырыла, ә Салауат менән Юлайҙы һорау алыу өсөн провинция канцелярияһы бинаһына күсерәләр.

Сенаттың Йәшерен экспедицияһының 1775 йылдың 16 мартындағы ҡарарына ярашлы рәүештә Өфө тикшереүселәре төп иғти-

---

[1] Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 1 май указы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 337—338.

[2] Шунда уҡ, л. 323.

[3] Крестьянская война..., 314—316-сы биттәр.

[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 327.

[5] Шунда уҡ.

[6] Шунда уҡ, л. 324.

барҙы фашлаусы дәлилдәрҙе эҙләүгә бирә, сөнки, уларға нигеҙләнеп, Салауатты һәм Юлайҙы уголовный характерҙа булған енәйәттәрҙә, үлтереүҙәрҙә, мөлкәт талауҙа һәм башҡа төрлө «яуызлыҡ эшләүҙәрҙә» ғәйепләп булыр ине.

Өфөлә 1775 йылдың 5 майында воевода Борисов провинция канцелярияһы тәржемәсеһе А. Васильев ярҙамында Салауаттан һәм уның атаһынан һорау ала. Һорау алыуҙың маҡсаты — уларҙы провинция канцелярияһында табылған документтарҙа күрһәтелгән бөтә эштәрҙе һәм енәйәттәрҙе таныырға мәжбүр итеү. Салауаттың күрһәтеүҙәре протоколын канцелярия документтарының экстракты менән сағыштырып ҡарау протоколдың һәр ғәйепләүгә эҙмә-эҙлекле яуаптарҙан тороуын билдәләргә мөмкинлек бирә. Шулай итеп, һорау алыуҙың барышын түбәндәгесә күҙ алдына килтерергә мөмкин: тәржемәсе 16 раҫлаусы фактын һәр ҡайһыһын сиратлап тәржемә итә (уларҙың икеһе Юлай Аҙналин отрядының хәрәкәт итеүенә ҡағыла), ә Салауат уларға үҙенең мөнәсәбәтен һөйләй; яуаптар рус теленә тәржемә ителә һәм протоколға яҙыла: Салауаттан, протоколда яҙылыуынса, «етерлек өгөтләү»[1] менән һорау алалар, был, ғәҙәттә, мораль баҫым яһауҙы, дин менән ҡурҡытыуҙы, бәлки, ғазаплауҙарҙы ла аңлата.

Уға ҡаршы ҡуйылған ғәйепләүҙәргә яуап биреп, Салауат уларҙың яртыһын тулыһынса йәки өлөшләтә таный, туғыҙынан баш тарта. Ул Мәскәүҙә һорау алғандағы элекке күрһәтеүҙәрен: Пугачев тарафынан уға полковник чины биреләүе тураһындағы, Красноуфимскиҙы алғанда, Көңгөрҙө ҡамауҙа, подполковник А. В. Папав командаһына ҡаршы һуғышта, Эҫем заводын алыуҙа һәм яндырыуҙа ҡатнашыуы тураһындағы күрһәтеүҙәрен раҫлай. Ул ҡайһы бер яңы факттарҙы ла: атап әйткәндә, Красноуфимскиҙа ҡулға төшөрөлгән ҡаҙна аҡсаһын Ырымбур эргәһендә булған Пугачевҡа ебәреүен; Семен Шеметовты Елдәк казактарының атаманы итеп, мари Изибай Аҡбаевты полковник итеп раҫлауҙы; Елдәк казагы Әбел Байҙашевҡа тотҡарлыҡһыҙ йөрөү өсөн билет биреүҙе таный. Шул уҡ ваҡытта Салауат бәхәсһеҙ фактты — Елдәк эргәһендә подполковник Рылеев отрядтарына ҡаршы яуҙа үҙенең ҡатнашыуын тулыһынса кире ҡаға. Ул йөҙ башлығы Арыҫлан Рангоолов менән унда 200 кешелек команданы ебәреүен дә кире ҡаға. Ул урындағы халыҡты баш күтәреүселәр отрядтарына мобилизациялауҙа ғәйепләүҙән баш тартырға ҡарар итә. Себер юлы ахунын аҫып үлтерергә ниәтләнеүе һәм Әңгәсәк заводы приказчигын «үлем язаһы менән ҡурҡытып» үҙ янына килергә талап итеүе тураһында ғәйепләүҙәрҙе лә Салауат ҡабул итмәй. Үҙенең күрһәтеүҙәрендә Салауат, Мәскәүҙәге кеүек, аңлы рәүештә бер кемде лә ғүмеренән мәхрүм итмәгәнен ныҡлап әйтә: «күрәләтә мин бер кемгә лә, һуғыштарҙан башҡа, үлем язаһы бирмәнем һәм бер кемде лә аҫманым»[2]. Провинция канцелярияһы чиновниктары иҫәп тотҡанса, Салауат ҡаршылыҡ күрһәтеүен дауам итә һәм «үлтереү-

---

[1] Крестьянская война..., 316-сы бит.

[2] Шунда уҡ, 318—320-се биттәр.

ҙәрҙә һәм яуыҙлыҡ эшләүҙәрҙә» ғәйебен танымай. Тикшереү аҫтындағыларҙы документтарҙағы дәлилдәр менән фашлау мөмкинлегенә ышаныстарын юғалтҡас, тикшереүселәр, Ҡазан йәшерен комиссияһында баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре протоколдарынан Мещерский тарафынан уларға ебәрелгән күсермәне, хатта унда 1773—1774 йылдарҙа Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында халыҡ хәрәкәтен йәйелдереүҙә Салауаттың роле, уның отрядының Михельсон корпусына ҡаршы һуғыштары һәм башҡалар тураһында күп кенә мөһим мәғлүмәттәр булыуға ҡарамаҫтан, уларға күрһәтеп тормайҙар. Ошо документ менән бергә тикшереү эшенә 1774 йылдың 25 ноябрендә Салауаттың ҡулға алыныуы тураһында Фреймандың белдереүе һәм Аршеневскийҙың рапорты теркәлә [1]. Был документтарҙан шул билдәле: Салауатты язалаусылар Крәҫтиәндәр һуғышы юлбашсыһы Е. И. Пугачев әсиргә алынғандан һуң ике ай үткәс тоталар. Салауат бер ҡасан да үҙе бирелергә йыйынмай. Юлай Аҙналинды тотоуға бер ниндәй ҙә мөнәсәбәттәре булмағанлыҡтан, был турала Фрейман менән Аршеневскийҙан һорамаһалар ҙа, Аршеневский тикшереүгә ярҙам итергә үҙен бурыслы тип иҫәпләй һәм, Юлай үҙ отряды менән Ҡатау заводтары эргәһенән унда хөкүмәт ғәскәрҙәре килеүен ишеткәс китә, ә аҙаҡ язалау отряды командиры Тимашевҡа тотоп килтерелә, тип хәбәр итә.

5 майҙа билдәләнгән тикшереү планына ярашлы рәүештә Өфө властары, ҙур уңыштарға өмөт итеп, Салауаттың хәрәкәттәренә «үҙҙәре шаһит» булған кешеләрҙе эҙләй башлайҙар. 12 майҙа канцелярия тәржемәсеһе коллежский асессор Ф. Третьяковҡа [2] провинция канцелярияһының инструкцияһы тапшырыла, уға Себер һәм Уса юлдарындағы ауылдарҙы йөрөп сығырға һәм «тоғро старшиналарҙан һәм яҡшы кешеләрҙән» Салауат тураһында, уның ҡайҙа һәм ниндәй яуыҙлыҡтар ҡылыуы һәм иң рәхимһеҙ үлтереүҙәре тураһында белергә һәм шундай шаһиттарҙан бер нисә кешене Өфөгә килтерергә бойороҡ бирелә. Бер үк ваҡытта Третьяковҡа Юлай Аҙналин тураһында мәғлүмәттәр йыйыуҙы ла тапшыралар [3]. Ул, Өфөлә һорау алғанда, элекке күрһәтеүҙәренә Усть-Ҡатау заводын яндырыуҙы ғына таныуын өҫтәп, крәҫтиәндәрҙе үлтереү тураһында канцелярия документтары экстрактындағы ғәйепләүҙәрҙе кире ҡаға. Юлайҙың «ғәйебен» асыҡлау маҡсаты менән Сенаттың Йәшерен комиссияһы тарафынан ҡуйылған һорауҙар документтан документҡа күсереп яҙыла. Улар инструкцияға ла махсус пункт булып инә: «Улы Салауат һымаҡ, уның да эсе тулы яуыҙлыҡмы икән, уның (улының. — *Тәрж.)* яуыҙлыҡтар ҡылыуын-

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 331; Крестьянская война..., 320—321-се биттәр.

[2] Третьяков Ф., 43 йәш, сығышы дворяндарҙан, 1773—1774 йылдарҙа баш күтәреүселәр тарафынан мөлкәте таланып, зыян күрә (баш күтәреүселәр тарафынан таланған мөлкәт тураһында 1775 йылда губернаторға бирелгән исемлектән. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 12, л. 32).

[3] Крестьянская война..., 316—318-се биттәр.

да ҡатнашлығы булмағанмы, тоғро булған ғәскәри командаларға үҙе теләп килгәнме икән?»[1].

Ләкин шундай йомош менән ебәрелгән кешенең кире әйләнеп ҡайтыуын да көтмәйенсә, провинция канцелярияһы туҡталып торған тикшереүҙе яңынан башларға мәжбүр була. Ни өсөн тигәндә, властар Салауаттың Шайтан-Ҡөҙәй волосына үҙенең туғандарына тапшырыу өсөн төрмәнән йәшерен ебәрелгән хатын ҡулға төшөрә. Үҙе тураһында мәғлүмәттәр йыйырға Третьяковты ебәреүҙәрен белгәс, Салауат үҙенең туғандары аша элекке көрәштәштәренең ҡайһы берҙәренә, һорау алғанда, үҙенең уларҙы һатмауын әйтергә һәм үҙ сиратында улар ҙа «юҡҡа ғына беҙҙең өҫтән күрһәтмәһендәр» тип иҫкәртергә тырышып ҡарай. Туғандарына мөрәжәғәт итеп, Салауат язалаусыларға эләккән ғаиләһе тураһында ҡайғыртыуҙы һорай[2]. Хат билдәләнгән урынына барып етмәй. Себер юлы Тырнаҡлы волосының Мөхәммәт ауылы башҡорто Мөхәммәт Ҡөсөковтың, Исет провинцияһы Балаҡатай волосының Үтәш ауылы башҡорто йөҙ башлығы Сағыр Үтәшевтең һәм төрмә һағынан һалдат Я. Ф. Чудиновтың провинция канцелярияһында һорау алғанда һәм күҙләштереү ваҡытында биргән күрһәтеүҙәренән[3] түбәндәге картина асыҡлана. Майҙың беренсе көндәрендә Өфөгә Салауаттың иң яҡын туғандарының береһе, уның бабаһы, Сағыр Үтәшев килә. Мөһим тотҡон өсөн төрмә итеп яңынан йыһазландырылған магистрат бинаһы тәҙрәһенән Салауат уны күреп ҡала. Салауат, нисектер, ҡара, перо, ҡағыҙ табып, хат яҙа ала. Ул хатты бабаһына һалдат Чудинов арҡылы тапшыра. Сағыр Үтәшев ул саҡта, билдәле, магистрат янынан осраҡлы рәүештә генә үтеп бармағандыр. Сағыр хатты Шайтан-Ҡөҙәй волосына үҙе алып барырға ҡыйыулыҡ итмәй, ә уны, Һарт волосы старшинаһы ярҙамсыһы Әбдрәшит Әлкәевкә (уның волосы Шайтан-Ҡөҙәй волосы менән күрше була) тапшырыу өсөн, Өфөнән өйөнә ҡайтып барыусы Мөхәммәт Ҡөсөковҡа бирә. Сағыр Үтәшев Әбдрәшитте, күрәһең, бик ышанычлы кешегә һанағандыр инде. Бөтәһе лә уңышлы килеп сыға, ләкин юлда, Өфөнән 20 саҡрымдарҙа, күп айҙар буйы язалау отряды торған Атау ауылында[4], Мөхәммәт уны оҙатып килгән башҡорт Истебай Сағыровтың ҡатынының билбау инесенә йәшерелгән хатты ҡапыл тартып ала ла язалау отряды командирына

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 333—334.

[2] Хаттың төп нөсхәһе һаҡланмаған, хат А. Васильев тәржемәһендә билдәле. — «Крестьянская война...» китабында, 321—322-се биттәр.

[3] Шунда уҡ, 322—324-се биттәр.

[4] Һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса ауыл подполковник Аршеневский отряды тарафынан ҡышҡы квартира итеп файҙаланыла. (Фреймандың генерал-поручик Скалонға 1774 йылдың 19 декабренән дә һуң булмаған хаты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 317; Өфө провинция канцелярияһының старшина Ишмөхәммәт Сөләймәновҡа указы. — ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 135.) Атау (Атаевка) — Юрмаш йылғаһына (Ҡариҙел йылғаһының һул ҡушылдығы) ҡойған шишмә буйында урынлашҡан помещик ауылы. Өфөнән Себергә этап юлы уның аша үтә. — *Рычков П. И.* Лексикон или словарь топографический Оренбургской губернии (ҡулъяҙма). — ГБЛ ОР, ф. 313, М-2931, л. 24; Список населенных мест по сведениям 1870 года, т. XLY, Уфимская губерния. СПб., 1877, 20-се бит.

бирә. Ул, моғайын, юлсыларҙы тентерҙәр тип, ҡурҡып, шулай эшләгәндер. Мөхәммәт Өфөгә генерал Фрейман штабына ебәрелә, ә унан провинция канцелярияһына килтерелә. Уның Фрейман канцелярияһындағы күрһәтеүҙәре буйынса Сағыр Үтәшевте эҙләп табалар. 28 майҙа «присутствие»ла уларҙың икеһенән дә һорау алалар. Мөхәммәт менән Сағыр, хатты уҡыманыҡ, һалдаттың һүҙҙәренән генә хатта кейем-һалым һәм туҡланыу өсөн аҡса ебәреү тураһында үтенес яҙылғандыр тип уйланыҡ, тип аҡланалар. Сағыр Үтәшев магистрат янында ҡарауылда торған һалдаттар араһынан Чудиновты таный, унан шунда уҡ һорау алалар. Һалдат йәшереп тормай, ни өсөн шулай эшләгәнен үҙенең крәҫтиәндәрсә бер ҡатлылығы, «аңралығы» менән аңлата. Уларҙан һуң һорау алырға Салауатты саҡыралар. Бөтәһен дә кире ҡағып торорға ҡарар итеп, Салауат: «Бер ниндәй ҙә хат яҙманым, ә әйтелгән һалдат юҡҡа ғына миңә күрһәтә», — тип белдерә; күҙләштереүҙә Салауат менән Чудинов «бер төрлө лә үҙгәрешһеҙ үҙҙәренең тәүге һорау алғанда һөйләгәндәрендә тора»[1]. Хатты Салауаттың яҙыуына шик юҡ, тик быны инкар итеүен тактик алым, хәүефтән ҡотолорға ынтылыу итеп ҡарарға мөмкин, сөнки хат уға ҡаршы етди дәлил булыр ине. Бынан тыш, ул ҡарауылсыны уңайһыҙ хәлдә ҡалдырырга теләмәй: бында ғәйебен таныу тотҡонға нисек хат яҙырга һәм уны ирекка тапшырырға мөмкин булған тигән артабанғы һорауҙарға килтерер ине. Аңлы рәүештә антын боҙған Яков Чудиновты ниндәй язаларга дусар итеүҙәрен һәм артабан уның яҙмышы нисек булып бөтөүен беҙ белмәйбеҙ. Ләкин уның был эшен баш күтәреүселәргә теләктәшлек һәм халыҡ восстаниеһының төрмәлә интеккән етәкселәренең береһен — башҡорт Салауат Юлаевты рус һалдатының кешеләрсә йәлләүе итеп баһаларға тейешбеҙ.

Шул арала тәржемәсе Третьяков тугыҙ башҡорт волосының: Шайтан-Көҙәй, Ҡыр-Көҙәй, Төбәләҫ, Тырнаҡлы, Һарт, Ҡошсо, Әйле, Мырҙалар, Дыуан волостарының ауылдарын йөрөп сыға һәм 8 июндә заданиеның үтәлеүе һәм Өфөгә 17 шаһитты[2] килтереүе тураһында үҙ түрәләренә рапорт бирә. Рапортҡа 48 башҡорттоң коллектив күрһәтеүҙәре протоколы теркәлә[3]. Шул уҡ көндө провинция канцелярияһы килтерелгән шаһиттарҙан Салауат менән Юлай алдында һорау ала. Һарт волосы Әлкәй ауылы башҡорто Әбләҙи Һаҡколов төп ғәйепләүсе була. Ул Салауаттың, буйһонмаусыларҙы ҡырып бөтөрөү менән ҡурҡытып, нисек итеп бөтә Башҡортостанға баш күтәреүселәргә ҡушылырға саҡырған хаттар таратыуы тураһында һөйләй. Әбләҙи Салауаттың Юлай ауылынан уның отрядына ҡушылыуҙан баш тартҡан ағалы-энеле Мөхәммәткилде, Яҡшымбәт һәм Һөйәрембәт Аптыраҡовтарҙы язалауы тураһында һөйләй, уның һүҙе буйынса, йәнәһе, Салауат, үҙ ғәйептәрен танып, Михельсонға килгән Лаҡлы ауылы крәҫтиәндәрен баш кү-

---

[1] Крестьянская война..., 324—325-се биттәр.
[2] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 339.
[3] Крестьянская война..., 325—326-сы биттәр

тәреүселәрҙән язалаттырған. Һәм аҙаҡ килеп ул Салауатты, Эҫем заводы крәҫтиәндәрен язалау, йәнәһе, уның ризалығы менән эшләнде, тип ғәйепләй [1].

Халыҡтың стихиялы хәрәкәте шарттарында һәр төрлө көтөлмәгән хәлдәр була, баш күтәреүселәрҙең восстание дошмандарын ғына түгел, бәлки ғәйепһеҙ кешеләрҙе лә, шул иҫәптән рус һәм рус булмаған крәҫтиәндәрҙе лә, язалау осраҡтары була. Баш күтәреүселәр сафына көрәш маҡсатын аңламаған кешеләр ҙә эләгеүе мөмкин бит, улар ҡайһы саҡта халыҡты язалау, үҙ белдеге менән мөлкәт талау, тартып алыу, хәрәкәттең үҙенә тап төшөрөрҙәй башҡа шундай эштәр алдында ла туҡталып ҡалмай. Ләкин бөтә был хәлдәрҙе Салауат өҫтөнә генә өйөп ҡалдырырға, үлтереү, талау һәм башҡа енәйәттәр уның күҙ алдында һәм уның бойороғо менән эшләнде, тип әйтергә, — быны инде, күрә тороп, Салауатты әсиргә алынған хәрби начальник итеп түгел, ә юлбаҫарҙар шайкаһының башлығы итеп күрһәтергә тырышыу, тип кенә аңлатырға мөмкин. Уның өҫтөнән тикшереү үткәргәндә, властар Салауаттың эшмәкәрлеген боҙоп күрһәтеүсе тап шундай баһа бирергә ынтылалар ҙа. Төп фашлаусыны һайлап алғанда, Третьяков та ошо маҡсаттан сығып эш итә. Әбләҙи Һаҡколов нисек һәм нимә һөйләргә алдан уҡ Третьяков менән килешеп ҡуйманымы икән тигән фекер тыуа. Был тәңгәлдә шуны күрһәтеп үтеү ҙә етә: Өфөлә ултырышта Әбләҙиҙән һәм башҡа шаһиттарҙан шул уҡ Третьяков һорау ала, уларҙың күрһәтеүҙәрен үҙе үк рус теленән тәржемә итә һәм протокол яҙа.

Ҡалған шаһиттар Әбләҙи Һаҡколовтың күрһәтеүҙәрен йөпләйҙәр генә. Ҡыр-Ҡөҙәй волосы Тауыш ауылы башҡорто Салауат Собханғолов менән Төбәләҫ волосы Сүркәй ауылы башҡорто Арыҫлан Собханғолов, Юлай Аҙналин отрядтарының Ҡатау-Иван, Усть-Ҡатау һәм Йүрүҙән заводтары эргәһендә хәрәкәт итеүҙәрен белдереп, Әбләҙи әйткәндәрҙе тулыландыра, ләкин улар ҙа әлеге лә баяғы «үлтереүҙәр» тураһында ғына һөйләй. Арыҫлан Собханғолов, мәҫәлән, йәнәһе, Юлай, әмер биреп, башҡорттарҙан Йүрүҙән заводында йәшәүселәрҙе үлтертте, тип күрһәтә. Төбәләҫ волосы Ҡараҡол ауылы башҡорто Ишембәт Иҫәкәев тә шул хаҡта әйтә [2].

Был шаһиттарҙы (ә уларҙың ҡайһы берҙәре үҙ ваҡытында баш күтәреүселәр менән бергә була) тикшереү аҫтындағы үҙҙәренең яҡташтарына һәм бер диндән булған кешеләргә хыянатсыл яла яғырға, үҙҙәренең күрһәтеүҙәре менән уларҙы ҡаты язаға дусар итергә нимә мәжбүр итеүен әйтеүе ҡыйын. Бәлки, улар Третьяковтың байлыҡ вәғәҙә итеүенә ымһынғандыр, бәлки, янауҙарҙан һәм баш күтәреүселәр яғында үҙҙәренең аҙ ғына ваҡыт булғандары өсөн яза биреүҙәренән ҡурҡып та шулай эшләүҙәре бик мөмкин.

Шаһиттарҙы тыңлағанда, Салауат, уларҙың күрһәтеүҙәре алдан уйналған сценарий буйынса барыуын, уны үлтереүсе һәм ке-

---

[1] Крестьянская война..., 326—327-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 327—328-се биттәр.

ше талаусы — башҡа бер кем дә түгел тип күрһәтергә маҡсат тотолоуын аңлай. Шаһиттарға һәм тикшереүселәргә яуап биргәндә, ул быға оҡшаш ғәйепләүҙәрҙе кире ҡағыуҙа Сенаттың Йәшерен экспедицияһында элек файҙаланған тактикаһында тора. Салауат провинция канцелярияһында тәүге һорау алыу ваҡытындағы күрһәтеүҙәрен ҡабатлай, ләкин, протоколда билдәләнгәнсә, «фашлаусыларҙың бөтә күрһәтеүҙәрен кире ҡаға»[1]. Ул, Юлай ауылынан өс бер туғандың һәләк булыуын беләм, ләкин быға мин ғәйепле түгел: Яҡшымбәт, Мөхәммәткилде һәм Һөйәрембәт Аптыраҡовтар, өйгә бикләнеп, уға, Салауатҡа, үҙҙәре атты, атышҡан саҡта өй янып китте лә, улар өсөһө лә шунан һәләк булды, ти. Ул шулай уҡ Пугачев полковнигы Белобородовтың бойороғо буйынса, баш күтәреүселәргә хыянат иткәндәре өсөн, Лаҡлы ауылы крәҫтиәндәрен аҫып үлтергәндә, үҙенең булыуын да йәшермәй. Ә инде уның, Салауаттың, приказы буйынса Эҫем заводы крәҫтиәндәрен үлтереү тураһындағы өсөнсө ғәйепләүгә ул, заводты баҫып алғанда, мин күп командирҙарҙың береһе булдым һәм быға оҡшаш бер ниндәй ҙә дөйөм приказ бирмәнем, тип яуап бирә[2].

Юлай Аҙналин үҙенә ҡарата уголовный характерҙа булған бөтә ғәйепләүҙәрҙе ҡырҡа кире ҡаға, тик Усть-Ҡатау заводын ҡамағанда ғына, ысынлап та, баш күтәреүселәр отрядына етәкселек итеүен раҫлай[3].

Салауат менән Юлайҙан һорау алғандан һуң, тикшереүселәр шул уҡ Третьяков аша «фашлаусыларға» аңлатма һорап мөрәжәғәт итә, әммә тегеләрҙең бөтәһе лә «уларҙан беренсе һорау алғанда һөйләгәндәренең һәммәһен дә бер ниндәй үҙгәрешһеҙ раҫлай» һәм протоколға яңынан үҙ тамғаларын ҡуя[4].

Тикшереү Салауаттың ихтыярын ҡаҡшата алмай. Ул хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыш хәрәкәттәрендә, крепостарҙы ҡамауҙа һәм алыуҙа, заводтарҙы ҡулға төшөрөүҙә ҡатнашыуын таный, ләкин уны уҫал ниәт менән кешеләрҙе үлтереүен көсләп танытырырға маташыуҙарына ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтә. Салауаттың үҙен шулай тотоуына асыуҙары ҡабарган тикшереүселәр уның эше буйынса ғәйепләү һығымтаһында: ул «электән тупаҫ булыуы арҡаһында баш тартырға ғына тырыша, ә хәҡиҡәтте танымай»[5] тип яҙа. «Хәҡиҡәтте» улар тикшереүгә Третьяков алып килгән шаһиттарҙың күрһәтеүҙәренән генә таба. Шуның менән һорау алыу тамамлана, һәм тикшереүселәр йыйылған материалдарҙы дөйөмләштерергә тотона.

Тикшереү документтарының экстрактын һәм Өфө провинция канцелярияһының билдәләмәһен төҙөүгә бер ай тиерлек ваҡыт

---

[1] Крестьянская война..., 329-сы бит.
[2] Шунда уҡ, 329-сы бит.
[3] Шунда уҡ.
[4] Шунда уҡ, 329—330, 477—481-се биттәр.
[5] Шунда уҡ, 332-се бит.

китә[1]. 6 июлдә тикшереү документтарының экстракты һәм Өфө провинция канцелярияһының губернаторға рапортта яҙып бирелгән билдәләмәһе Ырымбурға ебәреләә[2]. 15 июлдә шулар нигеҙендә губерна канцелярияһы Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналинды язалау тураһында ахырғы хөкөм ҡарарын яҙа һәм уға губернатор ҡул ҡуя. Губернаторҙың фекеренсә, уларҙың иң ауыр енәйәте шунан тора: «элекке халыҡ фетнәһе ваҡытында ғына түгел, бәлки Пугачев Ырымбур губернаһынан ситкә киткәс тә әле, үҙҙәрен тыңлаусан башҡорттарҙың ҙур төркөмөн йыйып, тотоп тыйғыһыҙ уҫаллыҡ менән яуызлыҡтарын дауам итәләр, күп кешеләрҙе үлтерәләр, имениеларҙы талайҙар, ҡайһы бер заводтарҙы һәм ауылдарҙы яндыралар»[3].

Салауат менән Юлайҙы язалау тураһында Ырымбур губернаторы тарафынан сығарылған һуңғы хөкөм ҡарары, асылда, Сенаттың Йәшерен экспедицияһының улар эше буйынса сығарған билдәләмәһенән айырылмай. Өфө тикшереүселәре лә тикшереү аҫтындағыларҙан үҙҙәренең ғәйептәрен таныттыра һәм улар ы тәүбәгә килтертә алмай. Ләкин, Өфө властары һәм, уларға эйәреп, губернатор ҙа, «улар, Юлайка менән Салаватка, ҡылған яуызлыҡтарҙы һәм үлтереүҙәрҙе үҙ күҙҙәре менән күргән сит өйәҙ кешеләре тап шул ғәйептә фашлайҙар икән, улар үҙҙәре аҙ ғына ла танырға теләмәгән нәмәне таныттырыуҙың кәрәге юҡ инде», тип ҡарар итә. Хөкөм ҡарары ул саҡта ғәмәлдә булған закондарға бер ниндәй һылтауһыҙ төҙөлә. Өфө властарының һәм Ырымбур губернаторының суд ҡарарҙарында уларҙың Өфөлә Салауат өҫтөнән тикшереү тамамланғас һайлап алынған һәм тикшереү документтарының экстракттары составына индерелгән закондарға ярашлы булыуы тураһында тик әйтеп кенә кителә. Экстракттың аҡламаһы юғалған, ә һаҡланып ҡалған ҡараламаһы тик 1649 йылғы Соборный уложениенан, Хәрби һәм Диңгеҙ уставтарынан 16 статьяның номерҙары исемлегенән генә тора[4]. Суд ҡарарына был статьяларҙың текстарын һәм уларҙан өҙөктәрҙе индермәйенсә, губернатор хөкөм ҡарарын яҙыу ҡағиҙәләрен асыҡтан-асыҡ боҙоуға бара. Тик хәҙер генә, бөтә ошо 16 закон положениеларын йыйып, уларҙы беҙ Салауат менән уның атаһына сығарылған хөкөм ҡарары тексына өҫтәй алабыҙ.

Экстракттың ҡараламаһында күрһәтелгән статьяларҙың тулы тексына мөрәжәғәт итеү Салауат Юлаевтың енәйәттәрен урындағы властарҙың нисек баһалауҙарын һәм уға ниндәй яза бирергә теләүҙәрен асыҡларға булышлыҡ итә. Өфө чиновниктары Соборный уложениеның икенсе главаһынан дүрт төп статьяны һайлап ала: политик енәйәттәр тураһында закон ҡарарҙарын эсенә алған «Батша намыҫы һәм нисек итеп батшаның һаулығын һаҡлау тура-

---

[1] Крестьянская война..., 330—333-сө биттәр. Уның хеҙмәттәренең эҙе экстракттың тәүге яҙмалары рәүешендә һаҡланған. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 361—370.
[2] Шунда уҡ, л. 360.
[3] ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 71.
[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 362.

һында». Шуны әйтергә кәрәк, абсолютизм дәүерендә быға оҡшаш енәйәттәр монарх власына ҡул һуҙыуға тиңләштерелә һәм «ғали йәнәптәрен мәсхәрәләү», «батша намыҫын» боҙоу һәм башҡа шуға оҡшаш төшөнсәләргә дөйөмләштерелә [1]. Салауат эше буйынса һайлап алынған статьялар, «батшаның һаулығына зарар килтерерҙәй яуыз эш» өсөн, батша власын узурпациялауға ынтылыусы «уның дошманын» яҡлаған өсөн, батшаға ҡаршы «тупланыуҙа һәм заговорҙа» ҡатнашҡан өсөн язалай [2]. Тикшереүселәр, әлбиттә, Салауаттың халыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыуын һәм уның Крәҫтиәндәр һуғышы юлбашсыһы, халыҡтың ҡурсалаусыһы «батша Петр III» исеменән сығыш яһаған Е. И. Пугачевты яҡлауын күҙ алдында тота. Әйткәндәй, Соборный уложениенан Салауаттың «енәйәттәрен» билдәләүсе дүрт статьяның өсөһө 1775 йылдың 10 ғинуарында Е. И. Пугачевҡа үлем язаһы биреү тураһындағы сентенцияла ла беренсе булып күрһәтелә [3]. Пугачевтың һәм уның артынса Салауаттың эштәренә Хәрби уставтың 19-сы артикулын ҡулланырлыҡ тип иҫәпләйҙәр, унда былай тиелә: «Әгәр ҙә подданный кеше ғәскәр ҡоралландырһа йәки ғали йәнәптәренә ҡаршы ҡорал күтәрһә, йәки иҫкә алынған ғали йәнәптәрен яуыз ниәт менән әсиргә алырға йәки үлтерергә уйлаһа, йәки уға ҡаршы ниндәй ҙә булһа көс ҡулланһа, ул саҡта әлеге кеше һәм уға был эшендә ярҙам иткәндәрҙең йәки үҙҙәренең кәңәштәрен биргәндәрҙең бөтәһе лә, ғали йәнәптәрен мәсхәрәләүселәр итеп, дүрткә ботарлап язаланасаҡ һәм уларҙың мөлкәте тартып алынасаҡ...»

Тикшереүселәрҙең фекере буйынса, баш күтәргән крәҫтиәндәр етәксеһенең эш-ҡылыҡтары Хәрби уставтың 137-се артикулы ғәмәленә әләгә, унда былай тиелә: «Һәр төрлө бола, сыуалыш һәм тиҫкәрелек мәрхәмәтһеҙ рәүештә дар ағасында язаланасаҡ» [4].

Хәрби уставтың экстрактҡа индерелгән ҡалған бөтә артикулдары бола һәм сыуалыш тураһында, «хаттар яҙған һәм тараҡҡан өсөн, хөкүмәттең почта корреспонденцияларын ҡулға төшөргән өсөн, үлтереү һәм талау маҡсатында ҡораллы һөжүм иткән өсөн үлем язаһы бирә» [5].

Өфө чиновниктары, Салауаттың власть һәм абруй менән файҙаланған старшиналарҙың баш күтәреүселәр яғына сығыуына һылтаныуы уның үҙенең Пугачев хәрәкәтендә ҡатнашыуын аҡларлыҡ дәлил булып тора алмауын иҫбатлау өсөн, нигеҙ булырҙай законды эҙләп, бөтә Хәрби уставты байҡап сыға. Улар XII главанан 86-сы артикулды ҡуллана: «бер кемгә лә былдай хыянатсыл эштәр өсөн үҙҙәренең офицерҙарына һәм башҡаларға эйәрмәҫкә...» [6].

---

[1] *Тельберг Г. Г.* Очерки политического суда и политических преступлений в Московском государстве XVII века. М., 1912, 1, 2-се биттәр.
[2] ПСЗ I, 1-се том, № 1, 3—5-се биттәр.
[3] Шунда уҡ, 20-се том, № 14233, 5—6-сы биттәр.
[4] Шунда уҡ, 5-се том, № 3006, 325, 360-сы биттәр.
[5] Шунда уҡ, 358, 359, 362, 363, 375, 376, 380-се биттәр.
[6] Шунда уҡ, 6-сы том, № 3480, 73-сө бит.

Россия империяһының ғәмәлдәге өс төп кодексынан һайлап алынған закондар үлем язаһы биреү ысулдарының тотош йыйылмаһын тәҡдим итә: дүрткә ботарлау, дар ағасы, башын ҡырҡыу, ҡуласаға бәйләп язалау [1]. Ләкин Мәскәүҙә билдәләнгән хөкөм ҡарарында Салауат Юлаевҡа политик енәйәт өсөн үлем язаһы биреү кәрәклеге тураһында бер ни ҙә әйтелмәй, ә уны «яуыз» күреп, йәғни уголовный енәйәтселәрҙең берсәһе итеп язаларға тәҡдим ителә. Шуға күрә Рейнсдорп, Салауат үлем язаһына лайыҡлы, тип белдерһә лә, ләкин шунда уҡ, «ғәйепкә тарығандарҙың һәммәһенә Екатерина II-нең әсәләрсә мәрхәмәтлелегенә» һылтанып, Салауатты ҡаты тән язаһына тарттырыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Рейнсдорптың хөкөмөндә Йәшерен экспедицияның Салауатҡа яза сараһы билдәләү тураһындағы тәҡдиме һәм Юлайҙы ла бер үк төрлө язалау тураһында провинция канцелярияһының губернатор тарафынан хупланған фекере ҡабатлана.

Шуны ла әйтергә кәрәк, Салауат эше буйынса өс суд ҡарарының текстарында яза сараһын билдәләгәндә закон тураһында берҙән-бер тапҡыр ғына иҫкә алына. Йәшерен экспедицияның билдәләмәһендә Елизавета Петровнаның 1754 йылдың 13 майындағы указы иҫкә алына [2]. Шунан инде был һылтау хаттар, рапорттар, экстракттар һәм бойороҡ биттәренә күсә һәм, аҙаҡ килеп, губернаторҙың хөкөм ҡарарына эләгә. Ләкин хатта ошо берҙән-бер указ да, асыҡланыуынса, урынлы ҡулланылмаған булып сыға. Билдәләмәнең тексына юридик нигеҙләү өҫтәгәндә, Вяземский, Волконский һәм Шешковский уны уҡып мәшәҡәтләнеп тормай, суд эштәре практикаһында йыш иҫкә алына торған указды файҙалана ла ҡуя. Елизавета Петровнаның указы ҡасҡын крәҫтиәндәрҙе уларҙың хужаларына кире ҡайтарыуға ҡағыла һәм уларҙы үҙендә тотоусыларҙың, ҡабул итеүселәрҙең һәм йәшереүселәрҙең яуаплылығын күҙ уңында тота. Салауат эшенә ҡарата инде Елизавета заманындағы икенсе бер документ — Сенаттың 1754 йылдың 30 сентябрендәге «Төрлө ведомстволар буйынса уголовный эштәргә ревизия тураһында һәм үлем язаһын политик яза менән алмаштырыу хаҡында 1753 йылдың 18 июнендәге указды раҫлау тураһында указы ҡулланылыуы мөмкин, унда тикшереү урындарында яза биреү (сыбыртҡы менән һуҡтырыу, танауҙарын ҡырҡыу, күрһәткес тамғалар һалыу), һуңынан Рогервикка һөргөнгә ебәреү, шуның

---

[1] А. Н. Радищевҡа хөкөм ҡарары әҙерләгәндә Петербургтың уголовный суды палатаһында 1790 йылдың июлендә закондарҙан күсермә төҙөлә, күренекле яҙыусыны шуның буйынса хөкөм итергә йыйыналар. Салауат Юлаевтың тикшереү эше материалдары экстрактына индерелгән ун алты статьянан уныһы Радищев эше буйынса тикшереүселәр тарафынан һайлап алына. Сенаттың 1790 йылдың 8 авгусында Радищевҡа үлем язаһы биргән хөкөм ҡарары яҙылған билдәләмәһенә ошо закондарҙың дүртеһенең — Хәрби уставтың 20-се, 135-се 137-се һәм 149-сы артикулдарының тулы текстары инә. Салауат Юлаев менән А. Н. Радищевтың икеһен дә халыҡты сыуалышҡа «һүҙ» һәм «хат» менән өндәүҙә ғәйепләйҙәр. *Бабкин Д. С.* «Процесс А. Н. Радищева» китабында. 227—231, 272—274-се биттәр.

[2] ПСЗ I, 14-се том, № 10233, 75—85-се биттәр.

ҡайһыһын язалау, ҡайһыһын яза бирсү тип аңлатыу күҙҙә тотола»[1].

Рейнсдорп 1775 йылдың 15 июлендәге билдәләмәһе менән Өфө провинция канцелярияһына Салауат менән Юлайға тән язаһы бирергә, ә ул тамамланыу менән Рогервикка ғүмерлек каторгаға оҙатырға ҡуша[2]. Текстың аҙағында язалаған ваҡытта Салауат менән Юлайҙы «башҡорттар һәм башҡалар юлда ҡотҡара алмаһындар» өсөн, бөтә һаҡлыҡ саралары күрергә ҡәтғи күрһәтмә бирелә. Губернаторҙың борсолоуы бер ҙә юҡҡа түгел — Башҡортостан халыҡтары араһында Салауат менән Юлайҙың ғәйәт ҙур популярлығын таныуына һәм әле һаман да халыҡ сыуалыштарының унда дауам итеүенә дәлил ул[3].

Хөкөм ҡарарына ҡул ҡуйғандың икенсе көнөндә Рейнсдорп уны «еренә еткереп үтәү өсөн» Өфөгә ебәрә. Ул, Өфөләге билдәләмәнең күсермәһен алып, төп нөсхәһен Ырымбурға кире ҡайтарыуҙы талап итә[4].

22 июлдә тән язаһы биреү тәртибе тураһында провинция канцелярияһының билдәләмәһе сығарыла, унда Салауат менән Юлай сыбыртҡы менән (һәр ҡайһыһына 175-әр тапҡыр) һуҡтырылырға, танауҙары ҡырҡылырға һәм биттәренә хурлыҡ тамғаһы һалынырға тейеш булған бөтә ауылдар һанап сығыла. Шул саҡта Фрейманға үҙ бригадаһынан һаҡсы команда бүлеү тураһында һорап мөрәжәғәт итәләр[5]. Тән язаһы бирҙертеү өсөн воевода шул уҡ тәржемәсе Третьяковты ебәрә. 23 июлдә уға язалау үткәрелергә тейеш булған ауылдар исемлеге менән бойороҡ тапшырыла, бынан тыш губернаторҙың 15 июлдәге һәм провинция канцелярияһының 22 июлдәге билдәләмәләренең күсермәләре бирелә[6]. Бойороҡ, ҡаса алмаһындар «һәм юлда ла кем дә булһа уларҙы ҡотҡарырға

---

[1] ПСЗ I, 14-се том, № 10306, 235—236-сы биттәр.

[2] Бында судьяларҙың тағы ла бер хатаһы бар, сөнки Екатерина II-нең 1762 йылдың 20 августындағы үҙенең указы менән Рогервик Балтик порты тип үҙгәртелә. — ПСЗ I, 16-сы том, № 11648, 57-се бит.

[3] 1775 йылдың уртаһында Башҡортостанда хәл тынғыһыҙ килеш ҡала килә. Восстаниеның яңы күтәрелеше мөмкин тигән имеш-мимеш хәбәрҙәр тарала. Мәҫәлән, 1775 йылдың июлендә Рейнсдорп, Фреймандан һәм Өфө провинция канцелярияһынан ебәрелгән һәм, йәнәһе, Пугачев тере һәм Ҡара Яр эргәһендә тора тип хәбәр таратҡан башҡорттарҙың эшен ҡарай (Рейнсдорптың 1775 йылдың 24 июлендәге билдәләмәһе. — ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 75). Башҡорттарҙың, йәнәһе, Пугачев яңынан Ырымбур эргәһенә килгән икән, тип раҫлаған ҡаҙаҡтар менән һөйләшеүҙәре тураһында Петербургка килеп еткән хәбәрҙәр ҙә ошо ваҡытҡа тура килә (Хәрби коллегияның Рейнсдорпҡа 1775 йылдың 6 октябрендәге указы. — Шунда уҡ, д. 145, л. 183—184). Рейнсдорптың заданиеһы буйынса, Өфө провинция канцелярияһы халыҡтың кәйефен һәм башҡорттарҙың ҡаҙаҡтар менән бәйләнешен асыҡлау өсөн волостарға конфиденттар-шымсылар ебәрә (Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 5 августында Рейнсдорпҡа рапорты. — Шунда уҡ, д. 151, л. 21—22).

[4] Рейнсдорптың 1775 йылдың 16 июлендә Өфө провинция канцелярияһына ордеры. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 375. Ордерҙың аҡламаһы канцелярияның рапорты менән бергә 22 июлдә Ырымбурға ҡайтарыла. — Шунда уҡ, л. 380.

[5] Шунда уҡ, л. 381.

[6] Шунда уҡ, л. 383—384, 388.

маташмаһын» өсөн, «колодниктарҙы» нык күҙәтеүҙе талап итә [1]. Юлайҙы һуңғы язалау урынынан, Орловка ауылынан, Өфөгә оҙатырға, ә Салауатты әле исемлектә күрһәтелгән урындарҙан йөрөтөп сығырға, ә унан ары кисекмәҫтән канцелярияға килтерергә тейеш булалар.

Ҡул-аяҡтары бығауланған Салауат менән Юлайҙы капитан Ҡорчагиндың һаҡсы командаһы оҙатыуында Эҫем заводына алып китәләр. Улар чиновниктар, «ғәҙел хөкөм эһелдәре», ҡулынан, уларҙың «үтә ихлас» һорау алыуҙарынан һуң, оҫта палачтар ҡулына күсә. Салауат менән Юлайҙың тыуған төбәктәре Шайтан-Көҙәй ерендә төҙөлгән Эҫем заводында рәхимһеҙ язалау процедураһы башлана. Уларҙы, заводты эшкә ебәргәндән һуң уҡ, 1762 йылда завод хужалары тарафынан төҙөлгән изге Димитрийҙың таш сиркәүе эргәһендәге майҙанға килтерәләр. Һалдаттар уларҙы солғап алып, бында ҡыуып килтерелгән крәҫтиәндәр төркөмөнән һаҡлайҙар. Салауат менән Юлай ул крәҫтиәндәрҙе бынан бер йылдан ашыуыраҡ ваҡыт элек Көңгөр өйәҙенә ебәргән була, ә язалаусылар хәҙер, эҙләп табып, уларҙы ауыр, интектергес эшкә ҡайтарып ҡушалар [2]. Третьяков, инструкция талап итеүенсә, губернаторҙың хөкөм ҡарарын һәм провинция канцелярияһының билдәләмәһен уҡып сыға. Бынан һуң провинция канцелярияһының штаттағы палачы Мартын Суслов үҙенең хеҙмәтенә керешә. Салауатты 25 тапҡыр һуҡтыралар. Тән ғазабына йән ғазабы өҫтәлә: атаһының арҡаһын улы алдында ике тапҡырға тиерлек күберәк — 45 тапҡыр һуҡтыралар. Был ғазаплауҙар артабан да дауам итә. Салауат Усть-Ҡатау, Ҡатау-Иван заводтарында, Орловка ауылында, сыбыртҡы төшкән һайын, атаһының ҡанға батҡан кәүҙәһенең нисек тартышып ҡуйыуын күреү ғазабын кисерә. Бында Юлай имгәтеүсе язаларға — танау япраҡтарын өҙөүгә һәм штемпель тамғалары «З», «Б», «И» — злодей, бунтовщик, изменник тигәнде аңлатҡан тамғалар һалыуға дусар ителә [3]. Сирле Юлайҙы Третьяков Ҡатау-Иван заводында ҡалдыра, август аҙағында бында яңынан килеп, уны Өфөгә алып китә [4].

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 384 об.

[2] Завод крәҫтиәндәре восстаниеға 1773 йылдың ноябрендә ҡушыла; заво эштән туҡтай, 1774 йылдың майында Салауат Юлаев менән Юлай Аҙнали етәкселегендәге отряд тарафынан баҫып алынған ваҡытта нык зарарлана (з водтың бөтә ҡоролоштары ҡыйратыла һәм яндырыла; завод хужалары Тверд шев менән Мясников иҫәпләп сығарған зыян 162 624 һумға тигеҙ була). — *Кашинцев Д.* Горнозаводская промышленность Урала и Крестьянская войн 1773—1775 годов. — Историк-марксист, 1936, 1(53)-се китап, 137—138, 160-161-се биттәр; *Андрущенко А. И.* Крестьянская война в 1773—1775 гг. на Янк в Приуралье, на Урале и в Сибири, 330—331, 336-сы биттәр.

[3] Маңлайға һәм сикәләргә тамға ҡорос энәле хәрефтәре булған бәләкәй баҡыр таҡталарҙы ҡаты итеп һуғып һалына. Тамғалар ғүмергә уйылып ҡалһын өсөн, тамға һалына торған урынға дары йәки буяу (индиго һәм тушь) һөртөлә. — *Калмыков П. Д.* Учебник уголовного права. СПб., 1866, 330—337-се биттәр. *Студенкин Г. И.* Заплечные мастера. — Русская старина, 1873, 8-се том, 217—218-се биттәр.

[4] Третьяковтың 1775 йылдың 26 августа Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 388.

Салауатты Юлай һәм Лаҡлы ауылдарында ғазаплайҙар. Унан ары Третьяков Салауатты секунд-майор Б. Домогацкийҙың һаҡсы командаһы оҙатыуында Красноуфимскиға [1], ә унан Көңгөргә, Усаға, Елдәк крепосына алып бара. Елдәктән алыҫ түгел Нөркә ауылында уны тамға һалып һәм танау япраҡтарын өҙөп ғәрипләндерәләр. 16 сентябрҙә Третьяков воевода алдында поручениеның үтәлеүе тураһында отчет бирә [2].

Ләкин ата менән улды аяуһыҙ ғазаплау быныӊ менән генә бөтмәй әле. Уларҙы провинция канцелярияһында ҡарағанда экзекуторҙарҙың «насар сифатлы эшен» күреп, чиновниктарҙың асыуы килә: танауҙарҙағы яралар инде уңалған, ә Юлайҙың битендәге тамғаларҙың йөйҙәре аҙ ғына беленеп тора. 21 сентябрҙә канцелярия «хатта улар көтөлмәгәндә ҡасҡан осраҡта ла, һәр кемгә танылып торһон өсөн [3] «халыҡ төркөмө алдында» ҡабаттан танау япраҡтарын өҙөү һәм тамға һалыу тураһында билдәләмә сығара. Яңынан, хәҙер инде Өфө ҡалаһы майҙанында, Салауат менән Юлай хурлыҡлы язаға тарттырыла. «Һөргөнгә ебәрелгәндәрҙән» яурын эше оҫтаһы (палач) Мартын Суслов «ҡамсы менән бик ҡаты» һуҡтырыла, ә Третьяковҡа, язаға тарттырғанды насар күҙәткән өсөн, «присутствие»ла «ҡаты шелтә» [4] бирелә.

Губернаторҙың поручениеһын үтәгәс, Өфө властары, уларҙы азат итергә тырышасаҡтарынан ҡурҡып, Салауат менән Юлайҙы Башҡортостандан тиҙерәк оҙатырға ашыға. Генерал Фрейман, «енәйәтселәрҙе» Минзәләгә тиклем алып барыу өсөн, поручик И. Бушман етәкселегендә команда бүлә. Өфө канцелярияһы уны махсус инструкция менән тәьмин итә, унда һаҡсыларға һөжүм итмәһендәр, ҡасмаһындар йәки үҙ-үҙҙәренә ҡул һалмаһындар өсөн юлда, айырыуса төндәрен, «күҙ яҙҙырмай күҙәтеү» һәм «һиҙгер һаҡлау» кәрәклегенә иғтибар ителә. Бушманға ике ылауға юл сығымдары (һәр атҡа саҡрымына 1 тин) һәм «туҡланыу өсөн» 80 тин аҡса (кеше башына көнөнә 2-шәр тин, тикшереү ваҡытындағынан икеләтә кәм) бирелә [5].

Инструкция, аҡса, провинция канцелярияһының Ҡазан губерна канцелярияһына донесениеһы һалынған пакет, шулай уҡ Салауат менән Юлайҙың айырым билдәләре исемлеген алып [6], Бушман тотҡондарҙы ҡабул итеп ала һәм 2 октябрҙә барыһы ла Өфөнән сығып китә. Шул уҡ көндө Өфө провинция канцелярияһы был ту-

---

[1] Третьяковтың 1775 йылдың 7 августында Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 386—387.

[2] Крестьянская война..., 335-се бит.

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 391—392.

[4] Шунда уҡ.

[5] Шунда уҡ, л. 398—400.

[6] Документ Сенаттың 1754 йылдың 12 октябрендәге указына ярашлы итеп төҙөлә, унда былай тиелә: «Шундай яуыздар киләсәктә Рогервикка йәки башҡа урындарға оҙатыла ҡалғанда, уларҙың буйҙарын һәм тәбиғи йәки һәр ҡайһыһына һалынған тамғаларҙы ентекләп яҙырға һәм улар менән бергә ебәреләсәк исемлектәрҙә күрһәтергә...» — ПСЗ I, 14-се том, № 10316, 248-се бит; Крестьянская война..., 335—336-сы биттәр.

рала Рейнсдорпҡа рапорт ебәрә[1]. Ләкин 16 көндән һуң Өфөлә Рейнсдорптың Салауат менән Юлайҙы язалауҙар тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәр талап иткән ордеры алына. Икс көндән һуң һоралған документ Ырымбурға ебәрелә[2].

Октябрь аҙағында Рейнсдорп генерал-прокурор Вяземскийға Салауат Юлаевтың һәм Юлай Аҙналиндың Ырымбур губернаһындағы эше буйынса өҫтәмә тикшереүҙең (Йәшерен экспедицияның билдәләмәһенә ярашлы рәүештә) тамамланыуы тураһында һәм хөкөм ителгәндәрҙе язалау тураһында хәбәр итә[3]. Бер ниндәй сикләүҙәрһеҙ граждандарҙ һәм енәйәт эштәре буйынса хөкөм итеү хоҡуғына, хатта дәүләт енәйәттәре тураһындағы эштәр буйынса ла һуңғы хөкөм ҡарарын сығарыу хоҡуғына эйә булған губернатор Салауат Юлаев эшен уға тапшырған генерал-прокурор алдында отчет биреүҙе кәрәкле һанай. Ә Салауатты, ете ай ярым буйы тикшергәндән һәм ай ярым ғазаплағандан һуң, атаһы менән бергә тыуған Башҡортостанынан мәңгегә алып китәләр. Салауат менән Юлайҙы Ҡазандан Нижний Новгородҡа, унан ары Мәскәү, Тверь, Новгород аша Псковҡа оҙаталар, ноябрь аҙағында уларҙы Ревелгә[4], артабан шунан алыҫ түгел һөргөн урынына — Балтик портына килтерәләр; бында инде Крәҫтиәндәр һуғышының элегерәк ебәрелгән күренекле етәкселәре: И. Я. Почиталин, М. Д. Горшков, И. И. Ульянов, Ҡәнзәфәр Усаев, Д. Ҡ. Караваев, И. С. Аристов, Е. И. Тюленев һәм А. Т. Долгополов каторга эштәрендә яфа сигә.

Салауат Юлаев Балтик порты каторгаһының айырым камераһында егерме биш йыл ғүмерен үткәрә һәм 1800 йылдың 26 сентябрендә шунда вафат та була[5]. Унан саҡ ҡына элегерәк шунда уҡ Юлай Аҙналин донъя ҡуя (документтарҙа уның тураһында һуңғы тапҡыр 1797 йылда иҫкә алына).

* * *

Салауат Юлаев эше буйынса суд-тикшереү процесын ҡарағанда уны Крәҫтиәндәр һуғышының башҡа юлбашсыларының унарлаған эштәре менән туғанлаштырыусы дөйөм һыҙаттарҙы ла, шулай уҡ ҡайһы бер айырмалы үҙенсәлектәрен дә күрһәтергә кәрәк.

---

[1] Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 2 октябрендә Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 335.

[2] ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 1, д. 7, л. 18; Крестьянская война..., 337—338-се биттәр.

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 49—50.

[4] ЦГАДА, ф. 259, оп. 113, д. 308, л. 8, 9; *Лосенкова Г. В.* Документы о пребывании в Эстонии участников Крестьянской войны 1773—1775 годов в России. — Советские архивы, 1973, № 3, 67-се бит.

[5] Рапорт майора К. И. Дитмара в Эстляндское губернское правление от 28 сентября 1800 г. — «Крестьянская война...» китабында, 341-се бит. Салауаттың һөргөн йылдары тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *Сидоров В. В.* О судьбе последних пугачевцев-башкир. — Вопросы истории, 1974, № 1, 212—214-се биттәр.

Салауат процесы материалдары, Пугачевтың һәм уның иң яҡын көрәштәштәренең эштәре кеүек үк, шул турала һөйләй: һорау алғанда ла, судта тикшергәндә лә, властар ғәйәт ҙур халыҡ сыуалышының социаль сәбәптәрен асыҡларға ынтылмай. Восстание етәкселәре, властар фекере буйынса, үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртыусы «ватан тыныслығының дошмандары», юлбаҫарҙар һәм йән ҡыйыусылар, халыҡтың «шыр наҙанлығынан», томаналығынан һәм тотанаҡһыҙлығынан файҙаланып, уны үҙ яҡтарына әүрәткәндәр һәм буйһондорғандар, элек-электән килгән «юғарынан ҡуйылған» тәртиптәргә һәм законлы властарға ҡаршы фетнә күтәрергә батырсылыҡ иткәндәр. Ошо күҙлектән һәм феодаль хоҡуҡ тәртибе нормаларынан сығып эш итеп, Екатерина администрацияһы чиновниктары тикшереү аҫтындағы восстание етәкселәрен уголовный енәйәтселәр, «яуыздар һәм кеше үлтереүселәр» итеп ҡарайҙар, шуға күрә бөтә һорау алыу, ҡағиҙә булараҡ, уларҙың үлтереүҙәрҙә һәм талауҙарҙа ҡатнашыуын билдәләүгә ҡайтып ҡала. Баш күтәреүселәр өҫтөнән тикшереү үткәреүҙә һәм суд язаларында феодаль дәүләттең синфи тәбиғәте, һорау алыу һәм суд органдарының синфи йүнәлеше асыҡ күренә. Массовый халыҡ хәрәкәтен тыуҙырыусы төп социаль-экономик сәбәптәрҙең асылына төшөнөп тормайынса һәм крепостной иҙеү тәртиптәренә ҡаршы көрәшеүсе баш күтәреүселәрҙең ысын маҡсаттарын боҙоп, әбей батша һәм уның администрацияһы Крәҫтиәндәр һугышын дәүләт һәм йәмғиәт терәктәренә енәйәтсел һөжүм итеү тип, закондарға ҡаршы бик ауыр енәйәт итеп ҡарай.

Шуға бәйле рәүештә, Пугачевтан һәм уның иң яҡын көрәштәштәренән һорау алғанда, тикшереүселәр, Екатерина II-нең күрһәтмәләренән сығып, восстание күтәреүселәрҙең үҙенә «Император Петр Өсөнсө» титулын алған етәксеһендә самозванецлыҡ идеяһының ҡайҙан килеп тыуыуына күп иғтибар бирә. Генерал-аншеф П. И. Паниндың (Екатерина II-гә 1774 йылдың 5 декабрендәге реляцияһында) Салауат һәм уның атаһы өҫтөнән процесты иң элек «үткән болала әлеге (башҡорт) халыҡтың үҙенең дә, шулай уҡ уның ҡырғыҙ-ҡыпсаҡтар менән һәм самозванецтың үҙе менән дә ысын бәйләнешен белеү» өсөн файҙаланырға тигән тәкдиме, һис шикһеҙ, ошо сюжет менән бәйләнгән була [1]. Ләкин уның фекерҙәрен әбей батша үҙе лә, тикшереүҙе ойошторoусылар ҙа хупламай. Процесс бер йүнәлештә — Салауаттың «яуызлыҡтарын» билдәләү йүнәлешендә генә алып барыла.

Пугачевсыларҙың эштәрен ҡарауҙа XVIII быуаттағы суд эштәренә хас һүлпәнлек һәм волокита булмай. «Ҡара халыҡ бунты» менән көрәштә хөкүмәт аппараты һәм хәрби частар быға тиклем булмаған тырышлыҡ һәм етеҙлек күрһәтә. Суд эштәре практикаһы эленән-эле закондарҙы боҙоп алып барыла. Хәрби уставтың хөкөм ҡарарҙарын «хәрби артикулдарҙа, дини һәм башҡа хоҡуҡтар-

---

[1] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 195-се бит.

ҙа раҫланылғанса»[1] сығарырға тигән талабы судьялар тарафынан Е. И. Пугачев һәм уның көрәштәштәренең эше буйынса 1775 йылдың 10 ғинуарында сентенция төҙөгән саҡта ғына ниндәйҙер дәрәжәлә иғтибарға алына[2]. Хөкөм ҡарарҙарының күпселегендә иһә, Салауат Юлаев эше буйынса билдәләмәләге кеүек үк, бер ниндәй ҙә законға нигеҙләнеү юҡ.

Икенсе яҡтан, Салауат Юлаев өҫтөнән суд-тикшереү процесын ойоштороу күренекле пугачевсыларҙың тикшереү эштәренең күбеһенән нык айырылып тора; Салауаттан һорау алыу башҡаларҙан күпкә һуңлап үткәрелә. Мәскәүҙә Салауаттан, Пугачевты язалап үлтергәндән һуң, ай ярым үткәс, һорау алалар. Өҫтәүенә, 1775 йылдың яҙында восстаниеның төп усаҡтары, нигеҙҙә, баҫтырылған була, хөкүмәт хәүефтән ҡотола һәм үҙенең позицияларын нығыта. Был хәл Салауат өҫтөнән процесты тыныс, ҡабаланмай ғына алып барырға мөмкинлек бирә. Тикшереү, билдәле булыуынса, 1774 йылдың ноябрь аҙағында подполковник Аршеневскийҙың поход канцелярияһында башлана һәм ете ай ярым буйы барғандан һуң, 1775 йылдың июлендә Ырымбурҙа хөкөм ҡарары сығарыу менән тамамлана. Пугачевты язалап үлтергәс һәм уның көрәштәштәренән үс алғас, властарға, «үҙ ғәйебен танымаусы» Салауатты шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре менән фашлау өсөн, тикшереүҙе ентеклерәк алып барыу мөмкинлеге тыуа.

Салауат эшенең икенсе үҙенсәлеге — уның өҫтөнән тикшереү һәм суд барышында төрлө учреждениеларҙа төҙөлгән төрлө-төрлө документтарҙың күп булыуы. Салауатты тикшереүҙә һәм язалауҙа үҙәк һәм урындағы аппарат органдары: Сенаттың Йәшерен экспедицияһы, Ҡазан йәшерен комиссияһы, Ырымбур һәм Ҡазан губернаторҙары, Ырымбур губерна һәм Өфө провинция канцелариялары, хәрби командалар ҡатнаша. Был процеста канцелярия чиновниктары һәм хеҙмәтселәре ҡыҙыу эшмәкәрлек йәйелдереп ебәрә. Салауаттан күп тапҡыр һорау алалар. Һаҡланған сығанаҡтарҙы өйрәнеү биш һорау алыу протоколын һәм өс мәртәбә күҙләштереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәр протоколын билдәләргә мөмкинлек бирә. Улар күберәк тә булғандыр тигән уй бар, сөнки Аршеневскийҙа (унда Салауат бер ай самаһы була), шулай уҡ Өфөлә Фрейман канцелярияһында, Ҡазанда Мещерскийҙа ҡабатлап һорау алыуҙары ла мөмкин бит әле. Бынан тыш, Салауат эше иҫәбенә шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре, протоколдар, башҡа пугачевсылар өҫтөнән тикшереү документтарынан күсермәләр, яҙышыу ҡағыҙҙары, билдәләмәләр, һәр төрлө инструкциялар, күрһәтмәләр, отчеттар, алғанды-тапшырғанды раҫлаған ҡағыҙҙар һәм башҡа документтар инә. Салауат эше унда килтерелгән документтарҙың күплеге һәм төрлөлөгө яғынан восстаниеның башҡа күренекле етәкселәренең эштәренән өҫтөн тора. Хәйер, бер Пугачевтың үҙенең тикшереү эшенә генә был ҡағылмайҙыр, сөнки унан һорау алыу һәм күҙ-

---

[1] ПСЗ I, 5-се том, № 3006, 407-се бит.
[2] Шунда уҡ, 20-се том, № 14233, 5—6-сы биттәр.

ләштереү протоколдары, шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре, яҙышыу ҡағыҙҙары һәм башҡа документтар тулы комплексында һаҡланған [1].

Феодаль-абсолютизм дәүләте аппаратында эҙәрләүҙәрҙең юғары органы Сенаттың Йәшерен экспедицияһының аяу белмәгән ҡулы Салауат Юлаев эшендә айырыуса яҡшы күренә. Екатерина II Салауат һәм уның атаһы өҫтөнән тикшереүҙе ошо экспедицияға тапшыра һәм уның ҡарарын аҙаҡ үҙе раҫлай. Салауатты язалау тураһындағы хөкөм ҡарарын әбей батшаның хуплауы — Екатерина II-нең ике йөҙлөлөгөн күрһәтеүсе йәнә лә бер дәлил булып тора. Мәрхәмәтле монарх булып күренергә тырышып, ул 1775 йылдың 17 мартындағы манифесы менән пугачевсылар өҫтөнән тикшереүҙе туҡтатыу тураһында иғлан итә. Ләкин был ялҡынлы патетикаға төрөнгән фраза ысынбарлыҡтан бик алыҫ торған буш һүҙ генә булып ҡала.

Салауат өҫтөнән суд-тикшереү процесы ғүмерлек каторгаға ебәргәнгә тиклем бик оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған тән язаһы процедураһы менән тамамлана. Бындай язаларға байтаҡ пугачевсылар дусар ителә, әммә уларҙың береһен дә, Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналин кеүек, улар «иң яуыз вәхшилек ҡылған һәм кеше үлтергән» урындарҙа, кисергән ғазаптарын күреп халыҡты ҡурҡытыу өсөн, бөтә ғаләм алдында язалау өсөн, йөҙҙәрсә саҡрым йөрөтмәйҙәр, сөнки, властар фекере буйынса, ҡурҡытыу яңы восстаниелар тоҡанмау өсөн иң йоғонтоло сара булған. Үткән боланың төп етәкселәренән иң һуңғыларҙан булып әсиргә алынған Салауат Юлаев менән уның атаһы феодаль-крепостной дәүләттең үсен иң һуңғылар булып ҡабул итә, «мәрхәмәтлеләрҙән дә мәрхәмәтле» әбей батшаның ҡаты ҡулын үҙ тәндәрендә татый.

---

[1] Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 3—5, 7, 9.

САЛАУАТ ЮЛАЕВ ЭШЕ БУЙЫНСА ТИКШЕРЕҮ ҺӘМ СУД МАТЕРИАЛДАРЫ, УНЫҢ ТУРАҺЫНДА БАШҠА ДОКУМЕНТАЛЬ СЫҒАНАҠТАР. ДОКУМЕНТТАРҘЫҢ ҠАЙҘАН АЛЫНЫУЫ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕН АНАЛИЗЛАУ ПРОБЛЕМАЛАРЫ

§ 1. АРХИВ ЭШТӘРЕ

Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм суд барышында был эш менән бәйле булған учреждениеларҙың эшмәкәрлегендә байтаҡ документтар барлыҡҡа килә. Һаҡланып ҡалған архив эштәрендә тәүтикшереүҙе һәм судтың төп материалдарын, шулай уҡ суд-тикшереү һәм дөйөм административ учреждениеларҙың яҙышыу ҡағыҙҙарын эсенә алған 82 документ [1] табылды. Документтар бөтәһе бергә йыйылмаған. Улар төрлө архивтарҙа һәм фондтарҙа һаҡлана, шуға күрә сығанаҡтарҙың бөтә ошо комплексын Салауат Юлаевтың тикшереү эше тип шартлы рәүештә генә атарға мөмкин. Китаптың тәүге главаһында, тикшереү һәм судтың төрлө этаптарында Салауат эше менән Сенаттың Йәшерен экспедицияһы, Ырымбур губерна канцелярияһы, Өфө провинция канцелярияһы шөғөлләнә, улар кәрәк булған осраҡтарҙа башҡа учреждениеларҙың һәм ғәскәри часть командирҙарының булышлығына таяна, тип билдәләнгәйне. Шуға күрә уларҙың эшмәкәрлектәренең документаль эҙҙәре бер нисә архивта айырым-айырым һаҡлана. Был материалдарҙы тәшкил итеүсе архив эштәрен яҙырға тотонғанға тиклем, тикшереү эше документтарының тарихына, йәғни, тикшереү эше тамамланғандан һуң, уларҙың яҙмышына туҡталырға кәрәк, бының тарҡау материалдарҙы табыу, сығанаҡтарҙы өйрәнеү йәһәтенән әһәмиәте бар, сөнки «материалдарҙың һаҡланып ҡалыуы ғына түгел, бәлки уларҙың теге йәки был фондтың һәм архивтың составында булыуы ла улар тарихының ошо стадияһы менән билдәләнә» [2].

Сенаттың Йәшерен экспедицияһы материалдары (йәшерен тикшереү комиссияларының эштәре менән бергә) XIX быуат башында Петербургтың боронғо эштәр архивына һаҡлауға бирелә. 1835 йылда улар Сит ил эштәре министерствоһының айырата мөһим политик һәм дәүләт эштәрен һаҡлау өсөн төҙөлгән Петербург архивы

---

[1] Документтарҙың һаҡланып ҡалған даналарының аҡламаларынан күсермәләр, шулай уҡ уларҙың ҡараламалары был иҫәпкә индерелмәгән.

[2] *Шепелев Л. Е.* Изучение делопроизводственных документов XIX — начала XX вв. — «Вспомогательные исторические дисциплины» китабында. Л., 1968, 1-се том, 126-сы бит.

йәки Россия империяһының Дәүләт архивы составына бирелә, бында улар, бер кемгә лә тотонорға рөхсәт ителмәйенсә, мисәтләнгән пакеттарҙа һаҡлана. 1864—1871 йылдарҙа тарихи барлыҡка килгән фондтар һәм ошо архив эштәре яһалма рәүештә 30 предмет-тематик төркөмгә йәғни разрядка бүленә. Һәр разряд, ҡағиҙә рәүешендә, ҡасандыр бер бөтөн архив фондтары булған коллекцияларҙан һәм өлөштәрҙән төҙөлә.

Йәшерен экспедиция, йәшерен комиссиялар һәм башҡа учреждениелар материалдарының 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын сағылдырыусы ҙур өлөшө «Дәүләт енәйәттәре буйынса уголовный эштәр» тигән дөйөм исем аҫтында VI разрядҡа инә. «Преображенский приказ, Йәшерен канцелярия һәм Йәшерен экспедиция» тип аталған VII разрядҡа Йәшерен экспедиция тарафынан политик эштәр буйынса сығарылған бөтә билдәләмәләр, шулай уҡ 1762 йылдан алып 1801 йылға тиклем экспедиция чиновниктарының ҡулы аша үткән кешеләр тураһында реестрҙар, исемлектәр һәм ведомостар инә.

Совет власы йылдарында элекке Дәүләт архивының документаль материалдары Сит ил эштәре Халыҡ Комиссариатының Мәскәү дәүләт архивы составына инде. Ошо архив базаһында Үҙәк тарих архивының Мәскәү бүлегенең Боронғо материалдар архивы төҙөлә, 1941 йылдан алып ул Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивы (ЦГАДА) [1] тип атала башлай.

Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивында булған элекке Дәүләт архивының VI разрядында, йәғни хәҙер аталғанса 6-сы һанлы фондта, 427-се һан менән «Пугачев полковнигы башҡорт Салауат Юлаев тураһында һәм уның атаһы Юлай Аҙналихов тураһында эш» һаҡлана. Эш үткән быуаттың 60-сы йылдарында төҙөлгән һәм яҙылған. Ҡағыҙҙарҙың элекке бит һандарына ҡарап, шундай һығымта яһарға мөмкин: документтар бер папкаға әүәлге бер нисә архив эштәренән йыйылған, беренсе биш документ ҡасандыр бергә тегелгән булған, ләкин бит һаны һуғылмаған. Уларға һуңыраҡ, башҡа эштән алып, Салауат Юлаев, Юлай Аҙналин һәм Ҡолой Балтачев күрһәтеүҙәре яҙылған протоколдарҙы ҡушалар, улар 22-нән алып 37-гә тиклем иҫәпләнә. Ошо йәки, дөрөҫөрәге, өсөнсө эштән тағы ла туғыҙ документ һайлап алына, уларҙың тәүге бит һандары 50-нән алып 78-гә тиклем (нумерлағанда 53—56, 69, 70, 76-сы биттәрҙәге документтар төшөп ҡалған) була. Берләштерелгән документтарға ул саҡта 1-ҙән алып 58-се биткә тиклем һан һуғылған. Хәҙерге ваҡытта ошо бит һандарынан тәүге туғыҙ ҡағыҙ һаҡланмаған. 1934 йылда эште яңынан нумерлап сығалар, һорау алыу материалдары хәҙер 1-се биттән алып 49-ға тиклем (3-сө бит литерлы) булып сыға. Был 1959 йылда документтарҙы барлағанда дөрөҫләнә. Бөтә документтар хронологик тәртиптә урынлаштырылған. Уларҙың ун алтыһы Мәскәүҙә Сенаттың Йәшерен экспе-

---

[1] *Кононов Ю. Ф.* Из истории организации и комплектования б. Государственного архива Российской империи. — Труды / Москов. гос. ист.-арх. ин-т. М., 1957, 8-се том, 285—286, 317, 319, 333-сө биттәр.

дицияһы тарафынан үткәрелгән суд-тикшереү процесының барышын сағылдыра: беренсе документ — Ҡазан губернаторы П. С. Мещерскийҙың Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналинды Ҡазандан Мәскәүгә оҙатыу тураһында генерал-прокурор А. А. Вяземскийға яҙған хаты, һуңғы документ — Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорптың тикшереү аҫтындағы шул уҡ кешеләрҙең Мәскәүҙән Ырымбурға килтерелеүе тураһында 1775 йылдың 16 апрелендә Вяземскийға яҙған хаты. Ошо документтарҙан һуң генерал-прокурорҙың Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналин эше буйынса тикшереүҙе тамамлауға ҡағылған поручениеһының үтәлеүе тураһында һәм хөкөм ҡарарының ерснә еткерелеүе тураһында Рейнсдорптың 1775 йылдың 29 октябрендә Вяземскийға яҙған хаты тегелгән. Шулай итеп, эштә башлыса Салауат Юлаев өҫтөнән суд-тикшереү процесының икенсе этабына ҡағылган документтар тупланған.

Әгәр ҙә беҙ Йәшерен экспедицияның суд-тикшереү материалдарына XIX быуатта баш күтәреүселәр властарының бер нисә документы өҫтәлеүен дә билдәләп үтмәһәк, һүрәтләү тулы булмаҫ ине. Салауат өҫтөнән суд-тикшереү барышында был документтар ҡатнаштырылмай, ә улар Салауатты фашлаусы етди дәлил булып хеҙмәт итә алыр ине. Салауат Юлаевтың 1774 йылда Красноуфимскиҙа һәм Югов заводында язалау командаларының ҡулына эләккән яҙма өндәмәләре шунда уҡ Ҡазан йәшерен комиссияһына тапшырыла. Ләкин Салауат өҫтөнән тикшереү көндәрендә комиссия чиновниктары Йәшерен экспедицияға биреү өсөн уларҙы таба алмай. Йөҙ йыл үткәс, элекке Дәүләт архивы работниктары, документтарҙы разрядтар буйынса темаларға бүлеп урынлаштырғанда, Ҡазан йәшерен комиссияһы эштәренән туғыҙ битте һайлап ала һәм, уларҙың тышына «Поход полковнигы Салауат Юлаев. 1774 йылдың ғинуар—феврале» тип яҙылған папкаға һалып, Йәшерен экспедицияла Салауат эше буйынса һорау алыуҙарҙың материалдарына ҡуша. Папкала 1774 йылдың ғинуарында—февралендә Красноуфимск—Көнгөр районында Салауаттың эшмәкәрлегенә ҡағылған биш документ бар. Былар Салауаттың ике указының төп нөсхәләре: атаман Г. Т. Ситниковҡа уның бойороғо, шулай уҡ Красноуфимск казактарының Салауат исеменә ебәргән ике донесениеһы [1]. Бит һандары төрлө (756—757, 879, 20—21, 8, 67, 9) булған йәғни төрлө эштәрҙән алынғанлығы күренеп торган был документтар 60-тан 68-гә тиклем нумерлана, ә 1959 йылдағы нумерлау буйынса улар 51—60-сы биттәр булып иҫәпләнә.

Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивының шул уҡ фондында 593-сө һанлы эштә, башлыса, Өфөлә барған суд-тикшереү процесының һуңғы этабына ҡағылған төп документтар тупланган. Улар «Өфө провинция канцелярияһының Пугачев болаһы тураһында 3-сө һанлы эше; Пугач тураһында йәшерен яҙышыу ҡағыҙҙары, вазифалы кешеләрҙең донесениелары, рапорттары, белдереүҙәре; Пугачев восстаниеһында ҡатнашыусылар өҫтөнән төрлө кешеләр-

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 243—246, 251, 252-се биттәр.

ҙең ошаҡтары; ҡулға алыныусыларҙың рус һәм татар телдәрендә күрһәтеүҙәре, уларҙан һорау алыуҙар» тип аталған ҙур күләмле эштең бер өлөшөн тәшкил итә. Архив эшенең исеме күрһәтеүенсә, уның документтары Өфө провинция канцелярияһында башҡарылған эштәрҙең бер өлөшө. Ҡалала йыш ҡына булып торған янғындар ваҡытында урындағы күп учреждениеларҙың, шул иҫәптән провинция канцелярияһының үҙенең дә, архив фондтары юҡҡа сыҡһа ла, Пугачев восстаниеһы хаҡында имен ҡалған бер нисә эш Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем Өфө губерна идараһы архивында һаҡлана. Уларҙың бер өлөшө граждандар һуғышы ваҡытында юғала[1]. Ләкин 1920-се йылдар башында уҡ әле Башҡортостан архивында провинция канцелярияһының 1774 йылдың апреле — 1775 йылдың октябре араһындағы осорона ҡағылған ике эше була. Илдә һуңғы крәҫтиәндәр һуғышының 150 йыллығына әҙерлек йәйелдерелеү уңайы менән уның тарихын сағылдырыусы һәм урындарҙағы архивтарҙа һаҡланыусы документтар Мәскәүҙә туплана башлай. Был эш инициаторҙарының береһе булған Е. М. Ярославскийға 1925 йылда Өфө провинция канцелярияһының юғарыла иҫкә алынған ике эше тапшырыла[2]. Үҙәк тарих архивының (һуңыраҡ Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивы) Мәскәү бүлеге древлехранилищеһы уларҙы һаҡлауҙың яңы урыны булып әүерелә. Улар 6-сы фондҡа 592 һәм 593-сө һандары аҫтында «Ҡушымта» бүлегенә индерелә.

Салауат менән уның атаһы өҫтөнән Өфөлә тикшереү һәм суд үткәреү тураһында һөйләүсе документтар 593-сө эштең йөҙгә яҡын битенән (303-тән алып 400-гә тиклем) тора. Был документтарҙың провинция канцелярияһының яҙышыу ҡағыҙҙары менән дөйөм эшкә ҡасан килеп ҡушылыуын билдәләү мөмкин түгел. Шуныһы шикһеҙ, улар тәүҙә үҙ аллы архив эшенән торған: документтарҙа 1-ҙән алып 104-се биткә тиклем элекке нумерлау эҙе бар (ҡайһы бер документтарҙа, уларҙың боҙолоуы арҡаһында, һандар йә юҡҡа сыҡҡан, йә иһә беленер-беленмәҫ кенә). XIX быуат уртаһында улар 395 биттән торған йыйылма эш составына инган. Эш, төпләнеп, Өфө губернаторы канцелярияһы эштәренең стандарт тышлығына тышлана, документтарҙың эске исемлеге лә шул саҡта уҡ төҙөлгән. Тикшереү материалдары 252—299-сы һандар аҫтында яҙылған. Хәҙерге ваҡытта уның тышы шул тиклем туҙған, эштең элекке исеменән типография хәрефе менән баҫылған «Дело» һүҙе һәм ҡулдан яҙылған «О Пугаче» тигән өлөшө генә тороп ҡалған. 1925 йылда Мәскәүҙә тултырылған икенсе тышлыҡта юғарыла ҡилтерелгән исем күрһәтелгән. Шул саҡта уҡ уға яңы бит һаны ҡуйып сығалар, һуңғы раҫлаусы яҙма 1969 йылда яһалған. Эштә

[1] Башҡортостан үҙәк архивы мөдире В. Галановтың 1924 йылда Башҡорт АССР-ы Үҙәк Башҡарма Комитетына биргән докладында, Пугачев восстаниеһының тарихы буйынса күп документтарҙы колчаксылар алып киткән, тип әйтелә (ЦГА БАССР, ф. 564, оп. 1, д. 21, л. 1 об.).

[2] Башҡортостан Үҙәк архивының 1924 йылдың 1 октябренән 1925 йылдың 1 октябренә тиклемге эше тураһында отчет (ЦГА БАССР, ф. 564, оп. 1, д. 25, л. 14, 17, 20).

408 бит иҫәпләнә. Шуларҙың 8-е литерлы, һәм, әйтеп үтелеүенсә, уның һуңғы сирек өлөшөн Өфөләге беҙҙе ҡыҙыҡһындырған тикшереү, суд һәм уның хөкөм ҡарарын еренә еткереү документтары тәшкил итә. Документтарҙың был төркөмөнөң үҙенсәлекле яғы: унда тикшереүҙәрҙең үткәндәге этабының ҡайһы бер материалдары бар. Бында, атап әйткәндә, Сенат Йәшерен экспедицияһы документтарының күсермәләренән Ырымбур губерна канцелярияһы тарафынан әҙерләнгән күсермәләр һәм шулай уҡ Салауат тураһында Ырымбурҙа йыйылған материалдарҙың күсермәләре бар. Эш документтарының иң ҡиммәтле өлөшө — Өфөләге тикшереү материалдары. Был материалдар Салауат менән Юлайҙы Өфөгә килтереү хаҡында Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 1 майындағы билдәләмәһе менән башлана ла тикшереүҙең тамамланыуы тураһында уның 1775 йылдың 6 июлендә И. А. Рейнсдорпҡа ебәргән рапорты менән ябыла. Материалдарҙың был төркөмөнә хөкөм ителгәндәргә тән язаһының бирелеүен һәм уларҙың Балтик портына мәңгелек каторгаға ебәрелеүен яҡтыртҡан ун алты документ өҫтәлгән.

593-сө эш документтарында крайҙы өйрәнеүселәр Р. Г. Игнатьев менән Ф. Д. Нефедовтың улар өҫтөндә эшләү эҙе һиҙелә. Сыбыртҡы менән язалағандан һуң, Салауат менән Юлайҙы Өфөнән Ҡазанға оҙатыу тураһында Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 2 октябрендә Ҡазан губерна канцелярияһына ебәргән донесениеһының сит-ситтәренә былай тип яҙылған: «Был эштән күсереп алынған өҙөмтәләр тәбиғәт белеме, антропология һәм этнография буйынса Император йәмғиәтенең действ[ительный] ағзаһы Филипп Нефедовҡа ебәрелде. 1870 йыл, августың 1 көнө. Өфө» [1]. «Билдәләнгән яуыздар Юлай менән Салауат сыбыртҡы менән һуҡтырылырға һәм нисәшәр тапҡыр һуҡтырылырға тейешле урындар күрһәтелгән һәм провинция властары тарафынан әҙерләнгән реестрҙа» шундай билдә яһалған: «Был эштән, йөҙҙән ашыу йыл үткәс, 1876 йылда Өфө губерна статистика комитеты ағзаһы Руф Гаврилович Игнатьев тарафынан өҙөмтәләр алынды» [2].

Ырымбур губернаторы Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналин өҫтөнән Өфөләге тикшереү барышын иғтибар менән күҙәтә, тикшереү аҫтындағыларҙы язалау буйынса уға бирелгән задание тураһында Өфө провинция канцелярияһы һәм башҡа учреждениелар менән уның яҙышыу ҡағыҙҙары губерна канцелярияһында айырым эш тәшкил итә. Архивҡа бирелгән был эш Ырымбурҙа йөҙ йылдан артыҡ һаҡланған. Мәҫәлән, Турғай өлкә идараһы архивының 1-се һанлы исемлегендә 1889 йылда Ырымбур ғилми архив комиссияһы ағзаһы А. В. Игнатович тарафынан төҙөлгән һәм 11-се һан аҫтында «Башҡорт Юлай Аҙналин тураһында уның төрлө яуызлыҡтары буйынса» 55 биттән торған 1775 йылғы эш иҫәпләнә. Шул саҡта уҡ эш элекке Ырымбур сик буйы комиссияһы архивына

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 397 об.
[2] Шунда уҡ, л. 383 об.

бирелгән була[1]. Юлай Аҙналин тураһында 1775 йылғы документтарҙың уның өҫтөнән һәм уның улы Салауат өҫтөнән суд-тикшереү материалдары булыуы шик тыуҙырмай. Ләкин әйтелгән исем аҫтында эш һаҡланмаған. Һуңыраҡ ул үҙгәртеп төҙөлгән булһа кәрәк, тип фараз итергә мөмкин. Был түбәндәге күҙәтеү менән дәраҫлана. Мәскәүҙән Рейнсдорпҡа ебәрелгән дүрт документ: генерал-прокурор А. А. Вяземскийҙың күрһәтмәһе, баш күтәреүселәрҙең Ҡазан йәшерен комиссияһындағы күрһәтеүҙәренән күсермәләр, Салауат Юлаевтың, Юлай Аҙналиндың һәм шаһит Ҡолой Балтачевтың Йәшерен экспедициялағы күрһәтеүҙәре протоколдары, Сенат һәм Хәрби коллегияның тикшереү эшенә ҡағылмаған указдары менән бергә Ырымбур дәүләт архивы эшендә әле лә бар[2]. Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналин эше буйынса Рейнсдорптың 1775 йылдың 15 июлендәге хөкөм ҡарары (ул ғали йәнәптәре канцелярияһында 1775 йылда сығарылған билдәләмәләр журналында теркәлгән) шул уҡ эшкә ҡарай, уның тәртип номеры ла юҡ һәм 48-се һәм 49-сы һанлы билдәләмәләр араһына хронологик тәртиптә һалынған[3]. 26 биттән торған был документтар элекке эштең яртыһынан кәмерәген тәшкил итә.

Сенаттың Йәшерен экспедицияһының һәм Өфө провинция канцелярияһының һаҡланып ҡалған материалдары буйынса (был турала юғарыла һүҙ барғайны) Ырымбур губерна канцелярияһының юғалған архив эшенең составын күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Унда түбәндәге документтар булырға тейеш: Мещерскийҙың Рейнсдорпҡа яҙған хатының аҡламаһы, уға туғыҙ баш күтәреүсенең Ҡазан йәшерен комиссияһында уларҙан һорау алгандағы күрһәтеүҙәренән өҙөктәр теркәлгән (был документтар 593-сө эштә һаҡланған һәм 4 биттән тора); Юлайҙың восстаниела ҡатнашыуы һәм уның мөлкәте тураһында Ырымбур губерна канцелярияһы белешмәһенең бында ҡалдырылған күсермәһе (төп нөсхәһе 593-сө эштә, 1 биттә); Салауат менән Юлайҙың Ырымбурға килтерелеүе тураһында Рейнсдорптың 1775 йылдың 16 апрелендә Вяземскийға яҙған хатының бында ҡалдырылған күсермәһе (төп нөсхәһе 427-се эштә, 1 биттә); Өфөлә тикшереү алып барыу тураһында Рейнсдорптың Өфө провинция канцелярияһына күрһәтмәһенең бында ҡалдырылған күсермәһе (төп нөсхәһе 593-сө эштә, 1 биттә); конвойҙың тикшереү аҫтындағылар менән Өфөгә килеүе хаҡында Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 3 майында Рейнсдорпҡа биргән рапортының аҡламаһы (күсермәһе 593-сө эштә, 1 биттә); Салауат менән Юлайҙың эше буйынса Өфөләге суд-тикшереү документтары экстрактының аҡламаһы (ҡараламаһы 593-сө эштә, 10 биттә); тикшереү һөҙөмтәләре тураһында Өфө провинция канцелярияһының Рейнсдорпҡа яҙған рапорты (593-сө эштә провинция канцелярияһының билдәләмәһе 4 биттә һаҡланған, ул,

---

[1] Труды Оренбургской ученой архивной комиссии. Ырымбур, 1914, 30-сы сығарылыш, 53, 57-се биттәр.
[2] ГАОО, ф. 3, д. 145, л. 46—47.
[3] Шунда уҡ, д. 148, л. 71—74.

Рейнсдорптың хөкөм ҡарарының йөкмәткеһе буйынса фекер йөрөткәндә, иҫкә алынған рапорттан һүҙмә-һүҙ күсереп алынған); Өфө провинция канцелярияһы рапорттарының аҡламалары: 6 июлдәге — документтарҙың экстрактын губернаторға ебәреү тураһында (бында ҡалған күсермәһе 593-сө эштә, 1 биттә), 22 июлдәге — хөкөм ҡарары аҡламаһының кире ҡайтарылыуы тураһында (ҡалдырылған күсермәһе 593-сө эштә, 1 биттә), 2 һәм 20 октябрҙәрҙәге — тән язаһы биреү һәм хөкөм ителгәндәрҙе каторгаға ебәреү тураһында (ҡалдырылған күсермәләре 593-сө эштә, 3 биттә); хөкөм ҡарарының еренә еткерелеүе хаҡында Рейнсдорптың 1775 йылдың 29 октябрендә генерал-прокурор Вяземскийға яҙған хатының бында ҡалдырылған күсермәһе (төп нөсхәһе 427-се эштә, 2 биттә). Шулай итеп, һаҡланып ҡалған биш документтан башҡа, эштә тағы ла Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү һәм хөкөм ҡарарын үтәү барышы тураһында яҙышыу документтарының ун өс аҡламаһы һәм ҡалдырылған күсермәһе булған, тип уйларға мөмкин. Дөйөм алғанда, улар 55 битлек юғалған эште тәшкил итә лә инде.

Суд-тикшереү процесына ҡағылған башҡа айырым документтар ҙа тарҡау хәлдә һаҡлана. Юғарыла иҫкә алынған VII разрядта, йәки Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивының 7-се фондында, «ғали йәнәптәренең үҙе ҡул ҡуйған указдары һәм Йәшерен экспедицияның билдәләмәләре» лә булған эштә Салауаттың «енәйәттәрен» Мәскәүҙә тикшереүҙең йомғаҡлау документы — Екатерина II-нең «Шулай булһын» [1] тип яҙған резолюцияһы менән Йәшерен экспедицияның 1775 йылдың 16 мартындағы билдәләмәһенең аҡламаһы бар. Дәүләт архивының VI разрядында, Ҡазан йәшерен комиссияһы эштәре материалдарын эсенә алған 507-се эштә подполковник Н. Я. Аршеневскийҙың Салауат Юлаевты ҡулға алыу тураһында 1774 йылдың 5 декабрендә генерал-майор П. С. Потемкинға биргән рапорты, шулай уҡ 1775 йылдың 13 февралендәге ике документ һаҡланған, уларҙың береһе — Ҡазан йәшерен комиссияһының Салауат менән Юлайҙы Йәшерен экспедицияға оҙатыу тураһында үҙенең шефына рапорты, икенсеһе — поручик М. Титовтың колодниктарҙы Мәскәүгә һаҡ аҫтында алып барыу өсөн ҡабул итеп алыуы тураһындағы распискаһы [2]. Шул уҡ эштә әсиргә алынған ун баш күтәреүсенең күрһәтеүҙәренең протоколдары һаҡлана: комиссиялар һәм Ҡазан губерна канцелярияһы чиновниктары уларҙан тикшереүселәр өсөн өҙөмтәләр кусереп алған [3]. Крепостарҙың Себер линияһы командиры И. А. Деколонгтың хәрби-поход канцелярияһындағы документтар араһында 627-се эштең (1—13-сө киҫәктәр) 6-сы фондында генерал Ф. Ю. Фреймандың генерал А. Д. Скалонға ике хаты һәм Аршеневскийҙың Са-

---

[1] ЦГАДА, ф. 7, д. 2043, ч. 14, л. 156—162.
[2] Шунда уҡ, ф. 6, д. 507, ч. 3, л. 50, 95, 102.
[3] Шунда уҡ, ч. 4, л. 86—90, 218—222, 315, 550—555; ч. 5, л. 42, 117, 131, 139.

лауатты ҡулға алыу һәм Ҡазанға оҙатыу тураһында Фрейманға ебәргән рапорты барлығы беленде [1].

Генерал-аншеф П. И. Паниндың хәрби-поход канцелярияһы материалдарында ла күп кенә документтар һаҡланған. Был документтар Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивының 6-сы фондындағы бер нисә эштә, Панидарҙың һәм Блудовтарҙың шул уҡ архивтағы шәхси фондында (1274-се фонд), шулай уҡ В. И. Ленин исемендәге дәүләт китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлегендә 222-се фондта һаҡлана. Улар араһында: А. В. Суворовтың 1774 йылдың 1 декабрендә П. И. Панинға рапорты, П. И. Паниндың Салауатты ҡулға алыу тураһында 1774 йылдың 5 декабрендә әбей батшаға реляцияһы һәм Екатерина II-нең 1775 йылдың 27 ғинуарындағы рескрипты [2]. Хәрби-поход канцелярияһынан сыға торған документтарҙы теркәү журналында Паниндың Салауат Юлаевты һаҡ аҫтында тотоу тәртибе тураһында һәм уны Мәскәүгә оҙатыу тураһында 1774 йылдың 6 декабрендә Суворовҡа, ә 1774 йылдың 6 декабрендә һәм 1775 йылдың 28 ғинуарында Ҡазан губернаторы Мещерскийға ебәргән ордерҙарының яҙмалары бар [3]. Паниндарҙың шәхси фондында шулай уҡ Мещерскийҙың Панинға уның бойороҡтарының үтәлеүе тураһында отчет менән 13 февралдәге рапорты, Суворовтың Салауатты һәм уның атаһын тән язаһы биреү урындарына һаҡ аҫтында оҙатыуҙа Фрейман командаһының ҡатнашыуын белдергән 1775 йылдың 31 июлендәге рапорты булыуы беленде [4]. Паниндың колодниктарҙы Мәскәүгә килтереү тураһында 1775 йылдың 23 февралендә Мещерскийға ебәргән ордеры Ленин исемендәге Дәүләт китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлегендә Паниндарҙың шәхси фондында һаҡланған [5].

Башҡорт АССР-ы Үҙәк Дәүләт архивының таралып ятҡан эштәрендә 30-сы йылдарҙа Өфө провинция канцелярияһының Салауат Юлаев менән уның атаһын тән язаһына тарттырыу хаҡындағы хөкөм ҡарарын еренә еткереүгә бәйле документтар табыла. Былар — Өфө канцелярияһы работниктары тарафынан 1775 йылдың октябрендә әҙерләнгән эш ҡағыҙҙары күсермәләре. Улар иҫәбендә Рейнсдорптың хөкөм ителгәндәрҙе язалау тураһында уға ентеклерәк белдереүҙе талап иткән бойороғо, шул турала провинция канцелярияһының 1775 йылдың 20 октябрендәге донесениеһы һәм тән язаһының бирелеүе тураһында белдереүһе бар. Был документтар Ырымбур өлкәһенең Дәүләт архивында һаҡланған документтарҙан суд-тикшереү материалдарының 1940 йылда күсереп алынған күсермәләре менән бергә үҙенән-үҙе Ырымбур генерал-губернаторы фондына индерелгән [6].

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 237, 274, 317.
[2] Шунда уҡ, д. 490, ч. 2, л. 222—224. ГБЛ ОР, ф. 222, папка VIII, ч. 1, л. 123.
[3] Шунда уҡ, ф. 1274, д. 200, л. 345, 436, 437.
[4] Шунда уҡ, д. 202, л. 299; д. 203, л. 270.
[5] ГБЛ ОР, ф. 222, оп. 1, д. 7, л. 444.
[6] ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 1, д. 7, л. 15—17, 18—20.

Бында суд тикшеренеүенә ҡағылған берҙән-бер документ тураһында ла әйтергә мөмкин. Ул документ Үҙәк Дәүләт хәрби-тарих архивы фондтарынан алынған. Һүҙ Владимир йәйәүле полкы поручигы Х. Шицтың аттестаты тураһында бара, унда мишәр йөҙ башлығы Ямғур Әбдесәләмовтың Салауат менән уның биш көрәштәшен Ҡазан йәшерен комиссияһына оҙата барыусы һаҡ командаһы составына инеүе раҫлана. Документ 1775 йылдың 31 ғинуарында бирелгән, төп нөсхәһе Ямғурҙа ҡалған, ә күсермәһен ул үҙен обер-офицер итеп наградлау тураһындағы юллауына ҡушымта итеп (башҡа документтарҙың күсермәләре менән бергә) 1791 йылда Өфө провинцияһына идара итеүсе генерал-поручик А. А. Пеутлинға биргән. Ямғур һәм башҡа старшиналарҙың үтенес ҡағыҙҙары хәрби коллегияға ебәрелгән һәм улар Хәрби коллегия президенты Н. И. Салтыковтың ҡағыҙҙары араһында һаҡланған [1].

Шулай итеп, Салауат Юлаев эше буйынса тәүтикшереү һәм уның өҫтөнән суд-тикшереү эшенә ҡағылған материалдар комплексы әлеге көнгә 82 документтан тора, улар ике Үҙәк дәүләт архивында (ЦГАДА һәм ЦГВИА), Ленин исемендәге Дәүләт китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлегендә, Ырымбур өлкә дәүләт архивында һәм Башҡорт АССР-ы Үҙәк дәүләт архивында табылды.

§ 2. ТИКШЕРЕҮ, СУД ПРОЦЕСЫН ҺӘМ СУД ҠАРАРҘАРЫН ҮТӘҮ БАРЫШЫН ЯҠТЫРТҠАН ДОКУМЕНТТАР

Һорау алыу документтарының формаһы һәм йөкмәткеһе крепостной дәүләт закондары менән билдәләнә. Мәҫәлән, 1716 йылғы Хәрби уставтың икенсе главаһы — «Процестарҙың йәки суд дәғүәләренең ҡыҫҡаса һүрәтләнеше» тигән глава енәйәт һәм граждандарлыҡ эштәрен тикшереүҙе үткәреү тәртибен закон менән нығыта: «Процесс өс өлөшкә бүленә: беренсеһе хәбәр итеүҙән башлана һәм яуап биреүсенең яуапҡа тарттырылыуына тиклем дауам итә; 2-се өлөшө сентенцияға йәғни хөкөм ҡарарын сығарғанға тиклем була; 3-сөһө хөкөм ҡарарынан алып процестың бөтөнләй тамамланыуына тиклем бара» [2]. Тәүтикшереүҙең урынлашҡан практикаһына ярашлы рәүештә XVII—XVIII быуаттарҙа политик һәм енәйәт эштәренең төп документтары түбәндәгеләр була: инициатива документы (ошаҡ, үтенес ғаризаһы, рапорт һәм башҡалар); ғәйепләнеүселәрҙән һәм шаһиттарҙан һорау алыу протоколдары; документаль дәлилдәр; суд билдәләмәһе — хөкөм ҡарары; хөкөм ҡарарын еренә еткереү тураһында яҙышыу ҡағыҙҙары [3]. Ләкин суд-тикшереү эштәре, эҙәрләү учреждениеларының архивтары юғалыу сә-

---

[1] ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 113.

[2] ПСЗ I, т. 5, № 3006, 388-се бит.

[3] *Чистякова Е. В.* Күрһәтелгән әҫәр. 91—98-се биттәр; *Буганов В. И.* Сыскные дела о Московском восстании 1662 г., 322—327-се биттәр; *Голикова Н. Б.* Политические процессы при Петре I. МДУ нәшриәте, 1957; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева. 3-сө том, 379—435-се биттәр; *Бабкин Д. С.* Процесс А. Н. Радищева. 39—59-сы биттәр.

бәпле, шундай тулы составында бик аҙ осраҡтарҙа ғына һаҡланған. Ғәйепләүҙәрҙең исемлегенән (теҙмәһенән) торған һәм тикшереүгә башланғыс һалған инициатива документтарының булмауы XVII—XVIII быуаттарҙа күп кенә политик эштәрҙең үҙенсәлеге булып тора. Был 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының етәкселәре өҫтөнән тикшереүҙәргә лә ҡағыла. Е. И. Пугачев һәм уның иң яҡын көрәштәштәре тураһында мәғлүмәттәрҙе йәшерен комиссиялар, губерна һәм провинция канцеляриялары восстание башланғас уҡ йыя. Шуға күрә тикшереү һорау алыуҙарҙан башлана. Салауат Юлаев процесында ла шулай була. Подполковник Н. Я. Аршеневский Ҡалмыҡ ауылында башлаған тикшереү эшенә ҡағылған төп документтар юғалған булһа ла, Салауаттан һорау алыу барышы тураһында беҙ язалау отрядтары командирҙарының яҙышыуынан беләбеҙ. Шул уҡ сығанаҡтан билдәле булыуынса, Салауат менән осрашҡанға тиклем, Аршеневский ошо «иң баш боласыны» ҡулға алыу тураһында поручик В. Лесковскийҙың рапортын ала, ләкин бындай документты тикшереүгә башланғыс һалыусы донос итеп ҡарарға кәрәкме икән?!

Генерал Ф. Ю. Фреймандың, Салауат Юлаевты әсиргә алыу тураһында белдереп, 1774 йылдың 27 ноябрендә генерал А. Д. Скалонға яҙған хаты Салауат өҫтөнән суд-тикшереү эшен башлап ебәреүсе документ (был осраҡта процестың бөтә һаҡланып ҡалған материалдарының комплексы күҙ алдында тотола) булып тора. Процестың һуңғы документы — губернатор И. А. Рейнсдорптың Салауаттан һорау алыуҙың тамамланыуы һәм уны язалау хаҡында 1775 йылдың 29 октябрендә генерал-прокурор А. А. Вяземскийға яҙған хаты. Эш составына махсус шымсылыҡ органдары: Сенаттың Йәшерен экспедицияһының һәм Ҡазан йәшерен комиссияһының, урындарҙағы власть органдарының — губерна һәм провинция канцелярияларының, хәрби-поход канцелярияларының документтары инә. Материалдар тикшереү һәм судтың төп документтарына, тикшереүҙе ойоштороу тураһында, Салауатты һаҡ аҫтында йөрөтөү һәм тотоу, башҡа шундайҙар тураһында яҙышыу ҡағыҙҙарына бүленә. Уларҙың бөтәһе лә (Салауаттың хатынан башҡалары) хөкүмәт учреждениелары документтары булып торһа ла, йәғни восстание дошмандары лагерынан сыҡһа һәм баш күтәреүселәргә ҡарата дошмандарса тенденциоз характерҙа булһа ла, шулай ҙа Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғалары күп йәһәттән унда ҡатнашыусылар позицияһынан яҡтыртылған күп кенә документтарҙы күрһәтергә мөмкин. Салауаттың һәм башҡа пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдар шундай сығанаҡтар иҫәбенә инә. Документтарҙың ҙур өлөшө (82-нән 46-һы) төп нөсхәлә, 21 документ — урында ҡалдырылған күсермә, 14-е күсермә хәлендә һаҡланған, бер документ төрки теленән руссаға тәржемә ителгән.

Салауат өҫтөнән суд-тикшереү процесы материалдары элек сығанаҡтарҙы өйрәнеү нигеҙендә анализлауға дусар ителмәгән. Билдәле булыуынса, яҙма сығанаҡтарға фәнни тәнҡит уларҙың ҡайҙан килеп сығыуын, төп функцияһын, формаһын, йөкмәткеһен, ту-

лымы ул, түгелме, уларҙа килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгөн һәм аныҡлығын өйрәнеүҙән тора. Тикшеренеү яҙма сығанаҡтар барлыҡҡа килгән тарихи шарттарҙы өйрәнеү нигеҙендә төҙөлә.

Сығанаҡтарҙы өйрәнеү эштәренең башланғыс стадиялары сығанаҡтарҙың барлыҡҡа килеү ваҡиғалары, ваҡыты, урыны, үҙенсәлеге тураһындағы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе талап итә. Шуға бәйле рәүештә китаптың беренсе главаһы политик эҙәрләү учреждениеларының эшмәкәрлеген характерлауға, Салауат эшен тикшереүҙә ҡатнашлыҡ иткән учреждениеларҙы һәм кешеләрҙе асыҡлауға, суд-тикшереү үткәреүҙең барышын яҡтыртыуға арналды.

Документтарҙы өйрәнеүҙең икенсе стадияһы — «тышҡы» тәнҡит. «Тышҡы» тәнҡит төшөнсәһенә документтың формаһын һәм эске структураһын өйрәнеү инә, һәм был бер төр сығанаҡтың икенсеһенән айырмаһын билдәләй. Быға документтың килеп сығыу, уның датаһының дөрөҫлөгөн, артабанғы әһәмиәтен һәм эштәге урынын асыҡлау мәсьәләләре, шулай уҡ өҫтәмәләрҙе, төҙәтмәләрҙе һәм яҙманың үҙенсәлектәрен табыу маҡсатында текстың үҙе өҫтөндә эшләү инә [1].

Бөтә ошо мәсьәләләрҙе эҙмә-эҙлекле хәл итеү документтарҙың йөкмәткеһен анализлауға, йәғни сығанаҡты «эстән» тәнҡитләү бурыстарына, тотонорға мөмкинлек бирә. Был иһә материалдарҙы сығанаҡ булыу йәһәтенән өйрәнеүҙә һуңғы этап булып тора һәм тикшеренеүсе алдына сығанаҡты тарихи файҙаланыу мөмкинлеге мәсьәләһен ҡуя.

Салауаттың тикшереү эшендә документтарҙың бер нисә төрөн билдәләргә мөмкин. Эш материалдарын өс төп төркөмгә бүлеп ҡарау уңайлыраҡ. Беренсе төркөмгә Салауаттың үҙ күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдар, бүтән баш күтәреүселәрҙән һорау алыу протоколдарынан өҙөмтәләр, ғәйепләүсе шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре протоколдары инә. Икенсе төркөмгә суд ҡарарҙары һәм уларҙың үтәлеүе тураһындағы документтарҙы, өсөнсөһөнә тәүтикшереүгә һәм судҡа бәйле булған рәсми яҙышыу материалдарын индерергә кәрәк. Ошондай бүлеүҙең нигеҙендә структураның йәки документтарҙың эске формаһының дөйөмлөгө ята, һәм был уларға сығанаҡтарҙы өйрәнеү анализының шуға ярашлы методтарын ҡулланырға мөмкинлек бирә.

Сенаттың Йәшерен экспедицияһында, Ҡазан йәшерен комиссияһында һәм Өфө провинция канцелярияһында һорау алған ваҡытта баш күтәреүселәрҙең *күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдар* Салауат өҫтөнән суд-тикшереү эшенең составында үҙҙәренең информатив үҙенсәлектәре яғынан бик мөһим материалдар булып тора. Был сығанаҡтар хөкүмәттең язалау политикаһының характеры тураһында ғына һөйләп ҡалмай, бәлки ошо мөһабәт халыҡ

---

[1] Источниковедение истории СССР XIX — начала XX вв. МДУ нәшриәте, 1970, 8—9-сы биттәр; *Пушкарев Л. Н.* Классификация русских письменных источников по отечественной истории. М., 1975, 107—109, 120, 121-се биттәр; *Веселовский С. Б.* Труды по источниковедению и истории России периода феодализма. М., 1978, 288, 289-сы биттәр.

хәрәкәте ваҡиғаларын да яҡтырта, был яғы хәҙерге заман тикшеренеүсеһе өсөн айырыуса мөһим. Баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәрендә восстаниеға дөйөм характеристика бирелә (хәрәкәттең барышы һәм ҡоласы, баш күтәреүселәрҙең һуғыш хәрәкәттәре), бик ҡыҙыҡлы конкрет факттар килтерелә (Пугачев указдарының һәм манифестарының йөкмәткеһе, хәрәкәттең күренекле етәкселәренең эшмәкәрлеге һөйләп бирелә), һорау алыныусының үҙенең биографик мәғлүмәттәре, восстаниела ҡатнашыуы тураһында ла, шулай уҡ ҡараштары, әхлаҡлылыҡ позицияһы һәм башҡа шундайҙар тураһында мәғлүмәттәр белдерелә. Был күрһәтеүҙәрҙе, билдәле дәрәжәлә, баш күтәреүселәрҙең һүҙҙәренән тикшереүселәр тарафынан яҙып алынған уларҙың автобиографик иҫтәлектәре тип ҡарарға кәрәк. Ләкин сығанаҡтарҙы файҙаланғанда һәм уларҙа күрһәтелгән факттарҙың дөрөҫлөк кимәлен билдәләгәндә, был документтарҙы төҙөүҙең юғарыла билдәләп үтелгән «эҙәрлекләү» спецификаһы уларҙағы раҫлауҙарҙың ысынлығына аҙмы-күпме зарар килтереүе иғтибарға алынырға тейеш.

Эҙәрләү учреждениелары тәүтикшереү алып барғанда ла, хөкөм ҡарары сығарғанда ла, тикшереү аҫтындағыларҙың күрһәтеүҙәре протоколдарына, эштең һөҙөмтәһен билдәләй торған юридик документ итеп ҡарап, ҙур әһәмиәт бирә. Тап шуға күрә лә һорау алыу тикшереү аҫтындағы кешенең үҙ ғәйебен тулыһынса таныуына ирешерлек итеп алып барыла, был хәл иткес әһәмиәткә эйә була һәм ғәйептең оптималь иҫбатланыуы һәм эштең бөтә шарттары тулыһынса дөрөҫләнеү итеп ҡарала. Һорау алынған кешенең үҙ ғәйебен таныуы шундай әһәмиәткә эйә булғанлыҡтан, тикшереү һәм судтың бөтә тырышлығы тейешле таныуға ирешеүгә йүнәлдерелә. Һорау алыу ваҡытында аңлы рәүештә тыуҙырылған йән өшөткөс психологик баҫым яһау, ә йыш ҡына тән язаһына тарттырыу ҙа бына шунан килә, шундай рәхимһеҙ саралар менән таныуҙарға һәм үкенеүҙәргә ирешелә.

Пугачев хәрәкәтендә үҙҙәренең ҡатнашыуы тураһында һөйләп, тикшереү аҫтындағылар шундай һорау алыу шарттары, тупаҫ баҫым һәм яңы, тағы ла аяуһыҙыраҡ, репрессиялар ҡурҡыныҫы аҫтында йыш ҡына осраҡтарҙа ысынбарлыҡҡа тап килмәгән күрһәтеүҙәр бирергә мәжбүр булған. Восстание ваҡиғаларында үҙҙәренең ролен кесерәйтеп, улар, восстаниела Пугачевтың йәки уның ярандарының язалауынан ҡурҡып ҡына ҡатнаштым, тип тикшереүселәрҙе ышандырырға маташа. Ғәйепте үҙ өҫтәренә алмай һәм тик күҙгә күренеп торған, кире ҡағылмаҫлыҡ факттарҙы ғына, унда ла иҫкәрмәләр менән генә, таный, ә ҡайһы саҡта, аяуһыҙ язалауҙарға һәм ғазаплауҙарға сыҙай алмай, тикшереүселәрҙең ҡыҫымы аҫтында факттарҙы аңлы рәүештә боҙоуға, үҙҙәренә яла яғыуға тиклем барып етә [1]. Тикшереү аҫтындағылар, уларҙан һо-

---

[1] *Овчинников Р. В.* Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 3, 124—125-се биттәр; *Прокофьева Л. С.* К вопросу о достоверности следственных показаний по делу Крестьянской войны в России в 1773—1775 гг., 41—43-сө биттәр.

рау алғанда, «әйтмәй ҡалыу мөмкин булған нәмәне әйтеп, әйтмәҫтәй һәм боҙмаҫтай нәмәне боҙоп күрһәтеп һәм әйтмәй ҡалып, суд органы менән һатыулашҡан»[1] һымаҡ була. Быларҙың бөтәһе лә дөрөҫ күрһәтеүҙәр менән бер рәттән һорау алыу протоколдарында теркәлә. Күрһәтеүҙәрҙең йөкмәткеһендә тикшереүселәрҙең яуапҡа тарттырылғандар алдына башлыса уларҙың восстаниела ҡатнашыуына ғына ҡағылышлы сикләнгән һандағы һорауҙар биреүе лә сағыла. Шундай юл менән улар үлтереүҙәр, талауҙар һәм башҡа уголовный енәйәттәр хаҡында күрһәтеүҙәргә ирешергә ынтыла.

Был сығанаҡтарҙың йөкмәткеһендә сағылған һәм суд эштәрен алып барыуҙың характерынан килеп сыҡҡан икенсе үҙенсәлек — хатта уҡый-яҙа белгәндәрҙән дә һорау алыу телдән алып барылған. Күрһәтеүҙәрҙе яуапҡа тарттырылғандар үҙҙәре түгел, ә чиновниктар йәки канцелярия хеҙмәткәрҙәре яҙып барған, шуға күрә, әлбиттә, ул тексты тикшереү аҫтындағыларҙың йәнле телмәрен һүҙмә-һүҙ яҙып биреү тип ҡарарға ярамай. Документтың йөкмәткеһендә, беренсенән, айырым бюрократик ҡатламды тәшкил иткән, верховный властың[2] күрһәтмәләрен көндәм тормошҡа үткәргән һәм шуның өсөн «халыҡ алдында өҫтөнлөклө хәлгә»[3] ҡуйылған чиновниктарҙың крепостниклыҡ ҡараштары күренә. Бөтә был шарттар протоколдарҙың йөкмәткеһендә сағыла, уларҙың тексына баш күтәреүселәргә ҡарата, уларҙың етәкселәренә, ғөмүмән халыҡ һуғышына ҡарата дошмандарса тенденциозлыҡ рухы индерелә. Уларҙың күрһәтеүҙәре протоколдарында Пугачевты һәм уның көрәштәштәрен «дәүләт енәйәтселәре, хыянатсылар, яуыздар һәм ҡараҡтар», пугачевсыларҙың отрядтарын «яуызлыҡ» ҡылыусы халыҡ өйөрө ул тип, өҫтән ҡарағанда, ысынлап та баш күтәреүселәр исеменән яҙғандар һымаҡ. Икенсенән, тикшереү аҫтындағыларҙың күрһәтеүҙәрен теркәгәндә, протоколдарҙа айырым моменттарҙың теүәлерәк яҙылыуы күренә, ләкин ҡайһы бер нәмәләр тикшереүселәр иғтибарынан ситтә тороп ҡалған, тексҡа индерелмәгән. Шулай уҡ яуапҡа тарттырылғандарҙың телмәр үҙенсәлектәре лә һәр саҡ тулы сағылдырылмай, күрһәтеү текстары таушалған, ҡотһоҙ канцеляр әйтемдәр һәм штамплылар менән тулы. Бының өҫтөнә күрһәтеүҙәрҙе протоколға бик ҡыҫҡа, ҡоро ғына итеп яҙыр булғандар.

Тикшереүселәр тәржемәселәргә мөрәжәғәт итергә мәжбүр булған осраҡтарҙа ла, күрһәтеүҙәрҙең тулылығына һәм теүәллегенә тағы ла күберәк кире йоғонто яһала. Бында яуапҡа тарттырылған кешенең телмәренә ике яҡлап зыян яһала, сөнки ул заманда ике телде лә бер үк дәрәжәлә яҡшы белеү һирәк күренеш булған һәм тикшереү аҫтындағының күрһәтеүҙәрен йыш ҡына тәржемәсе лә, ә унан һуң рус протоколисы ла етерлек квалификациялы итеп бирә

---

[1] *Кони А. Ф.* Судебные речи (1868—1888). СПб., 1890, 158-се бит.

[2] *Зайончковский П. А.* Правительственный аппарат самодержавной России в XIX в. М., 1978, 3, 24-се биттәр.

[3] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 2-се том, 455-се бит.

алмаған. Шулай итеп, һорау алыныусының һүҙҙәре һәм фекерҙәре ят формаға төрөлә. Шулай уҡ яуапҡа тарттырылыусының ҡайһы бер хәлдәрҙе яҡшы белмәү, онотоу, иҫтән сығарыу арҡаһында үҙ-үҙен яҡлау тактикаһы менән бәйле булмаған хата һөйләү мөмкинлеге лә иҫәпкә алынырға тейеш.

Әсирлектәге пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәре протоколдарының яҙылыу шарттарына, һорау алыу характерына бәйле булған үрҙә билдәләп үтелгән үҙенсәлектәре, сығанаҡтарҙа ваҡиғалар тураһында күп кенә дөрөҫләнмәгән мәғлүмәттәр булыуы (ваҡыттарын бутау, ялған күрһәтеү һ. б. ш.), тикшереү аҫтындағыларҙың һөйләүҙәренә тикшереүсе тарафынан индерелгән асыҡтан-асыҡ тенденциозлыҡ — бөтә был һыҙаттар, Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын күҙ алдына баҫтырыу өсөн, сығанаҡтарҙың ҙур әһәмиәтен кәметә алмай. Документтарҙы анализлауҙа фәнни методтарҙы ҡулланыу уларҙы тарихи хикәйәләүҙә файҙаланыу мөмкинлегенең нигеҙ шарты булып тора.

Был айҡанлы В. И. Лениндың анализ методы тураһында һәм революцион көрәш ваҡиғаларын өйрәнеү өсөн хөкүмәт һәм полиция рәсми документтарын файҙаланыу мөмкинлеге тураһында күрһәтеүе бик мөһим методологик әһәмиәткә эйә. 1901 йылдың 7 майында Обухов оборонаһында Питер эшселәренең героик сығышына арналған «Яңы ҙур алыш» тигән мәҡәләһендә В. И. Ленин былай тип яҙҙы: «...7 майҙағы алыш тураһында полиция белдереүен тикшереп ҡарайыҡ. Һуңғы ваҡыттарҙа хөкүмәттең (шулай уҡ полицияның да) стачкалар, демонстрациялар тураһындағы, ғәскәр менән бәрелештәр тураһындағы белдереүҙәренә беҙ инде бер аҙ күнеккәнбеҙ; бындай хәбәрҙәрҙең дөрөҫлөк дәрәжәһе тураһында фекер йөрөтөү өсөн беҙҙә инде шаҡтай ғына материал бар, беҙ хәҙер ҡайһы саҡта полиция ялғанының төтөнө буйынса ғына ла халыҡ асыуының уты тураһында һиҙенә алабыҙ» [1].

Обухов оборонаһында ҡатнашыусылар эше буйынса суд документтарын тәнҡит күҙлегенән ҡарап, В. И. Ленин батша властары тарафынан дөрөҫлөктө боҙоу алымдарына күрһәтте. «Каторга ҡағиҙәләре һәм каторга хөкөмө» тигән мәҡәләлә В. И. Ленин: «Батша чиновниктары икенсе тапҡыр (бәрелештән һуң) политик үс алыу актын суд менән ҡаплап ҡалдырҙы һәм ҡәбәхәт рәүештә ҡаплап ҡалдырҙы, политика тураһында ғәйепте ауырайтыу өсөн генә иҫкә алды, әммә бөтә ваҡиғаның политик хәлен аңлатырға мөмкинлек бирмәне. Уларҙы, уголовный енәйәтселәр кеүек, Уложениеның 263-сө статьяһы буйынса, йәғни «хөкүмәт урынлаштырған властарға ҡаршы асыҡтан-асыҡ восстание» өсөн, һәм, өҫтәүенә, ҡоралланған кешеләр (?) башлаған восстание өсөн хөкөм иттеләр. Ғәйепләүҙе *яңылыштырҙылар:* полиция судьяларға эштең бер яғын ғына тикшерергә бойороҡ бирҙе» [2].

---

[1] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 5-се том, 16-сы бит.
[2] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 5-се том, 293-сө бит.

Лениндың был фекерҙәре царизмдың хөкүмәт һәм суд-тикшереү документтарын уларҙың социаль тәбиғәтен иҫәпкә алғандан һуң ғына, официоз боҙоп күрһәтеү һәм демагогия япмаһын асҡандан һуң ғына, бөтә факттарҙы һәм дәлилдәрҙе тәнҡит күҙлегенән үткәргәндән һуң гына файҙаланып булыуы тураһында һөйләй.

Салауат Юлаевтың тикшереү эшендә йөҙ ҙә бер кешенең күрһәтеүҙәре йыйылған. Улар — Салауаттың үҙенең күрһәтеүҙәре, уның яҡлылар иҫәбенән утыҙ бер баш күтәреүсенән һорау алыу өҙөмтәләре, шулай уҡ Салауатты фашлаусылар булып сығыш яһаған 69 кешенең күрһәтеүҙәре. Әле әйтелгән кешеләрҙең һорау алғанда нимә һөйләгәне теркәлгән документтарҙы ентеклерәк тикшереп ҡарайыҡ. Бөтә күрһәтеүҙәр 11 документ составына инә. Шуға ҡарап та, бер үк ваҡытта бер нисә кешенең күрһәтеүҙәрен эсенә алған документтарҙың ҡатмарлылығы тураһында фекер йөрөтөргә мөмкин.

Салауат Юлаевтың 25 февралдә Сенаттың Йәшерен экспедицияһында унан һорау алғандағы күрһәтеүҙәре, 1775 йылдың 5 майында һәм 8 июнендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдар Юлай Аҙналиндың күрһәтеүҙәре менән бергә яҙылған өс документтан тора ла индс[1]. Салауаттан 4 мартта, шаһит Ҡолой Балтачев сығып һөйләгәндән һуң, уның менән күҙләштереп, йәнә һорау алалар. Уның күрһәтеүҙәрен айырым документ итеп тормайҙар, ә Ҡолойҙоң күрһәтеүҙәренә генә ҡушып ҡуялар[2]. Салауаттың төрмәнән ебәрелгән һәм 1775 йылдың 28 майында Өфө тикшереүселәре ҡулына төшкән хат тураһындағы күрһәтеүҙәре һәм шул уҡ көндө һалдат Я. Ф. Чудинов менән күҙләштереү ваҡытындағы белдереүе үҙ аллы документ итеп бүленмәгән. Чудиновтың күрһәтеүҙәре менән бергә улар бер протокол тәшкил итә[3].

Яҙма сығанаҡтарҙың эске формаларын, йәғни уларҙың структураһын һәм текстарҙың стиль үҙенсәлектәрен, анализлағанда, «формуляр»[4] терминын файҙаланалар. Ул түбәндәге элементтарҙан тора: документтың төрөн һәм уның йөкмәткеһен билдәләү; документтың авторын, кемгә аталыуын һәм датаһын күрһәтеү; текстың үҙе; документтың характеры тураһындағы билдә (йәшерен, ашығыс һ. б.); эш башҡарғанда ҡуйылған тамғалар һ. б. ш.[5]. Салауат Юлаев эшендә булған һорау алыу протоколдарының формулярына мөрәжәғәт итәйек. Һорау алыу протоколдары закондар һәм формулярҙарҙың яҙма традицияһы менән билдәләнгән доку-

---

[1] Крестьянская война..., 300—304, 316—320, 329-сы биттәр.

[2] Шунда уҡ, 307—308-се биттәр.

[3] Шунда уҡ, 324—325-се биттәр.

[4] *Каштанов С. М.* Очерки русской дипломатии. М., 1970, 26—27-се биттәр.

[5] Краткий словарь архивной терминологии. М.; Л., 1968, 55-се бит. *Шепелев Л. Е.* Проблемы дипломатического изучения делопроизводственных документов XIX — начала XX вв. — Симпозиум по актуальным проблемам источниковедения: Материалы к обсуждению. Таллин — 1972. М., 1972, 12—13-сө биттәр.

менттар булып тора. Улар һәр саҡта һорау алыуҙар үткәреүҙең ваҡытын һәм урынын күрһәтеү, һорау алыуҙа һәм протоколдарҙы төҙөгәндә ҡатнашҡан кешеләрҙе һанап сығыу менән башлана. Һорау алынған кешенең күрһәтеүҙәре тексы уның исеме, йәше, сығышы, йәшәгән урыны тураһындағы һорауҙарға яуаптарҙан башлана. Унан ары туранан-тура ошо эшкә ҡағылған һорауҙарға яуаптар яҙыла. Текст яуапҡа тарттырылыусының элек тикшереү һәм суд аҫтында булғанмы, фәҡәт дөрөҫтө генә һөйләгәнме, тағы ла ниндәй ҙә булһа өҫтәмәләре һәм күрһәтеүҙәре бармы тигән һорауҙарға яуап биреү менән тамамлана. Протоколға яуапҡа тарттырылған кеше йә үҙе йәки, уның үтенесе буйынса, уҡый-яҙа белгәндәрҙән берәй ышаныслы кешеһе ҡул ҡуя. Имзалар «Был һорау алыуға ҡул ҡуйҙым (фәлән кеше)» тигән формала бирелә. Шулай уҡ һорау алған кеше лә, үҙенең фамилияһын һәм вазифаһын күрһәтеп, протоколға ҡул ҡуя. Күрһәтеүҙәр йыш ҡына телдән бирелгән һорауҙарҙы теркәмәйенсә яҙыла. Һорау алынған кешенең һүҙҙәре өсөнсө кеше исеменән бирелә.

Йәшерен экспедицияла Салауат Юлаевтың күрһәтеүҙәре теркәлгән протокол формуляры ла шундай уҡ. Салауат уға төрки телендә ҡул ҡуйған [1], ләкин экспедиция обер-секретарының һәм тәржемәсенең имзалары юҡ. Салауаттың күрһәтеүҙәренең артабанғы протоколдары, уның тураһында биографик мәғлүмәттәр яҙылмайынса, тикшереүселәрҙең йәки шаһиттарҙың ғәйепләүҙәренә туранан-тура яуап биреүҙән башлана. Протоколдарға Салауат үҙе ҡул ҡуйған [2], һәм һәр ҡағыҙ тәржемәсе фамилияһы менән раҫланған. Суд формаһы тураһындағы закондарға ярашлы рәүештә күрһәтеүҙәрҙең тексы ғәйепләнеүсегә һәм судта булғандарға уҡып ишеттерелә, ә артабан уға ҡул ҡуйыла [3]. Дөрөҫ, Салауаттан һорау алғанда ла шулай булғанмы икәнен асыҡлау мөмкин түгел. Уға русса тексты уҡығандармы йәки башҡортса тәржемәнеме, протоколды хәҙер инде руссанан башҡортсаға тәржемә иткәндәрме — был турала мәғлүмәттәр табылманы. Салауат һәм уның атаһы рус телен аҙыраҡ белгәндер, тип уйларға мөмкин. Польшаға һәм ҡаҙаҡ далаларына алыҫ походтарҙа ҡатнашыусы Юлай Аҙналин хаҡында быны ҙур ышаныс менән әйтергә мөмкин, сөнки уга рус казактары һәм һалдаттары менән аралашырға тура килә. Үҙенең рус телен белеүсе ул оло улына ла өйрәтеүе мөмкин [4]. Рус телендә иркен һөйләшмәгәс, улар күрһәтеүҙәрҙе рус телендә биреүҙән баш

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 22.

[2] Шунда уҡ, д. 593, л. 330, 346, 351. Күрһәтеүҙәре аҫтына Салауат былай тип яҙа: «Ошбу дубурусҡа бән Салауат Юлай уғлы ҡулум ҡуйдум». Күҙләштереү протоколдарында ҡултамғаның формулировкаһы башҡасараҡ: «Ошбу ҡара ҡаршы дубурусҡа бән Салауат Юлай уғлы ҡулум ҡуйдум».

[3] ПСЗ I, 7-се том, № 4344, 149-сы бит. Суд формаһы тураһында Петр I ҡул ҡуйған указ.

[4] Салауаттың, үҙенең ағаһына хатты тапшырыуҙы һорап, һалдат Я. Чудинов менән һөйләшеүе уның рус телен белеүенә ҡыялата дәлил булып хеҙмәт итә.

тартыуҙары, ә русса яҙылған күрһәтеүҙәрҙе аңлауҙары һәм баһалай алыуҙары бик ихтимал.

Салауаттың күрһәтеүҙәре рус теленә тәржемәселәр һүҙҙәренән яҙыла. Мәскәүҙә улар суҡындырылған башҡорттарҙан Урал казактары йөҙ башлығы И. Гульчихин, Өфөлә провинция канцелярияһының штаттағы тәржемәселәре А. Васильев менән Ф. Третьяков була. Улар, ваҡиғаларҙы яҡтыртыуға һәм иҫкә алынған кешеләрҙең характеристикаһына үҙ баһаларын индереп, һис шикһеҙ, документтарҙың йөкмәткеһенә һәм теленә йоғонто яһаған. Шуға күрә лә Пугачев һәр саҡ «яуыз», баш күтәреүселәрҙең отрядтары «яуызлыҡ ҡылыусылар төркөмө», «шайка», «әтрәгәләмдәр өйөрө» һ. б. ш. тип исемләнә. Салауаттың йәнле телмәре эш ҡағыҙҙарының теле һәм стиле нормаларына хас булған канцеляризм менән алмаштырыла. Шуның менән бергә ваҡиғаларҙың фактик яғы етерлек аныҡ яҙылған. Шуға күрә күрһәтеүҙәр протоколы Салауат теленең үҙенсәлектәрен өйрәнеүгә сығанаҡ булып хеҙмәт итә алмай, әммә улар Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренән береһенең эшмәкәрлеген күҙ алдына баҫтырыу өсөн бай информация материалы бирә. Китаптың өсөнсө главаһы шуны яҡтыртыуға арналған.

Салауат Юлаевтың тикшереү эшенә Ҡазан йәшерен комиссияһында һәм Өфө провинция канцелярияһында һорау алыу ваҡытында утыҙ пугачевсының күрһәтеүҙәре протоколдарынан өҙөмтәләр теркәп ҡуйылған. Бөтә был мәғлүмәттәр, өс документҡа тупланып, Салауаттың ғәйебен яҙма рәүештә иҫбат итеүсе сифатында тикшереүҙә ҡатнаша[1]. 1775 йылдың 4 марты һәм 6 апреле тип ҡуйылған шундай ике документ Ҡазан йәшерен комиссияһы материалдары буйынса төҙөлгән, ә өсөнсө документ 1775 йылдың 5 майында Өфө провинция канцелярияһында төҙөлгән. 1775 йылда өҙөмтәләр алынған күрһәтеүҙәрҙең 15 протоколы Ҡазан йәшерен комиссияһы документтары араһында һаҡланған[2]. Үкенескә ҡаршы, Салауат менән бергә әсиргә алынған баш күтәреүселәр Юртым Аҙыловтың, Раҡай һәм Әбдрәшит Ғәлиевтәрҙең, Зәйнәш Сөләймәновтың күрһәтеүҙәре протоколдарының тулы текстары табылманы. Өфө воеводаһы канцелярияһында пугачевсыларҙан һорау алғанда төҙөлгән туғыҙ протокол юғалған. Өфө провинция канцелярияһында С. Шеметовтың, Абдулла Туҡтаровтың һәм Әбел Байҙашевтың (И. Иванов) күрһәтеүҙәренең эстәлеген беҙгә Ҡазан йәшерен комиссияһындағы тикшереү эштәренең күптән түгел табылған ҡаралама экстракттары килтереп еткерҙе[3]. Өҙөмтәләрҙе төҙөү техникаһын билдәләү өсөн, уларҙы күрһәтеүҙәр теркәлгән тулы протокол текстары менән сағыштырырға кәрәк. Миҫал өсөн уларҙың ҡайһы берҙәрен алайыҡ. Бына Көнгөр өйәҙе Озерки ауы-

---

[1] Крестьянская война..., 305—307, 310—316-сы биттәр.

[2] ЦГАДА, ф. 507, ч. 4, л. 86—90; 218—222, 315, 550—555; ч. 5, л. 42, 117, 131, 139; д. 467, ч. 2, л. 187, 188; ч. 6, л. 156; ф. 349, д. 7248, л. 14—18, 27—30, 32—33.

[3] Шунда уҡ, ф. 349, д. 7248, л. 14—18, 27—30, 30—33.

лының черносошник крәҫтиән (буш ерҙәргә килеп ултырған һәм һуҡа һанына ҡарап яһаҡ түләгән крәҫтиән. — *Тәрж.)* К. Н. Мамлыгиндан 1774 йылдың 18 июлендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алыу протоколы [1]. Ошо протоколдан Салауат Юлаев тураһындағы мәғлүмәттәрҙе күсереп алып, йәшерен комиссия чиновниктары Мамлыгиндың үҙенең биографик мәғлүмәттәренең ҙур өлөшөн, Салауат Юлаев отряды менән ҡушылғанға тиклем восстаниела ҡатнашыуы тураһында һөйләгәндәрен, төшөрөп ҡалдыра, күрһәтеүҙәрҙең уның нисек итеп баш күтәреүсе булып китеүе тураһындағы өлөшөн генә өҙөмтәгә индерә. Өҙөмтәләрҙе протоколдың тулы тексы менән сағыштырып ҡарағанда, уларҙың оригиналды һүҙмә-һүҙ бирмәүе беленә — был протокол тексын яҡынса һөйләп биреү генә. Документ менән шулай эш итеү фактик мәғлүмәттәрҙе боҙоуға килтерә лә. Бына, мәҫәлән, Конон Мамлыгин, 1774 йылдың февраль аҙағында Озерки ауылына крәҫтиәндәрҙе баш күтәреүселәр отрядына мобилизациялау маҡсаты менән дүрт казак килде, тип һөйләй. Улар менән Мамлыгин ауылынан 30 саҡрым алыҫлыҡтағы Троицкий ауылына китә, унда Салауат Юлаев менән И. С. Кузнецов отрядтары урынлашҡан була. Ә күсереп алынған өҙөмтәлә Мамлыгиндың мобилизацияланыу урыны Озерки ауылынан Троицкий ауылына күсерелә, ә табын казактарынан булған атаман И. С. Кузнецов ниндәйҙер тимерсегә әйләнеп китә [2].

Пугачев полковнигы И. Н. Белобородовтан һорау алыу протоколынан өҙөмтәгә Салауат менән Белобородов отрядтарының берлектәге хәрәкәттәре тураһында белдергән өлөшө генә ингән (Михельсон ғәскәрҙәре менән өс һуғыш, Красноуфимскиҙы алыу, Көңгөр эргәһендә подполковник А. В. Папав командаһы менән алыш). Белобородов Салауат хаҡында һөйләүен шулай тамамлай: «...Уса биҫтәләренә табан киттек, юлда барышлай заводтарҙан һәм йәшәгән урындарынан кешеләр йыйып, халыҡты күбәйттек» [3]. Өҙөмтәгә был һүҙҙәр эләкмәгән, ләкин «Уса тирәһендә булдыҡ» тигән һүҙҙәргә чиновниктар үҙҙәренән «Ҡазанға киттек» тигән һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙалар [4]. Башҡа сығанаҡтарҙан, шул иҫәптән Салауаттың күрһәтеүҙәренән билдәле булыуынса, ул Уса тирәһендә яралана һәм Башҡортостанга ҡайта, ә Ҡазанға Пугачев менән Белобородов китә. Өҙөмтәләр айырым осраҡтарҙа протоколдарға ярашлы итеп алынған. Мәҫәлән, мари Изнбай Аҡбаевтың (Янбаевтың), башҡорт Шәрип Шарҡаевтың, удмурт Москов Якимовтың күрһәтеүҙәре өҙөмтәләрҙә ғәмәлдә фактик хатаһарһыҙ алынған [5].

Һорау алыу протоколдарының Өфө провинция канцелярияһы секретары И. Черкашенинов тарафынан яҙылған ҡыҫҡаса кон-

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 2, л. 187—188.

[2] Шунда уҡ; Крестьянская война..., 305-се бит.

[3] Пугачевщина, 2-се том, 331—332-се биттәр.

[4] Крестьянская война..., 305-се бит.

[5] Әйтеп үтелгән баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәренең тулы тексы һәм өҙөмтәләр документтар йыйынтығында баҫылған. — Крестьянская война..., 249—254, 306-сы биттәр.

спекттары Ҡазан йәшерен комиссияһы чиновниктарының өҙөмтәләренән айырыла. Улар «Өфө провинция канцелярияһында төҙөлгән йәшерен эштәрҙән алынған экстракт...» составына инә, бында пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәре протоколдарынан өҙөмтәләр завод приказчиктарының ошаҡтарынан һәм язалау отрядтары командирҙарының белдереүҙәренән алынған өҙөмтәләр менән бергә буталған. Был иһә күрһәтеүҙәрҙең тексын яҙғанда сағылмай ҡалмаған. Черкашенинов ҡулында Салауат Юлаевтың хәрәкәттәре тураһында бай һәм күп төрлө материал була. Өҙөмтәләрҙе протоколдарҙың тулы тексы менән сағыштырғанда, уларҙың йөкмәткеһе элек яҙылған күрһәтеүҙәрҙән киңерәк булыуы беленә.

Баш күтәреүселәр отрядтарында полковник булған яһаҡ түләүсе татарҙарҙан Абдулла Туҡтаров һорау алған ваҡытта үҙенең: «Салауат Юлаевтың ҡушыуы буйынса, төрлө диндәге йөҙ кеше йыйып, хәрби командаларҙы үҙ яҡтарына ебәрмәҫ өсөн, Сатаниха ауылы янында бекет тотоуын»[1] әйтә. Черкашениновта уның һүҙҙәре өҫтәмә факттар менән байыҡтырылған. «Үткән 1774 йылдың май айында ҡараҡ Салауат Юлаев уға (Абдулла Туҡтаровҡа) хат ебәргән. Хатта уға, команда йыйып, Сатаниха ауылы янында бекеттар тоторға ҡушҡан. Шуға күрә ул быны эшләгән[2]. Бында ваҡиғаның аныҡ датаһы килтерелә һәм Салауаттың хаты иҫкә алына, ә күрһәтеүҙәрҙең тулы тексында улар юҡ. Елдәк казагы Әбел Байҙашевтың (И. Ивановтың) күрһәтеүҙәрен конспектлағанда ла шул уҡ хәл ҡабатлана. Яңы суҡындырылған Иванов, унан һорау алғанда: элеккесә өйәҙҙә, Ҡыйғаҙы ауылында йәшәү өсөн һәм басурман динен (христиан динендәгеләр өсөн бүтән бер дингә, күп осраҡта ислам диненә, ҡарата әйтелә. — *Тәрж.)* тотоу өсөн Салауаттан яҙма рөхсәт һорап алдым» ти[3]. Экстрактта был шулай яңғырай: «...Салаватка уға билет биргән, үҙен билетта бригадир тип атаған, ә Юлайка унда баш атаман тип ҡул ҡуйған, шуның менән уға, Әбелгә, элеккесә йәшәргә һәм батша Петр Федоровичҡа, үҙенә шул исемде алған билдәле дәүләт дошманы Пугачевҡа, хеҙмәт итергә ҡушалар[4]. Күрәһең, Черкашенинов И. Ивановтың күрһәтеүҙәрен генә түгел, бәлки Салауат менән уның атаһы тарафынан бирелгән, ләкин ҡулға төшөрөлгән һәм канцелярияла һаҡланған танытманы ла файҙаланған.

Килтерелгән миҫалдар пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәренән өҙөмтәләрҙең һәм ҡыҫҡа конспекттарҙың йөкмәткеһе күп кенә осраҡтарҙа уларҙың тулы тексына тура килмәүен күрһәтә. Протоколдар тексынан һайлап алған ваҡытта хаталар ебәрелгән; ә ҡайһы саҡта өҙөмтәләр һәм конспекттар башҡа сығанаҡтарҙағы фактик материалдар менән тулыландырылған. Шуға күрә күрһәтеүҙәрҙә белдерелгән мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн билдәләгәндә, өҙөмтәләрҙе һәм конспекттарҙы һорау алыу протоколдарының тулы текстары менән сағыштырыу мотлаҡ.

---

[1] ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 32 об.
[2] Крестьянская война..., 316-сы бит.
[3] ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 29 об.
[4] Крестьянская война..., 315-се бит.

Ғәйепләү буйынса 69 шаһиттың күрһәтеүҙәр Салауат Юлаев өҫтөнән тикшереү эше документтарының икенсе төркөмөн тәшкил итә. Был күрһәтеүҙәр тикшереү эшендә биш документтан тора: 1) 1775 йылдың 4 мартында Мәскәүҙә Ҡолой Балтачевтан һорау алыу протоколы; 2) 1775 йылдың 28 майында Өфөлә Мөхәммәт Көсөковтың һәм Сағыр Үтәшевтең күрһәтеүҙәрен берләштергән протокол; 3) шул уҡ көндә Я. Ф. Чудиновтың күрһәтеүҙәре протоколы; 4) шулай уҡ Өфөлә 1775 йылдың 8 июнендә Өфө өйәҙенән 17 башҡорттоң күрһәтеүҙәре протоколы һәм 5) Өфө өйәҙенән 48 башҡорттоң коллектив күрһәтеүҙәре протоколы [1]. Шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре тексы үҙҙәренең формулярҙары буйынса Салауат Юлаев һәм башҡа баш күтәреүселәр күрһәтеүҙәренең протокол яҙмалары формулярҙарынан айырылмай. Шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдарҙың баш өлөшөндә һорау алыу ваҡыты һәм урыны, шаһиттың ҡыҫҡаса биографик мәғлүмәттәре (исеме, сығышы, йәшәгән урыны) күрһәтелә, унан һуң Салауат Юлаевты фашлаусы факттар яҙыла, текстар шаһиттың ҡултамғаһы менән нығытыла, ә һәр ҡағыҙҙа тәржемәселәрҙең имзалары ҡуйыла. 48 башҡорттоң коллектив күрһәтеүҙәре ингән протокол яҙмаларының формаһы ғына килтерелгән формулярға ярашлы түгел. Яҙма Өфө провинция канцелярияһының Салауатты фашлаусы материал йыйыу өсөн Себер юлы ауылдарына ебәрелгән тәржемәсеһе Ф. Третьяков тарафынан төҙөлгән. Әгәр ҙә был канцеляристың эш-ҡылығы, бынан алдағы главала ҡаралғанса, уны хеҙмәткә артыҡ ихлас һәм пугачевсыларға нәфрәт менән янған кеше итеп характерлаһа, ә инде уның үҙ ҡулы менән төҙөгән протоколы Третьяковтың өҫтәүенә аҙ грамоталы кеше булыуын күрһәтә. Ул төрлө ауылдарҙан булған 48 кешенең күрһәтеүҙәре тексын һөйләмдәргә бүлмәйенсә яҙған; шаһиттарҙың һәм ауылдарҙың исемдәре буталған, өҫтәүенә, бөтәһе лә тиерлек баш хәрефтәрҙән яҙылған. Третьяков Ҡыр-Көҙәйҙән башҡа бүтән волостарҙы күрһәтмәй. Протокол тексы ошо волостан башлана, һәм хәбәрҙар булмаған кешелә артабан һаналған бөтә ауылдар шул волость составына ингән икән тигән хата фекер тыуыуы мөмкин. Ысынында иһә, ауылдарҙың исемдәре, шулай уҡ старшиналарҙың фамилиялары буйынса хөкөм йөрөткәндә, башҡа волостарҙан — Себер юлына ингән Тырнаҡлы, Шайтан-Көҙәй, Мырҙалар, Ҡошсо, Һарт волостарынан килгән шаһиттарҙан да күрһәтеүҙәр алына [2]. Третьяков протоколдарҙы яуапҡа тарттырылған кешеләрҙең ҡултамғалары менән раҫлауҙы кәрәк тапмаған. Был документҡа үҙе ҡул ҡуйып, уны 1775 йылдың 8 июнендәге рапорты менән бергә воеводаға тапшырған [3]. Третьяков һорау алған бөтә кешеләрҙең Ҡолой Балтачевтан башҡалары наҙан булған һәм рус телен белмәгән. Уларҙың күрһәтеүҙәрен тәржемәселәр яҙып барған, ырыу тамғалары ҡултамға

---

[1] Крестьянская война..., 307, 322—328-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 285-се бит.
[3] Шунда уҡ, 325, 326-сы биттәр. ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 339.

булып хеҙмәт иткән. 69 шаһиттың 19-ы үҙ тамғаларын ҡуйған [1]. Күрһәтеүҙәр ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына итеп яҙылған. Салауат Юлаевтың Пугачев восстаниеһында ҡатнашыу фактары бер үк ваҡытта бер нисә шаһит тарафынан раҫлана. Ҡайһы бер яҙмалар, «фәлән кешенең күрһәтеүе фәлән кешенең белдереүенә оҡшаш» тип, уға һылтау менән генә сикләнә. Шаһиттар баш күтәреүселәрҙән ҡаза күргән «хәлле ҡатлам» араһынан һайлап алынғанлыҡтан, шулай уҡ ҡайһы берҙәре, ихтимал, баш күтәреүселәрҙе элек яҡлаған өсөн язалауҙарынан ҡурҡып күрһәтеү бирергә мәжбүр булғанлыҡтан, уларҙың кем файҙаһына һөйләйәсәге алдан уҡ билдәле була. Шаһиттарҙан һорау алыуҙың бер маҡсатҡа ғына йүнәлдерелгән булыуы ла бында ҙур роль уйнай, уларҙан фәҡәт тикшереүселәрҙә инде нығынған фекерҙе раҫлау ғына талап ителә. Шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре протоколдары буйынса төҙөлгән ғәйепләү документтары Салауатҡа ҡарата асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ менән һуғарылған. Әммә шуның менән бергә был документтарҙа Крәҫтиәндәр һуғышының айырым ваҡиғалары яҡтыртылған осраҡтарҙы ла табырға мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре протоколдары кеүек үк, шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре яҙмалары ла ярҙамсы һәм төҙәтеүсе сығанаҡтарҙы ылыҡтырыу юлы менән ентекләп тикшереүгә мохтаж.

Суд ҡарарҙары махсус характерлауға лайыҡ. Улар суд-тикшереү эшендә тотҡан урыны яғынан мөһимерәк документтар. Уларҙы өйрәнмәйенсә тороп, Салауат Юлаев эшендә хөкүмәт һәм эҙәрләү учреждениеларының позицияһын дөрөҫ баһалап һәм һорау алыу барышын да аңлап булмай. Шуға оҡшаш мәғлүмәттәр менән бер рәттән был сығанаҡтарҙа хөкөм ителеүселәр тураһында бик мөһим биографик мәғлүмәттәр ҙә бар, тикшереү һәм суд ваҡытында уларҙың үҙҙәрен нисек тотоуҙары билдәләнгән, Салауат Юлаев менән уның атаһының Пугачев восстаниеһында ҡатнашыуын яҡтыртҡан күрһәтеүҙәренән, ғәйепләнеүселәрҙең һәм шаһиттарҙың күрһәтеүҙәренән, башҡа тикшереү документтарынан төп моменттар һөйләп бирелгән. Шул уҡ ваҡытта суд ҡарарҙары, юғарыла билдәләнгәнсә, хөкүмәт концепцияһын сағылдыра, ул халыҡ сығыштарын законға ҡаршы сығыу тип, ә баш күтәреүселәргә ҡараҡтар һәм юлбаҫарҙар тип ҡарай, шуның менән баш күтәреүселәрҙең маҡсаттары һәм ниәттәре, уларҙың етәкселәре эшмәкәрлегенең роле һәм әһәмиәте боҙоп күрһәтелә.

1720 йылғы Генеральный регламент менән законлы рәүештә нығытылып, XVIII быуатта ғәмәлдә булған документтарҙы төҙөүҙең коллежский тәртибе, ҡаралыусы һәр мәсьәлә буйынса иң һуңғы документта «унан алдағы һәр ҡағыҙҙың һүҙмә-һүҙ йәки ҡыҫҡаса йөкмәткеһен яҙыуҙы», унан ары «яраҡлы урындарҙа закондарҙы күрһәтеп һәм хатта тикшерелә торған мәсьәләгә ҡағылған бөтә закондарҙан өҙөмтә килтереп, шуға бәйле тыуған фекерҙе һәм

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 341—344, 348, 349.

һығымтаны урынлаштырыуҙы билдәләй»[1]. Был система суд-тикшереү эштәрен алып барыуҙа асығыраҡ күренеп, шул хәлендә XIX быуат урталарына тиклем йәшәй[2].

Сенаттың Йәшерен экспедицияһының һәм урындағы властарҙың билдәләмәләре тикшереү һәм суд барышына йүнәлеш биргән, Салауат Юлаевҡа сығарылған хөкөм ҡарарын һәм уны еренә еткереү һөҙөмтәләрен эсенә алған төп документтар булып тора. «Билдәләмә» һүҙе властар сығарған ҡарарҙың, хөкөмдөң синонимы була[3]. Суд власының администрация власы менән тулыһынса бергә ҡушылыу тәртибе документтарҙа ла күренә: суд ҡарарының үҙ аллы исеме булмай, ул башҡа мәсьәләләр буйынса сығарылған ҡарар кеүек үк билдәләмә тип атала. Салауат Юлаевтың тикшереү эшендә бөтәһе ун бер билдәләмә, уларҙың өсөһө суд хөкөмө көсөнә эйә. Ошо өс ҡарар иҫәбендә: 1) Сенаттың Йәшерен экспедицияһының 1775 йылдың 16 мартындағы билдәләмәһе; 2) Өфө провинция канцелярияһының ошо уҡ йылдың 6 июлендәге билдәләмәһе һәм 3) Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорптың 15 июлдәге билдәләмәһе. Уларҙың беренсеһе һәм икенсеһе үҙенең әһәмиәте яғынан Салауат эше буйынса ахырғы хөкөм булып тора. Провинция канцелярияһының суд ҡарары улар араһында урта быуынды алып тора. Ул Йәшерен экспедицияның билдәләмәһен ҡабатлай һәм шуның нигеҙендә Ырымбур губернаторы раҫларға тейеш булған үҙенең тәүге ҡарарын сығара. Был шуның менән аңлатыла: ул саҡта йәшәгән тәртип буйынса ғүмерлек каторга эштәренә йәки үлем язаһына хөкөм ителеүселәрҙең эштәре буйынса провинция воеводаһының ҡарары губернатор тарафынан раҫланырға тейеш була. Билдәле булыуынса, Салауат эшен провинция канцелярияһы Рейнсдорптың махсус бойороғо буйынса алып бара, ә бындай осраҡтарҙа һуңғы ҡарарҙы губернатор сығара.

Эш башҡарыу документтарының бер төрө булараҡ, билдәләмәләрҙең инде ҡалыплашҡан формуляры була. Билдәләмәләрҙең тексы бер нисә өлөштән тора. Тәүге өлөшәндә документты төҙөү ваҡыты (йылы, айы, көнө) күрһәтелә, суд инстанцияһы ролендә ҡатнашыусы учреждениелар йәки кешеләр һанап сығыла. Билдәләмәнең тасуирлау өлөшөндә хәл ителә торған эштең асылы яҙыла. Һығымта өлөшөндә суд ҡарары бирелә. Документ ҡарар сығарған кешеләрҙең ҡултамғалары менән нығытыла. Быға оҡшаш документтарҙың исеме һәм функцияһы тик улар һалынған рәсми папкаларҙың тышында ғына күрһәтелә. Мәҫәлән, 16 марттағы билдәләмә 1762—1801 йылдарҙа «Батша ҡул ҡуйған указдар һәм

---

[1] *Варадинов Н. В.* Делопроизводство или теоретическое и практическое руководство к гражданскому и уголовному, коллежскому и одноличному письмоводству и составлению всех правительственных и частных деловых бумаг и к ведению самих дел. СПб., 1857, 36—37-се биттәр.

[2] *Митяев К. Г.* История и организация делопроизводства в СССР. М., 1959, 69-сы бит.

[3] *Даль В.* Толковый словарь живого великорусского языка. М., 1955, 2-се том, 684-се бит.

Йәшерен экспедиция буйынса билдәләмәләр»[1] тип исемләнгән китапта һаҡлана, ә Рейнсдорптың билдәләмәһе — «Ғали йәнәптәре канцелярияһында 1775 йылда булдырылған билдәләмәләр журналында»[2] һаҡлана. 1773—1775 йылдарҙа Өфө провинция канцелярияһының билдәләмәләре менән бындай «журналдар» табылманы, ә уның Салауат эшенә ҡағылған туғыҙ билдәләмәһе канцелярияның дөйөм яҙышыу ҡағыҙҙары араһында һаҡлана[3].

Суд ҡарарын әҙерләү процедураһы бер нисә стадиянан тора: тикшереү документтарынан өҙөмтәләр йәки экстракт төҙөү һәм оҫо эшкә ярашлы закондарҙан күсереп алынған өҙөмтәләр; суд функцияларына эйә булған учреждениеларҙың был документтарҙы өйрәнеүе; суд ҡарарының проектын әҙерләү. Канцелярия секретарҙары төҙөгән билдәләмәләрҙең ҡараламаларын яуаплы чиновниктар редакторлай, унан ары текст аҡҡа күсереп яҙыу өсөн күсереүселәргә бирелә. Аҡламаны махсус һыҙылған ҡағыҙҙарға яҙалар. Текст перо менән һыҙып яһалған рамка эсенә урынлаштырылған. Юғарыға, беренсе биттең уртаһына, дата ҡуйылған. Ул текстан һыҙыҡ менән айырылған. Һул яҡта графа яһалған, унда билдәләмәнең тәртип һаны күрһәтелгән. Аҡламаның һәр бите секретарҙың ҡултамғаһы менән нығытылған, ул үҙенең вазифаһын, исемен һәм фамилияһын күрһәткән.

Салауат Юлаевтың эше буйынса суд ҡарарҙары билдәләмәләрҙең формулярына тулыһынса ярашлы итеп яҙылған. Йәшерен экспедиция билдәләмәһенең тәүге өлөшөндә документтың датаһы һәм судьяларҙың исемдәре күрһәтелгән. Генерал-аншеф, сенатор кенәз М. Н. Волконский — беренсе, хөкүмәт аппаратында сағыштырғыһыҙ юғары пост алып торған Сенат генерал-прокуроры, действительный тайный советник кенәз А. А. Вяземский икенсе булып аталған. Документтағы ҡултамғалар шундай уҡ тәртиптә урынлаша. Быны тик тикшереү Волконский етәкселегендәге Йәшерен экспедицияның Мәскәү бүлексәһендә алып барылыуы менән генә аңлатырға мөмкин. Судьяларҙы күрһәткәндән һуң, хөкөмгә тартылыусыларҙың — Салауат менән уның атаһының исемдәре һәм социаль сығышы әйтелгән.

Ҡыҫҡа ғына тасуирлау өлөшөндә йыйылған бөтә тикшереү материалдары яҙып бирелгән. Салауаттың күрһәтеүҙәре протоколынан шундай һығымта яһалған: Салауат Пугачев ғәскәрендә һәм «тоғро ғәскәрҙәргә ҡаршы күп һуғыштарҙа булыуы менән, шулай уҡ күп ауылдарҙы талауҙа ғәйепле». Баш күтәреүселәрҙең уларҙан Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алған ваҡыттағы күрһәтеүҙәре тураһында «уның (Салауаттың) төрлө ауылдарҙа күп яуызлыҡтар эшләүе хаҡында»[4] һөйләнеләр улар, тип белдерелә. Ләкин был раҫлауҙарҙы күрһәтеүҙәр протоколдарының йөкмәтке-

---

[1] ЦГАДА, ф. 7, д. 2043, ч. 14, л. 156—162.
[2] ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 71—74.
[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 320, 321, 327, 352, 356—359, 379, 391—394; ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 1, д. 7, л. 19—20.
[4] Крестьянская война..., 308-се бит.

һе менән сағыштырып ҡарағанда, судьяларҙың алдан уҡ бер фекерҙә булыуҙарын, объективлыҡтың әҫәре лә булмауын фашлау ҡыйын түгел. Салауат «күп ауылдарҙы талауҙа... ғәйепле» түгел, ысынында иһә ул хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашыуы тураһында һөйләй һәм фәҡәт Әҫем заводын яндырыуҙы ғына таный [1]. Ҡазанда һорау алынған ун баш күтәреүсенең тик берәһе генә «Салауат отряды» бөлгөнлөккә төшөрҙө» [2] тип әйтә. Хатта Салауатты йәне-тәне менән күрә алмаған Ҡолой Балтачевтың күрһәтеүҙәрен дә судьялар көсәйтергә кәрәкле тип таба, Ҡолой ысынында тик ҡайһы бер ауылдарҙың бөлгөнлөккә төшөрөлөүе тураһында ғына һөйләһә лә [3], уның һүҙҙәренә, Салауат ауылдарҙа ғәйәт ҙур яуызлыҡтар эшләне, тип ҡушып ҡуялар. Шулай итеп, тикшереү документтарының йөкмәткеһен яҙғанда, Волконский менән Вяземский аңлы рәүештә Салауатты уголовный енәйәтсе итеп күрһәтерҙәй мәлдәрҙе айырып алырға мөмкинлек биргән материалдарҙы ғына һайлап ала. Был — хөкөм аҫтындағы кешене тамам эшлектән сығарып, уға мөмкин тиклем ҡатыраҡ яза билдәләүҙә хәл иткес роль уйнарға тейеш була. Шуға күрә тасуирлау өлөшөндә судьялар, Салауаттың эш-хәрәкәттәренә баһа биргәндә, күп тапҡырҙар «яуызлыҡ» һүҙен ҡабатлап, буяуҙы ҡуйыртырға тырыша. Ә «яуызлыҡ» һүҙе менән билдәләнә торған енәйәттәрҙе, Сенаттың аңлатыуы буйынса, «үлтереүселәр, юлбаҫарҙар һәм ҡараҡтар ғына ҡыла, улар ҡулға алынасаҡ йәки енәйәт өҫтөндә тотолоп килтереләсәк...» [4]

Тикшереү ваҡытында алынған дәлилдәрҙе файҙаланып, Волконский менән Вяземский, Салауат Юлаев менән уның атаһына уларҙың эше өсөн ҡулланылырға тейеш булған яза сараларын билдәләй. Һығымта өлөшөндәге беренсе параграф Юлай Аҙналиндың Пугачев восстаниеһында ҡатнашыуын билдәләүгә Ырымбур губернаторына бирелгән күрһәтмәнән тора. Икенсе параграфында Салауат Юлаевҡа ҡаршы ҡуйылған ғәйепләүҙәргә характеристика бирелә һәм уға сығарылған хөкөм ҡарары белдерелә. Салауат «антын боҙоусы һәм боласы» тип атала, губернаторға тикшерергә һәм Салауатты «кешелекһеҙ үлтереүҙәрҙә» фашларға, «яуыздарға лайыҡ яза менән» язаларға һәм ғүмерлек каторгаға һөрөргә тәҡдим ителә. Билдәләмәнең өсөнсө параграфы ғәйепләнеүселәрҙең икеһен дә Ырымбурға ебәреү тураһындағы бойороҡтан тора. Хөкөм ҡарарына судьялар ҡул ҡуйған, һәр ҡағыҙ обер-секретарь С. И. Шешковскийҙың ҡултамғаһы менән нығытылған һәм әбей батша тарафынан раҫланған.

Билдәләмәнең аҡламаһынан башҡа күсермәһе лә һаҡланған [5].

---

[1] Крестьянская война..., 300—302-се биттәр.

[2] Шунда уҡ, 306-сы бит.

[3] Шунда уҡ, 307—308-се биттәр.

[4] *Дмитриев Ф. М.* История судебных инстанций и гражданского апелляционного судопроизводства от Судебника до Учреждения о губерниях. М., 1859, 548-се бит.

[5] Крестьянская война..., 308—310-сы биттәр; ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 32—36.

Ҡараламаһы, күрәһең, юҡ ителгән, шуға күрә Йәшерен комиссияның билдәләмә өҫтөндә эшләү этаптарын күҙәтеү мөмкин түгел.

Архивтағы «Пугачев полковнигы башҡорт Салауат Юлаев тураһындағы эш»тә Волконский, Вяземский һәм Шешковский тарафынан ҡул ҡуйылған билдәләмәнең тағы ла бер тексы бар [1]. Уның баш өлөшө 16 марттағы билдәләмәне һүҙмә-һүҙ ҡабатлай, шуға күрә тикшереүселәр, аҡламаның икенсе данаһы тип иҫәпләп, был документҡа иғтибар итмәгән [2]. Ысынында иһә был Йәшерен экспедиция тарафынан уны Екатерина II ҡарағанға тиклем сығарылған хәкөм ҡарарының көнө күрһәтелмәгән тексы. Беҙ суд ҡарарының иң һуңғы тексына индерелгән бөтә үҙгәрештәр әбей батшаның үҙ ҡулы менән эшләнгән, тип раҫлай алмайбыҙ, әммә тексты үҙгәртеп яҙыу буйынса эш, һис шикһеҙ, уның ҡушыуы буйынса башҡарылған. Хөкөм ҡарарының шартлы рәүештә билдәләнгән беренсе (архивтағы) һәм һуңғы (баҫылып сыҡҡан) варианттарын сағыштырыу документтың үҙенең тарихы өсөн генә түгел, бәлки суд-тикшереү процесының барышын характерлау өсөн дә шаҡтай әһәмиәтле. Суд ҡарарының иң һуңғы тексына бөтә тасуирлау өлөшө һәм Юлай Аҙналинға ҡағылған һығымта өлөшөнөң беренсе параграфы инә. Салауат Юлаевҡа ҡағылған икенсе параграф тулыһынса үҙгәртеп эшләнгән һәм ныҡ өҫтәлгән. Иң һуңғы тексты әҙерләгәндә тикшереү һөҙөмтәләре буйынса һығымталарҙан торған бүлек тулыһынса күсереп яҙылған. Салауаттың беренсе вариантҡа ингән үҙенең «яуызлыҡ ҡылыуҙа, бигерәк тә кеше үлтереүҙә ғәйебен танымауы тураһында... шулай уҡ һуғыштарҙа уның кемде лә булһа үлтереү мөмкинлеге тураһында» ҡәтғи белдереүе төшөрөп ҡалдырылған. Тексты үҙгәртеү процесында тикшереү материалдары яңынан ҡарала. Текста, ихтимал, әбей батшаның үҙенең бойороғо буйынсалыр, Ҡазан йәшерен комиссияһы колодниктарының күрһәтеүҙәренән торған яҙыу уның ышаныслы кешеһе генерал-майор Потемкин тарафынан ебәрелде, тип әйтелә. Бер үк ваҡытта беренсе варианттың хаталары төҙәтелә, ун баш күтәреүсе урынына ун ике кеше күрһәтелә, ә Салауаттың исеме Соловат тип яҙыла. Дөрөҫ, һуңғы варианттың авторҙары үҙҙәре лә хата ебәрә: Ҡолойҙоң Салауат «биш мең яуыз хәсис өҫтөнән полковник» [3] булды тигән күрһәтеүен улар Ҡазанда һорау алынған баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәренә өҫтәп яҙа.

Ҡарарҙың беренсе вариантының тексы шундай итеп эшкәртелә, быны редакторлау тип түгел, ә материалды, асылда, яңынан яҙыу тип атарға мөмкин. Ләкин текстар араһындағы төп айырма параграфтың күләмен өстән бер өлөшкә арттырған өҫтәмәләрҙән тора. Документтың беренсе варианты Салауат Юлаевты «ул яуызлыҡ һәм үлтереш ҡылған бөтә башҡорт ауылдарында» сыбыртҡы менән һуҡтырып, танауын ҡырҡырға, тамға һалырға, ә артабан уны «ғүмерлек ауыр каторга эшенә Рогервикка» [4] ебәреп яҙаларға

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 27—30.
[2] Шунда уҡ, л. 28 об., 29.
[3] Крестьянская война..., 309-сы бит.
[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 29.

тигән ҡәтғи ҡарарҙан тора. Хөкөм ҡарарының һуңғы вариантына яһалма юридик «объективлыҡ» төҫө бирелә. Эш, ғәҙел хөкөмгә һылтау яһап, ҡайтанан тикшереүгә ебәрелә, ғәҙел хөкөм «иң элек... фашлауҙы, шунан һуң ғына уның (хөкөм аҫтындағы кешенең) яҙмышын хәл ҡылыуҙы» [1] талап итә. Ләкин былар бөтәһе лә буш һүҙ, сөнки параграфтың башында уҡ инде Салауаттың хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа үҙенең ҡатнашыуын таныуы дәүләт законлары буйынса үлем язаһына торошло, тип әйтелә. Ғәйепләнеүсене сыбыртҡы менән һуҡтырыу һәм башҡа ғазаплау саралары тураһында иҫкә алыу ҙа ике йөҙлө рәүештә төшөрөп ҡалдырыла. Улар урынына 1754 йылдың 13 майындағы указ алына, уға ярашлы рәүештә Салауат «яуыздар лайыҡ булған» язаға тарттырылырға, ә унан ары Рогервикка оҙатылырға тейеш була. Хөкөм ҡарарының беренсе вариантының дөйөм йүнәлешен үҙгәртмәйенсә, билдәләмәнең һуңғы тексының авторҙары шул уҡ ҡарарҙы тапшыра, ләкин уның тексын, Салауат Юлаев эшен ҡарауҙа «объективлыҡ» һаҡланды тигән уйҙырма менән һуғарып, уның ысын асылын томалаҡ бирә.

Судтың икенсе ҡарарының — Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 6 июлендәге билдәләмәһенең тарихы ла ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырлыҡ. Был документтың провинция канцелярияһы секретары И. Черкашенинов төҙөгән ҡараламаһы һаҡланған [2]. Ҡаралама ҙур форматлы өтө ярым биттән тора. Документты һыҙғылап бөткәндәр, текстҡа һәм сит-ситтәренә өҫтәмәләр индергәндәр. Беҙ текстағы төп төҙәтеү воевода А. Н. Борисов ҡулы менән эшләнгәнен билдәләнек, бер нисә һүҙҙе башҡа почерк менән, күрәһең, икенсе тикшереүсе — воеводаның ярҙамсыһы С. И. Аничков яҙған булһа кәрәк. Документты төҙөү процесына воеводаның шундай актив ҡыҫылыуының сәбәбе нимәлә? Бында суд ҡарарының провинция властарының ябай билдәләмәһе генә булмауын айырып әйтеүҙә етә. Ҡарар уларға йөкләтелгән мөһим эште — Салауаттың уголовный енәйәттәрҙәге ғәйебен раҫлаусы өҫтәмә факттар табырға ҡушҡанды — үтәү тураһында губернаторға биргән отчеттың нигеҙенә ятырға тейеш була. Тексты редакторлау бер нисә йүнәлештә алып барыла: стиль ҡытыршылыҡтары төҙәтелә, төрлө өҫтәмәләр индерелә, айырым факттар аныҡлана, шулай уҡ закондарға һылтаныуҙарҙы һыҙып ташлау иҫәбенә текст ҡыҫҡартыла. Бер нисә миҫал килтерәйек. Черкашениновтың — «Ә Салаватка Пугачевҡа хеҙмәтендә бик ныҡ тырышлыҡ күрһәтте» тигән һөйләмендә — «хеҙмәтендә» тигән һүҙ һыҙып ташланған һәм «юғарыла әйтелгәнгә» тигән һүҙҙәр менән алмаштырылған; Пугачевтың заданиеларын Салауат «үс иткәндәй бик етеҙ үтәне» тигән фразала «етеҙ» һүҙен воевода «ихлас» тип төҙәтә. Салауат бригадир булғанлыҡтан, Черкашенинов фекере буйынса, ул «иркен китеп йөрөгән һәм, теләй ҡалһа, тоғролоҡҡа ҡайта алған булыр ине...» Воевода бын-

---

[1] Крестьянская война..., 310-сы бит.
[2] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 371—374.

дай фекер менән килешә, әммә фразаны «һәр ваҡыт» тигән һүҙҙәр менән тулыландыра. Ҡаралама текста Салауат «үҙенең ҡул аҫтындағыларға» бойороҡ бирә, тип яҙылған, ә воевода быны «үҙенең хәсистәренә» тип төҙәтә. Билдәләмәнең ҡаралама тексында, Салауатты кешеләрҙе үлтереүҙә ғәйепләү тураһында һүҙ барған өлөшөндә, воевода үҙенән «һәм бәләкәй балаларҙы ла йәлләмәй» тип өҫтәп яҙа. «Ләкин ул, Салауат, был турала ысын күңелдән танымай» тигән фразаны воевода һыҙып ташлай һәм тағы ла ҡәтғирәк итеп яҙып ҡуя: Салауат «электән килгән кирелеге менән бер ни ҙә әйтмәй, хәҡиҡәтте танымай һәм үҙенең эшләгәндәре тураһында һөйләп бирмәй» һ. б. ш.

Тексҡа өҫтәп индерелгән материалдан әһәмиәтлерәге Салауатты әсиргә алыу тураһындағы мәғлүмәттәр була, шул уҡ ваҡытта воевода был «уның (Салауаттың) яуызлыҡ эшләгән сағында» булды тип әйтергә онотмай, ә Аничков өҫтәп яҙып ҡуя: «Ә үҙе тәүбә итмәй, был йәнһеҙ яуыз кеше тотолмаһа, бер ҡасан да ғәйебен танымаç, яуыз эшен туҡтатмаç ине»[1].

Воевода Черкашенинов төҙөгән билдәләмәнән Екатерина II-нең 1775 йылдың 17 мартындағы манифесына һәм Сенаттың ошо уҡ йылдың 6 апрелендәге указына һылтауҙы алып ташлай[2], уға ярашлы рәүештә Пугачев восстаниеһында ҡатнашыусыларҙан үлем язаһына хөкөм ителгәндәре «Ырымбурға эшкә» оҙатыла, ә тән язаһына хөкөм ителгәндәре Тобол губернаһына һөргөнгә ебәреләә[3]. Улар, тәбиғи, Салауатты тән язаһына тарттырыу һәм уны Рогервикка һөргөнгә ебәреү тураһында инде әбей батша ҡулы менән раçланған хөкөмдө ерснә еткермәй булдыра алмай. Өфө чиновниктары Мәскәү суды сығарған ҡарарҙың асылын дөрөç аңлай. Черкашенинов Салауатты язалау тураһындағы ҡарарҙың был өлөшөн һүҙмә-һүҙ күсереп яҙа. Шуны ла билдәләргә кәрәк, воевода, Мәскәү ҡарары тексында иҫкә алынған 1754 йыл 13 май указының йөкмәткеһен тикшермәйенсә, ләкин ғәмәлдә «яуыздарҙы» нисек язалағанды белеп, Салауатты сыбыртҡы менән һуҡтырырға, танауын ҡырҡырға, маңлайына һәм сикәләренә тамғалар һалырга, тип яҙып ҡуя. Шулай итеп, Йәшерен экспедиция хөкөмөнөң һуңғы вариантынан төҙөүселәр тарафынан тырышып һыҙып ташланған нәмәләр Өфө билдәләмәһенә инә. Ҡағыҙ битенең ситтәренә воевода: Салауатты һәм уның атаһын Рогервикка оҙатырға кәрәк, «хатта уларға, ғәйептәре ҙур булған яуыздарға, бынан шундай алыҫта булһалар ҙа, ҡасырға йәки тағы ла ниндәйҙер зарарлы уйҙарға юл ҡалмаһын»[4], тип өҫтәп яҙа.

Күреүсебеҙсә, Өфө провинция канцелярияһының «присутствие» ағзалары үҙҙәренең тикшереүенә йомғаҡ яһаусы документтың теккы өҫтөндә нык эшләй. Редакторланған ҡаралама аҡҡа күсереләә һәм Өфө провинция канцелярияһының 1775 йылдың 6 июлендәге

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 371—372.
[2] Шунда уҡ, л. 373.
[3] ПСЗ I, 20-се том, № 14 275, 86-сы бит; № 14 294, 105—106-сы биттәр.
[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 374.

билдәләмәһенең һығымта өлөшө булып әүерелә [1]. Дәүләт әһәмиәтендәге эш буйынса ҡарарҙы эсенә алған был документ: «Императрица ғали йәнәптәре указы буйынса» тип башланып китә. Тасуирлау өлөшөндә ошо билдәләмә нигеҙенә һалынған документ, атап әйткәндә, тикшереү материалдарының экстракты күрһәтелә, ә артабан эште Өфөлә өҫтәмә рәүештә тикшереүҙең сәбәптәре әйтелә. Унан ары Мәскәүҙең тикшереүҙе артабан алып барыу буйынса заданиеға ҡағылған хөкөм ҡарарынан өҙөмтәләр килтерелә. Билдәләмә тикшереү һөҙөмтәләре тураһында губернатор «ҡарауына һәм хәл итеүенә» еткерергә тигән ҡарар менән тамамлана. Документтың ҡараламаһын уның һуңғы стадияһы — аҡламаһы менән сағыштырыу канцелярия секретары тарафынан төҙөлгән был документтың Салауат ҡылғандарҙың енәйәтсел характерын ғына ҡабартып, социаль тәртиптәге мотивтарҙы, Салауатты Пугачев хәрәкәтенә этәргән мотивтарҙы, юғалтып, төҫһөҙләндереп ҡалдырыу маҡсатында воевода һәм воеводаның ярҙамсыһы тарафынан нисек редакторланыуын һәм өҫтәлеүен күҙәтергә мөмкинлек бирә.

Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорптың 1775 йылдың 15 июлендәге билдәләмәһе Салауат Юлаевҡа һәм Юлай Аҙналинға аҡтыҡҡы хөкөм булып тора [2]. Документтың төп тексы, инеш һүҙҙән һәм һығымта өлөшөнөң һуңғы һөйләменән башҡаһы, ҙур булмаған үҙгәрештәр менән Өфө провинция канцелярияһының «фекерен» ҡабатлай, был, күрәһең, губернаторға ебәрелгән рапортта яҙылғандыр. Был рапорт һаҡланмаған, ләкин губернаторҙың 1775 йылдың 15 июлендәге һәм Өфө провинция канцелярияһының 6 июлдәге билдәләмәләренең текстарын сағыштырып ҡарағанда, губернаторҙа Өфө билдәләмәһенең төп нөсхәһе тексын һүҙмә-һүҙ ҡабатлаусы документ булған, тип ышаныс менән әйтергә мөмкин. Тимәк, Рейнсдорп ҡарарының биштән дүрт өлөшөн Өфө провинция канцелярияһы әҙерләгән документ тәшкил итә, һәм тик биштән бер өлөшө генә — Ырымбур канцелярияһы секретары П. Н. Чучаловтың үҙ аллы ижады. Текст, губернаторҙың бөтә билдәләмәләренә хас булған традицион формула менән: «Императрица ғали йәнәптәре указы буйынса...» — тип башлана. Унан ары губернатор ҡарай торған нәмә — Өфөнән ебәрелгән тикшереү эше документтарының экстракты әйтелә. Хөкөмдөң тасуирлау өлөшөнә Рейнсдорп башта Өфө провинция канцелярияһы билдәләмәһенең һығымта өлөшөн, ә артабан ошо уҡ билдәләмәнең тасуирлау өлөшөн урынлаштыра. Әгәр Өфө билдәләмәһе тулыһынса эҙмә-эҙлекле төҙөлһә: тәүҙә Сенаттың Йәшерен экспедицияһы тарафынан ҡуйылған ҡабатлап тикшереү бурыстары күрһәтелһә, ә һуңынан Өфөлә тикшереү һөҙөмтәләре яҙылһа, губернатор иһә үҙенең хөкөм ҡарарында тәүҙә үҙенә буйһонған кешеләрҙең эште тикшереүҙәге уңыштарын күрһәтеүҙе урынлы таба, ә уларға бынан алдағы тикшереүҙәрҙең мәғлүмәттәрен өҫтәй. Өфө воеводаһының һәм воевода ярҙамсыһының бөтә ҡәтғи өҫтәмәләре үҙгәртеүһеҙ ҡабул ителә. Ырымбур хө-

---

[1] Крестьянская война..., 330—333-сө биттәр.

[2] ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 71—74.

көм ҡарарының һығымта өлөшө бик ҡыҫҡа була. Хөкөм үҙе тасуирлау өлөшөндә яҙыла, ә йомғаҡлау губернаторҙың хөкөм ҡарарын еренә еткереүгә ҡағылған бойороғонан тора, уны үтәү шул уҡ провинция властарына тапшырыла.

Ырымбур хөкөм ҡарарына индерелгән Өфө билдәләмәһе тексы Ырымбурҙа бер ни тиклем редакторлана, ул, нигеҙҙә, материалды бәйән иткәндә, документҡа күберәк аныҡлыҡ биреү өсөн, стилде төҙәтеүгә ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, Салауатты «ысынды танымауҙа» ғәйепләүҙе Рейнсдорп: «таңымай киреләнә, үҙе эшләгәнде асманы»[1], тип үҙгәртеп яҙа. Губернатор Өфө воеводаһының Мәскәү хөкөм ҡарарынан алынған ғәҙел хөкөм принциптары тураһында фекер йөрөтөүҙәрен артыҡ һанай.

Салауат Юлаев эше буйынса сығарылған суд ҡарарҙары үҙ-ара генетик бәйләнгән. Йәшерен экспедицияның хөкөм ҡарары тексы Өфө провинция канцелярияһы билдәләмәһендә яңы конкрет материал менән тулыландырыла, ә унан ары был ҡарарҙарҙың икеһе лә Ырымбур губернаторының хөкөм ҡарары нигеҙенә һалына. Был документтарҙы Салауат эшен судта ҡарауҙың дөйөм маҡсаты ғына бәйләмәй, улар яҙылыштары буйынса ла — юғары учреждениеларҙың ҡарарҙарынан өҙөктәр килтереүҙән алып губернаторҙың түбәнге учреждениеларҙың ҡарарҙары тексын тулыһынса уларға индереүе менән дә бер-береһенә яҡын тора.

Хөкөм ҡарарҙарының теле баҙыҡ һәм ҡыҫҡа, уларҙы, күрәһең, хөкөм ителеүселәрҙе язалау алдынан иғлан итеү өсөн әҙерләгәндәрҙер. Шул уҡ ваҡытта суд ҡарарҙарының йөкмәткеһе судтың халыҡҡа ҡаршы рухын, уның Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусыларҙың эштәрен ҡарауға алдан уҡ дошманлыҡ менән яҡын килеүен кәүҙәләндерә. Билдәләп үтелгәненсә, юғары власть һәм әҙәрләү учреждениелары баш күтәреүселәрҙең хәрәкәттәренә «яман эш һәм яуызлыҡ ҡылыу» итеп ҡарай. Волконский менән Вяземский кенәздәр рәсми ҡағыҙҙарҙа «бик мең яуыз хәсискә» етәкселек иткән Салауаттың «әшәке йөрәге» тураһында һөйләп, һүгенеүҙән дә тартынмай. Өфө властары Салауат менән Юлайҙың исемдәрен кәмһетеп («Салаватка», «Юлайка» тип) яҙа һ. б. ш. Хөкөм ҡарарҙарында Салауат Юлаев юрамал йыртҡыс, талаусы һәм кеше үлтереүсе итеп күрһәтелә. Был ялған характеристика — еңелгәндәргә ҡарата, генерал П. И. Панин Екатерина II-гә биргән реляцияларының[2] береһендә яҙғанса, Салауат Юлаев һәм уның тоғро көрәштәштәре «башҡорт халҡының йөрәгендә мәңгелек язаһын алһын» тип эшләнгән ҡәбәхәт һәм ваҡсыл үс алыу.

Суд ҡарарҙары — бөтә тикшереү документтарынан өҙөктәр килтереп йәки ентекләп яҙыу нигеҙендә төҙөлгән ҡатмарлы документтар улар. Өфө провинция канцелярияһы һәм Ырымбур губернаторы билдәләмәләрендә ҡарар сығарғанға тиклем *тикшереү документтарының экстракты* ҡарап сығылды, тип әйтелгән. Эш документтарынан өҙөмтәләр килтереп яҙылған ошондай экстракттар

---

[1] Крестьянская война..., 332-се бит; ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 73.
[2] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 195-се бит.

төҙөү XVIII быуатта канцелярия эшендә киң таралған була. Улар билдәле бер эшкә ҡағылған күп һандағы документтарҙың асылын ҡыҫҡа формала биреүҙәре менән бик әһәмиәтле һәм йыш ҡына эш улар нигеҙендә хәл ителә торған документтар булып тора.

«Яуызлыҡта булған старшина Юлай Аҙналиндың һәм уның улы башҡорт Салауаттың ғәйептәре тураһында Өфө провинция канцелярияһында төҙөлгән экстракт»[1] Өфө судьяларынан эштең бөтә документтарын уҡытып тормаҫ өсөн әҙерләнгән була. Документта төҙөлөү ваҡыты ла, ҡултамға ла юҡ. Ул 1775 йылдың 6 июлендә, провинция канцелярияһы билдәләмә сығарған көнгә тиклем, яҙыла. Уның авторы канцелярия секретары Черкашенинов булыуы бик мөмкин. Эштер-мөштөр төҙөлөүе (айырым биттәрҙә графалар буталған һ. б.) буйынса документты ҡаралама тип иҫәпләргә лә мөмкин.

Экстракт 21 биттә яҙылған, биттәр буйға һыҙылып, өс өлөшкә бүленгән. Беренсе графала Вяземскийҙың Рейнсдорпҡа хатынан өҙөмтәләр менән Мәскәү хөкөм ҡарарының тексы килтерелә; икенсеһендә — Йәшерен экспедиция тарафынан йыйылған тикшереү материалдары, өсөнсөһөндә — тикшереүҙең башҡа бөтә документтары яҙыла. Ошонда уҡ 1649 йылғы Собор уложениеһы, Хәрби һәм Диңгеҙ уставтары главаларының һәм статьяларының номерҙары килтерелгән, шулар нигеҙендә Салауатҡа хөкөм ҡарары сығарырға тәҡдим ителгән. Губернаторға ебәрелгән экстракттың аҡламаһында закон статьяларының текстары яҙылыу-яҙылмауын беҙ белмәйбеҙ, әммә уларҙың йөкмәткеһе тураһында Вяземский губерна канцелярияһынан һәр ваҡыт һорашып белешә алған.

Хөкөм ҡарарын төҙөү өсөн ярҙам итергә тейеш булған икенсе документ — Салауаттың, Юлай Аҙналиндың һәм Ҡолой Балтачевтың Мәскәүҙә һорау алғандағы күрһәтеүҙәренең экстракты[2]. Документтың исеме лә, ҡултамғаһы ла юҡ. Уның төҙөлөү ваҡытын сама менән генә, йәғни Ҡолойҙоң күрһәтеүҙәрен протоколға индергән ваҡытҡа, ҡарап күрһәтергә мөмкин — ул 4 марттан да алда төҙөлмәгәндер. Авторы Йәшерен экспедицияның Мәскәү бүлексәһе секретарҙарының береһе була. Был документта ла, элекке экстракттағы кеүек үк, күрһәтеүҙәр тураһында һөйләнмәй, ә ғәйепләнеүселәрҙең тырышып һайлап алынған «енәйәттәре» исемлеге генә бирелә. Әгәр ҙә, мәҫәлән, Өфө экстракты Салауат ҡатнашҡан һуғыштарҙы һанап сығыуҙан торһа, ә Мәскәү экстракты иһә Салауаттың ғәйебен иҫбатлаусы үҙенең алты дәлилен тәҡдим итә[3]. Ике экстракт та тикшереү һәм суд өсөн ярҙамсы әһәмиәткә эйә. Улар эште ҡарау тәртибе тураһында һәм ғәйепләнеүселәрҙең «законға ҡаршы» эштәре тураһында мәғлүмәт бирә, йәғни, атап әйткәндә, судьяларға хөкөм ҡарары сығарыу өсөн кәрәкле информациянан тора.

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 361—370.
[2] Шунда уҡ, д. 427, л. 25—26, 31.
[3] Шунда уҡ, ф. 6, д. 593, л. 365 об.; д. 427, л. 25—26.

Тикшереү эше составына суд ҡарарҙарының үтәлеүе тураһында байтаҡ һандағы документтар инә. Ҡарала торған эштә улар Өфө провинция канцелярияһының бер нисә билдәләмәһен үҙ эсенә ала, билдәле булыуынса, губернатор уға эште өҫтәмә рәүештә ҡарау тураһында Йәшерен экспедицияның заданиеһын үтәүҙе, ә артабан хөкөмдө еренә еткереүҙе лә йөкләткән була. Был документтар араһында — канцелярияның тикшереүҙе Өфөлә үткәреү тураһында[1] 1775 йылдың 1, 5 майҙарындағы ике билдәләмәһе, хөкөм ителеүселәрҙе тән язаһына тарттырыу тураһында өс (22 июль, 21 сентябрь һәм 20 октябрь) билдәләмәһе[2]. Был документтар Өфөлә тикшереү процесының нисек үтеүен күрһәтә, хөкөм ителеүселәрҙе язалау методтарын асыҡларға ярҙам итә. Уларҙың формуляры суд ҡарарҙарынан торған билдәләмәләр формулярынан бик аҙ ғына айырыла: инеш өлөшөндә документтың авторы юҡ; тасуирлау өлөшөндә «Императрица ғали йәнәптәре указы буйынса» тигән традицион формула ҡулланылмай, ул ҡараласаҡ эштең нигеҙенә ятҡан документты күрһәтеү менән асыла. Авторлыҡ уның йөкмәткеһе һәм ҡултамғалар буйынса билдәләнә. 22 июлдәге билдәләмә айырыуса әһәмиәтле[3], ул губернаторҙың хөкөм ҡарарын тулыландырған һымаҡ. Тап бына унда билдәләнгән язаның характеры һәм уны башҡарыу тәртибе тураһында тәүләп әйтелә. Тасуирлау өлөшө, өҙөмтәләр килтереп, Рейнсдорп хөкөмөнөң һығымта өлөшөн ҡабатлай, ә унан һуң килгән канцелярия ҡарарында губернаторҙың бойороғоноң үтәлеүе тураһында әйтелә. Ошонда уҡ халыҡ йәшәгән пункттарҙың исемлеге килтерелгән, уларҙың ҡайһыһында һәм нисә тапҡыр сыбыртҡы менән һуҡтырырға, ҡайҙа танауын ҡырҡырға һәм тамға һалынырға тейешлеге күрһәтелгән. 1, 5 майҙарҙағы һәм 22 июлдәге билдәләмәләр төп нөсхәләрендә һаҡланған, уларға воевода һәм уның ярҙамсыһы ҡул ҡуйған. Воевода үҙенең фамилияһын һәм вазифаһын, һүҙ өҫтәп булмаҫлыҡ итеп, билдәләмә тексы юлына терәтеп үк яҙып ҡуйған. Документтарҙың күпселек авторҙары һәм уларға ҡул ҡуйыусы кешеләр ҙә шул ҡағиҙәне һаҡлаған. Черкашенинов үҙенең ҡултамғаһын, секретарға тейеш булғанынса, һуңғы биттең аҙағында ҡуйған. Күсермә рәүешендә ҡалған билдәләмәләр урындағы канцелярия работниктарының ҡултамғаһы менән раҫланған.

Салауат Юлаев эшен ҡарауҙың бер нисә айға һуҙылған процедураһы суд-тикшереү һәм дөйөм администрация учреждениеларының үҙ-ара актив *яҙышыуы* менән бергә бара. Ул тикшереү эше материалдарының өстән ике өлөшөн (57 документ) тәшкил итә. Материалдарҙың бөтә ошо комплексы Салауатты язаларға әҙерләүҙең айырым яҡтарын яҡтырта. Улар Салауаттың ҡулға алы-

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 320—321, 327.

[2] Шунда уҡ, л. 391—392. Крестьянская война..., 333—334-се биттәр. ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 1, д. 7, л. 19—20.

[3] Крестьянская война..., 333—334-се биттәр.

ныуы, унан беренсе һорау алыу тураһында, төрмәлә тотоу шарттары (аяҡ-кулдарҙы бығаулау, төрмә стенаһына сынйыр менән бәйләп ҡуйыу, туҡланырға аҡса биреү (уның суммаһы аҡрынлап көнөнә 5 тиндән 2 тингә тиклем кәметелә), һаҡсы командаларының составы һәм тикшереү ваҡытында һәм тән язаһына тарттырғанда һаҡлап йөрөтөү ысулдары тураһында, тикшереү аҫтындағыны Өфөлә һаҡлау (Салауаттың һәм уның атаһының хәле тураһында ҡарауыл командаһы командирының воеводаға көндәлек рапорттары) тураһында беҙгә мәғлүмәт биреүсе берҙән-бер сығанаҡтар.

Ағымдағы яҙышыу ҡағыҙҙары, хаттар, хөкүмәт учреждениеларының эске документацияһы кеүек үк, восстание ваҡиғаларын уның дошмандары позицияһынан яҡтырта. Хаттарҙа бирелгән фактик материалдың, шулай уҡ протоколдарҙағы күрһәтеүҙәрҙең дөрөҫлөгөн билдәләгәндә, авторҙың нимәлә хаталаныуын, ялғанлауының, ваҡиғаларҙы күрәләтә боҙоп күрһәтергә тырышыуының сәбәптәрен асыҡларға кәрәк. Документтарҙа килтерелгән закон положениеларынан өҙөктәр ҙә тикшереүҙе талап итә.

Салауат Юлаевтың тикшереү эше материалдарын характерлағандың ахырында эш составында һаҡланған уникаль документтарҙың береһен айырыуса күрһәтеп үтергә кәрәк. Һүҙ бында Салауаттың Өфө төрмәһенән үҙенең туғандарына һәм ирекләге иптәштәренә йәшерен ебәргән *шәхси хаты* тураһында бара. Беренсе главала был документтың барлыҡҡа килеү шарттары тураһында яҙылғайны инде. Хатты ҡарауыл офицеры ҡулға төшөрә һәм Өфө провинция канцелярияһына тапшыра. Салауаттың уҡымышлы булыуын Сенаттың Йәшерен экспедицияһында ла, Өфө провинция канцелярияһында ла беләләр, сөнки күрһәтеүҙәр протоколдарына ул үҙе ҡул ҡуя. Шуға күрә Өфөлә хаттың Салауат тарафынан яҙылыуына бер ниндәй ҙә шик тыумай. Хат тәржемә ителгәс һәм эшкә ҡатнашы булған шаһиттарҙан һорау алғас, тикшереүселәр авторлыҡтан ҡәтғи баш тартҡан Салауаттың белдереүен кире ҡаға ала. Хатты төрки теленән руссаға тәржемә иткәндән һуң, оригинал чиновниктарҙы инде ҡыҙыҡһындырмай. Уның, Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусыларҙың башҡа йөҙҙәрсә документтары кеүек, шунда уҡ юҡ ителеүе, йәғни һуңынан юғалыуы мөмкин. Беҙгә ысын документты түгел, ә тәржемәне, йәғни тәржемәсе беҙгә тәҡдим иткән уның интерпретацияһын, ҡарарға тура килә. Тәржемәнең сифаты тураһында хөкөм итеү ҡыйын. Провинция канцелярияһы тәржемәсеһе Андрей Васильевтың тәжрибәһенә генә ышанырға ҡала, ул элегерәк Е. И. Пугачевтың Ырымбур губернаһы башҡорттарына 1773 йылдың 1 октябрендәге указын ап-арыу оҫта тәржемә итә, шулай уҡ уның полковник Ҡаҫҡын Һамаров[1] өндәмәләренең һәм властарга тоғро булған старшиналарҙан провинция канцелярияһына килгән күп кенә рапорттарҙың тәржемәләрен күрһәтергә мөмкин. Өҫтәүенә, Васильев, тәжрибәле тәржемәсе булараҡ, 1775

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 26—27, 120-се биттәр.

йылдың 5 майында[1] Салауаттың һорау алғандағы күрһәтеүҙәрен тәржемә иткәндә уның үҙ фекерҙәрен әйтеү манераһын да үҙләштерә алғандыр, тип уйларға кәрәк. Васильев тарафынан элек тәржемә ителгән бөтә документтарҙың эстәлегенә анализ, был тәржемәләр дөрөҫ яһалған, шуның менән бергә уларҙа яуапҡа тартылыусы пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәренә, ғәҙәттә, тикшереүселәр тарафынан юрамал бирелгән тенденциозлыҡтың әҫәре лә юҡ, тип һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Ҡарала торған хатҡа ҡул ҡуйылмаған, ҡасан яҙылыуы, кемгә аталыуы ла билдәле түгел. Васильевтың үҙе тәржемә иткән документтарҙы төҙөү өлкәһендәге белемен күрһәтеүсе башҡа тәржемәләре менән танышыу ҙа шуны раҫлай. Хаттың юғарыла күрһәтелгән реквизиттарын тәржемәсе төшөрөп ҡалдырмаған, ә улар аңлы рәүештә авторҙың үҙе — Салауат тарафынан ҡуйылмаған — әгәр ҙә ул хатҡа ҡул ҡуйһа, яҙылған көнөн һәм кемгә икәнен атаһа, үҙен һәм, төрмәнән ошо хатты ни өсөн ебәргән булһа, шул эште харап итеп ҡуясағын яҡшы аңлаған. Хаттың тәржемә тексы бер биттең ике яғына яҙылған, тәүге биттең башына «татарса хаттан тәржемә» тиелгән, тексҡа тәржемәсенең ҡултамғаһы ҡуйылған. Уны Салауат Юлаевтың яҙыуы, кемгә аталыуы һәм көнө тураһындағы мәғлүмәттәрҙе, хаттың үҙенең эстәлегенән һәм тикшереүҙең башҡа материалдарынан белергә була. Эшкә ҡатнашы булған шаһиттарҙың — Мөхәммәт Көсөковтың, Сағыр Үтәшевтең һәм Я. Ф. Чудиновтың 28 майҙа һорау алғандағы күрһәтеүҙәре буйынса хаттың яҡынса 1775 йылдың 7 майында яҙылыуы мөмкин, унда хат төрмәнән уларға «өс аҙна самаһы элек бирелде» тип әйтелә[2]. Хатта Салауат уны фашлаусы дәлилдәр йыйыуҙа властарға булышлыҡ итмәҫкә, үҙенең ғәйебен тәрәнәйтерҙәй мәғлүмәттәр биреүҙән баш тартырға һәм, мөмкин булғанса, уның ғаиләһенең мәнфәғәттәрен яҡларға һорай. Ул хатында күптән түгел халыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан үҙенең ирек-тәге иптәштәренә, шулай уҡ ярҙам итәсәктәренә ҙур өмөт бағлаған туғандарына ла мөрәжәғәт итеүе ихтимал бит. Әйтелгән сығанаҡтың ҡайҙан алыныуына ҡарап, унда яҙылған факттарҙың дөрөҫлөгө тураһында фекер йөрөтөргә мөмкин. Был Салауаттың һорау алғанда тотҡан тактикаһына ла, ғаиләһенең хәле тураһындағы информацияға ла, шулай уҡ чиновниктарҙы һатып алыу юлы менән уның тикшереү барышына йоғонто яһарға ҡарар итеүе тураһында, эште Өфөнән губерна канцелярияһына биреү тураһында һәм башҡа шундай информацияға ла ҡайтып ҡала. Үҙенә мәғлүм булған факттарҙы яҙып, Салауат иң яҡын кешеләренә үҙенең хәлен еңеләйтеү һәм ғаиләһен ҡотҡарыу өсөн нисек эш итеү планын әйтә. Шуға күрә был сығанаҡтағы факттар етерлек дәрәжәлә эштең реаль торошон сағылдырырға тейеш.

---

[1] Крестьянская война..., 146—147, 156, 214—215, 316—320, 322—324-се биттәр.

[2] Шунда уҡ, 322—325-се биттәр.

§ 3. САЛАУАТ ЮЛАЕВТЫҢ ТИКШЕРЕҮ ВАҠЫТЫНДАҒЫ КҮРҺӘТЕҮҘӘРЕН ТӨҘӘТЕҮСЕ СЫҒАНАҠТАР

Салауат Юлаевтың суд-тикшереү эше составына инә торған документтар уларҙа бирелгән мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөлөк дәрәжәһе менән айырыла. Күп кенә документтарҙа дөрөҫлөгө шик тыуҙырмай торған мәғлүмәттәр килтерелә. Шундайҙарға тикшереү һәм суд ултырыштарының урыны һәм ваҡыты тураһындағы, эҙләү алып барған һәм ҡарарҙар сығарған учреждениелар тураһындағы мәғлүмәттәр инә, Салауат Юлаевтың, тикшереү аҫтындағы башҡа кешеләрҙең, ғәйепләүсе шаһиттарҙың һәм башҡаларҙың сығышы, йәше, ғаилә һәм мөлкәт хәле тураһындағы мәғлүмәттәр күпселек осраҡтарҙа дөрөҫ. 1773—1774 йылдарҙағы баш күтәреүселәр хәрәкәте тураһында һөйләүсе төп факттар иһә ныҡлы тикшереүгә мохтаж. Салауат Юлаев эше документтарында бирелгән факттарҙың дөрөҫлөк һәм тулылыҡ дәрәжәһе уға параллель булған, Салауат эше составына инмәгән башҡа төрлө сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр менән, ярҙамсы һәм төҙәтеүсе тип аталған сығанаҡтар менән, тәнҡит күҙлегенән сағыштырып ҡарау аша билдәләнеүе мөмкин. Улар иҫәбенә баш күтәреүселәр лагерының документтары, восстание етәкселәренең һәм унда ябай ҡатнашыусыларҙың тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәре протоколдары, язалау ғәскәрҙәре хәрби начальниктарының Салауат Юлаев эшмәкәрлегенең айырым факттарын яҡтыртыусы донесениелары[1] инә. Сығанаҡтарҙың ошо комплексын ылыҡтырып файҙаланыу Салауат Юлаев эшендәге документтарҙың эстәлеген тикшерергә, аныҡларға һәм тулыландырырға мөмкинлек бирә. Сығанаҡтарҙа бирелгән материалды төҙәтеү — уларҙы тарихи хикәйәләү алдынан мотлаҡ эшләнергә тейешле тикшеренеү операцияһы ул.

Салауат Юлаевтың тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәрен тулыландырыусы һәм аныҡлаусы сығанаҡтарҙың характеристикаһын ҡарайыҡ.

Баш күтәреүселәр хәрәкәте документтары араһында Салауаттың күрһәтеүҙәрен тулыландырыу өсөн уның поход канцелярияһынан сыҡҡан документтары айырыуса әһәмиәтле. Салауат ҡулы менән тулыһынса яҙылған документтар һаҡланмаған. Уларҙың беҙгә килеп еткәндәре уның писарҙары тарафынан йә рус телендә, йә төрки телендә (XVIII быуат терминологияһы буйынса — «татар телендә») яҙылған. Салауат рус телендә яҙылған 9 документҡа һәм бер резолюцияға ҡул ҡуйған, ә 3 документ — төрки телендә. Ул үҙенең ҡултамғаһын төркисә (ғәрәп алфавиты) ҡуйған, исемен — Салауат Юлай улы тип, чинын — полковник, бригадир вазифаһын үтәүсе баш полковник тип күрһәткән. Был документтарҙы хронологик тәртиптә ҡарайыҡ.

---

[1] Үҙенән-үҙе аңлашылыуынса, был сығанаҡтар үҙҙәре уларҙағы мәғлүмәттәрҙең тулылығы һәм дөрөҫлөгө яғынан сығып өйрәнелергә һәм баһаланылырға тейеш.

Уларҙың күпселеге 1774 йылдың ғинуарына ҡайтып ҡала һәм баш күтәреүселәрҙең Красноуфимск һәм Көңгөр райондарындағы һуғыш хәрәкәттәре менән бәйләнгән. Был ваҡытта Салауат Кама буйында баш күтәреүселәрҙең төп етәкселәренең береһе, Е. И. Пугачевтың үҙенең йомошон үтәүсе була. 13 ғинуарҙа, Красноуфимскиға инеү менән үк, Салауат Красноуфимск казактары командаһына атаман итеп М. И. Поповты (Ивановты) һәм есаул итеп М. Д. Чигвинцевты [1] билдәләү тураһында полк писары Петр Лутохинға әмер бирә. Икенсе көндө Салауат уларға Красноуфимск крепосы менән идара итеү тураһында бойороҡ тапшыра [2]. Шул уҡ көндө указ иғлан итеלә, унда Салауат есаул Г. А. Овчинниковты хеҙмәтенән бушата [3]. Ә шул уҡ ваҡытта йөҙ башлығы Д. Ершовтың ҡартайыуы сәбәпле отставкаға сығырға һорап биргән ҡағыҙында үтенеүсенең юллауын ҡәнәғәтләндереү тураһындағы резолюцияға ҡулын ҡуя [4].

Красноуфимскиҙан Салауат отряды Көңгөргә йүнәлә. Мишәрҙәрҙең йөҙ башлығы Пугачев полковнигы Ҡәнзәфәр Усаевтың отрядтары инде бында була. 1774 йылдың 19 ғинуарында Салауат Юлаевтың поход канцелярияһында баш күтәреүселәр исеменән Көңгөр кешеләренә ҡаланы һуғышһыҙ биреү тураһында өндәмә яҙыла [5]. Бер үк ваҡытта Салауат һәм Ҡәнзәфәр исеменән яҡындағы Югов заводы конторaһына заводтан пушкалар һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары алыныуы тураһында белдереп ҡағыҙ (билет) ебәрелә [6]. Ҡамалған Көңгөр властарына һәм халҡына Салауаттың поход канцелярияһында 21 ғинуарҙа яҙылған икенсе мөрәжәғәт Көңгөр эргәһенә ебәрелгән «Рәсәй ғәскәренең баш етәксеһе» И. С. Кузнецов исеменән була, уға Кузнецов, Салауат һәм баш күтәреүселәрҙең бүтән хәрби начальниктары ҡул ҡуя [7]. Отрядты тирә-яҡтағы ауылдарҙа йәшәүселәр менән тулыландырыу һәм Көңгөрҙө ҡамауға әҙерләнеү тураһында Югов заводы атаманы Г. Т. Ситниковҡа 20 ғинуарҙа төҙөлгән ҡулланма И. С. Кузнецов һәм «иптәштәре менән» Салауат Юлаев исеменән яҙыла [8]. 1774 йылдың 26 ғинуарында Уса земство йортонда төҙөлгән ордерға ла улар ҡул ҡуя, унда Көңгөргә язалау командалары килеүе айҡанлы, һаҡлыҡ саралары күрергә ҡушыла [9]. Ә «баш етәксе» И. С. Кузнецовтың Көңгөр эргәһенә тоҙ килтереү тураһында Красноуфимск тоҙ ятҡылығы кибете һатыусыһы С. Антоновҡа 22 ғинуарҙағы әмеренә Салауат Юлаев менән Красноуфимск атаманы М. Е. Мальцев ҡул ҡуя [10].

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 243-сө бит.
[2] Шунда уҡ, 244—245-се биттәр.
[3] Шунда уҡ, 245—246-сы биттәр.
[4] Шунда уҡ, 246-сы бит.
[5] Шунда уҡ, 247—248-се биттәр.
[6] Шунда уҡ, 248-се бит.
[7] Шунда уҡ, 249—250-се биттәр.
[8] Шунда уҡ, 251—252-се биттәр.
[9] Шунда уҡ, 252—253-сө биттәр.
[10] Шунда уҡ, 210-сы бит.

Салауат канцелярияһынан сыҡҡан төрки телендәге өс документ һаҡланған. Беренсеһенә 1774 йылдың 23 марты тип ҡуйылған һәм унда төньяҡ-көнбайыш башҡорт волостарында йәшәүселәрҙе баш күтәреүселәр отрядына йыйыу тураһында йөҙ башлығы Иләтбай Илембаевҡа бойороҡ бирелгән [1]. Документҡа йөҙ башлығы тарафынан йыйылған баш күтәреүселәрҙең исемлеге теркәлгән [2]. Икенсе документ башҡа райондағы — Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы ваҡиғалар менән бәйләнгән. 1774 йылдың июнь башында Салауат, Әй йылғаһының үрге ағымында Пугачев ставкаһында булған сағында, Бөрө эргәһендә хәрәкәт иткән баш күтәреүселәр отрядтарының башлыҡтарынан ярҙам һораған рапорт ала. 6 июндә яуап хатында ул Михельсон корпусына ҡаршы 3 июндә Әй йылғаһының Ҡыйғы ауылы эргәһендә, ә 5 июндә Әйҙең һул яҡ ярында булған һуғыштар тураһында уларға хәбәр итә һәм баш күтәреүселәрҙең Бөрө янындағы хәрәкәттәренә ярҙам күрһәтә алмауын белдерә, сөнки ул үҙенең отряды менән Көңгөргә поход яһаған Пугачевтың Төп ғәскәре составында тора [3]. Өсөнсө документ баш атаман Юлай Аҙналин һәм баш полковник Салауат Юлаев тарафынан «Рәжәб айының 15-се көнөндә», йәғни 1774 йылдың 10 сентябрендә, яҙылған. Ул баш күтәреүселәрҙең Ҡатау-Иван заводын ҡамауына ҡағылған ваҡиғаларҙы яҡтырта һәм башҡорт баш күтәреүселәре менән завод крәҫтиәндәрен дөйөм дошманға ҡаршы бергәләп көрәшергә саҡыра [4].

Архивтарҙа шулай уҡ баш күтәреүселәрҙең 12 документы һаҡлана, улар — Салауат Юлаевҡа бирелгән рапорттар, үтенестәр һәм 1774 йыл башында Красноуфимск — Көңгөр районында киң ҡолас алған хәрәкәткә етәкселек итеүҙә Салауат Юлаевтың ғәйәт ҙур ролен яҡтыртыусы башҡа сығанаҡтар [5]. Шуныһы ла мәғлүм, Салауатта Пугачевтың халыҡты баш күтәреүселәр яғына сығырға саҡырған 1773 йылдың 2 декабрендәге манифесы була. Был манифестың күсермәһен Салауат 1774 йылдың 19 ғинуарында үҙенең өндәмәһе менән бергә Көңгөргә ебәрә [6].

Салауаттың эшмәкәрлеге менән туранан-тура бәйләнгән бөтә был документтар халыҡ хәрәкәтенең крепостнойлыҡҡа ҡаршы характерын аса, Салауат һәм уның көрәштәштәренең баш күтәреүселәр хәрәкәтенә ойошҡанлыҡ элементтары бирергә ынтылған ҡарарҙары тураһында һөйләй. Документтар Салауаттың һәм баш күтәреүселәрҙең бүтән етәкселәренең хәрби-ойоштороу һәләтлектәрен күрһәтеүсе дәлил булып тора; улар милли дошманлыҡты еңеп сыға алған һәм күп милләтле ҙур отрядтар булдырған, ко-

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 254-се бит.
[2] Шунда уҡ, 254—255-се биттәр.
[3] Шунда уҡ, 256-сы бит.
[4] Шунда уҡ, 256—257-се биттәр.
[5] Шунда уҡ, 187—188, 207, 216—217, 244, 246, 252, 253, 255, 256, 311, 382-се биттәр.
[6] Шунда уҡ, 36—37, 381-се биттәр.

рал менән тәьмин иткән һәм билдәле дәрәжәлә уларҙың хәрәкәттәрен берләштергән.

Восстание етәкселәренең һәм унда ябай ҡатнашыусыларҙың күрһәтеүҙәре протоколдары Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғалары тураһында һөйләүсе төп информация сығанағы булып тора. Үрҙә билдәләп үтелгәненсә, Салауат эше буйынса һорау алыу барышында тикшереүселәр 30 пугачевсының күрһәтеүҙәрен файҙалана. Башҡа күрһәтеүҙәр тикшереүселәргә билдәһеҙ булып ҡала. Улар хатта Пугачевтан һорау алыу материалдарын да ылыҡтырмай. Сенаттың Йәшерен экспедицияһының Мәскәү бүлексәһендә 1774 йылдың 4—14 ноябрҙәрендә һорау алыу ваҡытында Пугачев башҡорттарҙың восстаниела ҡатнашыуы тураһында һөйләй, баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәре башҡорт атлы отрядтары менән даими тулыландырылып тороуын айырыуса билдәләй. Пугачев, 1774 йылдың июнь башында Салауат Юлаевтың өс мең кешенән торған отрядының уға ҡушылыуын башҡорттарҙың восстание эшенә ысын күңелдән бирелгәнлеге тураһында һөйләүсе ҙур ваҡиғаларҙың береһе, тип билдәләй [1].

Салауатты фашлаусы күрһәтеүҙәрҙе табырға тип, тәүҙә П. С. Потемкиндың, ә унан ары А. А. Вяземскийҙың бойороғо буйынса Ҡазан йәшерен комиссияһының эштәрен махсус рәүештә яңынан ҡарап сыҡҡандан һуң, чиновниктар тарафынан пугачевсыларҙан һорау алғандағы 18 протокол табыла һәм тикшереү материалдарына теркәлә. Ләкин был саҡта бөтә күрһәтеүҙәр ҙә табылып бөтмәй. Улар араһында Минзәлә ҡалаһынан Салауат отрядында 1774 йылдың ғинуарынан алып июнь уртаһына тиклем булған В. Ҡаташевтан һорау алыу протоколы [2], шулай уҡ Салауат отрядының Көңгөрҙө ҡамауы тураһында Себер юлы Сумаҡай ауылы башҡорто Мәүлет Аитовтың һөйләгәндәре теркәлгән протокол бар [3]. Томск йәйәүле ғәскәрҙәр полкы гренадерҙары М. Богадельщиков менән Ф. Гусев, уларҙан Ҡазанда һорау алғанда, Салауат отрядтарының 1774 йылдың майында Әй йылғаһы буйында подполковник Михельсон командаһына ҡаршы һуғыштары тураһында һөйләй [4]. Ә Усаның элекке воеводаһы Ф. Д. Пироговский пугачевсыларҙың Усаны ҡамауы һәм алыуы тураһында ентекләп һөйләй, ҡалаға Салауат Юлаев менән И. Н. Белобородов отрядтарының беренсе булып килеп етеүен айырып күрһәтә [5]. Гәйнә волосынан баш күтәреүсе башҡорттар старшинаһы Сәйфел-Мәүлет Сәйҙәшев, үҙенең ғәйебен танып, властарға килергә теләмәүен салауатсыларҙан ҡурҡыуы менән аңлата һәм, 1774 йылдың сентябрендә Ҡазан йәшерен комиссияһында унан һорау алғанда, июлдән бирле Өфөгә

---

[1] Допрос Е. Пугачева в Москве в 1774—1775 гг. 198—199, 209—213-сө биттәр.

[2] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 10, л. 58—59; ч. 3, л. 410.

[3] Шунда уҡ, д. 507, ч. 5, л. 336.

[4] Шунда уҡ, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 340—341.

[5] Шунда уҡ, д. 440, л. 21—22.

үтә алманым, сөнки «иптәштәре менән Салауат Юлаев» етәкселегендәге отрядтар бөтә Башҡортостанды ҡыҙырҙы, тип һөйләй[1].

1774 йылдың февралендә — мартында Пермь провинция канцелярияһында (Көңгөрҙә) һорау алынған баш күтәреүселәрҙең күп күрһәтеүҙәре лә тикшереүселәргә билдәһеҙ булып ҡала. Шул уҡ ваҡытта, Красноуфимскиҙа Салауат Юлаев отряды составында булған һәм Көңгөр эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнашҡан Красноуфимск казактары һәм башҡорттары Салауаттың үҙ отрядын нисек ойоштороуы, Красноуфимскиҙа халыҡ власы органдарының ҡайһылай эш итеүҙәре, һуғыш хәрәкәттәренең барышы тураһында бәйнә-бәйнә һөйләп бирә.

Төбәләҫ волосының башҡорт старшинаһы Собханғол Килтәковтың (Картиковтың) һәм Әйле волосының поход старшинаһы Сүри (Серюй) Рәсүлевтең Пермь провинция канцелярияһындағы күрһәтеүҙәре Пугачев тарафынан 1773 йылдың декабрендә Себер юлы волостарына ебәрелгән Салауат Юлаевтың бында нисек итеп баш күтәреүселәр отряды төҙөүе тураһында мәғлүмәт биреүсе бик ҡиммәтле сығанаҡтар булып тора[2]. Улар икеһе лә Себер юлы территорияһында йәшәгән башҡорт, татар, мишәр, сыуаш, мариҙарҙан төҙөлгән 800 кешелек отрядта етәксе постарҙа була. Салауат ошо отряд менән Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш волостары аша Красноуфимскиға йүнәлә һәм артабан уның менән Көңгөрҙө ҡамауҙа һәм штурмлауҙа ҡатнаша. Бында ауыр яраланған Салауат дауаланыу өсөн тыуған ауылына киткәндә, Сүри Рәсүлевкә үҙ отряды менән командалыҡ итеүҙе йөкләтә.

Красноуфимскиҙа баш күтәреүселәр власының етәкселәре атаман М. И. Попов менән есаул М. Д. Чигвинцевтың уларҙан 1774 йылдың 28 февралендә Көңгөрҙә һорау алғанда күрһәтеүҙәре протоколдары информацияның тулылығы буйынса бик әһәмиәтле. Улар Салауат етәкселек иткән отрядты Красноуфимскиҙа нисек ҡаршы алыуҙарын, Красноуфимск казактары менән уны нисек тулыландырыуын иҫкә ала, Пугачевтың йәш полковнигының ғәскәрҙе артиллерия менән тәьмин итеүгә һәм хәрби белгестәр әҙерләүгә бик иғтибарлы булыуы тураһында һөйләй. Күрһәтеүҙәрҙә Көңгөрҙө ҡамар алдынан Салауат, Ҡәнзәфәр Усаев, И. С. Кузнецов отрядтарының урынлашыуы (дислокацияһы) тураһында мәғлүмәттәр бар[3]. Красноуфимскиҙағы баш күтәргән казактарҙың әсиргә төшкән атаманы М. Е. Мальцев[4], тупсылар Я. Ф. Пермяков[5] һәм Е. В. Попов[6], казак К. Д. Чигвинцев[7], Көңгөр өйәҙе Иҫке Посад ауылы крәҫтиәне Ф. И. Яковлев[8] М. И. Попов менән

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 207 об.
[2] Крестьянская война..., 89—93-сө биттәр.
[3] Шунда уҡ, 95—98-се биттәр; ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 25—30.
[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 13—20; Крестьянская война..., 362—364-се биттәр.
[5] Шунда уҡ, ф. 6, д. 439, л. 32—36.
[6] Шунда уҡ, ф. 6, д. 439, л. 61—63.
[7] Шунда уҡ, л. 81—86.
[8] Шунда уҡ, ф. 349, д. 7215, л. 2—4.

М. Д. Чигвинцевтың һөйләгәндәренә күп нәмә өҫтәй. Улар бөтәһе лә Көңгөрҙө штурмлауҙа ҡатнаша һәм үҙ күрһәтеүҙәрендә был операцияны әҙерләү, 1774 йылдың ғинуарында унда йәйелдерелгән һуғыштарҙың тактикаһы тураһында, баш күтәреүселәр артиллерияһының хәрәкәте тураһында мәғлүмәттәр бирә. Ә 1774 йылдың март аҙағында ғына әсиргә алынған К. Д. Чигвинцевтың күрһәтеүҙәре, ғинуар ваҡиғалары тураһындағы белдереүҙәрҙән башҡа, 1774 йылдың февралендә һәм мартында Салауат Юлаевтың эшмәкәрлеген яҡтырта. Мәҫәлән, атап әйткәндә, Чигвинцев, Красноуфимск эргәһендә 19 февралдә секунд-майор Д. О. Гагриндың язалау командаһына ҡаршы һуғышты хәтергә ала, бында баш күтәреүселәрҙең рус-башҡорт отрядына ауыр яранан дауаланғандан һуң кире сафҡа баҫҡан Салауат командалыҡ итә. Баш күтәреүселәрҙең Буғалыш ауылына ҡарай сигенеүе тураһында К. Д. Чигвинцев тарафынан килтерелгән мәғлүмәттәр ҙә ҡыҙыҡлы, был ауыл унан һуң контрһөжүмгә күскән язалау командаһына отпор биреү өсөн Салауат тарафынан өс аҙна буйына баш күтәреүселәргә көс туплау үҙәге була. Чигвинцев шулай уҡ 12 мартта Салауат отрядтарының Красноуфимскиға инеүе тураһында ла әйтә һәм ике көндән һуң килеп еткән подполковник А. В. Папав командаһы менән ошо крепость эргәһендәге һуғышты тасуирлай [1].

1773 йылдың декабренән 1774 йылдың мартына тиклем Салауат отрядында Тебекес ауылы сыуашы Е. Ильин хеҙмәт итә, ул шул саҡтағы ваҡиғалар тураһында Орск крепосы коменданты канцелярияһында һорау алған саҡта һөйләй [2]. Троицк (Иҫке Посад) ауылынан завод крәҫтиәне С. Т. Котельников та Салауат отрядында байтаҡ ваҡыт була, ул, 1774 йылдың 30 октябрендә Югов заводы конторaһында һорау алғанда, рус һәм башҡорттарҙың боевой дуҫлығы хаҡында билдәләп үтә [3].

Восстаниеның бынан һуңғы ваҡиғалары баш күтәреүселәрҙең һаҡланып ҡалған күрһәтеүҙәрендә шундай уҡ тулы сағылмай. Әүжән-Петров заводына беркетелгән крәҫтиәндәр Н. С. Арзамасцев менән С. Федоров 1774 йылдың апреленән алып июленә тиклем Пугачевтың Төп ғәскәре сафтарында була. Улар, Минзәлә воеводаһы канцелярияһында һорау алғанда, ошо уҡ йылдың июнендә Пугачевҡа Әй йылғаһы янында командаһы менән Салауат Юлаевтың килеп ҡушылыуын иҫкә ала [4]. Кишерть ауылы крәҫтиәне В. Сесюневтың 1774 йылдың 27 июлендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғанда биргән күрһәтеүе лә иғтибарға лайыҡ, ул, Пугачев, Усаны алғандан һуң, ауыр яраланған Салауатты Тулва башҡорттары менән Башҡортостанға оҙатты, тип белдерә [5]. Салауаттың иң яҡын көрәштәштәренең береһе, Пугачев полковнигы Ҡәнзәфәр Усаевтың күрһәтеүен дә иҫкә алырға кәрәк, ул, Бөгөлмәлә 1774 йылдың 4 августа полковник Н. Н. Ҡожиндың

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 84—85.
[2] Шунда уҡ, д. 467, ч. 1, л. 323—324.
[3] Пугачевщина, 2-се том, 346-сы бит.
[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 8, л. 282.
[5] Шунда уҡ, д. 627, ч. 7, л. 366.

канцелярияһында һорау алғанда, июль айында үҙенең Салауат отряды менән берләшергә һәм Өфө эргәһендә тупланған язалау ғәскәрҙәренә удар яһарға ниәтләнеүен таный[1].

Билдәле булыуынса, әсирғә алынған пугачевсыларҙан шунда уҡ хәрби поход канцелярияларында һорау алалар. Мәҫәлән, подполковник И. И. Михельсондың генерал Ф. Ф. Щербатовҡа биргән рапортында, 1774 йылдың 9 майында Ҡатау-Иван заводы крәҫтиәне ҡулға алынды, ул Салауат янына юл тотоуын, уға ярҙамға 130 завод крәҫтиәне ебәрелеүе һәм тағы 100 кешелек отряд әҙерләнеүе тураһында хәбәр алып барыуын әйтте, тип белдерелә. Ҡулға алынған икенсе бер пугачевсынан язалаусылар шуны әйттерә, ул егерме баш күтәреүсе менән Салауат отрядын эҙләргә ебәрелгән, ә аҙаҡ башҡорт, мишәр һәм татарҙарҙан төҙөлгән ҙур отрядты уға алып барырға тейеш булған. Әгәр рус завод крәҫтиәндәре һәм крайҙың рус булмаған халыҡтары отрядтарының Михельсон корпусына ҡаршы ҡаты һуғыш алып барған Салауатҡа уның өсөн айырыуса ауыр булған көндәрҙә ярҙамға барыуын иҫәптә тотһаҡ, был мәғлүмәттәр бигерәк тә ҙур әһәмиәт ала[2]. Үкенескә ҡаршы, был күрһәтеүҙәрҙең тулы текстары ла, шулай уҡ Михельсондың поход канцелярияһы документтарының шаҡтай өлөшө лә юғалған. 1774 йылдың ғинуарында — сентябрендә Салауат Юлаев отрядтары менән һуғышҡан подполковниктар И. Қ. Рылеев һәм А. В. Папав, секунд-майорҙар Д. О. Гагрин һәм И. Штеричтың поход канцелярияһы документтарының да яҙмышы шундай уҡ.

Шулай ҙа язалау командалары канцелярияларынан сыҡҡан документтарҙың бер өлөшө юғарғы учреждениеларҙың материалдары араһында һаҡланып ҡалған. Уларҙың күбеһе хөкүмәт ғәскәрҙәре командующийҙарының хәрби-поход канцелярияларына эштәрендә тупланған. Подполковниктар Папав менән Михельсондың Салауат Юлаев тураһында информация биргән егерменән ашыу рапорты генералдар А. И. Бибиков менән Ф. Ф. Щербатовтың хәрби-поход канцелярияларының ҡағыҙҙары араһында һаҡлана. Ҡөңгөр гарнизоны командиры Папавтың генерал Бибиковҡа рапорттары 1774 йылдың март башындағы ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә[3]. Салауат Юлаев ул саҡта башҡорттарҙан, рустарҙан һәм татарҙарҙан өс меңле отряд төҙөүгә өлгәшә һәм ошо отряд менән Красноуфимск эргәһендә Папавты ҡаршы ала, бында 1774 йылдың 15 мартында бик ҡаты алыш башлана. Баш күтәреүселәр сигенергә мәжбүр була, ләкин Красноуфимскиҙан 35 саҡрымда, Буғалыш ауылы эргәһендә, хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы яңынан һуғыш башлайҙар. Папавтың генерал Бибиковҡа 15 һәм 18 марттарҙағы рапорттары һәм уның уҡ секунд-майор С. Пушкаревҡа 19 марттағы белдереүе — Салауат отрядтарының ошо көндәрҙәге һуғыш операциялары тураһында ентекле

---

[1] Крестьянская война..., 220—222-се биттәр.

[2] Шунда уҡ, 144-се бит.

[3] Папавтың 1, 2, 10, 13 марттарҙағы рапорттары. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1236, л. 74, 75, 299, 300.

һөйләүсе берҙән-бер сығанаҡ[1]. Папавтың донесениеларында һәм хәбәрҙәрендә, баш күтәреүселәр менән көрәштә үҙенең уңышта-рын асыҡтан-асыҡ ҡабартып күрһәтеү тенденцияһы булыуға ҡа-рамаҫтан, ҡаршы яҡтың һуғыш тактикаһы, уларҙың алыштарҙағы батырлығы һәм саялығы тураһында күп кенә ҡыҙыҡлы фекерҙәр әйтелә. Яңы баш командующий генерал Ф. Ф. Щербатовҡа 1774 йылдың май—июнь айҙарында бирелгән рапорттар ҙа Папав тарафынан ебәрелгән, уларҙа баш күтәргән Красноуфимск казак-тары Салауаттан ярҙам көтә, Көңгөр өйәҙе крәҫтиәндәре лә Са-лауат менән И. Н. Белобородовтың отрядын көтөп алғандан һуң, заводтарға һөжүм итергә әҙерләнә икән тигән паника менән һу-ғарылған төрлө имеш-мимеш хәбәрҙәр килтерелә[2].

Подполковник Михельсондың 1774 йылдың апрель—июнь айҙа-рындағы донесениелары һәм хәрби-поход журналы баш күтәреү-селәргә ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре, шулай уҡ Салауат Юлаевтың командалыҡ итеү һәләттәре тураһында һөйләүсе күп осраҡта уни-каль сығанаҡтар булып тора. Уларҙы Салауат ғәскәре менән һу-ғыштар тураһында регуляр оператив сводка итеп ҡарарға мөмкин, ҡаршы тарафтың хәрәкәтенә баһа биргәндә, ҙур тәжрибәле Ми-хельсон һәм уның корпусының офицерҙары йыш ҡына «үҙҙәре лә көтмәгән ҡаршылыҡ күрһәтеүгә» осрауҙарын танырға мәжбүр була. 3 һәм 8 июндәрҙә Михельсон Пугачевтың Салауат Юлаев отряды менән ныҡытылған Төп көстәре уның корпусына һөжүм итеүе тураһында Щербатовҡа хәбәр итә[3]. Баш командующийға һәм Өфө коменданты полковник С. С. Мясоедовҡа ебәргән башҡа донесениеларында Михельсон Салауат Юлаев менән И. Н. Бело-бородовтың берләшеүенә юл ҡуймау өсөн үҙе күргән саралар ту-раһында, уларҙың отрядтарын эҙләүе һәм эҙәрләүе тураһында хә-бәр итә[4]. Юғарыла күрһәтелгән документтарҙың ҡайһы берҙәре Михельсондың «Һуғыш хәрәкәттәре журналын...» төҙөгәндә фай-ҙаланыла[5].

Подполковник И. Қ. Рылеевтың поход канцелярияһынан һәм уның командиры генерал Ф. Ю. Фрейман канцелярияһынан 1774—1775 йылдарҙа сыҡҡан документтар беҙгә берәр данала ғына ки-леп еткән. Өфө провинция канцелярияһы ҡағыҙҙарына Рылеевтың

---

[1] Крестьянская война..., 104—110-сы биттәр. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1236, л. 329.

[2] Папавтың 1774 йылдың 18 майындағы һәм 28 июнендәге рапорттары.— ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 55; д. 1240, л. 466.

[3] Михельсондың 1774 йылдың 8 һәм 13 майҙарында, 1, 3 һәм 8 июндәрендә Щербатовҡа рапорттары. «Крестьянская война...» китабында, 139—141, 144—146, 168—169, 171—173, 184—186-сы биттәр.

[4] Михельсондың 1774 йылдың 16 апрелендә — Бибиковҡа, 25 апрелдә, 5 майҙа, 22 һәм 26 июндәрҙә Щербатовҡа рапорттары. «Крестьянская война...» китабында, 131—132, 134—138, 196—197-се биттәр; ЦГВИА, ф. 20, д. 1240, л. 316—317. Михельсондың 1774 йылдың 3 һәм 25 июндәрендә Мясоедовҡа яҙ-ған хаттары. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 181. Крестьянская война..., 198—199-сы биттәр.

[5] Крестьянская война 1773—1775 гг. в России: Документы из собрания Гос. ист. музея, 200—202, 206—207, 211—212, 386—387-се биттәр.

Салауат Юлаев отрядын үҙенең эҙәрләп барыуы һәм Башҡортостандың төньяҡ өлөшөндә, Елдәк крепосынан алыҫ түгел ерҙә баш күтәреүселәр менән бәрелешеүе тураһында хәбәр иткән 1774 йылдың 19 һәм 25 сентябрҙәрендәге ике рапорты теркәлгән. Октябрь айында И. А. Рейнсдорпҡа биргән рапортында ла ул шул уҡ хаҡта белдерә [1]. Ҡазан йәшерен комиссияһы эштәрендә генерал П. С. Потемкинға рапорты һаҡланған, унда Рылеев, ҡорал көсөнә генә иҫәп тотмайынса, башҡорттарҙы «тәүбәгә ҡайтарырға һәм буйһонорға» өндәй башлауын белдерә. Үҙенең өгөт-нәсихәттәрендә ул ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе үс алыу менән ҡурҡыта һәм хыянатсыларға бүләктәр вәғәҙә итә. Ул үҙенең эше ҡайһы бер уңыштар килтереүе менән Потемкинды шатландыра ала: хыянат юлы менән Салауаттың көрәштәштәре Абдулла Туҡтаров менән Семен Шеметов ҡулға эләгә. Рылеев шундай уҡ юл менән Салауат Юлаев та әсиргә алыныр, тип өмөтләнә [2].

Рылеевҡа ҡаршы һуғышҡа инер алдынан, Салауатҡа секунд-майор И. Штерич отряды менән осрашырға тура килә. Штеричтың үҙенең командиры полковник А. Я. Якубовичҡа шуны белдереп хәбәр иткән ниндәй ҙә булһа донесениеһы табылманы. Тик Штеричтың 1774 йылдың 4 сентябрендә Салауат отряды менән һуғышта ҡатнашҡан Яйыҡ атаманы Н. Назаровҡа биргән аттестаты ғына һаҡланған [3]. «Генерал һәм кавалер граф Панин етәкселек иткән императрица ғали йәнәптәре ғәскәрҙәре ҡоралы менән боласы шайкалар күпме, ҡайҙа һәм ҡасан ҡыйратылыуы ведомосынан» шул билдәле, был һуғыш Әңгәсәк заводына яҡын Иваново ауылында барған [4].

Язалау ғәскәрҙәренең баш командующийҙары һәм ғәскәрҙең айырым частары командирҙары — генералдар Ф. Ф. Щербатов, П. М. Голицын, П. И. Панин, И. А. Деколонг, А. Д. Скалон, полковниктар В. Ф. Бибиков һәм Н. Н. Ҡожин, коллежский советник И. Л. Тимашев, майор О. Дуве хаттарында, Папав һәм Михельсон рапорттарында осраған кеүек, Салауат отряды менән һуғыштар ентекләп яҙылмай. Ләкин әйтеп кителгән хаттарҙа Салауат Юлаевтың эшмәкәрлегенә дөйөм баһа бирелә. Бында Салауаттың баш күтәреүселәрҙән «ал-ялһыҙ отряд ойоштороуы» тураһында, уларҙың хәрәкәттәре, хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы сығыштары тураһында информациялар бар [5].

---

[1] Крестьянская война..., 231—232-се биттәр. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 225.

[2] Рылеевтың 1774 йылдың 20 октябрендәге рапорты. — Крестьянская война..., 244-се бит.

[3] ЦГВИА, ф. 52, оп. 194, д. 101, л. 66.

[4] Материалы для истории Пугачевского бунта, *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 637—641-се биттәр.

[5] Щербатовтың Екатерина II-гә 1774 йылдың 20 майындағы һәм 25 июнендәге реляцияһы; 21 майҙа Деколонгка хәбәре, 15 июндә Рейнсдорпҡа һәм 29 июлдә Чичеринға хаты, 16 июлдә Голицынға ордеры. — «Крестьянская война...» китабында, 148—152-се биттәр. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1233, л. 366—371; «Пугачевщина» китабында, 3-сө том, 255—256-сы биттәр; ЦГАДА, ф. 1100, д. 8, л. 208—211; д. 627, ч. 7, л. 349—350; «Пугачевщина» китабында, 2-се том, 262—263-сө биттәр; П. И. Паниндың 1774 йылдың 18 октябрендә башҡорт халҡына мөрәжәғә-

Салауат Юлаевтың ниәттәрен белеү өсөн лазутчиктар ебәреп ҡарайҙар. Ләкин был йыш ҡына уңышһыҙлыҡҡа һәм Салауат отрядының һанын күрәләтә күбәйтеп, хәрәкәт итеү районын хата күрһәткән имеш-мимеш хәбәрҙәр тыуыуына килтерә. Ләкин бер рапорттан икенсеһенә күскән ошондай уйҙырма информация ла Салауаттың шаҡтай уңыштарын һәм уның халыҡ араһында ифрат ҙур популярлыҡ менән файҙаланыуын күрһәтә.

Салауат етәкселек иткән баш күтәреүселәрҙең хәрәкәттәре граждандыҡ администрацияһы документтарында ла, йәшерен тикшереү комиссиялары начальнигы П. С. Потемкиндың ҡағыҙҙарында ла, Ҡазан һәм Ырымбур губернаторҙарының яҙышыу ҡағыҙҙарында ла, властарға тоғро булған башҡорт һәм мишәр старшиналары менән йөҙ башлыҡтарының рапорттарында ла сағыла. Генерал-майор Потемкин ҡул ҡуйған һигеҙ документ уның «Пугачевтың иң төп енәйәттәшенән», «Башҡорт илендә» «иң баш боласынан» үҙе һорау алыу өсөн, Салауат Юлаевтың әсиргә алыныуын ниндәй түҙемһеҙлек менән көтөүе тураһында һөйләй. Өҫтәүенә, ул әбей батшаны ошо ваҡиға менән ҡыуандырырға, шул тиклем мөһим эштә үҙенең дә ныҡ тырышлыҡ һалыуын һәм сослоғон күрһәтергә атлығып торған [1]. Ҡазан һәм Ырымбур губернаторҙары Дәүләт хәрби коллегияһына һәм ғәскәрҙәр командующийҙарына донесениеларында үҙ губерналарында баш күтәреүселәр хәрәкәте йәйелеүе тураһында һәм уны баҫтырыуға йүнәлдерелгән саралар тураһында борсолоп яҙа. Башҡортостанда баш күтәреүселәрҙең активлығын улар Салауат исеме менән бәйләй. Пугачев бригадирының киң танылыуын һәм хәрби данын күреп, Я. Л. Бранттың 1774 июнендә, Ҡама аръяғында Салауат Ҡама буйы башҡорт-

---

те. — Крестьянская война..., 241—242-се биттәр. Голицындың 1774 йылдың 16 октябрендә һәм 23 ноябрендә Панинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 34, 380. Деколонгтың 1774 йылдың 30 августа Хәрби коллегияға рапорты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1233, л. 491—494. Скалондың 1774 йылдың 25 сентябрендә Рейнсдорпҡа хаты, 26 сентябрендә Деколонгка һәм 9 декабрендә Чичеринға рапорттары. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 12, л. 62—63; ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 12, 16, 272. Полковник Бибиковтың 1774 йылдың 4 апрелендә — генерал А. И. Бибиковҡа, 29 апрелдә һәм 5 майҙа Деколонгка хаттары. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1237, л. 133; ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 9, л. 21, 113, 125. Тимашевтың 1774 йылдың 9 декабрендә Скалонға рапорты. «Крестьянская война...» китабында, 266—268-се биттәр. Кожиндың 1774 йылдың 26 августа Өфө воеводаһы Борисовҡа хаты. — Шунда уҡ, 225—226-сы биттәр. Дувеның 1774 йылдың 7 июнендә Щербатовҡа рапорты. — Шунда уҡ, 182—184-се биттәр.

[1] Екатерина II-гә 1774 йылдың 17 августағы һәм 20 ноябрендәге донесениелар, 1774 йылдың 29 октябрендә Салауат Юлаевҡа мөрәжәғәт, 1774 йылдың 12 һәм 21 ноябрҙәрендә П. И. Панинға хаттар, 1774 йылдың 13 ноябрендә Д. О. Гагринға ордер, 1774 йылдың 18 ноябрендә Ҡазан йәшерен комиссияһына тәҡдим, 1774 йылдың 20 ноябрендә Рейнсдорпҡа хат. — Материалы для истории Пугачевского бунта. *Грот Я. К.*, «Труды» китабында, 4-се том, 554-се бит. — ЦГАДА, ф. 6, д. 489, л. 200; «Крестьянская война...» китабында, 248, 261—264-се биттәр; ЦГВИА, ф. 20, д. 1053, л. 11 об. — 12. ГБЛ ОР, ф. 222, д. 7, л. 287. ЦГАДА, ф. 1100, д. 13, л. 199.

тарын һәм удмурттарын, завод крәҫтиәндәрен һәм татарҙарын үҙе артынан алып китеүе мөмкин, тип иҫкәртеүе һис тә нигеҙһеҙ түгел [1].

Өфө провинция властарының хәбәр итеп тороуынан Ырымбур губернаторы крайҙа баш күтәреүселәр хәрәкәте тураһында информация ала. 1774 йылдың майынан алып октябренә тиклем Өфө коменданты полковник С. С. Мясоедов ҡаланы Салауат Юлаев отрядтарынан һаҡлау өсөн тиҙерәк хәрби командалар ебәреүен һорап, губернаторҙы йөҙәтеп бөтә. Мясоедов Ф. Ф. Щербатовтың да информаторы була [2]. Өфө воеводаһынан Рейнсдорп Елдәк эргәһендә Рылеевтың Салауат отряды менән һуғышыуын белә [3]. Өфө провинция канцелярияһы документтары провинцияла «тыныслыҡ» урынлаштырыу өсөн бындағы властарҙың бөтә тырышлыҡтарын һалыуын күрһәтә. Ошонда штаттағы команда һалдаттары, үҙҙәренең шымсыларының — конфиденттарының хәбәр итеп тороуы һәм әсиргә төшкән баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре ярҙамында Салауат Юлаев отрядының хәрәкәттәре тураһында мәғлүмәттәр йыя. Алынған информация язалау отрядтары командирҙарына ебәрелә [4]. «Тоғро» ете башҡорт, мишәр старшинаһынан һәм йөҙ башлығынан алынған өс рапорт Өфө провинция канцелярияһы ҡағыҙҙары араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Был кешеләр властарға үҙҙәренең ярҙамдарын тәҡдим итә, ҡулдарына ҡорал алып, восстаниены баҫтырыуҙа ҡатнаша. Ләкин, карателдәргә яҙылғас, улар дошмандарына аяу белмәгән Салауаттың үс алыуынан ҡурҡа [5]. Салауаттан заводчиктар ҙа [6] һәм Өфө протопобы И. Неверов [7] та зарлана.

---

[1] Бранттың 1774 йылдың 18 июнендә Щербатовҡа һәм 27 июнендә Хәрби коллегияға рапорттары. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 354—355; д. 1234, л. 3—6. 1774 йылдың 25 мартынан алып 2 июленә тиклем Ырымбур губерна канцелярияһы документтары экстракты. — Шунда уҡ, д. 1233, л. 324—339; Рейнсдорптың 1774 йылдың 7 октябрендә Шепелевҡа ордеры. — «Крестьянская война...» китабында, 238-се бит.

[2] ЦГАДА, ф. 1100, д. 8, л. 64—65, 119—120; д. 11, л. 201, 202, 211, 213; «Крестьянская война...» китабында, 237-се бит. 1774 йылдың 30 майында һәм 8 июнендә Щербатовҡа рапорттар. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 26—27, 95—96.

[3] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 3 октябрендәге һәм 11 ноябрендәге рапорттары. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 224; д. 13, л. 268—269.

[4] Канцелярияның 1774 йылдың 24 июлендә — генерал П. М. Голицынга, 11 ноябрҙә Ҡазан йәшерен комиссияһына рапорттары. 3 сентябрҙә полковник Н. Н. Кожинга белдереүе. «Крестьянская война...» китабында, 215—216, 260—261-се биттәр; ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 10; һалдат И. Логиновтың 8 һәм 22 майҙарҙа канцелярияға биргән рапорттары, Сим заводы приказчигы А. Исаевтың 1774 йылдың 22 майҙағы һәм ошо уҡ завод крәҫтиәне Р. Н. Плотниковтың 28 майҙағы иғландары. — ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 178, 424, 435, 565.

[5] 1774 йылдың 28 майындағы, 26 һәм 30 сентябрендәге рапорттар.— ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 591; «Крестьянская война...» китабында, 233, 236-сы биттәр.

[6] Пермь тау заводы түрәләренең 1774 йылдың 23 июнендә Берг-коллегияға донесениеһы. — ЦГАДА, ф. 271, д. 1339а, л. 140—141; Я. Б. Твердышевтың 1774 йылдың 5 июнендә Рейнсдорпҡа приказчик Хлебниковтың хаты теркәлгән донесениеһы. — Шунда уҡ, ф. 1100, д. 8, л. 111—113; заводчиктар И. С. Мясников һәм Я. Б. Твердышевтың поверенныйы А. И. Кругловтың 1775 йылдың 20 майында Берг-коллегия ағзаларына ебәргән ведомосы. — Шунда уҡ, ф. 271, д. 1339б, л. 340.

[7] Өфө дини идараһының 1774 йылдың 10 июнендә Вятка дини консисторийына белдереүе. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 50.

Марттан алып ноябргә тиклем Салауаттың исеме Пермь провинция властарының документтарында даими ҡабатлана. Пермь прокуроры Ф. В. Попов Сенат генерал-прокуроры А. А. Вяземскийға 17 һәм 21 марттарҙа ебәргән рапорттарында Папавтың гарнизон командаһының Салауат Юлаев менән март айындағы һуғыштары тураһында белдерә [1]. Шул уҡ ваҡытта Көнгөр провинцияһы магистраты Салауаттың Красноуфимскиҙағы эшмәкәрлеге тураһында Ҡазан губернаторына һәм Баш тоҙ контораһына хәбәр итә [2]. Ярты йылдан һуң, 1774 йылдың сентябрендә, тау заводы чиновнигы берггешворен А. Кирхнер, тикшереп-нитеп тормай, имеш-мимеш хәбәрҙәргә таянып, Салауат Юлаевтың өс меңлек отряды Ҡариҙел йылғаһы аръяғында тора һәм Көнгөргә яҡынан ҡурҡыныс һала [3], тип Пермь провинция канцелярияһына рапорт бирә. Пугачев бригадирынан властар ул саҡта ла әле нык ҡурҡа: Салауат Юлаев һәм башҡа атамандарҙың Көнгөргә һөжүме көтөлөүе тураһында халыҡ араһында йөрөгән хәбәрҙәр провинция үҙәгенә лә барып ишетелә [4].

Хәрби һәм граждандлыҡ администрациялары канцелярияһынан сыҡҡан бөтә был документтар, суд-тикшереү буйынса яҙышыу ҡағыҙҙарынан 56 документ кеүек үк, туранан-тура Салауаттың исемен атай. Күп кенә сығанаҡтарҙа, Салауаттың исеме иҫкә алынмайынса, 1774 йылдың июнь башында Салауат отряды ҡушылған баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәрҙәренең һуғыш операциялары тураһында мәғлүмәттәр бар, Салауат отрядтары менән бергә хәрәкәт иткән (Көнгөр, Красноуфимск, Бөрө районында) баш күтәреүселәрҙең бүтән отрядтары тураһында ла әйтелә. Салауаттың күрһәтеүҙәрен төҙәтеүсе был документтарҙы сығанаҡ сифатында ылыҡтырыу Салауат Юлаев отрядтарының тап ошо райондарҙа булыуын аныҡ билдәләгән факттар килтерелгән бөтә осраҡтарҙа ла кәрәк.

Салауат Юлаевтың тикшереү эшендә сағылған факттарҙы тулыландырыу һәм аныҡлау маҡсатында язалау ғәскәрҙәре хәрби начальниктары яҙып ҡалдырған мемуарҙар ниндәйҙер дәрәжәлә ярҙам итә ала. Салауат Юлаев иҫкә алынған быға оҡшаш сығанаҡтар бик үк күп түгел. Башҡортостан территорияһында баш күтәреүселәр менән көрәш тураһында, Михельсон корпусының боевой юлы, атап әйткәндә, Салауат Юлаев отряды менән алыш тураһында, Галлела немец телендә Magazin für die neue Historie

---

[1] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 206—207.

[2] Материалы для истории Пугачевского бунта. «Пермский сборник» китабында. М., 1860, 2-се китап, 21-се бит; Крестьянская война 1773—1775 гг. в России. Документы из собрания Гос. ист. музея, 49—50-се биттәр.

[3] Пугачевщина, 2-се том, 267-се бит.

[4] Крәҫтиәндәр Т. Коротаев менән А. Горюновтың 1774 йылдың 22 майында Бисерть заводы контораһына биргән рапорты экстракты; Көнгөр өйәҙе Крылово ауылы крәҫтиәндәре М. С. Хлебников менән Б. И. Лихачевтың 1774 йылдың 7 июнендә һөйләгәндәре; татар Мандар Лазаревтың 1774 йылдың 21 октябрендә Бисерть заводы конторaһында һөйләгәндәре. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 186, 369; ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 180.

und Geographie» («Яңы тарих һәм география йыйынтығы») тигән А. В. Бюшингтың йыллыҡ журналында Zuverlässige nachrichten von dem Aufrührer Jemelian Pugatschew und der von demselben angestifteten Empörung» («Фетнәсе Емельян Пугачев һәм ул күтәргән восстание тураһында ысын хәбәрҙәр»)[1] тигән баш аҫтында исемһеҙ яҙмаларҙа һөйләнә. Ошо ҙур күләмле яҙмаларҙың авторы тураһында тикшеренеүселәр төрлөсә фараз итә. Исемһеҙ авторҙы йәки Михельсон корпусынан булыр йәки Пугачев восстаниеһы менән күп ҡыҙыҡһынған билдәле тарихсы академик Г.-Ф. Миллер булыр, тип уйлайҙар[2]. Был яҙмаларҙы баҫып сығарыу, үҙ сиратында, инде ныҡ ҡартайған генерал Ф. Ю. Фреймандың матбуғатта сығыш яһауына сәбәп була. Уның мемуарҙары шулай уҡ немец телендә 1794 йылда Риганың «Neve Nordische Miscellaneen» («Новая северная всякая всячина») журналында «Herrn Ferdinand von Freymanns Russ. Kaiserl. General-Lieutenants und Ritters getreue Darstellung seiner Expedition wider die (damaligen) jaitschen Kosaken, wie auch hernach wider den Rebellen Pugatschew; zur Berichtigung und Widerlegung einer im Büschingschen Magazin davon vorkommepden theils falschen Nachrichten» («Бюшинг» журналында өлөшләтә тулы булмаған, өлөшләтә хата раҫлауҙарҙы төҙәтеү, шулай уҡ ҡайһы берҙәрен кире ҡағыу маҡсатында Россия императоры генерал-лейтенанты һәм кавалеры Фердинанд фон Фрейман әфәнденең уның Яйыҡ казактарына ҡаршы, ә һуңынан боласы Пугачевҡа ҡаршы экспедицияларын дөрөҫ һүрәтләү»)[3] тигән баш аҫтында баҫылып сыға. Был яҙмаларҙа Салауат Юлаевтың хәрби эшмәкәрлеге тураһында уҡыусыларға тәүләп бәян ителә.

1797 йылда был саҡта инде статский советник булған А. В. Папав Павел I-гә биргән үтенес ҡағыҙында Крәҫтиәндәр һуғышы йылдарында баш күтәреүселәр менән көрәштә үҙенең «хеҙмәттәрен» ентекләп яҙа. Был документтан күп өҙөмтәләр «Русская старина» журналында «Пугачевҡа ҡаршы. (Замандаш яҙмаларынан)» исеме аҫтында баҫыла[4].

Крәҫтиәндәр һуғышын баҫтырғандан һуң 20 йыл үткәс донъя күргән был мемуарҙарҙа восстание ваҡиғаларын ҡыҙыҡлы һәм дөрөҫ һүрәтләү менән бер рәттән күп кенә фактик хаталар ҙа осрай. Салауатты ҡулға алыу тураһында Фреймандың яҙмаһында ла хата бар. Ул, йәнәһе, Ҡатау-Иван заводы эргәһендәге һуғыштарҙа әсир алынды, тиелә унда, ғәмәлдә иһә Салауат Йүрүҙән йылғаһы янында ҡулға алына. Ләкин, ғөмүмән алғанда, документаль тәү сығанаҡтар һәм шәхси тәьҫораттар нигеҙендә яҙылған ошо өс эштең бөтәһе лә Башҡортостан территорияһында баш кү-

---

[1] Magazin für die neue Historie und Geographie. Halle, 1784, № 18, s. 5—50.

[2] *Блок Г.* Пушкин в работе над историческими источниками. М.; Л., 1949, 90—140-сы биттәр.

[3] Neue Nordische Miscellaneen. Siebentes und Achtes Stuck. Von August Wilhelm Hupel. Riga, bay Johann Fridrich Hartknoch. 1794, s. 355—410.

[4] Русская старина, 1904, июнь, 647—662-се биттәр.

тәреүселәр көрәше күренешен стерлек әҙмә-әҙлекле итеп күҙ алдына баҫтыра.

Документаль һәм мемуар материалдарҙы ошолай күҙәтеү Салауат Юлаевтың тикшереү эшен өйрәнеү өсөн күп ярҙамсы һәм төҙәтеүсе сығанаҡтарҙы ылыҡтырырға мөмкин икәнлеген күрһәтте. Был сығанаҡтар Салауат Юлаевтың тикшереү ваҡытында биргән күрһәтеүҙәренең күпселеген тикшерергә һәм аныҡларға, уларҙы Пугачевтың ошо иң күренекле көрәштәшенең баш күтәреүселәр хәрәкәте ваҡиғаларында ҡатнашыуына бәйләнгән өҫтәмә фактик материалдар менән тулыландырырға мөмкинлек бирә.

§ 4. САЛАУАТ ЮЛАЕВТЫҢ КҮРҺӘТЕҮҘӘРЕ ПРОТОКОЛДАРЫН СЫҒАНАҠТАРҘЫ ӨЙРӘНЕҮ НИГЕҘЕНДӘ АНАЛИЗЛАУ МЕТОДИКАҺЫ

Салауат Юлаев эше буйынса һорау алыу алдан уҡ уны нисек тә, хатта ҡыйлатып булһа ла, уголовный енәйәтсе итеп күрһәтерҙәй, ғәйепләрҙәй мәғлүмәттәрҙе йыйыуға ҡайтып ҡала. Салауат Юлаев та, Пугачев восстаниеһы көндәрендә үҙенең хәрәкәттәрен яҡтыртыуға һәм баһалауға тикшереүселәрҙең тенденциоз ҡарауҙарын иҫтә тотоп, уларҙың күрәләтә ялған ғәйепте үҙенә япһарырға тырышыуҙарын ҡырҡа кире ҡағып ҡына ҡалмай, бәлки тикшереүсегә йә билдәле булмаған йәки уны бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмаған күп кенә ваҡиғалар хаҡында тулы һәм аныҡ яуап биреүҙән йыш ҡына баш тарта. Тикшереүҙең алдан уҡ билдәле бер маҡсатҡа йүнәлдерелгән булыуы һәм Салауаттың һорау алғандағы тактикаһы уның күрһәтеүҙәре протоколдары йөкмәткеһенә хәл иткес йоғонто яһамай ҡалмаған, шуға күрә был документтарҙы өйрәнгәндә һәм артабан тарихҡа бәйләп файҙаланғанда, ошо хәлде мотлаҡ иҫәпкә алырға кәрәк.

Салауаттың тикшереүҙәге күрһәтеүҙәренең ысынлығын һәм уларҙың Крәҫтиәндәр һуғышының реаль ваҡиғаларына тап килеүен-килмәүен билдәләү был күрһәтеүҙәрҙе юғарыла (3 параграфта) ҡаралған ярҙамсы һәм төҙәтеүсе сығанаҡтарҙағы параллель хәбәрҙәр менән тәнҡит күҙлегенән сағыштырып ҡарау методына нигеҙләнә. Шул уҡ ваҡытта Салауаттың ниндәй ҙә булһа факт тураһында һәр белдереүен өйрәнеү тейешле төҙәтеүсе сығанаҡтарҙы ылыҡтырыуҙы һәм сығанаҡтарҙы тәнҡитле өйрәнеү алымдарының конкрет ошо осраҡ өсөн яраҡлы булғанын һайлап алыуҙы талап итә.

Салауаттың күрһәтеүҙәре менән баш күтәреүселәр лагерынан, шулай уҡ восстание дошмандары яғынан сыҡҡан документтарҙың параллель хәбәрҙәрен бер-береһенә тәнҡит күҙлегенән сағыштырып ҡараған бер нисә миҫал килтерәйек.

1775 йылдың 25 февралендә Мәскәүҙә һорау алғанда, Салауат 1774 йылдың ҡышында үҙенең Красноуфимскиҙа булыуын хәтергә алып үтә. Ә 5 майҙа Өфөлә һорау алғанда инде ул, элекке әйткәненә өҫтәп, Красноуфимскиҙа, Пугачевҡа ебәрер өсөн, үҙенең ике мең һум аҡса конфискациялауын, пушкалар һәм дары алыуын

белдерә. Ләкин бына Салауаттың поход канцелярияһының һаҡланып ҡалған документтарынан ошо уҡ крепоста 1774 йылдың 13 һәм 14 ғинуарҙарында яҙылған бишеһе Салауаттың Мәскәүҙәге, шулай уҡ Өфөләге күрһәтеүҙәрен дә шаҡтай тулыландырырға мөмкинлек бирә. Был бойороҡтарҙа Пугачев полковнигының Красноуфимскиҙағы административ эшмәкәрлеге тураһында дөрөҫ мәғлүмәттәр бар [1].

Мәскәүҙә һәм Өфөлә һорау алғанда, Салауат үҙенең ике меңлек отрядының баш күтәреүселәрҙең башҡа көстәре менән берлектә Көңгөрҙө ҡамауҙа ҡатнашыуын әйтә, һәм бында ла, Красноуфимск ваҡиғаларын иҫкә алғандағы кеүек үк, уның күрһәтеүҙәре һүҙгә бик һаран. Ошо һуғыш операцияһына әҙерләнеү, шулай уҡ баш күтәреүселәр отрядтары командирҙарының ҡаланы тыныс юл менән алыу өсөн тырышып ҡарарға хәл итеүе тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәр беҙгә Салауат Юлаев канцелярияһының башҡа ете документынан билдәле булды [2].

Баш күтәреүселәрҙең документтарында теге йәки был ваҡиғаның характеры, уларҙың ваҡыты һәм урыны етерлек аныҡ билдәләнә. Мәҫәлән, Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың 1774 йылдың 10 сентябрендә Ҡатау-Иван заводы идара итеүселәренә һәм приказчиктарына мөрәжәғәте — баш күтәреүселәрҙең сентябрь башында Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы һуғыш хәрәкәттәре тураһында һөйләүсе аҙ һанлы документтарҙың береһе [3]. Шуны әйтергә кәрәк, Ҡатау-Иван һәм яҡын-тирәләге заводтар районындағы һуғыш хәрәкәттәрендә үҙенең ҡатнашыуын Салауат тикшереүселәрҙән ғөмүмән йәшереп ҡалдыра.

Салауаттың айырым күрһәтеүҙәренең ысынмы һәм тулымы булыуын уларҙы восстание етәкселәренең һәм ябай баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре менән сағыштырып ҡарап та билдәләргә мөмкин. Мәскәүҙә һорау алғанда, Салауат, отряд йыйып, баш күтәреүселәрҙе Берда лагерына алып килеү өсөн, Пугачевтың үҙен Ырымбур эргәһенән тыуған яғына ебәреүен таный. Ләкин ул, йәнәһе, отрядтар йыя алмаған, сөнки Себер юлындағы халыҡ, ул килгәнгә тиклем үк, Пугачев полковнигы И. Н. Грязнов тарафынан мобилизацияланған, ә Салауаттың үҙен баш күтәреүселәрҙең бүтән полковниктары — Собханғол менән Бәхтиәр көсләп Красноуфимскиға килеүен талап иткән. Ә киләһе һорау алғанда инде, бер көн элек, 1773—1774 йылдарҙың ҡышында Салауаттың Себер юлы ауылдарындағы эшмәкәрлеге тураһында элекке көрәштәштәре Раҡай Ғәлиевтең, Әбдрәшит Ғәлиевтең, Яҡуп Теләүембәтовтың һәм Зәйнәш Сөләймәновтың Ҡазан йәшерен комиссияһында биргән күрһәтеүҙәренән өҙөктәр менән танышҡандан һуң, ул үҙ иптәштәренең һөйләгәндәрен кире ҡағып тормай. Салауат, Пугачевтан Красноуфимскиға барырға задание алыуын ғына әйтә һәм «ми-

---

[1] Крестьянская война..., 301, 318-се биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева, 243—246-сы биттәр.

[2] Шунда уҡ, 301, 318-се биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 247—253-сө биттәр.

[3] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 256—257-се биттәр.

нең тарафтан төрлө диндәге кешеләрҙән йыйылған команда менән» шунда киттем [1], ти. Салауат һәм уның эмиссарҙары хеҙмәтсән халыҡтың дошмандары менән көрәшкә, «Петр III» — Пугачев армияһына инергә саҡырып, ҡайһы волостарҙа сығыш яһаған, баш күтәреүселәрҙе йыйыу нисек барған — Салауатҡа ҡарағанда ентеклерәк итеп, Пермь провинцияһы канцелярияһында һорау алғанда, Собханғол Ҡилтәков менән Сүри Рәсүлов һөйләй [2]. Уларҙың күрһәтеүҙәрендә пугачевсы йәш полковниктың үҙ аллы эшләй башлауының тәүге көндәренән үк күренгән хәрби-ойоштороу һәләтлелектәре яҡтыртыла. Халыҡҡа «һәр төрлө иректәр» бүләк итеүсе Пугачевтың указын файҙаланып, Салауат декабрь аҙағында һәм ғинуар башында һанаулы ғына көндәрҙә башҡорт, татар, мишәр, мари һәм сыуаштарҙан һигеҙ йөҙлөк отряд төҙөй ала. Был инде Себер юлында йәшәүселәрҙең бер өлөшө Пугачев полковнигы И. Н. Грязнов менән Силәбе яғына киткәс була.

Собханғол Ҡилтәковтың күрһәтеүҙәре Салауаттың Собханғол, йәнәһе, уға үҙ кешеләре Әбләҙи Һаҡҡолов менән Макар Иванов аша Красноуфимскиға килергә әмер бирҙе, тип раҫлауын кире ҡаға. Киреһенсә, Собханғол старшина булған Төбәләҫ волосына Салауат үҙе килә, һәм улар Салауатҡа ҡушылған башҡа старшиналар менән бергә волостарҙан йыйылған командаларҙы Красноуфимскиға алып китә [3]. Салауаттың тормошонда башҡорт Әбләҙиҙең ниндәй роль уйнауын билдәләп булманы. Салауат иҫкә алған Макар Иванов, шул уҡ Красноуфимск пономары М. И. Попов, ысынлап та, Салауат янына барған, ләкин уны Шайтан-Көҙәй волосынан көсләп сығартыр өсөн түгел. Попов Пермь провинция канцелярияһында унан һорау алғанда күрһәткәненсә, Красноуфимскиға яҡынлашып килгән Салауат отряды ҡаршыһына ул крепостың үҙ ирке менән бирелеүен әйтер өсөн барған [4].

Салауаттың күрһәтеүҙәре менән бәйләнешле рәүештә законлы һорау тыуа: пугачевсыларҙың исемдәрен ғөмүмән атамаҫҡа тырышҡан Салауат ни эшләп әле был юлы тикшереүсегә үҙенең иптәштәре тураһында әйткән? Баҡһаң, был баш күтәреүселәрҙе ул осраҡлы ғына атамаған икән. Үҙенең Красноуфимск — Көңгөр ваҡиғаларында ҡатнашыуы өсөн яуаплылыҡты улар өҫтөнә ауҙарғанда, Салауат инде башҡа был кешеләргә батша судының язаһы янамауын яҡшы белгән. Үҙенең иң яҡын көрәштәше Собханғол Ҡилтәковтың 1774 йылдың февралендә Көңгөрҙә язалап үлтерелеүе, ә Салауат отрядының февраль айында Красноуфимск эргәһендә секунд-майор Гагрин командаһына ҡаршы һуғыштары ваҡытында әсиргә алынған М. И. Поповтың каторгаға ебәрелеүе Салауатҡа билдәле булған, әлбиттә. Пугачев полковнигы Бәхтиәр Ҡанҡаевты язалаусылар, бик оҙаҡ, 1774 йылдың аҙағына тиклем, эҙләһә лә, ҡулға эләктерә алмай. Бәхтиәрҙең нисек һәләк булыуы

---

[1] Крестьянская война..., 301, 311—312, 318-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 89—93-сө биттәр.
[3] Шунда уҡ, 89—90-сы биттәр.
[4] Шунда уҡ, 96-сы бит.

йәки Бәхтиәр йәшеренгән ышаныслы урын Салауатҡа билдәле булғандыр, тип фекер йөрөтөргә мөмкин. Салауат әйткән И. Н. Грязнов, Е. И. Пугачевтың Төп ғәскәренең Исет полкы командиры, 1774 йылдың июлендә Ҡазан эргәһендә барған һуғыштарҙа һәләк була. Был хәбәрҙе Салауатҡа Грязнов отрядында хеҙмәт иткән һәм Ҡазан эргәһенән ҡайтҡан баш күтәреүсе башҡорттар еткереүе мөмкин.

Тикшереүселәрҙең һорауҙарына яуап биргәндә, Салауат һуғыш барған урындарҙы, үҙе ҡаршы һуғышҡан ғәскәри часть командирҙарының исемдәрен һәр ваҡытта ла әйтеп бармай. Быны ул аңлы рәүештә шулай эшләй, тикшереү килтергән дәлилдәрҙән һуң уның үҙенең күрһәтеүҙәрен үҙгәртеүе шуны раҫлай. Мәҫәлән, 25 февралдә Салауат, Көңгөрҙө штурмлағандан һуң, был районда үҙенең тик бер генә тапҡыр «тоғро ғәскәрҙәр» менән һуғышыуын әйтә. Ә 5 майҙа, Көңгөр эргәһендәге һуғыштарҙа, ә унан ары подполковник А. В. Папав командаһына ҡаршы һуғышта Салауат менән бергә ҡатнашҡан Ишмәт Мәмәтовтың күрһәтеүҙәрен уға килтергәндән һуң, Салауат Ишмәттең һөйләгәндәрен йөпләмәй булдыра алмай, «подполковник Попов деташаменты менән бер нисә тапҡыр һуғыштым» [1], тип белдерә. Йәшерен экспедицияла һорау алғанда, Салауат И. И. Михельсон корпусына ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре тураһында ла бер һүҙ ҙә әйтмәй. Ә инде уны И. Н. Белобородов, Раҡай Ғәлиев, Яҡуп Теләүембәтовтың күрһәтеүҙәре менән таныштырғас, Салауат, Пугачев менән бергә Михельсонға ҡаршы ике тапҡыр һуғыштым, тип танырға мәжбүр була [2].

Мәскәүҙә Салауат 1774 йылдың йәйендәге һәм көҙөндәге ваҡиғаларҙың береһе тураһында ла иҫкә алмай. Өфө провинция канцелярияһы чиновниктары пугачевсылар Семен һәм Афанасий Шеметовтарҙың, Арыҫлан Ранғоловтың һәм Әҙел Бигәшевтең күрһәтеүҙәре теркәлгән дүрт протоколды эҙләп таба, унда 1774 йылдың көҙөндә Салауат отрядтарының подполковник И. К. Рылеев ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышыуы тураһында әйтелә. Салауат был ваҡиғаны үҙенсә аңлатырға тырышып ҡарай, ышандырырлыҡ итеү өсөн, ул ысын булған ваҡиғаларҙы һөйләүҙән башлай: уға, отряд командирына, Елдәк крепосына табан килеүсе Рылеевтың пландары билдәле була, һәм ул, Салауат, Пугачев полковнигы Әбделйәлил Ырыҫҡолов отряды менән берләшеп, язалау отрядтарына ҡаршы сыға. Ә артабан ваҡиғалар, йәнәһе, шулайыраҡ йәйелеп киткән: Рылеев командаһы пушкаларҙан һәм мылтыҡтарҙан ут асҡас, баш күтәреүселәр, үҙҙәренең көстәрен самалап ҡарап, һуғышҡа инмәйенсә, сигенергә йәки хатта «һәр кем үҙе йәшәгән урындарына» таралырға хәл итә [3]. Салауат үҙенең элекке иптәштәренең күрһәтеүҙәре менән ниндәйҙер сәбәптәр буйынса килешмәгән осраҡтарҙа, ул һөйләгән мәғлүмәттәрҙең дөрөҫләгән язалау ғәскәрҙәре соединениелары хәрби начальниктарының үҙ-ара яҙы-

---

[1] Крестьянская война..., 301, 316, 318-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 305, 311, 312, 318-се биттәр.
[3] Шунда уҡ, 301—302, 315—316, 318—319-сы биттәр.

шыу ҡағыҙҙарынан алынған параллель белдереүҙәр ярҙамында асыҡларға мөмкин. Мәҫәлән, был осраҡта Рылеевтың 1774 йылдың 19 һәм 25 сентябрҙәрендә Өфө провинция канцелярияһына ебәргән ике донесениеһы табылды, был документтар Салауат Юлаевтың подполковник командаһы менән осрашыу шарттарына ҡағылған күрһәтеүҙәрен кире ҡаға. Рылеев Салауат ғәскәре менән ике тапҡыр һуғышыуы тураһында хәбәр итә. Беренсеһе 18 сентябрҙә Тимошкино ауылынан алыҫ түгел урында була, был хаҡта Рылеев, «восстание күтәреүселәрҙең «ҡыйыу... прожекты» миңә ышаныл тапшырылған ғәскәрҙәргә ҡаршы шундай яуыз уйлы итеп эшләнеүе менән ныҡ зарар килтерҙе, уны мин шундай мәкерле халыҡтан бер ҡасан да көтмәгәйнем, ләкин уны бөгөн ысын эштә күрҙем», тип яҙа. Дүрт көн үткәс, 22 сентябрҙә, Тимошкино менән Елдәк крепосы араһында, тип хәбәр итә Рылеев, ул «башҡорт Салаватка менән бик ҡаты алыша, уның үс меңгә тиклем яуыздары була» [1]. Үҙенең уңыштары менән маҡтаныш, Рылеев Салауат Юлаевтың хәрби оҫталығына тейешле баһа бирмәй булдыра алмай. Рылеевтың донесениелары һуғыштарҙың аныҡ даталарын һәм урындарын күрһәтә, шулай уҡ баш күтәреүселәр ғәскәренең яҡынса һанын әйтә.

Салауат Юлаев үҙенең боевой эштәре тураһында йә бик аҙ һөйләй, йә ләм-мим бер һүҙ әйтмәй, шуға күрә хәрби начальниктарҙың үҙ-ара яҙышыу ҡағыҙҙары (хаттары, донесениелары, рапорттары һ. б.) был хаҡта мәғлүмәт биреүсе яҡшы сығанаҡ булып тора. Мәҫәлән, Салауат Михельсон менән Папавҡа ҡаршы һуғыштары тураһында иҫкә алып ҡына үтһә, был ваҡиғалар ошо ике подполковниктың үҙ рапорттарында бик ихлас тасуирлана [2]. Салауаттың күрһәтеүҙәрендә һәм башҡа тикшереү документтарында Салауат отрядының секунд-майорҙар Д. О. Гагрин, И. Штерич командаларына ҡаршы һуғыштары тураһында, Михельсон менән май айындағы һуғыштар тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Ләкин был ваҡиғалар хаҡында айырым частарҙың командирҙары ла, шулай уҡ язалау ғәскәрҙәренең баш командующийҙары ла ентекләп яҙа.

Салауаттың күрһәтеүҙәрендә ваҡиғаларҙың дөрөҫ һәм тулы яҙылыуын билдәләүгә хәрби корреспонденция менән бер рәттән шулай уҡ граждандыҡ учреждениеларының яҙышыу ҡағыҙҙары ла хеҙмәт итә. Ул, мәҫәлән, Салауаттың баш күтәреүселәр баҫып алған Эҫем һәм башҡа заводтарҙы ҡыйратыуға ҡағылған аңлатыуын тикшерергә ярҙам итә. Билдәле булыуынса, уға ҡаршы ҡуйылған төп ғәйептәрҙең береһе — Эҫем заводын ҡыйратыу һәм яндырыу була. Йәшерен экспедицияла Салауат Пугачев әмере буйынса «заводчик Твердышевтың үҙенең атаһының ауылы янында торған заводын яндырыуын» таный, сөнки ауыл эргәһенә, уның атаһы еренә, көсләп Твердышев тарафынан ике ауыл күсереп ул-

---

[1] Крестьянская война..., 231-се бит.

[2] Шунда уҡ, 104—110, 158—160-сы биттәр; ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 146—147 һәм башҡалар.

тыртыла [1]. Был сакта ул хатта заводтың исемен дә әйтмәй, Өфөлә 5 майҙа һәм 8 июндә һорау алганда, шаһиттарҙың ғәйепләү дәлилдәре рәүешендә килтерелгән күрһәтеүҙәренә һәм провинция канцелярияһы документтарынан алынған мәғлүмәттәргә яуап биргәндә, ул Пугачевтан бөтә заводтарҙы яндырырға ҡушылған указ алдым, тип яңынан ҡабатлай. Ошо бойороҡто үтәп, мең кешелек отряд башында торған Салауат заводты ҡамай. Заводты юҡ итеүгә «ҡаршы торғандарҙы» үлтерәләр, ҡалған крәҫтиәндәрҙе заводтың Ерал ауылына ебәрәләр, тик шунан һуң ғына завод ҡоролмалары яндырыла [2]. Салауат, күреүебеҙсә, заводты яндырыуҙа үҙенең ҡатнашлығын кире ҡаҡмай. Пугачевтың фарманына һылтаныуын был осраҡта күп баш күтәреүселәрҙең һорау алғанда Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларында үҙҙәренең ҡатнашыуын аңлатҡанда файҙаланған тактик алым тип түгел, ә реаль фактты күрһәтеү тип ҡарарға кәрәк. Пугачевтың Салауатҡа һәм уның атаһына указы һаҡланмаған, ләкин күп кенә документтарҙа, Әүжән-Петров һәм Белорет заводтарын уларҙан баш күтәреүселәрҙең төп көстәрен сығарғандан һуң яндырыу тураһында Пугачевтың 1774 йылдың майында бойороҡ биреүе тураһында мәғлүмәттәр бар [3]. Пугачев восстаниеһы тарихын тикшереүселәр Көньяҡ Уралдың айырым заводтарына ҡарата быға оҡшаш бойороҡтар бирелгәндер тигән фекергә юл ҡуя. 1774 йылдың майында—июнендә Пугачев һәм уның хәрби коллегияһы, ҡайһы бер заводтарҙың Башҡортостанды солғап алған язалау ғәскәрҙәренең терәк пунктына әйләнеүенән ҡурҡып, шундай ҡарарға килергә мәжбүр була [4].

Заводты яндырыу башҡорт «яуыздарының» юлбаҫарлығы булып күренмәүен шул факт та раҫлай: Эҫем заводында йәшәүселәр 1773 йыл аҙағында уларға килгән баш күтәреүселәрҙең беренсе башҡорт отрядын дуҫтарса ҡаршы ала [5]. Улар 1774 йылдың яҙында Салауат отрядына ҡапҡаларҙы аса, отряд бынан 6 майҙа Михельсон корпусына ҡаршы сыға [6]. Артабанғы ваҡиғалар күрһәтеүенсә, Эҫем, Усть-Ҡатау, Ҡатау-Иван заводтары Михельсонға уның ғәскәрҙәрен һуғыш кәрәк-ярағы менән тәьмин итеү базаһы һәм лагерь булып хеҙмәт итә, бында ул һуғыштарҙан йонсоп һәм күп көндәр буйы уңышһыҙ рәүештә баш күтәреүселәр отряды артынан ҡыуып йөрөгәндән һуң көс тупларға туҡтала. Михель-

[1] Крестьянская война..., 302-се бит. Пугачевҡа һылтау Крәҫтиәндәр һуғышының 1775 йылдың 10 ғинуарында язалап үлтерелгән башлығына зарар итә алмаған инде.

[2] Шунда уҡ, 318, 329-сы биттәр.

[3] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 54-се бит.

[4] Шунда уҡ, 54—56-сы биттәр.

[5] Һатҡы заводы канцелярияһының 1773 йылдың 30 ноябрендә Исет провинция канцелярияһына рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 3, л. 18, 20; Златоуст заводы приказчигы Ф. Әхмәтовтың 1773 йылдың 2 декабрендә крепостарҙың Троицк дистанцияһы коменданты А. А. Фейерварға рапорты. «Крестьянская война...» китабында, 61—62-се биттәр.

[6] Михельсондың 1774 йылдың 8 майында генерал Щербатовҡа рапорты. — Шунда уҡ, 139-сы бит.

сон ҡайһы саҡта үҙенең кәмегән корпусын завод крәҫтиәндәре менән тулыландыра, уларҙы баш күтәреүселәр отрядының ҡайҙа тороуы һәм һаны тураһында хәбәр итеп торорға мәжбүр итә [1]. Мәҫәлән, Михельсон 6 майҙан 8 майға тиклем Эҫем заводын үҙенә көс туплау пункты итеп файҙалана. Ул бында артиллерияның килеүен көтә, Салауат отряды менән ике тапҡыр һуғышҡандан һуң да ошонда ҡайта. 23 майҙа Салауат отряды заводты яндыра [2], шуның менән Михельсонды Өфөгә барыу юлындағы уңайлы базанан мәхрүм итә.

Эҫем крәҫтиәндәренең ҡайһы бер өлөшөнөң үҙ заводтарын ташлап китеүҙән баш тартыуы (башҡа заводтарҙа ла шундай уҡ хәл була) заводтағы эш улар өсөн берҙән-бер йәшәү сығанағы булыуы менән аңлатыла һәм улар урынды юғалтыуҙан ҡурҡа. Шуға күрә Эҫем заводында «ҡаршы тороусыларҙы» язалау милли дошманлыҡтың күренеше булмай. Башҡорттар үҙҙәренең еренде төҙөлгән заводты ғына юҡ итергә ынтыла. Заводта йәшәүселәрҙең төп масаһын Салауат Пугачев приказының ғәҙеллегенә ышандыра ала, һәм улар яҡындағы ауылға оҙатыла. Үлтерелгәндәрҙең һаны ла төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә килтерелә. Салауат үҙе кем һәм нисә кеше үлтерелеүен белмәйем, ти. Заводты емереүҙә ҡатнашҡан отрядтағы баш күтәреүселәрҙән крәҫтиән Раҡай Ғәлиев менән мулла Яҡуп Теләүембәтов Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғанда, үлтерелгәндәр алтау булды, тип күрһәтә. Ә яндырылған Эҫем заводынан Өфөгә ҡасып килгән крәҫтиән Плотников ҡурҡышынан «унда алтмышлап кешене үлтергәнсе туҡманылар» [3] тип белдерә. Салауатты «яуыз үлтереүсе һәм тиран» тип ғәйепләүсе судьяларға Плотниковтың ошағы файҙалыраҡ була. Өфө провинция канцелярияһының суд ҡарарында һәм губернаторҙың хөкөм ҡарарында үлтерелгәндәр һаны алтмыш тип әйтелгән [4].

Салауаттың күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдарҙы анализлауға ярҙамсы һәм төҙәтеүсе сығанаҡтарҙы ылыҡтырғанда, ундағы информацияның дөрөҫлөгө һәм тулылығы яғынан был сығанаҡтарҙың бер төрлө булмауын иҫәпкә алырға кәрәк. Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын баш күтәреүселәрҙән сыҡҡан документтар аныҡыраҡ сағылдыра. Хөкүмәт лагеры документтарында восстание ваҡиғаларын тенденциоз баһалау менән бергә айырым факттар боҙоп бирелә. Ошондай сығанаҡтарҙы файҙаланғанға тиклем,

---

[1] Михельсондың 1774 йылдың 5, 8, 13, 22, 27 майҙарҙағы, 1, 3 июндәрҙәге рапорттары. — Шунда уҡ, 137—141, 144—146, 153—155, 158—160, 168—169, 171—173-сө биттәр.

[2] Эҫем заводы крәҫтиәне Р. Н. Плотниковтың 1774 йылдың 28 майында Өфө провинция канцелярияһына белдереүе. — ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 565; «Крестьянская война...» китабында, 314—315-се биттәр; приказчик И. Хлебниковтың заводчик Я. Б. Твердышевҡа 1774 йылдың 5 июненән алда яҙылған хаты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 8, л. 113; Твердышевтың 5 июндә Рейнсдорпҡа донесениеһы. — Шунда уҡ, л. 111—112. Өфө дини идараһының 1774 йылдың 10 июнендә Вятка дини консисторийына белдереүе. — Шунда уҡ, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 50.

[3] Крестьянская война..., 311—312, 314—315, 312-се биттәр.

[4] Шунда уҡ, 331-се бит; ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 71—72.

төрлө документтарҙа бер үк ваҡиғаның нисек һүрәтләнеүен сағыштырып ҡарау юлы менән уларҙа белдерелгән бөтә мәғлүмәттәр ентекләп тикшерелергә һәм баһаланырға тейеш.

Билдәләп үтелеүенсә, әсиргә алынған пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәре протоколдарында уларҙың ниндәй шарттарҙа төҙөлөүенең специфик үҙенсәлектәре сағылған. Мәҫәлән, старшина Собханғол Килтәков, һорау алғанда, халыҡ хәрәкәтенә үҙен 1774 йылдың ғинуар башында отряды менән уға килгән Салауат ылыҡтырҙы, тип күрһәтә. Ысынында иһә Собханғол баш күтәреүселәр сафына байтаҡ иртәрәк инә. Үҙенең Төбәләҫ волосының 25 башҡорто менән ул 1773 йылдың декабрь урталарында уҡ Пугачев атаманы И. С. Кузнецов отрядына ҡушыла. 22 декабрҙә был отряд Һатҡы заводына килә, бында уны «бөтә завод крәҫтиәндәре һәм эш кешеләре тотҡарлыҡһыҙ ҡаршы ала һәм ҡабул итә»[1]. Собханғол завод контораһынан 10 мең һум аҡса конфискациялауҙа, 12 пушка, 250 мылтыҡ, 5 бот самаһы дары баҫып алыуҙа һәм быларҙың бөтәһен дә Ырымбур эргәһендә торған баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәренә оҙатыуҙа ҡатнаша, заводта яңы власть ойоштороуға шаһит була. Аҙаҡ, бәлки, И. С. Кузнецов заданиеһы буйынсалыр, баш күтәреүселәрҙе мобилизациялау өсөн, үҙенең волосына кире ҡайта һәм, унда Салауат Юлаев күренеү менән, һис икеләнеүһеҙ уға ҡушыла һәм уның тоғро ярҙамсыһына әйләнә.

Властарҙың һәм хөкүмәт лагеры учреждениеларының үҙ-ара яҙышыу ҡағыҙҙары ентекле һәм дөрөҫ информация менән бер рәттән йыш ҡына күрәләтә хата мәғлүмәттәр ҙә бирә. Хәҡиҡәткә хилафлыҡ итеү йыш ҡына документ авторҙарының үҙҙәре яҙыла торған факттарҙың шаһиты булмауынан, ә улар тураһында кешенән, яҙа-йоҙа ишетеп белгән хәбәрҙәр нигеҙендә килеп сыға. Мәҫәлән, Екатерина II Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналинды «Салаваткалар»[2] тип атай. Н. Я. Аршеневский Салауатты башҡорт старшинаһы тип яҙа[3]. Себерҙән ҡайтыусы курьер генерал-аншеф Панин канцелярияһына Юлай Аҙналиндың үлеүе тураһында хәбәр килтерә[4], ә ул шунан һуң да әле сирек быуат буйы йәшәй һ. б. ш. Башҡа хаталар, дөрөҫөрәге, күрәләтә ялған мәғлүмәттәр хәлде ысын булғандағынан яҡшыраҡ итеп һүрәтләргә йәки үҙҙәренең уңыштарын ҡабартып күрһәтергә ынтылған карателдәр ҡәләменән тыуа. Михельсон рапорттарында ҡайһы бер ваҡиғаларҙы боҙоп күрһәтеү тап ана шундай характерҙа. Ул түрәләренә үҙенең отрядының баш күтәреүселәргә ҡаршы бөтә һуғыштарҙа ла еңеүе тураһында хәбәр итә. Мәҫәлән, Михельсон, 31 майҙа Салауат командалыҡ иткән 800 кешелек отрядты тулыһынса ҡыйраттым, тип 1 июндә баш командующий алдында маҡтана[5]. Ләкин, башҡа до-

---

[1] Һатҡы заводы приказчигы С. Ф. Моисеевтың 1774 йылдың 28 ғинуарында Исет воеводаһы А. П. Веревкинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 10, л. 404; «Пугачевщина» тигән китапта, 2-се том, 435—436-сы биттәр.

[2] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 200-сө бит.

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 13, л. 274; д. 507, ч. 3, л. 50.

[4] Шунда уҡ, ф. 1274, д. 200, л. 436 об. — 437.

[5] Крестьянская война..., 168—169-сы биттәр.

кументтарҙан һәм шул иҫәптән Пугачевтың күрһәтеүҙәренән билдәле булғанынса, Салауат 2 июндә Пугачевҡа өс мең баш күтәреүсене алып килә[1]. Бында Михельсон корпусының уңыштарын да, Салауат отрядтарындағы кеше һаны тураһында уның белдереүен дә тулыһынса шик аҫтына алырға мөмкин. Ул 5 июндә Әй йылғаһы киҫеүендә Пугачевтың Төп ғәскәрен тар-мар итеүе тураһында 8 июндә Щербатовҡа белдерә[2]. Ә бынан ике көн элек Салауат баш күтәреүселәрҙең атамандарына ебәргән хатта, Михельсон гусарҙарына ҡаршы алыштар тураһында хәбәр итеп, һуғыштың һөҙөмтәһен былай баһалай: «Уларҙың күптәре үлтерелде, ә аҙ һандағыһы ҡасты»[3]. Мәскәүҙә һорау алғанда, Пугачев, ошо һуғыш тураһында, унда ике яҡтың береһе лә уңышҡа өлгәшә алманы, тип әйтә. Әй йылғаһы янындағы һуғышты Пугачев шулай һүрәтләй: «Ул Михельсон менән осрашты, уның менән шундай уҡ бәрелеш булды, ләкин унда, Михельсон да уны ҡыйратманы, ул да, Емелька ла, Михельсонға зыян килтермәне, һәм айырылыштылар»[4].

Михельсон баш күтәреүселәр өҫтөнән үҙенең еңеүҙәре менән маҡтана, башҡа хәрби начальниктар үҙ түрәләренә бүтән урындарҙағы уңыштары тураһында хәбәр итә. Генерал Ф. Ю. Фреймандың һаҡланып ҡалмаған рапорты тексын һөйләп биреп, А. В. Суворов П. И. Панинға, яуапҡа тарттырылыусы Салауаттың күрһәтмәһе буйынса, йәнәһе, «уның енәйәттәштәрен тоторға ла партиялар ебәрелде»[5] тип яҙа. Быны тик Фрейман һәм уның офицерҙары тарафынан үткәрелгән «оҫта» һорау алыу һөҙөмтәһе итеп күрһәтеп, Салауат Юлаевҡа яла яғыу тип кенә ҡарарға мөмкин.

Юғарыла килтерелгән миҫалдар Салауат Юлаевтың суд-тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәрен анализлауҙа конкрет сығанаҡтарҙы өйрәнеүгә нигеҙләнгән алымдарҙы ҡалҡыу итеп күрһәтә, тарихи ысынбарлыҡтың уларҙа ни тиклем объектив сағылыуын билдәләргә мөмкинлек бирә, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын һәм был ваҡиғаларҙа Салауат Юлаевтың ҡатнашлығын яҡтыртыу өсөн был документтарҙың әһәмиәтен асып бирә.

* * *

Салауат Юлаев өҫтөнән суд-тикшереү процесы документтарының комплексын (шартлы рәүештә улар тикшереү эше тип аталған) фәнни тәнҡитләүҙең беренсе этабы был документтарҙың ниндәй шарттарҙа яҙылыу үҙенсәлектәрен асыҡларға мөмкинлек бирҙе. Архивтарҙа эҙләнеп һәм 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тарихы буйынса документаль публикацияларҙы өйрәнеп,

---

1 Допрос Е. Пугачева в Москве в 1774—1775 гг., 211-се бит.
2 Крестьянская война..., 184-се бит.
3 Документы ставки Е. И. Пугачева..., 256-сы бит.
4 Допрос Е. Пугачева в Москве в 1774—1775 гг., 21-се бит.
5 ЦГАДА, ф. 6, д. 490, ч. 2, л. 226.

суд-тикшереү процесы документтарының һаҡланыу урынын да билдәләй алдыҡ. Хәҙерге ваҡытта 80-дән ашыу документ Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивында, СССР Үҙәк дәүләт хәрби-тарих архивында, Ырымбур өлкәһе дәүләт архивында һәм Башҡорт АССР-ы Үҙәк дәүләт архивында һаҡлана. Бер төркөм документтан йәки берҙән-бер дананан торған архив эштәрен яҙыу сығанаҡтарҙың артабан һаҡланыу тарихына ҡағылған айырым моменттарҙы тасуирлау менән бергә алып барылды. Был документтарҙы эҙләү методикаһын булдырыу өсөн шулай эшләнде. Тема буйынса табылған төп сығанаҡтар төркөмө Ырымбур губерна канцелярияһының Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаев өҫтөнән суд-тикшереү процесы документтарынан торған һәм 1775 йылда юғалған эшен реконструкциялау өсөн нигеҙ булып торҙо. «Ырымбур фәнни архив комиссияһы хеҙмәттәре»ндә телгә алынған мәғлүмәттәр буйынса тикшеренеүселәргә 1914 йылдан бирле билдәле булған ошо юғалған эш менән ғалимдарҙың ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндереү өсөн, уны мотлаҡ айҡҡа баҫтырырға кәрәк булды.

Тикшереү эше документтарының бөтә комплексын өйрәнеү документтарҙың һәр төркөмөнөң эштәге башҡа сығанаҡтар араһында тотҡан әһәмиәтен һәм урынын билдәләргә мөмкинлек бирҙе. Шул уҡ ваҡытта документтарҙың социаль функцияларын асып биреүгә айырыуса иғтибар бүленде; бындай анализ документтарҙы төҙөгән саҡта уларға ниндәй роль һәм әһәмиәт биреләүен, уларҙың «прагматик һәм айырым маҡсатлы төп функцияһы ошо ысынбарлыҡ тураһында ниндәй дәрәжәлә объектив мәғлүмәттәр талап итеүен һәм шундай мәғлүмәттәрҙе алыу мөмкинлектәрен асыҡлау»[1] маҡсатын күҙҙә тота. Крәҫтиәндәр һуғышы тарихының бик мөһим сығанаҡтарын — баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре протоколдарын — анализлау һөҙөмтәһендә, уларҙың йөкмәткеләренә йоғонто яһаған факторҙар билдәләнде: улар — документтарҙы төҙөү шарттары, күрһәтеүҙәрҙе яҙғанда тикшереүселәрҙең тенденциозлығы, үҙҙәрен яҡлау өсөн ниндәй тактика һайлап алыу һәм башҡа шарттарға ҡарап, ғәйепләнеүселәрҙең судта үҙ-үҙҙәрен тотоуы. Суд ҡарарҙарында һәм уларға әҙерләнгән материалдарҙа баш күтәреүселәрҙең һәм уларҙың башлыҡтарының эшмәкәрлеге факттарын яҙғанда, асыҡтан-асыҡ синфи дошманлыҡ, тенденциозлыҡ хас.

Салауат Юлаевтың суд-тикшереү эше документтарын тарихи сығанаҡтар булараҡ өйрәнеүҙең мотлаҡ һәм төп шарттарының береһе — уларҙың күрһәтеүҙәрен башҡа урындан алынған сығанаҡтар комплексының дәлилдәре менән тәнҡит күҙлегенән ҡарап сағыштырыу методын ҡулланыу тора. Тик шундай метод менән генә был күрһәтеүҙәрҙең дөрөҫлөгө дәрәжәһен билдәләргә, реаль тарихи ваҡиғаларға ярашлылығын асыҡларға мөмкин. Шуға күрә

---

[1] *Ковальченко И. Д.* Исторический источник в свете учения об информации (к постановке вопроса). — «Актуальные проблемы источниковедения истории СССР, специальных исторических дисциплин и их преподавание в вузах» китабында. Тезисы док. III Всесоюзной конф. Новороссийск; 1979, М., 1979, 42-се бит.

китапта тикшереү эше документтарының төп төркөмө — Салауат Юлаевтың күрһәтеүҙәре теркәлгән протоколдарҙы төҙәтеүсе сығанаҡтарҙың төп төркөмө махсус рәүештә ҡаралды. Төҙәтеүсе сығанаҡтар иҫәбенә: баш күтәреүселәр властарының һәм учреждениеларының документтары; восстание юлбашсыларының һәм ябай баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре протоколдары; хөкүмәт лагеры документтары (хәрби начальниктарҙың донесениелары, граждандар властарының яҙышыу ҡағыҙҙары); мемуарҙар. Документтарҙың тәүге өс төркөмө бер-береһенән, шулай уҡ Салауаттың тикшереү ваҡытында биргән күрһәтеүҙәре информацияһынан сағыштырмаса бойондороҡһоҙ, сөнки бер үк факттар уларҙың авторҙары тарафынан йыш ҡына төрлө юлдар менән табыла, үҙҙәренсә ҡабул ителә һәм һөйләп бирелә. Мемуарҙарҙа хәрби-поход канцеляриялары документтары файҙаланылған, ләкин уларҙан алынған информация мемуаристарҙың аңлау кеүәһенә һәм ҡараштарына бәйле рәүештә үҙгәреүе лә мөмкин. Восстание көндәрендә баш күтәреүселәрҙең үҙҙәре яҙған документтар әйтеп үтелгән документтар араһында иң ҡиммәтле сығанаҡтар булып тора.

Икенсе главаның йомғаҡлау өлөшөндә Салауат Юлаевтың күрһәтеүҙәрен һәм төҙәтеүсе сығанаҡтарҙың өс төркөмөнә ингән документтарҙа параллель бирелгән хәбәрҙәрҙе бер-береһенә сағыштырып тикшереүгә бер нисә миҫал килтерелде. Сағыштырып өйрәнеү Салауаттың күрһәтеүҙәре протоколдарында тарихи ваҡиғаларҙың дөрөҫ яҡтыртылыуын һәм ни дәрәжәлә тулы булыуын билдәләргә, документтарҙы Крәҫтиәндәр һуғышы тарихы буйынса тарихи сығанаҡ итеп баһаларға мөмкинлек бирә. Өйрәнелә торған документтарҙы анализлауҙың ошондай методикаһы китаптың өсөнсө главаһындағы материалдарҙы яҙғанда ла нигеҙ итеп алынды.

КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫ ВАҠИҒАЛАРЫН ҺӘМ САЛАУАТ ЮЛАЕВТЫҢ БИОГРАФИЯҺЫН УНЫҢ ТИКШЕРЕҮ ЭШЕ МАТЕРИАЛДАРЫ ҺӘМ БАШҠА ДОКУМЕНТАЛЬ СЫҒАНАҠТАР МЕНӘН ЯҠТЫРТЫУ

§ 1. КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫНЫҢ БЕРЕНСЕ ЭТАБЫ (1773 йылдың сентябре — 1774 йылдың марты)

Сенаттың Йәшерен экспедицияһында һорау алғанда, Салауат Юлаев үҙенең күрһәтеүҙәрен баш күтәреүселәр сафына нисек килеп эләгеүен ентекләп һөйләүҙән башлай: «Үткән 1773 йылда көҙгө ваҡытта Өфө провинция канцелярияһынан уларға, башҡорт ауылдарына, баҫма манифест ебәрелә, ул манифеста бындағы башҡорт старшиналары, шул саҡта Ырымбурға һөжүм яһаған һәм ундағы башҡа ауылдарҙы талаған яуыз Пугачевҡа һәм уның сиреүенә ҡаршы көрәшеүсе тоғро ғәскәрҙәргә ярҙамға үҙҙәренән башҡорттарҙы ебәрһен, тип әйтелә. Шуның өсөн атаһы, Юлай, уға, Салауатҡа, башҡорттарҙан 80 кешелек команда, тағы ла уның атаһының Польшала күрһәткән хеҙмәте билдәһен биреп, уны, Салауатты, тоғро Россия ғәскәрҙәренә ебәрә һәм уға Стәрле пристанендәге крепость командирына, ассесор Павел Богдановка [1], барырға ҡушыла».

1773 йылдың көҙө Россияла Крәҫтиәндәр һуғышы башланып китеү менән билдәләнә. 1773 йылдың сентябрендә Яйыҡ казактарын восстаниеға күтәреп, Е. И. Пугачев Яйыҡ йылғаһы буйындағы күп кенә крепостарҙы ала, ә октябрь башында Ырымбурға яҡын килеп, уны ҡамай башлай. Урындағы властар Пугачев сығышының көсөн һәм әһәмиәтен шунда уҡ баһалай алмай, уны Яйыҡ казактарының яңы «болаһы» тип ҡабул итә, унан восстание күтәреүселәрҙе башҡорттар яҡлар, тип уйламай. Киреһенсә, Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорп баш күтәреүселәрҙе гарнизон ғәскәрҙәре һәм башҡорт командалары ярҙамында ҡыйратырға ниәтләнә. Сентябрҙә ул, бының өсөн 500 башҡорттан торған отряд та етер, тип иҫәпләй. Шулай уҡ октябрҙә ул Өфө һәм Исет провинциялары башҡорттарынан һәм мишәрҙәренән 5 меңлек отряд төҙөү тураһында указдар ебәрә [2]. Губернатор ғына түгел, әбей батша үҙе лә восстаниены тар-мар итеүҙә башҡорттарҙың ярҙамына өмөтләнә, был эштә уларҙан «тырышлыҡ» көтә һәм бының өсөн уларға «монарх тарафынан айырым илтифат күрһәтелеүен» вәғәҙә итә [3].

---

[1] Крестьянская война..., 300-сө бит.

[2] Шунда уҡ, 25, 30—36-сы биттәр.

[3] Указ Екатерины II В. А. Кару от 14 октября 1773 г. — Русский вестник, 1869, 81-се том, 387-се бит.

Ул Ырымбурға ебәргән хөкүмәт ғәскәрҙәренең башлығы генерал-майор В. А. Кар һуғыш операцияларының уңышын уларҙа башҡорт атлы ғәскәренең мотлаҡ ҡатнашыуы менән бәйләй. Ноябрь башында Бөгөлмәгә килеү менән Хәрби коллегияға: «Артиллерия һәм Бөгөлсән пристане эргәһендә йыйылған башҡорттарҙы алғас та, аҙ ғына ла тотҡарланып тормай, пугачевсыларҙы ҡырып бөтөрөүгә бөтә сараларҙы ҡулланасаҡмын», — тип доклад яһай [1].

Сентябрь аҙағынан башлап губерна һәм провинция канцелярияларының йомошсолары, «тоғролоҡ бурыстарын һәм актын» баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәшкә командаларҙы тиҙерәк әҙерләү менән иҫбат итергә саҡырып, Башҡортостан буйлап йөрөй башлай. 4 октябрҙә Рейнсдорп «Ырымбурға килергә ашыҡһындар» өсөн башҡорт старшиналарына һәм йөҙ башлыҡтарына «өсөнсөгә» мөрәжәғәт итә [2]. Губернаторҙың күп меңле башҡорт-мишәр отряды төҙөү тураһында 1773 йылдың 9 октябрендәге указына ярашлы рәүештә Өфө провинция канцелярияһы тарафынан бөтә старшиналарға указдар ебәрелә. Уларҙа былай тиелә: старшиналар, указдарҙы алыу менән, «шул уҡ сәғәттә һәм мөмкин тиклем тиҙерәк, яҡшы кешеләрҙе һайлап тормай һәм ниндәй ҡоралдары бар, шуның менән командалар йыйып, йорттарынан сыҡһындар һәм бөтә был командалар Ырымбур трактына юл тотһондар...»[3]. Салауат Юлаев, башҡорттарҙы мобилизациялау тураһында һөйләгәндә, бөтәһенән элек ошо указды күҙ алдында тотҡан булһа кәрәк. Юлай Аҙналин менән Салауаттың күрһәтеүҙәрендә, «баҫма манифест» алдыҡ, тип яҙылған. Бының булыуы мөмкинме һуң? Екатерина II-нең баш күтәреүселәрҙе «законлы буйһоноуға ҡайтырға һәм бөтә беҙҙең тоғро подданныйҙар менән бергә... сыуалышты... бөтөрөргә... тырышырға» тип саҡырған 200 данала баҫылған беренсе манифесына 14 октябрь датаһы ҡуйылған [4]. Ул хөкүмәт ғәскәрҙәре баш командующийы В. А. Кар тарафынан Кичуевск фельдшанцына килтерелә, бында тираждың бер өлөшө, губерналарға ебәреү өсөн, Ҡазан губернаторы Брантҡа ҡалдырыла. Бер нисә дананы Кар пугачевсыларға еткереү өсөн алып ҡала [5].

Манифестың 20 данаһы 2 ноябрҙә Өфөлә алына һәм «бөтә Дүрт юлда ултырған башҡа диндәге башҡорт ауылдарына һәм башҡа урындарға.... сапҡын аша ебәрелә» [6]. Тимәк, «баҫма манифесты» Башҡортостанда 2 ноябрҙән дә иртә күрә лә, ишетә лә алмайҙар. Был ваҡытҡа инде властарҙың талабы буйынса төҙөлгән башҡорт

[1] *Анучин Д.* Первые успехи Пугачева и экспедиция Кара. — Военный сборник, 1869, № 6, 179-сы бит.

[2] Ырымбур губерна канцелярияһы журналының экстракты (1773 йылдың сентябре—ноябре). — *Дмитриев-Мамонов А. И.* «Пугачевский бунт в Зауралье и Сибири» китабына ҡушымта. СПб., 1907, 177, 182-се биттәр.

[3] Крестьянская война..., 37, 39-сы биттәр; ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 2, л. 126.

[4] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 4.

[5] Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 482-се бит.

[6] ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 2, л. 310; ЛОИИ архивы, ф. 113, оп. 1, д. 58/2, л. 95; Өфө провинция канцелярияһының 1773 йылдың 2 ноябрендә Өфө казактары атаманы П. И. Бурцевҡа приказы.

командалары Стәрлетамаҡ пристане янында йыйылған була. Салауат манифесты Юлай ауылында түгел, фәҡәт Стәрлетамаҡ янында 3 ноябрҙән 9 ноябргә тиклем генә күреүе мөмкин. Екатерина II-нең манифесы менән үҙенең танышыу ваҡытын Салауат йә онотҡан йәки тәржемәсе И. Гульчихин хата ебәргәндер, тип кенә аңлатырға мөмкин.

Шайтан-Көҙәй башҡорттары отряды, Себер юлының башҡа волостарындағы кеүек, провинция канцелярияһынан октябрь урталарында алынған указ буйынса төҙөлә. Салауаттың раҫлауы буйынса волоста 80 кеше йыйыла, ә Юлай 95 башҡорт тураһында әйтә [1]. Икенсе һан, беҙҙең ҡарашҡа, дөрөҫөрәктер, сөнки әсиргә алынған башҡорттар, Өфө воеводаһы һәр йорттан берәр атлы бүлергә ҡушты, тип һөйләй [2], ә Юлай командаһы аҫтында 115 йорт иҫәпләнә [3]. Юлай отряд башына үҙенең оло улы Салауатты ҡуя.

Ләкин урындағы властарҙың указдары Яйыҡтағы ваҡиғалар тураһында мәғлүмәттәр биреүсе берҙән-бер сығанаҡ булмай. Юлай Аҙналин һорау алғанда быны йәшермәй. Отрядтарҙы ебәргәнсе үк әле Пугачев тураһында «ул, Юлай, һәм бындағы бөтә башҡорттар ишетте» [4], ти. Пугачевтың эмиссарҙары киң рәүештә яҙма һәм телдән агитация үткәреү һөҙөмтәһендә, Башҡортостан халҡы восстаниеның лозунгылары тураһында ла, баш күтәреүселәр отрядтарының тәүге уңыштары тураһында ла йәһәт белеп ала.

Октябрь баштарында Пугачевтың башҡорттарға аталып, төрки телендә яҙылған именной указдары киң тарала. Восстание башлығы һәм уның көрәштәштәре, батша администрацияһының политикаһынан башҡорттарҙың ризаһыҙлығын белеп, уларҙың ярҙамына иҫәп тота, башҡорттар, ҡулдарына ҡорал алып, уға ҡаршы күп тапҡырҙар күтәрелә. Пугачев указдарының йөкмәткеһе башҡорттарҙың талаптарын һәм өмөттәрен восстание юлбашсыларының яҡшы тойомлауын күрһәтә. 1 октябрҙә Башҡортостанға Пугачевтың ике указы ебәрелә [5]. Был указдар яңы «батша Петр III»-гә тоғро хеҙмәт иткән өсөн башҡорттарға ирек, ер, һыу, урман, балыҡ тотоу, торлаҡтар, сабынлыҡтар һәм сәсеүлектәр, эш хаҡы, тоҙ, ҡурғаш һәм дары, выждан азатлығы бүләк итергә вәғәҙә бирә. Улар «төрмәлә ултырғандарҙы һәм төрлө хужаларҙа ирекһеҙ йәшәүсе кешеләрҙе» азат итергә саҡыра. Был мөрәжәғәттәрҙә, завод хужалары һәм помещиктар тарафынан ерҙәре таланған, урындағы властарҙың ҡыҫыуынан, дәүләткә күп төрлө һалымдарҙан, уларҙың иң ауыры — ғәскәри һаҡ хеҙмәтенән яфа сиккән башҡорттарҙың үҙҙәренә генә хас ихтыяждары иҫәпкә алы-

---

[1] Крестьянская война..., 300, 303-сө биттәр.

[2] Уса юлы Уран волосы башҡорто Мәһәҙи Мәҙийәровтың Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 211.

[3] Крестьянская война..., 285-се бит.

[4] Шунда уҡ, 303-сө бит.

[5] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 25—28-се биттәр; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева. 2-се том, 135—139-сы биттәр.

па. Уларға тоҙ бүләк итеү башҡорттарҙың мохтажлыҡтарына иғтибарҙы күрһәтә. 1754 йылда уҡ әле башҡорттарҙан һәм мишәрҙәрҙән яһаҡ түләтеү билдәләнгән хаҡ буйынса уларға тоҙҙо көсләп һатыу менән алмаштырыла, халыҡ өсөн был яһаҡ түләүгә ҡарағанда ла ауырыраҡ йөкләмә була. Башҡортостандағы рус булмаған халыҡтарҙың социаль түбән ҡатламдарының үҙ байҙарында «тотҡонлоҡта» йәшәүселәрҙең бөтәһен дә азат итергә тигән талаптары указдарҙа сағылыу таба [1].

Башҡортостандың бөтә волостары буйынса октябрҙә баш күтәреүселәрҙең баш полковнигы Ҡинйә Арыҫлановтың указдары ла тарала [2]. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был документтарҙың күбеһе һаҡланмаған, ләкин Ҡинйәнең халыҡ массаларына мөрәжәғәтенең тәьҫир көсө тураһында уларҙы генерал Ҡарҙың нисек баһалауына ҡарап та фекер йөрөтөргә мөмкин. 1773 йылдың 31 октябрендә Сенатҡа донесениеһында ул башҡорт отрядтарының баш күтәреүселәр яғына сығыуынан үҙенең ҡурҡыуын белдерә: сөнки «Ҡинйә Арыҫланов аша бөтә Башҡортостанға таралған ҡотҡо һалыусы яуыз хаттарҙан» башҡорттар «бик ныҡ икеләнә һәм ошо ваҡытҡа тиклем регуляр командаларға килеүҙе һуҙа»[3].

Пугачевтың саҡырыуҙарына яуап итеп, баш күтәреүселәргә береңсе булып Яйыҡ йылғаһына яҡын волостарҙың башҡорттары ҡушыла, унан һуң язалау операциялары үткәреү өсөн төҙөлгән отрядтар улар яғына сыға башлай. 7 октябрҙә үк Рейнсдорп Сенатҡа: Пугачев «үҙенең ҡағыҙҙарын таратып, бөтәһен дә үҙ яғына ауҙара һәм ант иттереп нығыта», губернатор «башҡорттарға ышанған булһа ла, ләкин ахыр сиктә, шунан да мәхрүм ҡалған», сөнки Пугачев бында ярҙамға килгән 400-ҙө лә үҙенә алған... Бер һүҙ менән әйткәндә, бында, губернала, йәшәгән бөтә халыҡ ошо хәлдәр арҡаһында ҙур вәсүәсәгә төштө»[4], тип хәбәр итә.

1773 йылдың октябрендә баш күтәреүселәр яғына ҙур-ҙур башҡорт отрядтарының сығыуына ҡарамаҫтан, башҡорттарҙың, мишәрҙәрҙең, татарҙарҙың һәм Башҡортостандағы башҡа халыҡтарҙың төп массаһы, «ҙур вәсүәсәгә төшөп», восстаниены асыҡтан-асыҡ яҡларға баҙнат итмәй. Был губернаторға ҡамауҙа ҡалған Ырымбурға ярҙамға 5000 башҡортто ебәреү тураһындағы үҙенең бойороғоноң үтәләсәгенә ышаныс бирә.

---

[1] *Забиров В.* Новые источники об участии националов в Пугачевщине. — «Проблемы источниковедения» китабында. М.; Л., 1933, 1-се йыйынтыҡ, 37-се бит; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 2-се том, 140—142-се биттәр.

[2] Ҡинйә Арыҫланов — Нуғай юлы Бошмаҫ Ҡыпсаҡ волосының башҡорт старшинаһы. Баш күтәреүселәргә 1773 йылдың октябрь башында ҡушыла, баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәренең башҡорт, мишәр һәм татар отрядтарының баш полковнигы һәм командиры итеп тәғәйенләнә, Пугачевтың Урал һәм Волга буйындағы рус булмаған халыҡтар менән мөнәсәбәттәрендә аралашсы кешеһе була. (Ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *Усманов А. Н.* Кинзя Арсланов — выдающийся сподвижник Пугачева. — «Исторические записки» китабында, М., 1962, 71-се том, 113—133-сө биттәр.)

[3] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 13 об.

[4] Шунда уҡ, л. 9—11.

Октябрҙең икенсе яртыһында командаларҙың йыйылыу урыны булған Стәрлетамаҡ пристаненә башҡорт-мишәр командалары килә башлай. Бында уларҙы язалау отрядтарын комплектлау өсөн махсус ебәрелгән Өфө воеводаһы ярҙамсыһы П. Н. Богданов, капитан И. Г. Ураков, тағы ла бер нисә офицер һәм Ҡазан губернаторы Я. Л. Брант тарафынан «уларҙы, башҡорттарҙы (бер диндән булғас), тоғролоҡта яҡшыраҡ нығытыу һәм, боҙоҡ уйҙа була алмаһындар тип, яуызды тиҙерәк эҙләргә килешеү өсөн ебәрелгән майор О. А. Тәвкилев ҡаршы ала[1]. Ләкин губернатор приказын башҡорттар асыҡтан-асыҡ һанға һуҡмай. Өфө коменданты С. С. Мясоедов 21 октябрҙә Юғарғы Йайыҡ крепосы коменданты Е. А. Ступишинға, башҡорттар «өйҙәренән аҡрын ҡуҙғала һәм билдәләнгән урындарға бик яй йыйыла», һуғышырға йыйынмай, «ә хәрби командаларҙың ҡорал һәм артиллерия менән баш күтәреүселәрҙе нисек эҙәрләйәсәктәрен генә» көтә, тип асыу менән белдерә»[2]. 28 октябргә, П. Н. Богдановтың әйтеүе буйынса, пристангә бөтә волостарҙың да командалары килә, шул иҫәптән «Себер юлындағы алыҫтағы командалар ҙа бында килә». Бөтәһе 2355 кеше йыйыла. Воевода А. Н. Борисов алдында отчет биреп, Богданов «ошонан да күберәк командаларҙың бында башҡа килере юҡ»[3], тип танырға мәжбүр була. Тимәк, Салауат Юлаев командаһы Стәрлетамаҡҡа 28 октябргә тиклем килә. Һорау алғанда, Салауат, 15 көн килдем, ти. Ул 12—13 октябрҙәрҙә сыҡҡан тип иҫәпләргә мөмкин. Үҙе күрһәткәнсә, 400 саҡрым араны үтергә киткән ваҡыт властарҙың приказын үтәргә унын бик ашыҡмауын күрһәтә.

Салауат Юлаевтың Мәскәүҙә һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы 1773 йылдың октябрь аҙағында һәм декабрь баштарында, йәғни Стәрлетамаҡ пристанендә һәм Бердала булған осорҙа, ул ҡатнашҡан ваҡиғаларҙы яҡтыртыусы берҙән-бер сығанаҡ булып тора. Дөрөҫ, Юлай Аҙналиндың Йәшерен экспедицияла һорау алғандағы һәм Әбдрәшит Ғәлиевтең Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәрен әйтергә мөмкин. Беренсеһе Салауаттың пугачевсылар тарафынан уларҙың «толпаһында» тотоп алыныуы һәм Бердала Пугачев эргәһендә булыуы тураһында ишеткән, ә икенсеһе Пугачев уны Башҡортостанға китеүсе Салауат командаһына тәғәйенләне, тип белдергән[4]. Стәрлетамаҡ отрядының баш күтәреүселәр яғына сығыуы тураһында, баш күтәреүселәрҙең Берда лагерындағы хәле тураһында, пугачевсыларҙың Ырымбур эргәһендәге һуғыштары тураһында мәғлүмәттәр булған башҡа бөтә документтарҙа Салауат Юлаев хаҡында бер генә тапҡыр ҙа иҫкә алынмай.

Стәрлетамаҡ пристанендә йыйылған отрядтың үҙҙәре яғына сығыуын пугачевсылар көслө агитация алып барыу өсөн файҙала-

---

[1] Крестьянская война..., 36—43-сө биттәр.
[2] ЦГАДА, ф. 1100, д. 3, л. 16.
[3] Шунда уҡ, л. 149.
[4] Крестьянская война..., 303, 312-се биттәр.

на. Пугачев үҙе һәм уның иң яҡын көрәштәштәре, беренсе сиратта старшина Ҡинйә Арыҫланов, яҡшы ҡоралланған һәм өйрәтелгән башҡорт атлыларын үҙ яҡтарына ылыҡтырыуға ҙур әһәмиәт бирә, сөнки был баш күтәреүселәр ғәскәрен көсәйтер һәм язалау отрядтарын уларға бик кәрәкле кавалериянан мәхрүм итер ине. Хөкүмәт властары менән пугачевсылар араһында отряд өсөн көсөргәнешле көрәш йәйелә. Генерал Ҡар Богданов менән Тәвкилевтән, «тоғро подданыйлыҡ вазифаларын тейешенсә үтәргә башҡорттарҙы дәртләндереү өсөн хеҙмәт һалыуҙы» талап итә [1]. Богданов өгөтләп тә, ҡурҡытып та, йыйылған отрядты Стәрлетамаҡ пристаненә яҡын хәрәкәт итеүсе баш күтәргән башҡорт төркөмдәренән «һаҡларға» тырышып ҡарай. Ҡыпсаҡ волостарынан баш күтәргән башҡорттарҙың Стәрлетамаҡҡа һөжүм итергә ниәтләүҙәре билдәле булғас, Стәрлетамаҡ отряды командованиеһы уға яҡын урындарҙан үҙенең бөтә подразделениеларын пристань янына туплай [2].

Баш күтәреүселәр ягынан Стәрлетамаҡ отрядына күп тапҡыр агитаторҙар ебәрелә, улар Пугачевтың указдарын һәм Ҡинйә Арыҫлановтың өндәмәләрен алып килә. 17 октябрҙә язалау отряды командирҙарының береһе старшина Әлибай Мырҙағоловҡа [3] Ҡинйә Арыҫланов хат менән мөрәжәғәт итә. Ул башҡорттарҙы, хоҡуҡһыҙлыҡҡа ҡаршы бөтәгеҙ ҙә көрәшкә күтәрелергә ваҡыт килеп етте, тип саҡыра һәм, яңы батша «Петр III» — Пугачев указдарындағы башҡорттарға бирелгән вәғәҙәләр тураһында иҫкә алып, «алланан теләгәнде алла бирҙе», тип раҫлай. Ҡинйә, 11 старшина баш күтәреүселәргә ҡушылды инде, тип белдерә, Әлибайҙы һәм башҡа старшиналарҙы бөтә отряды менән («ғәскәрҙе таратмайса») «Петр III» яғына сығырға саҡыра»[4]. Бер нисә көндән һуң Стәрлетамаҡҡа йыйылған командалар араһында Ҡинйә Арыҫлановтың 20 октябрҙәге яңы хаты таратыла. Унда, «Петр III»-гә командалары менән 23 старшина килде, тип белдерелә. Ҡинйә йәнә башҡорт һәм мишәрҙәрҙе баш күтәреүселәргә ҡушылырға өгөтләй, уларҙың һаны «көн һайын» үҫә [5], ти.

Пугачевсыларҙың саҡырыуҙарына яуап итеп, «яуыздар төркөмөнә» ҡасып сығыу башлана. Командование көн һайын яңы ҡасҡындар тураһында белә. Пушкалар һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары менән Бердаға йүнәлгән 300 крәҫтиәнгә ҡаршы сығыу тураһында

---

[1] Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 485-се бит.

[2] Ҡазан губерна канцелярияһының 1773 йылдың 27 октябрендәге документтары экстракты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1230, л. 137—138.

[3] Әлибай Мырҙағолов — Нуғай юлы Ҡыркүл-Меңле волосынан башҡорт старшинаһы. Башҡортостанда иң йоғонтоло старшиналарҙың береһе. 1773 йылдың ноябренән 1774 йылдың мартына тиклем Бердала була, унда атаман чинын ала. Татищев крепосы эргәһендә баш күтәреүселәр тар-мар ителгәс, Башҡортостанға ҡайта. Ҡөтөп тороу позицияһын ала, йә властарға килеп, тәүбәгә ҡайтыуын белдерә һәм язалау ғәскәрҙәре яғына күсә, йә иһә баш күтәреүселәр хәрәкәтендә яңынан ҡатнаша. — Крестьянская война..., 57, 119, 283-сө биттәр; — Вопросы истории, 1973, № 9, 110-сы бит.

[4] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 110-сы бит.

[5] Шунда уҡ, 110-сы бит.

секунд-майор Н. Головтың приказын үтәүҙән 1300 башҡорт һәм мишәрҙең асыҡтан-асыҡ баш тартыуы был мөрәжәғәттәрҙең ниндәй йоғонто яһауының сағыу миҫалы була ала. Осиновка ауылы янындағы (Воскресен заводына яҡында) был «боланың» инициаторҙары Юрматы старшиналары Көҫәпҡол Әҙәтов менән Сайран Сәитовтың командалары була, улар үҙҙәренең ҡылыҡтарын крәҫтиәндәрҙең ылауҙарында ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар булыуы менән аңлата [1]. Ә ике көндән һуң был старшиналарҙың командалары Стәрлетамаҡ отрядынан Пугачевҡа беренсе булып китә [2]. Тиҙҙән уларға Стәрлетамаҡтың башҡа командалары ла ҡушыла. Быға баш күтәреүселәрҙең Ырымбур эргәһендә уңышлы һуғыш хәрәкәттәре сәбәп була.

1773 йылдың 7—9 ноябрҙәрендә А. А. Овчинников һәм И. Н. Зарубин етәкселегендәге пугачевсылар Юзеево ауылы янында Яңы Мәскәү юлынан Ырымбурға табан йүнәлгән генерал Кар ғәскәрен еңә. Бынан алыҫ та түгел Сәрмәнәй ауылындағы башҡорт командаһы, Кар ғәскәрҙәренә ярҙам итергә өндәгән подпоручик М. Ураковты тыңламай, һуғыштар барған урындан 30 саҡрымға ситкә китә [3]. Стәрлетамаҡ отрядының капитан И. Г. Ураков һәм Әлибай Мырҙағолов етәкселегендәге икенсе өлөшө, үҙҙәренең командирҙарын ҡалдырып, 10 ноябрҙә Бикҡол ауылы янында үҙ ирке менән Овчинников һәм Зарубин отрядына ҡушыла. Бикҡол ауылы янында генерал Кар ғәскәрен нығытырға тейеш булған был отряд составында Салауат Юлаев та була, һорау алыу ваҡытында ул, был көндәрҙә бөтә нәмәлә Әлибай (Элвий — *тәржемәсе һүҙҙәренән яҙылған)* өлгөһөнә эйәрҙем, тип әйтә.

Документтар ул ваҡиғаларҙың шаһиттары ҡалдырған күп кенә факттарҙы һаҡлаған. Салауат Юлаев былай тип һөйләй: 1200 кешелек отряд Бикҡол ауылына юл тотҡайны. Ләкин барып етергә бер саҡрым самаһы ҡалғас, уларҙы ике мең йәки унан да күберәк кешенән торған һәм пушкалар менән ҡоралланған пугачевсылар «төркөмө» ҡаршы ала һәм, бөтәһен дә атакалап, ҡараңғы төшкәнсе тотоп тора. Шуға күрә уларҙың старшинаһы Әлибай, пушкалар булмағанлыҡтан һәм үҙенең командаһына ҡарағанда «пугачевсыларҙың икеләтә артыҡ булыуын күреп, ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә» бирелә, «уның бөтә командаһы, шул иҫәптән ул да, Салауат та, улар толпаһына эләгә»[4]. Салауат, «ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә» сығылды, тип таныһа ла, Әлибайҙың был аҙымын пугачевсыларҙың һан яғынан өҫтөн булыуы һәм уларҙың артиллерия менән тәьмин ителгәнлеге менән аңлатып яҡларға маташа. Ваҡиғаларҙы яҡтыр-

---

[1] Н. Головтың 1773 йылдың 29 октябрендә П. М. Богдановҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 3, л. 150—151; шул уҡ көндә Богдановтың Өфө провинция канцелярияһына белдереүе. — «Крестьянская война...» китабында, 41—43-сө биттәр.

[2] П. М. Богдановтың 1773 йылдың 31 октябрендә Өфө провинция канцелярияһына белдереүе. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 3, л. 146.

[3] Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 487-се бит.

[4] Крестьянская война..., 300-сө бит.

тыуҙа И. Н. Зарубин объективыраҡ булып сыға, һорау алғанда, ул былай тип күрһәтә: генерал Кар ғәскәре менән уңышлы һуғыштарҙан һуң, Бердаға ҡайтып барғанда, уға, Зарубинға, Бикҡол ауылы янында биш башҡорт килә лә алынған приказға ярашлы рәүештә үҙҙәренең отряды менән Карға китеп барыуын белдерә. Был башҡорттарға «генерал тар-мар ителде һәм ҡалғандары менән ҡасты» тип әйтәләр, «ә уларҙы [башҡорттарҙы] үҙҙәре яғына сығырға өндәйҙәр». Зарубин башҡорт отрядына агитаторҙар ебәрә, улар араһында Кинйә Арыҫлановтың ир туғаны ла була [1], һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә «кенәз Ураков, үҙенең командаһында булалыш күреп, уларҙан үҙе китә, ә башҡорттар бөтәһе лә баш күтәреүселәргә ҡушыла»[2]. Зарубиндың күрһәтеүҙәре Ҡыр-Танып волосы башҡорто Айтуған Таңсуриндың Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы һөйләгәндәре менән (тик ул, өгөтләүселәр араһында Кинйә Арыҫланов үҙе лә бар ине, тип, күрәһең, хата әйткән)[3] һәм отрядтан генерал Карға ҡасҡан Ҡазан юлы Бәйләр волосы йөҙ башлығы Абдулла Сырмәтов белдереүе менән раҫлана. Йөҙ башлығы Абдулланың белдереүенә нигеҙләнеп, генерал Кар нәфрәт менән Хәрби коллегияға «бер ниндәй ҙә йәберләү күрмәгән атлы мең кеше һис ҡаршылыҡһыҙ пугачевсыларға ҡушылған», тип хәбәр итә [4]. Баш күтәргән ҡайһы бер башҡорттарҙың [5] тикшереүҙә һөйләгәндәре буйынса шул билдәле, Стәрлетамаҡтан йыйылма отрядтың ҡалған өлөшөн бер аҙнанан һуң баш күтәреүселәр старшинаһы Ҡасҡын Һамаров [6] Бердаға алып китә. Стәрлетамаҡ отряды өсөн көрәштә пугачевсылар өҫкә сыға.

---

[1] Һүҙ Ҡотлогилде Абдрахманов тураһында бара.

[2] И. Н. Зарубиндың 1774 йылдың сентябрендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — «Пугачевщина» китабында, 2-се том, 134-се бит.

[3] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 5, л. 337—338.

[4] Материалы для истории Пугачевского бунта: *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 492-се бит.

[5] Уран волосы башҡорттарынан Мәһәҙи Мәҙийәровтан, Урман-Гәрәй волосынан Сатлаған Иманаевтан, Ирәкте волосынан Бәкер Мансуровтан һәм Өмөтбай Абдрахмановтан Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғанда уларҙың күрһәтеүҙәре протоколдары. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 124, 211, 337; ч. 5, л. 47—48.

[6] Ҡасҡын Һамаров — Нуғай юлы Тамъян волосынан башҡорт йөҙ башлығы; 1771—1773 йылдарҙа конфедераттар менән көрәшеү өсөн Польшаға ебәрелгән өс меңлек башҡорт-мишәр отряды составында 300 кешенән торған группаға командалыҡ итә. Пугачев хәрәкәтендә актив ҡатнашыусы, старшина, аҙаҡ баш күтәреүселәрҙең полковнигы. 1773 йылдың ноябрендә — декабрендә Стәрлетамаҡта йыйылған башҡорт отрядтарын баш күтәреүселәр яғына алып сыға. Өфөнө ҡамауға етәкселек итеүселәрҙең береһе, И. Н. Зарубиндың иң яҡын көрәштәше; язалау отрядтарына ҡаршы күп тапҡырҙар һуғыша. 1775 йылдың ғинуарында Салауат Юлаев менән бергә Ҡазан йәшерен комиссияһына оҙатыла, бында ул үҙенең баш күтәреүселек эшмәкәрлегенән күп нәмәне йәшереп ҡалдыра ала. — Крестьянская война..., 12, 16, 39, 66—69 һ. б. биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 5, 19, 55, 114 һ. б. биттәр; 1775 йылдың 27 мартында Сенаттың Йәшерен экспедицияһы, уның эшен ҡарап, әгәр ҙә ул үҙ гәйебен танып, баш һалып килһә, язалауҙан ҡотҡарырға, ә әгәр ҙә «тотоп килтерелгән» булһа, ул саҡта «остзейский» (Балтик буйы) гарнизондарының береһенә уны срокһыҙ һалдат хеҙмәтенә оҙатырға тигән билдәләмә сығара. — ЦГАДА, ф. 7, д. 2043, л. 14.

Бикҡол ауылынан Берда биҫтәһенә тиклем 60 саҡрым самаһы була, тимәк, пугачевсылар отряды унда 11 йәки 12 ноябрҙә килә. Был ваҡытта баш күтәреүселәрҙең Ырымбур эргәһендәге Төп ғәскәре үҙенең сафтарында рус һәм рус булмаған крәҫтиәндәрҙең төрлө категорияларынан (помещик крәҫтиәндәре, завод, батша һарайы, экономика, дәүләт крәҫтиәндәре), казактарҙан, башҡорттарҙан, ҡалмыҡтарҙан һәм башҡа милләт кешеләренән торған бер нисә мең һуғышсы иҫәпләнә. Баш күтәреүселәрҙең хәрби коллегияһы ағзаһы И. А. Творогов үҙенең күрһәтеүендә белдергәнсә, октябрь башынан уҡ инде халыҡ «шатланып бөтә яҡтарҙан төркөм-төркөм булып беҙгә ағылды, һәм ҡыҫҡа ғына ваҡытта бер башҡорттар ғына ла ике мең самаһы, ә крәҫтиәндәр ифрат күп килде»[1]. И. Н. Зарубин, һорау алғанда, «уның (Пугачевтың) «толпаһына» көсләп бик һирәк кеше алынды, күп саҡта үҙҙәре ағылып көн һайын килде»[2], тип күрһәтә.

Зарубин менән Овчинников генерал Ҡар корпусын тар-мар итеү тураһында Пугачевҡа шатлыҡлы хәбәр алып ҡайтҡандан һәм уға баш күтәреүселәргә үҙ ирке менән килеп ҡушылған башҡорт-мишәрҙәрҙең ҙур отрядының Бердаға килеүе тураһында хәбәр иткәндән һуң ике көн үткәс, пугачевсылар тағы ла бер еңеүҙе байрам итә. 13 ноябрҙә иртән улар ҡамауҙа ҡалған Ырымбурға ярҙамға ашыҡҡан полковник П. М. Чернышев корпусын ҡорал һалдыра. Әсиргә 1200 кеше, улар менән 15 орудие алына. Ләкин шул көндө кисен баш күтәреүселәр үҙҙәренең һаҡһыҙлығы арҡаһында ҡалаға бригадир А. А. Ҡорфтың 2,5 меңлек отрядын үткәрә. Был ваҡиғалар Салауат Юлаевтың күҙ алдында бара. Ләкин был турала ул бер һүҙ ҙә өндәшмәй. Пугачевҡа тогро хеҙмәт итергә ант биреүен әйтеү менән генә сикләнә. Был уңай менән тикшереүселәргә фәҡәт шуны ғына белдерә: Пугачев атаманы Овчинников «уны башҡалар менән Бердаға», Пугачевтың үҙенә, ебәрә, «шул крепоста булған Пугачев уларҙы үҙенә хеҙмәт итергә ҡуша», ә быға риза булмағандарҙы үлем язаһы менән ҡурҡыта. Бына ни өсөн ул, үлемдән ҡурҡып, Пугачевҡа хеҙмәт итергә риза булған[3]. Ләкин, әйтеп үтелгәненсә, башҡорт отрядының баш күтәреүселәргә ҡушылыуын үҙ күҙҙәре менән күргән кешеләрҙең күпселеге был күсеүҙең ирекле булыуын билдәләй. Ҡазактарҙы ла, башҡорттарҙы ла үҙ ғәскәренең иң һуғышсан өлөшө тип күргән Пугачев башҡорт атлыларының килеүенә шат булғандыр, тип уйларға кәрәк. Шуға күрә яңы килеүселәргә уның мөрәжәғәте ҡурҡытыуҙарға һәм көсләүҙәргә нигеҙләнә алмай. Ғәҙәттә, һорау алғанда башҡорттарҙың хәтерләүенсә, Пугачев «уларга үҙе тураһында белдерә һәм үҙен ысын юғалған батша, тип ышандыра; шул уҡ ваҡытта уларҙы үҙенә тогро хеҙмәт итергә өгөтләй, бының өсөн, элекке замандарҙа-

---

[1] И. А. Твороговтың 1774 йылдың 27 октябрендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — «Пугачевщина» китабында, 2-се том, 142-се бит.

[2] Шунда уҡ, 136-сы бит.

[3] Крестьянская война..., 300-сө бит.

ғыса, император Петр Беренсе ваҡытында булғандағыса, уларға ирек бирергә, ә унан тыш эш хаҡы вәғәҙә итә, быны иҫбат итеп, һәр кешегә берәр һум бирергә ҡуша [1]. Баш күтәреүселәр булып киткәндән һуң, башҡорттар Төп ғәскәрҙең бөтә операцияларында ҡатнаша. Берда лагерын аҙыҡ-түлек, аттар, фураж менән тәьмин итә, хөкүмәт почтаһын баҫып алып һәм язалау отрядтарының хәрәкәтен күҙәтеп, юлдарҙа һаҡсы хеҙмәте алып бара. Е. И. Пугачевтың һәм Кинйә Арыҫлановтың Бердала алған указдары менән Өфө, Көңгөр, Ҡазан һәм башҡа өйәҙҙәрҙең ауылдары буйлап йөрөй, шул урындарҙа баш күтәреүселәр отрядтары ойоштороп, халыҡты восстаниеға саҡыра.

Салауат Юлаев Пугачев лагерына килгәндә, ундағы башҡорттарҙың һанын аныҡ ҡына итеп әйтеү мөмкин түгел, сөнки баш күтәргән башҡорттарҙың исемлеге һаҡланмаған. Сығанаҡтар төрлөсә мәғлүмәт бирә: Ырымбур губернаторы ноябрҙә, Хәрби коллегияға, Сенатҡа, Өфө воеводаһына, Пугачевҡа «биш меңгә тиклем башҡорт [2] килде...» тип белдерә; Зарубин да һорау алғанда шул сама күрһәтә [3]; Пугачев 1774 йылдың 16 сентябрендә, унан беренсе һорау алған ваҡытта, октябрҙә 27 мең башҡорт булды, тип, асыҡтан-асыҡ арттырылған мәғлүмәттәр килтерә [4], И. А. Творогов күрһәтеүҙәрендә 2 мең башҡорт тураһында әйтелә [5]. Ноябрь башына Пугачевтың Төп ғәскәрендә башҡорттар һаны биш меңдән артмаған булһа кәрәк.

Баш күтәреүселәр ғәскәренә яңы көс өҫтәлеү үҙен һуғышта күрһәтергә шунда уҡ мөмкинлек ала. 14 ноябрҙә иртәнсәк Рейнсдорп, баш күтәреүселәр лагерына көтөлмәгәндән һөжүм итеү өсөн, гарнизонды ҡаланан сығарырға ҡарар итә. Ләкин пугачевсылар дошман менән осрашырға әҙер була. Ырымбурҙан Бердаға ҡаран хәрәкәт итеүсе 22 орудие менән 2400 кешенән торған корпусҡа ҡаршы Пугачев күп пушкалар һәм һан яғынан шаҡтай өҫтөн отряд ебәрә. Башлыса казактар менән башҡорттарҙан торған атлы отряд баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәренең ядроһы була. 14 ноябрҙәге һуғыштың уңышында Пугачевтың атлы ғәскәре хәл иткес роль уйнай. Ике сәғәт буйы пушка һәм мылтыҡтарҙан атыш тынмай. Ләкин, тип аҡлана Хәрби коллегия алдында губернатор, «пугачевсылар «бөтәһе лә бындағыларға ҡарағанда яҡшы аттарҙа булғанлыҡтан һәм йәҙрә, мылтыҡ утынан ялтанып, ғәҙәттә таралып йөрөгәнлектән, бик күп һандағы орудиеларҙан ғына атҡанлыҡтан, улар өҫтөнән ныҡлап уңышҡа ирешергә мөмкин булманы, ә ҡараңғы төшөү менән, йәйәүле батальондарҙы дүрт мөйөш итеп те-

---

[1] Бөрйән волосы башҡорто Аҡкуҫкар Сураголовтың 1773 йылдың 7 ноябрендә Ырымбур губерна канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 349, д. 7183, л. 187 об.

[2] ЦГВИА, ф. 20, д. 1231, л. 194; ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 261. Крестьянская война..., 53-сө бит.

[3] Пугачевщина, 2-се том, 134-се бит.

[4] Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 4, 117-се бит.

[5] Пугачевщина, 2-се том, 142-се бит.

ҙеп, ҡалаға кире ҡайтырға мәжбүр булдыҡ»[1]. Баш күтәреүселәрҙең атлы ғәскәре сигенеүселәрҙе ҡала ҡапҡаларына тиклем үк эҙәрләп бара. Йәйәүле ғәскәрен арттан ҡаплау өсөн, Рейнсдорп тағы ла бер атлы отряд ебәрергә мәжбүр була. Һуғыш барышын ҡала валынан күҙәтеп торған Ырымбур тоҙ контораһы директоры П. И. Рычковтың яҙыуынса, крепость стеналары янында «ҡалаға ынтылған яуыздар менән ҡоралдан атыш һәм һөңгөләр менән ҡул һуғышы булды»[2]. Баш күтәреүселәр ҡалаға бәреп инә алмай. Шаҡтай юғалтыуҙар кисереп, Ырымбур корпусы ҡала ҡапҡаларынан инеп йәшеренә. Ошо һуғыштың һөҙөмтәләре тураһында Пугачев, Яйыҡ ҡаласығында һорау алғанда, ғорурланып былай ти: 14 ноябрҙә «бригадир Корф һөжүмгә күсте. Бердаға яҡын килде һәм пушкаларҙан ата башланы. Ә мин уға ҡаршы сыҡтым да үҙемдең халҡымды ике өлөшкә бүлдем, шулай итеп Корфҡа удар яһаным, бер нисә кешеһен туҡманым һәм уны крепосҡа кире китергә мәжбүр иттем»[3].

Ул саҡта әле аҙ билдәле булған башҡорт Салауат Юлаев тап ошо һуғышта тәүләп батырлыҡ күрһәтә, тип ышаныс менән әйтергә мөмкин. Эш шунда, Ырымбур эргәһендә Салауат 1773 йылдың декабренең беренсе көндәренә тиклем генә була, ә айҙың урталарынан тыуған еренә ҡайтып, төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан ауылдарында отряд йыя. Рейнсдорптың Ырымбурҙы ҡамау ваҡиғаларының көндәлек хроникаһын алып барған журналынан һәм ҡамауҙың шаһиттары П. И. Рычков менән поп И. Осиповтың яҙмаларынан шул күренә: Салауат Бердала булған ваҡытта, пугачевсыларҙың Ырымбур гарнизоны ғәскәрҙәре менән «көслө» һуғыштарының береһе 1773 йылдың 14 ноябрендә була. Бынан һуңғы көндәрҙә, 7 декабргә тиклем, ҙур алыш булмай. Һирәк-һаяҡ атыштар, ҙур булмаған отрядтар араһында бәрелештәр булып ала. Мәҫәлән, 20 ноябрҙә ҡаланан ебәрелгән Яйыҡ казактары менән атышалар (пушканан бөтәһе 4 тапҡыр ғына гөрһөлдәтеп алалар, шул уҡ ваҡытта 14 ноябрҙә Ырымбур стеналарынан ғына ла 473 тапҡыр аталар)[4]. 26 ноябрҙә, баш күтәреүселәрҙең байтаҡ өлөшө Пугачев етәкселегендә Верхнее Озеро крепосына китеүен белгәс, Рейнсдорп уларға яңы удар яһарға тырышып ҡарай. Пушкалар менән мең кешелек корпус ебәрелә, ләкин, элекке кеүек үк, баш күтәреүселәрҙең ҡыҫымы аҫтында, ул тиҙ сигенә[5]. Айҙың аҙаҡҡы көнөндә ҡала стеналары янында һөйләшеү өсөн ҡаланан вәкилдәр ебәреүҙе талап итеп килгән пугачевсылар отряды менән

---

[1] Ырымбур губерна канцелярияһы журналының экстракты (1773 йылдың сентябре — ноябре)..., 192-се бит. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1231, л. 193 об.

[2] Осада Оренбурга (Летопись Рычкова), 251-се бит. Прибавление о разбойнике и самозванце Пугачеве из дневных записок 1773 года, города Оренбурга Благовещенской церкви, что на Гостином дворе, священника Ивана Осипова, 562-се бит.

[3] Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 4, 117-се бит.

[4] Осада Оренбурга (Летопись Рычкова), 250, 256-сы биттәр.

[5] Шунда уҡ, 260—261-се биттәр.

һуғыш булып ала, ул 2 сәғәттән 5 сәғәткә тиклем һуҙыла. Губернатор үҙендә булған бөтә атлы ғәскәрҙе һуғыш ҡырына ебәрә. Баш күтәреүселәр отряды тотошлай тиерлек башҡорттарҙан тора, быны Рычков та билдәләй: «Был көндөң үҙенсәлекле яғы шул булды: алышҡа сыҡҡан яуыздар араһында Яйыҡ казактары бик аҙ ине, ә күберәк өлөшө башҡорттарҙан торҙо, ә ҡаланан ебәрелгән кешеләр һәм аттар яуыздарҙа башҡорттарҙан башҡа бер кемдә лә булмаған уҡтар менән яраланғайны». Рычков, һуғышты тасуирлап, тәүҙә яҡтар пушкаларҙан атышты, унан, бер-береһенә яҡынайып, бер нисә сәғәткә һуҙылған «ҡул һуғышы» башланды, артабан Ырымбур командаһы ҡалаға ҡайтты, ә пугачевсылар, уңышты нығыта алмайынса, үҙҙәренең лагерына һырттарға «юл тоторға мәжбүр булды»[1], ти.

Пугачевтың атлы ғәскәре сафтарында Салауат Юлаевтың әйтеп кителгән бөтә һуғыштарҙа ла ҡатнашмауы мөмкин. Ләкин яугир иптәштәренең алдында үҙен танытырлыҡ итеп һәм баш күтәреүселәр башлығынан билдәләтерлек итеп үҙенең хәрби оҫталығын, беҙҙең ҡарашҡа, ул, бөтәһенән элек, 14 ноябрҙәге һуғышта күрһәтә алғандыр. Шуныһы мөһим, Салауат Бердала бөтәһе өс аҙна булған сағында, Пугачев йәш яугирҙың хәрби һәләтлеген тоҫмаллай алған һәм, уға полковник чины биреп, Салауат Юлаевтың һуғыштағы батырлығын юғары баһалаған. Билдәле булыуынса, Пугачев баш күтәреүселәрҙән һуғыштарҙа йәки башҡа эштәрҙә өлгөлө булғандарына, баш күтәреүселәрҙе йыйып, үҙе полктар төҙөгәндәренә генә полковник званиеһы биргән[2]. Салауаттың, восстание башлығы полковник итеп «уның командаһында булған башҡорттарҙың һорауы буйынса» тәғәйенләне, тип күрһәтеүен быңдай айырмалыҡ яһауҙың ысын сәбәбен йәшерергә ниәтләү тип ҡарарға мөмкин, асылда иһә Салауат Ырымбур эргәһендәге һуғыштарҙа үҙен яҡшы күрһәтеп өлгөрә. Хатта уның командаһындағы бөтә 95 башҡорт биргән иң маҡтаулы характеристика ла шундай юғары звание биреүгә нигеҙ булып хеҙмәт итә алмаҫ ине.

Салауаттың нисек итеп үҙенең баш күтәреүселәр лагерынан ҡасып сығырға маташыуы хаҡында уйлап сығарып һөйләүе лә тикшереүселәрҙе алдауға иҫәп тотҡан тактик алым була. Имеш, ул, Ырымбурға һөжүм иткән ваҡытта, «яуыз менән булырға теләмәй, уның төркөмөнән айырылып, ҡалаға тогро ғәскәрҙәргә ҡасырға иткән», ләкин Яйыҡ казактары ҡыуып етеп, ҡасҡан өсөн уны үлтерергә теләгән, башҡорттар ғына, килеп сығып, уны ҡотҡарып алып ҡалған. Унан, йәнәһе, Салауатты Пугачевҡа алып килгәндәр, Пугачев уны үҙенә тоғро хеҙмәт итергә һәм ҡасмаҫҡа өндәгән, әгәр ҙә ҡаса ҡалһаң, тигән ул, әлбиттә, ғүмереңдән мәхрүм ҡалырһың»[3]. Пугачев ҡасып сығыусыларҙы һәм хыянатсыларҙы бер ваҡытта ла өгөтләп тормаған, Салауат юҡҡа ғына үҙен шуларҙың береһе итеп күрһәтергә маташа. Уның тәнендәге яралар-

[1] Осада Оренбурга (Летопись Рычкова), 263-сө бит.
[2] *Андрущенко А. И.* Күрһәтелгән әҫәр, 66, 71—72-се биттәр.
[3] Крестьянская война..., 300—301-се биттәр.

ҙы (сикәһендә һәм ҡулында, «арҡаһына ла сәнсәләр, ләкин өҫтөндәге тимер күлдәккә тура килгәнлектән, әллә ни зыян һәм йәрәхәт һала алмайҙар»[1]), ул аңлатҡанса, баш күтәреүсе казактар түгел, ә, моғайын, ноябрь һуғыштарының береһендә Ырымбур корпусы казактары һалғандыр. Яраланыуы хаҡында уның уйлап сығармауын Өфө провинция канцелярияһы тарафынан 1775 йылдың 2 октябрендә Салауаттың билдәләрен күрһәтеп төҙөлгән яҙмаһы раҫлай. Унда, һул сикәһендә йөй бар, тип әйтелә[2]. Тимәк, яра эҙе ике йылдан һуң да ныҡ беленеп торғас, ул етди булғандыр инде. Пугачевтың һауығыу өсөн өйгә ҡайтырға рөхсәт итеүен дә Салауат үҙенең яраланыуы менән аңлата.

Салауат Юлаевтың баш күтәреүселәрҙәге эшмәкәрлегенең беренсе этабы шуның менән тамамлана. Ырымбур ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ул шундай оҫталыҡ һәм батырлыҡ күрһәтә, Пугачев ун туғыҙ йәшлек Салауатты үҙенең эмиссары итергә хәл ҡыла һәм иң йәш полковнигына восстание үҙәгенән алыҫ булған Себер юлы волостарында отрядтар төҙөргә ҡуша. Ләкин Берда лагерында Салауат үҙенең хәрби һәләтлелектәрен генә күрһәтеп ҡалмай, бынан һуңғы эшмәкәрлегендә уға кәрәкле тәжрибә лә ала. Күмәк кешеле һәм күп милләтле баш күтәреүселәр лагерындағы шарттар үҙе, өс аҙна буйы уға эш итергә тура килгән социаль мөхит, халыҡ хәрәкәтенең ҙур эшмәкәрҙәре менән аралашыу Салауаттың аңын, характерын һәм уның бөтә эш-ҡылыҡтарының йүнәлешен формалаштырыуға хәл иткес йоғонто яһай. Берданан инде Крәҫтиәндәр һуғышы башлығының иң ышаныслы көрәштәштәренең береһе китә.

1773 йылдың декабрь аҙағында Салауат Юлаев Себер юлында йәшәүселәрҙән отряд төҙөү хаҡында Пугачев ҡушҡанды үтәргә тотона, отрядты ул Красноуфимск — Көңгөр районында хәрәкәт итеүсе отрядҡа ярҙамға алып китергә тейеш була. Был ваҡытта бөтә Ырымбур губернаһы һәм уға күрше ятҡан Ҡазан һәм Себер губерналарының өйәҙҙәре восстание менән солғап алына. 1773 йылдың аҙағында Кама буйында һәм Уралда килеп тыуған хәлдәрҙе характерлап, хөкүмәт ғәскәрҙәренең яңы командующийы генерал А. И. Бибиков 1774 йылдың 5 ғинуарында Сенатҡа былай тип хәбәр итә: пугачевсыларҙың ауылдарҙы һәм заводтарҙы баҫып алыуы тураһында «башҡорт яғынан көн һайын хәбәрҙәр килеп тора», ә «ҡара халыҡ ҡурҡыуынан яуыздарға ҡаршылыҡ күрһәтмәй, ә ҡайһы саҡта ирекле рәүештә уларҙы ҡаршы алырға ебәрә. Шундай буталыштарҙан һуң Көңгөр менән, тимәк, Екатеринбург менән дә, бәйләнеш өҙөлдө»[3]. Салауат Юлаевтың Мәскәүҙә һорау алғандағы күрһәтеүҙәре Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ул килер алдынан булған хәлде яҡтырта. Салауат, был урындарҙа декабрь айында завод крәҫтиәндәренән һәм башҡорттарҙан отрядтар

---

[1] Крестьянская война..., 301-се бит.
[2] Шунда уҡ, 336-сы бит.
[3] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 68.

йыйған Пугачев полковнигы Иван Грязнов[1] хәрәкәт итә, тип һөйләй. Был отрядтарҙың ҙур өлөшөн Грязнов «Өфө эргәһенә ул саҡта граф Чернышев тип аталған Яйыҡ казагына ебәрә», ә үҙе ҡалған баш күтәреүселәр менән «Исецк[2] эргәһенә» китә. Билдәле булыуынса, граф Чернышев исемен баш күтәреүселәр атаманы И. Н. Зарубин йөрөтә, ләкин Салауат уның ысын фамилияһын әйтмәй. Салауат Грязновтың Өфө эргәһенә һуғыш кәрәк-яраҡтары («дары һәм ҡурғаш») ебәреүе тураһында инде мәғлүм булған фактарҙы дөрөҫләй. Салауаттың, үҙе тыуған еренә ҡайтҡанға тиклем, Грязнов «бөтә башҡорттарҙы көсләп үҙенең командаһына алғайны»[3] тип раҫлауы баш күтәреүселәр отряды төҙөү буйынса үҙ эшмәкәрлеген йәшерергә тырышыуҙан килеп сыға. Ысынында иһә Грязнов бер юлы «бөтә башҡорттарҙы»[4] йыйып бөтә алмай. Грязнов тураһында һөйләгәндә, Салауат Пугачев полковнигына ҡаршылыҡ күрһәткән башҡорттар тураһында мәғлүмәттәр килтерә. Улар ябай башҡорттар түгел, ә йөҙ башлыҡтары, түбән баҫҡыстағы административ аппаратта билдәле бер дәрәжәгә өлгәшкән һәм законлы властарға ҡаршы һуғышырға теләмәгән кешеләр була. Грязнов уларҙы ҡаты язаға тарттыра. Йөҙ башлығы Ҡолда Дәүләтов аҫып үлтерелә, ә пугачевсыларҙан ҡасҡан икенсе бер йөҙ башлығының бөтә мөлкәте баҫып алына. Салауат тарафынан килтерелгән факттар шуның менән дә ҡиммәтле, улар башҡорт йәмғиәте эсендә Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе осоронда уҡ инде башланған ҡатламдарға айырылыуҙы сағылдыра, сөнки старшиналарҙың һәм башҡорт байҙарының бер өлөшө ябай башҡорттарҙың — община ағзаларының сығышын яҡламай.

Грязновтың Себер юлында хәрәкәт итеү картинаһын тулыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн, Салауат, был шарттарҙа уның атаһы, пугачевсыларҙан «ҡурҡып», ҡасҡындар араһында булып сыға[5], тип белдерә. Шуның менән Салауат Юлай Аҙналинға аҡланыу өсөн яҡшы мөмкинлек бирергә теләй, Юлай Аҙналин да унан һорау алғанда 1774 йылдың майына тиклем үҙенең восстаниела ҡатнашыуы тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәй. Ләкин баш күтәреүселәрҙең хатта өлөшләтә һаҡланып ҡалған документтары һәм урында-

---

[1] Грязнов И. Н. (1725—1774) — Сембер сауҙагәрҙәренән. 1773 йылдың октябрендә Пугачев хәрәкәтенә ҡушыла. Өфө һәм Исет провинцияларында күп кенә заводтарҙы баҫып ала. Силәбене ҡамауҙы ойоштора, уға 1774 йылдың 8 февралендә баҫып инә. Исет (Грязнов) полкына командалыҡ итеп, баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәре составында Ырымбурҙан Ҡазанға тиклем етә. (Уның тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *Лимонов Ю. А.* Иван Грязнов һәм Григорий Туманов. — *Лимонов Ю. А., Мавродин В. В., Панеях В. М.* «Пугачев и пугачевцы» китаптарында, 112—132-се биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева, 433—437-се биттәр.)

[2] Крестьянская война..., 301-се бит. Һүҙ Исет провинцияһы тураһында бара.

[3] Шунда уҡ.

[4] Себер юлында, 1773 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, 2255 башҡорт йорто, 770 мишәр йорто иҫәпләнә, ә 1764 йылғы мәғлүмәттәр буйынса — ир затынан яһаҡ түләүсе татарҙарҙан һәм мариҙарҙан 2866 кеше иҫәпләнә. — Шунда уҡ, 286-сы бит.

[5] Крестьянская война..., 301-се бит.

ғы администрацияның яҙышыу ҡағыҙҙары 1773 йылдың декабрендә үк инде Юлайҙың Башҡортостандың был өлөшөндә баш күтәреүселәр хәрәкәтенә етәкселек итеүселәр араһында булыуы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, 18 декабрҙә Һатҡы заводы крәҫтиәндәре, Юлайға «Һатҡыла йәшәүселәр ғали йәнәптәренә ҡаршы [түгел] һәм ысын күңелдән буйһонорға риза, тип әйтергә һайланған кешеләрен ебәрә. Улар, һаҡлыҡ указы алыу өсөн, үҙҙәренең илселәренә «ғали йәнәптәренә тиклем» үтергә Юлайҙың рөхсәт биреүен, «Һатҡы заводын юлбаҫар бурҙар партияларынан яҡлауҙы» [1] һорай. Шулай булғас, Юлай баш күтәреүселәр хәрәкәтен координациялауҙа шаҡтай ҙур роль уйнаған һәм бында йәшәүселәр өсөн абруйлы булған. Был уға мөрәжәғәт итеү рәүешендә лә яҡшы һиҙелә: «Ғали йәнәптәренән хөрмәтлеһенә». Улай ғына ла түгел, был һүҙҙәр Юлайҙың Пугачев ставкаһы менән даими бәйләнеш тотоуын сағылдыра. Исет провинцияһы воеводаһы А. П. Веревкин, завод крәҫтиәндәренең ошо рапортын ҡулға эләктереү тураһында Сенатҡа хәбәр итеп, һайланған кешеләрҙе «Өфө эргәһендә торған Пугачев командаһы полковнигы Юлайға ебәргәндәр»[2], тип яҙа. Воеводаның Һатҡы заводы приказчигы С. Ф. Моисеевтан [3] алған мәғлүмәттәренең дөрөҫлөгөнә шикләнергә урын юҡ. Шулай итеп, 1773 йылдың декабрь урталарында Юлай Аҙналин баш күтәреүселәр етәксеһенән алған полковник чинында була (был званиеға ул 500 кешелек отряд йыйған өсөн лайыҡ булыуы мөмкин), Өфөнө ҡамауҙа ҡатнаша, восстание солғап алған ҙур районда заводтарҙа һәм ауылдарҙа тәртип һаҡлай.

Тикшереү барышында Салауатҡа, Мәскәүҙә унан һорау алғанда, үҙенең 1773 йылдың декабрендә Пугачевҡа отрядтар йыйыуҙа ҡатнашмауы тураһында тәүләп әйткән һүҙендә аҙағынаса торорға тура килмәй. Күп кенә баш күтәреүселәр һәм ғәйепләүсе шаһиттар үҙҙәренең күрһәтеүҙәрендә Себер юлында баш күтәреүселәр хәрәкәтен башлап ебәреүселәрҙең береһе тап бына Салауат булды, тип раҫлай. Уның был эшмәкәрлеге бик уңышлы тарала. Ауылдан ауылға йөрөп, ул Пугачевтың үҙенә полковник [4] чины биреүе тураһында указын иғлан итә, ә унан һуң «Петр III»-нөң — Пугачевтың манифесын уҡый. Был манифестың «барса кешегә һәр төрлө иректәр» вәғәҙә итеүе һәм иҫке администрацияны, бөтә «юғарғы һәм түбәнге начальниктарҙы»[5] бөтөрөү тураһындағы бойороҡтан тороуы баш күтәреүселәрҙең хәтерендә ныҡ уйылып ҡала. Алыҫ

[1] Крестьянская война..., 68-се бит.

[2] ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 77.

[3] Пугачевщина, 2-се том, 435-се бит.

[4] Е. И. Пугачевтың Салауат Юлаевҡа 1773 йылдың декабрендәге указының реконструкцияһы тураһында ҡарағыҙ: *Овчинников Р. В.* Манифесты и указы Е. И. Пугачева (источниковедческое исследование), 187—189-сы биттәр.

[5] Башҡорт старшиналары Собханғол Ҡилтәковтың һәм Сүри Рәсүлевтең 1774 йылдың 4 февралендә Пермь провинция канцелярияһында уларҙан һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколдары. — «Крестьянская война...» китабында, 89-сы бит. Салауат Юлаев ҡулында Е. И. Пугачевтың 1773 йылдың 2 декабрендәге манифесы булғандыр, күрәһең, һәр хәлдә ошо манифестың күсермәһен ул ҡамалған Ҡөңгөргә ебәргән.

волостарҙағы старшиналарға сапҡындар «Петр-III-гә хеҙмәткә» командалар әҙерләү тураһында Салауаттың приказдарын алып китә [1]. Һанаулы көндә Салауатҡа йөҙҙәрсә башҡорт, мишәр, сыуаш, мари килә. Ләкин ул ҡайһы бер башҡорттарҙың ҡаршылығына осрай. Тикшереү барышында асыҡланғанса, баш күтәреүселәрҙең Шайтан-Көҙәй волосы Юлай ауылынан бер туған Мөхәммәткилде, Яҡшымбәт һәм Һөйәрембәт Аптыраҡовтар менән ҡоралл ы бәрелеше киң билдәле була, өс туған «уның менән, Салауат менән, аралашыуҙан баш тарта»[2]. Китаптың беренсе главаһында бер туғандар атыш ваҡытында ут ялмап алған өйҙә һәләк булған, тип әйтелгәйне инде. Аҙаҡ Себер юлы ауылдарында шомло хәбәрҙәр таралыуынса, баш күтәреүселәр өйҙө аңлы рәүештә яндырыуҙары ла мөмкин, сөнки Пугачев манифестары, тоғро хеҙмәт иткән өсөн бүләк вәғәҙә итеп, восстаниеның бөтә дошмандарына яза биреү менән ҡурҡыта. Салауат ошо линияны эҙмә-эҙлекле үткәрә, «әгәр ҙә тағы кем дә булһа уға, Салауатҡа, шундай уҡ буйһонмауын күрһәтһә, улар, әлеге өс туған һымаҡ, ҡырып бөтөрөләсәк, тип янаған хаттарҙы»[3] бөтә Башҡортостанға ебәрә.

Крәҫтиәндәр һуғышына Себер юлы старшиналарының шулай ҡарауы Себер юлындағы хәлдең ҡатмарлы булыуы тураһында һөйләй. 19 старшинанан (14 башҡорт, 2 мишәр, 3 яһаҡ түләүсе татар һәм мари) етеһе: Яуын Сыуашев, Собхангол Килтәков, Илсеғол Этҡолов, Өмәтәй Уразымбәтов, Аллағужа Баҡынов, Сөләймән Көсәкәев, Ҡаныҡай Яшпохтин Салауатҡа килә. Өсөһө (Юлай Аҙналин, Тайыш Сенәкәев һәм Миндиар Арҡаев), баш күтәреүселәр хәрәкәтендә актив ҡатнашып, төрлө сәбәптәр менән командаларға үҙҙәре етәкселек итә алмай һәм уларҙы ярҙамсылары менән генә ебәрә. Тағы ла өсөһө восстаниеның хас дошманы булып китә. Улар — элек иҫкә алынған башҡорт старшинаһы Ҡолой Балтачев, башҡорттарҙан һәм мишәрҙәрҙән торған язалау отряды етәксеһе мишәр старшинаһы Солтанморат Янышев, башҡорт старшинаһы Хәлил Яҡупов (һуңыраҡ Чесноковка лагерында язалап үлтерелә). Ҡалған алты старшина Өфө провинция канцелярияһы ведомосы буйынса «ошо булып үткән болала ҡатнашыусыларҙан» иҫәпләнһә лә, һаҡланып ҡалған документтарға ҡарап хөкөм иткәндә, баш күтәреүселәр хәрәкәтенең беренсе этабында ҙур активлыҡ күрһәтмәй[4]. Башҡортостандың башҡа яҡтарында ла байтаҡ булған тап шундай старшиналар тураһында 1774 йылдың 9 ғинуарында генерал А. И. Бибиков Петербургка былай тип яҙа:

---

[1] Раҡай Ғәлиевтең һәм Яҡуп Теләүембәтовтың 1775 йылдың 6 апрелендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәренән өҙөмтәләр. — Крестьянская война..., 311—312-се биттәр.

[2] Өфө өйәҙе башҡорттарының 1775 йылдың 8 июнендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — Шунда уҡ, 326—329-сы биттәр.

[3] Башҡорт Әбләҙи Һаҡколовтың 1775 йылдың 8 июнендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — Шунда уҡ, 326-сы бит.

[4] Шунда уҡ, 90, 254, 255, 257, 286 һ. б. биттәр.

күп башҡорт старшиналары «әлеге буталышҡа бер ҙә риза түгел, ләкин яуыздар тарафынан көсләп һәм үлем менән ҡурҡытып мәжбүр ителгән»[1].

Шулай ҙа статистика Себер юлы старшиналарының күпселеге (19-ҙан 16-һы) аҙмы-күпме Пугачев хәрәкәтендә ҡатнашыуы тураһында һөйләй. Был, тотош Башҡортостандағы кеүек, старшиналарҙың уларҙы элекке хоҡуҡтарынан һәм өҫтөнлөктәрҙән аҡрынлап мәхрүм итеүгә алып барған хөкүмәт политикаһы менән ризаһыҙлығынан килеп сыға. Старшиналарҙың һайланып ҡуйылыуын властарҙың бөтөрөүе, старшиналарҙың губернаторҙар тарафынан тәғәйенләнеүен практикаға индереү һәм, шулай булғас, старшиналыҡты мираҫ итеп алыу хоҡуҡтарын юҡҡа сығарыу уларҙы тулыһынса губернаторҙарға, провинция канцелярияларына буйһондороуға — старшиналарҙы административ идара итеүҙең түбәнге звеноһына әүерелдереүгә килтерә. Шулай уҡ ерҙәрҙе, урмандарҙы, көтөүлектәрҙе крепостар, заводтар, дәүләт хеҙмәтендәге кешеләр һәм завод крәҫтиәндәре өсөн тартып алыу ҙа күп старшиналарҙың Пугачев хәрәкәтен яҡлауына сәбәп була, был уларҙың мөлкәт хәленә кире йоғонто яһамай ҡалмаған, әлбиттә. Мосолман динен ҡыҫыу ҙа ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Ләкин бында старшиналар менән ябай общинниктарҙың талаптарындағы һәм өмөттәрендәге уртаҡлыҡ хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Старшиналар артабан байыҒыу өсөн үҙ волостарында ҙурыраҡ власҡа ғына ынтылған.

Башҡортостанда старшиналарҙың өҫкө ҡатламы (волость старшиналары, уларҙың ярҙамсылары, поход йөҙ башлыҡтары, писарҙар һәм башҡалар) араһында баш күтәреүселәр хәрәкәтенә ҡарата төрлө позицияларҙа торған өс төркөм барлыҡҡа килә. Беренсе төркөмдө восстаниеның башынан алып аҙағына тиклем уға тоғролоҡ һаҡлаған кешеләр тәшкил итә. Һан яғынан ҙур булмаған икенсе төркөмгә хөкүмәткә тоғро старшиналар инә. Старшиналарҙың өҫкө ҡатламының төп өлөшө өсөнсө төркөмгә инә. Уларҙың восстаниела ҡатнашыу-ҡатнашмауы хәрәкәттең теге йәки был осорондағы конкрет хәл менән билдәләнә. Һуғыштың беренсе этабында баш күтәреүселәргә уңыш юлдаш булғанда, уларға ҡушылып, йәки, ҡушылмаһа ла, уларға ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә, старшиналарҙың был төркөмө, язалау ғәскәрҙәренең һөжүм итеп килеүҙәрен белһә, восстаниенан ситләшергә ашыға. Уларҙың ҡайһы берҙәре битараф булып ҡалһа, икенселәре иһә Крәҫтиәндәр һуғышын баҫтырыуға батша властарына ярҙам итә[2]. Пугачевтың манифестары һәм уның иң яҡын көрәштәштәре Кинйә Арыҫланов,

---

[1] ЦГВИА, ф. ВУА, д. 143, л. 98.

[2] Очерки по истории Башкирской АССР. Өфө, 1956, 1-се том, 1-се киҫәк, 218—253-сө биттәр. *Усманов А. Н.* Башкирский народ в Крестьянской войне 1773—1775 гг. — «Народы в Крестьянской войне 1773—1775 гг.» китабында, Өфө, 1977, 60—65-се биттәр; *Назаров В. Д., Рахматуллин М. А.* Факторы и формы совместной борьбы народов России в Крестьянской войне под предводительством Е. И. Пугачева (к постановке проблемы). — Шунда уҡ, 36—47-се биттәр.

Салауат Юлаев һәм башҡаларҙың өндәмәләре Себер юлының хеҙмәтсән халҡын восстаниеға күтәрә. 1773 йылдың ноябрь — декабрендә башҡорттар үҙҙәренең атлы ғәскәрен баш күтәреүселәрҙең Берда һәм Чесноковка лагерҙарына, Силәбе эргәһенә ебәрә. Декабрҙә 800 кешенән торған яңы отряд Салауат етәкселегендә Красноуфимскиға һәм Көңгөргә юл тота. Үҙе төҙөгән тағы бер отрядты Салауат Өфө эргәһенә атаман Зарубинға ебәргәндер тигән фекер бар. Тикшереү эшендә 1774 йылдың 14 ғинуарында Өфө эргәһендәге һуғыштарҙа әсиргә алынған Себер юлы старшинаһы Ҡаныҡай Яппохтин командаһынан татар Миңлеғол Минеевтың күрһәтеүҙәренән өҙөмтә бар. Өфө провинция канцелярияһында үҙенән һорау алғанда, Миңлеғол, «Салауат Юлаев самозванецтың үҙе тарафынан полковник ителә һәм Красноуфимскиҙы алыу өсөн ебәрелә»[1], тип күрһәтә. Салауат менән һорау алыныусының старшинаһы — Ҡаныҡай ҙа китә. Төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда отрядтар төҙөү Салауаттың уны Пугачевтың бик күренекле көрәшселәре сафына күтәргән беренсе һәм ҙур эше була.

Салауат алдында Красноуфимскиҙы яулап алып, артабан Пермь провинцияһы үҙәге Көңгөргә сығыу кеүек яуаплы бурыс тора. Бердала һәм Чесноковкала баш күтәреүселәрҙең башлыҡтары был райондың стратегик әһәмиәтен дөрөҫ баһалай. Пермь провинцияһын ҡушыу һәм Көңгөрҙө алыу восстание күтәреүселәргә Ҡазанға барыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра, Екатеринбургка, унан Урал аръяғына һәм Көнбайыш Себергә юл аса. 1773 йылдың декабрендә баш күтәреүселәр, Пермь провинцияһының 40 меңле халҡын восстаниеға йәлеп итергә ынтылып, билдәләнгән бурысты үтәүгә тотона. Нуғай юлының Ямаҡ ауылы башҡорто полковник Әбди Абдуллов[2] отряды Уса һарай волосына барып инә. Уның менән бер үк ваҡытта Кама буйы территорияһында Батырҡай Иткинин, Әҙел Ашменев, Сәйфулла Сәйҙәшев етәкселегендәге башҡорт отрядтары үҙ эшмәкәрлектәрен йәйеп ебәрә, быға тиклем улар Өфө эргәһендә атаман И. Н. Зарубин ставкаһында була һәм бында уларға старшина исемдәре бирелә[3]. Зарубин Көңгөр эргәһенә баш

---

[1] Крестьянская война..., 314-се бит. Миңлеғолдоң күрһәтеүҙәре протоколының тулы тексы һаҡланмаған.

[2] Әбди Абдуллов — Пугачев восстаниеһында иң актив ҡатнашыусыларҙың береһе. 1773 йылдың декабренән алып 1774 йылдың августына тиклем Уса — Сарапул районында баш күтәреүселәр отрядтарына етәкселек итә. — Крестьянская война..., 251, 364, 409—417, 418-се биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 135, 159, 163, 165, 170, 172, 173 һ. б. биттәр.

[3] Уса земство йорто писары М. И. Голдобиндың 1774 йылдың 2 октябрендә Ҡазан йәшерен комиссияһындағы күрһәтеүҙәре протоколы. — Восстание Емельяна Пугачева, 71—76-сы биттәр; Әҙел Ашменевтың 1775 йылдың февралендә шунда уҡ биргән күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 5, л. 30—31.

Батырҡай Иткинин — Уса юлы Гәйнә волосы Усть-Төнтәр ауылынан башҡорт йөҙ башлығы, баш күтәреүселәр полковнигы. Әҙел Ашменев һәм Сәйфулла Сәйҙәшев — Уса юлы Гәйнә волосы башҡорттары. 1773 йылдың декабренән алып 1774 йылдың октябренә тиклем Ҡама буйында баш күтәреүселәр хәрәкәтендә актив ҡатнаша. — Крестьянская война..., 195, 196, 358—360 һ. б. биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 5, 18, 44, 45, 156, 158, 180, 185, 190—194, 199—201 һ. б. биттәр.

күтәреүселәр бригадиры Табын казагы И. С. Кузнецовты ла ебәрә. Берданан Көңгөр эргәһенә Пугачев полковнигы Ҡәнзәфәр Усаев[1], унан һуң Салауат Юлаев ебәрелә. Килтерелгән факттар Крәҫтиәндәр һуғышы башлыҡтарының был районда хәрәкәтте үҫтереүгә ҙур иғтибар биреүҙәре хаҡында һөйләй.

Баш күтәреүсе башҡорттарҙан булған агитаторҙар рус ауылдарындағы крәҫтиәндәргә: «Батшанан уларға дәүләт һалымдарынан еңеллек киләсәк һәм бөтәһенә лә иреклек буласаҡ»[2], — тип белдерә. Шуға оҡшаш «вәғәҙәләр», шулай уҡ баш күтәреүселәрҙең һуғыштағы уңыштары тураһында хәбәрҙәр таратыу Пермь провинцияһының рус һәм рус булмаған крәҫтиәндәрен восстаниеға ылыҡтырырға булышлыҡ итә. 8 ғинуарҙа Ҡазан губернаторы Сенатҡа былай тип хәбәр итә: Ҡама буйында башҡорттарҙың хәрәкәте «шул тиклем ныҡ көсәйеп китте», инде башҡа бар «ҡара халыҡ», «вәғәҙәләргә» ымһынып, бөтә ерҙә лә «уларҙы ҡаршы ала һәм хатта һәләте булған башҡорттарҙан икешәр-өсәр кеше ауылдан ауылға йөрөй, ә унан һуң шул хәтлем үк рус мужиктарын ебәрәләр һәм халыҡты вәсүәсәгә һалалар һәм былай итеп шул тиклем уңышҡа өлгәшәләр, хәҙер инде Вятка йылғаһының был яғында ла аңлатып йөрөй башланылар»[3]. Декабрҙә баш күтәреүселәрҙең отрядтары ике ҙур волость үҙәктәре Уса менән Сарапул ҡалаларының биҫтәләренә барып инә[4]. Ғинуар башына Ҡама буйында ҡоралланған 3 мең баш күтәреүсенән торған отрядтар хәрәкәт итә[5]. Уларҙың төп бурысы крайҙың административ үҙәге — Көңгөрҙө яулап алыу була.

Көңгөр өсөн көрәш 1774 йылдың ғинуарында йәйелеп китә. Батырҡай Иткинин менән Ҡәнзәфәр Усаев отрядтары ҡаланы 4 ғинуарҙан алып 10 ғинуарға тиклем ҡамауҙа тота. Улар ҡалаға бәреп инергә өс тапҡыр ынтылыш яһап ҡарай, ләкин, уңышһыҙлыҡҡа осрап, ҡаланан сигенергә мәжбүр була. Баш күтәреүселәр бер ни тиклем ваҡытҡа Усаға, Красноуфимскиға, Гәйнә волостары ауылдарына китеп тора.

1735 йылда һалынған Красноуфимск крепосы, Өфө һәм Пермь провинциялары сигендә ултырғанлыҡтан, административ яҡтан

---

[1] Ҡәнзәфәр Усаев (1738—1804) — Нуғай юлы Бозаяз ауылынан, мишәр йөҙ башлығы, Башҡортостанда, Ҡама буйында, Ҡама аръяғында баш күтәреүселәр хәрәкәтенең күренекле етәкселәренең береһе. 1774 йылдың июнендә баш полковник чинына лайыҡ була. Августа уны башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың язалау отряды әсиргә ала. Сенаттың хөкөм ҡарары буйынса ғүмерлек каторга эштәренә ебәрелә. — Крестьянская война..., 3, 9, 13, 14, 17, 81, 82, 91, 93, 97 һ. б. биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 5, 7, 17, 68, 69, 71, 122, 194 һ. б. биттәр.

[2] Восстание Емельяна Пугачева, 71-се бит.

[3] Крестьянская война под предводительством Емельяна Пугачева в Удмуртии. Ижевск, 1974, 99—100-сө биттәр.

[4] Пермь тау заводы начальнигының 1773 йылдың декабрендә Берг-коллегияға донесениеһынан өҙөмтә; Сарапул ауылы крәҫтиәне Т. Ф. Злыгостевтың 1774 йылдың 6 февралендә Ҡазанда һорау алғандағы күрһәтеүҙәре. — Шунда уҡ, 91, 133-сө биттәр.

[5] Крестьянская война в России 1773—1775 годов. Восстание Пугачева, 2-се том, 322-се бит

Өфө провинция канцелярияһына буйһона. 1774 йылдың ғинуарына тиклем Красноуфимск казактары көтөп тороуҙы өҫтөнөрәк күрә. Крепость коменданты һәм воеводаһы Н. А. Бахматов, атаман вазифаһын үтәүсе есаул Г. А. Овчинников, власть вәкилдәре һәм дин әһелдәре, казактарҙың хәлле өлөшө ябай казактарҙы буйһоноуҙа тоторға маташа. Бергә йыйылып, улар Екатерина II-нең Пугачевҡа ҡаршы манифестарын һәм епископтың вәғәздәрен уҡыйҙар. Ҡазактарҙы башҡорттарҙың бөлгөнлөккә төшөрөүе менән ҡурҡыталар [1]. Ләкин баш күтәргән башҡорттарҙың Салауат Юлаев етәкселегендәге отряды крепосҡа яҡынлашыуы билдәле булғас та, казактарҙың талабы буйынса уны ҡаршыларға делегация ебәрелә.

Мәскәүҙә һорау алған ваҡытта Салауат, Красноуфимскиға килергә уны Пугачев полковниктары Собханғол Килтәков менән Бәхтиәр Ҡанҡаев мәжбүр итте, тип раҫлай. (Салауаттың был позицияһы китаптың бынан алдағы главаһында ентекләп ҡаралғайны инде.) Һуңыраҡ, Өфөлә һорау алғанда инде, ул Красноуфимскиға Пугачев әмере буйынса барыуын танырға мәжбүр була [2].

Красноуфимскиға етәрәк, Салауат крепосҡа Ҡошсо волосының башҡорт старшинаһы Илсеғол Этҡолов етәкселегендәге алғасҡы төркөм ебәрә. Ул Красноуфимск казактары менән һөйләшеү башлай, һәм был һөйләшеү 9 ғинуарҙа казактарҙың баш күтәреүселәрҙе, «казактарҙың байрағын күтәреп сығып, ике саҡрымдар тирәһендә ҡаршы алыуҙары һәм бер ҡаршылыҡһыҙ крепосҡа индереүҙәре менән» тамамлана [3]. Өс көндән һуң Красноуфимскиға тантаналы шарттарҙа үҙенең отряды менән Салауат Юлаев инә [4]. Салауаттың был турала һуңыраҡ яҙыуынса, Красноуфимскиҙың бөтә «граждандары ватан хаҡына яҡынлашып килеүсе бөтә армияны ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алды, һәм, алдан уҡ баҫымсаҡлыҡ күрһәтеп, казактарҙың утлы ҡоралдары менән бөтә артиллерияһын ебәрҙе, осрашҡанда байраҡтарын түбән эйҙе, ҡаланың үҙенә ингән саҡта император ғали йәнәптәре һаулығы өсөн пушкаларҙан атты»[5].

Салауат үҙенең отряды менән Красноуфимскиҙа ни бары өсдүрт көн (12 ғинуарҙан алып 15 ғинуарға тиклем) була. Урындағы казактар баш күтәргән башҡорттарға һәм уларҙың башлығына ҙур ышаныс менән ҡарай. Башҡа урындарҙағы кеүек, Салауат отрядтарының хәрәкәттәрен бындағы халыҡ та яҡлай. Салауат крепосҡа килгән көндә үк уға атаман вазифаһын үтәүсе Г. А. Овчинников һәм башҡа старшиналар өҫтөнән «күп» шикәйәт менән

---

[1] Н. А. Бахматовтың 1774 йылдың 20 февралендә секунд-майор Д. О. Гагринға рапорты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1235, л. 651—652.

[2] Крестьянская война..., 301, 318-се биттәр.

[3] Красноуфимскиҙың баш күтәргән казактары атаманы М. Е. Мальцевтың 1774 йылдың 26 февралендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 13—20.

[4] М. И. Поповтың 1774 йылдың 28 февралендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — «Крестьянская война...» китабында, 96-сы бит.

[5] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 247-се бит.

казактар килә. Ошонан һуң Салауат 1774 йылдың 13 гинуарында Красноуфимскиҙың баш күтәргән казактарының атаманы итеп М. И. Поповты (Ивановты), есаул итеп М. Д. Чигвинцевты билдәләү тураһында указ сығара һәм уларға крепость һәм уның округы менән нисек идара итергә күрһәтмә бирә[1]. Комендант Н. А. Бахматов, комиссар Д. Попов, вахмистр Я. Г. Савинов властан мәхрүм ителә һәм өйҙәрендә һаҡ аҫтында тотола, Г. А. Овчинников отставкаға ебәрелә (ҡатыраҡ язанан улар казактарҙың күпселегенә ҡаршы асыҡтан-асыҡ сығырға баҙнат итмәгән һәм хатта башҡорт отрядын ҡаршы алғанда ҡатнашырға мәжбүр булған өсөн генә ҡотолоп ҡала). Казактарҙың идара итеү органы — Красноуфимск станица йорто — крепостағы яңы властың берҙәнбер органы була. Уның башында казактар һайлап ҡуйған («казактарҙың ризалығы буйынса») һәм Салауат тарафынан раҫланған ун туғыҙ йәшлек Макар Попов (Иванов) тора. Казак хеҙмәтендә егерме йыл самаһы булған йөҙ башлығы М. Д. Чигвинцев уға ярҙамсы итеп тәғәйенләнә. Указда һәм күрһәтмәлә яңы властарҙың идара итеү, тәртип һаҡлау һәм башҡа өлкәләрҙәге бурыстары билдәләнә. Салауат указы казак сходтары һәм уларҙың ҡарарҙары аша идара итеүҙә халыҡтың киң ҡатнашыуын күҙҙә тота. Документ азат ителгән крепость властарының һәм граждандарының үҙ-ара яуаплылығын һәм үҙ-ара контроллек итеүен аныҡ билдәләй: «...ҡала буйынса бирелгән приказдарҙы Ивановтан (Поповтан) һәм Чигвинцевтан улар яҡшы күреп һайлаған кешеләргә ҡабул итеп алырға, һәр нәмәлә күндәм булырға, ҡаршылашып тормаҫҡа, үтәмәгән өсөн бик ҙур штраф түләүҙән ҡурҡып буйһонорға, тип уларға күрһәтмәләр бирергә, ә атаманға һәм есаулға «бындағы граждандар менән яҡшы мөғәмәлә итергә: бер ниндәй сәбәптәр менән дә бер кемгә лә ауыр түләүҙәр, йәберләүҙәр һәм һалымдар һалмаҫҡа, ришүәткә теймәҫкә»[2]. Документтар яңы администрацияның төп функцияларын етерлек ентекле итеп һөйләй. Восстаниеның маҡсаттары төп мәсьәлә итеп ҡуйыла, һәм халыҡ власына яңы урынлаштырылған тәртипте «һуңғы тамсы ҡанға тиклем һаҡлау һәм яҡлау» бурысы йөкләтелә. Башҡа хәрби һәм хәрби-ойоштороу мәсьәләләре лә ошо төп бурысҡа буйһондорола: яңы властарға походҡа казак подразделениеларын туплауҙы дауам итергә, команданы һуғышсан әҙерлек хәлендә тоторға, отставкалағы казактар тураһында хәстәрлек күрергә ҡушыла. Бынан тыш, Салауат атаманға казактар командаһы һуғышсыларының исемлеген булдырыуҙы, отрядты добровольцтар менән тулыландырыу тураһында белешмә төҙөүҙе йөкләтә. Былар бөтәһе лә крепоста һәм уның гарнизонында ныҡлы тәртип урынлаштырырға булышлыҡ итергә тейеш була. Пугачевҡа һәм Зарубинға барырға теләгәндәрҙең бөтәһенә лә рөхсәт билеты биреүҙе тыйыу ҙа шуға хеҙмәт итә. Рөхсәт биреү хоҡуғы менән Салауат үҙе генә файҙалана. Уға,

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 243—245-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 243-сө бит.

беренсенән. хәрби коллегияға һәм баш күтәреүселәрҙең Чесноковкалағы канцелярияһына бындағы үтенестәрҙе ҡарарға ебәреп мәшәҡәтләнмәҫ, ә, икенсенән, крепость халҡының мөрәжәғәттәрен йәһәтерәк тикшереү өсөн, килеп тыуған бөтә эштәрҙе урында хәл итеүгә хоҡуҡ бирелгән була. Салауат урынлаштырған тәртип баш күтәреүселәрҙең хәрби коллегияһы бойороҡтары рухына ярашлы була. Мәҫәлән, хәрби коллегияның Красноуфимск есаулы М. Д. Чигвинцевҡа биргән указы мәғлүм, был указда уға бик мөһим эштәр тураһында коллегияның үҙенә лә, шулай уҡ эштәрҙе оперативыраҡ тикшерергә һәм улар буйынса ҡарар ҡабул итергә мөмкинлектәре булһын өсөн, яҡын-тирәләге отрядтарҙың командирҙарына ла хәбәр итергә ҡушыла [1]. Салауат үҙенең күрһәтмәһендә властан бушатылған комендантты һәм уның эйәрсендәрен күҙәтеү, уларға бирелгән юл таныҡлығын һис кисекмәҫтән кире алыу кәрәклегенә баҫым яһай. Бахматов, Өфө йәки Ырымбур эргәһенә барырға атлығып тормай, әлбиттә, рөхсәт билеты уға «баш командаға» ҡасып сығыу өсөн кәрәк була [2].

Ҡаҙнаны һаҡлау һәм тулыландырыу тураһында бойороҡтар күрһәтмәнең айырым бүлектәрен тәшкил итә: аҡсаны бүлеп тотоноу, йәмәғәт килемдәрен һәм сығымдарын иҫәпкә алыу, тоҙ һәм хәмер менән сауҙа итеүгә контроль, хеҙмәткәрҙәргә эш һәм квартир хаҡтары түләү һ. б. ш. Көңгөргә походҡа киткәндә, Салауат үҙ артында ныҡлы һәм ышаныслы тыл ҡалдырыу өсөн бөтә сараларҙы күрә. Красноуфимск станица йортоноң 1774 йылдың ғинуар — февралендәге һаҡланып ҡалған эш ҡағыҙҙары (60 документ самаһы) раҫлауынса, уның бөтә эшмәкәрлеге Салауаттың бойороҡтарына һәм Хәрби коллегия указдарына ярашлы рәүештә төҙөлә [3]. Красноуфимскиҙың станица йорто ни бары ай ярым ғына йәшәй, ләкин ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә баш күтәреүселәр хәрәкәтенә ойоштороу йәһәтенән һиҙелерлек башланғыс индерә ала, быға Салауат Юлаевтың үҙенең дә, баш күтәреүселәрҙең бүтән етәкселәренең һәм Красноуфимск казактары араһынан уларҙың ярҙамсыларының да энергиялы эшмәкәрлеге күп дәрәжәлә булышлыҡ итә.

Красноуфимскиҙағы эшмәкәрлегенең ошо яғы тураһында Салауат үҙенән һорау алған ваҡытта бер һүҙ ҙә әйтмәй. Ләкин тикшереүселәр баш күтәреүсе В. Протопоповтың, Раҡай Ғәлиевтең һәм башҡаларҙың күрһәтеүҙәрен Салауатҡа уҡығас, Салауат һөйләп үткән фактарҙы раҫларға мәжбүр була һәм, Өфөлә беренсе һорау алғанда, ул, атап әйткәндә, «ике мең һумға тиклем» ҡаҙна аҡсаһын Пугачевҡа ебәреүҙә ҡатнашыуын, ә Көңгөргә киткәндә, крепостан пушкалар һәм дары алыуын әйтә [4].

1774 йылдың 15 ғинуарында, Красноуфимск казактары менән тулыландырылған Салауат отряды, крепостан 10 бот дары, 4 пуш-

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 61-се бит.
[2] ЦГВИА, ф. 20, д. 1235, л. 654.
[3] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 60—62, 204—253-сө биттәр.
[4] Крестьянская война..., 318-се бит.

ка алып, уларға 24 тупсы һалдат һәм өйрәнсектәрен беркетеп, Көңгөргә йүнәлә. Тиҙҙән Салауатҡа Ҡәнзәфәр Усаев менән Көңгөр өйәҙе Алтынлы ауылы крәҫтиәне атаман И. Г. Васев отрядтары килеп ҡушыла. Көңгөргә барыу юлында Салауат Юлаев етәкселек иткән «император ғали йәнәптәре армияһына» шундағы крәҫтиәндәр һәм казактар эйәрә, улар заводтарҙан пушкалар һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары алып бара [1]. 19 ғинуарҙа Салауат ғәскәрендә бер нисә мең яугир иҫәпләнә. Башҡорт полковнигына казактар, ҡаҙна һәм хосуси заводтарға беркетелгән крәҫтиәндәр, һарай һәм экономика крәҫтиәндәре, ер эшкәртеүсе һалдаттар, татарҙар һәм Тулва башҡорттары үҙ яҙмыштарын ышанып тапшыра.

Үҙенең хәрәкәттәрендә Ырымбур эргәһендә Пугачев, Өфө эргәһендә Зарубин, Көңгөр эргәһендә Батырҡай Иткинин нисек эш итһә, Көңгөр эргәһендә Салауат та шулай ҡалала йәшәүселәрҙе тыныс юл менән үҙ яғына ауҙарырға тырышып ҡарай. 19 ғинуарҙа Салауат Е. И. Пугачевтың 1773 йылдың 2 декабрендәге манифесын һәм ҡаланы ирекле рәүештә биреү тураһындағы өндәмәһен Көңгөргә ебәрә [2]. Көңгөрҙө ҡамаған баш күтәреүселәр отрядтарының башлыҡтары исеменән Салауат ҡала халҡын, Красноуфимскиҙағы кеүек үк, пугачевсыларҙы байраҡтар менән ҡаршы алырға, кешеләрҙе «бөлгөнлөккә илтеп еткермәҫ һәм баҫып килгән армияға ҡаршы барып ҡан ҡоймаҫ өсөн» [3], артиллерияны, дарыны һәм «вак ҡорал»ды тапшырырға саҡыра. Көңгөр властары был документтың йөкмәткеһен ҡала халҡынан йәшерә һәм мөрәжәғәтте яуапһыҙ ҡалдыра. Шул уҡ көндө Көңгөргә баш күтәреүселәр бригадиры И. С. Кузнецов [4] килә. И. Н. Зарубин уға Ҡама буйында хәрәкәт иткән отрядтарҙы үҙ ҡул аҫтына берләштерергә һәм Көңгөрҙө алырға, шулай уҡ ауыл-ҡалаларҙағы рус халҡы менән баш күтәреүселәр хәрәкәтендә ҡатнашҡан рус булмаған халыҡтар араһында килеп сыҡҡан конфликттарҙы урында хәл итергә ҡуша. Салауат И. С. Кузнецов менән Көңгөрҙән бер нисә саҡрымда, Иҫке Посад (Троицк) [5] ауылында осраша. Салауаттың мөрәжәғәтенә Көңгөрҙән яуап алынмауын белгәс, Кузнецов яңынан өндәмә ебәрергә тәҡдим итә. Хәҙер инде баш күтәреүселәр ҡала халҡын ҡурҡытып буйһоноуҙа тотҡан Көңгөр властарына яҙырға ҡарар

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 248-се бит.
[2] Шунда уҡ, 247—248-се биттәр.
[3] Шунда уҡ.
[4] Кузнецов Иван Степанович — Табын казагы, баш күтәреүселәр бригадиры. Чеснокова үҙәге заданиеһы буйынса, Кузнецов отряды 1773 йылдың декабрендә Златоуст, Һатҡы заводтарында һәм Исет провинцияһының башҡа заводтарында хәрәкәт итә. 1774 йылдың ғинуарында «Россия һәм Азия ғәскәрҙәренең баш етәксеһе» званиеһында Көңгөргә ебәрелә. 1774 йылдың февралендә Баҡалы крепосы эргәһендәге һуғыштарҙа һәләк була. — Шунда уҡ, 5—7, 198, 199, 209—212, 216, 217, 249—253, 363—366, 379, 380, 392, 452, 453-сө биттәр.
[5] М. Е. Мальцевтың 1774 йылдың 26 февралендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 17.

итә[1], 1774 йылдың 20 ғинуарындағы өндәмәлә Кузнецов менән Салауат «россияндар ҙа, шулай уҡ башҡа диндәгеләр ҙә «һәйбәт уйҙалар», «батшаның, ҡалаларҙы алғанда һәм ғали йәнәптәренең власына тулыһынса буйһонғанда, ҡала кешеләрен армиянан бер нисек тә йәберһеттермәҫкә» тигән приказын ныҡ үтәйәсәктәр, тип ышандыра. Кузнецов менән Салауат «азият халыҡтарының» башбаштаҡлығынан рус крәҫтиәндәренең «йәберләнеүе» менән үҙҙәренең ҡырҡа көрәш алып барыуҙарын, мөртәтлек һәм православие сиркәүенә ихтирамһыҙ ҡараш өсөн язалауҙарын яҙа. Көңгөр властарының рухын һындырыу һәм уларҙы бирелеү яғына ауҙарыу өсөн, баш күтәреүселәр ғәскәренең уңыштары һәм һаны күрәләтә арттырып күрһәтелә[2].

20 ғинуарҙағы өндәмәнең йөкмәткеһендә алтынсы пункт ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырлыҡ, ул Көңгөр властарын һөйләшеүҙәр алып барыу ҡағиҙәләрен һанламауҙа ғәйепләй. Үҙҙәрен тиң хоҡуҡлы яҡ тип иҫәпләп, баш күтәреүселәрҙең башлыҡтары «бөтә Россия батшаһы армияһы» илселәренең тейелмәҫлеген боҙоу тураһында нәфрәтләнеп яҙа, сөнки, Көңгөр властары уларҙы мәкерле рәүештә тотоп алып, төрмәгә ташлай[3]. Боронғонан килгән закон буйынса «Беҙҙең беренсе император һәм бөтә монархтар, улай ғына ла түгел, бөтә державалар бер-береһенә илселәр ебәргән», — тип аҡыл өйрәтә улар Көңгөр администрацияһына,— һәм бер ниндәй «хаким да йәки ҡала» уларҙы тоторға хаҡлы түгел[4].

Тикшереүселәр был документты Салауаттың эшенә теркәмәй. Салауат та, унан һорау алғанда, был хаҡта ла, ҡамалған Көңгөргә үҙенең башҡа өндәмәләре хаҡында ла хәтергә алып тормай. Көңгөр эргәһендәге һуғыш хәрәкәттәре тураһында һөйләгәндә, баш күтәреүселәрҙең ғәскәре 4 меңгә етә ине тип кенә билдәләй[5]. Шуның менән «Көңгөр ҡалаһына һөжүмгә барҙыҡ, уға пушкаларҙан һәм мылтыҡтарҙан аттыҡ, ләкин ул ҡаланы ала алманыҡ»[6]. Был дөрөҫ, ләкин ҡыҫҡа бер факт Салауаттың көрәштәштәренең тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәре менән дә һәм баш күтәреүселәрҙең күп кенә документтарында ла, Көңгөр администрацияһы-

---

[1] Көңгөр ҡамауҙа саҡта властар ҡала кешеләрен бер нисә тапҡыр ант иттерәләр; әсиргә алынған баш күтәреүселәрҙе ҡала майҙанында бик ҡаты ғазаплайҙар (ҡабырғаларынан аҫып ҡуялар), сиркәүҙәрҙә мосолмандарҙың башбаштаҡлығы менән ҡурҡыталар һ. б. — Материалы, относящиеся к истории г. Кунгура за время Пугачевского бунта в 1774 г. Кунгур, 1892, 75-се бит.

[2] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 249—250-се биттәр.

[3] 3 ғинуарҙа Көңгөргә өндәмә һәм Е. И. Пугачевтың 1773 йылдың 1 декабрендәге манифесы менән Батырҡай Иткинин тарафынан поптар Ф. Иванов менән И. Лукин ебәрелә; Салауаттың 19 ғинуарҙағы өндәмәһен Красноуфимск казагы И. Дружинин алып бара. — «Материалы, относящиеся к истории г. Кунгура за время Пугачевского бунта в 1774 г.» китабында, 13—16-сы биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений, 430-сы бит.

[4] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 250-се бит.

[5] Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғанда Себер юлы Сөнләр волосы башҡорто Мәүлет Әитов та шул уҡ һанды әйтә. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 5, л. 336.

[6] Крестьянская война..., 301, 318-се биттәр.

ның яҙышыу ҡағыҙҙарында булған мәғлүмәттәр менән дә раҫланыуы мөмкин.

Көнгөрҙөң бирелеүен көтөп, Салауат, Кузнецов һәм башҡа атамандар үҙ ғәскәрҙәрен тулыландырыуҙы дауам итә. Кузнецов менән Салауаттың заданиеһы буйынса «казак Россия ғәскәрен» йыйыуҙы Югов заводы крәҫтиәндәре атаманы Г. Т. Ситников, Красноуфимск станица йорто һәм башҡа властар үткәрә [1]. Рус ауылдарында киң агитация эше алып барыла. Мәҫәлән, шуныһы мәғлүм, Салауаттың штаб-квартираһы торған Иҫке Посад (Троицк) ауылында баш күтәреүселәр (бәлки, Салауат үҙе лә) крәҫтиәндәргә, яны пәйҙа булған «Петр Өсөнсө» (Пугачев) «үҙенең дәүләте буйлап йөрөгән һәм крәҫтиәндәрҙең баярҙарҙан һәм заводчиктар тарафынан рәнйетелеүен һәм михнәт кисереүен йәшерен генә күреп-белеп йөрөгән, үҙенең тере икәнен тағы ла өс йыл белдермәҫкә лә булған ул, ләкин халыҡтың таланыуына һәм ауыр хәленә түҙеп тора алмаған һәм үҙенең кемлеген асырға мәжбүр булған»,— тип һөйләгән [2].

Кама буйындағы завод халҡына айырыуса иғтибар бирелә. Билдәле булыуынса, 1773 йылдың декабрендә һәм 1774 йылдың ғинуарында баш күтәреүселәр хәрәкәтен йәйелдереүҙә был саҡта восстаниеға 44 Урал заводы халҡының ҡушылыуы шаҡтай ҙур роль уйнай. Улар иҫәбендә Пермь тау заводтары түрәләренең 10 заводы була. Көнгөргә ҡарап хәрәкәт иткәндә, пугачевсылар был заводтарҙы үҙ сафтарын кешеләр, ҡорал һәм аҙыҡ-түлек менән тулыландырыу өсөн файҙаланған [3]. Салауаттың Красноуфимскиҙан Пермь провинцияһы үҙәгенә барған юлында Уралдағы иң иҫке заводтарҙың береһе — А. Г. Демидовтың Суксун тимер иретеү һәм баҡыр ҡойоу заводы тора. Был заводта баш күтәреүселәрҙең хәрәкәттәре тураһында бик мөһим мәғлүмәттәр Пермь тау заводтары түрәләренең Берг-коллегияға 1774 йылдың 23 июнендәге донесениеһында бар [4]. Документта Салауат Юлаевтың заводта уның менән бергә булған көрәштәштәренең 66 фамилияһы әйтелә. Беренсе урында Е. И. Пугачев һәм И. Н. Зарубин тарафынан Башҡортостандан Көңгөр өйәҙенә ебәрелгән башҡорттарҙан баш күтәреүселәр полковнигы Иван Ҡоштанов (Каштанов), И. С. Кузнецов, Ҡәнзәфәр Усаев, баш күтәреүселәр подполковнигы татар Смағол Смаилов һәм «бүтән башҡорттар менән» Салауат үҙе тора. Унан ары Көңгөр өйәҙенең Карьев, Сылвен, Верхне-Иренск сиректәре (иҫк.: өлкә, округ. — *Ред.*) ауылдарынан «балалары менән» һәм «туғандары менән» 9 татарҙың исеме һәм заводҡа терколгән 53 крәҫтиәндең исеме яҙылған. Баш күтәреүселәрҙең беренсе отряды заводҡа 31 декабрҙә инә, Салауат унда 1774 йылдың ғинуарының икенсе яртыһында була. Завод крәҫтиәндәре үҙ ирке

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 214—216, 251—252-се биттәр.

[2] С. Т. Котельниковтың 1774 йылдың 30 октябрендә Югов заводы конторaһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — «Пугачевщина» китабында, 2-се том, 346-сы бит.

[3] *Андрющенко А. И.* Күрһәтелгән әҫәр. 156, 251, 332-се биттәр.

[4] ЦҒАДА, ф. 271, д. 1339а, л. 140—141.

менән «Петр III»-гә — Пугачевҡа тоғро булырға ант итә. Донесениеға теркәлгән опись буйынса фекер йөрөткәндә [1], Суксун заводтары крәҫтиәндәре килеп ингән баш күтәреүселәр отряды менән бергәләп беренсе сиратта завод конторaһын ҡыйрата. Заводтарҙың ҙур күпселегендәге кеүек, кабалалы бурыс яҙып барылған документтар һәм хөкүмәт ҡағыҙҙары булған контора эштәре юҡ ителә. Заводта, бөтә Урал заводтарындағы кеүек үк, крепостной хеҙмәт шарттарынан, натуралата-аҡсалата түләүҙәрҙән, үтә ҡаты тормош режимынан, башбаштаҡлыҡтарҙан һәм тән язаларынан [2] яфа сиккән 1033 теркәлгән крәҫтиән (ир затынан) һәм 690 крепостной крәҫтиән (ир затынан) эшләй. Контора кенәгәләрен юҡ итеүгә крәҫтиәндәр бик ауыр һалымдарҙан ҡотолоу итеп ҡарай. Баш күтәреүселәр завод конторaһында булған бар аҡсаны (5 мең һум) конфискациялай. Баш күтәреүселәрҙең ихтыяждары өсөн еҙ, тимер эше әйберҙәре, ҡыңғырау, слесарлыҡ, күрек-өрҙөртөү фабрикаларынан, балта эше һәм токарлыҡ мастерскойҙарынан төрлө ҡорал-ҡорамалдар һәм инвентарь алына. «Аҙыҡ келәтенән» аҙыҡ-түлек һәм фураж баҫып алалар. Баш күтәреүселәр «бай йорттарын» тар-мар итә, приказчиктарҙың һәм надзирателдәрҙең мөлкәтен тартып ала. Ләкин бер генә крәҫтиән ихатаһына ла, бер генә мастеровой йортона ла теймәйҙәр. Халыҡ асыуы завод хужаларына һәм администрацияға ҡаршы йүнәлтелә. Башҡорт, рус, татар һәм мишәрҙәрҙән торған Пугачев «казактары»ның Суксун заводы крәҫтиәндәре менән бергәләп башҡарған ошо саралары уларҙың социаль мәнфәғәттәренең уртаҡ булыуы тураһында етерлек асыҡ күрһәтә.

Башында Введенка (Суксун) ауылы кешеһе Агей Микулин торған завод крәҫтиәндәре Салауатҡа һәм баш күтәреүселәрҙең бүтән етәкселәренә уларҙың ошо Суксун заводындағы бөтә ҡоролмаларҙы һәм фабрикаларҙы яндырырға бойороҡ биреүҙәрен һорап [3], мөрәжәғәт итәләр. Ләкин Крәҫтиәндәр һуғышының тәүге осоронда, заводтар восстание күтәреүселәрҙең социаль һәм материаль базаһын нығытыуға булышлыҡ иткән саҡта, Пугачев һәм уның Хәрби коллегияһы заводтарҙа һуғыш кәрәк-яраҡтары етештереүҙе яйға һалырға иҫәп тота, шуға күрә баш күтәреүселәр властары ул ваҡытта промышленность биналарын һәм ҡорамалдарҙы емертмәҫкә тырыша. Суксун заводы ла шулай һаҡлап ҡалдырыла.

Суксун заводы конторaһының иҫәпләүҙәре буйынса (бер ни тиклем арттырып та күрһәтелеүе мөмкин), заводтың 105 262 һумлыҡ бурыс документтары юҡ ителә һәм төрлө мөлкәт, аҙыҡ-түлек запастары тартып алына [4]. Завод кешеләренең бер өлөшө баш күтәреүселәр отрядының хәрби сафтарын тулыландыра.

---

[1] ЦГАДА, ф. 271, д. 1339а, л. 142—152.

[2] *Андрущенко А. И.* Күрһәтелгән әҫәр, 234—240, 332—333-сө биттәр.

[3] ЦГАДА, ф. 271, д. 1339а, л. 141 об.

[4] Шунда уҡ, д. 271, д. 1339а, л. 140.

Көңгөрҙән делегацияның килеүен көтөп ала алмағас һәм йыйылған көстәр һөжүм башлау өсөн етерлек, тип иҫәпләп, баш күтәреүселәрҙең етәкселәре 23 ғинуарҙа Көңгөргә һөжүм яһарға ҡарар итә. Бер көн элек Кузнецов үҙенең командаһы аҫтына рус крәҫтиәндәрен һәм казактарын, бөтәһе бер мең самаһы кешене, бер нисә пушка һәм булған дарының яртыһын ала. Ҡалған баш күтәреүселәр, кәмендә өс мең кеше, Салауатҡа тапшырыла [1]. Команда функцияларын һәм көстәрҙе шулай бүлеү Кузнецов тарафынан йәш башҡорт хәрби начальнигына күрһәтелгән ҙур ышаныс тураһында һөйләй [2].

Баш күтәреүселәрҙең етәкселәре уңышҡа шул тиклем ныҡ ышана, штурмдан алдағы көндө Салауат бөтәһенең дә иғтибарына еткереү өсөн приказ сығара, унда: «Көңгөр ҡалаһы әсиргә алынғас, унда инеү менән бер кемде лә сапмаҫҡа-киҫмәҫкә, ә Петр Өсөнсө императорға рапорт бирергә, унан указ көтөргә»,— тип әйтелә [3]. Көңгөрҙө штурмлау — Пугачев хәрәкәтенең сағыу биттәренең береһе. 23 ғинуарҙа иртәнән алып кискә тиклем ҡала утҡа тотола. Пушкалар менән оҫта маневр яһап һәм уларҙы бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөтөп, баш күтәреүселәр ҡала тулыһынса солғап алынған тигән тәьҫир тыуҙырырға тырыша [4]. Пугачевсыларҙың артиллерияһы ҡапҡаларҙы һәм ҡала стенаһын емертә, йәҙрәләр тау урамдарына барып етеп ярыла. Атлы ғәскәр, бер саҡрым араға һуҙылып, ҡалаға һөжүм итә. Һуғышта ҡатнашыусыларҙың береһе Собханғол Килтәков, «башҡорттарҙың һөжүм ваҡытында бөтә яҡта ла разъездары булды, һис ҡайҙа ла бер урында оҙаҡ торманы улар»[5], тип хәтерләй. Һыбай отрядтар «ҡаланың ситтәге йорттарына һәм яр буйлап Кузнешный урамының үҙенә барып етте, шул уҡ ваҡытта икенсе яҡтан, Сылва йылғаһынан килеп, күн менән һатыу итеүсе сауҙагәр Хлебниковтың йортон яндырҙылар»[6]. Көңгөр түрәләре, крепостың стеналары артына йәшеренеп, һуғыш яланына команда ебәрергә батырсылыҡ итмәй, баш күтәреүселәрҙең һөжүмен пушкаларҙан һәм ҡоралдарҙан көслө ут асып ҡына туҡтатып тора. Баш күтәреүселәр, штурм барышында батырлыҡ күрһәтеүҙәренә ҡарамаҫтан, оборона тотоусыларҙың ныҡлы ҡаршылығына осрап, үҙҙәренең бик күп булмаған снарядтарын атып һәм бөтә дарыны тотоноп бөтөп, тәүге позицияларына

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 16—17; Крестьянская война..., 96—97-се биттәр.

[2] И. С. Кузнецовтың, был районда үҙенең айырым урын алып тороуына ҡарамаҫтан, бер ҡасан да үҙен өҫтөн ҡуймауын билдәләргә кәрәк. Ул Салауатҡа приказ түгел, ә белешмәләр йәғни белдереүҙәр ебәрә. — Документы ставки Е. И. Пугачева..., 252-се бит.

[3] Крестьянская война..., 92-се бит.

[4] Красноуфимск казагы Я. Ф. Пермяковтың һәм атаман М. Е. Мальцевтың 1774 йылдың 26 февралендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколдары. — ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 13—20, 32—36; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 2-се том, 350—352-се биттәр.

[5] Крестьянская война..., 91-се бит.

[6] Материалы для истории Пугачевского бунта. — «Пермский сборник» китабында, 2-се китап, 19—20-се биттәр.

сигенергә мәжбүр була. Салауат отрядынан сыуаш Егор Ильин, туп-йәҙрәләрҙе атып бөтөү арҡаһында ҡаланы «ала алманыҡ»[1], тип һуғыштың уңышһыҙ бөтөү сәбәбен дөрөҫ аңлата.

24 ғинуарҙа Салауат отряды Көңгөргә яңынан һөжүм итә, ләкин уның бөтә атакалары ла кире ҡағыла. Атыш ваҡытында Салауат ҡаты яралана[2]. Бынан һуңғы көндәрҙә Салауат менән Кузнецов ҡаланы яңынан штурмлау планын эшләй[3]. Ләкин Көңгөргә секунд-майор Д. О. Гагриндың күп һанлы хәрби командаһы килеүе сәбәпле, пугачевсыларға операцияны кисектереп торорға тура килә. Өҫтәүенә Салауат та, етди яраланып, командованиены тапшыра һәм Көңгөр эргәһенән китергә мәжбүр була. Кузнецов ярҙам алырға Чесноковкаға китә.

Баш күтәреүселәр, Ырымбур менән Өфөнө ала алмаған кеүек, Көңгөрҙө лә ала алмай. Ваҡиғаларҙың шулай уңышһыҙ тамамланыу сәбәптәре араһында баш күтәреүселәрҙең артиллерия, ҡулдан атыу ҡоралы һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары менән насар тәьмин ителеүен, хәрби әҙерлектең етеңкерәмәүен, ҡамау һуғыштары алып барыу тәжрибәһенең бөтөнләй тиерлек булмауын әйтеп китергә кәрәк. «Өгөтләүҙәрҙең» йоғонтоһона иҫәп тотоу тактикаһы ла шаҡтай тотҡарлыҡ итә, һөжүмде әҙерләгәндә аҡрын ҡуҙғалыу дошманға резервтарҙы мобилизациялау, ҡала оборона ҡоролмаларын нығытыу, ҡамалған ҡалаға килеүсе ғәскәрҙәр иҫәбенә гарнизонды көсәйтеү өсөн ваҡытты оторға мөмкинлек бирә. Бөтә крәҫтиән сығыштарына хас булған стихиялылыҡ та, восстание күтәреүселәрҙең хәрәкәттәренә ойошҡанлыҡтың етмәүе лә, һис шикһеҙ, сағылмай ҡалмағандыр[4]. Хәрәкәткә хас булған ошо етди етешһеҙлектәр тураһында һөйләп, Көңгөр эргәһендәге ваҡиғаларға характеристика биргәндә, унда ойошҡанлыҡтың билдәле элементтары булыуын да әйтмәй китергә ярамай. Мәҫәлән, Кузнецов, Көңгөр эргәһендә торғанда, атаман Зарубин менән даими бәйләнеш тота[5]. Салауаттың, Хәрби коллегия йәки Зарубин менән, уларға отчет биреп һәм тейешле бойороҡтар алып, хат яҙышыу-яҙышмауы тураһында мәғлүмәттәр архивтарҙа табылманы. Ләкин уның Чесноковка лагеры менән бәйләнеш тотоуы хаҡында тикшереү документтарында иҫкә алынған айырым факттар һөйләй. Кузнецов һәм Салауат отрядтарында поход писары булған Красноуфимск кешеһе В. Протопопов, унан 1774 йылдың 18 апрелендә Өфөлә һорау

---

[1] Е. Ильиндың 1774 йылдың 25 июлендә Орск коменданты канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 1, л. 323 об. — 324.

[2] Көңгөр магистраты: ратман Шаравьев командаһы обороналаған Преображенск пикеты өсөн һуғышта пугачевсыларҙың башлығы «башкорт Салаватко 24-се числола ауыр яралана» тип билдәләй. (Көңгөр магистратының 1775 йылдың 8 апрелендә Ҡазан губернаторына рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 516, ч. 2, л. 107 об. — 108.)

[3] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 217, 252—253-сө биттәр.

[4] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 2-се том, 229-сы бит; *Андрущенко А. И.* Күрһәтелгән әҫәр, 63-сө бит.

[5] ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 18.

алғанда, Салауат конфискацияланған ҡаҙна аҡсаларын Красноуфимскиҙан Чесноковкаға [1] ебәрҙе, тип раҫлай (Салауат иһә, аҡсаны Пугачевҡа ебәрҙем, тип әйткән була [2]). Бынан тыш, крәҫтиән И. Васильевтың күрһәтеүҙәренән һәм баш күтәреүселәр отряды командирҙарының 1774 йылдың март аҙағында Салауатҡа донесениеларынан шул күренә: Салауат атаман Зарубин ғәскәрен тулыландырыу өсөн кешеләр йыя [3].

Көңгөр эргәһенән сигенгәндән һуң, баш күтәреүселәрҙең отрядтары язалау командаларының һөжүменә осрай. Көңгөрҙән сыҡҡан секунд-майор Д. О. Гагрин, подполковник А. В. Папав командалары 1774 йылдың 30 ғинуарында Ильино (Урҙа крепосы) эргәһендәге һуғышта баш күтәреүселәрҙе еңә. Февраль урталарында язалау ғәскәрҙәре баш күтәреүселәрҙең отрядтары һаҡлаған Красноуфимскиға һөжүмде йәйелдерә. 19 февралдә Красноуфимск янындағы һуғышта 4 меңгә яҡын баш күтәреүсе ҡатнаша [4]. Салауат Юлаевтың да унда булыуына берҙән-бер дәлил Красноуфимск казағы Қ. Д. Чигвинцевтың күрһәтеүендә бар. Уның дөрөҫ һөйләгәнен Чигвинцевтың Салауат отрядында бер ергә сыҡмай 1774 йылдың ғинуар урталарынан алып март урталарына тиклем булыу факты раҫлай [5]. Ауыр яраланғандан һуң, аяҡҡа баҫыр-баҫмаҫтан, Салауат, М. Д. Чигвинцевтың крепосты обороналау [6] өсөн ғәскәр менән «бик тиҙ ваҡытта килеп етеүен» һораған рапортын алғас, Красноуфимскиҙы һаҡлаусыларға етәкселек итә. Был алыштарҙа ҙур юғалтыу кисереп һәм бөтә артиллерияһынан мәхрүм ҡалып, баш күтәреүселәр Ҡариҙел йылғаһы аръяғына сигенергә мәжбүр була. Красноуфимскиҙан 40 саҡрымда, Бугалыш ауылында, Салауат Юлаевтың ставкаһы урынлаша. Үҙенең отрядын яңы көстәр менән тулыландырыу хәстәрлеген күреп, Салауат һәм уның ярҙамсылары, ауылдан ауылға йөрөп, халыҡты «казактарға яҙа», февраль аҙағында — март башында Салауат һәм атаман И. Г. Васев етәкселегендәге баш күтәреүселәрҙең бер төркөмө Сарапул волосына килә. Был турала 1773 йылдың февралендә үҙенең помещигынан ҡасып, Сарапулда йәшәгән Ҡазан өйәҙе Нуғай юлы Алведино ауылы крәҫтиәне И. Васильев Ҡазан йәшерен комиссияһында унан һорау алғанда һөйләй [7]. Салауат отряды Сарапулға килеп еткән саҡта, Васильев башҡа крәҫтиәндәр менән бергә баш күтәреүселәргә «ҡаршылыҡ күрһәтергә» ебәрелә. Ул тәүлек буйы барған һуғышта ҡатнашҡанын әйтә, ләкин һуғыштың урынын да,

---

[1] Крестьянская война..., 314-се бит.

[2] Шунда уҡ, 318-се бит.

[3] Ҡазан өйәҙе Алведино ауылы крәҫтиәне И. Васильевтың 1774 йылдың 30 июлендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 6, л. 156. Документы ставки Е. И. Пугачева..., 255-се бит.

[4] Д. О. Гагриндың 1776 йылдың 31 июлендә Екатерина II-гә үтенесе.— ЦГВИА, ф. 20, д. 1053, л. 3; Красноуфимск казагы Қ. Д. Чигвинцевтың 1774 йылдың 6 апрелендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 84—85.

[5] ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 81—86.

[6] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 252—253-сө биттәр.

[7] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 6, л. 156.

ваҡытын да күрһәтмәй. Сарапул идаралығы конторађы канцелярисы И. Гурьевтың генерал А. И. Бибиковҡа һәм полковник А. Ф. Обернибесовҡа рапорттарынан шул асыҡлана: Гурьев отряды баш күтәреүселәр менән Сарапулға яҡын урында 21 февралдә, 3 һәм 9 марттарҙа бәрелешә. И. Васильев, унан һорау алғанда, ошо һуғыштарҙың береһе, бөтәһенән элек, марттағы һуғыш тураһында иҫкә төшөргәндер. Васильев һәм Гурьев отрядынан әсиргә алынған крәҫтиәндәрҙең бер өлөшө Өфө эргәһенә, Зарубинға ебәрелә, ә ҡалғандары, күрәһең, Салауат Юлаев отрядына ингәндер [1].

12 мартта Салауат, ике меңле ғәскәргә етәкселек итеп, казактар тарафынан «бер ниндәй ҡаршылыҡ күрмәй» яңынан Красноуфимскиға инә [2]. Язалау ғәскәрҙәре командованиеһы Салауат отрядының һәр хәрәкәтен күҙәтә, уны тар-мар итеү планын ҡора [3]. Көнгөрҙә торған подполковник А. В. Папав, Салауаттың яңынан Красноуфимскиҙы алыуын белгәс, гарнизон командаһы һәм ҡала ополчениеһы менән һис кисекмәҫтән шунда китә. 14 мартта Красноуфимск янында, ә 17 мартта Буғалыш ауылы янында баш күтәреүселәр язалаусылар менән һуғышҡа инә. Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү материалдары был ваҡиғаларҙы тик әйтеп кенә үтә. Өҫтәмә сығанаҡтарҙы өйрәнеү был һуғыштарҙың барышын тулыраҡ күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә. Баҡһаң, Салауат Юлаев үҙенең разведчиктары аша язалау командаларының хәрәкәтен күҙәтеп торған икән. Шуға ла Папав Красноуфимскиға яҡынайыу менән, ул үҙе дошманына ҡаршы сыға. Салауаттың өс меңлек отряды башҡорттарҙан, рус казактарынан, татарҙарҙан, мишәрҙәрҙән, ҡалмыҡтарҙан торған. Баш күтәреүселәр язалау ғәскәренең алғасҡы отрядына крепостан 3 саҡрымда һөжүм яһай. Уларҙың ҡыҫымы аҫтында дошмандың атлы ғәскәре үҙенең артынан килгән йәйәүлеләрҙе тапап сигенә. Папав һуғышҡа резервтағы частарҙы индерә һәм бөтә пушкаларҙан, мылтыҡтарҙан ут асырға әмер бирә. Уның иҫәбе дөрөҫ булып сыға. Салауатта бер генә пушка ла булмай, мылтыҡ та һанаулы ғына ҡала. Ләкин Салауат үҙенең атлы ғәскәрен файҙаланырға тырыша һәм, дошмандың тылына удар яһау өсөн, уны дошмандың флангыларына йүнәлтә. Салауат отрядының икенсе өлөшө уңайлы позиция һайлап

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 3, л. 204—205; Крестьянская война под предводительством Емельяна Пугачева в Удмуртии, 152—154-се биттәр.

Салауат Юлаевтың эшмәкәрлегенә арналған күп кенә хеҙмәттәрҙә 1773 йылдың декабрендә Сарапулды алғанда уның ҡатнашыуы күрһәтелә. Был раҫлау И. Васильев күрһәтеүҙәренән Салауат эше буйынса Мәскәүҙә тикшереү өсөн күсереп алынған өҙөмтәгә нигеҙләнә. Ләкин өҙөмтәлә күрһәтеүҙәрҙең бер өлөшө, И. Васильевтың Сарапулға Сыр аҙнаһы алдынан әләгеүе тураһында һөйләгән өлөшө, төшөрөп ҡалдырылған (сама менән 1774 йылдың февраль уртаһында, сөнки 1774 йылда Сыр аҙнаһы 24 февралдә башлана), тимәк, ул 1773 йылдың декабрендә Сарапулды алыуҙың шаһиты була алмай.

[2] Казак К. Д. Чигвинцевтың 1774 йылдың 6 апрелендә Пермь провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 81—86.

[3] А. В. Папавтың 1774 йылдың 1, 2, 10, 13, 15 марттарында А. И. Бибиковҡа рапорттары. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1236, л. 74, 75, 299, 300, 343, 344.

алып, уң яҡтан — тауҙа ятып, ә һул яҡтан әүендәргә һәм һарайҙарға ышыҡланып, «һирәк-һаяҡ ҡына мылтыҡтан, ә йәйәләрҙән көслө атыш» алып бара. Унан ары улар бергә йыйылалар һәм берҙәм фронт менән «Красноуфимскиҙы ышыҡлап, Папав отрядына табан хәрәкәт итәләр». Өҙлөкһөҙ ут ямғыры баш күтәреүселәрҙе сигенергә мәжбүр итә. Ваҡ төркөмдәргә бүленеп, баш күтәреүселәр сигенә башлай һәм, барыһы бергә Буғалыш ауылында ҡушылырға бойороҡ алып, төрлө юлдар буйлап тарала. Салауаттың бөтә отрядынан тик ауыр яраланған 12 кеше генә әсиргә эләгә, уларҙың туғыҙы тиҙҙән үлә. Үлтерелгәндәр араһында Салауаттың көрәштәше полк есаулы ҡалмыҡ Осман [1] да була.

Язалау командаларының эҙәрләйәсәген иҫәпкә алып, Салауат яңы һуғышҡа әҙерләнә. Мең ярымдан ашыуыраҡ кеше йыйып һәм Буғалыш ауылында нығынып, ул дошмандарының яҡынлашыуын көтә. Подполковник Папав яҙғанса, ауылдан өс саҡрымда ул баш күтәреүселәрҙең атлылар төркөмөн күрә, улар ауылдан «тәрән соҡор айырып торған тауҙарҙа ҡуйылған, тәрән соҡор һәм бейек тау аша ул яҡҡа үтеү мөмкин түгел»[2]. Шуға күрә язалау отрядтары ауылға килеп етер саҡта, баш күтәреүселәр һуғышҡа әҙер була инде. Папав командаһы урау юлдан ауылға ҡарай тәрән ҡар йырып үтә, сөнки баш күтәреүселәр Буғалыш йылғаһы аша күперҙе алдан уҡ емергән була. Ауылға килеү юлына 30 йөк бесән ҡуйыла, баш күтәреүселәр «ҙур-ҙур төркөм булып улар артына йәшеренгән һәм, шунан һөжүм итергә йыйынып, үҙҙәрен йүгәнһеҙ тота»[3]. Дошмандың йәйәүле ғәскәренә Салауат яугирҙары үҙҙәренең төп ҡоралдарынан — йәйәләрҙән ата. Тәрән ҡар (билгә тиклем) атлыларға хәрәкәт итергә ҡамасаулай. Һуғыштың уңышы, Красноуфимск эргәһендәге кеүек үк, язалау ғәскәре асҡан пушка һәм мылтыҡ уты менән хәл ителә [4]. Был һуғыштарҙа дошман пушканан 87, мылтыҡтан 2687 тапҡыр ата [5].

Папавтың ентекле рапорттарында Салауат ғәскәренә ҡаршы һуғыштарҙың ярайһы уҡ яҡшы һүрәтләнеүе, әсиргә алынған баш күтәреүселәрҙең һөйләүе, Көңгөр властарының Сенат менән яҙышҡан ҡағыҙҙары Салауаттың юғары хәрби һәләтлелектәрен тоҫмалларға мөмкинлек бирә. Был һәләтлек баш күтәреүселәрҙең ҙур төркөмдәре менән етәкселек итә белеүҙә, һуғыштар өсөн позиция һайлағанда урындың тәбиғи үҙенсәлектәрен оҫта файҙаланыуҙа, оборона һуғышының уйланылған тактикаһында күренә. Салауат отрядтарында яҡшы юлға һалынған разведка һәм ҡарауыл хеҙмә-

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 85—86; А. В. Папавтың 15 мартта А. И. Бибиковҡа рапорты. — «Крестьянская война...» китабында, 104—107-се биттәр; Пермь провинцияһы прокуроры Ф. В. Поповтың 1774 йылдың 17 һәм 21 марттарында Сенаттың генерал-прокуроры А. А. Вяземскийға донесениелары. — ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 206—207.

[2] Крестьянская война..., 107-се бит.

[3] Шунда уҡ, 109-сы бит.

[4] Ф. В. Поповтың А. А. Вяземскийға донесениеһы. — ЦГИА СССР, ф. 468, оп. 32, д. 2, л. 207; А. В. Папавтың 1774 йылдың 19 мартында секунд-майор Ф. Пушкаревҡа белдереүе. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1236, л. 329.

[5] Крестьянская война..., 106, 109-сы биттәр.

те була. Унын атлы ғәскәре, һуғыш барышында тактиканы үҙгәртеп, һибелмә сафта ла, тотош ташҡын булып ябырылғанда ла еңел хәрәкәт итә. Баш күтәреүселәр йәшерен урындарҙан (әүендәр, ҡаралтылар, бесән йөктәре һәм ышыҡ урындарҙа боҫоп) оҫта хәрәкәт итә. Салауат отряды, яҡшы ҡоралланған, хәрби әҙерлек үткән хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышта уңышҡа өлгәшә алмаһа ла, дошманды хәлдән тайҙырып, яңы һуғыштар өсөн көстәрен һаҡлап, сағыштырмаса тәртип менән сигенә. 17 марттағы һуғыштан һун Салауат үҙенең отрядын тулыландырыуҙы дауам итә, халыҡты һүҙ менән дә өгөтләй, мобилизация ла үткәрә. Папав менән һуғыштан һуң бер нисә көн үткәс, ул үҙенең йөҙ башлығы Илә тбай Илембаевҡа баш күтәреүселәрҙе йыйыу тураһында бойороҡ бирә. Иләтбай тиҙҙән үҙенең командирына баш күтәреүселәргә ҡушылған 163 кешенең исемлеген бирә[1]. Язалаусылар ҡулына төшкән һәм Ҡазан йәшерен комиссияһы ҡағыҙҙары араһында һаҡланған был документтар 1774 йылдың март аҙағында Салауаттың ҡыҙыу эшмәкәрлеген күҙ алдына баҫтырырға яҡшы уҡ хеҙмәт итә.

Пугачев хәрәкәтен баҫтырырға ебәрелгән хөкүмәт ғәскәрҙәре, урындарҙағы язалау отрядтары менән ҡушылып, 1774 йылдын яҙына восстание менән солғап алынған крайҙың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш сиктәрендә, Ҡөңгөр, Красноуфимск, Нағайбәк, Боғорослан, Быҙаулыҡ районында баш күтәреүселәр өҫтөнән етди еңеүгә өлгәшә. 22 мартта Татищев крепосы эргәһендәге һәм 1 апрелдә Һаҡмар ҡаласығы янындағы һуғыштарҙа Пугачевтың Төп көстәре еңелеүгә осрай. 24 мартта Өфө эргәһендә атаман Зарубин гәскәре тар-мар ителә. Язалау ғәскәрҙәре тарафынан ҡыҫырыҡланған баш күтәреүселәрҙең отрядтары Ырымбур губернаһынын көнсығыш райондарына сигенә.

Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе этабы восстание күтәреүселәрҙең күп кенә һуғыштарҙа уңышһыҙлыҡҡа осрауы менән тамамлана. Ләкин был, Екатерина II-нең хәрби начальниктары көткәнсә, восстаниены тиҙ генә баҫтырыуға килтермәй. 1774 йылдың апрелендә Уралда халыҡ хәрәкәте яңы көс менән тоҡанып китә.

§ 2. КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫНЫҢ ИКЕНСЕ ЭТАБЫ (1774 йылдың апреле — июль уртаһы)

Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе этабы Уралда баш күтәреүселәр хәрәкәтенең көслө күтәрелеше менән билдәләнә. 1774 йылдың апрелендә — июнендә Башҡортостан Пугачевтың Төп ғәскәре һәм уның атамандарының күп һанлы отрядтары алып барған һуғыш хәрәкәттәренең төп аренаһына әйләнә.

Пугачев, Һаҡмар ҡаласығы янында еңелгәндән һуң, үҙенең ҡалған хәрби көстәре менән Башҡортостанға йүнәлә. Унда сигенеү мөмкинлеге алдан уҡ иҫәпкә инә. Восстание етәксеһенең иң

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 254—255-се биттәр.

яҡын көрәштәштәре полковниктар М. Г. Шигаев, Т. И. Падуров, хәрби коллегия секретары М. Д. Горшков һорау алыу ваҡытында Е. И. Пугачевтың Чесноковка лагерына И. Н. Зарубинға барырға ниәтләүен һөйләгән. Был мәсьәләлә уны Кинйә Арыҫланов, Ҡәнзәфәр Усаев һәм башҡа старшиналар яҡлаған. Улар, Падуров менән Горшковтың әйтеүенә ҡарағанда, «Башҡортостандан тәүҙә 5 меңгә яҡын ҡоралланған кеше йыйырға»[1] вәғәҙә иткәндәр. Шигаевтың күрһәтеүенсә, Кинйә бик ышанып: «Теләһәң, ун көндән Төп ғәскәргә 10 мең башҡорт йыйып бирермен»[2], — тип әйткән.

Баш күтәргән Башҡортостанда Пугачевты күптән көткәндәрен Кинйә яҡшы белгән. 1773 йылдың декабрендә үк инде шундай өмөт булған, «Пугачев Ырымбурҙа һәм уның тирәһендә үҙ властын урынлаштырғас та, улар, башҡорттар ҙа, был ерҙәргә уның үҙҙәренә килеүен көтәләр»[3].

Ләкин Пугачев, Башҡортостанға юл тотоп, Өфөгә табан барыуҙан баш тартырға мәжбүр булған. Сәбәбе: Пугачев, март аҙағында Һаҡмар ҡаласығында торғанда, Зарубин ғәскәренең Өфө янында еңелеүе һәм язалау отрядтарының Зарубинды ҡулға төшөрөүҙәре тураһында хәбәр алған. Пугачев, Өфө янында хәлде йүнәтеүгә өмөттө юғалтмайынса, Өфөгә Әлибай Мырҙағоловты ебәрергә була һәм уға Башҡортостан үҙәгендә баш күтәреүселәр хәрәкәтенә етәкселек итеүҙе тапшыра. Пугачев Әлибайҙан «Өфө ҡалаһына һөжүм итеүҙе һәм мөмкин булған тиклем уны алырға тырышыуын талап иткән, был турала уға указ биргән»[4]. Ә Пугачев үҙе төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанға, Исет провинцияһына юл тотҡан. Ул Һаҡмар ҡаласығы янынан Исет провинцияһының отставкалағы старшинаһына, абруйлы башҡорт тарханы Байым Ҡедрәевкә, уның атлы отрядтарҙы Төп ғәскәрҙәргә оҙатыуҙы ойоштороуын һорап, хат ебәргән[5].

Баш күтәреүселәр Пугачев етәкселегендә 1774 йылдың апрелендә башҡорт волостары аша барғанда Вознесенск, Әүжән-Пет-

---

[1] Т. И. Падуровтың һәм М. Д. Горшковтың 1774 йылдың 2 апрелендә генерал П. И. Голицындың хәрби-поход канцелярияһында һорау алғанда биргән күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГВИА, ф. ВУА, д. 143, л. 205.

[2] М. Г. Шигаевтың 1774 йылдың 8 майында Ырымбур йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 506, л. 90 об. — 91.

[3] Ҡыҙыл крепосы коменданты П. Демидовтың 1773 йылдың 11 декабрендәге рапорты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1231, л. 366 об.

[4] Отставкалағы мишәр старшинаһы Алмаҡай Әлкәевтең 1774 йылдың ноябрендә И. А. Рейнсдорпҡа донесениеһы. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 12, л. 173—174. Әлибай Мырҙағолов, Өфөгә китеп барғанда, Алмаҡай һүҙенә ышанып, Пугачевҡа хыянат итергә булған. Үҙен ғәйепле тип танып, Өфө провинция канцелярияһына барған һәм азат ителгән. 1774 йылдың май — июнендә баш күтәреүселәр хәрәкәтенең яңы күтәрелеше осоронда, Әлибай яңынан баш күтәреүселәр сафында хеҙмәт итә, ә һуңыраҡ, 17 июлдә, баш ороп, генерал П. М. Голицынға бара.

[5] Татар Исхаҡ Әхмәтовтың 1774 йылдың 27 июлендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 2, л. 279—280. Һуңыраҡ Байым Ҡедрәевте баш күтәреүселәрҙең Хәрби коллегияһы Башҡортостандың судьяһы итеп тәғәйенләй. *Андрущенко А. И.* Күрһәтелгән әҫәр, 183-сө бит.

ровск, Белорет заводтарында туҡтала. Хәрби коллегия башҡорт һәм мишәр старшиналарына һәм заводтарға баш күтәреүселәр отрядтарын ойоштороу һәм уларҙы Төп ғәскәргә, уның хәрби көсөн арттырыу өсөн, ебәреү тураһында указдар таратҡан [1]. «Ғали йәнәптәренең корпусын комплектлау һәм киңәйтеү өсөн, ғали йәнәптәренең рус, башҡорт, сирмеш командаларына күп меңләгән кеше туплау» тураһында И. Н. Белобородовтың 9 апрелдә ошондай уҡ бойороҡ алыуы хаҡында мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған [2]. Ошондай уҡ бойороҡ менән Хәрби коллегияның Салауат Юлаевҡа ла мөрәжәғәт итеүе бик мөмкин, әммә был турала хәҙергә беҙҙә мәғлүмәттәр юҡ. Был мөрәжәғәттәргә халыҡтың нисек ҡарауы хаҡында әбей батшаға хәбәр итеп, Ф. Ф. Щербатов былай тип яҙа: «Башҡорттар төрлө ерҙәрҙә йыйылышып, күпләп Урал тауҙарына китте. Һәм, ҙур ғына төркөм булып тупланып, Пугачевҡа ҡушылды, уның ғәскәрҙәрендә былар дүрт меңдән артығыраҡты тәшкил итә»[3]. Башҡортостан халҡының восстаниены актив яҡлауы һөҙөмтәһендә Пугачев ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бында баш күтәреүселәрҙән яңы ғәскәр туплай алған: апрелдең тәүге көндәрендә уның отряды 500 кешенән торһа, 5 майҙа Магнит крепосы янында Пугачевтың күп милләттән торған һигеҙ меңлек ғәскәре була.

Урындағы күп кенә старшиналарҙың һәм уларҙан алданған йәки бойондороҡло булған ябай общинниктарҙың бер өлөшөнөң восстаниенан ситләшеүенә ҡарамаҫтан, Башҡортостандың һәр тарафында ла восстание көсәйә бара. Төп ғәскәрҙәрҙән башҡа бында Салауат Юлаев, И. Н. Белобородов, Ҡасҡын Һамаров, Ҡәнзәфәр Усаев, Ҡаранай Моратов [4] һәм башҡаларҙың отрядтары хәрәкәт итә. Ҡасҡын Һамаровтың баш күтәреүселәргә өндәмәһе был хәрәкәт башлыҡтарының ҡыйыулығы өлгөһө булып хеҙмәт итә ала. Хөкүмәт ғәскәрҙәре килеп сыҡҡанда «уға ҡаршы торорға, ә көс еткәндә — бөтәһен дә сабырға-киҫергә, ә етмәгәндә, һис тә булмаһа, атака яһарға»[5] тиелә унда.

Ауыр поход тормошо шарттарында Хәрби коллегия крайҙа баш күтәреүселәр хәрәкәтен үҫтереү өсөн бик күп эшләй. Пугачевҡа ҙур отрядтарҙың килеүе тураһында уларҙың атамандары менән Хәрби коллегияның яҙышыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар. Ләкин баш күтәреүселәр штабына бөтә отрядтар, бигерәк тә Пугачев ставкаһынан унар, йөҙәр саҡрымда торған отрядтар, менән ныҡлап идара итеү ауыр булған.

1774 йылдың яҙында һәм йәй башында Башҡортостандағы рус булмаған халыҡ араһында мөнәсәбәттәр ҡырҡыулашып китә. Был — башҡорт, мишәр, татар общиналарында социаль тигеҙһеҙлектең һәм дошманлыҡтың сағылышы булып тора. Башҡортостан

---

[1] И. А. Твороговтың 1774 йылдың 27 октябрендә Яйыҡ айырым йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — «Пугачевщина» китабында, 2-се том, 145-се бит.
[2] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 290-сы бит.
[3] Крестьянская война..., 151-се бит.
[4] Шунда уҡ, 146, 152, 156—157, 160—168, 379—381-се биттәр.
[5] Шунда уҡ, 153-сө бит.

территорияһында баш күтәреүселәр хәрәкәте аҡрынлап иҙелгән ярлы общинниктар массаһы менән восстаниены баҫтырыуҙа актив ҡатнашҡан старшиналарҙың юғары ҡатламы араһындағы граждандар һуғышы төҫөн ала. Ҡайһы бер старшиналар үҙҙәренең отрядтары менән язалау командаларында хеҙмәт итә башлай. Улар араһында түбәндәге башҡорт старшиналары була: Вәлиша Шәрипов, Шәрип Ҡейеков, Зөбәир Йосопов, Йосоп Нәзиров, старшина ярҙамсылары һәм йөҙ башлыҡтары: Монасип Йосопов, Ишғәле Яҡупов, Шәйфулла Хасбулатов, мишәр старшиналары Солтанморат Янышев, Сөләймән Мостафин, Ишмөхәммәт Сөләймәнов, Хәсән Әбдрәфиев, старшина ярҙамсылары Бәхтиәр Янышев һәм Бәшир Тупиев; улар һуңынан быны өсөн Сенаттың алтын һәм көмөш миҙалдары менән наградлана [1].

Башҡа старшиналар үҙ белдектәре менән язалау операциялары үткәргән. Башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев командаһы В. И. Торновтың башҡорт, рус һәм татарҙарҙан торған баш күтәреүселәр отрядын тар-мар иткән. Пугачев полковнигы татар Мәсәғүт Ғүмәровты Миндәй Тупиев командаһы [2] хыянатсыл рәүештә ҡулға эләктерә. Ҡаранай Моратов отрядын алты башҡорт старшинаһының йыйылма командаһы эҙәрлекләгән [3]. Күптәр үҙ ирке менән урындағы властарға һәм язалау отрядтары командирҙарына хәбәр биреп һәм баш күтәреүселәрҙең ҡайһы йүнәлештә хәрәкәт итеүе, халыҡтың кәйефе тураһында еткереп торған, Башҡортостан буйлап восстаниенан баш тартырға өгөтләп йөрөгән. Был эштә башҡорт старшинаһы Ибраһим Мерәҫов, мишәр старшиналары Миндәй Тупиев, Әбләй Смаилов, башҡорт тарханы Сыуашбай Әүәзев ныҡ тырышлыҡ күрһәткән. Уларҙың бик күп рапорттары һәм ошаҡтары Өфө провинция канцелярияһы [4] документтары араһында һаҡланып ҡалған; бындай эштәрҙә башҡорт муллаһы Әмирхан Абзаев [5] үҙенең тырышлығы өсөн Сенаттың алтын миҙалы менән наградланған. Силәбе сауҙагәре татар Яҡуп Аҡбеев [6] айырыуса көс һалған. Ә генерал И. А. Деколонг, Хәрби коллегия алдында аҡса сығымдары тураһында отчет биреп, шымсы башҡорттарға һәм мишәрҙәргә, шул иҫәптән ғәскәрҙәрҙә булған мулла Әбделгафар Мансуровҡа, «тоғро хеҙмәттәре һәм башҡорттарҙың ҡайҙа тупланғанын күрһәткәндәре өсөн аҡса түләнде [7], тип белдерә.

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 516, ч. 3, л. 156, 159.

[2] Крестьянская война..., 127—128, 132, 220-се биттәр.

[3] Әлибай Мырҙағолов, Әбдесәләм Мәмәҙилин һәм башҡаларҙың 1774 йылдың 5 июненән һуңлатмай полковник Н. Н. Ҡожинға рапорты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 85.

[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 26, 209, 226, 232, 252, 253, 265, 266 һ. б. Крестьянская война..., 152—153, 156-сы биттәр.

[5] Әмирхан Абзаевтың 1775 йылдың июнендә Г. А. Потемкинға үтенес ҡағыҙы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 516, ч. 1, л. 20—21.

[6] Яҡуп Аҡбеевтең 1784 йылда наместниклыҡ идараһына үтенес ҡағыҙы.— ЦГА БАССР, ф. 384, оп. 1, л. 162—163; ЦГАДА, ф. 6, д. 516, ч. 3, л. 156.

[7] ЦГВИА, ф. 20, д. 1050, л. 1—4.

Ләкин, тип таный язалаусылар, «халыҡ араһында яҡшылар бер нисә, ә ямандар күберәк»[1]. Был «ямандар» «яҡшылар»ҙы (властарға тоғро старшиналар һәм общиналарҙағы хәлле юғары ҡатлам үҙҙәрен ошо «яҡшыларға» индерә торған булған) аяуһыҙ язалаған. Мәҫәлән, Нуғай һәм Ҡазан юлдарының 13 башҡорт һәм мишәр старшинаһы 1774 йылдың апрелендә генерал А. И. Бибиковҡа: пугачевсылар «бөтә ауылдарҙа бай кешеләрҙе таланылар... һәм буйһоноуҙағы кешеләрҙе... бик нык хурланылар һәм бөлгөнлөккә төшөрҙөләр»[2] тип ялыу иткән. Баш күтәреүселәр хөкүмәттең, буйһонорға өгөтләп һәм Пугачевты тотторған өсөн ун мең аҡса вәғәҙә итеп, ауылдан ауылға йөрөүсе агенттарын юҡ иткән. Тотолған чиновниктарҙы һәм курьерҙарҙы «үлтергәнсе туҡмағандар, ә ҡайһы берҙәрен аҫҡандар» [3]. Баш күтәреүселәр крепостной дәүләт иҙеүен кәүҙәләндереүсе рус чиновниктарын һәм помещиктарын ғына түгел, шулай уҡ халыҡты туранан-тура иҙеүсе башҡорт, мишәр һәм татар байҙарын да язалағандар.

1774 йылдың апрелендә Салауат Юлаев Себер юлының Әй йылғаһына яҡын башҡорт волостарында була, ул бында үҙ отрядына яңы көс йыя [4]. Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе осоронда уның эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәр шаҡтай күп һаҡланып ҡалған. Ул мәғлүмәттәр Салауат өҫтөнән тикшереү һәм суд документтарында ла бар. Салауат Мәскәүҙә унан һорау алыу ваҡытындағы яуаптарында тик бик билдәле булған өс факт тураһында ғына әйтә: Пугачев ғәскәрҙәре «уларҙың ауылдарына» килеү менән, ул, Салауат, «хеҙмәткә» алынған; Пугачев приказы буйынса Я. Б. Твердышевтың Эҫем заводын яндырған; Усаны баҫып алыуҙа ҡатнашҡан [5]. Салауаттың хәрби тормошо картинаһы уның Өфөлә биргән күрһәтеүҙәрендәге бик мөһим мәғлүмәттәр менән тулылана [6]. Был дәлилдәрҙе тикшереү эшенең башҡа документтарҙы, шулай уҡ төҙәтеүсе сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәрҙе тотош өйрәнеү Салауат биографияһының был өлөшөн тулыраҡ күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә.

Был осорҙа Салауат Юлаевтың иң яҡын һуғышсан иптәше Пугачев атаманы И. Н. Белобородов [7] була. Салауат үҙенең күрһәтеүҙәрендә фәҡәт бер тапҡыр ғына Белобородовты телгә ала: уның дезертирҙарҙы язалауын әйтә [8] Белобородов иһә Салауат менән

---

[1] Миндәй Тупиев һәм Әбләй Смаиловтың 1774 йылдың 22 майында Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 432—433.

[2] Крестьянская война..., 127—128-се биттәр.

[3] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 19 апрелендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 7, л. 399.

[4] А. В. Папавтың 1774 йылдың 6 һәм 8 апрелдәрендә генерал А. И. Бибиковҡа рапорты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1237, л. 125, 127.

[5] Крестьянская война..., 302-се бит.

[6] Шунда уҡ, 318—319, 329-сы биттәр.

[7] И. Н. Белобородов тураһында ентеклерәк мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *Мартынов М. Н.* Пугачевский атаман Иван Белобородов. Пермь, 1958; *Лимонов Ю. А.* Иван Наумович Белобородов; *Лимонов Ю. А., Мавродин В. В., Панеях В. М.* «Пугачев и пугачевцы» китабында, Л., 1974, 74—111-се биттәр.

[8] Крестьянская война..., 329-сы бит.

берлектәге һуғышсан эштәре тураһында шаҡтай ентекле һөйләй. Салауат эше буйынса Мәскәүҙә тикшереү өсөн Ҡазан йәшерен комиссияһы тарафынан әсир төшкән баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре протоколдарынан алынған 2-се һанлы күсермәлә Белобородов күрһәтеүҙәренән өҙөк килтерелгән. Ул күсермәлә Белобородов менән Салауат отрядтарының Пугачев ғәскәренә ҡушылыуы тураһында, И. И. Михельсон корпусына һәм Көңгөр гарнизоны командаһына ҡаршы һуғыштар, баш күтәреүселәрҙең Уса биҫтәһен [1] алыуы хаҡында әйтелә. Ләкин улар икеһе лә, Салауат та, Белобородов та, үҙҙәренең отрядтары Пугачев ғәскәренә ҡушылғандан күп элек, 1774 йылдың март аҙағында Һатҡы заводынан алыҫ түгел Ҡыҙылбай ауылында осрашҡандарын әйтмәгән [2]. Улар, бында үҙ отрядтарына яңы көстәр өҫтәп, Красноуфимскиға һәм Көңгөр өйәҙенә китергә тип ҡарар иткән булһа кәрәк. Был төрлө сығанаҡтар менән раҫлана. С. Я. Кузнецов, Уса биҫтәһендәге Пугачев атаманы, 10 майҙа Рождественский заводының баш күтәргән крәҫтиәндәренә Салауат менән Белобородовтан, имеш, Пугачев «Көңгөр ҡалаһына ун биш меңле армия менән килә икән» тигән хәбәр бар, тип яҙған. Хат аҙағында, күрәһең, яңы хәбәрҙәр алыу менән бәйләнгән өҫтәмә яҙыу бар. Унда былай тип әйтелгән: «Атаҡайыбыҙ указ менән Белобородов полковниктың ике меңле армия менән Сыбаркүлгә барыуын талап итә. Ә ҡалған армияны Салауатҡа тапшырырға ҡушылған; шулай итеп, Көңгөр эргәһендә уның ун бер меңле армияһы буласаҡ»[3]. Өйәҙҙә Салауат Юлаев тураһындағы бөтә хәбәрҙәрҙе йыйған подполковник А. В. Папав 1774 йылдың 8 апрелендә генерал А. И. Бибиковҡа биргән рапортында, Салауат менән Белобородов Красноуфимскиға табан бара, тип белдерә, ә майҙа, язалау ғәскәренең яңы башлығы генерал Ф. Ф. Щербатовты информация менән тәьмин итеп, Салауат, Иван Васев һәм татар Иман Ислүков етәкселегендәге биш мең кешенән торған отряд ҡаҙаҡтарҙың биш меңле отрядын көтә, унан һуң Көңгөргә һөжүм итергә йыйына, ә Красноуфимскиҙа «бындағы казактарҙың үҙҙәренең ҡарауылдары бар, һәм улар башҡорт Салауат килеп көс өҫтәр тигән өмөт менән йәшәй, тип ышандыра»[4]. Белобородов, үҙенән һорау алғанда, ул саҡта «тупланып, Көңгөр ҡалаһы янына барырға булғайным да», ләкин Пугачевтың Төп ғәскәр менән ҡушылырға тигән бойороғон алғандан һуң, был походтан баш торттым [5] тип әйткән. Ләкин йылғалар ташыу сәбәпле, Белобородов Пугачевҡа май башында ғына барып етә. Салауат менән Белобо-

[1] Крестьянская война..., 303-сө бит.

[2] Полковник В. Ф. Бибиковтың 1774 йылдың 4 апрелендә генерал А. И. Бибиковҡа һәм 1774 йылдың 29 апрелендә генерал И. А. Деколонгка рапорттары.— ЦГВИА, ф. 20, д. 1237, л. 133; ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 9, л. 21; Полковник А. В. Папавтың 1774 йылдың 8 апрелендә А. И. Бибиковҡа рапорты. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1237, л. 127.

[3] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 188-се бит.

[4] ЦГВИА, ф. 20, д. 1237, л. 127; д. 1239, л. 55, 185.

[5] Пугачевщина, 2-се том, 329-сы бит. И. Н. Белобородов отряды Магнит крепосына 7 майҙа, уны Пугачев штурм менән алырҙан бер көн элек, килгән.

родов, Көңгөр өйәҙендә һәм Башҡортостанда байтаҡ хәрби көс туплап, бөтә апрель буйына Өфө, Көңгөр һәм Екатеринбург администрацияһының ҡотон алып торған. Шулай уҡ подполковник Михельсон да 24 апрелдә Өфөнән сыҡҡанда, үҙендәге мәғлүмәттәр буйынса Эҫем һәм Һатҡы заводтары тирәһендә булырға тейешле Салауат менән Белобородовтың отрядтарына Пугачев ғәскәренә ҡушылырға юл ҡуймаҫ өсөн, уларҙы тар-мар итеүҙе үҙенең беренсе сираттағы бурысы итеп һанаған [1].

Тимәк, билдәле булыуынса, Белобородовҡа Пугачев ғәскәренең Төп көстәрен нығытырға барырға ҡушылған. Ә Салауаттың Пугачевтан ниндәй задание алыуы тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Салауатҡа Михельсон корпусының хәрәкәт итеүенә ҡаршылыҡ күрһәтеү йөкләтелгәндер, тип уйларға мөмкин. Шуға күрә Салауат апрелдә — майҙа Пугачевҡа ҡушылырға ҡабаланмаған, ә язалаусыларҙың һүҙенә ҡарағанда, «ал-ял белмәгән», ныҡышмалы рәүештә көс туплау менән булашҡан. Уның отрядына башҡорттар, рустарҙан завод һәм дәүләт крәҫтиәндәре, мишәрҙәр, татарҙар, сыуаштар, мариҙар ағылған. «Урман һуҡмаҡтары менән, дошман постарын ситләтеп үтеп, Көңгөр өйәҙенән атаман Иван Васев отряды менән Салауатҡа ҡушылырға килгән [2]. Салауат туплаған отрядтағы кешеләр һаны тураһында төрлө мәғлүмәттәр бар. Властар һәм язалау командалары башлыҡтары, Салауаттың ҡайҙа, күпме көс менән тороуы тураһында яҡшы хәбәрҙар булмағанлыҡтан, хәүеф-хәтәр көтөп, тынысһыҙ йәшәгән. Был йыш ҡына төрлө имеш-мимеш хәбәрҙәр тыуҙырған. Мәҫәлән, полковник В. Ф. Бибиков генерал И. А. Деколонгтан Екатеринбургты һаҡлау өсөн ғәскәрҙәр ебәреүҙе талап иткән һәм Салауаттың инде 9 меңлек отряды бар тип белдергән [3]. Һыу ныҡ ташыу сәбәпле, ай аҙағына тиклем Өфө менән Себер юлы волостары араһында бәйләнеш өҙөлгәнлектән, Михельсон, үҙендә апрель башына тиклем генә булған мәғлүмәттәргә таянып, генерал Щербатовҡа Салауаттың отряды өс мең кешенән тора, тип хәбәр иткән [4]. Салауат ғәскәрендә 11 мең кеше булыу тураһында С. Я. Кузнецов хатынан үрҙә килтерелгән һан, һис шикһеҙ, арттырып күрһәтелгән. Ысынында иһә ул ваҡытта Салауат отрядында 4 мең самаһы кеше иҫәпләнгән [5].

И. Н. Белобородов Магнит крепосына киткәс, Салауат Юлаев Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш райондарындағы восстаниеға етәкселекте үҙ өҫтөнә ала. Был хәл унан күп кенә хәрби мәсьәләләрҙе үҙ аллы хәл итеүҙе талап итә. Ул мәсьәләләрҙең иң мөһиме, юғарыла әйтелгәненсә, Михельсондың язалау операцияларына ҡаршылыҡ күрһәтеү була. Салауат Михельсондың көслө һәм тәжрибәле дошман икәнлеген белә һәм шуға күрә уның

---

[1] Крестьянская война..., 131, 135, 136-сы биттәр.
[2] В. Ф. Бибиковтың 1774 йылдың 5 майында И. А. Деколонгка рапорты.— ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 9, л. 113.
[3] Шунда уҡ.
[4] Крестьянская война..., 135-се бит.
[5] Һалдат И. Логиновтың 1774 йылдың 8 майында Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — Шунда уҡ, д. 592, л. 178.

менән осрашыуға алдан әҙерлек күрә. Салауат үҙенең отрядының бер өлөшө менән дошманды Эҫем заводы янында көтә, сөнки Михельсон яҙғы юл өҙөклөгөндә унда Өфөнән ике аҙна буйына бара. Салауат, яҙалау командаһының яҡынлашыуын белеп, уға ҡаршы ҙур булмаған атлылар отряды ебәрә. Михельсон иһә үҙенең гусарҙарҙан, казактарҙан, «тоғро» башҡорт, мишәр командаһынан торған барлыҡ атлы ғәскәрен сығара. 7 майҙа заводтан 17 саҡрым ерҙә беренсе бәрелеш була [1]. Был, бәлки, һәр ике яҡтан көс һынашып ҡарау ғына булғандыр. Нисек кенә булмаһын, Салауат, ҡаты алыштан баш тартып, бөтә атлы ғәскәренә Ерал ауылы эргәһендәге үҙенең төп лагерына китергә бойороҡ бирә.

8 майҙа Үсҡанды (Скандия) йылғаһы янындағы баҫыуҙа, Эҫем заводынан бер нисә саҡрым ерҙә, икенсе алыш башлана. Михельсон, Ете йыллыҡ (1756—1763) һәм рус-төрөк (1768—1774) һуғыштарында [2] яҡшы тәжрибә алған хәрби начальник булараҡ, Салауат яугирҙарының батырлығына һәм сыҙамлығына ғәжәпләнмәй булдыра алмай. Михельсон, баш күтәреүселәрҙең отрядтарына хәрби эштә аң-тоң белмәгән кешеләр «өйөрө» һәм «төркөмө», һуғышсан сафҡа теҙелгән регуляр ғәскәрҙәрҙең беренсе ударынан шунда уҡ тырым-тыраҡай ҡасҡан кешеләр тип ҡарарға ғәҙәтләнгән булған. Бында иһә ул «көтөлмәгән ҡаршылыҡҡа» осрай; баш күтәреүселәр, «беҙҙең атакаға иғтибар ҙа итмәй, туп-тура беҙгә табан киләләр, ләкин, алла ярҙамы менән, нисек кенә ҡаршылыҡ күрһәтмәһендәр», шулай ҙа сигенергә мәжбүр булдылар [3], тип генерал Щербатовҡа рапорт бирә. Был рапорты менән Михельсон, уға бында ҡурҡмаҫ һәм оҫта хәрби начальник менән, яҡшы ҡоралланған һәм өйрәтелгән дошманға ҡаршы һуғыш башларға баҙнат иткән Салауат менән, эш итергә тура килеүен таныған.

Был һуғыштың барышы һәм һөҙөмтәләре тураһында беҙ Михельсондың донесениеларынан ғына беләбеҙ. Ләкин ул үҙ уңыштарын арттырып күрһәтергә ратҡан хәрби начальниктарҙың береһе була. Михельсон донесениеларында дөрөҫлөктө боҙоп күрһәтеүҙең бер генә миҫалын килтерәйек. Ул үҙенең рапорттарында генерал Щербатовты Белобородов отрядын мотлаҡ тар-мар итәсәгенә һәм Пугачев ғәскәре менән ҡушылырға уға юл ҡуймаясағына күп тапҡырҙар ышандыра. Ә инде быны булдыра алмағас, үҙен аҡларға сәбәп эҙләй башлай: йәнәһе, Белобородов, 8 майҙа һуғышта «Салауаттың тар-мар ителеүен ишеткәс, үҙ пушкаларын ташлап ҡасҡан»[4], ти. Ысынында иһә Белобородов ул көндө инде Магнит крепосы янында Пугачевта була һәм Михельсон алдында ҡурҡып ҡалыу тураһында бер ниндәй ҙә һүҙ булыуы мөмкин түгел. Михельсондың үҙ уңыштарын шулай шапыртып күрһәтеүе уның үҙ начальниктарының юғарыға бирелгән донесениеларында ғәмһеҙ

---

[1] И. И. Михельсондың 1774 йылдың 8 майында Ф. Ф. Щербатовҡа рапорты. — Шунда уҡ, 139—140-сы биттәр.

[2] ЦГВИА, ф. ВУА, д. 153, л. 270.

[3] И. И. Михельсондың 1774 йылдың 8 майында Ф. Ф. Щербатовҡа рапорты. — «Крестьянская война...» китабында, 140-сы бит.

[4] И. И. Михельсондың 1774 йылдың 13 майында Ф. Ф. Щербатовҡа рапорты. — Шунда уҡ, 146-се бит.

файҙаланылған, шулай итеп хәрби коллегияла ла, Екатерина II-нең үҙендә лә яңылыш фекер тыуҙырған. Щербатовтың өлгөр һәм оҫта хәрби начальник булып дан алғыһы килгән. Бына ул 20 майҙа әбей батшаға яҙған реляцияһында Михельсон рапортының йөкмәткеһен шулай бирә, йәнәһе, Салауат отряды 8 майҙа бөтөнләй тар-мар ителгән һәм юҡ ителгән. Әгәр Михельсон, 300 баш күтәреүсе үлтерелде, ә иҫән ҡалғандарҙан «һаҙлыҡҡа сабып киткән бер генә кеше лә ҡотола алманы, башҡалары, бөтә яланға һибелеп, ете саҡрымдан артығыраҡҡа эҙәрләп барылды» тип яҙһа, Щербатов иһә былай ти: «Уларҙың күп өлөшө һаҙлыҡҡа ҡыуып индерелде һәм шунда йән бирҙе»[1]. Ләкин Михельсон күрәләтә шулай ялғанларға батырсылыҡ итмәгән. Бынан һуңғы ваҡиғалар шуны күрһәтә: Салауат отряды, уңышһыҙлыҡҡа осраһа ла, үҙенең һуғышҡа һәләтлелеген һаҡлап, сағыштырмаса тәртип менән сигенгән. Шул уҡ ваҡытта баш күтәреүселәр Михельсондың командаһын шаҡтай теткеләй һәм уны артабанғы хәрәкәттәрендә аптыраашта ҡалдырып китә. «Мин хәҙер һуғыш барған ерҙә туҡтап ҡалдым. Ҡайҙа барырға тейешмен — әлегә әйтә алмайым»,— тип яҙа Михельсон Щербатовҡа[2]. Шуны әйтеп үтеү ҙә мөһим, Салауат яугирҙарының язалаусыларға ҡаршы һуғышы, башҡа хәрби начальниктар менән берләшеп, Пугачев ғәскәрен ҡамап алырға һәм тар-мар итергә ынтылған Михельсон ғәскәрҙәренең хәрәкәтен тотоп тора.

Салауат, Михельсонды Һатҡы заводына үткәреп, үҙе Эҫем заводына кире килә. 1775 йылдың 5 майында Өфөлә унан һорау алған саҡта, шул көндәрҙәге хәлдәр тураһында ул былай тип һөйләй: «Үткән 1774 йылдың май айында, ... Пугачев минең атайым исеменә, минең исемгә һәм башҡалар исеменә беҙгә бөтә заводтарҙы яндырырға... тип яҙма фарман ебәрҙе. Шуға беҙ башҡа начальниктар менән бергә, меңдән артыҡ кеше йыйылышып, Эҫем заводын яндырҙыҡ та»[3]. Шундай уҡ мәғлүмәттәр Юлай Аҙналин күрһәтеүҙәрендә лә бар[4]. Эҫем заводы приказчигы А. Исаевтың Өфө провинция канцелярияһындағы белдереүендә ентеклерәк мәғлүмәттәр бар. Унда былай тип әйтелгән: баш күтәреүселәр Эҫем заводына ике төркөм булып килде. Уларҙың береһе Һарт волосы старшинаһы Өмәтәй Уразымбәтов командаһы аҫтында Абдрахман (Семибаш) ауылынан, ә икенсеһе, Салауат һәм Юлай Аҙналин етәкселегендә заводтан 30 саҡрымдағы Шығанай ауылынан килә[5]. Баш күтәреүселәр 23 майҙа завод ҡаралтыларын һәм торлаҡ йорттарын ҡыйрата, ә унда йәшәүселәрҙе заводтан Көңгөр өйәҙенә ки-

---

[1] Крестьянская война..., 140, 150-се биттәр.

[2] Шунда уҡ, 141-се бит.

[3] Шунда уҡ, 318-се бит.

[4] Шунда уҡ, 317-се бит. Юлай Аҙналин отрядтың һанын 1500 кеше тип иҫәпләй. Раҡай Ғәлиев күрһәтеүҙәренең күсермәһендә 3000 кешенән торған отряд тураһында һүҙ бара. — Шунда уҡ, 311-се бит. Е. И. Пугачевтың Салауат Юлаевҡа һәм Юлай Аҙналинға 1774 йылдың 2 майындағы указдарына реконструкция тураһында ҡарағыҙ: *Овчинников Р. В.* «Манифесты и указы Е. И. Пугачева (источниковедческое исследование)» китабында, 219—220-се биттәр.

[5] ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 435.

тергә мәжбүр итә. Язалау ғәскәрҙәре киң фронт булып һөжүм иткән шарттарҙа Эҫем заводы, башҡа Урал заводтары кеүек үк, баш күтәреүселәр өсөн терәк пункт булып хеҙмәт итә алмай. Баш күтәреүселәр заводтың аҙыҡ-түлек запастарын, аҡсаларын һәм ҡоралдарын үҙҙәре менән алып китә. Завод язалау отрядтары өсөн торор төйәк булмаһын тип, уны юҡ итергә булалар [1].

Салауат, Пугачевтың бойороҡтарын эҙмә-эҙлекле үтәй барып, көсөнән килгәнсә, Михельсон корпусының юлына арҡыры төшә. Салауатта баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәренә яңы көстәр өҫтәү тураһында Хәрби коллегияның указы булғандыр, тип уйларға мөмкин. Баш күтәреүсе Василий Ҡаташевтың күрһәтеүе шундай фекер тыуҙыра. 1774 йылдың ғинуарында, Красноуфимскиҙа саҡта уҡ әле, Василий «казак» булып киткән һәм Салауат отрядтарының Красноуфимск һәм Көңгөр янындағы бөтә һуғыштарында ҡатнашҡан. Аҙаҡ ул ошо отряд менән бергә Башҡортостанға киткән һәм унда «полковник Соловатта өс ай самаһы хеҙмәт иткән». Ә артабан Ҡаташев Пугачев ғәскәренең генерал И. А. Деколонг корпусы менән (21 майҙа) Троицк крепосы эргәһендәге һуғышында үҙенең ҡатнашыуын иҫкә ала. Ҡаташев Пугачевтың Салауат менән осрашҡан сағында ла (2 июндә) була. Шул ваҡыт Пугачев «полковник Салауатты уның бөтә толпаһы менән... алды һәм Уса ҡалаһы яғына киттеләр»[2]. В. Ҡаташевтың Төп ғәскәргә Салауаттың 1774 йылдың май уртаһында Пугачевҡа ебәргән отрядтарының береһе составында барып инеүе бик ихтимал.

Салауат Эҫем заводынан Ҡатау-Иван заводына бара, ләкин уны яндырып өлгөрә алмай. Күрәһең, бында ул Төп ғәскәргә ярҙамға барырға бойороҡ алғандыр. Пугачев Ырымбур губернаһының көнсығышында күп кенә ҙур уңыштарҙан һуң (Магнит, Ҡарағай, Петропавловск, Степной, Троицк крепостарын алыу) Троицк крепосы эргәһендә генерал Деколонг ғәскәре менән булған һуғышта, ә икенсе көндө Кундравин биҫтәһе янында Михельсон корпусы менән булған һуғышта ҙур юғалтыуҙарға осрай. Пугачев, уны эҙәрләп барыусы язалау командаһынан айырылып, үҙенең ҡалған ғәскәрҙәре менән башҡорт ауылдары аша Златоусҡа табан, унан Һатҡы заводтарына табан китә. Михельсон иһә Эҫем һәм Һатҡы заводтары араһында Пугачев менән Салауатты эҙләп йөрөй. Салауат берсә юҡ булып китә, берсә яңынан килеп сығып, дошманына ныҡ ҡына ударҙар яһай. Баш күтәреүселәр язалау отрядтарына аҫтыртын һөжүм итә, почтаны ҡулға эләктерә, аҙыҡ-түлек һәм мал аҙығы әҙерләүгә ҡамасаулай [3].

Салауат май аҙағында Михельсонға яңы һуғыш асырға була. Бының өсөн ул Әй йылғаһы пристанен, Эҫем заводынан 30 саҡ-

---

[1] Был турала ентеклерәк II главаның 4-се параграфынан ҡарағыҙ. Я. Б. Твердышев янғындан килгән зыянды 162 624 һум итеп билдәләгән. — *Кашинцев Д.* История металлургии Урала. М.; Л., 1939, 1-се том, 264—265-се биттәр.

[2] В. Ҡаташевтың 1774 йылдың августында Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 10, л. 58—59, 65—66.

[3] Magazin für die neue Historie und Geographie. Halle, 1784, № 18, s. 28—33.

рымдар алыҫлыҡтағы урынды, һайлап ала. 30 майҙа унда Михельсон килеп етә. Баш күтәреүселәр паромдарҙы алдан юҡ итеп, йылғаның икенсе яғында нығына. Михельсон шунда уҡ Әй йылғаһын аша сығырға була. Икенсе көндө ул кисеү эҙләп таба ла, көслө ут аҫтына ышыҡланып, йылғаны аша сыға башлай. Салауат «миңә бик нык ҡамасауларға тырышты... тауҙарҙа һәм соҡорҙарҙа йәшеренеп, унан көслө ут асты», тип хәбәр итә Михельсон Щербатовҡа [1]. Салауат отряды йылға ярында барған ҡыҙыу алышта ҡыйыу һәм батыр хәрәкәт итә, ләкин дошманға йылғаны кисергә ҡамасаулай алмай. 31 майҙа булған һуғышта Салауаттың бөтә отряды ла ҡатнашмай (быға Михельсон бик ғәжәпләнгән: «Маҡталған ике мең урынына һигеҙ йөҙҙән дә артыҡ түгел»)[2], уның төп көстәре Пугачевты көтә. 2 июндә Салауат восстание башлығына өс мең атлы ғәскәр алып килә. Салауаттың, йәнәһе, Пугачевҡа көслөк менән «хеҙмәткә алындым»[3], тип раҫлауына ҡарамаҫтан, Пугачев та, атаман Белобородов та, Әүжән-Петров заводы крәҫтиәндәре Н. С. Арзамасцев менән С. Федоров та, башҡорт Раҡай Ғәлиев тә бер күңелдән Салауат Пугачевҡа үҙ ихтыяры менән килде, тип күрһәтә [4]. Салауаттың һүҙенә ҡарағанда ул ваҡытта Пугачев ғәскәрендә 900-гә тиклем кеше иҫәпләнгән [5]. Шундай ҙур өҫтәлмә көстө, өс меңдән торған башҡорт атлыларын, күреп, Пугачевтың нисек ҡәнәғәт булыуын күҙ алдына килтерергә мөмкин. Пугачев менән Салауат Юлаевтың башҡорт ерендә тап ҡайҙа һәм ҡасан осрашыуҙары тураһында сығанаҡтарҙа асыҡ мәғлүмәттәр юҡ. Был, Пугачевтың иҫәндәгесә, Кундравин биҫтәһе янында булған һуғыштан һуң (22 майҙа) бер нисә көн үткәс, башҡорт ауылында була. Завод крәҫтиәндәре Н. С. Арзамасцев менән С. Федоров, был осрашыу Пугачев Һатҡы заводынан Әй йылғаһына сыҡҡандан һуң булды, тип әйткән. Мәғлүм булыуынса, Пугачев Һатҡы заводын 2 июндә яндырған. Михельсон рапорттарынан шул билдәле: 3 июндә Ҡыйғы ауылы янында булған һуғышта Пугачев та, Салауат та ҡатнаша [6]. Бынан шундай һығымта яһарға мөмкин: уларҙың осрашыуы 2 июндә кис менән Әй йылғаһында, Ҡыйғы ауылынан алыҫ түгел, Һатҡы заводынан 54 саҡрым ерҙә, була.

Салауат отрядына Төп ғәскәр менән Михельсон корпусына ҡаршы ике тапҡыр һуғышырға тура килә. Тикшереү барғанда, Белобородовтың һөйләгәндәренән күсермәләрҙе Салауатҡа күрһәтәләр; унда Пугачевтың, Салауаттың һәм Белобородовтың Михель-

---

[1] Крестьянская война..., 168-се бит.

[2] Шунда уҡ.

[3] Шунда уҡ, 302-се бит.

[4] 1774—1775 йылдарҙа Мәскәүҙә Пугачевтан һорау алыу. 211-се бит; Пугачевщина, 2-се том, 331-се бит; — ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 8, л. 282. Крестьянская война..., 311-се бит.

[5] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 256-сы бит. Документта С. Х. Алишевтың хәҙерге заман тәржемәһендә 9 мең кеше һанала. — Советские архивы, 1973, № 5, 66—67-се биттәр.

[6] Допрос Е. Пугачева в Москве в 1774—1775 гг., 211-се бит; ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 8, л. 282. Крестьянская война..., 171—173-сө биттәр.

сонға ҡаршы өс тапҡыр һуғышы тураһында әйтелә, Салауат өс алыштың икеһендә үҙенең ҡатнашыуын раҫлай. Ул 1774 йылдың 3 һәм 5 июндәрендә булған бәрелештәрҙе күҙ уңында тотҡандыр, күрәһең[1]. Был ике һуғыштың барышын, дөйөм алғанда, Михельсондың донесениеларынан, шулай уҡ баш күтәреүселәрҙең тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәренән белергә мөмкин.

3 июндә иртән баш күтәреүселәр Ҡыйғы ауылынан 3 саҡрым алыҫлыҡта торған Михельсон отрядына ябырыла. Ваҡиғаларҙың барышына ҡарағанда, Пугачевтың алдан ныҡлап уйланылған планы була. Тәүҙә һуғыш майҙанына Салауат етәкселегендә 1000 һыбайлы отряд сыға; ул дошман атлы ғәскәренең төп өлөшөнөң иғтибарын үҙенә тартыуға ирешә. Михельсон Салауатҡа ҡаршы йәйәүле ғәскәрен ебәрә. Шул мәлдә тылда ҡалған Михельсон обозы һәм уны һаҡлаусы команда Пугачев үҙе етәкселек иткән баш күтәреүселәр тарафынан ҡамап алына. Михельсон, быны белгәс, сигенеүсе Салауатты эҙәрләүҙән туҡтап, обозды ҡотҡарыу өсөн, корпустың төп көстәрен үҙенең тылына бороп ебәрә. Һуғыш өс сәғәт самаһына һуҙыла, «мылтыҡ һәм пушкаларҙан көслө атыш бара». Михельсон баш күтәреүселәр «3 меңгә яҡын кеше булып, өс йөҙ рустан башҡаһы бөтәһе лә башҡорттар ине» тип иҫәпләй[2]. Пугачев ғәскәре сигенә, ләкин ике көн үткәс, тәүге һуғыш майҙанынан 15 саҡрымға артҡа киткән Михельсонға яңынан һөжүм итә. Пугачевсылар Әй йылғаһын аша сыға, һәм, тауҙарҙағы ҡулдарға урынлашып, шунда засада ойоштора. Улар бынан «үҙҙәренең бөтә көстәре менән төрлө яҡтан килеп сығып... Пугачев менән бергә миңә һөжүм иттеләр», — тип хәбәр итә Михельсон генерал Щербатовҡа[3]. Алыш «байтаҡ ваҡыт бара», ләкин баш күтәреүселәр Михельсонды еңеүгә ирешә алмай[4]. Пугачев, Михельсондың донесениеларына ҡарамаҫтан, һорау алғанда, был һуғыштар барышында Михельсонды «еңә алманым, ул да «шулай уҡ мине ҡыйрата алманы» ти һәм улар «айырылыша»[5]. Ә Михельсон, элеккесә, баш күтәреүселәрҙе еңдем, тип Щербатовҡа хәбәр итә һәм Салауат Юлаевтың яраланыуы тураһында ялған мәғлүмәттәр бирә[6].

1774 йылдың май һәм июнь айҙарында булған һуғыш барышында Михельсон баш күтәреүселәрҙе еңә алмай. Пугачевсылар уға тын алырға ла ирек бирмәй: бер ай эсендә 7 ҙур һуғыш булып, шуның бишеһендә Салауат та ҡатнашлыҡ итә. Михельсон 8 июндә Щербатовҡа биргән рапортында Көнсығыш Башҡортостанда восстание баҫтырылманы, ә Пугачев менән Салауат һуғышмай минең яндан китте, тип танырға мәжбүр була. «Бола күтәреүсе баш-

---

[1] Крестьянская война..., 305, 318-се биттәр.

[2] Шунда уҡ, 171—173-сө биттәр. Михельсон С. С. Мясоедовҡа рапортында үҙенә 3500 кеше һөжүм яһауын яҙа. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 181.

[3] Крестьянская война..., 184-се бит.

[4] Шунда уҡ, 184—185-се биттәр; гренадерҙар М. Богадельщиков менән Ф. Гусевтың Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 341.

[5] Допрос Е. Пугачева в Москве в 1774—1775 гг., 211—212-се биттәр.

[6] Крестьянская война..., 184-се бит.

ҡорттарҙың ҙур сығыштарын һәм үҙ көстәренең «кәмеүен» иҫәпкә алып», ул, Михельсон, уға өҫтәмә көстәр ебәреү тураһында үтенес менән мөрәжәғәт итә һәм үҙенең шаҡтай таушалған «деташаменты» менән Өфө яғына табан китә [1].

5 июндә кисен һуғыш барышы менән һәм ғәскәренең ҙур юғалтыуҙарға осрамауы менән ҡәнәғәт булған Пугачев башҡорт баш күтәреүселәренең үҙенә тоғро етәкселәрен хәрби һәм граждандлыҡ чиндары менән бүләкләй. Был Крәҫтиәндәр һуғышы юлбашсыһының башҡорт халҡына, Пугачев ғәскәре көрәш башлағандан алып баш күтәреүселәр сафына үҙенең иң яҡшы егеттәрен биргән һәм ҙур алыштарҙан һуң (Татищев крепосы, Һаҡмар ҡаласығы, Троицк крепосы һәм Кундравин биҫтәһе янында) Төп ғәскәрҙең яңынан көс туплауына күп тапҡырҙар ярҙам иткән башҡорт халҡына, рәхмәтенең сағылышы булып тора. Социаль сығыштары һәм милләттәре төрлө булған кешеләр башҡорттарҙың халыҡ хәрәкәтенә фиҙакәр бирелгәнлеген билдәләй. Яһаҡ түләүсе татар Исхаҡ Әхмәтов Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алыу ваҡытында былай тип әйтә: 1774 йылдың май һәм июнендә пугачевсылар «төрлө башҡорт ауылдары буйлап йөрөнө һәм ул ауылдарҙа... башҡорттар Пугачевты ысын батша итеп ҡабул итте, һәм ул күпме кеше һәм ат талап итһә лә, уларҙың бөтәһен дә уға шунда уҡ бирҙеләр» [2]. Илецк каторжандарынан булған баш күтәреүселәр М. Андреев менән Ф. Мартынов, ул саҡтағы ваҡиғалар тураһында һөйләп, Пугачев «Башҡортостанға заводтар аша ла барҙы, был ерҙәрҙә уға һәр ваҡыт яҡшы төйәк һәм үҙенә тоғро булған башҡорттарға өмөт бар ине»[3], тип билдәләй. Михельсон 3 июндә булған һуғышта яңынан ҡеүәтләнгән Пугачев ғәскәрен күреп хайран ҡала, сөнки ике аҙна элек, Кундравин биҫтәһе янында уны тамам тар-мар ителгәйне тип иҫәпләй: «Пугачевтың яңынан йыйынырға ваҡыт табып, ...һәр яҡтағы башҡорттар менән көсәйеп... миңә ҡурҡыныслы булып китеүе көтөлмәгән хәл булды»[4].

Башҡорттарға чиндар бирелеүен дөрөҫләүсе бер нисә дәлил бар. Улар түбәндәгеләр: баш күтәреүселәр полковниктары А. П. Перфильев, П. А. Пустобаев һәм Ҡәнзәфәр Усаевтың күрһәтеүҙәре, башҡорт йөҙ башлыҡтары Мырҙабай Ҡашкин менән Иҫәргән Йылҡыбаев күрһәтеүҙәре [5]. 5—6 июндән алып баш күтәреүселәр документтарында Салауат Юлаев менән Ҡәнзәфәр Усаев [6] бригадирҙар йәки баш полковниктар тип исемләнә башлай. Ахыр килеп, 1774 йылдың 5 июнендә Е. И. Пугачев үҙе ҡул ҡуйған указ бар. Был указда Себер юлы Дыуан волосынан башҡорт старши-

---

[1] Крестьянская война..., 185-се бит.

[2] ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 2, л. 280.

[3] Пугачевщина, 2-се том, 206-сы бит.

[4] Крестьянская война..., 172, 173-сө биттәр.

[5] Сподвижники Пугачева свидетельствуют... — Вопросы истории, 1973, № 8, 106-сы бит; ЦГАДА, ф. 6, д. 505, л. 391; Крестьянская война..., 221-се бит, ЦГВИА, ф. 20, д. 1240, л. 306.

[6] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 68, 69, 71, 256, 325-се биттәр. XVIII быуатта рус армияһында бригадир чины полковник менән генерал-майор араһындағы урта бер чин булған.

наһы Мәһәҙи Мәҙиәровҡа полковник чины биреү тураһында әйтелә [1]. Салауат, Өфөлә унан һорау алғанда, ваҡиғаның ваҡытын һәм урынын аныҡлап тормайынса, былай ти: «Унан, Пугачевтан, миңә бригадир хеҙмәтендә булырға ҡушылды»[2]. Пугачев Юлай Аҙналинды, Юлайҙың үҙенең әйтеүенә ҡарағанда, «халыҡ араһында яҡшыраҡ аңлау өсөн... беҙҙең яҡта йәшәүселәрҙең баш атаманы итеп тәғәйенләне»[3]. Пугачев Салауат Юлаев менән уның атаһының эшмәкәрлеген шулай билдәләп үтә. Ә был эшмәкәрлек уларҙың һуғышсан эштәренән генә тормай.

Салауат өҫтөнән тикшереү һәм суд документтары, шулай уҡ башҡа төрлө күп кенә сығанаҡтар Салауаттың Башҡортостандың төньяғында һәм төньяҡ-көнсығышында тоҡанған баш күтәреүселәр хәрәкәтенең ҙур усағын үҙ контроле аҫтында тотҡанлығын дөрөҫләй. Ул, үҙенең ярҙамсыларына таянып, хәрби һәм гражданлыҡ характерындағы күп төрлө мәсьәләләрҙе хәл итә. Мәскәү һәм Өфө тикшереүселәренең ҡулына килеп эләккән күп кенә документтар Салауаттың Елдәк крепосы казактарына һәм Бөрө ҡалаһын ҡамап алған отрядтарға ярҙам итеү өсөн отрядтар ебәреүен бәян итә [4]. Был йәһәттән Елдәк казагы Әбел Байҙашевтың (И. Ивановтың) Өфө провинция канцелярияһында һорау алыу ваҡытындағы күрһәтеүҙәре ҡыҙыҡлы [5]. Апрель аҙағында, тип һөйләгән Әбел, Елдәк баш күтәреүсе казактары атаманы А. Шеметов уны элек казактарҙан властарға буйһоноуҙы талап иткән һәм эшенән алынған атаман Старков өҫтөнән шикәйәт менән Салауат Юлаевҡа ебәргән. Салауат Елдәккә Бәхтиәр Ҡанҡаев, Абдулла Туҡтаров (Тахтаров), Әҙел Бигәшев [6] етәкселегендә 200 кешелек команда ебәр-

---

[1] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 43-сө бит.

[2] Крестьянская война..., 319-сы бит. Салауат Юлаевты бригадир чинына тәғәйенләү тураһында Е. И. Пугачев указының тексы тулы рәүештә Р. В. Овчинниковтың «Из опыта реконструкции утраченных документов (на примере указов и манифестов Е. И. Пугачева)» тигән эшендә килтерелгән. «Источниковедение отечественной истории» китабында. Сб. статей. 1975, М., 1976, 245—246-сы биттәр. Был турала шулай уҡ ҡарағыҙ: *Овчинников Р. В.* Манифесты и указы Е. И. Пугачева (источниковедческое исследование), 223—252-се биттәр.

[3] Крестьянская война..., 317-се бит.

[4] Шунда уҡ, 305—306, 315—316-сы биттәр.

[5] Шунда уҡ, 315-се бит. Күрһәтеүҙәрҙең тулы тексы ЦГАДА-ла һаҡлана, ф. 349, д. 7248, л. 27—30.

[6] Төньяҡ Башҡортостанда һәм Ҡама буйында, Көңгөр өйәҙендә хәрәкәт иткән баш күтәреүселәр отрядтарында полк старшинаһы һәм полковник, Өфө өйәҙе Ҡошсо волосы Аҡа ауылы мишәре Бәхтиәр Ҡанҡаев. — Крестьянская война..., 8, 126, 127, 188 һ. б. биттәр; Документы ставки Е. И. Пугачева..., 5—8, 320—327, 330—351 һ. б. биттәр; *Алишев С.* Говорят документы. — Ҡыҙыл таң, 1977, 24 март. Татар телендә.

Абдулла Туҡтаров — Уса юлының яһаҡ түләүсе татары; баш күтәреүселәр полковнигы, 1773 йылдың ноябренән 1774 йылдың октябренәсә Крәҫтиәндәр һуғышында, Өфө эргәһендәге һуғыштарҙа, Нуғайбәкте, Бөрөнө алыуҙа ҡатнашҡан. (1774 йылдың октябрендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғанда уның күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 32—33.)

Әҙел Бигәшев, отставкалағы капрал, Себер юлының волость муллаһы, ғәскәр башлығы, восстание күтәреүселәрҙең баш атаманы. 1774 йылдың ғинуар — мартында Салауат Юлаев отрядында тәржемәсе булған. — Крестьянская война..., 76, 78—82 һ. б. биттәр.

гән. Елдәктә тәртип урынлаштырып (Старковҡа 200 һум штраф һалалар һәм уға крепоста атаманлыҡ итеүҙе тыялар [1] һәм отрядҡа Елдәк казактарын ҡушып, улар Бөрөгә табан йүнәлә.

Бөрө районында хәрәкәт итеүсе Арыҫлан Ранғолов, Бүләк Яҡупов һәм Әлетдин Феләков [2] отрядтары Салауат ставкаһы менән даими бәйләнеш тота һәм, үҙ отрядтарына кешеләр йыйнағанда: «Батша Петр Федоровичҡа хеҙмәт итеү өсөн кешеләрҙе старшина Салауат Юлаев командаһына»[3] саҡырабыҙ, тип хәбәр һала. Ошоноң менән улар үҙ отрядтарының Салауат Юлаев корпусына инеүен белдерҕеләре килә. Уларҙың һорауы буйынса Салауат Бөрөгә тәжрибәле командирҙар етәкселегендә өҫтәмә көс ебәрә. Салауаттың отряд ебәреүе тураһындағы хәбәр Башҡортостанда тиҙ тарала. Халыҡта, ә унан һуң язалау отрядтары начальниктары араһында ла Салауат Юлаевтың Бөрөгә яҡынлашыуы һәм Өфөгә походы тураһында һүҙ тарала. Бөрөнө һәм уның биҫтәләрен һаҡлаусы секунд-майор О. И. Дуве июндең тәүге көндәрендә полковник А. Я. Якубовичҡа, пугачевсы башҡорттар «ҙур көстәр менән ...Салаватка етәкселегендә Бөрөнән 30 саҡрымда тора һәм, дөрөҫ хәбәрҙәргә ҡарағанда, шул ҡалаға ике яҡтан һөжүм итергә теләй, шуға күрә ҡала ҙур ҡурҡыныс аҫтында һәм ярҙам талап итә»[4] тип белдерә. Якубович үҙе лә Өфөнө баш күтәреүселәрҙән һаҡлау өсөн хәрби ярҙам һорай [5]. Салауаттан ҡурҡып, Дуве Бөрөнән ҡасырға мәжбүр була. 4 июндә иртән баш күтәреүселәр Бөрөгә бәреп инә һәм уны яндыра [6]. Был операцияға Салауат етәкселек иткән тигән хәбәрҙәргә Өфөлә лә ышаналар. Өфө протопобы И. Неверевтың 10 июндә Вятка дини консисторияһына, имеш, «старшина Салаватка Бөрө йылғаһын уның үрге ағымында, Сатаниха ауылы тапҡырында кисеп, Бөрө ҡалаһына шул күрһәтелгән 4-се числола барып еткән һәм бер нәмәһен ҡалдырмай яндырып бөтөргән...[7] тип хәбәр итеүен тик шуның менән генә аңлатырға мөмкин. Былдай раҫлауҙарҙың хата икәнлеге көн кеүек асыҡ, сөнки 3 һәм 5 июндәрҙә Салауат Әй буйында Михельсон корпусы менән һуғыштарҙа ҡатнашҡан һәм, шулай булғас, Бөрөнән 250 саҡрымда тороп, бер

---

[1] Полковник В. И. Могутовтың 1774 йылдың 21 октябрендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 167—168.

[2] Арыҫлан Ранғолов — Уса юлының Ҡыйғаҙы ауылынан башҡорт йөҙ башлығы; Төньяҡ Башҡортостанда хәрәкәт иткән баш күтәреүселәр отрядтарында старшина һәм полковник. Бүләк Яҡупов — Себер юлы Дыуан волосының Байҡы ауылы татары һәм Әлетдин Феләков — Уса юлы Ирәкте волосы башҡорто — Бөрө эргәһендә хәрәкәт иткән баш күтәреүселәр отрядтарының етәкселәре. — Крестьянская война..., 160, 162, 180, 252 һ. б. биттәр.

[3] Шунда уҡ, 306-сы бит.

[4] Шунда уҡ, 174-се бит.

[5] Шунда уҡ.

[6] Шунда уҡ, 183—184-се биттәр.

[7] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 50.

үк ваҡытта Бөрө эргәһендәге баш күтәреүселәр араһында ла була алмаған [1].

Сығанаҡтарҙа Салауат отрядтарының Башҡортостандың төньяғында шаҡтай ғына территорияны үҙ контролендә тотоуын күрһәткән мәғлүмәттәр бар. Улар язалау командаларының хәрәкәт итеү юлдарын күҙәтеү өсөн ҡарауыл постары селтәрен барлыҡҡа килтерә һәм был турала Салауатҡа хәбәр итеп тора [2]. Өфөнө Екатеринбург менән тоташтырыусы Өфө юлы айырым күҙәтеү аҫтына алына [3]. 300 кешенән торған махсус отряд Әҙел Бигәшев тарафынан Әңгәсәк заводына ебәрелә. Завод яндырыла, баш күтәреүселәр тик икмәк магазиндарына ғына теймәй [4]. Язалау ғәскәрҙәре ике ҙур пункттан мәхрүм ителә — Бөрөнө һәм Әңгәсәк заводын юғалта; улар быға тиклем баш күтәреүселәргә һөжүм итеү өсөн терәк пункт итеп файҙаланылған. Баш күтәреүселәр отрядының йөҙ башлығы удмурт Москов Якимов, унан һорау алғанда, шулай тип белдергән дә: «... ауылды унда һәр ваҡыт хәрби командалар туҡталғанға күрә яндырҙыҡ»[5]. Башҡортостандың төньяғында өсөнсө ҙур пункт — Елдәк крепосы баш күтәреүселәр ҡулында ҡалған. Салауаттың заданиеһы үтәлә. Уға буйһонған отрядтарҙың уңыштары Өфөнән төньяҡта хәрәкәт иткән һәм, Пугачевты ҡыуып етеп (дөрөҫ, артыҡ ашыҡмайынса), был эштә Михельсон корпусына ярҙам күрһәтергә тырышҡан полковник Якубович һәм майор Дувенның язалау командаларының иғтибарын үҙенә йәлеп итә [6]; Салауаттың көрәштәштәре үҙ отрядтары менән Пугачев ғәскәренең Башҡортостан аша Ҡама буйына имен үтеүен тәьмин итеү өсөн күп көс һала.

Ҡайһы бер документтарҙың йөкмәткеһе 1774 йылдың майында — июнь башында Салауат Көңгөр өйәҙендә хәрәкәт иткән баш күтәреүсе отрядтар менән дә бәйләнеш тотҡан, тип фараз итергә мөмкинлек бирә. Уса волосында хәрәкәт етәкселәренән береһе атаман С. Я. Кузнецов, Салауаттың ярҙамына нык ышанып, Уса биҫтәһен алырға өндәй. Рождественский заводы крәҫтиәндәре, Салауат етәкселегендәге күп меңле башҡорт отрядының вәғәҙә ителгән ярҙамына өмөтләнеп, Югов ҡаҙна заводтарының унтершихмейсеры И. Бахмандың командаһына һөжүм итә [7].

---

[1] Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Бөрөнө алыуҙа Салауаттың ҡатнашлығы тураһында хәрби һәм граждандыҡ властарының хата мәғлүмәттәре ҡайһы бер тарихсылар тарафынан нигеҙле мәғлүмәттәр итеп ҡабул ителде. — Ҡарағыҙ: Салават Юлаев. К 200-летию со дня рождения, 23-сө бит; Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, 1-се киҫәк, 245-се бит; Крестьянская война в России в 1773—1774 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 86-сы бит; *Муратов X. И.* Крестьянская война под предводительством Е. И. Пугачева. М., 1970, 114 һ. б. биттәр. Был эштәрҙең ҡайһы берҙәрендә, Салауат Бөрөнө, Усаға барышлай, июнь урталарында алған, тип раҫлана.

[2] Крестьянская война..., 306, 316-сы биттәр.

[3] Шунда уҡ, 253, 306-сы биттәр.

[4] Шунда уҡ, 253-сө бит. Документы ставки Е. И. Пугачева..., 315-се бит.

[5] Крестьянская война..., 250-се бит.

[6] Шунда уҡ, 182—184, 193—197, 198—199-сы биттәр.

[7] Крестьянская война в России в 1773—1774 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 81—83-сө биттәр.

Салауат уңышлы үткәрелгән һуғыш операциялары өсөн үҙенең көрәштәштәренә полковник, есаул, атаман чиндары бирә. Тикшереү документтары батырлыҡ күрһәткән түбәндәге һуғышсыларҙы атап әйтә, улар: Изибай Аҡбаев (Енбаев), Абдулла Туҡтаров, Раҡай Ғәлиев, Яҡуп Теләүембәтов, Семен Шеметов. Уса юлы Бурғаш ауылы марийы Изибай Аҡбаев 1773 йылдың декабренән баш күтәреүселәр хәрәкәтендә ҡатнаша, Бәхтиәр Ҡанҡаев һәм Абдулла Туҡтаров отрядтарында хеҙмәт итә. 1774 йылдың июнендә ул Өфөнән Екатеринбургка барған юлды һаҡлай. Шул ваҡытта уҡ инде Изибайҙың хәрби хеҙмәттәре бригадир Салауат тарафынан уға полковник чины биреү менән билдәләп үтелгән [1]. Салауат тикшереүҙә, үҙенең «законға ҡаршы» эш итеүен аңлатып, былай тигән: «Сирмеш Изибай Енбаевты, сирмештәр менән ул ғына командалыҡ итһен өсөн һәм уларҙы башҡа диндәге кешеләр рәнйетә алмаһын өсөн, полковник тип атаным [2]. Әлбиттә, бындай аңлатманы тулы тип иҫәпләп булмай. Полковник чинын ҡаҙанырға кәрәк. П. С. Потемкин Изибай Аҡбаев эше буйынса үҙенең конфирмацияһында (хөкөм ҡарарында. — *Тәрж.)* юҡҡа ғына былай тип яҙмаған: «Шуныһы яҡшы билдәле, яуыздарҙың ҡуштандарына, әгәр улар болала үҙҙәрен ныҡ күрһәтмәһәләр, бер ваҡытта ла хәрби чиндар бирмәгәндәр...»[3]

Салауат менән Юлай Аҙналиндың рекомендацияһы буйынса Пугачев Абдулла Туҡтаровҡа полковник чинын бирә [4]. Салауат Абдулланы «Пугачевҡа хупламаным һәм шуға күрә уға полковник исеме бирелмәне [5], тип раҫлаһа ла, Абдулланың асыҡтан-асыҡ таныуын дөрөҫөрәк тип иҫәпләргә кәрәк. Мырҙалар волосы Яуын ауылы башҡорто мулла Яҡуп Теләүембәтовты Салауат поход старшинаһы итеп, башҡорт Раҡай Ғәлиевте — есаул итеп, Елдәк казагы Семен Шеметовты атаман итеп тәғәйенләй [6].

Баш күтәреүселәр ғәскәрен нығытыу тураһында хәстәрлек ҡылыйыу һәм восстаниеға ысын күңелдән бирелгән кешеләрҙе командир итеп тәғәйенләүҙә генә түгел, ә баш күтәреүселәрҙе хәрби эшкә өйрәтеү, отрядтарҙа тәртип булдырыу, ҡасырға маташыу осраҡтарын эҙәрләүҙә лә сағылышын таба. Салауат отрядында башҡорттар, мишәрҙәр, казактар, рустар һәм рус булмаған крәҫтиәндәр яугир булып китә. Салауаттың һәм уның яуҙаш иптәштәренең баш күтәреүселәрҙе нисек өйрәтеүҙәре, һуғыштарға нисек әҙерләүҙәре тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Әммә уның отрядтарының оҙаҡ ваҡыттар буйы һуғышсан рух һаҡлауы уның хәрби һәләтлектәрен раҫлаусы иң яҡшы дәлил булып тора. Ғәйепләүсе

---

[1] Әбел Байҙашев (И. Иванов) һәм С. Шеметовтың 1774 йылдың октябрендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколдары.— ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 14—18, 27—30; Крестьянская война..., 253—254, 306, 317-се биттәр.

[2] Крестьянская война..., 319-сы бит.

[3] Шунда уҡ, 254-се бит.

[4] Шунда уҡ, 315—316-сы биттәр.

[5] Шунда уҡ, 319-сы бит.

[6] Шунда уҡ, 312, 315-се биттәр.

шаһит башҡорт Әбләҙи Һаҡҡоловтың күрһәтеүҙәренән беҙ Салауаттың восстаниеға хыянат иткәндәрҙе нисек язалауын ғына беләбеҙ. Салауаттың кешеләре был яҡҡа ҡасып сыҡҡан һәм элек Михельсонда юл күрһәтеүселәр булып хеҙмәт иткән, яндарында шуны раҫлаусы билеттары булған ике кешене Лак ауылына килтергәс, уларҙың һәр икеһен ҡылған яуызлыҡтары өсөн баш күтәреүселәр язалап үлтерә [1]. Әбләҙи был саҡта үҙенең дә булыуын әйткән. Салауат ошо үс алыу ғәйебен И. Н. Белобородовҡа ауҙарырға тырышһа ла [2] (Салауат Белобородовтың 1774 йылдың сентябрендә үлтерелгәнен белгән), был үлем язаһы Салауаттың үҙенең бойороғо буйынса ла бирелеүе мөмкин.

Салауат азат ителгән крайҙа идара итеү мәсьәләләрен үҙ ҡулында тупларға ынтылған. Салауат йөҙөндә яңы власть вәкилен күреп, халыҡ уға элекке түрәләр өҫтөнән ялыу менән барған [3], генерал И. А. Деколонгка һәм Исет воеводаһы И. Г. Лазаревҡа хеҙмәт иткән һәм әсиргә эләккән ахун Абдулла Мөслимовты, есаул Иманғол Солтановты [4], Михельсон корпусы составында һуғышҡан йөҙ башлығы Тимербай Исхаҡовты язалау өсөн уға алып килгән [5]. Салауат Әңгәсәк заводы приказчигы Клепаловтың, баш күтәреүселәргә ҡаршылыҡ күрһәткәне өсөндөр инде, уға килеүен талап итә [6]. Тикшереү документтары Салауаттың төрлө һатлыҡ йәндәргә һәм хыянатсыларға ҡаршы килешмәүсән көрәш алып барыуын раҫлаусы тағы ла бер фактты аса. Шайтан-Көҙәй волосында старшина хеҙмәтен (Салауаттың атаһы урынына) башҡарыусы йөҙ башлығы Хөсәйен Айсиндың Михельсонға 20 кешенән торған атлы команда биреү хәбәрен ишеткәс, Салауат хыянатсыны язалау өсөн Яҡуп Теләүембәтов етәкселегендә волосҡа 150 кешелек отряд ебәрә [7].

Салауат ҡараған граждандлыҡ эштәре араһында Елдәк крепосы казагы итеп алынып, көсләп православиеға суҡындырылған һәм Иван Иванов тип яңы исем бирелгән Әбел Байҙашевтың (Дыуан волосы Ҡыйғаҙы ауылы кешеһе) мөрәжәғәте лә була. Әбел унан «элеккесә өйәҙҙә, Ҡыйғаҙы ауылында, йәшәргә һәм басурман динен тоторға яҙма рөхсәт» һорай. Салауат уға ул һораған документты — билетты бирә [8]. Салауат менән Юлай Аҙналин ҡул ҡуй-

---

[1] Крестьянская война..., 327-се бит.

[2] Шунда уҡ, 329-сы бит.

[3] Әбел Байҙашевтың (И. Ивановтың) 1774 йылдың октябрендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 29.

[4] Абдулла Мөслимовтың 1774 йылдың 24 июлендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ГАОО, ф. 3, д. 141, л. 132—133.

[5] Рейнсдорптың 1776 йылдың 31 августындағы билдәләмәһе. — ГАОО, ф. 3, д. 155, л. 59.

[6] Крестьянская война..., 315-се бит.

[7] Хөсәйен Айсиндың 1774 йылдың 28 майында Өфө провинция канцелярияһына донесениеһы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 592, л. 591; Крестьянская война..., 312-се бит.

[8] Әбел Байҙашевтың (И. Ивановтың) 1774 йылдың октябрендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 29 об.

ған билетта Әбелгә «элеккесә йәшәргә һәм батша Петр Федоровичҡа хеҙмәт итергә»[1] рөхсәт ителгән. Салауаттың был ҡарары уны ябай баш күтәреүселәрҙең үтенестәренә иғтибар менән ҡараусы кеше итеп күрһәтә.

Был миҫалдарҙың бөтәһе лә Салауаттың Башҡортостандағы баш күтәреүселәрҙең абруйлы башлығы булып үҫеп етеүе тураһында һөйләй. Ул восстаниеның башҡа усаҡтары менән бәйләнеш урынлаштыра, унда үҙенең рекомендацияларын һәм күрһәтмәләрен, тәжрибәле командирҙарын ебәрә. Салауат Төп ғәскәргә һәм айырым отрядтарға ярҙам күрһәтә. Ул ваҡыты-ваҡыты менән, актив партизандар һуғышына күсеп, Эҫем — Һатҡы заводтары районында Михельсондың язалау корпусын туҡтатып тороуға өлгәшә һәм шуның менән Пугачев ғәскәренә бик ҙур ярҙам күрһәтә. Салауат язалау командаларына ҡаршы һуғыштарҙа байтаҡ юғалтыуҙар кисергән был ғәскәргә күп меңле атлы отряд алып килеп, Пугачевҡа яңынан көс йыйырға һәм уның Башҡортостан аша Ҡама буйына тотҡарлыҡһыҙ үтеп китеүе өсөн шарттар булдырырға ярҙам итә.

Салауат Пугачев ғәскәре походында ҡатнашҡан осорҙа, июндә, бер килке Башҡортостандан китеп тора. Яйыҡ йәшерен комиссияһында һорау алғанда, Пугачев: Михельсонға ҡаршы июндәге һуғыштарҙан һуң Башҡортостанда бер аҙна самаһы булып, унда «ун меңләп башҡорт һәм бер нисә завод крәҫтиәнен йыйҙым һәм Красноуфимск крепосына киттем»[2], тип күрһәтә. Баш күтәреүсе башҡорттарҙың етәкселәре һәм, беренсе сиратта, Салауат Төп ғәскәргә күп меңләгән ополчение ебәреп, Пугачевты тар-мар итеүгә юл ҡуймаған. Язалау отрядтары командирҙарына Пугачевты эҙәрләүҙә үҙҙәренең булдыҡһыҙлыҡтарын Пугачевтың өндәмәһенән ҡуҙғыған халыҡтың ҡаршылыҡ күрһәтеүсе күп һанлы усаҡтарын баҫырға мәжбүр булыу менән аңлатырға тырышыуҙан башҡа юл ҡалмаған. Генерал Щербатов, һуғыш уты «Пугачев үҙе булған ерҙәрҙә генә ялмап ҡалманы», ә алыҫтарҙа, бөтә ерҙә лә, уны көтәләр һәм, «ғүмерҙәре менән мөлкәттәрен ҡорбан итеп, уға ихтирам менән буйһоналар». Пугачев нисә тапҡырҙар инде «ҡыйратылһа ла, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә яңынан көс йыйыуы»[3] быға яҡшы дәлил булып тора, тип яҙа.

10 июндә Пугачев ғәскәре бер тотҡарлыҡһыҙ Красноуфимскиға инә, ә унан Көңгөргә табан йүнәлә. Көңгөрҙән иһә Пугачевҡа ҡаршы подполковник А. В. Папав командаһы сыға. 11 июндә Ачит крепосы эргәһендә пугачевсылар язалау командаһы менән осрашып һуғышҡа инә. Папав ошо һуғышты тасуирлауға үҙенең иҫтәлектәренең байтаҡ биттәрен бағышлай. Үҙенең хәрби оҫталығын күрһәтер өсөн, ул Пугачевтың көстәрен юрамал арттырып яҙа.

---

[1] Крестьянская война..., 315-се бит.

[2] Следствие и суд над Е. И. Пугачевым. — Вопросы истории, 1966, № 4, 120—121-се биттәр.

[3] Ф. Ф. Щербатовтың 1774 йылдың 29 июлендә Себер губернаторы Д. И. Чичеринға хаты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 7, л. 350 об.

Папавтың әйтеүенсә, имеш, ул ошо һуғышта еңгән һәм баш күтәреүселәр сафында «буталыш һәм тарҡатыу» индереүгә өлгәшкән, хатта уларҙы бер нисә саҡрым эҙәрләп барған [1]. Шул уҡ Папав 1774 йылдың 11 июнендә генерал Щербатовҡа ебәргән рапортында был һуғыштың барышы һәм һөҙөмтәһе тураһында шаҡтай баҫалҡы яҙа: баш күтәреүселәр уның командаһын флангыларҙан уратып алып, пушкаларҙан һәм мылтыҡтарҙан ут асты һәм уны сигенергә мәжбүр итте, шунан Көңгөргә барған юлда 20 саҡрым буйына алты сәғәт эҙәрләп килде [2].

Пугачевсыларҙың Уса биҫтәһен алыуы тураһында мәғлүмәттәр булған күп кенә документтарҙа был еңеүгә Белобородов менән Салауаттың алғасҡы отрядтарының ҙур өлөшө тураһында әйтелә. Салауат үҙе Мәскәүҙә һәм Өфөлә һорау алыу ваҡытында, Усаны алғанда, Пугачев менән булдым, тип кенә әйтә [3]. Ҡазанда һорау алғанда, Уса воеводаһы Ф. Д. Пироговский шуларҙы һөйләй: «Петр һәм Павел байрамы алдынан... яуыз полковниктар Белобородов һәм Салауат Юлаев етәкселегендә башҡорттарҙан һәм рустарҙан ун ике меңлек толпа Уса биҫтәһенә килеп, бөтә төбәкте ҡамап алды»[4]. Усалағы команда 14 июндән 18 июнгә тиклем баш күтәреүселәрҙең атакаларын кире ҡаға. 18 июндә Усаға өҫтәмә көс килә — секунд-майор Ф. В. Скрипицын етәкселегендәге Ҡазан гарнизоны командаһы һәм коллежский асессор М. И. Башмаков тарафынан ебәрелгән командалар инә [5]. Шул уҡ көндө баш күтәреүселәр крепосҡа яҡын килә һәм биҫтәләге ауылды — форштадты яндыра. Тиҙҙән Усаға Пугачев етәкселегендәге баш күтәреүселәр ғәскәренең төп көстәре лә килә. Крепосты һуғышһыҙ алыуға йүнәлтелгән бөтә саралар (ҡала стеналары эргәһендә өндәүҙәр, указдар ебәреү) күрелгәс, Пугачев һуғыш хәрәкәттәрен башлай. 18, 19 һәм 20 июндә крепость стенаһы эргәһендә һөжүм һәм алыш өҙлөкһөҙ ҡабатланып тора. Баш күтәреүселәр бында дошмандың көслө ҡаршылығына осрай. Стена аша таш яуып тороуға, бүрәнәләр ташлауға һәм ыуар (ҡайнатылған ыҫмала) ҡойолоуына ҡарамаҫтан, баш күтәреүселәр әлдән-әле стеналарға яҡынлаша. Башҡорттарҙың күпселеге, тимер күлдәк булмағанлыҡтан, 30 йәки 22 ҡатлап тегелгән һәм көл һибелгән киндер күлдәктә һуғыша»[6]. Пугачевсылар өс пушка эләктерә. Уса гарнизонының былай ҙа ауыр хәле ҡала ополчениеһына көсләп алынған крәҫтиәндәрҙең күпләп баш күтәреүселәр яғына сығыуы менән тағы ла ҡатмарлаша. Тиҙҙән Скрипицындың дарыһы һәм патрондары бөтә. Гарнизон командованиеһы, башҡаса ҡаршылыҡ күрһәтергә мөмкин түгеллеген күреп, ҡорал ташларға ҡарар итә һәм 21 июндә Усаны Пугачевҡа бирә.

---

[1] Против Пугачева (из записок современника), 650—654-се биттәр.

[2] ЦГВИА, ф. 20, д. 1239, л. 293.

[3] Крестьянская война..., 302, 318-се биттәр.

[4] ЦГАДА, ф. 6, д. 440, л. 19—20.

[5] Крестьянская война под предводительством Емельяна Пугачева в Удмуртии, 211—213-сө биттәр.

[6] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 88-се бит.

Бер көн үткәс, баш күтәреүселәр ғәскәре Ҡаманың уң яҡ ярына сығып, Ҡазанға походҡа китә.

Уса эргәһендәге һуғыштарҙа Салауаттың аяғы пуля тейеп яралана. Башҡортостанға ҡайтыуын ул тикшереүселәргә дауаланыу кәрәклеге менән аңлатҡан [1]. Ошолар менән бер рәттән уның тыуған иленә ҡайтыуының башҡа сәбәбе лә булғандыр, ихтимал. Ҡәнзәфәр Усаев тикшереү ваҡытында уның үҙен, шулай уҡ Салауат Юлаевты, Юлай Аҙналинды һәм «үҙенең башҡа начальниктарын, шундай уҡ... полковниктарын» Пугачев Уса эргәһенән Өфө өйәҙенә «тыныс йәшәп ятыусыларҙы фетнәгә күтәреү һәм төрлө юлдарҙа кеше йыйнау» өсөн указ менән ебәрҙе» [2] тип асыҡтан-асыҡ әйтә.

Тикшереүгә Салауаттың, яраланыуына ҡарамаҫтан, шунда уҡ Башҡортостанға ҡайтып китмәүе, ә уға күрше районындарҙағы хәрәкәттәрен дауам итеүе тураһында ла мәғлүм була. Атап әйткәндә, уның Көңгөр өйәҙенең күп кенә ауылдарынан крәҫтиәндәрҙе Ҡазанға табан киткән Пугачев ғәскәренә ебәреүе һәм бер үк ваҡытта ул крәҫтиәндәр менән үҙ отрядын тулыландырыуы билдәле. Мари Бохармәт Болхаировтың раҫлауына ҡарағанда, Салауат отряды июль айында Сарапул волосының Ҡасево ауылына килә, ә унан һуң Ҡама буйының «төрлө заводтарында» була [3]. Баш күтәреүсе Баҡый Туйкиев тикшереү ваҡытында шул уҡ айҙа Уран волосының (Көңгөр өйәҙенең сигендә) Үрҙәбаш ауылына Салауат Юлаев һәм Айыт Сәитов исеменән «казактар»ға йыйыусы команда килә [4], тип күрһәтә. Был көндәрҙә Салауаттың тоғро ярҙамсылары Уса юлы Уран волосының Сосновый ауылы башҡорттарының старшинаһы Айыт Сәитов һәм шул уҡ юлдың яһаҡ түләүсе татарҙары һәм мариҙарының старшинаһы Баҡый Туйкиев була. Уларҙың отрядтары Көңгөр өйәҙенең Уса волосы һәм Өфө өйәҙенең төньяҡ-көнбайыш волостарының ауылдарында «беҙ батша Петр Федоровичтан уға хеҙмәт итергә кешеләр йыйыу өсөн ебәрелгән вәкилдәр» [5] тип иғлан итеп йөрөгәндәр. Көңгөрҙә торған подполковник Папав 28 июндә генерал Щербатовҡа: Уса тирәһендә Пугачев ғәскәренән торон

---

[1] Крестьянская война..., 318-се бит.

[2] Шунда уҡ, 222-се бит.

[3] Шунда уҡ, 306-сы бит.

[4] Шунда уҡ, 312-се бит.

[5] Шунда уҡ, 306-сы бит. Айыт Сәитов Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алыу ваҡытында Салауаттың исемен иҫкә алмаған. Ул Ҡасево һәм Березовка ауылдарында баш күтәреүсе башҡорттарҙың старшинаһы Маһади Мәҙнәровтың отряды менән бергә булғанын әйтә. Айыт үҙенең баш күтәреүселәргә осраҡлы ғына эләгеүен һәм улар араһында оҙаҡ тормауын айырыуса билдәләй. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 435 об. — 437.

Тикшереү ваҡытында Баҡый ҙа шундай уҡ тактиканы һайлап ала. Ул Салауат менән Айыттың вәкилдәре, уны, имеш, «көсләп үҙҙәре менән алып киткән» һәм улар командаһында үҙенең «тик бер генә төн ҡунып, өйөнә ҡасыуын» һөйләй. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 5, л. 139.

Ләкин документтар был кешеләрҙең Уса юлында баш күтәреүселәр хәрәкәтенең күренекле етәкселәре булыуын, ҡоралды тик 1774 йылдың көҙөндә генә ташлауын раҫлай. — Документы ставки Е. И. Пугачева..., 71, 124, 126, 316, 324, 349, 353-сө биттәр.

ҡалған башҡорттар һәм Көңгөр крәҫтиәндәре «туплана», улар Салауат менән Белобородов етәкселегендә Аннинск, Бизяр һәм башҡа заводтарға барырға уйлай; был Көңгөрҙөң үҙен дә ҡурҡыныс аҫтына ҡуя [1], тип белдерә. Белобородовҡа килгәндә инде, билдәле булыуынса, ул Пугачев менән Ҡазанға китә, ә Салауат тураһындағы мәғлүмәттәр дөрөҫ булырға тейеш.

1774 йылдың июлендә Салауат Көңгөр өйәҙенән Башҡортостанға ҡайта. Изибай Аҡбаевтың иҫендә ҡалғанса, Салауат июлдә Өфөнән 90 саҡрым төньяҡтараҡ Субай ауылы аша үтеп китә [2]. Ул Себер юлына табан йүнәлә, сөнки был ваҡытта унда атаһы ҙур отряд башында торған хәлдә Ҡатау-Иван заводын ҡамап алған була [3]. Пугачевтың Салауатты Башҡортостанда ҡалдырыу хәбәре хәрби начальниктарҙы борсоуға һалған. Подполковник Михельсон, Пугачевты эҙәрләй барғанда, Ағиҙел буйында ҡуйылған бөтә постарҙы тикшереп, бында булған полковник Якубовичтан, үҙ сиратында, «Өфөнө яҡлау» һәм «Салауатты тотоу» өсөн тейешле бөтә сараларҙы күреүен һорай [4]. Генерал Деколонг подполковниктар Ф. Җолобов, Я. Декастро-Лацеродо һәм майор Д. О. Гагринға, язалау операциялары үткәргәндә, иғтибарҙы беренсе сиратта «Салауат Юлаевты юҡ итеүгә йүнәлтергә»[5] кәрәклеген «бик ныҡ итеп» әйтеүе тураһында Хәрби коллегияға белдерә.

12 июлдә Пугачевтың Төп ғәскәре Ҡазанды (урындағы гарнизон урынлашып алған Кремлдән тыш) ала, ә 12, 13 һәм 15 июлдәрҙә ҡала эргәһендә Михельсон корпусына ҡаршы һуғыш алып бара. Был һуғыштарҙың һуңғыһында Пугачев еңелә һәм үҙенең ҡалған ғәскәрҙәре менән Көкшайға сигенә һәм унда 16 һәм 17 июлдәрҙә Волганың уң яҡ ярына сыға. Крәҫтиәндәр һуғышын осорҙарға бүлеүҙең ҡабул ителгән тәртибенә ярашлы рәүештә ошо көндәр менән ул һуғыштың икенсе этабы тамамлана. Пугачевтың Төп ғәскәренең Башҡортостандан китеүе менән, халыҡ хәрәкәте һүнмәй, Башҡортостанда Салауат Юлаев ҡала, һәм ул крайҙа баш күтәреүселәр хәрәкәтенә етәкселекте үҙ өҫтөнә ала.

§ 3. КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫНЫҢ ӨСӨНСӨ ЭТАБЫ (1774 йылдың июль уртаһы — ноябре)

Крәҫтиәндәр һуғышының өсөнсө этабы хәрәкәттең үҙәге Волганың уң яҡ ярындағы губерналарға күсеү менән характерлана. 1774 йылдың йәйге айҙарында, Пугачев Ҡама һәм Волга буйына киткәндән һуң, Башҡортостанда баш күтәреүсе отрядтарҙың хәрәкәттәре хөкүмәттең хәрби көстәренең байтаҡ контингентын үҙенә ҡаратып тора, был ниндәйҙер дәрәжәлә Пугачевтың Төп ғәскәрен эҙәрләүҙе ауырлаштыра. Өҫтәүенә, хәрби командование менән

---

[1] ЦГВИА, ф. 20, д. 1240, л. 466.
[2] Крестьянская война..., 306-сы бит.
[3] Шунда уҡ, 192—193-сө биттәр.
[4] Шунда уҡ, 199-сы бит.
[5] ЦГВИА, ф. 20, д. 1233, л. 492.

урындағы властар Башҡортостанды Пугачевтың ярҙам алыр өсөн ҡайтыуы мөмкин булған урын тип ҡарап хаталанмайҙар. Полковник В. Ф. Бибиков, «Пугачев, был ерҙәргә көтөлмәгәндә әйләнеп ҡайтҡан хәлдә», бында «терәк» [1] тапмаһын өсөн», Көңгөр һәм Өфө өйәҙҙәрендә баш күтәреүселәр хәрәкәтен мөмкин тиклем тиҙерәк баҫтырырға кәрәк, тип иҫәпләй. Генерал П. С. Потемкин язалау корпустары командирҙарына башҡорттарҙың Пугачев менән бәйләнеш тотоу мөмкинлеген асыҡлау өсөн разведка яһарға ҡуша [2]. Ф. Ю. Фрейман үҙенең иҫтәлектәрендә, 1774 йылдың йәй һәм көҙөндә язалау командаһы хеҙмәтенә йомғаҡ яһап, былай тип яҙған: «Шуның менән минең Башҡортостанға булған сәфәрем тамамланды, мин унан Пугачев ярҙам ала алмаһын өсөн ебәрелгәйнем» [3].

Ләкин Пугачевҡа инде Башҡортостандан туранан-тура ярҙам алырға насип булмай. Восстание үҙенең иң юғары, бер үк ваҡытта иң һуңғы, сигенә яҡынлаша. Дөрөҫ, 1774 йылдың июленең икенсе яртыһында һәм август башында Пугачевҡа Волга буйындағы күп кенә ҡалаларҙы (Цивильск, Ҡормош, Алатыр, Саранск, Пенза, Петровск, Саратов, Ҡамышин) алырға тура килә, ләкин язалау ғәскәрҙәренең ҡыҫырыҡлауынан ул Волга тамағына тиклем сигенә һәм унда 25 августа Ҡара Яр эргәһендәге һуғышта тамам еңелә. Пугачев ике йөҙ казак менән Волга аръяғына ҡаса, ләкин тиҙҙән заговорсылар тарафынан ҡулға алынып, 15 сентябрҙә Яйыҡ ҡаласығына килтерелә һәм властар ҡулына тапшырыла. Ләкин Башҡортостандағы баш күтәреүселәрҙең Пугачев менән бәйләнеше бөтөнләй өҙөлөүгә, ә һуңыраҡ восстание башлығының тотолоуы тураһында хәбәр таралыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостанда хәрәкәт 1774 йылдың ҡара көҙөнә тиклем туҡталмай, ә уның айырым усаҡтары 1775 йылдың йәйендә баҫтырыла [4].

1774 йылдың июль—ноябрендә Башҡортостан территорияһында баш күтәреүселәр хәрәкәтенең төп ваҡиғалары Салауат Юлаев исеме менән бәйләнгән. Ырымбур губернаторының хөкөм ҡарарында Пугачев «Ырымбур губернаһынан» сығып киткәс, Салауат менән уның атаһы «башҡорттарҙың ҙур төркөмөнөң башында», «тыйылғыһыҙ... ашҡыныу» [5] менән һуғышты дауам итеүҙә ғәйепләнә. Салауаттың боевой эштәренә дөйөм баһаны төрлө рангылағы, ләкин Башҡортостандағы ваҡиғалар тураһында берҙәй хәбәрҙар булған ике каратель бирә. Хөкүмәт ғәскәрҙәре командующийы П. И. Панин Салауатҡа «башҡорт халҡын хәҙер төп болартыуусы» [6] тип баһа бирә, ә восстаниены баҫтырыуҙа хирес ҡатнашыусыларҙың береһе старшина Ҡолой Балтачев Мәскәүҙә Салауат

---

[1] В. Ф. Бибиковтың 1774 йылдың 5 авгусында И. А. Деколонгка рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 8, л. 83.

[2] И. К. Рылеевтың 1774 йылдың 20 сентябрендә Өфө провинция канцелярияһына белдереүе. — Шунда уҡ, д. 593, л. 273.

[3] Neue Nordische Miscellaneen, s. 407.

[4] Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 289—291-се биттәр; Крестьянская война..., 4-се бит.

[5] ГАОО, ф. 3, д. 148, л. 73.

[6] Крестьянская война..., 242-се бит.

эше буйынса тикшереү ваҡытында, уның, Салауаттың, исеме бөтә Башҡортостанда «бар урында ла билдәле ине»[1], тип әйтә.

Салауат, унан Мәскәүҙә һәм Өфөлә һорау алғанда, Крәҫтиәндәр һуғышының ахырғы этабындағы ваҡиғалар тураһында бик аҙ һөйләй. Мәскәүҙә һорау алыу ваҡытында ул Уса янынан тыуған ауылына ҡайтыуын һәм унда хөкүмәт ғәскәрҙәре [2] отрядының ҡулына эләгеүен генә әйтә. Салауат отрядының подполковник И. К. Рылеев корпусына ҡаршы һуғышы тураһында һөйләгән Арыҫлан Ранғолов, Семен һәм Афанасий Шеметовтар, Әҙел Бигәшев күрһәтеүҙәренең күсермәһен уҡығас, Өфөлә Салауатҡа ошо кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәргә яуап бирергә тура килә [3]. Ләкин бында ла, бер ни ҙә әйтмәү тактикаһын тотоп, был ваҡиғаға тикшереүселәрҙең иғтибарын тартмаҫҡа тырыша. Ул, йәнәһе, был һуғышҡа әҙерләнеүен әҙерләнгән, ләкин Рылеевҡа ҡаршы алышҡа сыҡмаған [4]. Шулай итеп, Салауаттың күрһәтеүҙәре Башҡортостандағы «төп болартыусының» эшмәкәрлеген яҡтыртырға мөмкинлек бирмәй. Был хаҡта беҙ тикшереү эшенең башҡа документтарындағы мәғлүмәттәр буйынса, шулай уҡ тикшереүселәргә билдәле булмаған сығанаҡтар буйынса фекер йөрөтә алабыҙ.

1774 йылдың июлендә Башҡортостандағы баш күтәреүселәрҙең төп маҡсаты — провинцияның үҙәген — Өфөнө алыу булған. Был турала һорау алыу ваҡытында Ҡәнзәфәр Усаев тулыраҡ итеп һөйләп бирә. Июль аҙағында Ҡәнзәфәр төньяҡтан Салауат Юлаев отрядының, көньяҡтан — йәнә бер ҙур отрядтың (Ҡәнзәфәр командирҙың исемен әйтмәй, бәлки, ул Ҡасҡын Һамаров булғандыр), төньяҡ-көнбайыштан башҡорт старшинаһы Туҡтамыш Ишбулатов отрядының Өфөгә яҡынайып килеүе тураһында мәғлүмәт ала. Ҡәнзәфәр үҙе көньяҡ-көнбайыштан бара, уға ярҙамға Һеләүһен Кинзин отряды ашыға. Ҡәнзәфәр үҙенең күрһәтеүҙәрендә уның менән бергә Нуғай юлының яһаҡ түләүсе татарҙары старшинаһы Ҡунаҡҡол Атйетәровтың һәм Ҡазан юлының яһаҡ түләүсе татарҙары старшинаһы Ибраш Уразбахтиндың да булыуын телгә алмай [5]. Баш күтәреүселәр барлыҡ ошо отрядтар менән «Өфөгә һөжүм итергә һәм бөтә ерҙә хәрби командаларҙы ҡыйратырға»[6] ниәтләгән.

Ҡәнзәфәр әйткән факттар башҡа пугачевсыларҙың дәлилдәре менән раҫлана. Гәйнә волосы Гаулов ауылы башҡорттарынан баш күтәреүселәр старшинаһы Сәйфел-Мәүлет Сәйҙәшев, Ҡазан йәшерен комиссияһында унан һорау алғанда, июлдә Өфөнән алыҫ түгел Салауат Юлаев отрядтары торҙо һәм ҡалаға бер кемде лә үткәрмәне [7], тип күрһәтә. Ә баш күтәреүселәрҙең йөҙ башлығы Саваҡол

---

[1] Крестьянская война..., 307-се бит.
[2] Шунда уҡ, 302-се бит.
[3] Шунда уҡ, 315—316-сы биттәр.
[4] Шунда уҡ, 319-сы бит.
[5] Старшина Ҡыҙрас Муллаҡаевтың 1774 йылдың авгусында Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — Крестьянская война..., 226-сы бит.
[6] Шунда уҡ, 221—222-се биттәр.
[7] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 4, л. 207 об.

ауылынан яһаҡ түләүсе татар Әмир Абдекәев, Ҡәнзәфәр Усаевтың, баш күтәреүселәрҙе йыйғанда «башҡорт старшинаһы Ҡыҙрасты тоторға һәм барып Өфөнө ҡыйратырға»[1] ниәтләүен әйтә. Хөкүмәткә тогро старшиналарҙың һәм йөҙ башлыҡтарының рапорттарында Салауат Юлаев, Ҡәнзәфәр Усаев, Ҡаранай Моратов һәм Ҡанбулат Юлдашевтың июлдең икенсе яртыһында Өфөнән 50—70 саҡрымдар арала хәрәкәт иткән отрядтарының боевой эштәре тураһында ла мәғлүмәттәр бар [2].

Ләкин шулай килеп сыға, августың тәүге көндәрендә Ҡәнзәфәр Усаевты әсиргә алалар [3]. Уның отрядын тар-мар итеү баш күтәреүселәрҙе Өфөгә походҡа барыу уйынан ваз кисергә мәжбүр итә. Башҡортостандың үҙендә дошмандың регуляр ғәскәри көстәренең һәм урындағы язалау отрядтарының тупланыуы ла быга йоғонто яһамай ҡалмай. Мәғлүмәттәр буйынса август башына Ырымбур менән Өфө араһында, Бөгөлсәндә, Табында һәм Стәрлетамаҡта даими постар тотоп, полковник П. А. Шепелев ғәскәрҙәре торған. Өфө гарнизонына ярҙам итер өсөн ҡалаға подполковник И. Қ. Рылеев корпусы инә. Рылеев Шепелев һәм полковник А. Я. Якубович (Якубович Өфөнән Бөгөлмә менән Минзәләгә тиклем районды үҙ контролендә тота) командалары менән бәйләнеш булдыра. Көңгөр өйәҙендә һәм Красноуфимскиҙа подполковник А. В. Папав, майорҙар Д. О. Гагрин һәм Ф. Жолобовтың гарнизон һәм армия командалары була. Жолобовҡа И. А. Деколонгтың Исет провинцияһында ҡалған корпус ғәскәрҙәре менән бәйләнеш тотоу тапшырыла. Өҫтәүенә, Үрге Яйыҡ крепосынан Үҙәк Башҡортостанға Ф. Ю. Фрейман корпусы бара; уға ғәскәрҙәрҙе Ағиҙел буйындағы Бөгөлсәндән алып Ыҡ йылғаһының үрге ағымына табан урынлаштырырға ҡушыла [4]. Шулай итеп, Башҡортостанда баш күтәреүселәр хәрәкәте усағы хөкүмәт ғәскәрҙәре ҡулсаһында булып сыға.

Бер үк ваҡытта рус булмаған халыҡтарҙан ойошторолған отрядтарҙың язалау эшмәкәрлеге активлаша. Әгәр Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе этабында был отрядтар аҙ һанлы булып, регуляр хәрби командаларҙың ярҙамынан башҡа һуғышырға батырсылыҡ итмәһә, Пугачев ғәскәре Башҡортостандан киткәс, улар, баш ҡалҡытып, үҙ аллы операциялар үткәрә башлай. Башҡортостандың төньягында баш күтәреүселәрҙе Ҡолой Балтачев, Шәрип Кейеков, Рахманғол Иртуғановтарҙың ҙур отряды, көньяҡ-көнбайышта — Ҡыҙрас Муллаҡаевтың отряды һ. б. эҙәрләй [5]. Бөтә хәрби подразделениеларҙың да тип әйтерлек властарға тоғро башҡорт, мишәр

---

[1] ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 311—312, 316—317.

[2] Крестьянская война..., 214—216-сы биттәр.

[3] Ҡәнзәфәрҙе Ҡыҙрас Муллаҡаев тотоп ала, бының өсөн уға П. С. Потемкин миҙал, 50 һум аҡса бирә һәм шунда уҡ Салауат Юлаев менән Ҡаранай Моратовты тоторға ҡуша. — Крестьянская война..., 225, 401, 402-се биттәр.

[4] П. М. Голицындың 1774 йылдың 2 авгусында Хәрби коллегияға һәм 9 авгусында П. И. Панинға рапорттары. — ЦГВИА, ф. 20, д. 1233, л. 387; «Пугачевщина» китабында, 3-сө том, 282—287-се биттәр.

[5] Крестьянская война..., 225—229, 269-сы биттәр.

һәм татар старшиналары һәм йөҙ башлыҡтарының атлы отрядтары була. 1774 йылдың июлендә — авгусында Исет провинцияһының Ҡатай волосынан башҡорт старшинаһы Терегол Ҡаҙанбаев коллежский советник И. Л. Тимашевтың ғәскәрҙәренә юл күрһәтеүсе ролен үтәй, көтөлмәгәндә килеп сығып, баш күтәреүселәрҙең отрядтарын тар-мар итергә ярҙам итә[1]. Тик ҡайһы бер старшиналар ғына, баш күтәреүселәргә ҡаршы асыҡтан-асыҡ сығыш яһарға батырсылыҡ итмәй, битараф позиция тоторға саҡыра: «Беҙгә үҙ-ара бер ниндәй ҙә буталышыу кәрәк түгел, тыныс йәшәргә кәрәк»[2]. Ләкин Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе этабында уҡ тыуған бер тенденция асыҡлана — баш күтәреүселәргә ҡаршы асыҡтан-асыҡ һәм ҡоторонҡо көрәшкә сыҡҡан старшиналар күбәйгәндән-күбәйә.

Бындай шарттарҙа айырым-айырым көрәш алып барған баш күтәреүселәр отрядтарын берләштереүгә иҫәп тотоу ауыр була. Салауат һәм уның көрәштәштәре, килеп тыуған хәлгә баһа биреп, Өфөгә поход менән барыуҙан баш тарта. Әммә улар октябргә тиклем ҡалаға хәүеф һалып тора. 7 октябрҙә И. А. Рейнсдорп, полковник П. А. Шепелевҡа ордер биреп, «восстаниеның «иң беренсе» башлыҡтарынан «Салаватка Юлаевты һәм хәҙер Өфө ҡалаһына яҡындағы уның кеүек бүтәндәрҙе» ҡулға алыуҙы[3] талап итә. Баш күтәреүселәр Өфө һәм губерна үҙәге менән бәйләнеш тотоуға ҡамасаулаған. Мәҫәлән, Яңы Мәскәү юлында йәшәгән татарҙар, инде Пугачев тар-мар ителгәс тә әле, юлдан үтеүсе төрлө кешеләр тураһында күп ауылдарҙан «баш күтәреүсе башҡорттарға» хәбәр итәләр һәм улар менән бергә юлға сығып, тегеләрҙе үлтерәләр»[4].

1774 йылдың авгусынан алып Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш волостары баш күтәреүселәр хәрәкәтенең төп районына әүерелә. Был районда уларҙың баш етәксеһе Салауат була. Бында язалаусылар байтаҡ хәрби көстәрен ебәрә, бында иң ҙур һуғыштар була. Августа—сентябрь башында Башҡортостандың төньяғында булған һуғыш хәрәкәттәре тураһында генерал П. И. Панин канцелярияһында уның офицерҙарының рапорттары буйынса төҙөлгән ведомость был йәһәттән күп кенә мөһим мәғлүмәттәр бирә[5]. Ағиҙел менән Бөй йылғалары араһында Айыт Сәитов, Баҡый Туйкиев һәм Йәрмөхәммәт Ҡәҙермәтовтың баш күтәреүселәрҙән торған отрядтары күп тапҡыр һуғышта ҡатнаша. 30 августа Бөй йылғаһының һул яҡ ҡушылдығы Әмзә йылғаһы буйындағы Музякино ауылы эргәһендә ике мең кешенән берләшкән отряд майор И. Штерич командаһы менән алыша. Бер нисә көн

---

[1] Терегол Ҡаҙанбаевтың 1774 йылдың 15 авгусында Исет провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 8, л. 268; И. Л. Тимашевтың 1774 йылдың 5 авгусында Ф. Ю. Фрейманға рапорты. — Шунда уҡ, л. 221—223.

[2] Старшина Әлибай Мырҙаголовтың 1774 йылдың 26 июнендә Ҡазан юлы старшиналары Ибраш Уразбахтин менән Мәҡсүт Мырҙаҡаевҡа хаты. — «Документы ставки Е. И. Пугачева...» китабында, 122-се бит.

[3] Крестьянская война..., 238-се бит.

[4] Пугачевщина, 3-сө том, 362-се бит.

[5] Материалы для истории Пугачевского бунта. *Грот Я. К.* «Труды» китабында. 4-се том, 640—641-се биттәр.

үткәс, 4 сентябрҙә Иваново ауылында Штерич ғәскәрҙәренә мең ярым кешенән торған Салауат Юлаев отряды һөжүм итә. Ә тағы ла ике көндән һуң Штеричҡа ошонда уҡ Йәрмөхәммәт Ҡәҙермәтов менән осрашырға тура килә. Был фактар баш күтәреүселәр командирҙарының үҙ хәрәкәттәрен яраштырырға тырышыуҙары тураһында фекер тыуҙыра. Салауат менән Йәрмөхәммәттең бергә булып сығыуҙары ла осраҡлы хәл түгел. Штерич командаһына бергәләп һөжүм итеү тураһында уларҙың алдан һөйләшеп ҡуйыуҙары бик ихтимал [1].

Салауаттың Штерич менән һуғышын тасуирлау беҙ тикшергән документтарҙа табылманы. Шуныһы ғына мәғлүм: баш күтәреүселәр башлығының хәрби оҫталығы майорҙа бик ҙур тәьҫир ҡалдыра. Уның Салауатты «бик шәп һыбай йөрөүсе» тип атауы Штеричтың рапорты индерелгән ведомоста һаҡланған [2].

4 һәм 6 сентябрҙәрҙә булған һуғыштар тураһында өҫтәмә мәғлүмәттәр И. Штеричтың Яйыҡ казактары атаманы Н. Г. Назаровҡа биргән аттестатында бар. Документта әйтелеүенсә, беренсе һуғышта Салауат менән бергә Әһлетдин Биктуғанов була, ә 6 сентябрҙә Штеричҡа ҡаршы Йәрмөхәммәт Баҡый Туйкиев менән бергәләп һуғыша [3]. Шулай итеп, асыҡланыуынса, Салауат Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш волостарында үҙенең элекке көрәштәштәре менән бергә хәрәкәт иткән булып сыға. Май—июндәге кеүек, уларға хәрби яҡтан ярҙам күрһәтә.

Салауаттың артабанғы ниәттәре тураһында 5 сентябрҙә Көңгөрҙә алған мәғлүмәттәр буйынса фекер йөрөтөргә мөмкин: «Ҡариҙел йылғаһы аръяғында башҡорт Салаваткаҙың меңгә тиклем йыйылған башҡорто, йәнә уға килгән ике мең Тулва татары бар, һәм ул Ачит крепосына, шулай уҡ Көңгөргә, уларҙа бер ниндәй ҙә командалар юҡ тип уйлап, һөжүм итергә теләй»[4].

Был ниәттәр тормошҡа ашмай, сөнки сентябрҙә Салауат Өфөнән килгән язалаусылар менән һуғышҡа инә.

Башҡортостандың төньяғында баш күтәреүселәр көрәшенең активлашыуы провинция властарын бик борсой һәм улар, Өфөнөң яҙмышы өсөн хәүефләнеп, шул төбәккә подполковник И. Ҡ. Рылеев командаһын ебәреүҙе талап итә. 13 сентябрҙә Бөрө һәм Танып йылғалары араһындағы районда Салауат етәкселегендәге баш күтәреүселәрҙең ҙур ғына көстәре тупланыуы тураһында Өфөгә хә-

---

[1] Йәрмөхәммәт Ҡәҙермәтов — Ҡазан өйәҙе Ишбулды ауылынан яһаҡ түләүсе татар, Кама буйында хәрәкәт иткән баш күтәреүселәр отрядтарының старшинаһы һәм полковнигы.

Йәрмөхәммәт августың уртаһында уҡ, язалау отрядтарының Әңгәсәк заводына килеүҙәрен белеп, баш күтәреүселәрҙең көстәрен туплау тураһында приказ тарата. Ул приказдарҙың береһе 14 августа Айыт Сәнтовҡа ебәрелә. — Документы ставки Е. И. Пугачева..., 116, 117, 315—319, 321—324, 353 һ. б. биттәр.

[2] Материалы для истории Пугачевского бунта. — *Грот Я. К.* «Труды» китабында, 4-се том, 641-се бит.

[3] ЦГВИА, ф. 52, оп. 194, д. 101, л. 66.

[4] Пугачевщина, 2-се том, 267-се бит.

бәр килгәс, Рылеев Өфөнән шунда йүнәлә [1]. 18 сентябрҙә ҡаланан 90 саҡрым алыҫлыҡта, Бөрө йылғаһы буйындағы Тимошкино ауылына яҡын урында Салауат атлыларының алғасҡы отряды көтөлмәгәндә язалау командаһына һөжүм итә, сафтарҙа сыуалыш тыуҙыра һәм, ығы-зығы ҡуптарып, тиҙ генә ҡаса. Салауат отрядының төп көстәре ҡайҙа тупланыуын белеү өсөн, Рылеев Тимошкино ауылында туҡталырға мәжбүр була [2]. Бәрелеш 22 сентябрҙә Һөркә ауылы эргәһендә була. Салауат отряды Рылеев командаһына бере́нсе булып ташлана (генерал П. М. Голицындың һүҙҙәренә ҡарағанда Салауат «һөжүм итергә... батырсылыҡ итте») [3]. Салауаттың өс мең кешелек отряды составында атаман Семен Шеметов етәкселегендәге Елдәк казактары командаһы була [4]. Салауат Өфөлә һорау алыу ваҡытында һуғышта ҡатнашҡан йәнә бер кешенең исемен — Себер юлы Ҡара Табын волосынан башҡорт баш күтәреүселәр полковнигы Әбделйәлил Ырыҫҡоловты атай [5]. Ләкин августа һәм сентябрҙә Әбделйәлилдең Арыҫлан Ранғолов, Бүләк Яҡупов, Уса юлы Гәйнә волосы баш күтәреүселәре старшинаһы Әбделсәләм Рәмзиндең отрядтары менән бергә хәрәкәт иткәнлеге башҡа сығанаҡтарҙан билдәле булыуын иҫкә алғанда, улар был юлы ла Салауаттың йыйылма отрядына ингәндер, тип уйларға мөмкин. Сентябрь башында шул уҡ районда, Уран волосында Әһлетдин Биктуғановтың бер меңлек отряды тора [6]. Тап бына Салауаттың ошо отрядтарҙы үҙ ҡул аҫтына берләштереүенә дәлил булып Ҡолой Балтачев, Ишмөхәммәт Сөләймәнов һәм башҡа язалаусыларҙың Өфөгә ебәрелгән донесениелары хеҙмәт итә ала. Улар провинция канцелярияһынан үҙҙәренә ярҙамға регуляр командалар ебәреүҙе һорай, сөнки үҙҙәре генә Башҡортостандың төньяҡ волостарында хәрәкәт итеүсе «боласы... Салауатты» һәм уның яҡлыларҙы еңә алмайҙар икән» [7]. 22 сентябрҙәге һуғыш оҙаҡ һәм ауыр булған. Салауат отрядтары бер нисә тапҡыр һөжүмгә күтәрелә, ләкин дошман пушкаларҙан һәм мылтыҡтан көслө ут яуҙырып, уларҙы бер-бер артлы баштағы позицияларға алып ташлай. Баш күтәреү-

---

[1] И. Ҡ. Рылеевтың 1774 йылдың 12 сентябрендә Өфө провинция канцелярияһына белдереүе.— ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 175; П. М. Голицындың 1774 йылдың 16 октябрендә П. И. Панинға рапорты. — Шунда уҡ, ф. 1274, д. 179, л. 34.

[2] Крестьянская война..., 231-се бит.

[3] И. Ҡ. Рылеевтың 1774 йылдың 6 октябрендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 225; П. М. Голицындың 1774 йылдың 16 октябрендә П. И. Панинға рапорты. — Шунда уҡ, ф. 1274, д. 179, л. 34.

[4] Шеметов С. — Елдәк казагы. Пугачев хәрәкәтендә 1773 йылдың декабренән 1774 йылдың октябренә тиклем булған. Өфө эргәһендәге һуғыштарҙа Нуғайбәкте алыуҙа ҡатнашҡан. 1774 йылдың йәйендә Салауат Юлаевтың тәҡдиме буйынса Елдәк крепосы казактарының атаманы итеп һайлана (С. Шеметовтың 1774 йылдың октябрендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 349, д. 7248, л. 14—18; Крестьянская война..., 260—261-се биттәр).

[5] Шунда уҡ, 319-сы бит. Салауаттың күрһәтеүҙәрендә Рылеевҡа ҡаршы һуғыш тураһында II главаның 4-се параграфында тулыраҡ әйтелгән.

[6] Шәрип Ҡейековтың 1774 йылдың 4 сентябрендә Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 113—114.

[7] Крестьянская война..., 233-сө бит.

селәр ауыр юғалтыуҙар кисерә — 400 кеше үлтерелә һәм улар сигенергә мәжбүр була, Рылеев яғында һуғышыусы башҡорт һәм мишәр старшиналары уларҙың «Салаватка Юлаев етәкселегендәге... «отрядтар төркөмөн ҡырып бөтөрөүҙә тоғро һәм күндәм хеҙмәт итеүҙәрен» раҫлаусы аттестаттар менән бүләкләнә [1].

Салауат Елдәк крепосына сигенеп, унда үҙ отрядына өс мең самаһы һуғышсы йыйнай [2]. Ул, Рылеевтың Елдәк крепосына табан килеүен белгәс, унан аҡса ҡаҙнаһын һәм тоҙҙо алып китергә бойороҡ бирә. Был бойороҡто үтәү йөҙөнән казактар ҡушылған бөтә нәмәне кәмәләргә тейәп, Ҡариҙел йылғаһы буйлап төшһәләр ҙә, отставкалағы атаман Старков уларҙы 25 сентябрҙә Елдәкте алған Рылеевҡа бирә [3].

Салауат Штерич менән Рылеевҡа ҡаршы һуғышҡан мәлдә, генералдар А. Д. Скалонга, И. А. Деколонгка һәм губернатор И. А. Рейнсдорпҡа Салауат менән Юлай Аҙналиндың өс мең кешенән торған отряды, имеш, Исет провинцияһы сиктәренә ингән һәм Ҡыштым заводын алырға йыйына икән, тип хәбәр итәләр. Ошо дөрөҫ булмаған хәбәрҙәргә ҡарағанда, баш күтәреүселәр, өс төркөмгә бүленеп, йәнәһе, бер төркөм — Усть-Багарятск йорто аша Долматов монастырына, икенсе төркөм — Мөслим ауылына табан барып, унан һуң рус ауылдарынан үтергә, өсөнсө төркөм Миәс йылғаһы буйлап «буйһонған башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙән» [4] түбәнгә төшөргә тейеш була. Салауат был урындарҙан йөҙҙәрсә саҡрымда булған, ләкин Исет провинцияһында торған баш күтәреүселәр, Салауат менән килешеп, шулай хәрәкәт итергә иҫәп тотҡандыр, тип уйларға мөмкин. Был Салауаттың Исет провинцияһындағы баш күтәреүселәр башлыҡтарының береһе менән бәйләнеш тотоуы тураһында мәғлүмәттәр килтерелгән тикшереү эше материалдарында ситләтеп булһа ла раҫлана. Салауаттың 1774 йылдың 25 ноябрендә подполковник Н. Я. Аршеневскийҙың поход канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәрендә уның, Салауаттың, еңелгән хәлдә, Исет провинцияһы Ҡара Табын волосы старшинаһы Юламан Кушаев менән ҡаҙаҡ далаларына ҡасырға һүҙ ҡуйышыуы хаҡында раҫлау бар [5]. Был — Салауаттың Пугачев генералы Юламан менән, ғәскәри һаҡ хеҙмәтендә 25 йыллыҡ тәжрибәһе булған старшина менән, бәйләнешен дөрөҫләүсе берҙән-бер факт [6]. 1774 йылдың ҡара көҙөнә тиклем Юламан Исет провинцияһы территорияһында баш күтәреүселәр хәрәкәтендә ҡатнашлыҡ итә. Ул үҙенең отряды менән язалау командаларына һөжүм

---

[1] И. А. Рейнсдорптың 1776 йылдың 5 октябрендәге билдәләмәһе. — ГАОО, ф. 3, д. 155, л. 67—68; И. К. Рылеевтың 1774 йылдың 29 октябрендә Ишмөхәммәт Сөләймәновҡа һәм Бәхтиәр Янышевҡа аттестаттары. — ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 98 об., 134.

[2] Крестьянская война..., 236, 237-се биттәр.

[3] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 8 октябрендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 12, л. 268—269.

[4] Шунда уҡ, л. 62; ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 12.

[5] Крестьянская война..., 320-се бит.

[6] И. А. Рейнсдорптың 1769 йылдың 18 апрелендәге билдәләмәһе. — ГАОО, ф. 3, д. 100, л. 24; Крестьянская война..., 389, 407, 410-сы биттәр.

итә, Е. А. Ступишин менән коллежский советник И. Л. Тимашевҡа Көнсығыш Башҡортостанда «тыныслыҡ урынлаштырырға» ҡамасаулай [1].

Октябрь башында Салауат Юлай Аҙналин отряды тарафынан май айынан уҡ ҡамап алынған Ҡатау-Иван заводы районына килә. Июндә Юлайҙың башҡорт, мишәр һәм сыуаштарҙан торған отряды завод крәҫтиәндәренең ярҙамы менән Усть-Ҡатау һәм Йүрүҙән заводтарын ала. Баш күтәреүселәр, Пугачевтың бойороғон үтәп, завод ҡаралтыларын, шулай уҡ Орловка, Ар, Ломовка һәм Ерал ауылдарын яндыралар [2]. Һорау алғанда, Юлайҙың әйтеүенә ҡарағанда, бөтә крәҫтиәндәрҙе, уларҙың йорттарын яндырғансы, яланға ҡыуғандар, ә һуңынан элек Эҫем заводы крәҫтиәндәре менән булған кеүек [3], Көңгөр өйәҙенә оҙатҡандар, ләкин емертелгән заводтар араһында бер Ҡатау-Иван заводы ғына имен ҡалған.

Баш күтәреүселәр үҙ вәкилдәрен бер нисә тапҡыр «һөйләшергә»[4] ебәрә. Августа Юлайҙың кешеләре завод крәҫтиәндәренә «ки-

---

[1] И. Л. Тимашевтың 1774 йылдың 10 июлендә Ф. Ю. Фреймանға рапорты. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 8, л. 219; мишәр Сәлим Мәмәтҡоловтың 1774 йылдың 9 августында Исет провинцияһында һорау алғандағы күрһәтеүе. — Шунда уҡ, л. 119 об.; Е. А. Ступишиндың 1774 йылдың 13 октябрендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — Шунда уҡ, ф. 1100, д. 12, л. 132 об.; И. Л. Тимашев отрядының һуғыш хәрәкәттәре (1774 йылдың апреле—сентябре) журналының экстракты. — Шунда уҡ, ф. 6, д. 503, л. 66—68; И. Г. Лазаревтың 1774 йылдың 6 ноябрендә П. И. Панинға рапорты. — Шунда уҡ, ф. 1274, д. 179, л. 36.

Юламан ноябрь уртаһында И. Л. Тимашев тарафынан әсиргә алына.— 1774 йылдың 22 ноябренә Тимашевта булған старшиналар, уларҙың ярҙамсылары һәм йөҙ башлыҡтарының исемлеге. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 188.

[2] Я. Б. Твердышевтың 1774 йылдың 2 июлендә И. А. Рейнсдорпҡа донесениеһы. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 9, л. 133. Шуны әйтеп үтеү мөһим, хатта генерал Ф. Ф. Щербатов, рус крәҫтиәндәренең башҡорт баш күтәреүселәре менән берлектәге сығыштарының сәбәптәрен аңлатып, завод хужаларының крәҫтиәндәрҙе йыртҡыстарса эксплуатациялауы тураһында былай тип яҙған: «...завод хужаларының үҙ крәҫтиәндәренә ҡарата булған ҡанһыҙлығы крәҫтиәндәрҙә үҙ хужаларына ҡарата шундай уҡ нәфрәт тыуҙырҙы. Ә был шунан күренә: «крәҫтиәндәр заводтарҙы баш күтәреүселәрҙең һөжүменән аҙ ғына ла яҡламаны» һәм ҡурҡыныс тураһында иҫкәртеп тә, яҡлауҙы һорап та, ғәскәри командаларға килмәне, ә, киреһенсә, Твердышевтың Һуңғы заводын яндырыу тураһында Бөгөлсәндәге приказчик полковник Хорвату, ул заводты яндырыуға крәҫтиәндәр үҙҙәре башҡорттарға юл ҡуйҙы, тип әйтә». — «Крестьянская война...» китабында, 191, 391-се биттәр.

[3] Крестьянская война..., 317-се бит. «Я. Б. Твердышевтың һәм Ҡатау-Иван заводы контораһының, заводтарҙа һәм ауылдарҙа баш күтәреүселәр кешеләрҙе ҡырып бөтөрҙөләр», «бер кешене ҡалдырмай сәнсеп үлтерҙеләр» тип раҫлауҙары баш күтәреүселәргә күрәләтә яла яғыу булған. 1775 йылға заводтарҙың торошо тураһындағы ведомость Көңгөр өйәҙенән Усть-Ҡатау заводына 701 кеше, Эҫем заводына — 1433 кеше ҡайтыуын, Ҡатау-Иван заводында 1920 кеше ҡалыуын хәбәр итә. Крәҫтиәндәр һуғышының бөтә осоронда Эҫем, Ҡатау һәм Йүрүҙән заводтарында ирҙәрҙән юғалтыу 663 кеше тәшкил итә. (Тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: *Вагина П. А.* К вопросу о состоянии рабочей силы на заводах Южного Урала после Крестьянской войны 1773—1775 гг. — «Вопросы истории Урала» китабында, Свердловск, 1961, вып. 39, ч. 1, 48—49-сы биттәр; Крестьянская война в России в 1773—1775 годах. Восстание Пугачева, 3-сө том, 69-сы бит.)

[4] Ҡатау-Иван заводы контораһының 1774 йылдың 16 июнендә һәм 3 июлендә Өфө провинция канцелярияһына рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 9, л. 131—132, 589—590; Я. Б. Твердышевтың 1774 йылдың 24 июлендә И. А. Рейнсдорпҡа донесениеһы. — Шунда уҡ, л. 587—588; Пугачевщина, 2-се том, 269-сы бит.

лешеп йәшәү» тәкдиме менән килә. Завод администрацияһы уларҙың заводҡа «яҡшы һәм ышаныслы башҡорттарҙан» заложниктар — аманаттар ебәреүҙе талап иткән. Ләкин баш күтәреүселәр завод приказчиктарына ышаныրға ярамағанлығын белә, сөнки улар июнь айында һөйләшеү өсөн ебәрелгән башҡортто мәкерле рәүештә тотоп ала. Тап быуа шуның өсөн баш күтәреүселәр аманат ебәреүҙән баш тарта [1]. Завод приказчиктары һәм поп башҡорттарҙың «вәхшилектәре» тураһында ялған таратып крәҫтиәндәрҙе ҡурҡытыуға, милли дошманлыҡ тоҡандырыуға һәм баш күтәреүселәргә ҡаршылыҡ күрһәтеүгә өлгәшә. Крәҫтиәндәрҙең баш күтәреүселәргә дошманлыҡ менән ҡарауы шуның менән дә аңлатыла: завод һәм уны уратып алған ауылдар улар өсөн берҙән-бер көн күреү сараһы булған. Уларҙың күпселеге Я. Б. Твердышев менән И. С. Мясниковтың крәҫтиәндәре, хужалары менән Башҡортостанға күсеп килгән крепостнойҙар, булған. Завод яҡшы нығытыла, уның бер нисә пушкаһы, запас мылтыҡтары һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары була. Ошоноң өҫтөнә, Өфөнән бында пушкалар өсөн 5 бот дары килтерелгән [2].

Ҡатау заводтары районында Юлай Аҙналиндың эштәре тураһында урындағы администрацияның хаттарынан торған документтар ҙа, Өфө тикшереүселәре йыйған (ул үҙе лә Өфөлә һорау алыу ваҡытында «бөтәһенә лә баш начальник булдым»[3] ти) шаһитлыҡ күрһәтеүҙәре лә һөйләй, ә Салауаттың Ҡатау-Иван заводын ҡамап алыуҙа ҡатнашыуы тураһында документтар күп түгел. Улар: Салауат менән Юлайҙың завод управителдәре менән приказчиктарға хаты, Өфө коменданты С. С. Мясоедовтың И. А. Рейнсдорпҡа губерна канцелярияһында төҙөлгән рапорт экстракты, завод хужалары И. С. Мясниковтың һәм Я. Б. Твердышевтың вәкиле А. И. Кругловтың 1775 йылдың 20 майында Берг-коллегия ағзаларына ведомосы [4].

Сентябрҙең беренсе яртыһында, күрәһең, Штеричка ҡаршы һуғыштарҙан һуң, Салауат атаһының ставкаһына килә. Заводта йәшәүселәргә 10 сентябрҙә баш атаман Юлай Аҙналин менән бригадир Салауат Юлаев ҡул ҡуйған мөрәжәғәтте төҙөү шул ваҡытҡа тура килгән дә инде. Ул мөрәжәғәттә рус крәҫтиәндәренә «татыу йәшәргә», дуҫ йәшәргә саҡырыу бар: «Әгәр һеҙҙең кешеләрегеҙ беҙгә эләкһә, беҙ уларҙы үлтермәйенсә һеҙгә ҡайтарабыҙ. Ә инде беҙҙең кешебеҙ тотолһа, уны тотҡон итәһегеҙ, ә бәғзеләрен үлтерәһегеҙ, имеш. Әгәр беҙҙең күңелебеҙҙә уҫал уй булһа, алла тәҡдирендә, һеҙҙән артығыраҡ тотоп, һеҙҙән артығыраҡ үлтерә алыр инек. Ләкин теймәйбеҙ — сөнки күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ»[5]. Салауат менән Юлай завод крәҫтиәндәренең күптән түгел генә

---

[1] Ырымбур губерна канцелярияһының 1774 йылдың 13 ноябрендәге документтар экстракты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 201—202; д. 9, л. 131—132.

[2] Крестьянская война..., 237-се бит.

[3] Шунда уҡ, 315, 317, 326—329-сы биттәр.

[4] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 256—257-се биттәр; ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 201—202; ф. 271, д. 1339 б, л. 340 об.

[5] Документы ставки Е. И. Пугачева..., 256—257-се биттәр.

бөтәһе бергә халыҡ көрәшендә ҡатнашыуҙарын, улар «Петр Федорович ғали йәнәптәренең подданныйҙары булыуын» иҫтәренә төшөрә.

Хат Усть-Ҡатау крәҫтиәндәренең береһе, баш күтәреүселәр тарафынан махсус рәүештә ошо йомошто үтәү өсөн эләктерелгән кеше, менән ебәрелә. Завод канцелярияһында һорау алған ваҡытта крәҫтиән шуларҙы һөйләй: «Юлай менән Салауат заводтағы бөтә хәлдәрҙе, йәғни завод тирәләй стенаның нисек нығытылыуын, күпме пушка һәм дары булыуын, заводта нисә хәрби команда барлығын һораны», ти [1]. Был крәҫтиәнде ҡамап алынған заводҡа ебәргән саҡта, Юлай менән Салауат завод администрацияһына шуны әйтергә ҡуша: уларға заводты яндырыу бер ни түгел — «завод тирәләй стенаға һалам һалырға ла ут төртөргә» [2]. Ләкин улар быңдай рәхимһеҙлекте ҡыла алмай: ҡурҡҡан һәм алданған йөҙҙәрсә крәҫтиән янғында һәләк булыр ине. Баш күтәреүселәрҙең «йыртҡыслығы» тураһында властарҙың хәбәр таратыуына ҡарамаҫтан, был факт, башҡа күп кенә факттар кеүек үк, баш күтәреүселәрҙең ҡалаларҙы, крепостарҙы тыныс юл менән, ҡан түкмәй алырға ынтылыуҙарын раҫлай. Ҡамау ноябрь аҙағына тиклем һуҙыла, ләкин барыбер баш күтәреүселәр заводты ала алмай [3].

Ҡатау-Иван заводын ҡамау Салауаттың иғтибарын оҙаҡ йәлеп итмәй. Ул китә лә яңынан заводҡа ҡайта. Ә уның отрядтары төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостандың икһеҙ киңлектәрендә күп урындарҙа хәрәкәт итә. Өфө провинция канцелярияһы 8 октябрҙә губернаторға, Һатҡы һәм Златоуст заводтарының әсирлеккә эләккән крәҫтиәндәрен «был урындарҙан тураға Көңгөр ҡалаһына тиклем трактта» баш күтәреүселәрҙең ҡурҡыныс һалып тороуы [4] сәбәпле, Екатеринбургка Көңгөр аша түгел, ә Минзәлә аша оҙатырға мәжбүр булдыҡ», тип хәбәр итә. Ә 21 октябрҙә Бисерть заводы конторaһына Салауат Юлаевтың 300 һыбайлы менән Ҡариҙел йылғаһы буйында урынлашҡан ауылдарға килеүе һәм унда «һәр йорттан... казак йыя башлауы» тураһында билдәле була. Был эштә Салауат отрядына ошондағы Ҡәсәғол ауылы татары Иман Аласимов ярҙам итә. Яҡында ғына Илсеғол Этҡолов командалары торған. Баш күтәреүселәр берләшкән көстәр менән Ачит гарнизонына һөжүм итеп, пушкаларҙы ҡулға төшөрөргә, ә унан «артабан Екатеринбург командаларына туҡталыр ер булмаһын өсөн» [5] Бисерть һәм Ҡленов крепостарына, шулай уҡ Бисерть

---

[1] ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 201—202.

[2] Шунда уҡ.

[3] Нуғай юлы Ҡумырыҡ-Табын волосынан башҡорт старшинаһы Мораҙым Абдрахмановтың 1774 йылдың 24 октябрендә И. Л. Тимашевҡа рапорты.—ЦГАДА, ф. 1100, д. 12, л. 215; Ф. Ю. Фреймандың 1774 йылдың 7 ноябрендә П. И. Панинға рапорты. — Шунда уҡ, ф. 1274, д. 179, л. 207; завод хужалары И. С. Мясников менән Я. Б. Твердышевтың вәкиле А. И. Кругловтың 1775 йылдың 20 майында Берг-коллегия ағзалары И. Е. Глебовский һәм Н. В. Перфильевҡа ведомосы. — Шунда уҡ, ф. 271, д. 1339 б, л. 340 об.

[4] ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 81.

[5] Татар Мандар Лазаревтың 1774 йылдың 21 октябрендә Бисерть завод конторaһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — Шунда уҡ, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 49.

заводына барырға йыйына. Ошо аҙ ғына мәғлүмәттәргә ҡарап та, баш күтәреүселәрҙең Өфө провинцияһынан төньяҡҡа табан үҙҙәренең хәрәкәт итеү сфераһын киңәйтеү ниәтенән ҡайтмауҙарын белергә мөмкин. Был хәл полковник В. Ф. Бибиковты сиктәрҙе, крепость һәм заводтарҙы баш күтәреүселәрҙән һаҡлау өсөн саралар күрергә мәжбүр иткән [1].

Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың ноябрь башында Ырымбурға ебәргән ведомосында әйтелеүенсә, Себер юлының старшиналары «үҙҙәренең командалары менән әле булһа» буйһонмай һәм уларҙан «яһаҡ түләүсе старшина Алексей Бикметовтан» башҡа бер кем дә үҙенең ғәйебен танып килмәне һәм «хәҙерге ваҡытҡа тиклем» Салауат Юлаев хәрәкәт иткән Себер юлы ауылдарынан да властарға бер кем килмәне [2].

Уса юлы волостарында Салауаттың көрәштәштәренән Әҙел Азменев, Әһлетдин Биктуғанов һәм башҡаларҙың отрядтары тора [3]. П. М. Голицынға унда ноябрҙә яңы командалар күсерергә тура килгән. Генерал П. И. Панинға бының сәбәбен аңлатып, былай ти: «Хәҙер бөтә хәжәт Уса, Көңгөр һәм Красноуфимск ҡалалары тирәһендәге бола күтәргән башҡорттарҙы тынысландырыуҙан тора» [4].

Әйтеп үтелгән ваҡиғалар, Крәҫтиәндәр һуғышының өсөнсө осоронда Салауат Юлаев һәм уның көрәштәштәре Башҡортостан территорияһының байтаҡ өлөшөн үҙ контролендә тотоуын һәм ысынында был төбәктәрҙә хужа булыуын күрһәтә.

Язалау ғәскәрҙәренең ҡыҫымы, күп старшиналарҙың һәм йөҙ башлыҡтарының хыянатсыллығы һәм аумаҡайлығы 1774 йылдың көҙөндә Ҡазан, Нуғай һәм Уса юлдарындағы волостарҙа восстание ялҡынының һүрелә башлауына килтерә. Властар һәм ғәскәрҙәр командованиеһы төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда восстаниены баҫтырыуға ҙур көс һала. Ырымбур губернаторы өҫтәмә ғәскәрҙәр ебәреү һәм Өфө, Силәбе һәм Красноуфимск араһында постар ойоштороу үтенесе менән хәрби командованиеға мөрәжәғәт итә. Тап бына унда, тип айырып әйтә ул, таныҡлы Пугачев яраны Салауат Юлаев тора» һәм ҡышын ҡар баҫҡан юлдарҙан «ғәскәр үтә алмаҫ, ә ҡар ирегәс», баш күтәреүселәрҙе эҙәрләү «шаҡтай ауыр» буласаҡ, тип иҫкәртеп ҡуя [5]. Тиҙҙән генерал П. М. Голицындың бойороғона ярашлы рәүештә Красноуфимскиҙа, Ҡатау-Иван заводында һәм Әй йылғаһы буйындағы ауылдарҙа байтаҡ хәрби частар урынлаштырыла [6]. Ноябрҙә генерал Ф. Ю. Фрейман

---

[1] В. Ф. Бибиковтың 1774 йылдың 23 октябрендә П. И. Панинға рапорты.— ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 183.

[2] Крестьянская война..., 257-се бит.

[3] Пермь провинция канцелярияһының 1774 йылдың 18 октябрендә П. И. Панинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 139—140; Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 29 октябрендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — Шунда уҡ, ф. 1100, д. 12, л. 103; Крестьянская война..., 269-сы бит.

[4] П. М. Голицындың 1774 йылдың 13 ноябрендә П. И. Панинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 218 об.

[5] И. А. Рейнсдорптың 1774 йылдың 24 сентябрендә П. М. Голицынға хаты.— ЦГАДА, ф. 1100, д. 10, л. 328.

[6] П. М. Голицындың 1774 йылдың 12 октябренә Башҡортостанда ғәскәрҙәрҙең урынлашыуы тураһында веломосы. — Шунда уҡ, д. 12, л. 407.

өҫтәмә рәүештә унда подполковник И. Ҡ. Рылеев командаһын ебәрә [1]. Был частар составында башҡорт һәм мишәр старшиналарының атлы отрядтары була. 23 ноябрҙә П. М. Голицын баш командующийға былай тип хәбәр итә: «Салаватка менән уның атаһы Юлайҙы тотоу [2] өсөн тәғәйенләнгән «башҡорт старшиналары үҙҙәренең бер ни тиклем командалары менән Табын округынан йыйнала». Элек восстаниела ҡатнашҡан старшиналар, нисек кенә булһа ла, хатта хыянатлыҡ ҡылып, Салауатты тотоуҙа ҡатнашыуҙары менән хөкүмәт алдында үҙҙәренең ғәйептәрен юйырға тырыша.

Октябрҙә П. И. Панин баш күтәреүселәрҙең төп көстәрен тармар итеү һәм Пугачевты әсиргә алыу тураһында бөтә Башҡортостанға хәбәр тарата. Панин ҡорал ташларға ҡуша һәм башҡорттар буйһонмаған хәлдә «ир заттары имсәк балаларына тиклем рәхимһеҙ рәүештә ғазаплап үлтереләсәк, ҡатындары, балалары һәм ерҙәре, айырып тормайынса, ҡоллоҡҡа һәм Россияның тоғро подданныйҙарына милек итеп таратып биреләсәк», тип ҡурҡыта. Ахырҙа Панин, баш күтәреүселәрҙе «үҙегеҙҙең ысын тәүбәгә ҡайтыу һәм подданныйҙарса буйһоноу билдәһе итеп» Салауатты һәм уның атаһын «миңә буйһонған иң яҡын ғәскәр башлығына» тотоп бирергә [3] өндәй.

29 октябрҙә йәшерен комиссияларҙың начальнигы генерал П. С. Потемкин Салауатҡа хат менән мөрәжәғәт итә: «Тәүбәгә ҡайт, ғәйептәреңде танып баш ороп кил». Потемкин, әбей батшаның уның ғәйептәрен ярлыҡауын вәғәҙә итеп, Салауатты хатта һатып алмаҡсы була. Ул «монархтың мәрхәмәтенә» ирешеү өсөн, Салауатҡа язалау ғәскәрҙәре яғына сығыуҙы тәҡдим итергә йыйына: «Үҙеңдең командаң менән башҡа фетнәселәргә ябырылыр инең»,— тип яҙа ла, бындай тәҡдимдән файҙа булмауын аңлап, был һөйләмде мөрәжәғәттән һыҙып ташлай[4].

Ләкин Салауат яугирҙары өсөн «һәләк булғанға тиклем тынғыһыҙлыҡта булырға һәм буйһонмаҫҡа»[5] тигән һүҙҙәр һуғышсан ант булып яңғырай. Ф. Ю. Фреймандың хәтерендә ҡалғанса, ноябрь айында Салауат Ҡатау-Иван заводы эргәһендә 600 һалдат, 200 казак һәм башҡорттан торған отрядҡа осрай. Отрядты күреү менән үк уға ҡыйыу һөжүм яһай. Фетнәселәр пушкаларҙан атып сигенәләр, ләкин тулыһынса ҡыйратылалар»[6], Салауаттың был һуңғы һуғышы тураһында тулыраҡ мәғлүмәттәр хәҙергә табылмаған әле [7].

---

[1] Ф. Ю. Фреймандың 1774 йылдың 7 ноябрендә П. И. Панинға рапорты.— ЦГАДА, ф. 1274, д. 179, л. 207.

[2] Шунда уҡ, л. 380.

[3] Крестьянская война..., 242-се бит.

[4] Шунда уҡ, 248-се бит.

[5] Өфө провинция канцелярияһының 1774 йылдың 9 октябрендә И. А. Рейнсдорпҡа рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 11, л. 254.

[6] Neue Nordische Miscellaneen, s. 407.

[7] Был һуғыш тураһында юғарыла әйтеп үтелгән А. И. Круглов ведомосында ҡыҫҡаса иҫкә алына. Унда ноябрҙең һуңғы көндәрендә Өфөнән ебәрелгән ғәскәри команда Ҡатау-Иван заводы янында «башҡорттар толпаһын ҡыуып ебәреп, яуыз Салаватканы тотҡан» тип күрһәтелә. — ЦГАДА, ф. 271, д. 1339 б, л. 340 об.

Язалау ғәскәрҙәренең һөжүм итеүе шарттарында асыҡ көрәштә дауам итеү мөмкин булмай. Салауат һәм баш күтәреүселәрҙең башҡа етәкселәре, күрәһең, отрядтарҙы таратырға булғандарҙыр. Баш күтәреүселәр үҙ ауылдарына ҡайта. Ләкин дошман яғына ҡасып сыҡҡан писарь Абдулла Ҡорманаев, улар «тыныслыҡҡа риза булырға ниәтләйҙәр, ләкин был — алдау. Ҡышты шулай үткәреп, йәренгә элеккесә бола күтәрәсәктәр»[1] тип ошаҡлай. Күптәр, әгәр властар рәхимһеҙ үс ала башлаһа, ҡаҙаҡ далаларына күсеп китеү тураһында алдан һүҙ ҡуйыша: «тауҙарҙа йәшәүселәр бөтәһе лә, әгәр уларҙы бола күтәргән өсөн язаламаһалар», ул саҡта «үҙҙәренең торған ерҙәрендә ҡалырға теләй, ә әгәр киреһенсә булһа, ҡырғыҙ урҙаһына китәсәк»[2]. Ҡайһы бер старшиналар был турала ҡаҙаҡ жуздары вәкилдәре менән һөйләшеү алып бара. Мәҫәлән, Исет провинцияһы Барын-Табын волосынан поход старшинаһы Шөкөр Әбзәмов ҡаҙаҡтарға былай тигән: «Әгәр бында ҡыҫа башлаһалар, ул саҡта бөтөнләй улар далаһына күсеп китер, улар менән бергәләп йәшәр»[3]. Губернатор, башҡорттарҙың ошондай ниәттәрен белеп, Яйыҡ сик һыҙығын ғәскәрҙәр менән нығытырға тырышҡан[4]. Салауат, әйтеп үтелеүенсә, киләһе йылда үҙ халҡын яңынан восстаниеға күтәреү өсөн, шулай уҡ урман-тауҙар аша ҡырғыҙҙарға китергә булған, уның бөтә иптәштәре лә быға риза икән»[5]. Был ниәт тормошҡа ашмай ҡала, сөнки 25 ноябрҙә язалау отрядтары Салауатты тотоп ала.

Башҡортостан территорияһында ҡышҡы айҙарҙа восстание баҫыла тип әйтерлек. Ләкин язалау ғәскәрҙәре командующийы П. И. Панин Башҡортостандағы хәлде дөрөҫ баһалай. 1774 йылдың 5 декабрендә Екатерина II-гә ебәргән реляцияһында ул былай тип яҙа: «Ҡырғыҙҙар һәм башҡорттар тураһында, иң беренсе сиратта, ҡыш башланыу сәбәпле, уларҙың хәҙерге ваҡытта тынысланыуҙарына ҡарамаҫтан, киләһе яҙға тиклем бер ниндәй ҙә һығымталарға килеп булмай». Уның фекеренсә, Башҡортостанда яңы сыуалыш тоҡанып китеүен байтаҡ һанда хәрби командалар туплап, ҡорал көсө менән генә бөтөрөргә мөмкин[6]. Восстаниеның яңынан дөрләп китеүенән ҡурҡып, хөкүмәт ғәскәрҙәрен Башҡортостанда 1775 йылдың аҙағына тиклем тоторға мәжбүр була. Унан башҡа, юғарыла әйтеп кителеүенсә, халыҡты ҡурҡытыу өсөн П. И. Паниндың бойороғо буйынса Ырымбур губернаһы ҡалала-

---

[1] Абдулла Ҡорманаевтың 1774 йылдың 7 сентябрендә Үрге Яйыҡ коменданты канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 10, л. 379—380.

[2] Баҡалы казагы И. Федоровтың 1774 йылдың 19 авгусында Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 467, ч. 8, л. 70.

[3] Исет провинцияһы Әйле волосы башҡорто Ҡолаҡ Қитековтың 1774 йылдың 30 октябрендә Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 627, ч. 12, л. 172.

[4] И. А. Рейнсдорптың 1774 йылдың 31 декабрендә П. И. Панинға рапорты. — ЦГАДА, ф. 1100, д. 13, л. 343—344.

[5] Крестьянская война..., 320-се бит.

[6] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 193-сө бит.

рында һәм ауылдарында «бола күтәргән» урындарҙа дар ағастары, «глагол» һәм ҡуласа рәүешендә «язалау билдәләре» ҡуйылған булған, йөҙәрләгән баш күтәреүселәр каторгаға, һөргөнгә ебәрелгән, һалдатҡа алынған. Ә 1775 йылдың 19 февралендә башҡорттарҙан «уларҙың енәйәттәре өсөн, йәғни Пугачев восстаниеһында ҡатнашлыҡ иткәндәре өсөн, 4 мең ат йыйыу тураһында П. И. Панинға Екатерина II ҡул ҡуйған указ килә [1]. Был һалым халыҡ елкәһенә ауыр йөк булып төшә. Баш күтәреүселәрҙең етәксеһе Салауат Юлаевты ҡулға төшөргәс, Башҡортостанда восстание баҫтырыла, шулай ҙа оҙаҡ ваҡыттар хәл көсөргәнешле булып ҡала.

Крәҫтиәндәр һуғышының еңелеүе хәрәкәттең стихиялы характеры, баш күтәреүселәрҙең тарҡау булыуы, политик аң менән һуғарылған берҙәм программаның булмауы, етәксе сифатында сығыш яһарға һәләтле синыфтың булмауы менән аңлатыла. «Крепостной право булған саҡта, — тип яҙҙы В. И. Ленин, — бөтә крәҫтиәндәр массаһы батша хөкүмәте һаҡлап, яҡлап һәм ярҙам итеп килгән иҙеүселәргә ҡаршы, помещиктар синыфына ҡаршы, көрәште. Крәҫтиәндәр берләшә алманы, ул саҡта крәҫтиәндәрҙе томаналыҡ тамам баҫҡайны, уларҙың ҡала эшселәре араһында ярҙамсылары һәм туғандары юҡ ине, әммә крәҫтиәндәр шуға ҡарамаҫтан үҙҙәре белгәнсә һәм булдыра алғанса көрәште» [2]. Шул уҡ ваҡытта В. И. Ленин крәҫтиән сығыштарының прогрессив характерын әйтте һәм, билдәле булыуынса, XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуат башында азатлыҡ хәрәкәтендә крәҫтиән сығыштарының революцион әһәмиәтен инкар иткән, ә феодализм дәүерендәге крәҫтиән восстаниеларының, шул иҫәптән 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының, тарихына ҡарата уларҙың файҙаһыҙлығы һәм реакционлығы тураһында һөйләгән Г. В. Плехановтың, Н. А. Рожковтың һәм улар яҡлыларҙың раҫлауҙарын «марксизмды ҡот осҡос боҙоу»[3] тип атаны. Крәҫтиәндәр һуғышы, феодаль-крепостнойлыҡ системаһына ударҙар яһап, уны ҡаҡшатты һәм, тарихи процесты тиҙләтеп, киләсәктә феодаль ҡоролоштоң һәләкәтен яҡынайтты [4].

§ 4. САЛАУАТ ЮЛАЕВ ТУРАҺЫНДА УНЫҢ ТИКШЕРЕҮ ЭШЕ ҺӘМ БАШҠА ДОКУМЕНТТАР БУЙЫНСА БИОГРАФИК МӘҒЛҮМӘТТӘР

Тикшереү эше материалдары Салауат Юлаевтың Крәҫтиәндәр һуғышы осорондағы эшмәкәрлеген генә сағылдырып ҡалмай, шул уҡ ваҡытта уның тураһында байтаҡ биографик мәғлүмәттәрҙе билдәләргә мөмкинлек биреүсе күп булмаған сығанаҡтарҙың береһе булып тора.

---

[1] Бумаги графа П. И. Панина о Пугачевском бунте, 207-се бит.
[2] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 7-се том, 194-се бит.
[3] *Ленин В. И.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 47-се том, 229-сы бит.
[4] *Черепнин Л. В.* XVII—XVIII быуаттарҙа Рәсәйҙә крәҫтиән һуғыштарын өйрәнеү тураһында. «Крестьянская война в России XVII—XVIII веков: проблемы, поиски, решения» китабында. М., 1974, 18—20-се биттәр.

Был документтарҙағы мәғлүмәттәргә таянып, Салауат Юлаевтың тыуған ваҡытын (айын, йылын) шаҡтай теүәл билдәләргә мөмкин. 1775 йылдың 25 февралендә Сенаттың Йәшерен экспедицияһында һорау алғанда, Салауат «егерме беренсе йәш менән барыуын» әйтә. 1775 йылдың 2 октябрендә Өфө провинция канцелярияһы тарафынан төҙөлгән Салауат менән Юлай тураһындағы мәғлүмәттәр «Теҙмәһе»ндә шулай уҡ Салауатҡа 21 йәш тип әйтелә [1]. Бынан, Салауаттың тыуған ваҡыты 1754 йылда, марттан да элек һәм октябрҙән дә һуң булмағандыр, тип билдәләргә нигеҙ бар.

Ғилми тикшеренеүселәр ҡарамағында Салауаттың йәше тураһында мәғлүмәт биреүсе тағы бер документ бар. Был Балтик порты коменданты полковник Г. И. Экбаум тарафынан каторга тотҡондарының 1797 йылдың майында, йәғни Салауатҡа суд булғандан һуң егерме ике йыл үткәс, бирелгән «Статейный исемлеге». Исемлектә 1797 йылда Салауатҡа 45 йәш булған [2], тип әйтелә, бынан ул 1752 йылда тыуған булып сыға. «Статейный исемлек»тәге был мәғлүмәттең дөрөҫлөгөнә баһа бирер өсөн, исемлектә Салауат менән бергә каторгала михнәт сиккән башҡа пугачевсыларҙың йәше тураһындағы раҫлауҙарға ла мөрәжәғәт итәйек. «Статейный исемлек» мәғлүмәттәрен башҡа документтарҙағылары менән сағыштырып ҡарағанда, каторжандарҙың тыуыу ваҡыттары хаҡында байтаҡ ҡына айырымлыҡтар күрергә була. Мәҫәлән, «Статейный исемлек»тә Юлай Аҙналинға 1797 йылда 75 йәш тип әйтелә. Мәскәүҙә 1775 йылда һорау алғанда ул үҙенә 45 йәш тип әйтә, ә провинция канцелярияһының шул уҡ йылда төҙөлгән «Теҙмә»лә уға инде 46 йәш тиелә [3], бынан Юлай 1729 йәки 1730 йылда тыуған тигән һығымта яһарға мөмкин. Шулай итеп, «Статейный исемлек» Юлайға 7—8 йәш өҫтәгән була. Ҡәнзәфәр Усаевтың да йәше арттырылған. Уның 1774 йылдың 4 августындағы күрһәтеүҙәрендә «тыуғаныма утыҙ алты йыл» тип уҡыйбыҙ. Тимәк, 1797 йылда Ҡәнзәфәргә «Статейный исемлек»тә күрһәтелгәнсә 62 йәш түгел, ә 59 йәш була [4]. Баш күтәреүселәр хәрби коллегияһының эш башҡарыусыһы дьяк И. Я. Почиталин 1774 йылдың 8 майында һорау алғанда үҙенә 21 йәш ти, ә әлеге исемлектә уға 47 йәш тип күрһәтелгән [5], йәғни өс йәш өҫтәлгән. Каторгаға ебәрелгән Пугачев атаманы Е. Тюленевҡа ла ике йәш арттырылған [6]. Әйтеп үтелгән был документтарҙа тыуған йылдарҙағы айырмалыҡтарҙың сәбәптәрен ике тиҫтә йыл эсендә Балтик портының комендант канцелярияһында каторгаға һөрөлгән пугачевсылар менән бергә оҙатыла торған «тотҡондарҙың опистары...» һәм башҡа документтар йә юғалған, йә онотолған, ә тотҡондарҙың йәштәрен 1797 йылда уларҙан һорау алғандағы яуаптарына һәм физик хәлдәренә ҡарап күрһәткәндәр.

---

[1] Крестьянская война..., 300, 336-сы биттәр.
[2] Шунда уҡ, 340-сы бит.
[3] Шунда уҡ, 303, 336, 340-сы биттәр.
[4] Шунда уҡ, 220, 340-сы биттәр.
[5] ЦГАДА, ф. 6, д. 506, л. 188; Крестьянская война..., 340-сы бит.
[6] Шунда уҡ, л. 467, ч. 3, л. 51; Крестьянская война..., 340-сы бит.

Үҙенә 75 йәш тип әйтеүсе Юлайҙың йәше шик тыуҙырмаған, сөнки ул ҡаты ауырыған: «Ҡаҡшаған, аяҡтарында күптәнге зәңге сиренән яраһы бар»[1]. Шулай итеп, «Статейный исемлек»тә һөргөндәге баш күтәреүселәрҙең йәштәре тураһында килтерелгән мәғлүмәттәрҙе сама менән алынған, тип иҫәпләргә мөмкин. Пугачевсыларҙың 1774—1775 йылдарҙа һорау алғанда биргән күрһәтеүҙәре дөрөҫлөккә яҡын. Уларҙы нигеҙ итеп ҡабул итергә кәрәк тә [2].

Салауат та, Юлай Аҙналин да Өфө өйәҙе Тәкәй (Текоево) ауылында тыуҙыҡ, ә Юлайҙа йәшәнек, тип икеһе бер үк төрлө күрһәткән [3]. Быны яһаҡ түләүсе татар Әмир Әбдикәев тә әйтә. Ул 1774 йылдың йәйендә Пугачевты табырға һәм уның ғәскәренә керергә тырышып йөрөгәндә, «Юлай ауылында... мин ауырып киттем, шуға күрә артабан барырлыҡ хәлем ҡалманы һәм терелгәнсе... полковник Соловат өйөндә торҙом, ул ваҡытта Салауат үҙе [4] Пугачевта ине», тип хәтерләй.

Салауат тикшереүгә яҡшы билдәле булған үҙенең социаль сығышы яғынан башҡорт старшинаһының улы икәнлеген һорау алыу ваҡытында әйтмәгән. Ул атаһы тураһында ике тапҡыр, 1773 йылдың октябрендә Юлайҙың Стәрлетамаҡ пристаненә команда ебәреүе һәм Шайтан-Көҙәй волосында [5] төҙөлгән Эҫем заводын баш күтәреүселәрҙең яндырыуы тураһында һөйләгәндә, иҫкә алған.

Юлай Аҙналин үҙенең биографияһын Мәскәүҙә һорау алғанда ентекле һөйләй. Ул Ырымбур губернаторы А. А. Путятин тарафынан волость старшинаһы итеп раҫланған [6]. Килтерелгән башҡа

---

[1] Крестьянская война..., 340-сы бит.

[2] Салауат Юлаевтың күрһәтеүҙәре «Пугачевщина» тигән документтар йыйынтығының 2-се томында 1929 йылда баҫылып сығыуына ҡарамаҫтан, ҡайһы бер тикшеренеүселәр бынан һуң да «Статейный исемлек»тәге хата мәғлүмәттәрҙе артығыраҡ күрҙе һәм Салауат Юлаевтың тыуған ваҡытын 1752 йылда тип иҫәпләне (ҡарағыҙ: *Ищериков П. Ф.* Салават Юлаев — вождь башкирского народа и сподвижник Пугачева, 49-сы бит; Салават Юлаев. К 200-летию со дня рождения, 11-се бит; *Усманов А. Н.* Салават Юлаев. — СИЭ, 12-се том, М., 1969, 482-се бит. Наш Салават, 296-сы бит. Салават Юлаев. — БСЭ, М., 1975, 22-се том, 508-се бит һ. б.).

[3] Крестьянская война..., 300, 303, 340-сы биттәр.

[4] Әмир Әбдикәевтең 1774 йылдың 6 сентябрендә Бөгөлмә воевода канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколы. — ЦГАДА, ф. 6, д. 507, ч. 2, л. 311—312.

[5] Крестьянская война..., 300, 302-се биттәр. «Завод хужаһы Твердышев уның атаһының ерендә ике ауыл ултыртҡан» тип тәржемәсе һүҙҙәренән яҙып алынған һөйләмде И. Гульчихиндың хатаһы йәки Йәшерен экспедиция канцелярисының хатаһы тип ҡарарға кәрәк. Ер бөтә башҡорт волосыныҡы булған, старшиналарҙың, ябай аҫабаларҙыҡы кеүек үк, айырым ер участкалары булмаған. Был осраҡта Юлай Аҙналин старшина булған волостағы аҫаба башҡорттарҙың ере тураһында һүҙ бара.

[6] Башҡорт волость старшиналары губернала чиновник-бюрократ аппаратының түбәнге звеноһы функцияларын ғәмәлгә ашырған. Финанс һәм административ, шулай уҡ полиция функциялары (һалым һалыу һәм йыйыу, общинаның эске бәхәстәрен ҡарау һәм башҡалар) уларға тапшырылған булған. Старшиналар община ерҙәрен бүлгән, башҡорттарҙы хәрби хеҙмәткә ебәреү сиратын һәм ебәреүҙе күҙәтеп барған. Улар үҙ эштәрендә Өфө йәки Исет провинция канцеляриялары алдында яуаплы булған. Урындағы администрацияның бойороҡтарын үтәп, старшиналар шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡын социаль-экономик һәм милли яҡтан иҙеүҙә хөкүмәт политикаһын ғәмәлгә ашырған. Күп кенә старшиналар

факттар кеүек үк, Юлай үҙенең нисәнсе йылдан бирле старшина булып китеүен күрһәтмәй. Ырымбур губерна канцелярияһы документтары буйынса ул 1762 йылда йөҙ башлығы, ә 1766 йылда старшина була. Путятиндың 1766 йылдан губернатор булыуын иҫкә алғанда, Юлайҙы ла старшина итеп шул уҡ йылда тәғәйенләгәндәрҙер, тип уйларға мөмкин [1].

Юлай, үҙенең хеҙмәте тураһында һөйләгәндә, ике ваҡиғаны — «ҡалмыҡтарҙы тотоу походында... һәм Польшаға походта» [2] ҡатнашыуын айырып күрһәтә. Билдәле булыуынса, бер быуат тип әйтерлек рус дәүләтендә йәшәгән ҡалмыҡтарҙың Джунгарияға күсеп китеүенә феодаль-крепостной дәүләт иҙеүенең көсәйеүе, шулай уҡ хөкүмәттең Ҡалмыҡ ханлығына идара итеүгә актив ҡыҫылыуы сәбәп булып тора. Был хәл урындарҙа эре феодалдарҙың ризаһыҙлығын тыуҙыра, улар, халыҡ массалары үҙҙәре менән Джунгарияга китһен өсөн, заговор ойоштороусылар ролендә сығыш яһай. 1771 йылдың февралендә Ырымбур губернаторы ҡалмыҡтарҙы тоторға Яйыҡ казактарын, башҡорттарҙы һәм драгундарҙы ебәреү тураһында хөкүмәт бойороғон ала. Был ваҡытта ҡалмыҡтарҙың көймәле арбалары Яйыҡ аръяғында булып сыға һәм уларҙы эҙәрләүҙе кесе жуздың ҡаҙаҡ ханы Нурали үҙ өҫтөнә ала. Губернатор генерал Траубенберг командалығында ойошторған ғәскәрҙәр уға тик 6 майҙа ғына килеп етә, улары ла, аҙыҡ-түлек һәм мал аҙығы етмәгәнлектән, 12 майҙа кире сигенә [3]. Шулай итеп, Траубенберг корпусы составына ингән башҡорт командалары эҙәрләнеүсе ҡалмыҡтарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашлыҡ итмәй. Юлайҙың шул 300 кешенән торған команданың башында ҡалмыҡтарҙы бер йыл да өс ай ваҡыт эҙәрләп барыуы тураһында һөйләүе күрәләтә алдау һәм тикшереү аҫтындағы Юлайҙың уйы буйынса уның хөкүмәткә тоғро хеҙмәтен күрһәтергә тейеш булған. Ысынында иһә был походта ул бик аҙ ваҡыт була һәм уға ҡалмыҡтарҙы «тынысландырырға ла» тура килмәй. Губернатор канцелярияһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1771 йылдың ноябрендә үк Юлай поляк конфедераттарына ҡаршы һуғыштар алып барыусы рус армияһына ярҙамға Польшаға ебәрелә торған 3000 кешелек башҡорт атлылары отряды составында өс йөҙлөк партияға етәкселек итергә саҡы-

---

ябай общинниктарҙы экономик яҡтан тыш мәжбүр итеү методтары менән эксплуатациялап, власты шәхси маҡсаттарҙа файҙаланған. Шуны ла күҙ уңында тоторға кәрәк, Башҡортостандағы патриархаль-феодаль ижтимағи мөнәсәбәт шарттарында старшиналар ябай общинниктар араһында ҙур абруй ҡаҙанған. — Ҡарағыҙ: Определение начальника Оренбургской экспедиции И. К. Кирилова и бригадира М. С. Хрущева от 25 декабря 1736 г.; определение Оренбургского губернатора И. И. Неплюева в 1745 г. — «Памятная книжка Уфимской губернии» китабында, Өфө, 1873, 2-се киҫәк, 161—165-се биттәр. Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, 1-се киҫәк, 213—214, 221-се биттәр.

[1] Шайтан-Көҙәй волосы башҡорттары Аҫҡар Ибраев менән Аҙнабай Иҙрисовтың 1768 йылдың 10 мартында А. А. Путятинға үтенес ҡағыҙы. — ГАОО, ф. 3, д. 92, л. 225—227. 1773 йылда булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Юлай Аҙналин командалығында 115 йорт булған. — Крестьянская война..., 285-се бит.

[2] Крестьянская война..., 303-сө бит.

[3] Очерки истории Калмыцкой АССР. Дооктябрьский период. М., 1967, 212—221-се биттәр.

рыла[1]. Отряд Өфөнән 1772 йылдың ғинуар уртаһында сығa. Башҡорт яугирҙары Варшава, Вильно эргәһендәге һәм башҡа урындарҙағы һуғыштарҙа ҡатнашлыҡ иткән. Улар Хәрби коллегияның 1772 йылдың 25 август һәм 1773 йылдың 17 июнь указдарына ярашлы рәүештә ике партия булып әйләнеп ҡайта[2]. Юлай Аҙналиндың һуғыш яланында күрһәткән батырлығы һәм ғәйәрлеге махсус наградаға лайыҡ була. Был турала Салауат, Мәскәүҙә һорау алғанда, атаһы менән ғорурланып, былай тигән: 1773 йылдың октябрендә Юлай ғаиләнең ҡәҙерле ҡомартҡыһы итеп «Польшала... күрһәткән хеҙмәте өсөн алған билдәне» улына биргән[3].

Юлай, тикшереү ваҡытында үҙенең административ эшмәкәрлеген яҡтыртыуға күскәндә, завод хужаһы Я. Б. Твердышев менән үҙенең күп йылдар буйына судта ер өсөн низағлашыуы тураһында, властарҙың талаптарына ҡаршы килгән эшмәкәрлеге тураһында властарҙың хәтеренә төшөрөүҙән дә ҡурҡмай. Ул былай тигән: «Бер ваҡыт ул шундағы завод хужаһы Твердышев өҫтөнән, уның, Юлайҙың, ерен алыуы һәм унда ике ауылы менән бергә үҙенең Эҫем заводын төҙөүе тураһында Өфө провинция канцелярияһына шикәйәт биргән. Бынан һуң эш Ырымбур канцелярияһына күсерелгән һәм, ул эш әле хәл ителмәгән булһа ла, ләкин ул үҙенең гөҙел үтенесенең ысындан да ҡәнәғәтләндерелеүҙән башҡаны көтмәй»[4].

Башҡортостан территорияһында XVIII быуат уртаһында башланған интенсив рәүештә заводтар төҙөү (Крәҫтиәндәр һуғышы тоҡаныуға бында 40 завод эшләгән[5]) башҡорт общиналарынан гәйәт ҙур ер майҙандарын тартып алыу менән бергә барған. Ерҙе завод хужаларына биреү һатып алыу йәки ерҙе арендаға биреү рәүешендә рәсмиләштерелгән. Ләкин был юридик документтар алдау, һатып алыу һәм килешеү төҙөүгә административ мәжбүр итеүҙең тышҡы күренеше генә булған. Завод хужаһы Я. Б. Твердышев менән ерҙәрендә Эҫем тимер эшләү заводы төҙөлгән Шайтан-Көҙәй волосы башҡорттары араһындағы мөнәсәбәттәр шуны раҫлаусы типик миҫалдарҙың береһе.

1759 йылдың 16 мартында Берг-коллегия завод хужаларына Эҫем йылғаһы буйында завод төҙөүгә рөхсәт итеү тураһында ҡарар сығара[6], ә 1761 йылда инде завод продукция бирә башлай. Ләкин 1762 йылдың 21 авгусында ғына Шайтан-Көҙәй башҡорт-

---

[1] И. А. Рейнсдорптың 1771 йылдың 13 ноябрендә Өфө провинция канцелярияһына указы һәм 3 меңлек командалағы башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең исемлеге. — ГАОО, ф. 3, д. 124, л. 2, 144—161; ЦГВИА, ф. 20, д. 954, л. 25. Юлай Аҙналин Өфөгә 8 ат менән, төркәй, уҡ, ҡылыс һәм һөңгө менән ҡоралланып килә. — ГАОО, ф. 3, д. 124, л. 144.

[2] ЦГВИА, ф. 20, д. 954, л. 1, 21—25, 62—90; НА БФАН СССР, ф. 3, оп. 12, д. 113, л. 165.—1771 йылда Өфө провинция канцелярияһынан Польшаға башҡорт ғәскәрҙәренең наряды тураһындағы эштән күсермә.

[3] Крестьянская война..., 300-сө бит.

[4] Шунда уҡ, 303-сө бит.

[5] Материалы по истории Башкирской АССР. М., 1956, 4-се том, 2-се киҫәк. 576—579-сы биттәр.

[6] Шунда уҡ, 166—171-се биттәр.

тарының вотчина ерҙәренән завод өсөн Я. Б. Твердышевҡа һәм уның компаньоны И. С. Мясниковҡа 60 йылға арендаға биләмә биреү тураһында Ырымбурҙа акт рәсмиләштерелә [1]. Шулай итеп, заводты төҙөйҙәр, ул эшләй башлай, шунан һуң ғына хужалар завод өсөн кәрәк булған ер майҙандарын үҙҙәренә беркетә. Бындай хәл завод хужаларының законға ҡаршы килгән эштәрен край администрацияһының даими рәүештә һәм рыялы маҡсаттарҙы күҙәтеп яҡлауы сәбәпле мөмкин булған. Юлай Аҙналин һәм уның волостындағы башҡорттар Россия ысынбарлығының йәберен һәм ғәҙелһеҙлеген үҙ баштарынан кисергән.

Күптән түгел Ырымбур дәүләт архивы фондында табылған документтар ул йылдарҙағы ваҡиғаларҙың дөйөм схемаһын күҙалларға мөмкинлек бирә.

1760 йылда Я. Б. Твердышевтың һорауы буйынса провинция канцелярияһы йөҙ башлығы Юлай Аҙналин менән Шайтан-Көҙәй башҡорттары төркөмөн Өфөгә саҡыра [2]. Твердышевтың приказчигы уның хужаһына был волостың ере «кәрәк» тип әйткән. Башҡорттар ерҙе һатыуға ризалыҡ бирмәгән. Өфө воеводаһы уларҙан Ҡатау-Иван заводына барып, Твердышевтың үҙе менән һөйләшергә ҡул ҡуйҙырып алып ҡала. Ләкин завод хужаһы менән осрашыу ҙа һөҙөмтә бирмәй, сөнки Твердышев ерҙе артыҡ күп һорай, ә башҡорттар ҙур булмаған майҙан тәҡдим итә. Твердышев көйгә килмәгән үҙ һүҙле башҡорттарға баҫым яһау маҡсатында губерна властары ярҙамына таянып, аҫабаларҙың бер өлөшөн һатып алмаҡсы була. Губерна канцелярияһы Юлай Аҙналин артынан бер нисә тапҡыр һалдаттар ебәреп ҡарай, әммә ул, төрлө һылтауҙар табып, Ырымбурға барыуҙан баш тарта. 1762 йылда Юлай менән уның бер нисә иптәшен Ырымбур гарнизоны командаһы көсләп Ҡатау-Иван заводына алып килә. Бында уларға Твердышев алдында завод хужаһына ер биреүҙе кисекмәҫтән хәл итеү тураһында губерна канцелярияһының указы уҡыла. Юлай килешеү төҙөү өсөн Ырымбурға барыу тураһында ҡултамға ҡуйырға мәжбүр була. Ләкин ул йөкләмәне үтәргә ашыҡмай.

Был ваҡытта волоста общинниктарҙың ике төркөмө араһында көрәш ҡырҡыулашып китә. Башҡорттарҙың бер өлөшө аҫабаларҙың хужалыҡ-экономик мәнфәғәттәрен яҡлаусы Юлай артынан китә. Икенсе төркөмгә отставкалағы старшина Шығанай Борсаҡов етәкселек иткән. 1760 йылда Өфөгә һөйләшергә ул барған. Ә 1762 йылдың авгусында ул, Твердышев менән килешеү төҙөп, үҙенең улын һәм тыңлаусан башҡорттарҙы Ырымбурға ебәргән. Улар завод хужаларына арендаға биләмә биреү тураһында яҙыу биргән [3]. Аҫабаларҙың хужалығына байтаҡ зыян килтерелгән. Во-

---

[1] Материалы по истории Башкирской АССР. М., 1956, 4-се том, 1-се киҫәк, 246—248-се биттәр.

[2] Волость старшинаһы Шығанай Борсаҡов бик күп яҙыҡ эштәре өсөн вазифаһынан алынған. Был ваҡыт эсендә старшина вазифаһын Юлай Аҙналин үтәгән. — Материалы по истории Башкирской АССР, 4-се том, 2-се киҫәк, 595-се бит.

[3] Шайтан-Көҙәй волосы башҡорттары Әлимтәй Бикбулатов, Аҫҡар Ибраев һәм Аҙнабай Иҙрисовтың 1768 йылдың 10 мартында А. А. Путятинға биргән үтенес ҡағыҙы. — ГАОО, ф. 3, д. 92, л. 216, 219—220, 225—227.

лостағы башҡорттарҙың ҡуштандары общинниктарҙың мәнфәғәттәренә хыянат итеп, ҡулдарына меңәр дисәтинә ер күскән завод хужаларының йомартлығына иҫәп тотҡан. Ә Твердышев менән губерналағы түрәләр ерҙе һатыу йәки арендаға биреү тураһындағы договор башҡорт общиналарының ерҙең юридик биләүселәре булып торған бөтә ағзалары менән төҙөлөргә тейеш булған законды аңлы рәүештә боҙған.

Юлай Аҙналин бындай енәйәттәр һәм алдау менән килешә алмаған. Старшина булғас, күп йылдар буйына ғәҙеллекте ҡайтарырға тырышҡан. Ләкин уның суд аша бөтә даулашыуҙары еңелеү менән бөткән: Юлайға һәм үҙ хоҡуҡтарын яҡлаған башҡорттарға ҙур сумма — 600 һумлыҡ штраф һалынған [1].

Юлайҙы намыҫлы, ришүәтселеккә һәм йәберләүҙәргә ҡаршы көрәшеүсе кеше итеп күрһәтеүсе тағы ла бер миҫал килтерергә мөмкин. Хәрби походтарҙа ҡатнашыу һәм һәр ҡоралллы кеше өсөн бер-ике йылға һуҙылған линия хеҙмәтен алып барыу башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең иң ауыр йөкләмәләренең береһе булған. Был — хужаһы оҙаҡ ваҡытҡа ташлап киткән хужалыҡтың бөлгөнлөккә төшөүенә килтергән. Хәрби хеҙмәттә һәр йылда байтаҡ кешеләрҙең ғүмерҙәре ҡорбан ителгән [2]. Хәлле башҡорттар был йөкләмәнән, юлын табып, нисек тә ҡотолорға тырышҡан, хеҙмәткә барыу сиратын боҙоп, үҙҙәре урынына ярлыларҙы ебәргән. Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәре өсөн хеҙмәткә барған кешеләргә түләгән, башҡалары командирҙы һатып алыуҙы яҡшыраҡ күргән. Командирҙарҙы губернатор властарға нығыраҡ бирелгән, ҡуштан һәм бай башҡорттар йәки мишәрҙәр араһынан үҙе һайлап алған. Башҡорттарҙан Вәлиша Шәрипов ошондай кеше булған [3]. Ул хеҙмәт итергә тейеш кешеләрҙән асыҡтан-асыҡ ришүәт алған һәм шуның менән Себер юлы башҡорттарының нәфрәтен тыуҙырған. Юлдың бөтә волостары башҡорттарының вәкилдәре Юлай Аҙналин менән Тырнаҡлы волосы старшинаһы Яуын Сыуашев [4] Өфө провинцияһы

---

[1] Материалы по истории Башкирской АССР, 4-се том, 2-се киҫәк, 595-се бит. Шығанай Борсаҡовтың улы Ҡунаҡкилде старшина булып алған Шайтан-Көҙәй волосының башҡорттары оброкка бирелгән ерҙе 44 йылдан һуң тулыһынса завод хужаһы И. И. Бекетовҡа һата. Ер, бәлки, Крәҫтиәндәр һуғышып баҫтырғас, волоста ҡаршылыҡ күрһәтеү өсөн көс ҡалмағанлыҡтан һатылғандыр. — Шунда уҡ, М., 1960, 5-се том, 196—197-се, 677—678-се биттәр.

[2] Мәҫәлән, 1773 йылда 250-нән ашыу башҡорт Польшанан өйҙәренә әйләнеп ҡайтмаған. — ЦГВИА, ф. 20, д. 954, л. 66, 90—96; д. 1231, л. 2—3.

[3] Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда Вәлиша Шәрипов хөкүмәт ғәскәрҙәренең баш күтәреүселәргә ҡаршы язалау экспедицияларында ҡатнашҡан. 1774 йылдың мартынан август айына тиклем ул И. И. Михельсон корпусы составына ингән, баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәре һәм Салауат Юлаев отрядына ҡаршы бер нисә тапҡыр һуғышҡан. — Крестьянская война 1773—1775 гг. в России. Дәүләт тарих музейы йыйынтығынан документтар, 223-сө бит; Крестьянская война... (исемдәр күрһәткесен ҡарағыҙ).

[4] Яуын Сыуашев 1773 йылдың декабрендә үҙенең командаһы менән Салауат Юлаев отрядына ҡушылған, 1774 йылдың ғинуар—мартында Красноуфимск — Көңгөр районында һуғыш операцияларында ҡатнашҡан. Салауат отряды составында И. И. Михельсон корпусына ҡаршы һуғышҡан. — Крестьянская война..., 90, 93, 311, 312-се биттәр.

канцелярияһына Вәлиша өҫтөнән шикәйәт бирә. Юлай Өфөлә ришүәтсене фаш итеп сыға. Ләкин, шикәйәтте тикшереү тамамланғансы уҡ, губернатор Вәлишаны поход старшинаһы итеп тәғәйенләү тураһында ҡарар сығара. Ул командаһы менән Себер линияларына китә, ә Өфөлә үҙенең вәкиле итеп помещик, отставкалағы прапорщик Кинишемцевты ҡалдыра. Был юлы ла Юлай һәм уның яҡлылар еңелә[1].

Һаҡланып ҡалған документтарҙағы айырым мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, халыҡты иҙгән батша администрацияһын, завод хужаларын, башҡорт байҙарын дошман күрер өсөн Юлайҙың нигеҙле сәбәптәре булған. Күп кенә ғилми тикшеренеүҙәрҙә Юлайҙың башҡорт восстаниеларында ҡатнашыуы тураһында әйтелә. 1755 йылғы восстаниела ла уның ҡатнашыуы бик ихтимал, тик был документаль мәғлүмәттәр менән раҫланмаған әле[2]. Күпте күргән, ҙур хәрби тәжрибәгә эйә булған, урындағы түрәләргә һәм үҙ халҡының мәнфәғәттәренә хыянат иткән башҡорттарға күп тапҡыр ҡаршы сыҡҡан атаһының өлгөһө, һис шикһеҙ, Салауаттың шулай иртә граждандлыҡ өлгөрөүенә булышлыҡ иткәндер. Атаһының эштәрен һәм һөйләгәндәрен күңеленә алып һәм халыҡтың мохтажлыҡтар менән тулы тормошон күреп, үҫмер үҙен солған алған ысынбарлыҡтың гәҙелһеҙлеге тураһында ысынлап тороп уйлана. Пугачев восстаниеһы ваҡытында Салауаттың бөтә эшмәкәрлеге түрәләрҙең башбаштаҡлығына һәм завод хужаларының законһыҙ эштәренә ҡаршы көрәште ул үҙ халҡы, үҙ ғаиләһе алдындағы бурысты үтәү, тип аңлауын раҫлай.

Салауат менән Юлайҙың биографияһының башҡа факттарына күҙ һалайыҡ. Юлайҙың күрһәтеүҙәренән шул билдәле: 1774 йылда уның өс ҡатыны була. Уларҙың береһе — Салауаттың әсәһе.

---

[1] «Дела о наряде башкирцов и мещеряков на службу на Сибирские линии (1769—1771 гг.)». Күсермә. — НА БФАН СССР, ф. 3, оп. 12, д. 107, л. 117—119. Һүрәтләнгән ваҡиғалар, күрәһең, 1771 йылда булғандыр, сөнки 1769 йылдың ноябрендә линияға ебәрелә торған башҡорт-мишәр командаһының башына мишәр старшинаһы Ишмөхәммәт Сөләймәнов ҡуйыла. — ЦГВИА, ф. 41, оп. 1/199, д. 284, л. 130—132.

[2] 1834 йылда А. С. Пушкин үҙенең «Пугачев болаһы тарихы»нда (билдәле булыуынса, уға пугачевсыларҙың тикшереү эштәре һаҡлана торған архив фондтарын файҙаланырға рөхсәт бирмәгәндәр) фольклор мәғлүмәттәре нигеҙендә, Юлай 1735—1740 йылдарҙағы восстаниела ҡатнашҡан, тип яҙған (*Пушкин А. С.* Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 9-сы том, 1-се кисәк, 55-се бит). «Салауатҡа суд һәм уны язалау» тигән мәҡәләнең авторы П. Юдин, 1775 йылда Юлайға 45 йәш булған, шуға күрә ул XVIII быуаттың утыҙынсы йылдарында баш күтәреүселәр сафында була алмаған, тип төҙәтмә индергән. (Исторический вестник, 73-сө том, 1898, 580-се бит.) Был А. П. Николаенконың «Башҡорт халҡы юлбашсыһы, Пугачев бригадиры Салауат Юлаев» тигән мәҡәләһендә лә дөрөҫләнә. (Исторический журнал, 1940, № 11, 80-се бит.) Һуңыраҡ баҫылып сыҡҡан эштәрҙә, һис нәмәгә нигеҙләнмәйенсә, яңынан, Юлай Аҙналин башҡорт восстаниеларында ҡатнашҡан, тип раҫлана: *Ищериков П. Ф.* Салават Юлаев — вождь башкирского народа и сподвижник Пугачева, 49-сы бит; Салават Юлаев. К 200-летию со дня рождения, 8-се бит; — БСЭ, 3-сө баҫма, 22-се том; *Филимошкин М. Б.*/н.-Военно-исторический журнал, 1977, № 6, 115-се бит; *Сафуанов С.* В жестокий век восславил он свободу... А. С. Пушкин. «История Пугачева» китабына инеш һүҙ. Өфө, 1978, 14 һ. б. биттәр.

Юлайҙың оло улы Салауаттан башҡа тағы ла ун йәшлек улы була [1]. Юлай тикшереү аҫтында булған саҡта, язалау отрядтары уның ике ҡатынын һәм кесе улын тотоп алалар. Үкенескә ҡаршы, уларҙың яҙмышы тураһында ниндәй ҙә булһа мәғлүмәттәр табылмаған әле.

Юлайҙың мөлкәте хаҡында уның үҙ һүҙҙәренә ҡарап фекер йөрөтөргә мөмкин. Ул, Мәскәүҙә һорау алғанда, үҙенең йортон һәм бөтә хужалығын бөлдөргән Н. Я. Аршеневскийҙың командаһына зарлана. Язалаусылар 50 ат, күп кенә һыйыр һәм ваҡ малды алып киткән. Оло ҡатынын аҡса таптырып туҡмағандар һәм ул 630 һум аҡса менән 36 һумлыҡ өс төлкө тиреһен бирергә мәжбүр булған [2]. Әлбиттә, Юлайҙы ябай общинниктарҙы иҙеү иҫәбенә байлыҡ туплаған бай старшиналар рәтенә ҡуйып булмай.

Салауат ғилеме менән дә атаһына бурыслы. Үҙенең ауыр һәм тынғыһыҙ тормошонда Юлай уҡый-яҙа белеүҙең әһәмиәтен аңлаған. Әгәр ул үҙе имза урынына ырыу тамғаһын ҡуйһа, Салауат инде төрки телендә яҙа белгән. Башҡорт балаларын уҡырға-яҙырға өйрәтә торған хөкүмәт мәктәптәре булмаған. Ләкин XVIII быуатта балаларҙың бер өлөшө мосолман мәктәптәренә һәм мәҙрәсәләренә йөрөгән, унда уҡытыу ғәрәп телендә барған. Ул мәктәп һәм мәҙрәсәләрҙә, беренсе нәүбәттә, ислам дине ҡанундарына өйрәтеүҙәренә ҡарамаҫтан, балалар башланғыс грамота, практик тормошта кәрәкле бер аҙ белем алған [3]. Унан башҡа, Ырымбур губернаторы И. И. Неплюевтың 1743 йылдың 3 июлендәге билдәләмәһенә ярашлы рәүештә башҡорт старшиналарына «писарлыҡ хеҙмәтенән тыш, уларҙың балаларын татарса грамотаға һәм яҙа белергә өйрәтеү өсөн»[4] властарға тоғро мишәрҙәрҙән йәки татарҙарҙан писарҙар ебәрелә торған булған. XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорт старшиналары тарафынан балаларҙы уҡытыу өсөн 2—3 йылға Ҡазан һәм Өфө өйәҙҙәренән мулла-мөғәллимдәр саҡырыу киң урын алған [5]. Салауат рус телен дә белгән булһа кәрәк. Салауаттың юғарыла иҫкә алынған һалдат Я. Ф. Чудинов менән һөйләшеүе һәм күп милләтле баш күтәреүселәр отрядтары менән етәкселек иткәндә ҡыйынлыҡ кисермәүе лә ҡыялата булһа ла шуны раҫлай.

Салауат Юлаевтың юғары әхлаҡ сифаттары уның ғаиләгә, яҡындарына, яуҙаш иптәштәренә булған мөнәсәбәтендә күренә. Салауаттың үҙ ғаиләһе тураһында уның Мәскәүҙә биргән күрһәтеүҙәрендә һәм Өфө төрмәһендә яҙған хатында әйтелә. Уның шәриғәт рөхсәт иткәнсә, өс ҡатыны булған. Салауат ҡулға алын-

---

[1] Крестьянская война..., 304-се бит.

[2] Шунда уҡ.

[3] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, 1-се киҫәк, 284—286-сы биттәр; *Харисов А. И.* Литературное наследие башкирского народа. Өфө, 1973, 158—159-сы биттәр.

[4] Журнал заседания Уфимского наместнического правления от 31 июля 1783 г. — ЦГА БАССР, ф. 384, оп. 1, д. 1, 439 об.

[5] Ҡазан һәм Өфө өйәҙҙәренең яһаҡ түләүсе 15 татарының 1774 йылдың 10 ноябрендә Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре.— ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 50—60.

ғанға тиклем үк әле, уның ҡатындары һәм балалары тотолоп, заложник сифатында Өфөгә килтерелә. Бер ҡатыны улы менән ҡала коменданты полковник С. С. Мясоедов һағы аҫтында була. Икенсе улын, Салауат яҙғанса, секретарь квартирында торған генерал ала»[1]. Һүҙ провинция канцелярияһы секретары И. Черкашениновтың йортонда торған генерал Ф. Ю. Фрейман тураһында бара. Ғаиләһенең башҡа ағзалары тураһында Салауат дөйөм рәүештә: «Ә ҡалған ҡатындарымды һәм балаларымды ҙур кешеләр (йәғни урындағы власть вәкилдәре һәм офицерҙар. — *Авт.)* таратып алғандар һәм улар менән һәр көндө ашайҙар, күңел асалар, шулай итеп ҡатындарға һәм балаларға ялағайланалар»[2] ти. Салауатты бигерәк тә С. С. Мясоедовта булған ғаиләһенең: ҡатынының һәм улының яҙмышы бик борсой: «уларҙы резолюцияға тиклем ҡырып бөтөрмәһә ярар ине, тип ҡурҡабыҙ». Шуның өсөн Салауат туғандарынан һәм дуҫтарынан ҡатындары менән балаларын азат итеү тураһында губерна канцелярияһына юллап мөрәжәғәт итеүҙе һораған, әгәр был да ярҙам итмәһә, ул ваҡытта «батшаның ҡолдары уға буйһонғандарҙа хеҙмәттә булмаһын өсөн»[3] Сенатҡа мөрәжәғәт итеүҙе һораған. Беҙҙә Салауаттың ғаилә ағзаларының яҙмышы артабан нисек булыуы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Башҡорт восстаниеларын баҫҡандан һуң, элек властар тарафынан ҡабул ителгәнсә, Салауаттың ҡатындары һәм балалары көсләп суҡындырылыуы һәм Өфө чиновниктары һәм офицерҙары йорттарында хеҙмәтсе булып китеүҙәре мөмкин. Ҡатындарын һәм балаларын ҡулға алыу Юлай менән Салауат нәҫелен ҡоротоу маҡсаты менән, уларҙы мәңгегә халыҡ хәтеренән сығарып ташлау өсөн эшләнгән.

Салауат, атаһын властарҙың үс алыуынан ҡотҡарыу өсөн, үҙенең күрһәтеүҙәрендә Юлайҙың Пугачев хәрәкәтендә ҡатнашыуы тураһында бер тапҡыр ҙа иҫкә алмай. Йәшерен экспедицияла һорау алғанда Салауат Эҫем заводын юҡ итеүҙә ғәйепте үҙ өҫтөнә ала, ә Өфөлә тикшереү ваҡытында Юлай отрядының Ҡатау-Иван заводын ҡамауы тураһында бер ни ҙә белмәүен әйтә[4]. Салауат яҙмыштары уға билдәле булмаған элекке көрәштәштәренә лә үҙенең күрһәтеүҙәрендә зыян итмәҫкә тырыша. Ул һәләк булған йәки язалаусыларҙан ҡасҡан кешеләрҙең генә исемдәрен атай. Салауаттың яуҙаштарына тоғролоҡ һаҡлауына уның төрмәнән яҙған хаты иң яҡшы раҫлау булып тора: «Беҙҙән ҡурҡмағыҙ. Беҙ хәҙер йәшәй торған йортта халыҡ тураһында бер ниндәй ҙә күрһәтеү бирмәнек, ә уға именлек эшләнек». Артабан Салауат саф намыҫ менән үҙ бурысын аңлап: «Ул халыҡ беҙҙе лә үҙенең изге доғаларынан ҡалдырмаһын ине»[5], — тигән.

---

[1] Крестьянская война..., 322-се бит.
[2] Шунда уҡ.
[3] Шунда уҡ.
[4] Шунда уҡ, 302, 318-се биттәр.
[5] Шунда уҡ, 322-се бит.

Салауаттың хаты уның хоҡуҡ мәсьәләләрендә тәжрибәле кеше булыуын, закондарҙы, үҙенең хоҡуҡтарын да белеүен күрһәтә. Ул ғаиләһен законһыҙ ҡулға алыуға протест белдергән: ...Ғүмере ҡыйылғандарҙың (аҫылған йәки башҡаса язалап үлтерелгән) ғаиләһен тартып алыу тураһында указ ысынында юҡ»[1]. Был уңай менән Салауат үҙенең туғандарына законды боҙоу тураһында дәүләт идараһының юғарғы органына — Сенатҡа белдерергә тәҡдим итә. Чиновниктар аппаратында һатылыу һәм ришүәт алыу хөкөм һөргәнен белгән Салауат үҙенең туғандарынан Ырымбур губерна канцелярияһы секретары П. Н. Чучаловҡа, ул тәүтикшереү барышына йоғонто яһаһын өсөн, 1000 һум аҡса йыйыштырып биреүҙе һорай.

Салауаттың тикшереү ваҡытында үҙен тотоуы уны көслө характерлы кеше итеп һынландыра. Төрлөсә кәмһетеүҙәргә ҡарамаҫтан, ул һалҡын ҡанлылыҡты һәм рух ныҡлығын юғалтмаған. Үҙенең кешелек дәрәжәһен яҡлап, Салауат уны үлтерештәрҙә һәм кеше талауҙа ғәйепләүҙе ҡырҡа кире ҡаға. Ошо уңайҙан Салауаттың үтә диндар булмауын әйтеп китергә кәрәк. Һәр һорау алдынан муллалар инеп, уны тәүбәгә килергә өгөтләй, төрлөсә ҡурҡыта. Салауат уларҙың өгөт-нәсихәттәренә ҡолаҡ һалмай, муллалар, хатта «алланың ҡәһәре төшөү» менән ҡурҡытһа ла, Салауаттың ныҡышлығын еңә алмаған. Үҙенең күрһәтеүҙәрендә ул бик аҫылып һүҙ һөйләмәй. Күп айҙарға һуҙылған тикшереү барышында Салауат Пугачев хәрәкәтендә үҙенең ҡатнашлыҡ итеүендә бөтөнләй кире ҡағып булмаҫлыҡ факттарҙы ғына таныу тактикаһын эҙмәэҙ тота һәм күпселек һорауҙарға йә өҫтән генә, йә икеле яуап бирә.

Салауаттың тикшереү эше документтары уның тышҡы ҡиәфәтен һәм буй-һынын бер ни тиклем күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек бирә. 1775 йылдың 2 октябрендә провинция канцелярияһы төҙөгән «Опись» Салауаттың шундай билдәләрен күрһәтә: сәс, күҙҙәре — ҡара, буйы 2 аршын да 4½ ая; уң яҡ сикәһендә йөй (һуғышта алған яра эҙе); тәнендә сыбыртҡы телгеләгән йөйҙәр; танау япраҡтары өҙөп алынған, маңлайына һәм битенә «күрһәткес тамғалар» һалынған («З», «Б», «И» литерҙары тураһында һүҙ бара)[2]. Һорау алыу протоколдарында килтерелгән мәғлүмәттәр Салауаттың физик яҡтан бик ныҡ сыҙамлы булыуы тураһында һөйләй. Бер йыл эсендә ул Ырымбур, Көңгөр һәм Уса эргәһендәге һуғыштарҙа өс тапҡыр ҡаты йәрәхәтләнә. Әммә халыҡ хәрәкәтенә ҡаҡшамаҫ бирелгәнлеге уны уңалып та етмәгән яралары менән яңынан баш күтәреүселәр сафына баҫтыра һәм һәр саҡ ул Пугачевтың яуаплы заданиеларын үтәүҙе үҙ өҫтөнә ала.

Салауат Юлаевтың тикшереү эшендә һәм башҡа сығанаҡтарҙа крепостной иҙеүгә һәм хоҡуҡһыҙлыҡҡа ҡаршы күтәрелгән халыҡтың һокланғыс етәксеһенең портретын күҙ алдына килтерергә

---

[1] Крестьянская война..., 322-се бит.
[2] Шунда уҡ, 336-сы бит.

мөмкинлек биргән күп кенә бик мөһим мәғлүмәттәр бар. Был документтарҙа Салауат һирәк була торған талантлы шәхес булып күҙ алдына баҫа. Салауаттың Урал һәм Ҡама буйындағы халыҡ араһында абруйы бик ныҡ үҫеүе уның Крәҫтиәндәр һуғышы лозунгыларына тоғро һәм бирелгән булыуы менән, иҫ киткес хәрби һәм ойоштороу һәләтлелектәре менән аңлатыла. Тикшереү барған көндәрҙә Салауат үҙен көткән ауыр газаптарҙы еңеләйтергә теләп, үҙенең восстаниела ҡатнашыуын хөрмәтле старшиналарға ғәмһеҙ эйәреүе менән, йәшлеге һәм, ахыр килеп, Пугачевтың үсенән ҡурҡыу менән аңлатырға тырыша. Ләкин был һүҙҙәре уның маҡсатҡа ынтылышлы һәм үҙ аллы эш-ҡылыҡтарын нигеҙле иҫбат итеү, тикшереү йыйнаған (ул да тулыһынса түгел) дәлилдәр менән ҡаршы килә. Был уңай менән судьяларҙың түбәндәге фекерҙәренең нигеҙле булыуын икрар итмәй мөмкин түгел: улар Салауаттың «теләһә ҡайһы ваҡытта һәм иркен рәүештә китеп йөрөү һәм үҙен ғәйепле итеп танып» властарға килеү өсөн мөмкинлектәре күп булыуын, ләкин быға ынтылмауын һәм «үҙе үкенмәҫтән, әгәр ҡулға эләгеүе генә ҡамасауламаған булһа, һис тә көрәштән баш тартмаясағын» белдәләп үтә.

Салауат үҙе һайлап алған юлдан ныҡ һәм эҙмә-эҙ алға бара, ул юлда уның ихтыяры һәм батырлығы, халыҡ һуғышының ғәҙеллегенә ышанысы асыла. Үҙенең ҡыҫҡа ғына яугир тормошонда ул алдына ҡуйған маҡсатына аҙағынаса тоғролоҡ һаҡлай, яҙмышын восстание менән бәйләп, иң ауыр ваҡыттарҙа ла үҙ эшенә хыянат итмәй.

Салауат, күпселек ваҡиғаларҙа үҙ аллы хәрәкәт итеп, баш күтәреүселәрҙең төп үҙәгенән алыҫта торһа ла, бөтә ерҙә һәм һәр ваҡыт Пугачевтың тоғро көрәштәше булып ҡала. 1774 йылдың июленә тиклем ул восстаниеның етәксеһе һәм уның ставкаһы менән даими бәйләнеш тота. Тәүтикшереү барышында билдәле булғанса, Салауат Пугачевтың һәм Хәрби коллегияның ниәттәренә ярашлы рәүештә эш итеп, баш күтәреүселәрҙең иң ҙур көрәш усаҡтарына етәкселекте ғәмәлгә ашыра, ҙур отрядтар ойоштора, крепостарҙы һәм ауылдарҙы ҡамай һәм баҫып ала, дошманға ҡаршы күп тапҡыр алышҡа сыға. Ул Өфө һәм Көнгөр өйәҙҙәренең халҡына өндәмәләр менән мөрәжәғәт итә, баш күтәреүселәрҙең Төп ғәскәрен аҡса ҡаҙнаһы, аҙыҡ-түлек һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итә. Крәҫтиәндәр һуғышы етәксеһе лә үҙенең энергиялы һәм тоғро ярҙамсыһына юғары баһа бирә. 1773 йылдың декабрендә Пугачев Салауатҡа полковник исеме, ә ярты йыл үткәс, бригадир чины бирә.

Баш күтәреүселәр хәрәкәтендә Салауаттың эшмәкәрлеге уның тикшереү эше документтарында һәм башҡа төр сығанаҡтарҙа яҡтыртылыуы тураһында главаның үҙәге параграфтарында ентекле әйтелде. Баш күтәреүселәрҙең командиры, көрәшкә күтәрелгән халыҡтың етәксеһе булыу яғынан Салауат характерының төп һыҙаттарын тағы бер тапҡыр әйтеп үтергә кәрәк. Тыйып тотҡоһоҙ энергия, эш-ҡылыҡтарының маҡсатҡа ынтылышлылығы, батырлығы һәм арыу-талыу белмәүе, эш менән һүҙ берҙәмлеге, хыянатсылар-

ға аяу белмәүе, көрәштә аҙағынаса тороуы һәм ныҡлы ихтыяр көсө һаҡлауы — бына ошо күркәм һыҙаттары уның бөтә эштәрендә лә сағыла. Салауат яугирҙары, хәрби оҫталыҡ яғынан хөкүмәт ғәскәрҙәренән күп ҡайтыш булғанлыҡтан, йыш ҡына еңелһә лә, ләкин үҙ дошмандарына ҡаршы һуғыштарҙа йыш ҡына иҫ киткес рух күтәренкелеге һаҡлай, ә Салауат баш күтәреүселәр етәксеһенә хас ҡурҡыуҙы белмәү һәм тәүәккәллек күрһәтә. Бер генә еңелеү ҙә Салауаттан ҡорал ташлата алмауын әйтеп үтеү мөһим.

Салауаттың үҙ байрағы аҫтына һуғышсан дуҫлыҡҡа төрлө милләт кешеләрен тупларға ынтылыуы ла хәрәкәт етәксеһе булыу йәһәтенән уның өлгөргәнлеге тураһында һөйләй. Был — хәрби-ойоштороу сараларында, рус, башҡорт, татар, мишәр, мари, сыуаш һәм башҡа халыҡтар иңгә иң терәп көрәшкән отрядтарға етәкселек итеүҙә, Салауаттың рустарҙы һәм башҡорттарҙы дуҫлыҡҡа өндәп саҡырыуҙарында кәүҙәләнгән. Уның эштәрендә милли өҫтөнлөккә һәм сикләнгәнлеккә урын юҡ. Салауаттың яуҙаш иптәштәре араһында рустар — һалдат И. Н. Белобородов, крәҫтиән И. Г. Васев, казак И. С. Кузнецов, мишәрҙәр Ҡәнзәфәр Усаев менән Бәхтнәр Ҡанҡаев, татарҙар Абдулла Туҡтаров менән Йәрмөхәммәт Ҡәҙермәтов, мари Баҡый Туйкиев, удмурт Москов Якимов, ҡалмыҡ Осман һәм башҡа күптәр була. Егерме йәшлек командирға ябай башҡорт общинниктары ла, восстаниеға ҡушылған арҙаҡлы старшиналар ҙа буйһонған. Салауат отрядтарында төрлө милләттәге һәм төрлө диндәге кешеләр дөйөм дошманға — крепостной иҙеүгә ҡаршы көрәшә.

Академик Л. В. Черепнин Россиялағы крәҫтиәндәр һуғыштарының әһәмиәте тураһында түбәндәгеләрҙе айырыуса билдәләп үтте: «Крәҫтиәндәр һуғышы барышында рус халҡы һәм Россияның башҡа халыҡтары хеҙмәтсән массаларының бәйләнештәре нығыны... Бер һуғыштан икенсе һуғышҡа иҙеүселәргә ҡарата нәфрәт артты, һуғыш тәжрибәһе тупланды, ҡаршылыҡ күрһәтеү традицияһы көсә килде, крәҫтиәндәр юлбашсыларының исемдәре киң танылды»[1]. Пугачев бригадиры Салауат Юлаевтың исеме 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының йылъяҙмаһында күренекле урын тота һәм беҙҙең ил халыҡтарының хәтерендә изге күреп мәңге һаҡлана.

---

[1] *Черепнин Л.* Крестьянские войны в России периода феодализма. — Коммунист, 1973, № 13, 81-се бит.

ҺЫҒЫМТА

Салауат Юлаевтың тикшереү эше тип беҙ шартлы рәүештә билдәләгән материалдар комплексын ҡарау шуны күрһәтте: был эш документтары барлыҡҡа килгән үҙенә бер төрлө шарттар уларҙың йөкмәткеһенә шаҡтай ныҡ йоғонто яһаған. Һорау алыуға һәм суд процесына ҡатнашы булған эҙәрләү учреждениелары, юғары власть, үҙәк һәм урындағы администрация вәкилдәре 1773—1775 йылдарҙағы халыҡ хәрәкәте ваҡиғаларын яҡтыртыуға һәм баш күтәреүселәрҙең Пугачев, Салауат Юлаев һәм башҡа етәкселәренең, унда ябай ҡатнашыусыларҙың эш-ҡылыҡтарын баһалауға, феодаль ҡоролошто һаҡлаусылар булараҡ дошманлыҡ позицияһынан яҡын килә. Улар халыҡтың социаль ғәҙелһеҙлеккә, хоҡуҡһыҙлыҡҡа һәм иҙеүгә ҡаршы ғәйәт ҙур сығышын дәүләткә хыянат итеү итеп ҡарай, восстание башлыҡтарын «томана һәм йүгәнһеҙ ҡара халыҡ болаһын» етәкләгән ҡараҡтар, юлбаҫарҙар һәм уголовный енәйәтселәр тип баһалай. Хакимлыҡ итеүсе синыфтың мәнфәғәттәрен яҡлап, власть һәм эҙәрләү учреждениелары вәкилдәре восстаниеның реаль ваҡиғалары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе боҙоп күрһәтә, хәҡиҡәтте тенденциоз баһалар һәм өгөт-нәсихәт һүҙҙәре менән томалап, баш күтәреүселәрҙең эш-хәрәкәттәренә ялған төҫ бирә. Тикшереү Крәҫтиәндәр һуғышының төп маҡсаттарын, унда киң халыҡ массаларының ҡатнашыу сәбәптәрен, помещиктарҙың һәм чиновниктарҙың халыҡ алдындағы ғәйебен асыҡлау менән шөғөлләнмәй, ә баш күтәреүселәр власының һәм учреждениеларының законға ҡаршы административ эшмәкәрлеген иҫбатлауҙы бурыс итеп ҡуя.

Ғәмәлдәге суд эштәрен алып барыу характеры тикшереү аҫтындағыларға судты халыҡ восстаниеһының сәбәптәре һәм барышы хаҡында тура һәм асыҡтан-асыҡ һөйләшеү өсөн файҙаланырға бер төрлө лә мөмкинлек бирмәй. Салауат Юлаевтың эшен ҡарағанда, батша чиновниктары фәҡәт үҙҙәренә файҙалы маҡсатты күҙ уңында тота — уға ҡарата ҡатыраҡ язалар ҡулланыуҙы нигеҙләү өсөн, ауыр уголовный енәйәттәрҙә (үлтереүҙә, талауҙа, яндырыуҙа) уның ғәйебен иҫбат итеүҙән, хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡораллы һөжүм итеүҙә ҡатнашлығын асыҡлауҙан сығып эш итә.

Тәүтикшереү үткәргәндә хөкүмәт позицияһының дөрөҫлөккә зыян итеүсе йоғонтоһо, Салауат Юлаевтың күрһәтеүҙәре протоколдары кеүек, сығанаҡтарҙы өйрәнеү йәһәтенән ифрат әһәмиәтле булған документтарҙың йөкмәткеһендә лә сағыла. Был сығанаҡтарҙа тикшереү аҫтындағы кешенең восстаниеның реаль ваҡиғалары тураһында дөрөҫ мәғлүмәттәре менән бер рәттән һорау алыуҙы үткәреүсе тикшереүселәр тарафынан индерелгән уйҙырмалар һәм хата баһалар ҙа бар. Шуның менән бергә Салауат үҙе лә — үҙен-үҙе яҡлап, тикшереүгә билдәле булмаған һәм ғәйебен тәрәнәйтеүе мөмкин булған факттар тураһында ентекле һәм асыҡтан-асыҡ һөйләүҙән тыйыла; ҡайһы саҡта ул үҙ эшмәкәрлегендәге бик әһәмиәтле һәм дауамлы осорҙарҙы бөтөнләй телгә алмай, ә ҡайһы берҙә документтар менән һәм шаһиттарҙың күрһәтеүҙәре менән дөрөҫләнгән факттарҙы ла ныҡышмалы рәүештә кире ҡаға. Әйтелгәндәрҙән шундай һығымта яһарға мөмкин, Салауаттың күрһәтеүҙәре протоколдары — ундағы мәғлүмәттәрҙең ҡайҙан алыныуы менән дә, дөрөҫлөк дәрәжәһе яғынан да, күп факттарҙы әйтмәй ҡалыуҙары яғынан да ҡатмарлы сығанаҡ.

Тап бына шуға ла, Салауат Юлаев эшен тикшереү документтарын, беренсе сиратта уның күрһәтеүҙәре протоколдарын, тик был сығанаҡтарҙың үрҙә әйтелгән үҙенсәлектәрен алдан өйрәнгәндән һуң ғына, уларҙағы һәр мәғлүмәттең дөрөҫлөгөн билдәләгәндән һәм бөтә етешһеҙлектәрен асҡандан һуң ғына файҙаланырға мөмкин. Был тикшеренеү бурысы Салауаттың күрһәтеүҙәрен Салауаттың тикшереү эшенең үҙендә булған, шулай уҡ төрлө фондтарҙа һәм архивтарҙа һаҡланған башҡа эштәр составында табылған бүтән сығанаҡтарҙың шуға оҡшаш мәғлүмәттәре менән тәнҡит күҙлегенән сағыштырып ҡарау юлы менән хәл ителде.

Салауат Юлаев эше буйынса суд-тикшереү процесы документтарын өйрәнеү ғәйәт күп төрлө сығанаҡтарҙы ылыҡтырыуҙы талап итте. Баш күтәреүселәр властарының һәм учреждениеларының документтары, восстание башлыҡтарының һәм ябай баш күтәреүселәрҙең тикшереүҙәге күрһәтеүҙәре, үҙәк һәм урындағы хөкүмәт властарының һәм учреждениеларының үҙ-ара яҙышыу ҡағыҙҙары, Пугачев хәрәкәте замандаштарының мемуарҙары файҙаланылды. Бер үк ваҡытта был документтарҙың нисек һәм ни өсөн төҙөлөү үҙенсәлектәре иҫәпкә алынды. Ағымдағы яҙышыу ҡағыҙҙары, хаттар, хөкүмәт учреждениеларының һәм яҙалау отрядтары командующийҙарының хәрби-поход канцелярияларындағы документация кеүек үк, восстание ваҡиғаларын уның дошмандары позицияһынан яҡтырта. Ундағы мәғлүмәттәрҙең, шулай уҡ пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәре протоколдарының дөрөҫлөгөн билдәләгәндә, ваҡиғаларҙы яҡтыртыуҙа һәм баһалауҙа ҡайҙа һәм ни өсөн дөрөҫлөккә хилаф ҡылынғанын, хаталарҙың сәбәбен һ. б. ш. асыҡларға кәрәк булды.

Сығанаҡтарҙы комплекслы өйрәнеү һөҙөмтәһендә, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының күп кенә мөһим ваҡиғаларын сағылдырған тарихи сығанаҡ булараҡ, Салауат Юлаевтың тик-

шереү эшенең әһәмиәте билдәләнде һәм был эш документтарын фәнни яҡтан файҙаланыу мөмкинлеге тураһындағы мәсьәләне хәл итеүгә ынтылыш яһалды.

Тикшереү эшенә сығанаҡтарҙы өйрәнеү нигеҙендә анализ яһау (уның төп маҡсаты, юғарыла әйтелгәнсә, документтарҙың йөкмәткеһен тулыраҡ асыу ине) шуны билдәләргә булышлыҡ итте: уларҙағы мәғлүмәттәрҙең ышаныслы өлөшө Өфө өйәҙе территорияһында һәм уға күрше Көңгөр өйәҙе төбәктәрендә баш күтәреүселәр хәрәкәтенең барышын, унда восстание башлыҡтарының береһе сифатында Салауат Юлаевтың ҡатнашыуын дөйөм формала яҡтыртырға мөмкинлек бирә. Бер яҡтан, тикшереү эшендәге материалдарҙа булған мәғлүмәттәр башҡа сығанаҡтарҙан беҙгә билдәле булған факттарҙы (язалау ғәскәрҙәрен тулыландырыу өсөн властар мобилизациялаған башҡорт-мишәр командаларының пугачевсылар яғына күсеүе, Пугачевтың Төп ғәскәре составында башҡорттарҙың Ырымбур эргәһендә, Өфө провинцияһында (Әй йылғаһында), Усаны алғандағы һуғыштарҙа ҡатнашыуы, Салауат Юлаевтың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан волостарындағы һәм Красноуфимск — Көңгөр районындағы эшмәкәрлеге һ. б.) анығлай йәки раҫлай. Икенсе яҡтан, тикшереү документтарында башҡа сығанаҡтарҙан белергә мөмкин булмаған факттарҙы табабыҙ. Мәҫәлән, Салауат Юлаевтың тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәре буйынса Пугачев атаманы И. Н. Грязновтың 1773 йылдың декабрендә Себер юлындағы эшмәкәрлеген күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Ә уның Өфөлә һорау алғанда һөйләгәндәре (был Юлай Аҙналиндың күрһәтеүҙәре менән дөрөҫләнә) Е. И. Пугачевтың 1774 йылдың 2 майындағы бөтә заводтарҙы тар-мар итергә бойорған указын алыу тураһында ҡиммәтле, берҙән-бер мәғлүмәт булып тора, был Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе этабында Көньяҡ Урал заводтарына ҡарата баш күтәреүселәр властарының тактикаһы үҙгәреүен күрһәтә.

Баш күтәреүселәрҙең күрһәтеүҙәре теркәлгән бер нисә протоколдан һәм урындағы учреждениеларҙың үҙ-ара яҙышыу документтарынан тикшереүселәр күсереп алған өҙөмтәләр айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки уларҙың тулы текстары һаҡланмаған. Тап ошо мәғлүмәттәр нигеҙендә Салауат Юлаевтың күренекле Пугачев атаманы И. Н. Зарубин менән бәйләнеш тотоуы тураһында һәм баш күтәреүселәрҙең Өфө эргәһендәге Чесноковка төп лагерында Пугачевтың Салауатҡа Красноуфимск — Көңгөр районына барырға тигән заданиеһын белеүҙәре тураһында фараз итергә мөмкин. Өҙөмтәләрҙә Салауаттың «казактар» йыйыу тураһында бөтә Башҡортостанға тaратҡан бойороғоноң ойоштороусы әһәмиәте хаҡында мәғлүмәттәр раҫлана. Шул уҡ документтарҙа һәм ғәйепләүсе шаһиттарҙың күрһәтеүҙәрендә Башҡортостандағы баш күтәреүселәрҙең дошмандарының, ә тимәк, Салауат Юлаевтың да хас дошмандарының: старшиналарҙың һәм ахундарҙың, завод хужаларының һәм приказчиктарының, халыҡ хәрәкәтенән ҡурҡҡан йәки уға хыянат иткән аумаҡай, тотороҡһоҙ кешеләрҙең исемдәре әйтелә. Тикшереү эше Салауаттың тышҡы ҡиәфәте, буй-һыны, ғаиләһе, ту-

ғандарына һәм яҡындарына мөнәсәбәте тураһында мәғлүмәт биреүсе берҙән-бер сығанаҡ булып иҫәпләнә.

Тикшереү эше документтары Пугачев восстаниеһы ваҡиғаларын яҡтыртыу менән бергә феодаль йәмғиәттәге хоҡуҡ мөнәсәбәттәрен баҙыҡ сағылдыра, социаль һәм милли тигеҙһеҙлеккә ҡаршы көрәшкә күтәрелгәндәрҙән крепостной дәүләттең рәхимһеҙ үс алыу фактарын күрһәтә. Документтар Екатерина II хөкүмәтенең халыҡ хәрәкәттәрен баҫтырыу буйынса суд-административ органдары эшмәкәрлегенең синфи йүнәлтелгәнлеген һәм механизмын яҡшы ҡылыҡһырлай. Тикшереү эше документтарынан алынған фактар Салауат эше буйынса суд-тикшереү эштәрен ҡарауҙың өс этабын: Н. Я. Аршеневскийҙың хәрби-поход канцелярияһында, Сенаттың Йәшерен экспедицияһында, Өфө провинция канцелярияһында үткәрелгән этаптарын асыҡларға, Салауат Юлаев өҫтөнән тәүтикшереүгә лә, шулай уҡ восстаниеның башҡа етәкселәренең тикшереү эштәренә лә хас булған дөйөм һыҙаттарҙы, шулай уҡ Салауат эшенең күп кенә айырмалы үҙенсәлектәрен асырға булышлыҡ итә.

Тикшереүҙәрҙең айырым этаптарына йомғаҡ яһаусы документтарҙың төрлө варианттарына һәм ҡараламаларына текстологик анализ Сенаттың Йәшерен экспедицияһы сығарған хөкөм ҡарарының иң һуңғы тексы Екатерина II-нең туранан-тура күрһәтмәләре нигеҙендә төҙөлгән, шул уҡ тикшереүҙәрҙең оҙаҡ һәм тышҡы яҡтан объектив итеп күрһәтергә тырышып алып барылыуына ҡарамаҫтан, Салауат Юлаевҡа ҡаты яза биреү алдан уҡ хәл ителгән, тип уйларға мөмкинлек бирә. Тәүтикшереү органдары ҡулланған төп закондарҙан (Алексей Михайловичтың Собор уложениеһы, Петр I-нең Хәрби һәм Диңгеҙ уставтары) 16 статьяның Өфө провинция канцелярияһы чиновниктары тарафынан төҙөлгән тикшереү материалдары экстрактының ҡараламаһында яҙып ҡуйылған номерҙары, властар фекере буйынса, Салауат Юлаевтың «енәйәттәрен» раҫлаған закондар текстарына мөрәжәғәт итергә мөмкинлек бирҙе.

Тикшереү эше документтарын өйрәнеү шундай һығымтаға килтерә: политик эҙәрләү учреждениелары Екатерина II-нең 1775 йылдың 17 март манифесын һәм Сенаттың ошо уҡ йылдың 6 апрелендәге указын аңлы рәүештә ситләтеп үтә (уларҙа элек үлем язаһына хөкөм ителгәндәрҙең эштәре буйынса тәүтикшереүҙе туҡтатып, уларҙы «Ырымбурға эшкә» оҙатыу, ә тән язаһына хөкөм ителгәндәрҙе Тобол губернаһына һөрөү тураһында әйтелә). Шуға күрә Салауаттың эшен Ырымбур губернаһында тикшереү ҙә, бигерәк тә уны ҡаты тән язаһына һәм ғүмерлек каторга эшенә хөкөм итеү ҙә хатта юғары власть тарафынан ошо уҡ 1775 йылда тантаналы рәүештә иғлан ителгән закондар позицияһынан ҡарағанда ла законһыҙ була. Пугачевты һәм уның иптәштәрен Мәскәүҙә язалағандан һуң, йәнә үлем язаһы сығарыуға баҙнатлыҡ итә алмайынса (Россияла үлем язаһы закон менән тыйылған була) әбей батша һәм уның сатраптары Салауат Юлаевты ғүмерлек ғазапҡа, асылда тыуған иленән алыҫта аҡрынлап үлеүгә, хөкөм итә.

Тикшереү эше материалдары нигеҙендә тәүтикшереү, суд барышы һәм хөкөм ҡарарын еренә еткереү картинаһын тулыһынса тиерлек күҙ алдына килтерергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта ярҙамсы һәм төҙәтеүсе документтарҙағы мәғлүмәттәр, Крәҫтиәндәр һуғышы тураһында беҙҙең бар белгәнебеҙ Салауаттың күрһәтеүҙәре протоколдары һәм уның өҫтөнән суд-тикшереү процесының башҡа документтары баш күтәргән халыҡтың ошо ифрат күренекле етәксеһенең эшмәкәрлеген етерлек тулы дәрәжәлә сағылдырмауы хаҡында һөйләй.

Тикшереү эше документтарын өйрәнеүгә йәлеп ителгән сығанаҡтар уларҙағы мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн анализлау һәм тикшереү маҡсаттарына ғына хеҙмәт итеп ҡалманы, бәлки, быныһы бигерәк тә мөһим, — үҙҙәренең хәлен тағы ла ауырайтмау өсөн, эшмәкәрлектәренең айырым яҡтары хаҡында аңлы рәүештә бер һүҙ ҙә әйтмәгән Салауат Юлаевтың һәм башҡа пугачевсыларҙың күрһәтеүҙәрен күп йәһәттән тулыландырҙы.

Сығанаҡтарҙың шаҡтай күпселегенең йөкмәткеһен тәнҡит күҙлегенән ҡарау 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының Салауат Юлаев исеме менән бәйле булған ваҡиғаларын тулыраҡ яҡтыртырға, уның биографияһының реаль факттарын белергә һәм аныҡларға мөмкинлек бирҙе. Тикшеренеүҙәр ваҡытында өйрәнергә тура килгән материалдар Пугачев бригадиры Салауат Юлаевтың уғата күренекле роль уйнауын раҫлай. Документтарҙа Салауат яугирҙарының һуғыш операциялары тураһында, уларҙың хәрәкәттәрендә аңлылыҡ һәм ойошҡанлыҡ элементтары булыу тураһында яңы мәғлүмәттәр табылды. Рус һәм рус булмаған халыҡтар араһында Пугачев манифестарын һәм указдарын, үҙенең өндәмәләрен таратҡан Салауаттың агитация эше тураһында, уның хәрби-ойоштороу саралары тураһында (баш күтәреүселәрҙең башҡа отрядтары менән яраштып эш итеү, команда составын билдәләү, дисциплина өсөн көрәш һ. б. ш.), азат ителгән территорияларҙа хоҡуҡ тәртибе урынлаштырыу тураһында сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр бик тә әһәмиәтле. Пугачевтың сығышында рус булмаған халыҡтарҙың ҡатнашыуы, феодаль иҙеүгә, помещиктарҙың, завод хужаларының һәм батша администрацияһының башбаштаҡлығына ҡаршы берлектәге көрәш барышында рус һәм рус булмаған халыҡтарҙың хеҙмәтсән ҡатламының боевой дуҫлығы барлыҡҡа килеүе кеүек шундай мөһим проблемаларҙы яҡтыртыу өсөн документтарҙың әһәмиәте бигерәк тә ҙур.

Беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланған архив документтары һәм мемуар сығанаҡтар Салауат Юлаевтың бөтә эшмәкәрлеген тулы күләмдә сағылдыра алмай, әлбиттә, ләкин шул мәғлүмәттәр ҙә Салауат Юлаев тураһында, уны һоҡланғыс шәхес итеп, восстание күтәргән халыҡтың иң күренекле етәкселәренең береһе итеп һөйләү өсөн етерлек. Ф. Энгельстың Германияла Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәре тураһында: «...Бөйөк крәҫтиәндәр һуғышының килешһеҙерәк беселгән... ләкин ныҡ тегелгән фигуралары»[1] тип әйткәне

---

[1] *Маркс К., Энгельс Ф.* Әҫәрҙәр, 2-се баҫма, 7-се том, 345-се бит.

Салауатҡа ла тулыһынса ҡағыла. Салауат Юлаев — башҡорт халҡының милли геройы, башҡорттарҙың социаль иҙеүгә һәм милли тигеҙһеҙлеккә ҡаршы фиҙакәр көрәш символы, иҙеүселәргә ҡаршы көрәштә батырлыҡ һәм ғәйәрлек, рус һәм башҡа халыҡтар менән туғанлыҡ символы. Уның исемен беҙҙең илебеҙҙең бар хеҙмәтсәндәре ихтирам менән иҫкә ала. Уның хөрмәтенә Башҡортостанда нефть химияһының иң ҙур үҙәге Салауат ҡалаһы тип атала. Салауат исемен Башҡорт АССР-ының бер районы, күп колхоздары, теплоходтар йөрөтә. Уның тормошо һәм ҡаһарманлығы халыҡ ауыҙ-тел ижадында, әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәрендә сағылыш тапты.

Magazin
für die
neue
Historie und Geographie,
angelegt von
D. Anton Friedrich Büsching,
Königl. Preußischen Oberconsistorialrath, Director des Gymnasiums im grauen Kloster zu Berlin, und der davon abhängenden beyden Schulen.

Achtzehnter Theil.

Mit Churfürstl. Sächsischem gnädigstem Privilegio.

Halle,
verlegt von sel. Johann Jacob Curts Wittwe. 1784.

1784 йылда Галлела А. Ф. Бюшингтың «Яңы тарих һәм география йыйынтығы» тигән йыллығында немец телендә исемһеҙ яҙмалар баҫып сығарыла, унда Салауат Юлаевтың һуғышсан эшмәкәрлеге тураһында уҡыусыларға тәүләп хәбәр ителә.



Ырымбур ҡалаһының күренеше. *XIX быуат башындағы гравюранан.*

Урал заводындағы тимерлек. Баш күтәреүселәр өсөн һалҡын ҡорал ошондай тимерлектәрҙә ҡойола. *XVIII быуат гравюраһынан.*



Баш күтәреүселәрҙең ҡоралдары.


По указу его величества государя императора Петра Федоровича самодержца всероссийского
и прочая, и прочая, и прочая.

Красноуфимск казак ғәскәренең атаманы итеп М. И. Поповты (Ивановты) һәм есаул итеп М. Д. Чигвинцевты тәғәйенләү тураһында Салауат Юлаев указының беренсе бите. 1774 йыл, 13 ғинуар. — *ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 60. Төп нөсхә.*



Ҡөңгөр ҡалаһының 1703 йылда С. У. Ремезов эшләгән һыҙмаһы.



Уса биҫтәһенең көнсығыш тарафтан күренеше. *XVIII быуат гравюраһынан.*



Салауат Юлаевтың отрядҡа кешеләр йыйыу тураһында йөҙ башлығы Иләтбай Илембаевҡа приказы. 1774 йыл, 23 март. — *ЦГАДА, ф. 6, о. 416, ч. 2, л. 208.*



Салауат Юлаевтың Сенаттың Йәшерен экспедицияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәре протоколының беренсе бите. 1775 йыл, 25 февраль. — *ЦГАДА, ф. 6, д. 427, л. 15. Төп нөсхә.*



Быть по сему

156

1775 Года марта 16 дня Гене-
ралъ Аншефъ Сенаторъ Князь
Волхонской, тайной действи-
тельной советникъ Генералъ
Прокуроръ Князь Вяземской
во исполнение высочайшаго
ея императорскаго Вели-
чества соизволения, о содер-
жащихся въ тайной экспе-
диции Оренбургской Губернии
Уфимской провинции Сибирской
дороги деревни Юлаевой башкир-
цахъ Юлае Азналинове, сыне
его Салавате Юлаеве. и [illegible]
[illegible] Юлай признался,
что онъ хотя [illegible], но
былъ однакожъ въ толпе зло-
дея при [illegible] Ассесора
Тевкелева Семеннаго заводу

Оберъ

Салауат Юлаев эше буйынса Сенаттың Йәшерен экспедицияһы сығарған хөкөм ҡарарының беренсе бите. Екатерина II үҙе яҙған резолюция менән. 1775 йыл, 16 март. — *ЦГАДА, ф. 7, д. 2043, ч. 14, л. 156. Төп нөсхә.*



Салауат Юлаев эше буйынса Сенаттың Йәшерен экспедицияһы сығарған хөкөм ҡарарының һуңғы бите. 1775 йыл, 16 март. — *ЦГАДА, ф. 7, д. 2043, ч. 14, л. 162 об. Төп нөсхә.*



Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Өфө провинция канцелярияһында һорау алғандағы күрһәтеүҙәрҙе яҙмаһының һуңғы бите, Салауаттың ҡултамғаһы һәм ғәйепләүсе шаһиттарҙың тамғалары менән. 1775 йыл, 8 июнь. — *ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 346. Төп нөсхә.*



Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү документтарының Өфө провинция канцелярияһында төҙөлгән экстрактынан. Россия империяһы закондарының төп йыйынтығынан статьялар һәм артикулдар килтерелгән, уларға нигеҙләнеп, ахырғы хөкөм карары сығарылырға тейеш булған. 1775 йылдың 6 июленән элегерәк. — *ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 362. Каралама.*



Копия

1775 году октября 2 дня

Во исполнение повеления его высокопревосхо-
дительства господина генерала-пору-
тчика оренбургского губернатора и кавале-
ра Ивана Андреевича Рейнсдорпа отп-
равляются отсель вечно ссылаемые
богоотступники отрещавшиеся в злодействе
башкирцы Юлай Азналин и сын его
Салават, которым по содержанию ука-
за правительствующего Сената состо-
явшегося прошлого 1767 году августа 15
дня по особо учиненной в Уфимской провин-
циальной канцелярии резолюции и [illegible]
деньги выданы [illegible] от Уфы
до Казани [illegible] и [illegible] [illegible]
[illegible] [illegible] [illegible] платить в
прогонные деньги того ради присылали
[illegible] [illegible] [illegible]

Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналинды Өфөнән Балтик портына (Рогервикка) ғүмерлек һөргөнгә ебәреү тураһында Өфө провинция канцелярияһы билдәләмәһенең беренсе бите. 1775 йыл, 2 октябрь. — *ЦГАДА, ф. 6, д. 593, л. 355. Күсермә.*



Батша хөкүмәте баш күтәреүселәрҙән шулай үс алған. Сыбыртҡы менән һуҡтырыу. *XVIII быуат гравюраһынан.*

Ергә күмеү һәм «глагол»да ҡабырғанан аҫып ҡуйыу. *XVIII быуат гравюраһынан.*

Ҡуласаға бәйләп язалау. *XVIII быуат гравюраһынан.*

Өфө ҡалаһындағы Троицк сиркәүе. Риүәйәттәр буйынса бында әсиргә алынған Юлай Аҙналин, Салауат Юлаев, И. Н. Зарубин-Чика, И. И. Ульянов һәм башҡа күренекле пугачевсылар һаҡ аҫтында тотолған. *XX быуат башындағы фото.*



Балтик порты (Рогервик), бында Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаев ғүмерлек каторгала яфа сигә һәм ошонда вафат була. *XVIII быуат аҙағындағы гравюранан.*

ИСЕМДӘР ҠҮРҺӘТКЕСЕ

Абдрахманов Ҡотлогилде 135
Абдрахманов Моразым 190
Абдрахманов Өмөтбай 135
Абдрахманов Әбдрәшит 30
Абдуллов (Абдуллин) Әбди 46, 145
Абзаев Әмирхан 162
Автократова М. И. 13
Азменев (Ашменев) Әзел 145, 191
Азналин Юлай
Азылов Юртым 38, 87
Айсин Хөсәйен 176
Аксенев А. И. 13
Аҡбаев Изибай (Енбаев, Янбаев) 43, 55, 88, 175, 180
Аҡбеев Яҡуп 162
Аласимов Иман 190
Алекторов А. 10
Алишев С. Х. 28, 170, 172
Андреев М. 171
Андреевский И. 20
Андрущенко А. И. 11, 65, 139, 152, 153, 155, 160
Аничков С. И. 53, 96, 97
Антонов С. 105
Анучин Д. 30, 31, 129
Аптыраҡов Мөхәмәткилде 58, 59, 143
Аптыраҡов Һөйәрембәт 58, 59, 143
Аптыраҡов Яҡшымбәт 58, 59, 143
Арзамасцев Н. С. 109, 169
Аристов И. С. 67
Арҡаев Миндиар 193
Аршеневский Н. Я. 33, 34, 36, 38, 40, 43, 55, 56, 57, 69, 77, 80, 88, 124, 175, 180, 187, 262, 210
Арыҫланов Ҡинйә 14, 39, 50, 52, 131, 133, 135, 137, 160
Атйетәрев Ҡунаҡҡол 182

Бабкин Д. С. 7, 63, 79
Байзашев Әбел 55, 87—89, 172—175, 176
Баҡынов Аллағужа 143
Балтачев Ҡолой 12, 44, 45, 46, 48, 52, 76, 85, 90, 94, 95, 100, 143, 183, 186
Батырша 34
Бахман И. 174
Бахматов Н. А. 147, 148
Башмаков М. И. 178
Бекетова И. Н. 200
Белобородов И. Н. 14, 15, 42, 43, 49, 88, 107, 111, 160, 161, 163, 164, 165, 166, 176, 180, 201
Бибиков А. И. 13, 23, 24, 26, 35, 37, 44, 47, 111, 112, 113, 140, 143, 157, 158, 163, 164, 165
Бибиков В. Ф. 110, 164, 165, 181, 191
Бигәшев Әзел 120, 172, 174, 182
Бекметов А. 191
Бикәев Әбдрәшит 28
Бикбулатов Әлимтәй 199
Бикбулатов Юзей 30
Биктимеров Юзей 30
Биктуғанов Әлетдин 29, 185, 191
Билбасов В. А. 16
Блинов И. 20
Блок Г. 116
Богадельщиков М. 167, 170
Богданов П. Н. 132, 133, 134
Богославский М. М. 8
Болхаиров Бохармәт 43, 179
Борисов А. Н. 44, 53, 55, 96, 132
Брант Я. Л. 23, 27, 113, 114, 129, 132
Бугаев П. И. 42
Буганов В. И. 7, 13, 79
Борсаҡов Шығанай 199
Бурцев П. И. 129
Бушман И. 66
Бюшинг А. Ф. 14, 116

Вагина П. А. 188
Варадинов Н. В. 92
Васев И. Г. 150, 155, 164, 206
Васильев А. 55, 57, 87, 102
Васильев И. 43, 156, 157
Веревкин А. П. 124, 142

Весселовский С. Б. 81
Витевский В. Н. 34
Витт В. 21
Волков Д. С. 16
Волков И. 28
Волконский М. Н. 13, 24, 25, 41, 43, 48, 49, 63, 80, 93—95, 99
Вяземский А. А. 40, 42—50, 52, 63, 73, 76, 80, 93—95, 99, 100, 107, 115, 158

Гагрин Д. О. 109, 110, 113, 119, 121, 147, 155, 156, 180
Галанов В. 74
Гвоздикова И. М. 13, 36
Глебовский И. Е. 190
Голдобин М. И. 145
Голов Н. 134
Голикова Н. Б. 79, 20, 79
Голицын П. М. 33, 112, 113, 114, 160, 183, 186, 191, 192
Голубцов С. А. 13
Гольденберг Л. А. 4
Гольцев В. А. 41
Горбунов К. 10
Горшков М. Д. 25, 67, 160
Горюнов А. 115
Грибовский В. М. 19
Грот Я. К. 13, 23, 30, 112, 113, 129, 133, 134, 135, 184, 185
Грязнов И. Н. 118, 119, 141, 209
Гульчихин И. 42, 87, 130, 196
Гурьев И. 157
Гусев Ф. 107, 170

Ғүмәров Мәсәғүт 162
Ғәлиев Раҡай 38, 87, 118, 120, 123, 143, 149, 167, 175
Ғәлиев Әбдрәшит 38, 87, 118, 132

Даль В. 92
Декастро-Лацеродо Я. 180
Деколонг И. А. 32, 77, 112, 113, 162—164, 165, 168, 176, 180, 183, 187
Демидов А. Г. 152
Демидов П. 160
Державин Г. Р. 16
Джинчирадзе В. З. 22, 23
Дибаев Сөләймән 34
Дитмар К. И. 67
Дмитриев-Мамонов А. И. 16, 32, 129
Долгополов А. Г. 67
Домогацкий Б. 66
Дрейзен С. С. 13
Дружинин И. 151
Дружинин Н. М. 3
Дубровин Н. Ф. 10, 25, 27, 31
Дуве О. И. 112, 173, 174
Дәүләтов Ҡолда 141

Екатерина II 5, 13, 20, 23, 24, 25, 26, 31, 34—41, 47, 49, 50, 53, 63, 64, 68, 77, 97, 99, 112, 128, 130, 147, 156, 159, 193, 194, 210
Елизавета Петровна 21, 63
Ерошкин Н. П. 20, 22, 41
Ершов Д. 105

Җолобов Ф. 180, 183

Зайончковский П. А. 83
Зарубин И. Н. 14, 28, 134, 135, 136, 137, 141, 145, 150, 152, 155, 157, 160, 209
Злыгостев Т. Ф. 146
Зряхов И. З. 27
Зәбиров В. 131

Ибраев Аҫҡар 197
Иванов Ф. 119
Игнатович А. В. 75
Игнатьев Р. Г. 9, 30, 75
Иҙрисов Аҙнабай 197
Илембаев Иләтбай 106, 159
Ильин Е. 109, 155
Иманаев Сатлаған 135
Индова Е. И. 13
Иртуғанов Рахманғол 183
Исаев А. 114, 167
Ислүков Иман 164
Исхаҡов Тимербай 176
Иҫәкәев Ишембәт 59
Иткинин Батырҡай 46, 145, 146, 150, 151
Ищериков П. Ф. 143, 147, 190
Ишбулатов Иштүбай 29, 43

Йосопов Зөбәир 162
Йосопов Өмәр 22
Йосопов Монасип 162
Йәнбулатов Туҡтамыш 182
Йәнсәйетов Төрәкмән 33
Йылҡыбаев Иҫәргән 171

Ҡабузин В. М. 21
Ҡалмыков П. Д. 65
Ҡар В. А. 13, 128, 129, 133, 135, 136
Ҡараваев Д. К. 67
Ҡаргин Н. А. 28
Ҡаташев В. 107, 168
Ҡашинцев Д. 65, 168
Ҡашкин Мырҙабай 171
Ҡаштанов (Ҡоштанов) И. 152
Ҡаштанов С. М. 4, 85
Ҡедрәев Байым 33, 160
Ҡейеков Шәрип 34, 162, 183, 186
Ҡилтәков (Ҡартиков) Собханғол 108, 119, 124, 142, 143, 154, 197
Ҡинзин Һеләүһен 22, 50, 182
Ҡинишемцев 201
Ҡирилов И. 197
Ҡирхнер А. 115
Ҡитеков Ҡолаҡ 193
Ҡлепалов 176

Ковальченко И. Д. 126
Кожин Н. Н. 32, 109, 112, 114, 162
Колокольцев 53
Кони А. Ф. 83
Кононов Ю. Ф. 72
Коротаев Т. 115
Корсаков А. Н. 41
Корчагин 65
Корф А. А. 136, 137
Котельников С. Т. 152
Көсөков Мөхәммәт 57
Көҫәкәев Сөләймән 143
Краевский А. А. 16
Кречетов Ф. В. 19, 41
Круглов А. И. 114, 189, 190, 192
Кузеев Р. Ғ. 13
Кузнецов И. С. 37, 88, 105, 108, 124, 196, 150, 151, 152, 154, 155
Кузнецов С. Я. 174
Курмачева М. Д. 13
Курносов А. А. 4

Ҡаҙанбаев Терегол 184
Ҡанҡаев Бәхтиәр 11, 15, 39, 119, 147, 172, 206
Ҡорманаев Абдулла 193
Ҡунаҡбаев Асҡар 30
Ҡушаев Юламан 33, 187
Ҡәҙермәтов Йәрмөхәммәт 184, 185, 206

Лавров П. 51
Лазарев И. Г. 176, 188
Лазарев Мандар 190
Ленин В. И. 4, 6, 7, 19, 83, 84, 194
Лесковский В. 35, 37, 80
Лимонов Ю. А. 10, 11, 141, 163
Литвак Б. Г. 4, 13
Лихачев Б. И. 115
Логинов И. 165
Лосенкова Г. В. 67
Лосиевский М. В. 9
Лукин И. 151
Лутохин П. Д. 105

Мавродин В. В. 8, 10—12, 141, 163
Мальцев М. Е. 43, 105, 108, 147, 150, 154
Мамлыгин К. Н. 43, 88
Мансуров Бәкер 135
Мансуров П. Д. 32, 38
Мансуров Әбделғафар 162
Марголин С. Л. 11
Маркс К. 2, 11
Мартынов М. Н. 13, 163
Мартынов Ф. 171
Медведь Н. Т. 71
Мерәҫев Ибраһим 162
Мещерский П. С. 38, 40, 52, 69, 76, 78
Микулин А. 153
Миллер Г.—Ф. 116
Минеев Миңлегол 145
Миронова И. А. 7
Митяев К. Г. 92
Михельсон И. И. 10, 30, 34, 35, 44, 45, 111, 116, 120, 122, 124, 125, 164, 165, 166, 167, 168, 169, 170, 171, 174, 176, 177, 180, 200
Могутов В. И. 173
Моисеев С. Ф. 124, 142
Моратов (Муратов) Ҡаранай 161, 163
Моратов Х. И. 12, 174
Мостафин Сөләймән 162
Мотаев Биктимер 50
Мөслимов Абдулла 176
Муллаҡаев Ҡыҙрас 162, 182, 183
Мырҙабаев Мәҡсүт 184
Мәҙийәров Мәһәҙи 29, 130, 135, 172
Мәмәтов Иммәт 120
Мәмәтҡолов Сәлим 188
Мясников И. С. 65, 114, 189, 199
Мясоедов С. С. 44, 111, 114, 132, 170, 189, 203

Надиров Йосоп 162
Назаров В. Д. 144
Назаров М. 28
Назаров Н. Г. 112, 185
Наумов С. Л. 32
Неверов И. 114, 173
Неплюев И. И. 34, 197, 202
Нечкина М. В. 7
Нефедов Ф. Д. 9, 75
Николаенко А. П. 10, 11, 13, 201
Николай I 8
Новиков В. А. 53
Новиков Н. И. 20, 41
Нурали 197

Обернибесов А. Ф. 157
Овчинников А. А. 134, 136, 147, 148, 167
Овчинников Г. А. 105, 147
Овчинников Р. В. 4, 7, 8, 13, 31, 82, 142, 172
Осипов И. 138
Осман 158, 206

Өсәинов Әлмөхәмәт 30

Павел I 137
Падуров Т. И. 28, 160
Панеях В. М. 10, 11, 141, 163, 186, 188
Панин П. И. 13, 14, 24, 25, 30, 31, 32, 33, 37, 38, 40, 45, 68, 78, 99, 112, 113, 124, 125, 183, 184, 190, 191, 192, 193, 194
Папав А. В. 10, 55, 88, 109, 110, 111, 115, 116, 120, 121, 156, 157, 158, 159, 163, 167, 177, 178, 179, 183
Пермяков Я. Ф. 108, 154
Перфильев А. П. 28, 171
Перфильев Н. В. 190

Петр I 3, 20
Пеутлинг А. А. 79
Пионтковский С. 25
Пироговский Ф. В. 107, 108
Плеханов Г. В. 194
Плотников Р. Н. 114, 123
Покровский М. Н. 13
Попов Д. 148
Попов Е. В. 108
Попов (Иванов) М. И. 105, 108, 119, 147, 148
Попов Ф. В. 115, 158
Пономарев И. А. 42
Потемкин Г. А. 15
Потемкин П. С. 13, 23, 24, 25, 27, 31, 33, 34, 36, 37, 38, 39, 40, 41, 42, 43, 45, 50, 77, 95, 107, 112, 113, 162, 175, 181, 183, 192
Почиталин И. Я. 25, 28, 67
Прокофьева Л. С. 4, 7, 18, 82
Протопопов В. 149, 155
Прохоров М. Ф. 13
Пугачев Е. И. («Петр III», «император») passim
Пушкарев Л. Н. 81
Пушкарев С. 110
Пустобаев П. А. 171
Путятин А. А. 196, 199
Пушкарев Ф. 52, 158
Пушкин А. С. 8, 14, 201

Радищев А. Н. 20, 41, 63
Ранғолов Арыҫлан 55, 120, 173, 182, 186
Рейнсдорп И. А. passim
Рожков Н. А. 194
Рылеев И. К. 32, 33, 44, 45, 110, 111, 112, 120, 121, 181, 182, 183, 186, 187, 192
Рысляев Л. Д. 4, 34
Рычков П. И. 57, 138, 139
Рәмзин Әбделсәләм 186
Рәсүлев Сүрн (Сюрн) 108, 119, 142
Рәхмәтуллин М. А. 144

Савинов Я. Г. 148
Сағыров Истебай 57
Салтыков Н. И. 15
Самгина Е. И. 13
Сафуанов С. Г. 20
Сахаров А. Н. 13
Сенәкәев Тайыш 143
Сесюнов В. 109
Сидров В. В. 67
Ситников Г. Т. 73, 105, 152
Скалон А. Д. 32, 33, 37, 40, 57, 77, 80, 112
Скрипицын Ф. Б. 178
Смаилов Смағол 152
Смаилов Әбләй 162, 163
Соколов-Хлопуша А. Т. 14, 28
Собханғолов Арыҫлан 59
Солтанов Иманғол 176
Сөләйманов Зәйнәш (Әниәш) 38, 87, 118
Сөләйманов Ишмөхәммәт 30, 162, 186, 187, 201
Сөләйманов Муйнаҡ 33
Станиславский С. К. 32
Старков 173, 187
Степанов И. В. 7
Студенкин Г. И. 65
Ступишин Е. А. 37, 132, 188
Суворов А. В. 78, 125
Сурағолов Аҡкусҡар 187
Сураҡов Морат 33
Суслов М. 65, 66
Сыуашев Яуын 143
Сырматов Абдул 135
Сәнтов Айыт 179, 185
Сәнтов Сайран 134
Сәйҙәшев Сәйфулла (Сәйфел-Мәүлет) 107, 145, 182

Таңсурин Айтуған 135
Твердышев Я. Б. 65, 114, 123, 163, 188, 189, 190, 198, 199, 200
Творогов И. А. 25, 136, 137, 161
Тельберг Г. Г. 62
Теләүембәтов Яҡуп 118, 120, 143, 175, 176
Темәсев Һөҙһөт (Адюгут) 43
Тимашев И. Л. 29, 33, 38, 51, 113, 184, 188, 190
Типеев Ш. 12
Титов М. 40
Толкачев М. П. 28
Торнов В. И. 28, 162
Траубенберг 197
Третьяков Ф. И. 56, 58, 59, 65, 66, 87, 90
Троицкий Н. А. 7
Троицкий С. М. 20
Туйкиев Баҡый 179, 184, 185, 206
Туҡмурзин Ҡнәз 29
Туҡтаров Абдулла 87, 89, 112, 172, 175, 206
Туманов Г. 141
Тупиев Бәшир 162
Тупиев Миндәй 162, 163
Тәвкилев О. А. 132, 133
Тюленев Е. И. 67

Ульянов 67
Ульянов И. И. 67
Уразбахтин Ибраш 184
Уразымбәтов Өмәтәй 143
Ураков И. Г. 132, 134
Ураков М. 134
Усаев Ҡәнзәфәр 15, 67, 105, 109, 146, 152, 161, 171, 183, 206
Усманов Ә. Н. 12, 131, 144, 196

Үтәшев Сағыр 57

Федоров И. 193
Федоров С. 109, 169
Фейервар А. А. 122
Феләков Әлетдин 173
Филимошкин М. 201
Фирсов Н. 12
Фрейман Ф. Ю. 14, 32, 36, 37, 40, 42, 54, 56, 58, 64, 66, 69, 77, 78, 80, 111, 116, 125, 181, 183, 188, 190, 191, 192, 203

Харисов А. И. 202
Хасбулатов Шәйфулла 162
Хлебников И. 123
Хлебников И. И. 154
Хлебников М. С. 115
Хорвату Г. И. 188
Хрущев М. С. 197

Һаҡколов Әбләҙи 59, 119, 143
Һамаров Ҡасҡын 33, 135, 161, 182

Цыплетов И. Е. 24, 31

Черепнин Л. В. 7, 194, 206
Черкашенинов И. 53, 88, 89, 96, 97, 101, 203
Чернышев П. М. 136, 141
Чичерин Д. И. 23, 113
Чигвинцев К. Д. 108, 109, 156, 157
Чигвинцев М. Д. 105, 108, 148, 149
Чистякова Е. В. 7, 79
Чудинов Я. Ф. 57, 58, 85, 103, 202
Чучалов П. Н. 51, 98, 204

Шаравьев 155
Шарҡаев (Сарҡаев) Шәрип 43, 88
Шворина Т. И. 19
Шеметов А. 172, 182
Шеметов С. 87, 112, 175, 182, 186
Шепелев Л. Е. 183, 184
Шепелев П. А. 71, 85, 114
Шешковский С. И. 22, 24, 27, 41, 48, 95
Шигаев М. Г. 25, 28, 160
Шиц Х. 38, 79, 110
Штерич И. 112, 121, 185, 187

Шығанаев Ҡунаҡкилде 200
Шәрипов Вәлиша 162

Щербатов Ф. Ф. 23, 38, 110, 111, 112, 114, 122, 161, 164, 165, 166, 167, 169, 170, 177, 179, 188

Ырыҫколов Әбделйәлил 120, 186

Әбдикәев Әмир 183, 196
Әбдесәләмов Мөҡсин 30, 33, 34
Әбдесәләмов Ямғур 38, 79
Әбдрәфиев Хәсән 162
Әбзәмов Шөкөр 193
Әҙәтов Көҫәпҡол 134
Әитов Мәүлет 151
Әлкәев Алмаҡай 160
Әлкәев Әбдрәшит 57
Әптекәев Солтаҡай 30
Әүәзев Сыуашбай 162
Әхмәтов Исхаҡ 160
Әхмәтов Ф. 122

Экбаум Г. И. 195
Энгельс Ф. 6, 211
Этҡолов Илсеғол 143, 147, 190

Юдин П. Л. 9, 201
Юлаев Салауат passim
Юлдашев Ҡанбулат 183
Юлҡыуатов Юламан 30
Юхшичерин Сөләймән 54
Юшков С. В. 21

Яворский И. Я. 44
Якимов Москов 43, 88, 174, 206
Яковлев Ф. И. 108
Якубович А. Я. 30, 112, 173, 174, 183
Яҡупов Бүләк 173, 186
Яҡупов Ишәле 162
Яҡупов Хәлил 143
Янышев Бәхтиәр 30, 162, 187
Янышев Солтанморат 30, 162
Яппаров Яманһары 50
Ярославский Е. М. 74
Яшпохтин Ҡаныҡай 143, 145

ГЕОГРАФИК АТАМАЛАР КҮРҺӘТКЕСЕ

Абдрахман, а. 167
Ағиҙел, й. 30, 180, 183, 184
Аҡа (Ока), а. 172
Аҡтуған, а. 29
Алатыр, ҡ. 181
Алевдино, а. 43, 156
Алтынны, а. 150
Аннинск з-ды 180
Арск, а. 188
Атау (Атаевка) а. 57
Ачит, кр. 177, 185, 190

Байҡы, а. 173
Баҡалы кр. 150
Балтач, а. 43
Балтик порты (Рогервик) 48, 66, 67, 75, 95, 97, 195
Балыҡлыгүл, а. 30
Барын-Табын вол.
Башҡортостан passim
Белорет з-ды 122, 161
Берда биҫтәһе 133, 135, 136, 137, 139, 140, 145, 146
Березовка, а. 179
Бизяр з-ды 180
Бикҡол, а. 134, 136
Бисерть з-ды 190
Бисерть кр. 190
Боғорослан 159
Бошмаҫҡыпсаҡ вол. 50, 131
Борай, а. 44
Бозаяз, а. 146
Бөгөлмә, ҡ. 109, 129, 183
Бөгөлсән пристане 130, 183, 188
Бөрө, й. 45, 185, 186
Бөрө, ҡала тирәһе 43, 44, 115, 173, 174
Бөрйән вол. 137
Буғалыш, а. 109, 110, 156, 157, 158
Буғалыш, й. 158
Бөй, й. 184
Бурғаш, а. 43, 175
Быҙаулыҡ кр. 33, 35, 159
Бәйләр вол. 135

Варшава, ҡ. 198
Введенка (Суксун), а. 153
Верхне-Иренск сиреге 152
Верхнее Озеро кр. 138
Вильно, ҡ. 198
Вознесенск з-ды 160
Волга, й. 180
Воронеж губ. 23
Воскресенск з-ды 134

Галле, ҡ. 115
Гаулов, а. 182
Германия 211
Гәйнә вол. 107, 145, 146, 182, 186

Джунгария 197
Долматов монастыры 187
Дыуан вол. 58, 171, 173, 176

Екатеринбург, ҡ. 140, 145, 165, 175, 190
Елдәк кр. 34, 44, 45, 55, 66, 112, 114, 120, 121, 172, 174, 176, 186, 187
Елпачиха, а. 43, 145
Ерал, а. 122, 166, 188

Златоуст з-ды 168

Иванай (Иваново), а. 112, 185
Ижбулды, а. 185
Илецк кр. 171
Ильинское (Урҙа кр.) 156
Ирәкте вол. 135, 173
Исет провинцияһы 3, 15, 57, 128, 141, 142, 150, 160, 183, 184, 187, 188, 193
Иҫке Төртөк, а. 43
Иҫке Посад (Троицк), а. 88, 109, 150, 152

Ҡыҫҡартып алынған һүҙҙәр: ауылы — а.; ҡалаһы — ҡ.; губернаһы — губ.; волосы — вол.; крепосы — кр.; заводы — з-ды; йылғаһы — й.

Йөҙөй, а. 134
Йүрүҙән з-ды 59, 188
Йүрүҙән, й. 116
Йәғәфәр, а. 38

Ҡама, й. 113, 179
Ҡама аръяғы 145, 146
Ҡама буйы 105, 113, 140, 145, 146, 172, 174
Ҡамышин, ҡ. 181
Ҡарьевск сиреге 152
Ҡасево а. 179
Ҡесетабын вол. 30
Кичуевский фельдшанцы 129
Кишерть, а. 109
Клентов кр. 190
Кокша, ҡ. 180
Көңгөр өйәҙе 43, 87, 115, 137, 152, 164, 165, 174, 179, 181, 183, 188, 205
Красноуфимск кр. 88, 105, 108, 115, 117, 118, 119, 120, 146, 147, 149, 150, 156, 157, 158, 159, 164, 177, 183, 185, 191
Красноуфимск — Көңгөр р-ны 16, 105, 209
Крылов, а. 115
Кундравин биҫтәһе 140, 169, 171
Кәлсер-Табын вол. 30
Кәҫәғол, а. 190

Ҡадир, а. 38
Ҡазан губ. 23, 30, 140
Ҡазан, ҡ. 16, 23, 26, 34, 38, 40, 42, 44, 52, 67, 88, 141, 163, 179, 180, 182, 191
Ҡазан юлы 163, 182, 191
Ҡазан өйәҙе 43, 137, 156
Ҡаҙылбай, а. 164
Ҡалмыҡ, а. 36
Ҡарағол, а. 59
Ҡарамалы, а. 30
Ҡариҙел, й. 187, 190
Ҡара Табын вол. 39, 43, 186, 187
Ҡара Танып вол. 45
Ҡара Яр, а. 32
Ҡатау-Иван з-ды 59, 65, 106, 118, 122, 180, 188, 189, 190, 191, 192, 203
Ҡатай вол. 184
Ҡошсо вол. 90, 147, 172
Ҡумырыҡ-Табын вол. 190
Ҡурмыш, ҡ. 181
Ҡыйғы, а. 170
Ҡыйғаҙы, а. 176
Ҡыҙылъяр, а. 43
Ҡырағай кр. 58, 59, 90
Ҡыркөҙәй вол.
Ҡырҡкүл-Мең вол. 133
Ҡыр-Танып вол. 135
Ҡыштым з-ды 187

Лаҡлы, а. 58, 60, 66, 176
Ломовка, а. 188
Ләкәнде, а. 30

Магнит кр. 161
Минзәлә, кр. 66, 190
Миәс, а. 187
Миндеш, а. 35
Мырҙалар, в. 90
Мөслим, а. 187
Мөхәммәт, а. 57
Музякина, а. 184
Мәскәү, ҡ. 40, 41, 44, 47, 49, 50, 54, 63, 67, 69, 72, 73, 74, 87, 97, 99, 117, 118, 140, 142, 164, 182, 196, 198, 210

Нижегород губ. 23, 30
Нижний Новгород, ҡ. 67
Новый Конпин, а. 29
Новгород, ҡ. 67
Нөркә (Норкино), а. 45, 66, 186
Нуғай юлы 30, 156, 163, 182, 191
Нуғайбәк кр. 159, 172

Озерки, а. 43, 87, 88
Орловка, а. 65, 187
Орск, ҡ. 109
Осиповка, а. 134

Өршәк-Меңле вол. 30
Өфө, ҡ. passim
Өфө провинцияһы 3, 32, 128, 141, 200, 209

Пенза, ҡ. 181
Петербург, ҡ. 8, 10, 71, 143
Пермь провинцияһы 145, 152
Петровск, ҡ. 181
Польша 86, 197, 198
Псков, ҡ. 67

Ревель, ҡ. 67
Рождественский з-ды 164, 174
Россия 7, 8, 11, 19, 22, 72, 128, 206, 210

Саваҡол, а. 182
Салауат, ҡ. 212
Саранск, ҡ. 181
Сарапул, ҡала тирәһе 146, 157
Сарапул вол. 145, 156, 157
Саратов, ҡ. 181
Сатаниха, а. 89
Себер (Тобол) губ. 23, 140
Себер юлы 3, 8, 43, 108, 130, 140, 141, 142, 143, 163, 171, 191, 209
Себер 65
Сермәнәй, а. 134
Силәбе, ҡ. 29, 38, 141, 145, 191
Солеников ватагаһы 26
Сосновый, а. 179
Сөннәр вол. 151
Степь кр. 168
Стәрлетамаҡ пристане 133, 196
Субай, а.

Суҡсун з-ды
Сүркәй, а.
Сыбаргүл, а.
Сылва, й.
Сылва сиреге

Табын, ҡала тирәһе 186, 192
Тамъян вол. 135
Танып, й. 45, 185
Татищев кр. 133, 159, 171
Тауыш, а. 59
Тверь, ҡ. 67
Тебекес, а. 109
Тертәк, а.
Тимошкино, а.
Төбәләҫ вол.
Троицк кр.
Тырнаҡлы вол.
Тәкәй (Текоево), а.

Урал 65, 122, 131, 140, 152, 159, 205
Урал аръғы 145
Урал тирәһе 65
Уран вол. 186, 130
Урман-Гәрәй вол. 135
Уса вол. 42, 145
Уса юлы 29, 145
Усть-Багарятск йорто 187
Үсҡанды (Скандия), й. 166
Усть-Ҡатау з-ды 59, 60, 65, 122, 188, 190
Усть-Төнтөр, а. 145

Үҙәк, а. 43
Үрге Яйыҡ кр. 183
Үрҙәбаш, а. 179
Үтәш, а. 57

Царицын, ҡ. 24
Цивильск, ҡ. 181

Һаҡмар, ҡ. 33, 171
Һарт вол. 58, 90
Һатҡы з-ды 142

Чесноковка, а. 30, 143, 145, 149, 156
Чумаҡай, а. 107

Шайтан-Көҙәй вол. 57, 65, 90, 130, 143, 176, 196, 198
Шығанай, а. 167
Шәрип, а. 40

Ыҡ, й. 183
Ырымбур, ҡ. 16, 23, 28, 32, 50, 51, 61, 64, 76, 129, 134, 136, 137, 138, 139, 141, 149, 150, 155, 199, 204, 209
Ырымбур губ. 3, 23, 30, 42, 47, 48, 67, 181, 193

Әйле вол. 38, 108
Әй, й. 3, 4, 125, 163, 168, 169, 173, 191, 209
Әлкәй, а. 58
Әмзә, й. 184
Әңгәсәк з-ды 44, 174
Әстрхан губ. 23
Әүжән-Петров з-ды 122, 160

Эҫем, й. 34
Эҫем з-ды 60, 94, 121, 122, 123, 166, 167, 168, 188, 196, 198, 203

Юбанай, а. 29
Югов з-ды 152
Юлай, а. 143
Юрмаш, й. 57

Яйыҡ, й. 128
Яйыҡ, ҡ. 23, 24, 42, 132
Яуын, а. 175

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш 3

I глава

Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү 18

§ 1. Пугачев восстаниеһы менән көрәштә Екатерина II хөкүмәтенең суд-тикшереү органдары 18

§ 2. Салауат Юлаевты ҡулға алыу һәм уның тотҡонда булыуының тәүге аҙналары 32

§ 3. Сенаттың Йәшерен экспедицияһының Мәскәү бүлексәһендә Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү 40

§ 4. Өфөлә Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү. Хөкөм ҡарары сығарыу 51

II глава

Салауат Юлаев эше буйынса тикшереү һәм суд материалдары, уның тураһында башҡа документаль сығанаҡтар. Документтарҙың ҡайҙан алыныуы һәм уларҙың йөкмәткеһен анализлау проблемалары 71

§ 1. Архив эштәре 71

§ 2. Тикшереү, суд процесын һәм суд ҡарарҙарын үтәү барышын яҡтыртҡан документтар 79

§ 3. Салауат Юлаевтың тикшереү ваҡытындағы күрһәтеүҙәрен төҙәтеүсе сығанаҡтар 104

§ 4. Салауат Юлаевтың күрһәтеүҙәре протоколдарын сығанаҡтарҙы өйрәнеү нигеҙендә анализлау методикаһы 117

III глава

Крәҫтәндәр һуғышы ваҡиғаларын һәм Салауат Юлаев биографияһын уның тикшереү эше материалдары һәм башҡа документаль сығанаҡтар менән яҡтыртыу 128

§ 1. Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе этабы (1773 йылдың сентябре — 1774 йылдың марты) 128

§ 2. Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе этабы (1774 йылдың апреле — июль уртаһы) 159

§ 3. Крәҫтиәндәр һуғышының өсөнсө этабы (1774 йылдың июль уртаһы — ноябре) 180

§ 4. Салауат Юлаев тураһында уның тикшереү эше һәм башҡа документтар буйынса биографик мәғлүмәттәр 194

Һығымта 207

Исемдәр күрһәткесе 229

Географик атамалар күрһәткесе 235

ҠЫҪҠАРТЫУҘАР ИСЕМЛЕГЕ

БСЭ — Большая советская энциклопедия
ВУА — Военный ученый архив
ГАОО — Государственный архив Оренбургской области
ГБЛ ОР — Государственная библиотека СССР им. В. И. Ленина отдел рукописей
ГПБ ОР — Государственная публичная библиотека им. М. Е. Салтыкова-Щедрина отдел рукописей
ЛОИИ — Ленинградское отделение Института истории
ПСЗ I — Полное собрание законов Российской империи I
РИО — Сборник Русского исторического общества
СИЭ — Советская историческая энциклопедия
ЦГА БАССР — Центральный государственный архив Башкирской АССР
ЦГАДА — Центральный государственный архив древних актов
ЦГВИА — Центральный государственный военно-исторический архив
ЦГИА — Центральный государственный исторический архив

Китап тышының беренсе яғында: **Әй йылғаһы янында дошман менән һуғыштар тураһында һәм Е. И. Пугачевтың Төп ғәскәренең Көңгөргә барыуы тураһында Уса һәм Себер юлдары баш күтәреүселәре атамандарына Салауат Юлаевтың хаты. — 1774 йыл, 6 июнь.** *ЦГАДА, ф. 6, д. 416, ч. 2, л. 197.*

Китап тышының дүртенсе яғында: **Красноуфимск крепосы менән идара итеү тураһында Салауат Юлаев тарафынан атаман М. И. Поповҡа (Ивановҡа) һәм есаул М. Д. Чигвинцевҡа бирелгән бойороҡтоң беренсе бите.— 1774 йыл, 14 ғинуар.** *ЦГАДА, ф. 6, д. 439, л. 140. Төп нөсхә.*

Инга Михайловна Гвоздикова

САЛАВАТ ЮЛАЕВ

Исследование документальных источников

(на башкирском языке)

Тәржемәсеһе Ғ. В. Ғөзәиров

Редакторы С. Ғ. Мөхтәруллина
Рәссамы В. И. Макунин
Художество редакторы В. П. Ковалев
Техник редакторы З. Ғ. Чингизова
Корректорҙары С. Ғ. Тулыбаева, Ф. Х. Ихсанова

ИБ № 2480

Наборға бирелде 22. 06. 84. Баçырға ҡул ҡуйылды 21. 11. 84. Ҡағыҙ форматы $60 \times 90^1/_{16}$. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баçылды. Тип. ҡағыҙы № 2. Шартлы баçма таб. 15,0+0,75 карта. Шартлы буяу отт. 16,0. Учет.-изд. таб. 17,89+ +0,59 карта. Тиражы 10 000 экз. Заказ № 581. Хаҡы 75 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18.
Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

[illegible]

[illegible]

Наставление

а.

[illegible]